Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

3

том



# Сочинения

**ТОМ**

**3**

КИТАП

УФА • 2012

Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

## 3
## ТОМ

КИТАП
ӨФӨ • 2012

УДК 821.512.141-2
ББК 84 (2 Рос=Баш)-6
К 97

Мөхәрририәт:
*И. М. Кәримов, М. Х. Нәҙерғолов,
Ф. Ғ. Хисамитдинова, Ғ. Б. Хөсәйенов,
З. Ш. Ҡарабаева*

Төҙөүселәре:
*И. М. Кәримов, Ф. С. Фазылова*

**Мостай Кәрим**
К 97 Әҫәрҙәр. III том: пьесалар, либретто. — Өфө: Китап, 2012. — 608 бит.

ISBN 978-5-295-05627-7 (т. 3)
ISBN 978-5-295-04902-6

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Әҫәрҙәр»енең III томына авторҙың 1947—1975 йылдарҙа ижад ителгән пьесалары һәм «Гөлзифа» либреттоһы индерелде.

**УДК 821.512.141-2**
**ТП — 160/12** **ББК 84 (2 Рос=Баш)-6**

© Кәримов И. М., Кәримова Ә. М., 2012
© Кәримов И. М., Фазылова Ф. С., төҙөү, 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

**ISBN 978-5-295-05627-7 (т. 3)**
**ISBN 978-5-295-04902-6**



# Драмалар
# 1947-1975



## ТУЙ ДАУАМ ИТӘ

*Өс шаршаулы пьеса*

ҠАТНАШАЛАР:

Заһир
Гөлшат
Мәлих
Полковник, һуңынан генерал
Людмила
Горячев
Ямалетдин
Фәйзи
Сәләх
Ярлыҡап
Мәйсәрүәр
Фәрихә
Пуговкин
Николай
Хат ташыусы
Агитатор, адъютант, һалдаттар, ҡыҙҙар, егеттәр, минерҙар.

### ПРОЛОГ

Заһирҙың өйө. Туй һыйы ташып йөрөүсе килендәр һәм ҡыҙҙар инеп-сығып йөрөйҙәр. Бөтә нәмәлә тантана һиҙелә. Ҡыҙҙар йырлайҙар.

Ҡыҙҙар сыға, сәхнә буш тора. Ярлыҡап ҡарт инә.

Ярлыҡап. Себеште күҙ һанайҙар, тиҙәр. Йә, ҡартлас, һана себештәренде. Күҙөң етте. Бына бөгөн кинйәң үҙ ояһын ҡорорға йыйына. Биш ул, алты ҡыҙ. Ояң

үрсемле булды, Ярлыҡап, үрсемле. Әйтәйек, ҡош та бала осора. Осора ла онота. Ә бына Ярлыҡап улай түгел, Ярлыҡап — кеше. Ун бер балаһы хаҡында ун бер төрлө уй йөрөтә ул. Ә балаларҙың балалары, уларҙың балалары. Бына ниндәй ныҡ минең тоҡом! Ярлыҡаптың оя тиҙ генә туҙырлыҡ түгел. Кинйәңдең туйына тиклем йәшәгәс, ғүмер ҙә байтаҡ үткәндер инде. Байтаҡ, байтаҡ. Ә бит һуҡмаҡтың башы ана ғына кеүек... *(Ҡарт күҙҙәрен ҡыҫа, ике бөртөк йәш тәгәрәп төшә.)* Бына ебеп тә киттең, йә, етер, һиңә ошондай көндә лығырлап, мәлйерәп ултырырға оят түгелме?!

Мәйсәрүәр инеп, ҡарттың һуңғы һүҙҙәрен тыңлап тора.

Мәйсәрүәр. Кемгә оят түгелме тиһең, ҡарт?

Ярлыҡап. Һинең менән беҙгә, тим.

Мәйсәрүәр. Ни нәмә өсөн беҙгә оят булһын, ти?

Ярлыҡап. Ун икенсеһен хоҙайҙан һорамаған өсөн. Балаларҙы әйтәм, таҡ көйө ҡалдырҙыҡ.

Мәйсәрүәр *(өҫтәл тирәһен ҡараштырғылап йөрөй)*. Ай йәрәндәр, шау шулай тип теңкәмә тейәһеңсе. Быларының бәхете булһын.

Ярлыҡап. Ысын, ҡарсыҡ. Әгәр ун икенсеһе булһа, Заһирҙан һуң уны башлы-күҙле итәһебеҙ бар, тип көтөп торор инек... Донъяла кеше гел көтөргә, ниндәй ҙә булһа яҡшы нәмәне көтөп йәшәргә тейеш. Беҙҙең һуң тағы ниндәй көтөр нәмәбеҙ ҡала?

Мәйсәрүәр. Беҙгә ни инде әжәл көтә башлаһаҡ та...

Ярлыҡап. Таптың яҡшы нәмә!

Аш-һыу күтәреп, Фәрихә инә.

Мәйсәрүәр. Фәрихә ҡыҙым, бәлештәрҙең йөҙө бик ҡыҙармағанмы?

Фәрихә. Юҡ, өләсәй.

Мәйсәрүәр. Ололар табынын әҙерләй башланығыҙмы әле?

Фәрихә. Эйе, өләсәй.

Фәрихә сығырға ишеккә бара, Фәйзи бик етеҙ килеп инә. Фәрихә етеҙ сыға.

Фәйзи *(ишектән үк ҡысҡырып)*. Ҡотло булһын, тиһәм... Һауығынамы, олатай, һаумы, инәй. *(Күрешә.)* Нимә эшләп һаман ҡайтманылар? Бит бая уҡ урамда малайҙар шаулаша ине. Ҡыҙ алырға киткән егет шул тиклем тормаҫ. Әллә килен бик һүлпән булып сыҡты инде.

Мәйсәрүәр. Төшмәгән киленгә тел тейҙермәһәңсе, Фәйзерәхман. Әле бер көн, «балнистә унан уңған филшер юҡ», тип һөйләгәндәрен үҙем ишеттем.

Фәйзи. Юҡ, инәй, мин былай шаярып ҡына бит.

Мәйсәрүәр. Фәйзерәхман, һиңә лә инде гел шаярып ҡына йөрөргә тимәгән. Бына шунда бер осорҙа башлы-күҙле булып ҡуйыуға ни етер ине.

Ярлыҡап. Заһир менән йәштәштәр ҙә түгелме һуң әле?

Мәйсәрүәр. Шулай булмай ни, шулай шул. Анау слабуда сығып, беҙҙең ҡыҙҙарға ер биргән йылды тыуҙылар бит... Арыу ғына кәләш тура килһә...

Фәйзи. Йөрәк етмәй, инәй, кәләш алырға йөрәк етмәй.

Ошо мәлдә Фәриха әйберҙәр күтәреп тағы инә, Фәйзиҙең һүҙҙәрен ишетеп, кире сығып китә.

Ярлыҡап. Улай икән... Үҙең былай смил генә күренәһең дә баһа...

Фәйзи. Эш унда түгел, олатай. Бына һеҙҙең Заһир агроном булып сыҡты ла, инде кәләш алып, ошо үҙебеҙҙең кескәй генә ҡалала донъя көтөргә уйлай. Минең әле тағы уҡығым килә... Кәләшләнденме, ояңды һаҡла ла ултыр инде.

Ярлыҡап. Дөрөҫ, ояң булғас, һаҡлай ҙа бел. Яңғыҙ кешенең яҙмышы ярты.

Мәйсәрүәр. Ниңә, атаһы, теләһә, беҙҙең Заһир ҙа уҡыр, кәләше салғыйына тотоноп тормаҫ та инде.

Ярлыҡап. Йә, уныһы йәштәрҙең үҙ эше. Фәйзерәхман, һин был табынды ҡарарһың инде. Әйҙә, ҡарсыҡ, беҙ үҙебеҙҙең табын тирәһендә булайыҡ.

Фәйзи. Ярай, олатай.

Ҡарттар китәләр. Ишеккә етәрәк, Ярлыҡап ҡарсығын ҡултыҡлап ала һәм артҡа әйләнеп Фәйзигә өндәшә.

Ярлыҡап. Бына ҡалайыраҡ бит ул донъя... *(Сығалар.)*

Фәйзи *(һый ҡуйылған өҫтәл эргәһенә килә)*. Яңғыҙ кешенең яҙмышыярты... Олатай, бәлки, дөрөҫ тә әйтә торғандыр. Тик өйләнеү кеүек нәмә тураһында ҡырт ҡына уйлап та булмай бит әле. Ул әбәк уйыныы түгел дә баһа... Уның өҫтәүенә, Фәрихәнең дә ҡылыҡтарын аңлап етмәйем. Бер ҡараһаң, өҙөлөп һөйә кеүек, икенсе ҡараһаң, тырыҫ-мырыҫ ҡылана. Ҡыҙҙар күңеле шул ул... Ярай, ҡана, үҙемдең хужалыҡҡа күҙ ташлайым әле. Яҡшы хужа үҙ хужалығындағы нәмәләрҙең һанын ғына түгел, сифатын да белергә тейеш. Ҡана, татып ҡарайыҡ. *(Бер шешәнән рюмкаға араҡы һалып эсеп ебәрә.)* Быныһы бик уҫал. Ирҙәр өсөндөр инде. Анауһы нисегерәк икән? *(Икенсе шешәнән һалып эсә башлай.)*

Фәрихә һыйҙар күтәреп инә.

Фәрихә. Әллә ҡыйыулыҡты бер аҙ арттырып алмаҡсы булаһыңмы? *(Көлә.)* Ҡайһы саҡта йөрәк етмәй тороу бар бит.

Фәйзи *(һиҫкәнеп китә)*. Нимәгә йөрәк етмәһен, ти, Фәрихә?

Фәрихә. Теләһә нимәгә... Әйтәйек, кәләш алырға. Ха-ха-ха...

Фәйзи. Кеше һүҙен аҫтыртын тыңлап йөрөү шулай ҙа килешмәй инде.

Фәрихә. Бер ҙә тыңлап йөрөмәгән, үҙе ишетелде. Һинең ҡурҡаҡлығыңды элек тә белә инем, әле үҙең әйткәс, бигерәк... Ха-ха-ха...

Фәйзи *(Фәрихәнең эргәһенә үк килә)*. Бәй, Фәрихә, һин нимә эшләп бында әле?

Фәрихә. Бәй, терәлеп торған күршенең бында булыуы ғәжәпме ни? Ә бына һин нимә эшләп бында?

Фәйзи. Минме? Мин бөгөн бында иң баш аяҡсы.

Фәрихә. Һине аяҡсы итеү кәзәне кәбеҫтә һаҡларға ҡуйыу кеүегерәк булмаһа ярай ҙа.

Фәйзи. Йә, Фәрихә, кеше туйында ла әрләшеп тормайыҡ инде.

Фәрихә. Тапты һүҙ. Кеше туйында әрләшмәй, әллә уны үҙ туйыңа һаҡлап торор инеңме?

Фәйзи *(Фәриханең беләгенән етәкләп диван эргәһенә алып китә)*. Әйҙә әле, икәүләшеп ултырып алайыҡ. Һүҙ ҙә әйткем килә үҙеңә. Юҡһа, тиҙҙән шау-шыу башланыр. *(Ултыралар.)*

Шунда уҡ ишек артында шау-шыу, көлөү тауыштары ишетелә. Мәлих йүгереп инә.

Мәлих. Ҡайттыҡ!

Ҡунаҡтар инә. Фәйзи менән Фәрихә һикереп тора. Ишек эргәһенә йүгереп киләләр.

Фәйзи. Туп-тура өҫтәл эргәһенә юл тотоғоҙ, ҡунаҡтар! Иң дөрөҫ юл шул булыр. Парад менән командовать итеү миңә тапшырылды, йәгеҙ, тиҙерәк.

Ҡунаҡтарҙы үҙе ултырта. Заһир менән Гөлшат — уртала. Уларҙың икеһенең күкрәгендә сәскәләр.

Мәлих *(Заһир менән Гөлшат эргәһенә килә)*. Дуҫтарым Заһир һәм Гөлшат, һеҙҙең күкрәктәрегеҙгә был сәскәләрҙе мин ҡаҙағайным. Хәҙер мин уларҙы алам да бына һыуға ҡуям. *(Стакандағы һыуға ҡуя.)* Туй мәлендә был сәскәләр өҫтәл өҫтөндә торорҙар. Ә һуңынан Гөлшат уларҙы алыр ҙа берәй шиғыр китабы эсенә һалыр. Бик оҙаҡ йылдар үтер, бәлки. Бер саҡ ҡапыл китап эсенән ике сәскә килеп сығыр. Пушкин шиғырындағы кеүегерәк. Был сәскәләрҙең яҙы, уларҙы өҙөүселәрҙең һәм күкрәктәренә ҡаҙап йөрөүселәрҙең яҙы шунда уҡ күҙ алдына килер. Ошо табын, ошо көн, ошолай тип һөйләп тороусы, сәскәләр һәм шиғырҙар яратыусы кеше хәтергә алыныр. Ниндәй генә бәхетле көндәр килһә лә, был мәл икәү ғүмеренең иң яҡты минуттары булыр. Шулаймы, дуҫтар?!

Мәлих һөйләгәндә, Фәйзи бокалдарҙы тултыра.

Сәләх. Мәлих сәскәләрҙең үҙҙәренең телендә һөйләп бирҙе. Тик Гөлшаттан шуны үтенер инем мин. Ул хәҙергә сәскәләрҙе Пушкин китабы эсенә ҡуйып тор-

һон да, һуңынан, Мәлихтең шиғырҙар китабы баҫылып сыҡҡас, уларҙы шунда күсерһен. Дөрөҫмө, дуҫтар?

Йәштәр гөжләшеп яуап бирәләр.

Фәйзи. Төп мәсьәләнән ситкә сығыуға бынан һуң юл ҡуйылмаясаҡ. Алдығыҙҙа тулы бокалдар. Күтәрә башлағыҙ.

Бокалдар ҡулға алына.

Сәләх. Бокалдар сыңлауына тиклем, Мәлихтең тағы ла әйтер һүҙе бар, буғай. Әйтһен әйҙә барыбыҙ өсөн дә.

Мәлих *(урынынан тора, бокалды тота)*. Сәләх әйткән шиғырҙар китабының беренсе шиғырын уҡымаҡсымын. Тыңлап ҡарағыҙ.

Мәлих уҡый, бокалдар күтәрелә бара.

Мин килтерер инем бүләк итеп
Был табынға гөлдәр туғайын,
Тоноҡ шишмәләрҙең шылтырауын,
Һауалағы һабан турғайын...
Мин килтерер инем ҡояштың да
Эҫе нурҙар сәскән бер мәлен,
Һәм килтерер инем еләҫлеген
Аҡ болоттан төшкән шәүләнең...
Мин килтерер инем...
Дуҫ-иштәрем!
Һеҙҙең өсөн бит был киң йыһан!
Әйтерһең, ер оҙаҡ йылдар буйы
Туйҙы ҡотлар өсөн йыйынған,
Ошо ерҙә икәү ғүмеренең
Бергә атлап киткән юл башы...

Телефон шылтырай. Мәлих туҡтала, бокалдар түбән төшәләр.

Фәйзи. Тышҡы донъя менән бәйләнеш мәсьәләләре лә аяҡсы өҫтөнә төшәлер инде. *(Телефон трубкаһын ала.)* Кем? Насар ишетелә! Өфөнәнме? Башлана яҙып

ҡына тора. Ярай, эйе, эйе... Рәхмәт! *(Трубканы ҡуя.)* Заһир, һин булып һөйләштем. Өфөнән һинең бер таныш. Һеҙҙе ҡотлай. Аңламайым, нимәгә инде шылтыратып эште бүлдерергә? Туйҙы килеп ҡотлауға ни етә. Йә, Мәлих, ослап ҡуй ҙа инде. Юҡһа тағы берәй нәмә килеп сығыуы бар.

Мәлих дауам иттерә. Бокалдар яңынан күтәрелә.

Мәлих. Ошо ерҙә икәү ғүмеренең
Бергә атлап киткән юл башы,
Мин теләйем, йөрәк дуҫтарымдың
Бәхет, шатлыҡ булһын юлдашы.
Хәтәр елдәр иҫә ҡалғанда ла,
Күңелдәрҙе һөрөм япмаһын...

Икенсе тапҡыр телефон шылтырай. Фәйзи асыуланып телефон трубкаһын ала.

Фәйзи *(трубкаға ҡысҡыра)*. Алдан уҡ әйтеп ҡуям, ҡыҫҡараҡ тот! Бында былай ҙа... Ә??? Таптың уйнар ваҡыт! Шулаймы? Их, мәлғүн!!! *(Фәйзи ағарып, ҡаушап телефон эргәһендә һүҙһеҙ тора.)*

Бер нисә кеше бергә. Нимә булды, Фәйзи, ниңә ағарҙың?

Фәрихә *(Фәйзи эргәһенә килә)*. Нимә тинеләр телефондан?

Борсолоу башлана.

Фәйзи. Почтанан, Сабир. Һуғыш! Германия беҙгә ҡаршы һуғыш асҡан!

Бокалдар өҫтәлгә ҡуйыла. Кешеләр урындарынан тороп, таралыша башлайҙар. Ҡаушау.

Сәләх. Иптәштәр! Дошман үҙ башына...

Заһир. Һөйләмә, Сәләх, һүҙ һөйләй торған ваҡыт түгел.

Йәштәр аҡрын ғына сығып китәләр. Заһир менән Гөлшат икеһе ике тәҙрә эргәһендә ҡала. Заһир өҫтәл эргәһенә килеп стакандағы бер сәскәне ала. Тотоп тора. Икенсе сәскәне Гөлшат ала.

Тимәк, шулай, фашист. Ғүмеремдәге иң бәхетле минуттарымды ҡара һөрөмгә батырҙың. Ҡарап ҡарайыҡ, һинең туйың булырмы икән?! *(Сәскәне кире һыуға ҡуя.)* Ә беҙҙең туй дауам итәсәк!

*Шаршау*

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе картина

Разведрота урынлашҡан урман алды. Ҡалҡыулыҡта һалдаттар ултырған. Тәмәке тарталар. Агитатор ҡысҡырып газета уҡый.

Агитатор. ...Танк, дошмандың оборонаһын емереп, уның тылына үткән саҡта ғына ҡапыл туҡтап ҡалды. Шунда уҡ ул тағы бер ҡат һелкенеп ҡуйҙы, һәм водитель Вадим Ярошенко һушын юғалтты. Бер нисә секундтан инде танк торған урында, төн ҡараңғылығын ялмап, ҙур ялҡын кәбәне ҡалҡты. Кәбән эсенән сығыусы күренмәне.

Арҡаһы бешеп әрнеүҙән Ярошенко иҫенә килде. Танк эсе тын ала алмаҫлыҡ төтөн һәм эҫе ине... Ялҡын водителдең комбинезоны буйлап шлемына үрләй башланы. Ярошенко, бөтә көсөн йыйып, люкты асты ла ут солғап алған кәүҙәһен йән асыуы менән тышҡа ырғытты... Һәм ул яна-яна төнгө ялан буйлап йүгерҙе. Уның күҙенә ниндәйҙер оҙон шәүлә салынып ҡалды. Ярошенко шәүләне ҡыуып етте лә, ярһыған арыҫландай, уның өҫтөнә ташланды. Ул тимер башлы немец һалдатының боғаҙына тырнаҡтарын батырҙы...

Иртә менән инде беҙҙең һуғышсылар янған танкынан йөҙ метрҙар ерҙә күмергә әйләнгән ике кәүҙә күрҙеләр. Уның береһе үҙенең ҡара көйгән бармаҡтарын тимер табанлы итектәре генә ҡалған икенсеһенең боғаҙына батырғайны.

Ямалетдин. Үлһәң дә, үлтереп үл!

Агитатор *(газеталарҙы йыйыштыра. Оҙаҡ пауза)*. Бөгөнгә етеп торор. Мин ротала яңы кеше инде. Быны белге килә. Беҙҙең роталағы бер кешелә Берлин аҫҡыс-

тары бар тигән имеш-мимештәр йөрөй. Ниндәйерәк икән шул Берлин аҫҡыстары... Ә?

*Һалдаттар бер-береһенә ҡарашалар, унан һуң барыһы ла Николайға ҡарайҙар.*

1-се һалдат. Аҫҡыстар тип әйтерлек күп түгел түгелен, шулай ҙа берәүҙә бер аҫҡыс йөрөй. Быныһын үҙем күрә биреп ҡалғаным бар.

Николай. Ә мин белмәйем ундай аҫҡыс барлығын, күргәнем дә юҡ. Бушты һөйләй ҙә ул.

1-се һалдат. «Ҡараҡтың бүрке яна» тигән һүҙ ошо булалыр инде. Ниңә һин, Николай ҡустым, бик сәбәләнәһең? Әле бит аҫҡыстың һиндәлеген әйткән кеше юҡ.

Николай. Сәбәләнгән кеше бармы, тик кенә ултырам да баһа.

2-се һалдат. Байтаҡтан бирле һөйләп йөрөйҙәр ул аҫҡыс тураһында. Әле уҙған йылда Дон буйында саҡта уҡ шундайыраҡ һүҙ сығып ҡалғайны. Гонаһлы булыр хәлем юҡ, кемдә икәнен атап ҡына әйтә алмайым.

Пуговкин. Ошонда нисә итек бар, шуларҙы һалдырып ҡараһаҡ, моғайын, береһенән лап итеп аҫҡыс килеп төшөр.

Николай *(бер аяғын бөкләп ҡуя)*. Кем һиңә итеген һалып ҡағып торор икән? Шуны әйт әле миңә!

Пуговкин. Минеңсә, Николайҙан башҡа бөтәбеҙ ҙә итекте һалып ҡағырға ҡаршы түгел. Әйҙә, һалмаһа, Николай һалмаһын. Әгәр беҙҙә булмаһа, аҫҡыс Николайҙа булып сыға. Ризамы шулай?

Бөтәһе. Риза, риза!

Николай *(йылмая)*. Ҡуй, ошо тиклем кешене сисендереп этләмә. Аҫҡыс миндә, егеттәр. Сер ине, астырҙығыҙ.

Ямалетдин. Ҡылансыҡ ҡыҙҙар кеүек, борғоланып тороу килешмәй ҙә инде һалдат кешегә, етмәһә, разведчик.

Николай. Бер ҙә борғоланыу түгел. Әле бит Берлинға етмәгәнбеҙ. Яратмайым мин алдан уҡ нитеп, ҡысҡырып йөрөүҙе. Ваҡыты еткәс, кәрәге тарыҡас, аҫҡыс үҙе үк ходҡа китер. Их, егеттәр *(көрһөнөп)*, миңә обязательно Берлинға беренсе булып инергә кәрәк.

Немецтар бит иң башта беҙҙең ауылға баҫып инделәр... Бына ул! *(Итек ҡуңысынан ҙур асҡыс һөйрәп сығара.)*

Һалдаттар ҡулдан ҡулға күсереп, ус төптәренә һалып ауырлығын ҡарайҙар.

1-се һалдат. Арыу һәлмәк был нәмә. Ә һинең ҡулға ҡайҙан килеп эләкте һуң ошо асҡыс?

Николай. Уның тарихы оҙон инде. Асҡысты яңы хужаға тапшырған һәр бер кеше һөйләп килгән был тарихты.

Һалдаттар һөйләүсегә яҡынаялар.

Агитатор. Ана шул тарихты һөйләгәнеңде көтөп ултырабыҙ ҙа инде...

Николай *(агитаторға)*. Кешегә һөйләмәҫһеңме һуң?

Агитатор. Агитатор ни эшләп кешегә һөйләһен, ти.

Һалдаттар пырхылдап көлөп ебәрәләр.

Николай. Улайһа, һөйләйем. Бынан бер-ике айҙар самаһы элек Богдановка ауылы эргәһендә разведчик Дубовтың үлгәне хәтерегеҙҙәлер. Минең ҡулдарымда үлде ул. Шәп кеше ине. Хәле ауырайғас, итек ҡуңысынан ошо асҡысты һәрмәп алды ла миңә һуҙҙы. Был асҡысты уға Донда яраланып госпиталгә киткән ҡаҙаҡ егете Сәрсәнбаев ҡалдырған. Сәрсәнбаевҡа уны командирҙар мәктәбенә уҡырға киткән украинец Зозуля биргән; Зозуляға һуғыш ҡырында һулаҡай ҡулын осколок өҙөп киткән башҡорт егете, күрше дивизияның бер кавалерисы, тапшырған. «Мә, ал, тигән шул теге башҡорт егете, ҡулһыҙ көйө Берлинға барып булмаҫ инде. Быны миңә һуғыштың тәүге йылында танк эсендә янған бер танкист бирҙе» тигән. Теге танкисҡа был асҡысты границаға яҡын ғына бер ауылдың ҡарты биргән. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, бик сал һәм серле булған ул ҡарт... Ә ҡарттың асҡысты ҡайҙан алғанын берәү ҙә белмәй... Бына шул.

Агитатор. Ысындан да серле асҡыс икән был.

Пуговкин. Ҡарап-ҡарап торам да, нисколько Берлин асҡысы түгел был. Буш әкиәт.

Ҡарт һалдат *(һүҙгә тәү ҡушыла)*. Алйот, әкиәт бер ваҡытта ла буш булмай. *(Тегенең ҡулынан асҡысты тартып ала.)* Был — Берлин асҡысы! Берлин ҡапҡаһын беҙ асҡыс менән асып тормабыҙ. Туп менән асырбыҙ уны! Шулай ҙа был асҡыс кәрәк, бик кәрәк... Беҙ уны Берлинға тиклем алып барып еткерергә тейешбеҙ!.

2-се һалдат. Тәҡдим бар, егеттәр, ошо көндән башлап Николайҙағы асҡысты ротаның вооружениеһына алырға. Фәлән атлы разведка ротаһының ҡоралдарына Берлин асҡысы өҫтәлде, тип писарь яҙып ҡуйһа ла ярай.

Ҡарт һалдат. Бындай нәмә тураһында яҙып, начальствоға доложить итеп тороуҙың кәрәге юҡ. Былай ҙа онотолмаҫ. Мә, Николай, башың менән яуап бирәһең. *(Бирә.)*

Пуговкин. Ҡылыс ҡайрар саҡта, тел сарлап ултырабыҙ. Тиҙерәк һөжүмгә күсәһе ине. Эшме ни ул икенсе эшелонда ятыу?

Ҡарт һалдат. Ҡылысың үткер булып, телең тупаҫ булһа ла шәп түгел. Һөжүм тигәндә инде уны Пуговкиндан һорап тормаҫтар.

Пуговкин. Ҡайһы саҡта Пуговкиндың дә йәтеш кәңәш биреп ҡуйыуы мөмкин, һорай ҡалһалар. Ниндәйҙер бер атаҡлы генералдың да әле һалдаттары менән бик кәңәшләшкәнен һөйләйҙәр.

1-се һалдат. Пуговкин, һин генерал булғас, һалдаттарың эргәһенә килерһең дә: «Һөйөклө һалдатҡайҙар, анау дзотты алһаҡ, нисек булыр икән?» — тип кәңәшләшеп торорһоң. Ул саҡта нимә әйтерҙәр икән һиңә һалдаттарың?

Ямалетдин. Ниңә, Пуговкинға генерал булырға ла күп ҡалмаған инде. Генералдарҙың да ҡайһы берҙәре бит шулай уҡ ефрейторҙан башлап киткән.

Көлөү.

Николай. Генерал өсөн уйлап мәшәҡәтләнмәй, үҙебеҙҙең эш тураһында күберәк борсолһаҡ, арыуыраҡ булыр ине. Өс төн барып, буш ҡул менән ҡайттыҡ.

Бер «тел» ала алманыҡ. Ә ул Пуговкин кәңәшенә ҡарағанда кәрәгерәктер әле. Бәлки, бөтә һөжүм шуға туҡталып торалыр...

2-се һалдат. Шулай булыуы ла может. Һеҙ кисә иртән ҡайттығыҙ ҙа йығылдығыҙ. Ә рота командиры күҙ ҙә йомманы. Уйланы. Минут һайын картаны алып ҡарай. Үҙ алдына һөйләнә.

Ҡарт һалдат. Үҙ алдына һөйләнә, тиһеңме? Һөйләнһен, ҡустылар. Күрәһең, намыҫы таҙа кешелер. Үҙ-үҙенән ҡурҡмай. Үҙе менән асыҡтан-асыҡ һөйләшә. Намыҫы бысраҡ кеше үҙенә һүҙ ҡушырға ла ҡурҡа ул, үҙенән-үҙе ҡасырға, йәшеренергә тырыша.

Николай. Сәйер яҡтары бар шул беҙҙең старший лейтенанттың. Былай бит ҡыҙыу ғына кешегә оҡшай. Разведкаға барғанда, шул тиклем баҫынҡы, һалҡын ҡанлы була ла китә... Мин уның эргәһендә связной булып йөрөгәнем бар. Ул һинән эш талап иткәндә, сәс төптәрең семерләй башлай. Ә анау саҡта, Дубовты күмгәндә, битенән тәгәрәп төшкән йәш бөртөктәрен дә һөртмәне. Ғәжәп кеше...

Ямалетдин. Теге дезертирҙы атҡанда, наоборот, киреһенсә...

Пуговкин. Командир тураһында ләстит һатыу, минеңсә, һалдат кешегә не положено. Әйтергә кәрәк, әҙәпһеҙлек.

Ямалетдин. Һин фәлсәфәне ләститтән айыра алмайһың икән әле, иптәш.

Ҡарт һалдат. Фәлсәфә лә, ләстит тә түгел. Һүҙ һөйләү. Яҡшы һүҙҙе бөтә яҡшы кешеләр тураһында ла һөйләргә ярай: генералмы ул, әллә һалдатмы — барыбер.

Алыҫтан таҡмаҡ әйтеп Хат ташыусы инә.

Хат ташыусы. Аҡтыр бәке һаптары,  
Күктер бәке һаптары,  
Алыҫ ерҙе яҡын итеп  
Килә һалдат хаттары.  
Бик тә күркәм шул һалдаттың  
Хат уҡыған саҡтары...

Һаумыһығыҙ, егеттәр! Ҡыҙыл Армияның күҙ-ҡолағына сәләм. Лично үҙемдән. Ҡалған сәләмдәрҙе хатлата килтерҙем. *(Противогаз сумкаһына ҡулын тыға).* Ябырылығыҙ тиҙерәк. Бөгөн бейетеп тормай ғына бирәм. Йөрөйһө ерҙәр, тапшыраһы хәбәрҙәр күп.

Һалдаттар һырып ала: «Миңә бармы?», «Миңә лә ҡара әле!»

*(Берәмләп ҡысҡыра.)* Ксенофонт Зубовҡа. Шатуранан, өсмөйөш — кәләштән булырға тейеш. *(Бирә.)* Грибков Антонға, Саратовтан — хаты ялҡын бәреп тора тыштан. *(Бирә.)* Был ҡалыны Рязандән, Иван Пуговкинға — бының эштәр киткән йүнгә. *(Бирә.)* Ямалетдин Мофтаховҡа, Йоматтан — һағынып-һарғайып көтәм, тип йыуатҡан. *(Бирә.)* Илья Думбадзеға, Тифлистан — сығармайҙар үҙен иҫтән. *(Бирә.)* Ҡалғандарығыҙға почтала яталар, ҡайһыларығыҙға әле яңы яҙалар. Килеп етер берәй айҙан, ләкин әйтә алмайым ҡайҙан...

Хат алғандар ултырып хаттарын уҡый башлайҙар, башҡалар күңелһеҙ генә торалар.

Хат алмағандарҙан берәү *(хат ташыусыға)*. Күңелле кеше һин, әй. Гел шаяраһың. Ахыры, хаттарҙы йыш алаһыңдыр.

Хат ташыусы. Мин бит кешеләргә ҡыуаныс ташыйым. Хат күп килгән һайын, минең күңелем күтәрелә. Ә үҙемме... үҙем хат алмайым шул мин. Атайҙар теге яҡта. Кәләш юҡ. Ағайым бар ине, ул Ленинград яғында үлеп ҡалды... Хат яҙыр кешем юҡ минең... Башҡаларға хат килтерһәм дә, рәхәт булып ҡала. Ә һин иренеңде һәлендермә. Бөгөн килмәһә, иртәгә килер.

2-се һалдат *(хат уҡыған еренән һикереп тора)*. Егеттәр, ә, егеттәр! *(Үҙ алдына.)* Туҡта, туҡта. *(Бармаҡтарын бөкләп һанай башлай.)* Июнь, май, апрель, март, февраль, ғинуар, декабрь, ноябрь, октябрь. Минеке, егеттәр, эйе... минеке...

Ямалетдин. Нимә һинеке?

2-се һалдат. Минең малай тыуған. Эйе, минең улан. Һуғыш йылында малай тыуа, тиҙәр, шул дөрөҫ икән,

әй! Элек минең Майтап ҡыҙ ғына таба торғайны, мирный ваҡытта. Хәҙер, күрәһең, малай!

Һалдаттар һырып ала.

1-се һалдат. Уңған ҡатын ул таба, изге ҡатын ҡыҙ таба, тигән һүҙ ҙә бар. Хәйер, кеше гел генә изге булып та тормаҫ инде.

Ҡарт һалдат. Йә, йә, кеше күңеленә вәсүәсә һалма. Ҡотло булһын бәпесең, Яхъя. *(Килеп ҡулын ҡыҫа, башҡалар ҙа, «ҡотло булһын», тип ҡулын ҡыҫалар.)*

Пуговкин. Давай инде, Яхъя ағай, бәпестең туйын үткәреү хәстәрен күрә башла...

2-се һалдат. Быныһы малайҙың үҙенең хәстәрен күреүгә ҡарағанда ла, ниерәк, ҡыйыныраҡ булып ҡуймағайы бит әле.

Хат ташыусы. Йәнен биргән икән, йүнен дә бирер әле.

2-се һалдат. Бик биреп бармаҫ шул. Самогонды буш алып булмай уны.

Хат ташыусы. Яхъя ағай, бәпесеңдең ризығы киң булыр әле.

2-се һалдат. Ҡайҙан beләһең уны?

Пуговкин. Һинең күрәҙәлек тә бар, ахыры... Ә?

Хат ташыусы. Күрәҙәһен күрәҙә түгел. Ләкин күргәнде әйтә алам. Бөгөн тылдан күстәнәс алып килгәндәр икән, мин ул хәбәрҙе бөтә һалдатҡа еткерергә тейешмен. Араҡылары ла бар, ти. Уныһы обозға теймәһә лә, разведкаға эләгер, тип өмөт итәм.

Пуговкин. Пушкаға алма әле. Былай ҙа тамаҡ ҡытыҡланып тора.

Хат ташыусы. Миңә должность буйынса алдашырға ла не положено.

Пуговкин. Ишетәһегеҙме, егеттәр, ә? Тылдан күстәнәс килгән, ти бит. *(Уйлана.)* Комдив беҙгә асыуланғандыр шул, «тел» алып ҡайта алмағанға. Араҡынан мәхрүм итеп ҡуйыуы бар.

2-се һалдат. Ҡайҙан килгәндәр ҡунаҡтар? Шул турала ҡолағыңа салынманымы?

Хат ташыусы. Бөтә яңы хәбәр минең ҡолаҡҡа салынмай ҡалмай. Һинең яҡташтар килтергәндәр, Башҡортостандан.

Пуговкин. Кешеләрен дә күрҙеңме? Нindәйерәктәр?

Хат ташыусы. Күрҙем, әлбиттә, йәш кенә бер ҡыҙ ҙа бар. Ике ҡашы ике йәйғор төҫлө, шундай һылыу.

2-се һалдат. Беҙҙең яҡта ҡыҙҙар барыһы ла һылыуҙар. Һуғышта арыу ғына егетлек күрһәтә алһағыҙ, һуғыш бөткәс, ҡыҙ йәрәшергә килеп сығырға мөмкин беҙҙең яҡҡа.

Хат ташыусы. Бәй, мин һеҙҙең менән лығырлап донъямды онота яҙғанмын да баһа. *(Таҡмаҡлап сыға.)*

Аҡтыр бәке һаптары,
Күктер бәке һаптары,
Алыҫ ерҙе яҡын итеп
Килә сәләм хаттары.
Бик тә күркәм шул һалдаттың
Хат уҡыған саҡтары...

Һалдаттар яңынан ултырышалар.

Пуговкин. Хат тигән һәйбәт нәмә уйлап сығарғандар кешеләр.

Николай. Ә кешеләр яҙа белмәгән саҡта уҡ бер-береһенә хат ебәрешкәндәр, беҙҙең уҡытыусы шулай тип һөйләгәйне.

Пуговкин. Быныһын уҡытыусығыҙ арттырып ебәргәнгә оҡшай. Яҙа белмәгәс, нисек хат ебәргән булһын инде?

Ямалетдин. Уныһы булған эш. Хат итеп әйбер ебәргәндәр кешеләр. Әйтәйек, Пуговкин ҡатын алды, ти. Пуговкиндың ҡатыны, сепрәккә төрөп, әсәһенә эсе буш тауыҡ йомортҡаһы менән күмер ебәрҙе, ти. Был инде: «Минең ирем, ошо йомортҡа кеүек, буш кеше булып сыҡты, көндәрем, ошо күмер кеүек, ҡара», — тигән һүҙ була.

Һалдаттар көлөшәләр.

2-се һалдат. Ҡалайыраҡ хатлашҡандар әҙәмдәр...

Заһир инә. Ул — өлкән лейтенант. Һалдаттар тороп уны сәләмләйҙәр.

Заһир. Һаумыһығыҙ, разведчик аҡтыҡтары. Һунар ете көнгә бер уңыр, тип беҙҙең турала әйткәндәрҙер инде.

Ҡарт һалдат. Иртә уңмаған кис тә уңмаҫҡа тимәгән бит, иптәш старший лейтенант. Гел генә буш ҡул менән ҡайтмабыҙ инде.

Заһир. Хәҙер үк ял итергә таралышығыҙ. Эңер төшөүгә юлға сығырға кәрәк буласаҡ. Пуговкин!

Пуговкин. Тыңлайым, иптәш старший лейтенант.

Заһир. Һин хәҙер үк беренсе взвод командиры лейтенант Горячевты миңә саҡырып кил.

Пуговкин. Китергә рөхсәт итегеҙ.

Заһир. Эйе.

Һалдаттар сығып китә.

Мофтахов, ҡал әле бында.

Ямалетдин. Ниңә, ағай?

Заһир. Нисә әйттем инде. Һин башыңды этлеккә һалма, Ямалетдин, командир һорағанда, «ниңә, ағай?» тип торма бынан һуң.

Ямалетдин *(«смирно»ға баҫа)*. Мин былай, яҡын итеп кенә...

Заһир. Яҡын итмәйһең һин мине. Яҡташ тип арҡаланаһың миңә. Тәртибең юҡ. Бөгөн аттарҙы ҡарап сыҡтым. Һинең аттан башҡалары бөтәһе лә ялтырап тора. Ҡарарға рәхәт. Ә һинең атыңдың өҫтөнән көл осоп тора. Етмәһә, ялы, ялҡау бисәләрҙең сәсе кеүек, кейеҙләнеп бөткән.

Ямалетдин. Виноват, иптә...

Заһир. Башҡортҡа оҡшамағанһың һин, ат яратмайһың, ҡарамайһың. Нимә тиерҙәр икән һинең ауылдаштар, атыңды шулай йөрөткәнеңде ишетһәләр?

Ямалетдин. Виноват инде, виноват булғас.

Заһир. Бөгөн шуның өсөн һине заданиеға алып бармайым. Ышаныслы түгелһең. Дневальный итеп ҡалдырырға ҡушам.

Ямалетдин. Бынан һуң һис ваҡытта ла, иптәш старший лейтенант...

Заһир. Китергә мөмкин.

Ямалетдин китә. Заһир килеп, төп өҫтөнә ултыра.

Заһир. Яҡташ. Ниндәй яҡын кеше ул — яҡташ. Рустарҙа тағы ла яҡшыраҡ һүҙ бар. Улар «земляк» тиҙәр. Йәғни бер тупраҡ кешеләре. Ямалетдин менән беҙ ҙә тупраҡташтар. Төшөнмәй әле ул: командир үҙенең бөтә һуғышсыларының да яҡшы булыуын теләй, ә яҡташтарын тағы ла яҡшыраҡ иткеһе килә. Тел тейҙермәҫлек булырға тейеш минең яҡташтар. Салауат йәки Хоҙайбирҙин даны менән генә кәпрәйеп йөрөүселәр кәрәкмәй. Беҙҙең быуындың үҙ даны тағы ла яҡтыраҡ булырға тейеш. Эш шулай тора, яҡташтар... *(Пауза.)*

Лейтенант Горячев инә.

Горячев. Безумству храбрых поем мы песню, — шулай тип кем әйткән?

Заһир *(күтәрелеп ҡарай)*. Хәтерләмәйем. Ултыр әле.

Горячев. Горький әйткән. Әле генә уҡыным. Ҡанатлы һүҙҙәр... Безумству храбрых поем мы песню. *(Ергә ултыра.)*

Заһир. Шулай ҙа Горький ул һүҙҙәрҙе һинең турала әйтмәгән.

Горячев. Минең хаҡта шундай һүҙ әйтһәләр ҙә, ҡаршы килмәҫ инем.

Заһир. Был юлы минең башҡа нәмә тураһында һөйләшкем килә...

Горячев. Тыңлайым. Тик өгөтләштән булмаһын...

Заһир. Һинең менән беҙ икебеҙ ҙә командирҙар. Аҙ ваҡыт эсендә яҡын иптәштәр булдыҡ. Шуны әйт әле миңә һин: ни өсөн беҙ өс тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осраныҡ?

Горячев. Разведка ул отош уйыны кеүек, күберәк тәүәккәллек, риск кәрәк. Кем тәүәккәл, шул ота. Аҙым хәтәрерәк булған һайын, уңыш ихтималыраҡ.

Заһир. Һәр ваҡыт улай түгел икән шул. Һуңғы өс операцияла лейтенант Горячевты ҡыйыуһыҙлыҡта ғәйепләп булмай.

Горячев. Дөрөҫ түгел! Ошо өс көн эсендә мин үҙемә үҙем шундай меҫкен булып күренә башланым. Намыҫ түгел, баш һаҡлап йөрөүгә оҡшай был.

Заһир. Башһыҙ намыҫты күҙ алдына килтереүе шулай уҡ ҡыйын.

Горячев. Етте! Бөгөн хәл иткес ынтылыш. «Или грудь в крестах, или голова в кустах», — тигән һүҙ бар һалдатта. Башым ҡыуаҡ араһында тәгәрәп ҡалһа ла, «тел» алыныр.

Заһир. Горький бындай батырлыҡ тураһында әйтмәгәндер.

Горячев. Минеңсә, батырлыҡтың категориялары булмай.

Заһир. Тураһын әйтәм, һуғышта һин дыуамал кешеһең, әйтәйек, батырһың. Нимә һуң шул батырлыҡ үҙе?

Горячев. Батырлыҡ, музыка кеүек, тиҙ генә аңлатып булмай торған нәмәгә оҡшай ул.

Заһир. Минең шул хаҡта уйлағаным бар. Батырлыҡ ул — тормошҡа, үҙеңдең йәшәүеңә ышаныу. Батыр кеше үҙен ерҙә шундай ныҡ һиҙә, хатта ул үҙенә әжәл ҡағылыуҙы башына ла килтермәй.

Горячев. Быны һин күрергә теләгән идеальный батыр шулай итәлер инде. Һуғышта бит әжәл йыш ҡына үҙе тураһында хәбәр итеп тора. Оноттормай.

Заһир. Шулай булғас һуң?

Горячев. Батырлыҡ ул, бөтәһенән дә элек, тормош менән иҫәпләшеп тормау тигән һүҙ. Бына нәмә ул батырлыҡ.

Заһир. Был батыр булырға йәки батыр күренергә тырышыу. Ғөмүмән әйткәндә инде, еңергә теләгән кеше түгел, ә еңгән кеше батыр була.

Горячев. Беҙҙең уңышһыҙ операцияларҙы тағы ла хәтергә төшөрәһең. Әгәр дөрөҫ аңлаһам.

Заһир. Хәҙергә иң борсоған нәмә шул булғас, иҫтә тоторға тура килә. *(Пауза.)* Эш һин әйткән сәбәптәрҙә

түгел. Һуғыш ҡырында тәүәккәллеккә мохтажлыҡ юҡ беҙҙә. Обороналағы дошман хәҙер, өңгә ҡыуып индергән йыртҡыс кеүек, хәйләкәр һәм һаҡ. Мал ҡайғыһы китте унан, баш ҡайғыһы ғына ҡалды. Башты һаҡларға тырыша.

Горячев. Мин әлегә һинең менән бәхәсләшмәйем.

Заһир. Беҙҙең арала, ғөмүмән, бәхәс юҡ. Тик шуны әйтергә теләйем: уҙған операцияларҙа һиңә сабырлыҡ, ә миңә йылдамлыҡ етмәне булһа кәрәк.

Горячев. Асығыраҡ әйткәндә...

Заһир. Асығыраҡмы? Аптыраған Абдрахман ике ат егә, береһе тарта, береһе сигә. Шундай аттарға оҡшағанбыҙ беҙ. Мин һинең күберәк уйлауыңды теләр инем, дуҫ кеше.

Горячев. Мин хәрәкәт кешеһе. Хәрәкәттә — бәрәкәт, тиҙәр.

Заһир. Бына нимә, бәрәкәт кешеһе. Полковник тап кисәге участкала хәрәкәт итергә кәңәш бирә. Ысындан да, бөгөн унда беҙҙе көтмәйәсәктәр. Мин һинең взвод менән барам. Урын һиңә билдәле. Уйла һәм ҡарар ҡабул ит. Бер аҙҙан һуң миңә әйтерһең.

Горячев. Бәлки, беҙ бергәләп уйлашырбыҙ.

Заһир. Эйе, һуңынан бергәләп тә уйлашырбыҙ, ә хәҙергә айырым-айырым ҡарар ҡабул итеп ҡарайыҡ.

Горячев. Шуның өсөн генә саҡырғайныңмы?

Заһир. Әҙерәкме ни?

Горячев. Юҡ, етерлек. Башҡа һүҙең дә юҡмы, тимен.

Заһир. Башҡаһы элегерәк булды түгелме һуң?

Горячев. Эйе, булды. *(Тора. Пауза.)* Ә шулай ҙа Горький шәп әйткән... Безумству храбрых поем мы песню... *(Китә.)*

Заһир *(оҙаҡ паузанан һуң)*. Яңғыҙ ҡалһам, гел ҡаршыма килеп баҫаһың һин, минең туй табыныма бомба ташлаған фашист. Һин баштараҡ, теш ыржайтып, ғәмһеҙ көлә инең. Ә хәҙер, минең күҙ ҡараштарымдан ҡурҡып, боҫаһың, артҡа сигенәһең, ҡулыңдағы ҡанлы бысаҡты артыңа йәшерергә тырышаһың. Өңөңдән төтәҫләп сығарырмын мин һине. Унда ла ныҡышһаң, өңөңә үҙем кереп быуып үлтерәсәкмен. *(Пауза. Тора.)* Һәләк

булған дуҫтарымдың ҡаны менән ант итәм мин, Заһир Кинйәкәев: һинең туйың булмаясаҡ, фашист!

*Шаршау*

## Икенсе картина

Разведрота урынлашҡан блиндаж эсе. Төн. Коптилка яна. Кескәй өҫтәлдә — ялан телефоны. Муйынына автомат аҫҡан Ямалетдин бер үҙе генә ултыра. Телефон сигналы.

Ямалетдин *(трубканы ала)*. Ялғанды, ялғанды. Дневальный ҡыҙылармеец Ямалетдин Мофтахов тыңлай. Һинме ни? Бер үҙем генә... Үҙең тартып ебәрһәң ине лә бит, Сәғитйән. Кеше күп, тиһеңме? Ярай. Ниңә булдырмаҫҡа? Шәп түгел дә түгелен. Ничего. Һалдат кәйефе тиҙ төҙәлә ул. Нимә йырларға һуң һиңә? *(Тамаҡ ҡыра.)* Давай, шуны йырлайым улай булғас... *(Йырлай.)*

Йөҙө айҙай, сәсе һары ебәк,
Буйы-һыны — ҡулдәр ҡамышы,
Күңелдәрем ышанмаған бер ҙә генә, —
Насип булырмы икән дә ҡауышыу?!
Ә, Сәғитйән?!
Йөҙҙәренә ҡыйып ҡарай алмайым,
Йөрәккәйем ярһып типһә лә,
Әйтер һүҙҙәремде әйтә алмайым,
Ишһенмәҫ тип күңелем дә шикләнә,
Ә, Сәғитйән?!
Белһә ине, уны уйлай-уйлай
Моңая бит инде был күңел.
Аяуһыҙ ҙа һуғышып, дандар алһам,
Ҡыҙ ҡарамаҫ егет тә мин түгел!

Ямалетдин йырлағанда, Хат ташыусы Гөлшатты алып инә. Ишек төбөндә генә һөйләшәләр.

Хат ташыусы. Бына ошо инде старший лейтенант Кинйәкәевтең ротаһы торған ер.

Гөлшат. Ҡалай уҫал анау ишек төбөндә торған боец.

Хат ташыусы. Уға шулай положено. Часовой — ул үҙе батша, үҙе алла кеше. Әле тик минең арҡала ғына индерҙе ул.

Гөлшат. Инде часовой булдым тигәс тә, ҡунаҡ менән шул тиклем ҡырт һөйләшмәйҙәр.

Хат ташыусы. Ярай, һеҙ ултырып тороғоҙ. Анау кеше йырлап туҡтағас, бөтәһен дә аңлатып бирер. Минең йөрөйһө ерҙәр, тапшыраһы хәбәрҙәр күп әле.

Гөлшат. Быныһы асыуланмаҫмы һуң?

Хат ташыусы. Быныһы уның дневальный ғыналыр... Йә, хуш булып тороғоҙ. *(Хәрбиҙәрсә сәләмләй.)*

Гөлшат. Һау булығыҙ, рәхмәт. *(Ҡулын биреп хушлаша.)*

Хат ташыусы китә. Гөлшат Ямалетдин эргәһенә килә.

Гөлшат *(Ямалетдин йырлап бөтөргәс)*. Башҡортса ҡалай матур йырлайһығыҙ икән.

Ямалетдин *(һикереп тороп, автоматын тоҫҡай)*. Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ! Йәһәтерәк ҡыймылдағыҙ! *(Гөлшат, ҡурҡып, ҡулдарын күтәрә.)* Кем һеҙ? Тиҙерәк әйтегеҙ?

Гөлшат. Юҡ, мин яуыз кеше түгел.

Ямалетдин. Һөйләшергә рөхсәт ителмәй! Һай, Сәғитйән, Сәғитйән, йыр йырлатып башты һәләк иттерә яҙҙың бит. Ярай әле үҙемдең уяулыҡ бар икән, ваҡытында һиҙеп ҡалдым.

Гөлшат. Шаяраһығыҙмы, әллә ысынлап шулай ҡыланаһығыҙмы? Вот быларға әллә ҡайҙарҙан бүләк килтереп йөрө.

Ямалетдин *(йомшарып)*. Туҡта әле, туҡта, һеҙ бит башҡортса һөйләшеп тораһығыҙ түгелме һуң? Мин былай ҡапыл ҡыҙыбыраҡ киттем, ахыры. Шпион башҡортса белмәйҙер ҙә ул. Һеҙ был блиндажға нисек килеп эләктегеҙ әле?

Гөлшат. Һеҙ йырлап торғанда, мине бер һалдат килтерҙе лә китеп барҙы. Һуғышта кеше уҫаллана тиеүҙәре дөрөҫ икән. Бары ла екеренеп кенә торалар.

Ямалетдин. Мин дневальный бит. Миңә шулай положено. Начальствонан бер кеше лә булмағанда, иң башы мин бында... Ниңә, ҡулдарыңды түбән төшөр инде.

Гөлшат. Заһир ҡайҙа?

Ямалетдин. Һеҙ әллә Башҡортостандың үҙенән үк килгән ҡунаҡмы? Бүләк килтерҙегеҙме?

Гөлшат. Заһирҙы ҡайҙа күреп була? Һеҙҙең полковник үҙе мине бында ебәрҙе.

Ямалетдин. Хат ташыусы әйткән ҡыҙ, моғайын, һеҙҙер әле.

Гөлшат. Ниңә һеҙ минең һүҙемде тыңламайһығыҙ, ә?

Ямалетдин. Хәрби ерҙә төпсөнөп ултырырға ярамай. Хәҙергә көтөп тороғоҙ. Начальствонан берәйһе килгәс, һорашырһығыҙ.

Гөлшат. Һеҙ миңә бер генә һүҙ әйтегеҙ: ҡайҙа Заһир?

Ямалетдин. Береһен әйтһәң ул, һүҙ эйәрә һүҙ сығып ҡына тора. Минең тел бер ысҡынып китһә...

Гөлшат. Башҡорт кешеһенең арыуы һүҙсән була инде уның.

Ямалетдин. Ниңә баҫып тораһығыҙ? Ултырығыҙ ана йәшник өҫтөнә булһа ла. Беҙ ҡунаҡтар килгәнгә бик шатланабыҙ.

Гөлшат. Шулай күренә. Бик шатланып ҡаршы алдығыҙ.

Ямалетдин. Һеҙ уның өсөн үпкәләмәгеҙ инде. Һалдаттар әйткәндәй, быныһы боевой крещение булыр һеҙгә. Ултырығыҙ әле, ултырығыҙ!

Гөлшат. Улай бик ҡыҫтағас ни. *(Килеп ултыра.)*

Ямалетдин. Игендәр нисек беҙҙең яҡта? Ямғырҙар яуамы?

Гөлшат. Байрам ашы — ҡара-ҡаршы. Үҙегеҙ яуап бирмәнегеҙ, минән дә һорамағыҙ.

Ямалетдин. Мин бөтөнләй яуап бирмәйем тимәнем. Башта һеҙҙең менән яҡыныраҡ танышып алырға кәрәк. Унан һуң, бәлки, кое-что әйтермен дә. Минең исемем — Ямалетдин Мофтахов.

Гөлшат. Мин — Гөлшат.

Ямалетдин. Исемегеҙ бик матур. Ағайым шау ғына: «Гөлшат ниңә гел шат түгел», — тип йырлай ҙа әле.

Гөлшат. Ниндәй ағайың?

Ямалетдин. Старший лейтенант Кинйәкәев. Рота командиры.

Гөлшат. Ямалетдин аҡыллым, ҡайҙа һуң ул хәҙер — Заһир Кинйәкәев?

Ямалетдин. Ҡайҙан беләһегеҙ һеҙ уны?

Гөлшат *(үҙен ҡулға ала)*. Ауылдашым ул минең, шуны күрергә тип килгәйнем.

Ямалетдин. Ә шуны бая уҡ әйтмәнегеҙ. Заһир ҙа Заһир тиһегеҙ. Армияла исемдең бик почеты юҡ уның. Бында фамилия алдан йөрөй. *(Гөлшат эргәһенә килеп ултыра.)*

Гөлшат. Кинйәкәев...

Ямалетдин. Ул оҙаҡламай ҡайтып етергә тейеш. Заданиеға киттеләр улар, «тел» тоторға.

Гөлшат. Полковнигығыҙ ҙа шулайыраҡ әйткәйне лә бит. Бик ҡурҡынысмы инде ул «тел» тотоу?

Ямалетдин. Һи, бер ни ҙә түгел ул «тел» тотоу, мин үҙем бик күпте эләктерҙем.

Гөлшат. Улай бик шәп булғас, нишләп һуң әле өй һаҡлап ултыраһығыҙ?

Ямалетдин. Батырға ла ял кәрәк, тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр инде. Ағайым шулайыраҡ уйлап, ахыры, мине өйҙә ҡалдырҙы.

Гөлшат. Кинйәкәев тә шулай, һеҙҙең бөтәгеҙ шикелле үк, ҡысҡырынып ҡына торамы?

Ямалетдин. Ниңә улай булһын. Бер ҙә ҡысҡырынмай. Тик мине генә әрләштергеләй.

Гөлшат. Ниңә әрләй һуң ул һеҙҙе?

Ямалетдин. Уныһы ла былай үҙ күреүҙәндер инде. Ҡайһы саҡта әле ул мине эйәртеп, Сәғитйән эргәһенә алып китә лә, унан ҡурай тарттырып, мине йырлатып ултыра. Йырҙы ифрат ярата ул...

Гөлшат. Бик йонсоу түгелме Кинйәкәев?

Ямалетдин. Фашисты бынау ергә ҡыуып килтергән кеше нимә эшләп йонсоу булыр икән? Бына-бына тағы ҡуҙғатып ебәрергә уйлап торабыҙ ҙа үҙен. Сигенгәндә йонсота ине, унығын әйтһәң дә ярай.

Пауза.

Гөлшат. Тағы күпменәнерәк ҡайтырҙар икән?

Ямалетдин. Разведкала сәғәтләп кенә йөрөп булмай шул... Тиҙ инде, тиҙ.

Гөлшат. Һеҙ үҙегеҙ ҡайһы яҡтыҡы һуң? Бигерәк матур йырлайһығыҙ.

Ямалетдин. Дим буйынан мин. Беҙ был дивизияла икәүбеҙ бер ауылдан, Сәғитйән тигән малай бар тағы. Связдең узелында эшләй. Бая телефон аша шуға йырлап тора инем инде... Сәғитйәндең бер орден, бер миҙал хәҙер.

Гөлшат. Телефон аша йырлашыу нисек була инде ул?

Ямалетдин. Унһы була инде ул булыуын да... Тик минең йырлағанды, һүҙ уңайы сыҡҡанда, ағайыма әйтә күрмәгеҙ, асыуланыр.

Гөлшат. Йыр ярата торған кешеме?

Ямалетдин. Телефон аша йырлашырға ярамай шул. Беҙ линия буш саҡта ғына шулай итәбеҙ ҙә бит, Сәғитйән менән йыш күрешеп булмағанға аптырап инде.

Гөлшат. Ауылдашығыҙ ҙа шулай матур йырлаймы?

Ямалетдин. Юҡ, ул ҡурай тарта. Элек, әле ауылда саҡта, ул ҡурай тарта ине, мин йырлай инем, клубта. Әле лә самодеятельноста һөнәребеҙҙе күрһәткеләйбеҙ. Бик эс бошоп киткәндә, шулай һирәк-мирәк, линия буш саҡта, телефонда ла уйын-йыр менән хәбәрләшеп алабыҙ. Радиолағы кеүек ишетелә.

Гөлшат. Ҡалай ҡыҙыҡ икән.

Ямалетдин. Тик ағайыма ысҡындыра күрмәгеҙ инде был хаҡта.

Гөлшат. Юҡ, юҡ... Мин хәрби серҙең нимә икәнен аңлайым... *(Пауза.)* Ниңә һаман ҡайтмайҙар икән, Ямалетдин? Төн уртаһы ла ауыша торғандыр инде.

Ямалетдин. «Таң һарғайыу түгел, ҡояш та сыҡһын, танһыҡтарым ҡанмай ҙа ҡайтмайым» тигән йырҙағы кеүегерәк инде бында ла. «Тел» дә генә алмай ҡайтмайым», ти разведчик та.

Ишектән үк һөйләнеп телефон аппараты аҫҡан Людмила инә.

Людмила. Һуғышта ошо танкылар булмаһа, связистарға ниндәй рәхәт булыр ине. Өҙгөләйҙәр ҙә бөтөрәләр, бер ни сыҙатыр хәл юҡ. *(Гөлшатты күреп.)* Бәй, ҡунаҡ бар ҙа баһа. Һеҙ яңы пополнение менән килгән-

һегеҙҙер, моғайын, шулаймы? *(Гөлшат менән күрешә.)* Людмила исемле мин, таныш булайыҡ.

Гөлшат. Мин Гөлшат исемле.

Ямалетдин. Бер ниндәй ҙә пополнение менән килмәгән ул. Беҙҙең Башҡортостан ҡыҙы. Бүләктәр килтерергә килгәндәр улар. Старший лейтенант Кинйәкәевтең ауылдашы... *(Хәйләкәр йылмая.)*

Людмила. Әлегә һеҙ ротаның ҡунағы, шулай бит, Гөлшат? Хәҙер сәй эсербеҙ, һөйләшеп ултырырбыҙ. Беҙ ҡунаҡтарҙы бик яратабыҙ.

Гөлшат. Рәхмәт, минең әлегә сәй эскем килмәй.

Людмила. Ауыҙығыҙҙы ла асмағыҙ. Шәкәр ҙә бар... Ямалетдин, һин котелок ал да бик тиҙ генә кухняға йүгер.

Ямалетдин. Ете төн уртаһында кухняла сәй була тиме икән?

Людмила. Ниндәй егет һин, ә? Ҡунаҡ алдында үҙеңдең булдыҡһыҙлығыңды белдермәҫ инең исмаһам. Йүгер хәҙер үк! Теләһә ҡайҙан тап.

Ямалетдин. Әллә мине ҡаршы тиһегеҙме? Һин тигәндә, Людмила, аяғым ергә теймәй. Саптым. Дневальный булып һин ҡалып торорһоң инде, йәме, Людмила? *(Сыға.)*

Гөлшат. Һуғышта бик ҡыйындыр, Людмила?

Людмила. Башта күнегеп булмайыраҡ йөрөлдө лә хәҙер эйәләштерҙе инде. Һуғыштағы кеше ауырлыҡ тураһында уйламаҫҡа өйрәнә ул... Һалдат кешеләрҙең һәйбәт яғы бар, һуҡранмайҙар улар. *(Консерва аса, кружкалар ҡуя.)*

Гөлшат. Дошман танкылары телефон сыбыҡтарын өҙөп киткәндә ләме? *(Көлә.)*

Людмила. Уныһы былай ғына. Линияны дошман танкылары түгел, үҙебеҙҙең танкылар өҙгөләйҙәр бит.

Гөлшат. Шуны ҡарап йөрөһәләр ҙә булалыр инде, кешене юҡҡа этләмәһәләр тағы.

Людмила. Булмай икән, аҡыллым Гөлшат, ерҙә ятҡан линияны урап үтә алмайҙар шул улар. *(Пауза.)*

Гөлшат. Ниңә һаман ҡайтмайҙар икән?

Людмила. Кемдәр?

Гөлшат. «Тел» тоторға киткән кешеләр.

Людмила. Оҙаҡлауын оҙаҡлабыраҡ киттеләр ҙә, ҡайтып етерҙәр инде... Кинйәкәев һеҙҙең ауылдашығыҙмы ни? Бик шатланыр инде һеҙҙе күргәс.

Гөлшат. Эйе, ул минең... ауылдашым.

Людмила. Бөтәһе лә маҡтайҙар уны. Ә миңә бына бер яғы оҡшамай уның. Шат түгел. Мин шат кешеләрҙе яратам.

Гөлшат. Миңә уйсаныраҡ егеттәр оҡшай төшә.

Людмила. Уйсанлыҡ ҡыҙҙарға килешә, Гөлшат. Ә егеттәр шат күңелле булырға тейештәр.

Ямалетдин *(инә)*. Ҡыҙҙар өсөн диңгеҙ төбөнән булһа ла табып килтерер инем ҡайнар сәйҙе, ярай, кухняла ҡалған икән.

Людмила. Былай ҙа китеүеңә биш былтыр булды бит инде.

Ямалетдин. Бирмәй аптыратты повар аҡтығы. «Төнө менән сәйхурланмаһаң да ярар», — ти. «Ҡыҙҙарға», — тигәйнем, май кеүек ирене теге: «Эсһендәр әйҙә иҫәнлеккә», — ти. *(Өҫтәлгә ҡуя.)*

Людмила. Әйҙә, ултыр, Гөлшат. *(Ямалетдинга.)* Нимә көтөп тораһың? Кружкаларға сәй ҡой. Үҙең дә кружкаң менән шәкәреңде алып кил.

Ултырышалар.

Ямалетдин. Ниндәй һалдатҡа әлегә ошолай ҡыҙҙар менән сәй эсеп ултырыу?

Людмила. Сәй эсеү «тел» алырға барыу түгел шул, бөтә кешеләргә лә теймәй... Шәкәрләп эс әле, Гөлшат.

Ямалетдин. Ҡунаҡ алдында оялтмаһаң да инде кешене...

Гөлшат. Гел шулай оҙаҡ йөрөйҙәрме «тел» алыусылар?

Людмила. Төрлө саҡ була. Эс, һыуынмаҫ борон.

Ямалетдин. Кемдәрҙер килә, ахыры.

Ишек асыла. Полковник һәм уның адъютанты инә. Людмила менән Ямалетдин урындарынан торалар. Гөлшат та шулай итә.

Полковник. Һаумыһығыҙ, иптәштәр! Ултырығыҙ, ултырығыҙ.

Людмила. Һаулыҡ теләйбеҙ, иптәш полковник.

Полковник. Сәй эсәләр түгелме һуң былар? Сәйегеҙ тәмле булһын.

Людмила. Уртаһында булығыҙ, иптәш полковник.

Полковник *(уҙа)*. Уртаһында уҡ булмаһам да, берәй кружка ҡуйһағыҙ ярай...

Людмила *(шаярып)*. Адъютантҡа кружка етмәй бит әле.

Адъютант. Мин сәйгә әүәҫ түгелмен. Рәхмәт.

Людмила. Улай булғас, ҡыҫтап тороуҙың да файҙаһы юҡтыр инде...

Адъютант. Так точно... *(Ситкә китеп ултыра.)*

Полковник. Оҙаҡлабыраҡ киттеләр бит әле былар. Кеше ҡартайһа, шулай тынғыһыҙлана башлайҙыр, ахыры... Бер урында ғына көтөп ултырырға түҙемлек етмәй.

Гөлшат *(тәҙрәне ҡаплаған плащ-палатканы ҡайтарып ҡарай)*. Тышта яҡтыра башланы.

Полковник. Һеҙ, ҡунаҡ, юҡҡа минең һүҙҙе тыңламаның. Бында интегеп көтөп ултырғансы, тегендә һеҙ яҡшылап ял иткән булыр инегеҙ. Ауылдашығыҙға үҙебеҙ хәбәр итер инек.

Гөлшат. Рәхмәт һеҙгә. Мин былай ҙа арыманым. Беҙ, тыл кешеләре, көтөргә өйрәнеп бөткәнбеҙ инде... Хатты ғына ла күпме көтәбеҙ беҙ.

Полковник. Бындай хәтәр йылдарҙа кешеләр фронтта ла, тылда ла бер үк төрлө булаларҙыр, тип уйлайым мин. Көтәләр, һағыналар һәм шуға күнегә алмайҙар. Бөтә илдең яҙмышы бер. *(Пауза, сәй эсә.)* Сәйҙе мин бал менән эсергә яратам. Булғанда, әлбиттә. Йүкә балы миңә сәскә балына ҡарағанда нығыраҡ оҡшай. *(Гөлшатҡа.)* Һеҙҙең яҡта бал ҡорттары бигерәк наҙлылар, ахыры. Башҡортостандың балы айырыуса тәмле була... Шундай балдары булғас, ниңә сәйгә әүәҫ булмаһындар, ти, башҡорттар? Шулаймы, Мофтахов?

Ямалетдин. Асыҡ ҡына әйтә алмайым, иптәш полковник.

Полковник. Ни өсөн?

Ямалетдин. Беҙ бит сәйҙе балһыҙ ҙа бик яратабыҙ, иптәш полковник. Сәйе генә булһын.

Адъютант. Сәй эсеү утын бысыу түгел шул.

Полковник *(Ямалетдинға ҡарап)*. Был сәйхурҙар утын бысҡанда ла бирешмәйҙәр... Шулаймы, Мофтахов?

Ямалетдин. Быныһы тап шулай, иптәш полковник.

Тынлыҡ. Полковник өҫтәлгә таяныр ойоп китә.

Людмила *(бышылдап)*. Оло кешегә ауыр шул йоҡоһоҙ. Тынғыһыҙ ул. Шау ғына шулай борсолоп йөрөй.

Гөлшат *(тәҙрәнең пәрҙәһен күтәрә)*. Тышта яҡтырып та бөткән... Ана, кемдәрҙер бында килә.

Полковниктан башҡалар бөтәһе лә тәҙрәгә килә.

Людмила. Ҡайттылар! Ана Горячевҡа часовой нимәлер әйтә. Горячев менән кемдер бында килә.

Полковник *(һиҫкәнеп китә)*. Ә? Ҡайттылар, тиһегеҙме? Ҡайҙа һуң улар?

Лейтенант Горячев һәм Пуговкин инә.

Горячев. Иптәш полковник, доложить итергә рөхсәт итегеҙ.

Полковник. Һөйләгеҙ.

Горячев. «Тел» алынды.

Полковник. Ә Кинйәкәев ҡайҙа? Штабта ҡалдымы?

Горячев. Юҡ.

Гөлшат. Заһир Кинйәкәев, ҡайҙа ул?

Горячев. Беҙ «тел»де алып ҡайтырға сыҡҡанда, яҡтыра башланы. Немецтар беҙгә ҡаршы бик яман ут астылар. Кинйәкәев бер нисә һуғышсы менән беҙҙе прикрывать итеп ҡалды.

Полковник. Шунан?

Горячев. Беҙ урманға ингәс, һуғышсылар Кинйәкәевте күтәреп алып килделәр. Ул ауыр яраланғайны. Беҙ уны медсанбатҡа илттек. Хәҙер генә самолет менән үҙен тылға оҙаттылар.

Гөлшат хәлһеҙләнеп урындыҡҡа барып ултыра. Уның эргәһенә Людмила килә.

Полковник. Кинйәкәев һушын юғалтманымы?

Горячев. Һаташа. Беҙ уның ауыҙына һыу һалырға теләйбеҙ. Ә ул, «пленный немецты килтерегеҙ», ти. Килтерҙек.

Полковник. Сәйер кеше ул Кинйәкәев. Шунан һуң?

Горячев. «Һинең һөйгән кешең бармы донъяла?» — тип һорай немецтан. «Бар», — ти теге. «Ҡатыныңды яратаһыңмы?» — ти Кинйәкәев. «Һөйгән ҡыҙым бар минең», — ти немец.

Полковник. Ҡыҙыҡ һөйләшеү.

Горячев. Шунан һуң Кинйәкәев башын күтәрҙе лә былай тине: «Бына нимә, фашист, һинең туйың бер ваҡытта ла булмаясаҡ... Ә беҙҙең туй...» — тине лә башҡаса өндәшмәне.

Гөлшат *(ҡапыл һикереп тора)*. Ә беҙҙең туй!.. Иптәш полковник, мин Кинйәкәевтең ауылдашы ғына түгел, ҡатынымын. Шул сәйер кешенең ҡатынымын мин!.. *(Пауза.)* Шуның өсөн һеҙҙән һорайым мин, иптәш полковник, һеҙ миңә ошонда ҡалырға рөхсәт итегеҙ! Ошонда бит илдең дә, минең дә яҙмышым хәл ителә. Мин үҙ яҙмышыма яҡыныраҡ булырға теләйем! Һеҙ, моғайын, яҡшы күңелле кешеләр, кире ҡаҡмағыҙ минең үтенесемде. Һеҙ ҙур кеше, һеҙҙең йөрәгегеҙ ҙә ҙур булырға тейеш!.. Риза булып, минең хәсрәтемде еңеләйтегеҙ, иптәш полковник!

Полковник. Тынысланығыҙ, һеңлем. Мин уйлап ҡарармын.

Бөтәһе лә ғәжәпләнеп торалар.

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Өсөнсө картина

Күптән түгел генә һуғыш уҙған ялан. Ялан аша һуҡмаҡ үтә. Һирәк ағастар. Ямалетдин автоматын аҫҡан көйө һуҡмаҡтан килеп сыға. Ҡайын эргәһендә туҡтай.

Ямалетдин *(көрһөнә)*. Уф, тиһәм, үләндәр көйә, эстәремдә ут икән. Бына кем тураһында сығарғандар

был йырҙы... Минең турала. Анау бер мәл: «Мин Ямалетдин кеүек шат егеттәрҙе яратам», — тигән бер һүҙең менән баштарымды уйға, йөрәгемде утҡа һалдың бит, Людмила. «Ямалетдин кеүектәр» Ямалетдин түгел бит әле. Ә мин, иҫәр, ҡабындым да киттем, дөрләп янам хәҙер. Уф, тиһәм, үләндәр көйә... *(Ҡайынды килеп ҡосаҡлай.)* Кемгә һөйләйем һуң хәсрәтемде?.. Бына шат егет Ямалетдин нишләне! Ғишыҡ уты бер ҡабынһа, яна ла яна икән...

Ҡаршы яҡтан һуҡмаҡ буйлап һыҙғыра-һыҙғыра Пуговкин инә. Ул Ямалетдин һөйәлгән ҡайын эргәһенә килеп туҡтай. Ямалетдин уны күрмәй.

Пуговкин. Кәкре ҡайынға һөйәп киттеләрме әллә, егет аҫылы?

Ямалетдин *(әйләнеп)*. Әллә ҡайҙан килеп сығыуы булды, кешегә бәйләнә лә башланы.

Пуговкин. Ниңә һуң, хыялыйҙар кеүек, бер үҙең ҡайынға һөйәлеп тораһың?

Ямалетдин. Бөгөн көн минеке. Теләһәм ҡайҙа тора алам. Лейтенанттан һораған, эше бөткән.

Пуговкин. Һуң ни, тор, йәнең теләгәс, көн буйы тор.

Ямалетдин. Әгәр ауылдашым Сәғитйән эргәһенә китеп бармаһам, торор ҙа инем шул.

Пуговкин. Ошондай матур көндө тел сарламаһаҡ булмаймы?

Ямалетдин. Үҙең башланың бит. Хыялый ҙа фәлән, имеш.

Пуговкин *(ултыра, ҡағыҙ йыртa. Ямалетдинға бирә)*. Тартмаған да артмаған, ти. Әйҙә, тартып алайыҡ.

Ямалетдин. Ҡатымы һуң тәмәкең, мин йомшаҡты уважать итмәй башланым.

Пуговкин. Күптәнме?

Ямалетдин. Барын да белмәһәң дә ярар.

Пуговкин. Нимә, һине пәрей алмаштырҙымы әллә? Асыулы бесәй кеүек, һыртыңды ҡабартып ҡына тораһың.

Ямалетдин. Ҡана, тәмәкеңде һалып һөйләш әле.

Пуговкин. Хәтереңде ҡалдырғандар, ахыры.

Ямалетдин. Мин хәтере ҡала торған егет түгелмен.

Пуговкин. Эйе, уй ҙа төшә инде һалдат башына...

Ямалетдин. Егет йөрәгендә эйәрле, йүгәнле ат йәшәй, тиҙәр башҡорттар. Барҙыр инде, уйы ла барҙыр.

Пуговкин. Яндыр әле теге трофейный зажигалкаңды.

Ямалетдин. Ташланым. Янмай. Бәләһе үҙенән ҙур. *(Шырпы алып ҡабыҙа.)* Шырпыға етәме һуң?

Пуговкин *(һуҙылып салҡан ята)*. Аяҙ күк бөтә ерҙә лә бер төрлө, ә болотло күк төрлө ерҙә төрлөсә.

Ямалетдин. Шат кешеләр бөтәһе лә бер төҫлө, ә һағышлы кешеләр...

Пуговкин. Ниндәй һағыштарға һабыштың һуң әле һин?

Ямалетдин. Һине мөхәббәт фронтында ҡарт һалдат тиҙәр. Дөрөҫмө?

Пуговкин. Конечно, һи-и, бөтәһен дә һөйләй китһәң...

Ямалетдин. Мин һинән уларҙы һорамайым.

Пуговкин. Нимә һорамаҡсы булаһың һуң?

Ямалетдин. Һин шуны әйт әле миңә: бер ҡарға ыласынға ғишыҡ тотоп йөрөһә, нимә булыр ине?

Пуговкин. Бер нәмә лә булмаҫ ине.

Ямалетдин. Ни өсөн булмаҫ ине?

Пуговкин. Күктә, әллә ҡайҙа бейектә, осоп йөрөгән ыласын ҡарғаның ҡаҙыҡ башында йәки кәкре ҡайын төбөндә ғишыҡ тотоп ултырғанын нисек белһен, ти?

Ямалетдин. Төртөп һөйләшмә. Кәкре ҡайындың бында ҡыҫылышы юҡ.

Пуговкин. Ҡайынды мин һүҙ яйы килгәнгә генә әйттем. Бәлки, ҡайын төбөндәгенең ҡыҫылышы барҙыр?

Ямалетдин. Мин һине рәтле кешегә һанап һүҙ һорайым, ә һин сәйнәшәһең.

Пуговкин. Характерым шундай.

Ямалетдин *(паузанан һуң)*. Шулай булғас, ҡарға нимә эшләргә тейеш?

Пуговкин. Йә ыласын кеүек бейек осорға, йә үҙе кеүек ҡарғаға ғына ғашиҡ булырға тейеш.

Ямалетдин. Ах, бахыр ҡарға... О, юҡ! Ул ыласын кеүек бейек осһон!

Пуговкин. Тырышып ҡараһын әйҙә... *(Ултыра. Итек ҡуңысына һуғып ҡуя.)* Бына Николай ҡыҙғаныс, ниндәй яҡшы егет әрәм булып ята.

Ямалетдин. Әллә һин санбаттан киләһеңме?

Пуговкин. Эйе, туғыҙ саҡрымды йәйәүләп Николай эргәһенә барҙым. Санбаттың связнойы килеп алғайны.

Ямалетдин. Николайҙың эше шулай насармы ни?

Пуговкин. Уң аяғының рәте юҡ. Шул көйө тәүлек буйынса итек ҡуңысын ярҙырмаған, аяғын бәйләттермәгән, ҡарышҡан. Ә аяҡ шешеп киткән.

Ямалетдин. Улай тиҫкәре егет түгел дә бит, яраланғас, кеше холоҡһоҙлана шул.

Пуговкин. Ротанан кеше килмәйенсә, аяғыма яҡын да килмәгеҙ, тип әйтте, ти.

Ямалетдин. Һин барғас һуң?

Пуговкин. Ҡара әле, һаман аңламайһыңмы ни шуны? Уның уң итеге ҡуңысында ошо асҡыс булған. *(Ҡуңысынан асҡысты ала.)* Мин юҡҡа был асҡыс тураһында баштараҡ шикләнеп йөрөгәнмен. Был ысын Берлин асҡысы икән.

Ямалетдин. Хәҙер һиндә торамы ни инде ул?

Пуговкин. А как же! Егеттәр Николай эргәһенә мине ебәргәндәр икән, асҡыс миндә һаҡланырға тейеш.

Ямалетдин. Юғалтмаһаң ярай ҙа.

Пуговкин. Әллә мине ғашиҡ булған ҡарға тиһеңме? *(Тороп китә башлай.)*

Ямалетдин *(Пуговкиндың еңенән тарта)*. Туҡта әле. Ике арала һөйләшкән һүҙ һөйләгән ерендә ҡалһын инде, йәме?

Пуговкин. Мин кем һуң: разведчикмы әллә ғәйбәтсеме?

Ямалетдин. Разведчик Пуговкин.

Пуговкин. Шулай булғас, Пуговкин менән һөйләшергә мөмкин. Әйҙә, валяй, ғашиҡ булыу яҡшы нәмә ул. *(Һыҙғырынып, китә.)*

Ямалетдин. Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәгәс. Юҡҡа әйттем Пуговкинға ҡарға тураһында. Ҡайҙан беләһең, мин үҙем дә ыласынмындыр, бәлки.

Алыҫ түгел тауыш ишетелә: «Гөлшат... Мин тағы ла берҙе таптым!» «Мин дә таптым!..»

Гөлшат менән Людмила түгелме һуң? Нимә эшләп йөрөйҙәр? *(Ҡарана.)* Сәскә йыялар. Ана, былай табан киләләр. Ыҫҡынырға кәрәк бынан тиҙерәк. Бының иҫе китеп, күҙәтеп йөрөй, тип уйлай күрмәһендәр... *(Сығып китә.)*

Сәхнә буш тора. Бер аҙҙан Людмила менән Гөлшат йүгереп инә. Уларҙың ҡулдарында сәскәләр.

Людмила. Кисә һуғыш ҡырынан Николайҙы алып сыҡҡанды күрҙем мин. Ниндәй батырһың һин, Гөлшат.

Гөлшат. Ул бик ғазапланды, бахыр.

Людмила. Гөлшат! Мин бит һине беренсе күреүҙә үк яраттым. Бик ныҡ итеп яраттым.

Гөлшат. Әлдә һин барһың, Людмила. Яҡшы күңеллеһең һин! *(Людмиланы ҡосаҡлай.)*

Людмила. Кешеләр бөтәһе лә яҡшы күңелле һәм һинең кеүек ҡыйыу булырға тейештәр.

Гөлшат. Юҡ, мин ҡыйыу түгелмен.

Людмила. Үҙеңде бит бөтә һалдаттар маҡтайҙар. «Батыр ҡыҙ, уттан да, һыуҙан да ҡурҡмай», тиҙәр.

Гөлшат. Ситтән ҡарағанда ғына шулайҙыр ул.

Людмила. Шулай ҙа бит һин һәр ваҡыт ут эсенә инәһең.

Гөлшат. Эйе, инәм, ләкин бик хәтәр ваҡыттар булһа, шул саҡта мин ергә һыйынам да, әсәйемде, донъялағы башҡа яҡшы кешеләрҙе, һәйбәт әйберҙәрҙе уйлайым. Шунан еңел булып китә.

Людмила. Әйт әле, Гөлшат, һинең иң ҡурҡҡаның нимә?

Гөлшат. Иң ҡурҡҡаныммы? Һуғыш ҡырынан яралы боецты алып сыҡҡанда, уға пуля тейеүҙән ҡурҡам мин.

Людмила *(ҡайын эргәһенә йүгереп килә)*. Ҡара әле, ниндәй кәкре бынау ҡайын.

Гөлшат *(ҡайын эргәһенә килә)*. Кәкре генәме һуң, кәкре-бөкрө бит!

Ҡыҙҙар шарҡылдашып көләләр.

Людмила *(ергә ҡарай)*. Был ҡайын төбөндә кемдәрҙер ултырып киткәндәр.

Гөлшат. Әйҙә беҙ ҙә аҙыраҡ ултырып торабыҙ.

Людмила. Әйҙә. *(Ултыралар, Людмила ҡайынға бороло ҡарай.)* Гөлшат, күрәһеңме, кемдер тырнаҡтары менән ҡайындың ҡабығын сыйып бөтөргән.

Гөлшат. Йә тырнағы ҡысытҡандыр уның.

Людмила. Минеңсә, ул кеше йә бик тәрән уйланып торған, йә бик ҡаты борсолған. *(Үҙе лә тырнағы менән ҡайынды сыя башлай.)*

Гөлшат. Ә һин һуң нимәгә борсолаһың?

Людмила. Ҡайынды сыйған кешене ҡыҙғанам.

Гөлшат. Романтичка һин, Людмила, ниндәйҙер ҡайынды ниндәйҙер кеше тырнағы менән сыйып киткәнгә лә уйға ҡала башлаһаң...

Людмила. Бәлки, ул бик яҡшы кеше булғандыр.

Гөлшат. Бик ихтимал... Ләкин ул инде ошо ҡайын эргәһенә кире килмәҫ.

Людмила. Эйе, кире килмәҫ ул, кеше артабан китергә тейеш.

Гөлшат. Ә һин, әгәр мөмкин булһа, һуғышҡа тиклем үткән йылдарға кире әйләнеп ҡайтыр инеңме?

Людмила. Белмәйем.

Гөлшат. Ә мин ҡайтыр инем. Балалыҡ, тәүге хыялдар, тәүге яныуҙар... Ниндәй гүзәл саҡ!

> Йәшлек — шат ғүмер шишмәһе,
> Һиҙмәнем килгәнеңде,
> Тик беләм бөтә йөрәктән
> Өҙөлөп һөйгәнемде.

Шулай тип яҙғайны беҙҙең Мәлих тигән шағирыбыҙ.

Людмила. Мин дә ундай яҡты йылдарҙы шәп үткәрҙем. Унан һуң бик күп хәсрәттәр кисерҙем. Ә шулай ҙа мине дауыл алдындағы шомло матурлыҡ түгел, дауылдан һуңғы саф матурлыҡ ҡыҙыҡһындыра. Әле йәшәлмәгән йылдарҙа йәшәге килә.

Гөлшат. Иң яҡшы ғүмер — әле йәшәлмәгән ғүмер, ти торғайны беҙҙең уҡытыусы ла. Миңә ҡалһа, ғүмерҙең үткәне лә насар түгел.

Людмила. Һуғышҡа тиклем булған матур тормошто беҙгә башҡалар яулап алғайны, һуғыштан һуңғыһын беҙ үҙебеҙ яулашабыҙ. Был һәйбәтерәк.

Гөлшат. Был бик һәйбәт. Ә Заһир һаман ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Йә ул онотторға ла өлгөргәндер әле.

Людмила. Нишләп онотһон ти, хаты килеп тора бит.

Гөлшат. Хат ҡына килеү менән, үҙе ҡайтмағас.

Людмила. Күрәһең, һауығып етмәгәндер. Госпиталдән берәүҙе лә һауығып бөтмәй сығармайҙар бит.

Гөлшат. Бигерәк оҙаҡ...

Людмила. Гөлшат йәнем, әйҙә, сәскәләрҙән таждар үрәбеҙ. *(Үрәләр.)*

Гөлшат. Әйҙә, иң элек ромашкаларҙа юрайбыҙ. *(Бер ромашканы алып өҙгөләп ташлай.)* Ярата, яратмай, үҙенеке итә, ташлап китә...

Людмила. Мин хәҙер ромашкаларҙа юрамайым.

Гөлшат. Әһә, беләм, һин көнбағыш сәскәһендә юрайһындыр.

Людмила. Юҡ, мин бер нәмәгә лә юрамайым.

Гөлшат. Ни өсөн?

Людмила. Юрар кешем юҡ минең хәҙер.

Гөлшат. Шулай ҙа ҡаты серлеһең һин, Людмила. Әлегә тиклем шуны асыҡ ҡына әйтмәнең.

Людмила. Был хаҡта хәтерләү ауыр миңә... Ауыр булһа ла, һөйләгем килә минең бөгөн шул хаҡта...

Гөлшат. Ә һин иң элек тыныслан.

Людмила. Был турала тыныс һөйләү мөмкинме һуң, Гөлшат?

Гөлшат. Улайһа, нисек һөйләгең килһә, шулай һөйлә.

Людмила. Бәләкәй генә бер диңгеҙ буйында бәләкәй генә бер ҡала бар. Шул ҡалала тыуып үҫтем мин. Ҡояш нурҙарына һәм сәскәләргә бай ул ҡала. Шул ҡалала уҡыным һәм ғашиҡ булдым... Ҡыйыу һәм йылғыр ҡыҙ инем мин элек. Ә үҙебеҙҙең класс малайҙарынан башҡа егеттәрҙең миңә ҡарағанын һиҙһәм, бик нык оялып, ҡыҙара торғайным. Бер саҡ ни эшләптер яңғыҙ ғына яр буйы урамы буйлап атлай-йүгерә китеп барам. Үҙем барам, үҙем осраған егеттәрҙе һынайым,

йәнәһе, әгәр ир кеше миңә күҙҙәрен тултырып ҡарамаһа, уны яҡшыға һанайым.

Гөлшат. Һин бик матурһың бит, Людмила. Һиңә ҡарамау мөмкин түгелдер.

Людмила. Барам, барам, үҙем уйлайым: бына был ир яҡшы булырға тейеш, моғайын, ҡарамаҫ әле, тим. Ҡарай, йоторҙай булып ҡарай.

Гөлшат. Ирҙәр гел ҡарайҙар инде улар.

Людмила. Ә бына береһе ҡараманы! Иғтибар ҙа итмәй уҙып китте. Үҙе шундай матур. Ғәрләнеп киттем. Шунан һуң урамдың икенсе яғына сығып, уны йүгереп уҙҙым да тағы осраным тегегә. Тағы күтәрелеп тә ҡараманы! Бер аҙҙан һуң беҙ уның менән дуҫ ҡыҙымдың тыуған көнөн байрам иткәндә осраштыҡ. Мин уға шунда уҡ ғашиҡ булдым. Ә һуңынан ныҡлап ярата башланым.

Гөлшат. Ул һуң?

Людмила. Ул да яратты.

Гөлшат. Ул шат кеше инеме һуң?

Людмила. Бик шат ине.

Гөлшат. Шунан?

Людмила. Шунанмы? Шунан һуғыш сыҡты. Беҙ уның менән бер эшсе батальонда тыуған ҡалабыҙҙы һаҡлап һуғыштыҡ. Теге саҡта ул миңә күтәрелеп ҡарамаған ерҙә, диңгеҙ буйы урамында, һуғыш барғанда, уға пуля тейҙе. Байтаҡ ваҡыт минең ҡулдарымда ғазапланды. Ғүмеремдең иң ауыр минуттары булдылар улар. *(Пауза.)* Кискә табан беҙ уның кәүҙәһен диңгеҙ ситенә күмеп, катерҙарға ултырҙыҡ та диңгеҙгә инеп киттек. Ҡалабыҙҙы ялҡын солғап алды, ә минең йөрәгем, әйтерһең, уның менән бергә, уны күмгән ерҙә ҡалды...

Гөлшат. Бик-бик ауыр булғандыр инде һиңә, Людмила.

Людмила. Эйе, ауыр, бик ауыр булды... Тереләр бер килеп ҡауышалар улар... Бына һеҙ тиҙҙән ирең менән ҡауышырһығыҙ. Һин бик бәхетле булырһың...

Гөлшат. Ирем тиергә минең телем бармай әле.

Людмила. Һин нимә һөйләйһең, Гөлшат?

Гөлшат. Заһир әлегә минең ирем түгел!

Людмила. Һин теге мәл полковникка ирем тип юрамал әйттең, эйеме? Кинйәкәев һинең ауылдашың ғына?

Гөлшат. Ауылдашым ғына ла түгел.

Людмила. Һөйгән егетеңме?

Гөлшат. Улай ғына ла түгел.

Людмила. Ғәжәп.

Гөлшат. Беҙ ҡауышып өлгөрмәгәйнек... Беҙҙең туйыбыҙ башланыр алдынан ғына немец һуғыш асты... Хатта күтәрелгән тәүге бокалдар эселмәй, кире өҫтәлгә ҡуйылды. Заһир шул көндө үк һуғышҡа китте.

Людмила. Бына нисек икән... Һин үҙең бигерәк тә ҡаты серле булып сыҡтың.

Гөлшат. Башта дөрөҫ әйтмәгәнем өсөн мин уңайһыҙланып йөрөнөм.

Людмила. Ниңә, Гөлшат, туй була яҙғас, ирең тиергә лә ярай инде.

Гөлшат. Мин хәҙергә улай тип әйтә алмайым, икебеҙҙең арала бит йылдар һәм юлдар бар.

Людмила. Һин уны бик яратаһыңмы?

Гөлшат. Эйе, бик яратам.

Людмила. Яратҡан һәм яратылған кешеләрҙе йылдар ҙа, юлдар ҙа тиҙ генә үҙгәртә алмайҙар.

Гөлшат *(һикереп тороп, ситкә йүгереп китә)*. Йылдар ҙа, юлдар ҙа үҙгәртә алмаҫлыҡ бер дуҫлыҡ бар беҙҙең ҡыҙҙарҙа!

Людмила *(Гөлшат эргәһенә килә)*. Аңлайым, улар бик яҡшы подругалар булалар.

Гөлшат. Улай ғына түгел, улар әхирәт-дуҫ ҡушылалар. Һәр бер ҡыҙҙың дуҫтары бик күп булырға мөмкин, ә бындайы берәү генә була.

Людмила. Был бик һәйбәт. Иң яҡын дуҫтың икәү булыуы мөмкин дә түгел.

Гөлшат. Әхирәт ҡыҙҙар — иң яҡын серҙәштәр, улар ғүмер буйы, үлгәнсе ташлашмайҙар. Һин минең менән шундай дуҫ булыр инеңме, Людмила?

Людмила. Мин бик-бик шатланып булыр инем. *(Уйланып.)* Ә дуҫтарҙың берәйһе кейәүгә сыҡһа һуң?

Гөлшат. Сыҡһа ни? Кейәүгә сыҡҡас та, олоғайғас та, ҡарсыҡтар булып бөткәс тә дуҫ булалар улар. Белдеңме инде?

Людмила. Белдем. Улай булғас, тиҙерәк дуҫ булышайыҡ инде.

Гөлшат. Уның әллә ниндәй мәшәҡәте юҡ. Кисә генә һуғыш үткән яланда ике һуғышсы, береһе диңгеҙ буйында, икенсеһе тауҙар итәгендә тыуып үҫкән ике ҡыҙ, ғүмерлеккә дуҫлаша ла ҡуя.

Людмила. Ҡалай матур һөйләп ҡуйҙың.

Гөлшат. Матур булмаһа ла, ысын күңелдән. *(Пауза.)* Дуҫмы?

Людмила. Дуҫ!

Гөлшат. Дуҫлашҡанда ҡыҙҙар бүләк бирешәләр ҙә бит...

Людмила. Бүләк? *(Уйлана.)* Ой, Гөлшат, таптым! Бына мин үҙем үргән тажды һинең башыңа кейҙерәм!

Гөлшат. Ә мин үҙемдең тажымды һиңә бүләк итәм.

Таждар кейҙерешәләр.

Людмила. Дошманды еңгәнсе лә, еңгәс тә, бөтә ғүмер-ғүмеребеҙгә ташлашмайыҡ, айырылышһаҡ та, ташлашмайыҡ, йәме?

Гөлшат. Ташлашмайыҡ.

Людмила. Дуҫмы?

Гөлшат. Дуҫ!

Людмила. Ошо үләндәр һәм сәскәләр шаһит булһын!

Гөлшат. Туптар иҙгән ошо ер һәм баш өҫтөбөҙҙәге аяҙ күк шаһит булһын!

Людмила *(ҡайынға килеп һырыла)*. Шаһит бул һин, кәкре ҡайын!

Гөлшат. Кәкре-бөкрө ҡайын!

1-се минер. Ниндәй һабан туйы икән тиһәк, бында бары ике ҡыҙ ҙа бер кәкре ҡайын ғына икән дә баһа. Ә шау-шыу ни тиклем!

Людмила. Эшегеҙҙә булығыҙ, был тирәлә мина юҡ.

Гөлшат. Минаны һуҡмаҡтан эҙләп йөрөмәйҙәр.

2-се минер. Үҙҙәре веноктар кейгәндәр, үҙҙәре ҡалай уҫалдар.

1-се минер. Сәскәнең — аҫылы, ҡыҙҙарҙың матуры сәнскеле була, тигәндәре ошолор инде.

Гөлшат. Килеп тә сыҡтылар, кеше тикшерә лә башланылар.

1-се минер. Ҡыҙҙар, быныһын ысынлап әйтәм. Был ялан туп-тулы мина. Берүк йөрөй күрмәгеҙ.

Людмила. Беҙ инде бөтә яланды бер итеп сәскә йыйып сыҡтыҡ.

1-се минер. Ах ҡыҙҙар! Ҡыҙҙар! Бәлки, һеҙ күбәләктәр кеүек сәскәнән сәскәгә ҡунып ҡына йөрөгәнһегеҙҙер.

Гөлшат. Юҡ, беҙ ерҙән йөрөнөк, ләкин бер минаға ла осраманыҡ.

2-се минер. Мина, ысын мөхәббәт кеүек, кешенең ғүмерендә бер генә осрай ул.

3-сө минер. Мөхәббәт тә оҙаҡ ваҡыттар буйы шартламай торған мина һымағыраҡтыр, ахыры. Бына ошо егеткә генә ҡарағыҙ. *(2-се минерға күрһәтә.)*

2-се минер. Тыңламағыҙ шуны. Ул гел бер нәмәне һөйләй ҙә йөрөй.

3-сө минер. Эйе, эйе, ҡыҙҙар, бик күп яландарҙы минанан таҙартҡан егет был. Ә йөрәктә мөхәббәт тигән мина тынғы бирмәй үҙенә.

Гөлшат. Ах, бахыр минер, шартлай күрмәһен тағы!

1-се минер. Нығыраҡ ҡыҙғанығыҙ әле үҙен!

2-се минер. Миналы йөрәкте ҡыҙғанырға кәрәкмәй. *(Иптәштәренә күрһәтә.)* Буш йөрәктәрҙе ҡыҙғанығыҙ, ҡыҙҙар. *(Сыға башлай.)*

1-се минер. Һау булығыҙ! *(Сығалар.)*

Гөлшат. Һау булығыҙ. Ел арттан, ай ҡалҡҡан!

Людмила. Ә теге асыулы минер дөрөҫ әйтә. Иң меҫкен йөрәк — ул буш йөрәк.

Алыҫтан тауыш ишетелә: «Гөлша-ат! Людмила! Ҡыҙҙар, ҡайҙа һуң һеҙ?»

Гөлшат. Ана, лейтенант үҙе йүгереп беҙҙе эҙләп килә. Бер-бер хәлгә тарыған, ахыры.

Тыны бөткән Горячев килеп инә.

Горячев. Гөлшат, Людмила, ҡыҙҙар! Гөлшат!

Гөлшат. Нимә, иптәш лейтенант?

Людмила. Ротаға йүгерергәме?

Горячев. Туҡтағыҙ, аҙ ғына тын алайым.

Гөлшат. Улай булғас, беҙ йүгерә торайыҡ.

Горячев. Туктағыҙ, Гөлшат, бер саҡ мин һиңә бик ауыр хәбәр алып ҡайтҡайным.

Гөлшат. Тиҙерәк әйтегеҙ. Нимә бар?

Горячев. Бына хәҙер яҡшы хәбәр килтерҙем һиңә. Үҙем килтерҙем. Эҙләй-эҙләй йән тиргә төштөм.

Людмила. Йәгеҙ, нимә һаман һуҙаһығыҙ?

Горячев. Нимә эшләп тораһығыҙ бында? Йүгерегеҙ! Кинйәкәев ҡайтты!

Гөлшат. Ой, Людмила!

Людмила. Ой, Гөлшат!

Ары-бире һуғылалар, унан һуҡмаҡ буйлап йүгерәләр. Горячев аҡрын ғына сыға.

*Шаршау*

**Дүртенсе картина**

Яҙ. Немецтар әле генә ҡалдырып киткән емерек траншея. Алыҫта атыштар бара. Туптар шартлай. Бер аҙҙан бөтәһе лә тына. Гөлшат Заһирҙың башындағы яраһын бәйләй.

Заһир. Минең ҡолаҡтарым тығылдымы әллә һуғыш тындымы?

Гөлшат. Һуғыш тынды.

Заһир. Ниндәй шомло тынлыҡ! Йыназа алдындағы һымаҡ.

Гөлшат. Шикле һүҙҙәр һөйләмәсе, Заһир.

Заһир. Туптар шартлағанда, баш был тиклем үк сатнамай ине. Беҙҙекеләр ҡайҙа?

Гөлшат. Улар алыҫ инде. Ошо тынлыҡтың аръяғында.

Заһир. Дүрт йыл эсендә тәнемде иләк урынына тишкеләп бөтөрҙөләр. Әммә йөрәгемә тейҙерә алманылар, тейҙерә алмаясаҡтар ҙа. Һинең тубың да, утың да аласаҡ түгел уны, мәлғүн! *(Йоҙроҡ менән янай.)*

Гөлшат. Тынысла́н, Заһир.

Заһир. Ул минең ҡанымды ҡойғанда, мин нисек тынысланайым, ти? Ах, ер сайҡала. *(Тормаҡсы итә.)*

Гөлшат. Саҡ ҡына сыҙа, һөйөклөм. Батырым минең! Һин түҙемһең бит. Хәҙер үҙенде медсанбатҡа алып китербеҙ.

Заһир. Һәр бер ахмаҡ осколок сыйған яра араһында госпиталгә саба башлаһаҡ, кем һуғышыр һуң? Мин китмәйем. Һине ташлап, бер ергә лә китмәйем мин. Бисәм минең — яҙмышым минең... Ә күк йөҙө шундай аяҙ. Һинең күҙҙәрең төҫлө...

Гөлшат. Ә ул күктән күпме болот, күпме дәһшәтле төтөн ағылып уҙҙы, Заһир. Беҙ бит оҙаҡ айырылып йәшәнек.

Заһир. Бик оҙаҡ... Ағастар һаман да талғын ғына бәүеләләр... Мин саҡ ҡына һөйәлеп торайымсы.

Гөлшат уға һөйәлергә ярҙам итә. Заһир аҙға ғына һушын юғалта.

Гөлшат. Заһир, Заһир! Ниңә өндәшмәйһең, ҡәҙерлем? Заһир, тим! *(Фляганан ауыҙына һыу һала.)*

Заһир. Мин теремен, һөйөклөм. Теремен! Өҙгөләнмә.

Хат ташыусы йүгереп уҙа. Заһир менән Гөлшатты күреп туҡтай.

Хат ташыусы. Иптәш капитан! Һеҙ?..

Заһир. Мин. Эйе, мин. Ә тегендә ниҙәр бар?

Хат ташыусы. Быуа йырылды, ташҡын ҡуҙғалды! Ләкин, ой, ой, ой!

Гөлшат. Яманын һөйләмәгеҙ! Зинһар, һөйләй күрмәгеҙ.

Заһир. Барыһын да һөйлә, сержант! *(Ҡапыл тороп ултыра.)*

Хат ташыусы. Пуговкинды үлтерҙеләр. Эргәһендә генә туп ярылды. *(Пилоткаһын һала.)*

Заһир. Булмаҫ! Алдайһың, йүнһеҙ нәмә! Пуговкин үлә торған заттан түгел!

Хат ташыусы. Виноват, иптәш капитан! Яман хәбәр килтергәнем өсөн кисерегеҙ. *(Китә.)*

Гөлшат. Яҡшы кешене юҡҡа рәнйеттең, Заһир.

Заһир. Сержант! Сержант! Туҡта!

Хат ташыусы кире боролоп инә.

Хат ташыусы. Тыңлайым.

Заһир. Нахаҡҡа ҡысҡырындым, ғәфү ит, туған.

Хат ташыусы. Мин һеҙҙе ғәйепләмәйем, иптәш капитан. Йән әрнегәндә була торған хәл. Бер һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтәйем әле. Немецтарҙың икенсе линияһын алғанда, старший лейтенант Горячев яраланып йығылды. Бер немец уға граната ташларға киҙәнгәндә генә, Мофтахов, ҡайҙандыр арттан килеп, тегенең өҫтөнә ҡунды ла гранатаны икенсе яҡҡа бәреп осорҙо. Мин тағы бер әйләнеп ҡарағанда, траншеяла ҡапланып ятҡан фашистың арҡаһында Ямалетдин хәнйәренең һабы ғына күренеп тора ине.

Заһир. Был хәбәрең өсөн рәхмәт, сержант. Ә Горячев? Горячев һуң?

Хат ташыусы. Ҡулы йәрәхәтләнгән, буғай. Ул, беләген тотоп, ары тороп йүгерҙе. Рөхсәт итегеҙ китергә. Мин донесение менән барам.

Заһир *(баш ҡаға)*. Хәйерле юл, туған.

Гөлшат *(кемдәрҙеңдер килгәнен күреп)*. Йә хоҙайым... Бынан да ауыр йөктөң булыуы мөмкин түгелдер. Ҡалай бөгөлгәндәр улар...

Заһир аяҡ үрә баҫа. Людмила менән Ямалетдин носилкаға һалынған Пуговкинды күтәреп керәләр.

Заһир. Пуговкин! Сая, ҡыйғыр ҡошом минең! Һине лә тибер ҡош бармы икән ни?

Бөтәһе лә баш эйеп торалар. Оҙаҡ пауза.

Пуговкин *(күҙҙәрен аса)*. Типтеләр, ләкин тибеп төшөрә алманылар.

Бөтәһе лә аптырап ҡала. Күрәһең, Людмила менән Ямалетдин да уны үлгәнгә иҫәпләгәндәр.

Бөтәһе лә. Пуговкин!!!

Пуговкин *(көс-хәл менән һөйләй)*. Мин әле генә төш күрҙем. Дуҫтарым мине илашып бик алыҫ юлға оҙата, имеш, тим... «Иламағыҙ, мин тиҙ үк әйләнеп ҡайтырмын», — тип әйтергә көсөм етмәй ыҙаландым.

Людмила. Ул бөтөнләй йәнһеҙ ине.

Ямалетдин. Пуговкин! Тимәк, һин тере? *(Алдына теҙләнә.)* Бына ниндәй шәп кеше һин, Пуговкин!

Пуговкин. Миңә үлергә ярамай... Берҙән, минең Берлинға барып етәһем бар... Еткәс, Гөлшаттың туйында ер һелкетеп бейейһем бар, һәләк шәп бейейем мин, «Барыня»ға...

Заһир. Әҙәм түгел, Хужа Насретдин һин, Пуговкин! Молодец, үлемгә бирешергә ярамай, туған. Бигерәк тә һуғышта...

Людмила *(ситкә)*. Күпте күрҙем был һуғышта, ләкин бындай мөғжизәне күргәнем юҡ ине әле. Үлеп терелде бит кеше.

Гөлшат. Тимәк, ул бер ваҡытта ла үлмәйәсәк.

Пуговкин. Ал минең ҡуныстан асҡысты, Ямалетдин, бәлки, һин Берлинға алданыраҡ инерһең... Бына ғына тора бит ул Берлин тигәндәре...

Ямалетдин уның итек ҡуныһынан асҡысты ала.

Заһир. Хәҙер үк үҙен медсанбатҡа илтегеҙ.

Ямалетдин. Илтәбеҙ, иптәш капитан, илтәбеҙ!

Заһир. Бер дуҫты үлемдән ҡотҡарып, бер дошманды дөмөктөргәнең өсөн, һиңә рәхмәт, Ямалетдин ҡустым.

Ямалетдин *(өс бармағын күрһәтә)*. Дөмөккәне өсәү.

Заһир. Улайһа, һиңә дүрт рәхмәт!

Ямалетдин. Рәхмәтегеҙҙе алдым, ағай. Әйҙә, Людмила. *(Күтәрәләр)*. Ҡалай еңелһең һин, Пуговкин! Ҡош мамығымы ни?

Заһир *(Пуговкинды әйелеп үбә)*. Йә, хуш бул, батыр һалдат, ярһыу йөрәкле егет. Тиҙ үк әйләнеп ҡайт.

Пуговкин *(ҡулын болғай)*. Көтөгөҙ...

Китәләр. Заһир менән Гөлшат оҙаҡ ҡарап тора.

Заһир. Пуговкиндың үлеп тереләеүе мине тамам һауыҡтырҙы, рухыма яңы көс өрҙө. Бына ниндәй кешеләр йәшәй бит беҙҙең тупраҡта, Гөлшат!

Гөлшат *(Заһирға һыйына)*. Ул беҙҙең туйыбыҙға килергә вәғәҙә итте. Тимәк, киләсәк ул...

Заһир. «Миңә үлергә ярамай», — ти. Ә кемгә ярай һуң үлергә, старшина Пуговкин?!

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### Бишенсе картина

Өй алдындағы баҡса. Ағастар араһында өҫтәлдәр ултыртылған. Баҡса рәшәткә менән уратып алынған. Кескәй генә ҡапҡа. Артта готика стилендәге биналар силуэты күренә. Ямалетдин өйҙән бер пар ултырғыс алып сыға. Рәшәткәнең урам яғынан Пуговкин килә.

Пуговкин. Шәп кенәме, кейәү егете? Һинең эштәр көйлө күренә, ә?

Ямалетдин. Кейәү егете түгел, аяҡсы. Әйтергә кәрәк, начальник...

Пуговкин. Мин ул яҡтан әйтмәйем. Үҙеңә, тим, ахыры, ыласын ҡанаттары үҫеп киткән. Бик еңел елпенәһең.

Ямалетдин. Йә, әрем телләнмә әле. Үткән эштән төш яҡшы, ти боронғолар. Әллә ҡасан һөйләгән һүҙҙе соҡоп сығармаһаң булмаймы?

Пуговкин. Төшө үтһә үткәндер, эше үткәнгә оҡшамай бер ҙә.

Ямалетдин. Фәлән ҡыҙҙы биш йыл буйына һөйҙөм, тик үҙе генә белмәне, тип әйтте, ти бер егет. Дөрөҫөн әйткәндә, Пуговкин, минең шул егеттән бер ҙә артыҡ ерем юҡ.

Пуговкин. Мин үҙем ундайҙарҙан түгел. Ҡыҙҙар оҡшай икән, әйтәм дә һалам. Ҡалғаны — уның эше.

Ямалетдин. Әгәр ул ҡыҙ һиңә әйләнеп тә ҡарамаһа?

Пуговкин. Ҡарамаһа, ана бара юлы.

Ямалетдин. О, юҡ, туғанҡай, мин улай булдыра алмайым. Миндә тоҡанған ут тиҙ генә баҫылырлыҡ түгел.

Пуговкин. Һинең нимә ҡыланып йөрөгәнеңде әллә ул аңламай тиһеңме? Һай, ҡыҙҙар күңеле, бик һиҙгер була ул ҡыҙҙар күңеле.

Ямалетдин. Былай бер ҙә һиҙенгәнгә оҡшамай.

Пуговкин. Ҡыҙҙарҙа хәйлә лә етерлек була. Ул юрамал белмәмешкә һалышып йөрөргә лә бик может.

Ямалетдин. Шулай ҙа ашығырға ярамай. Бәлки, берәй яйы тура килер әле...

Пуговкин. Уныһы һинең эш. Ә бына хәҙер генә һин ҡунысыңдан теге асҡысты алып бир әле. Минең бында килеүем дә тап шуның өсөн.

Ямалетдин *(аптырап)*. Ни эшләп улай ҡапыл ғына асҡыс кәрәк булды икән Пуговкинға?

Пуговкин. Пуговкинға түгел, ротаға. Һалдаттар асҡысты Мәскәүгә ебәрергә ҡарар иттеләр. Һуғыш бөттө, Берлин ҡапҡалары асылды, беҙгә ни кәрәге бар хәҙер уның?

Ямалетдин. Мәскәүгә ни кәрәге бар?

Пуговкин. Һи, иптәш. Уның бик кәрәге бар. Көнбайыш сиктән Дон далаларына, Дондан Берлин аръяғына барып еткән асҡыс бит ул. Алып барған кешеләре кемдәр һуң? Разведчиктар!

Ямалетдин. Минеңсә, ротала ҡалдырырға ине асҡысты. Ситкә ебәреүе йәл.

Пуговкин. Беҙ бит уның бөтә тарихын яҙып, просто Мәскәүгә генә түгел, Мәскәүҙәге музейға уҡ ебәрәбеҙ. Уҡыһындар, белһендәр әйҙә. Бәлки, ысындан да, теге ҡарттың олатаһы, анау ваҡытта Берлинды алғанда ҡулға төшөргәндер уны, белеп булмай. Был турала үҙебеҙҙең уйҙы яҙмаҡсыбыҙ. Ҡайҙа, тиҙ генә биреп ебәр әле?

Ямалетдин. Улай Мәскәүгә үк булғас, минең ҡаршылығым юҡ. *(Ҡунысынан асҡысты сығара һәм бирә.)* Мә, ебәрегеҙ!

Пуговкин. Шулай, брат, был асҡыс ҡуныста саҡта беҙҙең алда әжәл үҙе ҡалтырап тора ине. Йә, һау бул! *(Китә.)*

Ямалетдин. Һау бул. *(Пуговкин алыҫлаша.)* Әй, ҡара әле, Пуговкин, теге яҙыуға минең исемде лә индерегеҙ инде шунда.

Пуговкин *(алыҫтан)*. Ярар!

Людмила менән бер хәрби ҡыҙ өйҙән нимәлер күтәреп сыға. Ҡыҙ нәмәләрен ҡуя ла шунда уҡ кире инеп китә.

Людмила. Ямалетдин.

Ямалетдин *(ҡапыл һөйәлеп торған еренән әйләнеп)*. Әү генә, Людмила!

Людмила. Ҡырҡ эш ҡырылып ята, һин ҡулдарыңды ҡаушырып һөйәлеп тораһың. Ултырғыстарҙы сығарып бөтөрҙөңмө?

Ямалетдин. Бөтөрҙөм, Людмила.

Людмила. Улайһа, табынды рәтләй тор. Өйгә инеп йөрөмәһәң дә ярар.

Ямалетдин. Мәжлес законы буйынса, аяҡсы кеше йыйын ваҡ-төйәк нәмә менән сыуалмай ҙа ул. Минең эш — табын ҡарау.

Людмила. Ямалетдин!

Ямалетдин. Әү, Людмила!

Людмила. Ниндәй ул бөтмәҫ-төкәнмәҫ әү ҙә әү? Әйт исмаһам берәй һүҙ.

Ямалетдин. Әйтер һүҙҙәр бар ҙа бит...

Людмила. Ҡуй, улай алдан әҙерләнгән һүҙ булмаһа, әйтмә.

Ямалетдин. Шулайҙыр тип шикләнгәйнем, тәки дөрөҫ булып сыҡты.

Людмила. Нимә дөрөҫ булып сыҡты?

Ямалетдин. Уйлаған уйым. Егет уйһыҙ буламы ни? Йүгәнле, эйәрле ат йөрөр, Иҙел тиклем дәрт йөрөр, ти, егет йөрәгендә.

Людмила. Ул егет, ат йөрөткәнсе, берәй ҡыҙ йөрөтһә йөрәгендә, тағы ла һәйбәтерәк булыр ине.

Ямалетдин. О, егет йөрәге! Бөтә донъяны йөрөтә ул егет йөрәге. Тик аңламайҙар ғына уны...

Ҡапҡанан Заһир, Сәләх, Фәйзи инәләр. Людмила өйгә йүгерә.

Зaһир. Был егет — Ямалетдин Мофтахов.

Ямалетдин. Һаумыһығыҙ, ағайҙар. *(Күрешәләр.)*

Зaһир. Баштараҡ атын ҡарарға, ҡайышын ҡыҫып быуырға яратмай ине, хәҙер, күрәһегеҙ, һыу һөлөгө кеүек егет булып китте. Миҙалдар ғына күпме үҙендә!

Ямалетдин. Улай күҙгә терәп маҡтағас, оялта ла ул.

Зaһир. Аяҡсы кеше оялып тормаҫҡа тейеш.

Фәйзи. Бәй, Зaһир, аяҡсы мин инем дә баһа.

Зaһир. Замандар ҙа, аяҡсылар ҙа алмашыналар, дуҫтар. Бөгөн һеҙ Сәләх менән ҡунаҡтарһығыҙ. Иң алыҫтан килгән иң яҡын ҡунаҡтарһығыҙ.

Сәләх. Ниһайәт, дуҫтар, беҙ үҙебеҙҙең табандарыбыҙ аҫтында дошман ерен һиҙәбеҙ. *(Аягын күтәреп баҫа.)* Бына ул ер. Теге ваҡыт, Зaһир, минең һүҙҙе бүлдергәйнең, хәтереңдәме?

Зaһир. Хәтеремдә. Теләһәң, хәҙер әйтеп бөтөр.

Сәләх. Ул саҡта мин әйтергә теләгән һүҙ хәҙер иҫкерҙе инде.

Фәйзи. Мин Вена парламенты эргәһендә суйын бағаналарҙағы ҡара свастикаларҙың ергә ҡолап төшөүен күрҙем. Шул көндө Вена урамдарында халыҡ тантанаһының сиге юҡ ине. Был беҙ алып килгән тантана, беҙ башҡарған эштең һөҙөмтәһе тип аңланым мин.

Сәләх. Бик күп парламенттар өҫтөнән ҡолап төштө ул свастикалар, улар урынында азатлыҡ байраҡтары елберләй. Беҙ ҡаҙаныҡ ул байраҡтарҙы, дуҫтар!

Зaһир. Тимәк, беҙ бөгөн туй үткәрергә тулыһынса хаҡлыбыҙ. Шулай итеп, туйҙы минән башлап ебәрәбеҙ. Ә унан һуң һеҙҙең нәүбәт, егеттәр. Ҡарағыҙ уны, эште оҙаҡҡа һуҙырҙан булмаһын.

Фәйзи. Сәләхтең хәлдәре нисектер, белмәйем, минең үҙемә килгәндә инде, эштәр бик шәптән түгел.

Зaһир. Аңлашылмай, Фәйзи.

Фәйзи. Минең үҙемә лә аңлашылмай ҙа бит, шулайыраҡ булып китте.

Зaһир. Ҡалайыраҡ булып китте?

Фәйзи. Минең Фәрихә кейәүгә сыҡҡан, ниндәйҙер коммерческий директорға тиме шунда; әйҙә, пар күгәрсендәр кеүек, гөрләшеп йәшәһендәр. Ҡыҙғанмайым да, асыу ҙа килмәй. Тик бер аҙ ғәрләнәм, егеттәр. Тау тик-

лем тойғоларымды йылдар буйына һаҡлап йөрөттөм... Бына хәҙер рәхим ит.

Сәләх. Ә һин ғәрләнмә, ул үҙе хурланһын!

Заһир. Эйе, был йылдарҙа кешеләр үҙҙәренең көстәрен дә, йомшаҡлыҡтарын да йәшерә алманылар.

Фәйзи. Ҡуйығыҙ, егеттәр, бөгөнгө шатлыҡҡа бындай ваҡ нәмәләрҙең шәүләһен төшөрмәйек. Минең мөхәббәтемдең шулай бөтөүе мине кәмһетмәй. Бәлки, ул мөхәббәт тә булмағандыр.

Сәләх. Ысындан да, бөгөнгө көндә күңелһеҙ нәмәләр тураһында иҫкә алмайыҡ...

Фәйзи. Беҙ һинең менән бергә шатланырға теләйбеҙ, Заһир! Уттарҙы, һыуҙарҙы кисте һеҙҙең мөхәббәт! Әгәр, ниндәйҙер мөхәббәткә һәйкәл ҡуйырға кәрәк, тиһәләр, мин һеҙҙең мөхәббәтте күрһәтер инем.

Заһир. Беҙҙең мөхәббәт улай һәйкәл ҡуйырлыҡ түгел, әлбиттә, ләкин ошо көндө күреүем менән бик бәхетлемен мин. Бик бәхетлемен мин, дуҫтарым! *(Икеһенең уртаһына инеп, муйындарынан ҡосаҡлай.)* Өсәүләшеп бына ошолай яҡын йәшәһәк ине.

Сәләх. Беҙ шулай йәшәр өсөн һуғыштыҡ һәм еңдек.

Фәйзи. Ауырлыҡ һуғышта ғына булмай. Бынан һуң да, әгәр берәйебеҙгә ҡыйынлыҡ килһә, ул ошо өс елкәгә төшһөн.

Ҡапҡанан Горячев инә. Уның һул ҡулы аҫылған.

Горячев. Еңгән нәфрәттең һәм мөхәббәттең байрамы менән ҡотлайым һеҙҙе, яугир дуҫтар! Минеңсә, был һуғышта шул ике нәмә — нәфрәт һәм мөхәббәт еңде. *(Күрешә.)* Капитан Горячев.

Заһир. Ә былар башҡа фронттарҙан килгән ҡунаҡтар, минең балалыҡ дуҫтарым.

Горячев. Һеҙҙең менән танышыуыма бик шатмын. *(Ямалетдинға табан килә, Ямалетдин уға яҡынлаша. Ҡунаҡтарға.)* Бына ошо егет мине үлемдән ҡотҡарғайны, дуҫтар.

Ямалетдин, смирно баҫып, честь бирә.

*(Ҡунаҡтар эргәһенә килә.)* Әйҙәгеҙ, үҙегеҙҙе Тыуған илдән килгән папирос менән һыйлайым. *(Кеҫәһенән папирос сығара.)*

Сәләх. Тәмәкеләренә тиклем сүбәк бит, әй, бынау буржуйҙарҙың.

Горячев. Еңеүселәр киң күңелле була, тиҙәр. Шайтан белһен, минең йәнем иремәй. Юҡ, мин еңелгән дошманды ла ғәфү итә алмайым: намыҫ ҡушмай, ҡоралдаштар. Бөтәһен онотһам да, һуғыш ҡырында ятып ҡалған дуҫтарҙы, иптәштәрҙе онота алмайым. Өҙөлөп ҡалған ҡулымды ла оноталмайым мин, дуҫтар.

Фәйзи. Һеҙ, әлбиттә, һуғышта ҙур бәләгә осрағанһығыҙ, капитан Горячев, ҡулһыҙ ҡалғанһығыҙ, ләкин бит...

Горячев. Ләкин бит Горячевтың йыры йырланып бөтмәгән. Мин ҡулһыҙ көйө академияға уҡырға китәм.

Заһир. Горячевтың ҡулы булмаһа ла, йөрәге пар ҡанатлы уның. Йылдар үткәс, күрерһегеҙ, бына тигән сулаҡ генерал булып китер әле үҙе.

Горячев. Генералға уҡ етмәһәм дә, барыбер яҡынлашырмын. Мин тыумыштан хәрби кешемен. Һеҙ тыныс хеҙмәткә ҡайтырһығыҙ, ә мин поста ҡалырмын... Үҙенең әсеһе менән дә, сөсөһө менән дә яҡшы был донъя, шуның өсөн дә ул тыныс булырға тейеш.

Сәләх. Шулай ҙа, егеттәр, йән тыныслығы өсөн генә булһа ла, мылтыҡтарҙы таҙартып ҡуйырға онотorға ярамай.

Ямалетдин. Ағай, ағай, ана генерал үҙе килә, башҡа ҡунаҡтар ҙа эйәргән.

Егеттәр һикереп торалар, ҡапҡа эргәһенә киләләр. Генерал һәм тағы ике офицер инә.

Генерал. Хәйерле көн, иптәштәр! Ҡунаҡтар ҙа килеп еткәндәр икән, тағы бер ҡат һаумыһығыҙ! *(Күрешәләр.)* Ҡайҙа Гөлшат, Людмила? Табынды биҙәй торған башҡа гөлдәр ҡайҙа?

Заһир. Хәҙер сығалар, иптәш генерал. Ямалетдин, барсы, булмаһа, йүгереп инеп сыҡ.

Ямалетдин. Улар төҙәнәләр, иптәш генерал. Миңә инеп йөрөмәҫкә ҡушылды.

Генерал. Зарар юҡ, сыҕырҙар, өлгөрөрбөҙ, иртәгә бит һөжүмгә түгел.

Шул арала ҡунаҡтар баҡса буйлап таралышып китәләр.

Заһир. Ултырығыҙ, иптәш генерал.

Генерал. Рәхмәт. Ҡайһы берәүҙәр, аяҡ өҫтөндә хаҡлыҡ юҡ, тиһәләр ҙә, аҙыраҡ баҫып торайыҡ әле. Шулай бит, Мофтахов!

Ямалетдин. Әлләсе, иптәш генерал, аяҡ өҫтөндә лә хаҡлыҡ барҙыр.

Генерал. Барҙыр, тиһеңме?

Ямалетдин. Бар, иптәш генерал, бар. Мин Дон буйынан Берлин аръяғына тиклем почти йәйәүләп килдем. Ләкин, Ямалетдин нахаҡ эш эшләне, тип берәү ҙә әйтә алмаҫ...

Генерал. Дөрөҫ, Мофтахов. Иң ҙур хаҡлыҡ аяҡ өҫтөндә. *(Ямалетдинға ентекләп ҡарай.)* Һай, һай, һинең күкрәк туп-тулы икән дә баһа! Былар гимнастерканы бик баҫып төшмәйме һуң?

Заһир. Үҙеңде ауылға ҡайтҡас хәситәле Ямалетдин тип йөрөтмәһәләр ярай ҙа.

Ямалетдин. Һи-и, һалдат миҙалдан туямы ни ул? Хәситә тимәгәйҙәре әллә нимә тиһендәр, ауылға ҡайтҡас, барыбер шуларҙы сылтыратып, бер бейеп алырмын әле. *(Пауза.)*

Өйҙән йүгерешеп Гөлшат, Людмила, тағы ике ҡыҙ сыға. Гөлшат аҡ күлдәк кейгән, башҡа ҡыҙҙар хәрби кейемдә.

Людмила. Атаҡайым, иптәш генерал да килеп еткән. Беҙ уралабыҙ ҙа уралабыҙ, уралабыҙ ҙа уралабыҙ.

Гөлшат. Иптәш генерал беҙҙе ғәфү итһен инде, һаумыһығыҙ!

Генерал. Һаумыһығыҙ, күгәрсендәрем, юҡ, күгәрсендәрем түгел, ыласындарым минең! *(Ҡыҙҙар генералды һырып алып иҫәнләшәләр.)*

Людмила. Ҡыҙҙарға ыласын тигәнде ишеткәнем юҡ ине әле.

Генерал. Күрәһең, быға тиклем ыласын тип әйтерлек ҡыҙҙар булмағандыр. *(Ҡарана.)* Йә, Кинйәкәев, ҡунаҡтар килеп бөттөмө?

Заһир. Эйе, иптәш генерал, килә алғандарҙың бөтәһе лә килеп бөттө.

Генерал. Улай булғас, бында саҡыр халыҡты.

Заһир. Хәҙер. *(Ҡунаҡтарға.)* Йәгеҙ, ҡунаҡтар, өҫтәл эргәһенә яҡынлашығыҙ. Ә һеҙ, ҡыҙҙар, табындың япҡысын аса башлағыҙ.

Генерал. Табынды ашыҡтырмайыраҡ торорға мөмкин...

Заһир *(аптырап)*. Нимә бар, иптәш генерал?

Генерал. Шикләнмә, Кинйәкәев. Беҙҙең мәжлес бүленмәҫ. Бөтә ҡунаҡтар ҙа бындамы?

Горячев. Бында.

Генерал. Һеҙҙең шатлығығыҙҙы тағы ла тулыраҡ иткем килә, йәштәр. Мин Кинйәкәев менән Гөлшатҡа хөкүмәтебеҙҙең бүләктәрен килтерҙем. Иң һуңғы һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн бүләкләнделәр улар. Был юғары бүләктәрҙе тапшырыу өсөн бынан да тантаналыраҡ көн булмаҫ. Кинйәкәев, Гөлшат, бындараҡ килегеҙ.

Заһир менән Гөлшат килә, башҡалар үҙҙәре үк сафҡа теҙелеп алалар.

Генерал *(бер офицерға)*. Николай Сергеевич, знактарҙы миңә бирегеҙ әле.

Офицер ике кескәй тартманы бирә.

СССР Верховный Советы Президиумы исеменән капитан Кинйәкәевкә Ҡыҙыл байраҡ ордены, лейтенант Янбаева Гөлшатҡа Ҡыҙыл Йондоҙ ордены тапшырам. *(Икеһенә лә ордендарҙы тапшыра һәм ҡулдарын ҡыҫа.)*

Заһир. Советтар Союзына хеҙмәт итәм!

Гөлшат. Советтар Союзына хеҙмәт итәм!

Горячев. Бүләк ҡотло булһын, Заһир! *(Ҡулын ҡыҫа.)* Ҡотло булһын бүләк, Гөлшат!

Бөтә ҡунаҡтар ҙа бүләкләнеүселәрҙе ҡотлайҙар.

Фәйзи. Ҡана, һуғышта алған һуңғы орденыңды күкрәгеңә үҙем ҡаҙайым, Заһир.

Людмила. Ә мин, Гөлшат, һинең орденыңды туй күлдәгеңә үҙем ҡаҙайым. Ниндәй бәхетлеһең һин, әхирәтем минең!

Генерал. Хәҙер өҫтәл эргәһенә рәхим итергә мөмкин. Башҡаса минән тотҡарлыҡ юҡ.

Заһир. Ҡәҙерле дуҫтар, хөрмәтле иптәштәр! Һәр кем үҙе теләгән урында ултырһын. Түңәрәк табындың түре юҡ.

Ултырыша башлайҙар. Шул саҡ Людмила Ямалетдинды етәкләп өйгә алып инә.

Сәләх. Түңәрәк табындың түре юҡтыр, бәлки. Ә түңәрәк донъяның түре бар икән, иптәштәр. Донъяның түре — ул беҙҙең бөйөк Ватаныбыҙ, Советтар Союзы. Тик ошо табынды ана шул түрҙә үткәреп булманы.

Генерал. Ватаныбыҙҙың фатихаһы беҙҙең менән, туғандар.

Ултырышып бөтәләр. Бер нисә урын буш ҡала.

Был урындарҙың хужалары ҡайҙа?

Заһир. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре бөтөнләй килә алмаҫтар инде, иптәш генерал.

Генерал. Һәләк булғандар беҙҙең йөрәктәрҙә урын алғандар. Ләкин сафта ла, табында ла уларҙың урындары буш булырға тейеш түгел. Саҡырығыҙ табынға тере ҡалғандарҙы.

Горячев *(тора)*. Мин тере ҡунаҡтар алып киләм. *(Сыға.)*

Ямалетдин — самауыр, Людмила эсенә ике сәскә һалынған стакан тотоп сыға.

Ямалетдин. Ротаның самауырын онотоп ҡалдыра яҙғанбыҙ. Әйҙә, йырлап ултырһын шунда. *(Өҫтәлгә ултырта.)*

Людмила. Бынан дүрт йыл элек Заһир менән Гөлшаттың туй табынында ошондай уҡ ике зәңгәр сәскә

ултырған булған... Бөгөн өҫтәл өҫтөнә мин бына был сәскәләрҙе ҡуйям. Былар бүтән сәскәләр, әлбиттә. Тормошта бер нәмә лә ҡабатланмай, тиҙәр. Ләкин һулыған сәскәләр урынына яңылары үҫә. Быны һәр кем белә. *(Өҫтәлгә ҡуя.)*

Бер офицер. Был инде ике йәш бәхеттең гүзәл символы була торғандыр. Бик нәфис.

Сәләх. Бынан дүрт йыл элек теге сәскәләрҙе мәрхүм шағир Мәлих алып ҡуйғайны өҫтәлгә. Был юлы ул килә алманы. Һуғыш яланында ятып ҡалды. Ләкин уның ошо туйға арналған шиғыры килде бында. *(Пауза.)* Әгәр иптәш генерал һәм ҡунаҡтар рөхсәт итһә, мин иптәшемдең шул яҡты уйҙарын әйтеп бирер инем.

Генерал. Людмила, Мофтахов, һеҙ нимә баҫып тораһығыҙ? Бынау йәнәшә урындарға ултырығыҙ.

Людмила менән Ямалетдин йәнәшә ултыра. Горячев, Пуговкин, тағы бер разведчик инә. Ултырышалар.

Людмила *(Сәләхкә)*. Көтәбеҙ.

Генерал *(Сәләхкә)*. Ҡунаҡтар һеҙҙе бик шатланып тыңлаясаҡтар, иптәш лейтенант.

Гөлшат. Уҡы, Сәләх. Аяҙ күк кеүек, керһеҙ ине ул шиғырҙы яҙған кешенең күңеле.

Заһир. Уҡы, Сәләх, һине һис кем, һис нәмә бүлдермәҫ.

Сәләх. Мәлих шулай тигәйне:

Мин килтерер инем бүләк итеп
Был табынға гөлдәр туғайын,
Тоноҡ шишмәләрҙең сылтырауын,
Һауалағы һабан турғайын...
Мин килтерер инем ҡояштың да
Эҫе нурҙар сәскән бер мәлен,
Һәм килтерер инем еләҫлеген
Аҡ болоттан төшкән шәүләнең...
Мин килтерер инем...
Дуҫ-иштәрем!
Һеҙҙең өсөн бит был киң йыһан!
Әйтерһең, ер оҙаҡ йылдар буйы
Туйҙы ҡотлар өсөн йыйынған.

Ошо ерҙә икәү ғүмеренең
Бергә атлап киткән юл башы.
Мин теләйем, йөрәк дуҫтарымдың
Бәхет, шатлыҡ булһын юлдашы.
Хәтәр елдәр иҫә ҡалғанда ла,
Күңелдәрҙе һөрөм япмаһын,
Һәм йөрәктәр тәүге күрешеүҙең
Йылылығын мәңге һаҡлаһын.

Генерал. Бокалдар тултырылғанмы, иптәштәр?!

Горячев. Бокалдар тулы, иптәш генерал.

Генерал. Мин өс кенә һүҙ әйтәм: туй дауам итә!

Бөтәһе лә *(бокалдарҙы сәкәштерәләр)*. Туй дауам итә!

*Шаршау*

*1947*

# ЯҢҒЫҘ ҠАЙЫН

*Өс шаршаулы драма*

ҠАТНАШАЛАР:

Мырҙахан Шәүкәтов — 55 йәштә
Зөләйхә Иштуғанова — 50 йәштә
Гәрәй Хаҡов — 37 йәштә
Тимербулат Арсланов — 45 йәштә
Гөлбәдуан — ҡартайған ҡарсыҡ
Шаһи Туҡтамышев — 20 йәштә
Мәликә — пожарник, 32 йәштә
Солтан — 20 йәштә
Сулпан — 25 йәштә
Хәйҙәр — 27 йәштә
Көнбикә — 23—24 йәштә
Ҡотлыев — 45 йәштә
Шәүәли — 55 йәштә
Фәйрүзә — 18 йәштә
Егеттәр, ҡыҙҙар, колхозсылар.

Ваҡиға 1950 йылда бара.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе картина

«Яңғыҙ ҡайын» колхозының идараһы. Түрҙә — председатель өҫтәле, ишек төбөндәрәк өҫтәл өҫтөндә ҡалын папкалар һәм

счет тора, унда счетовод ултыра булырға тейеш. Шәүәли яңғыҙ. Консерва ҡалайына сәскәләр ултыртып, председатель өҫтәле янына килә. Алыҫта һалмаҡ ҡына тимергә һуғалар.

Шәүәли *(сәскә тотҡан ҡулын бер күтәреп, бер төшөрөп һанай)*. Бер... ике... өс... дүрт... биш... алты. Сәғәт алтыны ла һуҡты — үтә бит был ғүмер, әй, үтә бит... *(Шиғри хистәргә бирелеп, сәскә еҫкәп тора.)* Председатель ҡорҙаштың күңеле йомшармаҫмы тип, ошо кәнсиргә көн дә сәскә ҡуям. Юҡ, йомшармай... Әҙәм балаһының сәскә еҫенән рухы асылып китә торғайны. *(Тағы сәскә еҫкәй.)* Бар ине замандар, ай, бар ине. Мырҙахан бажа менән беҙ табындарҙа балды ла сәкәштермәй эсмәй торғайныҡ. Ил башы булып оҙағыраҡ тороу килешеп етмәне, ахыры, ҡорҙашҡа. Әллә нисек ҡырыҫланыбыраҡ китте тегеләй. Балдыҙ ҙа донъя ҡуйҙы шул... *(Председатель урынына ултырып уйға тала.)*

Мәликә инә. Ул йыуан ғына, йомро ғына бисә, ыҡсым ғына кейенгән, аяғында — итек. Шәүәли уның ингәнен һиҙмәй.

Мәликә. Шәүәли ағай!

Шәүәли ҡапыл һиҫкәнеп урынынан тора ла, өндәшеүсенең Мәликә генә икәнен күреп, кире ултыра.

Шәүәли. Ә, Мәликә ҡәрендәш! Ни йомош? *(Быны председателгә оҡшатып әйтә.)*

Мәликә *(һуҙып)*. Ата-аҡ! Үҙең саҡырып киткәнһең дә баһа...

Шәүәли *(хәтерләп)*. Эйе, эйе, шулай ине шул. Әле, иҙелеп уйға талып ултырғанда, хәтерҙән сығып киткән.

Мәликә. Ниндәй уйҙар төштө ул тиклем баштарыңа, Шәүәли ағай?

Шәүәли. Ғүмер тураһында уйлайым, ғүмер. Уйлаһаң, уйылып китерлек бит, Мәликә ҡәрендәш...

Мәликә *(ултыра)*. Ғүмер үтә шул, Шәүәли ағай. Ерҙә йөрөһәң дә үтә, пожар каланчаһында торһаң да үтә.

Шәүәли. Һин дә һөйләнең һүҙ. Пожарҙа тороуыңа әле йыл да тулмаған. Ел йотоуҙан башҡа эшең бармы?

Бына мин, исмаһам, ун биш йыл алмашһыҙ поста торам. Эҫе тимәйем, буран тимәйем, иртә тимәйем, кис тимәйем, йөрөйөм дә йөрөйөм. Ун биш йыл, ә? Арыумы? Арыу шул! Һин әле еләк кеүек ҡыҙ инең, мин был посҡа баҫҡанда. Хәҙер малайҙарың етеп килә.

Мәликә *(һүҙҙең оҙаҡҡа һуҙыласағын һиҙеп, кеҫәһенән бәйләй башлаған ойоғон ала, йомғағын кире һалып, бәйләргә тотона)*. Атай юҡ тип тормайҙар, үҫә бирәләр.

Шәүәли *(һаман үҙенекен һөйләй)*. Хәтерендәлер инде. Баштараҡ председателдәр бер ҙә сыҙаманы бит. Алмашынды ла алмашынды, алмашынды ла алмашынды. Хәҙер Мырҙахан ҡорҙаш менән икәүләп нығынып алдыҡ буғай инде. Ун биш йыл. Ә үҙем һаман шул көйө, бөп-бөтөн, төп-төҙөк.

Мәликә. Һиңә нимә булһын?

Шәүәли. Бәлә ағас башынан йөрөмәй, ҡәрендәш, әҙәм башынан йөрөй. Кисә Миңзифа ҡарсыҡ, ҡомғанға абынып, аяғын имгәтте бит. Шуның кеүек...

Мәликә. Һин инде, Шәүәли ағай, ҡомғанға абынып ҡына йығыла торған бәндә түгел.

Шәүәли. Түгел, Мәликә, түгел. Мин әле...

Мәликә. Һин мине һөйләшеп ултырырға ғына саҡырғайныңмы, Шәүәли ағай? Улайһа, әйҙә минең каланчаға менеп һөйләшәйек. Донъя ла күберәк күренә унан.

Шәүәли *(урынынан ҡапыл һикереп тора, етди төҫ ала)*. Һиңә срочный задание бар, Мәликә. Хәҙер үк ала бейәне ек тә көн эҫеһенә тиклем бер юл утынға барып ҡайт. Теге яҙ киҫкән ҡайын утынын тейә.

Мәликә. Ни эшләп бынау уттай июль сислаһында утын кәрәк булды икән кәнсәгә?

Шәүәли. Кәнсәгә түгел. Утынды Ярулла ҡартҡа илтеп ауҙар.

Мәликә. Бара торғас, әллә ни уйлап сығараһың, Шәүәли ағай. Нисек итеп мин каланчанан китәйем, ти.

Шәүәли. Хәҙергә Шакир үҙе генә тороп торор. Иртәнсәк пожар булмай ул. Ҡайҙа күргәнең бар таң менән пожар сығарғанды, ә?

Мәликә. Шәүәли ағай...

Шәүәли. Председатель исеменән бойороп әйтәм! Ярулла ҡарттың утыны бөткән, тип торамсы. Председатель үҙе беләлер бит инде. Приказ уныҡы.

Мәликә. Мырҙахан ағай ҡушҡас, һүҙе лә башҡа... И эше лә башҡа...

Шәүәли. Эйе. Бар, бар. Ҡулың ҡалмаҫ, сауап булыр үҙеңә.

Мәликә. Ә ул-был булып ҡуйһа...

Шәүәли. Ҡуймаҫ. Үҙем яуап бирермен.

Мәликә. Һин бирерһең дә ул.

Шәүәли *(йомшарып)*. Мәликә ҡәрендәш, быҒаса ат егеп бөткән булыр инең инде.

Мәликә. Егермен дә, китермен дә. *(Урынынан тора, ишеккә бара.)*

Шәүәли. Әй, туҡта әле! Һин һалғылап ҡына ҡайтма. Үҙемә тип уйлап, ҡайырып тейәп ҡайт, ҡара уны, Ярулла ҡартҡа үҙем барып ҡарармын.

Мәликә. Мин эште илке-һалҡы эшләй белмәйем, бер тотонорға ғына кәрәк миңә, тотоноп алһам, емерәм генә мин уны. *(Ҡапыл етеҙ сығып китә.)*

Шәүәли. Дәүләт хеҙмәте ауыр хеҙмәт шул. Уны үҙ башына төшкән кеше генә белә. Бына бит бер юл утынға ебәреү өсөн генә лә күпме аңлатыу, төшөндөрөү кәрәк әҙәмгә... *(Етди төҫ менән яңынан өҫтәл артына ултыра, бармаҡтары менән өҫтәлгә шаҡый.)*

Ашығып, Шәүкәтов инә. Ул урта йәштәрҙәге олпат кеше, башына ҡара эшләпә, аяғына итек кейгән. Тура үҙ өҫтәле эргәһенә үтә.

Шәүкәтов. Шәп кенәме, Шәүәли?

Шәүәли. Арыу ғына әле, бажа.

Шәүкәтов эшләпәһен һалып, өҫтәл тураһындағы ҡаҙауға элә, эшләпә төшөп китә. Шәүәли тиҙ генә йүгереп барып, эшләпәне яңынан элә, Шәүкәтов ултырғысына ултыра, терһәге менән консерва ҡалайындағы сәскәне ауҙара. Сәскәне алып ҡарап тора ла, ситкә ташларға иткәндә, Шәүәли тотоп ҡала.

Шәүкәтов. Ҡартайып бөткән көйөңә шул сәскә менән булашыуыңды ҡуйыр инең инде, Шәүәли.

Шәүәли. Бынау хуш еҫтән әҙәм туямы, ҡорҙаш?

Шәүкәтов *(счетовод өҫтәленә күрһәтеп)*. Счетовод ҡайҙа?

Шәүәли. Бөгөн фермала һауынсыларға контроль — шунда китте.

Шәүкәтов. Ә һин ниҙәр ҡыйраттың?

Шәүәли. Һинең приказдарҙы үтәп йөрөнөм. Шәмсиҙе дегет алырға станцияға ебәрҙем — бер. *(Бармағын бөкләй.)* Мәликәне утынға ебәрҙем — ике, тимерлектән анау йоҙаҡты төҙәттереп ҡайттым — өс... *(Бәләкәс кенә шкафҡа элengән ҙур йоҙаҡты күрһәтә.)*

Шәүкәтов. Теге агрономды алырға Туҡтамышев районға киттеме әле?

Шәүәли. Китте. Таң менән үк өшкөрөп ебәрҙем.

Шәүкәтов. Кәрәкмәгәнгә ашығырға һин шәп инде.

Шәүәли. Ниңә, ҡорҙаш, машина ебәрергә кисә кисен үҙең приказ бирҙең бит.

Шәүкәтов *(ҡулын һелтәп)*. Хәйер, барыбер инде, киләһе бәндә булғас, килә бирһен. Тик беҙҙең бәләкәй колхозда ул агроном нимә генә ҡыйратыр икән инде. Унан башҡа ла ҡыштырлап ятҡан көн ине бит әле, Шәүәли, ә?

Шәүәли. Знамы.

Шәүкәтов. Шәүәли!

Шәүәли. Әү.

Шәүкәтов. Хәҙер үк көрән атты эйәрлә лә бесәнселәр янына сап. Сводка алып ҡайт. Нимә эшләптер кисә бирмәнеләр. Сабирға инеп, газеталар алып сыҡ. Тиҙ йөрө.

Шәүәли. Мин хәҙер, ҡорҙаш! *(Сығып йүгерә, ишек алдында Гөлбәдуан ҡарсыҡ менән бәрелешә.)*

Гөлбәдуан инә. Ул муйынына ҙур тегәр еп һапламы аҫҡан.

Гөлбәдуан. Ярабби! Арбалы кеүек йөрөмәһәңсе. Бынау Шәүәлиҙе! Әҙәм тапай яҙҙың бит. Күҙенә аҡҡара күренмәй бының.

Шәүкәтов *(тиҙ генә өҫтәл эргәһенә килеп ултыра)*. Эһем...

Гөлбәдуан. Нимә эһелдәп кенә ултыраһың? Әйтер инең шуға: алдын-артын ҡарап йөрөһөн!

Шәүкәтов *(башын күтәрмәй генә)*. Ни йомош, Гөлбәдуан еңгә?

Гөлбәдуан. Мин һиңә йомош һорап килмәнем, әгәр әйттерәһең килһә.

Шәүкәтов. Хуш, ҡунаҡҡа килһәң, ултыра ҡал.

Гөлбәдуан. Ҡунаҡҡа ла түгел, мин һинең менән ысынлап алып әрләшергә килдем әле. Анау тоҡтар мәсьәләһе уйыңа кереп сыҡҡаны бармы һинең?

Шәүкәтов. Ниндәй тоҡтар?

Гөлбәдуан. Ниндәй тоҡтар тип ултыра бит әле! Иген тоҡтары, арыш, бойҙай, һоло, тары — бына шуларҙы һалырға.

Шәүкәтов. Ҡыҫыр көйөк менән көйөп йөрөйһөң, еңгә, тиһәм, хәтерең ҡалыр.

Гөлбәдуан. Тороп тор әле! Бөгөн-иртәгә тигәндәй, ураҡҡа төшөргә торабыҙ. Бөтә колхозда ни бары етмеш тоҡ бар. Шулай, етмеш. Ҡобра ҡарсыҡ менән миңә калдаушигың ямап, әҙерләп ҡуйырға ҡушты шуларҙы. Яманыҡ. Тағы бармы, тигәс, бөтәһе шул, ти. Ни эшләп бөтәһе шул ғына булһын, тим, мин әйтәм. Нимәгә етә ул етмеш тоҡ? Нимәгә етә, ә? Түҙмәнем, Ҡобра ҡарсыҡты эйәрттем дә, иртәнге һалҡында баҫыуға барып, игендәрҙе тағы бер ҡат ҡарап ҡайттым. Собханалла, күҙ теймәһен! «Партизан» менән «Түңәрәк»текенән ҡайтышыраҡ булһа ла, игендәр бик күркәм. Етмеш тоҡ менән эшкә индереп буламы ни шул ашлыҡты, ә? Әйтеп ҡара әле?

Шәүкәтов. Яйыраҡ һөйлә, еңгә, яйыраҡ. «Партизан» менән «Түңәрәк» хаҡында ла саманан сыҡма.

Гөлбәдуан. Тороп тор әле! Ҡобра ҡарсыҡ менән икәүләп тағы калдаушикка барҙыҡ, эйе, барҙыҡ. «Председатель иптәш үҙе беләлер әле», — тип тик тора ул нәмәң. Ҡобра ҡарсыҡ йонсоп ҡайтып китте. Мин бына һиңә килдем, нимә әйтерһең шуға? Йә, әйт!

Шәүкәтов. Минме, мин шуны әйтермен: һеҙ мине үҙегеҙгә баш итеп ҡуйғанһығыҙ икән, мин үҙем белермен инде, еңгә. Яманмы-яҡшымы, дөрөҫөн әйткәндә, яман да түгел — мин етәксе бит әле. Бөтә колхозды етәкләп алып барған мин түгелме ни?

Гөлбәдуан. Артыңдан этәргәс, алдан бармай ни сараң бар? Ана ҡул арбаһы ла, этәреп йөрөткәс, алдан бара.

Шәүкәтов. Еңгә! *(Тора.)* Етте. Минең юҡ-барҙы тыңлап торорға ваҡытым юҡ. Мин етәксе кеше, аңлайһыңмы етәксенең нимә икәнен?

Гөлбәдуан. Бик аңлайым.

Шәүкәтов. Аңлаһаң, телеңде тый.

Гөлбәдуан. Тыймам! Үҙебеҙ яһап ҡуйған көршәк һин. Үҙебеҙ элеп ҡуйған анау эшләпә һин. Арыу сағы ла бар ине ул эшләпәнең. Туҙанын гөпөлдәтеп ҡаҡмағас ни. Үҙебеҙ ғәйепле.

Шәүкәтов. Етте, еңгә, етте! Артыҡ шашып киттең.

Гөлбәдуан. Артыҡ та түгел, кәм дә түгел!

Шәүкәтов. Туҡта, туҡта, тим, еңгә! Ай, әттә! *(Өҫтәл һуға, шул саҡ ҡаҙауҙағы эшләпә төшөп китә. Шул уҡ ваҡытта тышта автомобиль сигналы ишетелә.)* Килде! *(Тәҙрәгә бара.)*

Гөлбәдуан. Машина килер ҙә китер. Тоҡто онотма! Минең наказ шул! *(Сыға.)*

Гәрәй Хаҡов менән шофер Шаһи Туҡтамышев инә.

Гәрәй. Бының кеүек дыуамал кешене элек: «Арба менән ҡуян ҡыуған», — тиҙәр ине. Был шәпле шофер минең бригаданың пар ерендә йөк машинаһы менән көпә-көндөҙ ҡуян ҡыуып йөрөй. Үҙең ултырып йөрөгән машинаны ҡыҙғанмаһаң, үҙеңә икмәк ашатҡан ерҙе ҡыҙғаныр инең аҙыраҡ. Ерҙе!

Шәүкәтов. Туҡта әле, кем... Гәрәй, агроном ҡайҙа?

Гәрәй. Агрономда ҡайғыһы бар ти беҙҙең шоферҙың! Таң менән баҫыуҙа ҡуян ҡыуып йөрөй бит был.

Шаһи. Һеҙ, иптәш Гәрәй, факттарҙы боҙоп күрһәтәһегеҙ. Һеҙҙең информация буйынса, мин специально баҫыуға ҡуян ҡыуырға барғанмын булып сыға... Бында айырма ҙур.

Шәүкәтов. Агроном ҡайҙа, тип һорайым мин һинән? Ә һин: «факт» та «информация».

Шаһи. Барҙым, киткән, агроном киткән.

Шәүкәтов. Ҡайҙа киткән? Икенсе колхозға ебәргәндәрме?

Шаһи. Безгә киткән — «Яңғыҙ ҡайын»ға.

Шәүкәтов. Рәтләп кенә, әҙәмсә генә аңлатып бир әле.

Шаһи. Шул. Дүртенсе скороста ғына, ҡойон уйнатып, районға барып индем. Күрһендәр, мин әйтәм, «Яңғыҙ ҡайын» машинаһының ҡалайыраҡ йөрөгәнен. Тормоштан артта ҡалған кешеләр аттар шәплеге менән маҡтаналар. Беҙ, мотор кешеләре, машина менән маҡтанабыҙ. Кемдең моторы шәп тарта, шуның даны арта...

Шәүкәтов. Ай-һай-һай, күп һөйләйһең, ҡустым! *(Ҡырҡа.)* Йә рәтләп кенә аңлат, йә яҡшы саҡта тай бынан!

Шаһи. Шул. Барып еттем. Ә агроном, мин килгәнсе, «Партизан»дың теге иҫке машинаһына ултырып киткән. Ул машина тырылдап ҡайтып еткәнсе әле...

Гәрәй. Шул шатлыҡтан һин ҡуян ҡыуырға тотоноп киттең инде!

Шаһи. Иптәш бригадир, ҡуян бер эпизод ҡына бит ул минең ҡайнап торған тормошомда. Ә һеҙ шуға күсәк күтәрәһегеҙ.

Шәүкәтов. Ҡайнатырмын әле мин һинең тормошоңдо.

Шаһи. Мырҙахан ағай, иптәш председатель! Эш бит былай ғына булды. Мин кире ҡайтҡанда баҫыу аша ғына ҡайттым. Күрәм бер заман, алда, әрем төбөндә, бер һоро нәмә ҡыймылдай. Ҡараһам, ҡуян. Туҡта әле, мин әйтәм, быны ҡурҡытайым, тим. Прямо машинаны ҡуян өҫтөнә табан борҙом. Шунан ҡуян баҫыуға тороп сапты. Ул саба, мин ҡыуам, ул саба, мин ҡыуам. *(Онотолоп китә.)* Ер, һөрөлгән булһа ла, тигеҙ. Һәләк шәп саба, ҡәһәрең... Шунан ни, прямо арыш ыҙанына килеп сыҡҡанбыҙ. Инде тапаттым, инде тапаттым тигәндә генә бына иптәш Гәрәй күреп туҡтатты. *(Шаһи һөйләгәндә, Шәүкәтов онотолоп, мауығып тыңлай.)*

Гәрәй. Шаһи туған, бит машина менән шаярыуың беренсе ҡат ҡына түгел. Бик шашып киттең. Һиңә үгеҙ менән бесән ташырға тура килмәгәйе әле.

Шаһи. Миңәме? Үгеҙгә ултыртып, йәш ғүмеремде заяға үткәрергә теләйһегеҙме, иптәш Гәрәй? Резонна түгел. Юҡ, иптәш Гәрәй, мин мотор кешеһе, минең тарихи урыным кабинала.

Шәүкәтов. Артыҡ дулама әле, мотор кешеһе. Дыуамаллығың бик күптән бирле сикәмә тейә ине. Түҙемлек бөттө. Бөгөндән үк машинаға ҡағылаһы булма. Яҡупов бер үҙе генә эшләр. Ерҙә йөрөп ҡара саҡ ҡына. Приказ шул.

Шаһи. Киҫтең ҡанаттарымды, иптәш председатель, ике ҡанатымды бер юлы киҫтең. Аңлайһығыҙмы ни һеҙ скоросты! Мин осорға яратылғанмын, үрмәләй алмайым.

Шәүкәтов. Үрмәләрһең. Ҡалайыраҡ ҡына үрмәләп ятырһың әле.

Шаһи. Юҡ, иптәш председатель, тормошта үрмәләп йәшәп булмай инде. Мин киләсәккә йәһәтерәк барып етергә теләйем.

Гәрәй. Машинала дыуамал йөрөү генә шәп йәшәү тигән һүҙ түгел әле ул, Шаһи туған.

Шәүкәтов. Бына һин, үгеҙҙә йөрөп, шәп йәшәп ҡара.

Шаһи. Һеҙ автомобилдән ҡыуып төшөрһәгеҙ ҙә, мин самолет кабинаһына ултырасаҡ кеше. Их, аңлайһығыҙмы ни һеҙ мотор йөрәген! *(Сыга.)*

Гәрәй. Яҡшы шофер ул. Машинанан уны ваҡытлыса ғына алып торорға кәрәк.

Шәүкәтов. Үҙәгенә үткәнсерәк йөрөһөн әле. *(Пауза.)* Һаташалар бит шул мотор менән. Бөтәһе лә мотор ҙа мотор...

Гәрәй. Хәҙер мотор менән һаташып ҡына йәшәй торған заман түгел. Бөтә тормошто тартып бара торған көс ул мотор.

Шәүкәтов. Эйе, киләсәктә шулай булыр. Ә хәҙергә, минең ҡара аҡылымса...

Гәрәй. Ниңә һин, Мырҙахан ағай, бөтә эште лә шул ҡара аҡылыңа ғына ҡораһың әле?

Шәүкәтов *(асыуланып)*. Һеҙҙе икмәк ашатҡан шул ҡара аҡыл түгелме ни әле? Эйе, минең ҡара аҡылымса, был йылдарҙа ғына комбайн кертмәй ҙә еңеп сығырбыҙ. Ерҙе һөрөшөп бирҙеләр. Унынына рәхмәт. Рәхмәтенә өҫтәп күмәртәләп натуралата ла түләрбеҙ. Ә урып йыйыуҙы инде үҙебеҙ ҙә еңербеҙ, тим. Эйе, мин шулай уйлайым.

Гәрәй. Уҙған йыл да шулай еңдек бит. Сентябрҙә бойҙай урып бөтөрҙөк, декабрҙә ашлыҡ һуҡтыҡ. Шул еңеү буламы? Быйыл, Мырҙахан ағай, комбайнһыҙ эш барып сыҡмай.

Шәүкәтов. Сығыр. Мин аяғына баҫҡанды, түшендә шыуғанды баҫыуға ҡыуасаҡмын. Башаҡлап йыйҙырырмын мин ул игенде.

Гәрәй. Әле лә бит инде сабый балаларҙы, мәктәп ишегенән сығыу менән, баҫыуға ҡыуабыҙ. Дүрте тулмаған атты екһәләр, һин бит донъя емерәһең, ә ун бер, ун ике йәшлек балаларҙы утауға үҙең ҡыуаһың.

Шәүкәтов. Һинеңсә, бөтә колхозды курортҡа ебәрергә кәрәктер, бәлки.

Гәрәй. Мин әле балалар хаҡында әйтәм. Һин миңә яуап бир. «Партизан», «Таң», «Социализм байрағы» балалары, бөтә тирә-яҡ балалары йәй буйы лагерҙарҙа, экскурсияларҙа, походтарҙа йөрөп ял иткәндә, ни өсөн беҙҙең балалар шуларҙан мәхрүм булырға тейеш?

Шәүкәтов. Әйттем бит инде, коммунизм булғас, барырҙар.

Гәрәй. Ә коммунизмды уларға кем төҙөп бирер? Ҡөҙрәтме?

Шәүкәтов. Тәрәнгә керәһең, ҡустым.

Гәрәй. Киләсәк хаҡында беҙгә лә тәрәнерәк уйларға ваҡыттыр.

Шәүкәтов. Һеҙ уйлағанда, мин ситтә генә ҡарап торормонмо?

Гәрәй. Ҡарап ҡына тора алмаҫһың, һиңә лә уйларға ла, эшләргә лә тура киләсәк.

Шәүкәтов. Бик елләнмә әле, ҡустым... *(Тыныс.)* Беҙҙең ауылдан дүрт яҡҡа дүрт юл сыға. Ҡала юлы менән китһәң, Торна ҡыуағы бар, Турғай юлы менән китһәң — Сәләм талы, тау юлы менән китһәң — Юлсы ташы, ә Митерәй юлы менән китһәң, Себенле күл бар. Бына шулар араһында «Яңғыҙ ҡайын» тигән колхоздың ерҙәре ята. «Яңғыҙ ҡайын» тигән колхоздың Мырҙахан Шәүкәтов тигән председателе бар. Ул — мин. Төшөндөңмө?

Гәрәй. Хәҙер төшөндөм.

Шәүкәтов. Күптән ваҡыт.

Гәрәй *(көлөп)*. Их, Мырҙахан ағай! Ҡалай боронғо замандарҙы хәтерләтеп ебәрҙең һин...

Шәүкәтов. Көл-көл, ләкин барыбер бер мәхәлләлә ике мулла булмай.

Гәрәй. Ләкин, Мырҙахан ағай, Юлсы ташы ла, Сәләм талы ла беҙҙең тормоштоң сиктәре түгел.

Шәүкәтов. Теләһәң нимә әйт, ҡустым, «Яңғыҙ ҡайын»дың сиктәре шунда.

Гәрәй. Бәлки, «Яңғыҙ ҡайын»дың сиктәре лә унда ғына ҡалмаҫ. Бер ваҡыт кешеләр килерҙәр ҙә Юлсы ташын соҡорға тәгәрәтеп төшөрөрҙәр. Себенле күлдең ситрәмен тракторҙар аҡтара башлар...

Шәүкәтов. Төшөнөп етмәйем. Ғашиҡ булған малай кеүек, уратып һөйләйһең.

Гәрәй. Юҡ, уратмайым, Мырҙахан ағай. Мин иртәгеһе тураһында, күршеләр менән бергәләп ҡорасаҡ тормош тураһында һөйләйем.

Шәүкәтов. Аҡыллы башың менән аҡылһыҙ кеше һүҙен ҡабатлайһың: «Түңәрәк» председателе хыяли Арсланов һүҙҙәре бит был. Ҡуй, ҡустым, юҡты. Ағымдағы эштәр тураһында кәңәшләшәйек.

Гәрәй. Ағымдағы эштәр эсендә генә ағып барһаҡ, бик алыҫ китә алмабыҙ.

Шәүкәтов. Мин ашыҡмайым... *(Ҡыҙып.)* Был турала һүҙ ҙә бөттө, тип иҫәпләйем мин. Нөктә төрттөм ошонда. *(Бармағы менән өҫтәлгә төртә.)*

Пауза.

Гәрәй *(тыныс)*. Хәтерендәлер, Мырҙахан ағай, 28-се йылды мин Мортаза байҙа ялсылыҡта йөрөй инем. Һин бер көндө килдең дә, мине бай ҡулынан тартып алып, Йылға башы ауылына уҡырға илтеп ҡуйҙың. Юлда барғанда, беҙгә ер һөрөп яткан трактор осраны. Һинең атың, тракторҙан өркөп, тулап китте лә аяғын имгәтте. Ә трактор үҙ эшен һаман эшләй бирҙе.

Шәүкәтов. Мин күрһәткән изгелектәрҙән хәтереңдә бары шул ғына, имгәнгән ат тояғы ғына, тороп ҡалдымы ни?

Гәрәй. Юҡ, Мырҙахан ағай, һин миңә яҡшылыҡтар күрһәттең, уларҙы мин онота алмайым. Бына шуға ла һинең өсөн борсолам мин.

Шәүкәтов. Йә-йә, әйтеп бөтөр.

Гәрәй. Әйтәм. Әйтмәй йән түҙмәй. Хәҙер үҙең ана шул тракторҙан өрккән атыңды хәтерләтеп ҡуяһың. Һин бит ундай түгел инең.

Шәүкәтов. Һин дә, мин теге саҡта Мортаза йортонан елтерәтеп алып сыҡҡанда, былай түгел инең. Күп ҡайтыш инең...

Гәрәй. Мин малай инем, ә һеҙ ул саҡта колхоз ойоштороп йөрөй инегеҙ. Һиңә һоҡланмаған, һинең менән ғорурланмаған әҙәм юҡ ине бит ауылда. Ғәҙел дә, кеселекле лә инең һин, Мырҙахан ағай. Ә хәҙер үҙең үк кешеләргә ниңәлер шикләнеп ҡарайһың. Ни булды һиңә?

Шәүкәтов. Бәлки, һин төшөндөрөп бирерһең. Төшөндөрөргә оҫтаһың бит.

Гәрәй. Әгәр үҙең генә төшөнә алмаһаң, күмәкләп төшөндөрөп бирергә лә тура килер.

Шәүкәтов *(эске әрнеү менән)*. Һин әлегә миңә указ түгел!.. *(Оҙаҡ пауза.)*

Хәйҙәр инә.

Хәйҙәр. Һаумыһығыҙ!

Гәрәй. Һаумы, Хәйҙәр!

Шәүкәтов. Ни йомош?

Хәйҙәр. Шул иҫке йомош инде.

Шәүкәтов. Ярай, өйҙә һөйләшербеҙ.

Хәйҙәр. Юҡ, атай, был бит өй эше түгел.

Шәүкәтов. Өй эше булмаһа, мин һиңә бит кешеләрҙе ағастан яһап бирә алмайым. Юҡ, кеше юҡ!

Хәйҙәр. Мин мәсьәләне официаль ҡуям һинең алда, парторг Гәрәй иптәш! Ниндәй ҡараш ул, иптәштәр? Бына өс көн инде бер силос ямын тултырырға кеше бирмәйһегеҙ. Ферма мөдире генә, мин генә, яуаплымы ни быға?

Гәрәй. Нисек улай? Районға бит: «Силос һалыу планын тултырҙыҡ», — тип сводка бирелде түгелме һуң, Мырҙахан ағай?

Шәүкәтов. Бирһә, башланған эш — бөткән эш инде ул...

Хәйҙәр. Атай!

Шәүкәтов. Әйттем бит инде. Һин дә сикәмә теймә әле бында. Бар, ҡайтҡас, һөйләшербеҙ.

Гәрәй. Юҡ, бында һөйләшәйек.

Шәүкәтов. Һөйләшегеҙ! *(Тәҙрә эргәһенә китә.)*

Ҡулына ҡағыҙ тотоп, аҡты-ҡараны күрмәй, Ҡотлыев килеп инә. Ул яланбаш. Күҙе менән Шәүкәтовты эҙләп таба ла уның алдына барып баҫа.

Ҡотлыев. Бөгөн үк тотоп йүгәнләргә кәрәк уларҙы. Юҡһа, мәсьәләне тәрәнгә ебәреп ҡуйыуҙары бар. Нимә тигән һүҙ инде был?! *(Ҡағыҙға һуғып ҡуя.)*

Шәүкәтов. Нимә тигәнен, бәлки, һин үҙең беләһеңдер.

Ҡотлыев. Беләм, бик беләм. Беҙҙең авторитетҡа гөпөлдәтеп килтереп һуҡмаҡсы булалар. Барып сыҡмаҫ. Мин үҙемә бирелгән власть көсөн ҡулланырмын, конечно, ҡулланырмын. Мин ул кешене үҙ ҡул аҫтымдағы юлдан йөрөтмәм. Ваҡытлы булһам да, мин юл башлығы.

Шәүкәтов. Йә, ҡулландың ти. Тик нимәгә ҡулланғаныңды төшөнмәйбеҙ бит әле.

Ҡотлыев. Төшөнөрһөгөҙ, иптәш Шәүкәтов, башығыҙға төшкәс, бик төшөнөрһөгөҙ! Һүҙ беҙҙең башҡайҙар тураһында бара. Бына тыңла. *(Шәүкәтов уны тыйырға ымлай, тегә иҫәпкә лә алмай)*. Райсоветҡа һинең өҫтән жалоба. Ишетәһеңме, тыңла!

Шәүкәтов. Туҡта әле.

Ҡотлыев *(ҡул ғына һелтәй)*. Бында үҙ кешеләр. *(Уҡый.)* «Иптәш райсовет председателе! Беҙҙең «Яңғыҙ ҡайын»да уставты боҙоуҙар һаман да бөтмәй. Колхоз председателе Шәүкәтов райондың юл начальнигы Ҡотлыевҡа былтыр быҙаулы һыйыр тотторол ебәргәйне. Ә Ҡотлыев иптәш шуның өсөн юлға тигән ташты, сушилка төҙөгәндә, беҙҙең колхозға биргәйне. Ошо һыйыр әлегә тиклем кире ҡайтарылмаған. Ҡотлыевҡа кем хоҡуҡ биргән?..»

Шәүкәтов. Бөттөмө? *(Ҡотлыев һөйләгәндә, Шәүкәтов бер нисә тапҡыр тирен һөртөп ала.)*

Ҡотлыев. Бында тағы ла бар... Ләкин әле эш уҙмаған, иптәш Шәүкәтов. Был ҡағыҙ райсовет председателе ҡулына эләкмәгән. Унда, райсоветта, бер бәләкәс кенә винтик бар. *(Бармағы менән бороп күрһәтә.)* Ул минең ҡәйнеш, йәғни бисәнең туған энеһе... Бына шул винтик ҡайһылай ҙур бәләнән ҡотҡарып ҡалды бит, ә?! *(Шәүкәтовҡа яҡын килеп.)* Әлбиттә, үҙен буш итмәҫкә тура килер инде.

Шәүкәтов. Уны минән башҡа ла буш итмәҫтәр!

Ҡотлыев. Эйе, эйе. Бына хәҙер ошо кешене табып тәүбә иттерергә кәрәк. Бында уның фамилияһы бар. Утты тоҡанған ерендә һүндереү хәйерле.

Гәрәй *(Ҡотлыевҡа килеп)*. Ҡотлыев иптәш, һеҙҙең ул винтигығыҙ бик яман тутыҡҡан булырға оҡшай. Ундайҙарҙы һүтеп алалар ҙа бик яҡшы итеп майлайҙар. Унан һуң да ғәмәлгә ярамаһа, сүплеккә ташлайҙар.

Ҡотлыев *(ғәжәпләнеп)*. То есть как? Как то есть? Минең ҡәйнештеме? Һеҙ үҙегеҙҙең председателегеҙҙең намыҫына һәм данына шулай ҡарайһығыҙмы?

Гәрәй. Иптәш Ҡотлыев, был жалобаны тикшереү өсөн һеҙҙе райсовет ебәрҙеме?

Ҡотлыев *(бөршәйә төшөп)*. Юҡ, юҡ...

Гәрәй. Партияның район комитеты ебәрҙеме?

Ҡотлыев *(тағы ла нығыраҡ бөршәйә)*. Юҡ.

Гәрәй. Үҙегеҙ белеп килдегеҙме?

Ҡотлыев. Эйе, үҙем белеп килдем.

Гәрәй *(Ҡотлыев ҡулындағы яҙыуҙы ала)*. Шулай булғас, үҙегеҙ белеп, хәҙер ҡайтып та китегеҙ. Кәрәкһә, үҙебеҙ саҡыртырбыҙ.

Ҡотлыев. То есть как? Как то есть? Иптәш Шәүкәтов, быны ҡалай аңларға?

Шәүкәтов. Бына, Хаҡов әйткәнсә... Сәпсеп йөрөмә, бар, хәҙер үк ҡайт та һыйырҙы етәкләп килтер. Ҡалғанын һуңынан аңлашырбыҙ.

Ҡотлыев. Уныһын ҡарап ҡарарбыҙ әле, иптәш Шәүкәтов! *(Башын сайҡап сығып китә.)*

Зөләйхә инә.

Зөләйхә. Һаумыһығыҙ!.. *(Күрешә.)*

Шәүкәтов. Һаумыһығыҙ! *(Бер аҙ ҡарап тора.)* Һаумы, һаумы!.. Зөләйхә Иштуғанова тиһәм, хаталанмаммы икән?

Зөләйхә. Юҡ, хаталанмаҫһығыҙ.

Гәрәй. Зөләйхә апай!

Шәүкәтов. Зөләйхә, ниндәй елдәр ташланы, ниндәй юлдар килтерҙе?

Зөләйхә. Тыуған яҡҡа табан иҫкән елдәр, тыуған яҡҡа ҡайта торған юлдар, иптәш Шәүкәтов!

Шәүкәтов. Онотмаған булһаң, минең исемем Мырҙахан!

Зөләйхә. Исемегеҙҙе онотманым.

Шәүкәтов. Яҡшы, яҡшы... Һин, әлбиттә, ҡунаҡҡалыр инде. Герой булғас та, ауылды онотмағанһың икән әле, бик күркәм.

Гәрәй. Беҙ һеҙҙең турала һуғышҡа тиклем үк күп ишетә инек.

Хәйҙәр. Себерҙәге атаҡлы иген үҫтереүсе Иштуғанованың беҙҙә газетанан ҡырҡып алынған һүрәте лә бар.

Зөләйхә. Һүрәт? Кемдә?

Шәүкәтов. Был минең улым, Зөләйхә!

Зөләйхә. Улығыҙ?

Шәүкәтов. Ғүмер, ғүмер үтә, Зөләйхә.

Гәрәй. Бик матур ваҡытта килеп төштөгөҙ, Зөләйхә апай.

Шәүкәтов. Эйе, бик хуп... Уттай эш өҫтөндә ҡунаҡҡа ебәргәс, председателегеҙ ҙә уңайлы кеше икән.

Зөләйхә. Мин «Яңғыҙ ҡайын»ға бөтөнләйгә ҡайттым.

Шәүкәтов. Бөтөнләйгә?

Зөләйхә. Эйе, бөтөнләйгә.

Шәүкәтов. Рәхим ит, дүрт ҡуллап ҡаршы алабыҙ!

Зөләйхә. Рәхмәт.

Шәүкәтов. Башта туйғансы ҡунаҡ булырһың, унан теләһәң, бригадаға барырһың, теләһәң, бына хатта лабораторияла ла кеше юҡ.

Зөләйхә. Ҡунаҡ булып торорға ла тура килмәҫ әле, тим мин.

Шәүкәтов. Юҡ, башта ҡунаҡ итмәй ярамай.

Гәрәй. Шул тиклем ерҙән ҡайтҡас, ҡунаҡ булмай сарағыҙ юҡ.

Зөләйхә. Мине һеҙгә ҡунаҡ итеп түгел, агроном итеп ебәрҙеләр.

Бөтәһе лә. Агроном?

Зөләйхә. Ниңә ғәжәпләнәһегеҙ?

Шәүкәтов. Уф! Беҙ бит иртәнән бирле агроном көтәбеҙ. Ниндәй яҡшы. Үҙ кешебеҙ. Беҙ татыу йәшәрбеҙ, тип ышанам.

Зөләйхә. Мин дә шулай тип уйлайым.

Шәүкәтов. Йә, һөйлә, һөйлә, Зөләйхә. Ҡасан агроном булырға өлгөрҙөң?

Зөләйхә. Байтаҡ ваҡыт үтте бит. Ауылдан киткәнгә ошо айҙарҙа... Нимә тип мин һеҙгә тарих һөйләй башланым әле? Былар хаҡында башҡа ваҡытта. Үҙегеҙ һөйләгеҙ әле.

Гәрәй. Беҙҙең тормошто күреп белерһегеҙ.

Шәүкәтов. Эйе, байтаҡ заман үтте шул. Бына беҙ ҙә етәксе булып киттек. Беҙгә лә күтәрелергә ваҡыттыр, күрәһең, шулай...

Гәрәй. Зөләйхә апай, үҙебеҙгә төшөгөҙ.

Шәүкәтов. Әгәр тартынмаһаң, Зөләйхә, әйҙә, торорға үҙемә рәхим ит. Беҙҙә тыныс. Өйҙә улым менән киленем дә, үҙем. Әсәләре һуғыш мәлендә вафат булып китте. Рәхим ит.

Хәйҙәр. Ысын күңелдән саҡырабыҙ, Зөләйхә апай.

Зөләйхә. Бөтәгеҙгә лә рәхмәт. Мин Гөлбәдуан еңгәгә туҡталдым. *(Тәҙрә эргәһенә уҙа.)*

Шәүкәтов. Етмәгән ере юҡ шул Гөлбәдуандың!

Гөлбәдуан инә.

Гөлбәдуан. Ҡайнай-ҡайнай самауырымдың һыуы яртыға ҡалды бит инде, Зөләйхә.

Шәүкәтов. Ғүмерле булыр әле!

*Шаршау*

### Икенсе картина

Гөлбәдуандың өйө. Йыйыштырылған йыйнаҡ бүлмә. Тәҙрә төптәрендә — гөлдәр. Гөлбәдуан тоҡто ҡулына кейҙереп, яҡтыға ҡаршы тишектәрен ҡарай. Зөләйхә мөйөштәге өҫтәл эргәһендә ер пландары, схемалар тикшерә.

Гөлбәдуан. Тағы ла ун тоҡ таптыҡ. Иш янына ҡуш булыр. *(Зөләйхәгә.)* Ҡыҙың Мәскәүҙәме инде, Зөләйхә? Бик ҙур ерҙә икән.

Зөләйхә. Эйе, еңгә.

Гөлбәдуан. Ярай, ярай, бик һәйбәт. Мәскәүҙә булыу, тим, Мәскәүҙә лә тик кенә тормайҙыр инде ул.

Зөләйхә. Ҡыҙым унда инженер булырға уҡый.

Гөлбәдуан. Улай икән... Һинең үҙеңдең дә Мәскәүгә барғаның барҙыр әле.

Зөләйхә. Мин Мәскәүҙә дүрт йыл уҡыным. Олоғая башлаһам да, уҡып ҡалайым, тинем.

Гөлбәдуан. Бик һәйбәт, бик һәйбәт. Минең үҙемдең Мәскәүҙә булғаным юҡ шул. Үткән ҡыш беҙҙең ауылдыҡылар Мәскәүгә барғайнылар ҙа, ни эшләптер, Кремлгә инмәй ҡайтҡандар.

Зөләйхә. Юл төшмәгәндер... *(Көлә.)*

Гөлбәдуан. Бер ҙә көлмә. Кеше кеүек грамотный булһаммы, мин үҙем йылына өс булмаһа ла, валлаһи тип әйтәм, ике тапҡыр Мәскәүгә барып, ил башының үҙе менән күҙгә-күҙ, йөҙгә-йөҙ килеп, сәй эсә-эсә һөйләшеп-кәңәшеп ҡайтыр инем — яҙын бер, көҙөн бер. «Яңғыҙ ҡайын» хаҡында кәңәшәһе нәмәләр күп әле.

Зөләйхә. Һоҡланып туя алмайым, Гөлбәдуан еңгә, ҡалай үҙгәргәнһең һин!

Гөлбәдуан. Бөтә тормош үҙгәргәндә, бөтә ғаләм алға барғанда, бер үҙем генә ҡатып ҡалырға таш һүрәт түгелмен дә баһа!

Зөләйхә. Таш та үҙгәрә.

Гөлбәдуан. Быныһы ла хаҡ... *(Тәрән һулап.)* Тик ҡасан ғына үҙем шул Мәскәү яҡтарына барып сығырмын икән? Күңелең менән әллә нимәләр эшләрҙәй булаһың да бит...

Урамда йәштәр бик асыҡ йырлап уҙалар, Зөләйхә ирекһеҙҙән тәҙрәгә килә.

Ҡыр ҡаҙҙары теҙелеп оса
Ҡыйҙаш һыу буйҙарынан,
Әллә ғашиҡ булдым инде,
Сыҡмайһың уйҙарымдан.
Айҙың яҡты нуры төшә
Ауылым ҡырҙарына,
Исемдәреңде ҡушамын
Һағыныу йырҙарыма.

Зөләйхә. Ниңә шулай йыр һәр ваҡыт кешене үҙенә тарта икән? Ҡыҙыҡ. Әле, йәш саҡтағы кеүек, үҙем дә һиҙмәҫтән йыр тыңларға килдем. Беҙҙең йәшлек тә ошо урамдарҙан уҙҙы бит...

Гөлбәдуан. Йәшлеге үтмәгән кеше юҡ та был донъяла, тик үтеү менән үтеүҙең айырмаһы бар. Ҡуй, үткән тураһында һөйләшмәйек. Алда киләсәк бар бит әле.

Зөләйхә. Шулай ҙа бит, еңгә, йөрәктең ҡайһы ерендәлер йәшлек үҙе лә йәшәй. Бына үҙ йөрәгеңде генә ҡапшап ҡара әле.

Гөлбәдуан *(күкрәген тотоп ҡарай)*. Әлләсе... Тик бына шундай ваҡыттарҙа балаларҙың атаһы иҫемә төшөп китә. Ул гел генә, иҙеүҙәрен сисеп, анау Усман түбәгендә бесән саба төҫлө. Ә мин атлай-йүгерә уға ашарға килтерәм. Әллә ҡасандағылар иҫкә төшөп китә шулай.

Зөләйхә. Һәр кемдең дә йөрәгендә ана шундай түбәк йәшәй шул. Иҫеңдәме, Гөлбәдуан еңгә, беҙ теге саҡта, бынан утыҙ йыл элек, партизандар менән киткәндә, оҙатып ҡалғайнығыҙ.

Гөлбәдуан. Ундай саҡтар онотола буламы һуң?

Зөләйхә. Арабыҙҙа Мырҙахан Шәүкәтов та бар ине.

Гөлбәдуан. Ул бит һуңыраҡ китте. Теге саҡта уның барлығын ерле хәтерләмәйемсе. Хата түгелме?

Зөләйхә. Хата түгел. Ул Имәнлек морононда тороп ҡалды. *(Икенсе тәҙрә эргәһенә бара.)* Мин бик йыш әйләнеп ҡараным.

Гөлбәдуан. Йәш саҡта ҡарала шул.

Зөләйхә. Мин отряд менән Себергә тиклем барып еттем. Һуғыштар бөткәс, үҙебеҙҙең отрядтағы бер бик һәйбәт кеше менән яҙмышымды бәйләп, шул йыраҡ

ерҙә ҡалдым. Бик бәхетле булдыҡ беҙ уның менән. Ә был һуғыштан ул ҡайтманы. Ҡыҙым Мәскәүгә китте. Бына тыуған тупраҡ үҙенә тартты. Ләкин мин бында һағыныуҙы баҫыр өсөн генә ҡайтманым. Ошо тупраҡ-ҡа игелегем тейһә ине минең...

Гөлбәдуан. Йөрәгеңдә дәртең, башыңда китап ғилеме булғас, һинән ҡөҙрәтле кеше юҡ, Зөләйхә.

Асыҡ тәҙрәгә тыштан кемдер килә.

Солтан. Гөлбәдуан әбей, Гөлбәдуан әбей, инергә мөмкинме?

Зөләйхә *(һиҫкәнеп)*. Кем был?

Солтан. Мин — Солтан Тимербаев.

Гөлбәдуан. Төн уртаһында, әҙәм өркөтөп тәҙрә тирәһендә йөрөмәһәң, һиңә ишек юҡтыр шул.

Солтан. Ғәфү итегеҙ, миңә ишектән инергә мөм-кинме?

Зөләйхә. Инегеҙ, ин.

Гөлбәдуан. Был — беҙҙең комсомол башлығы Сол-тан, бик үткер бала.

Солтан инә.

Солтан *(фуражкаһын һала)*. Һаумыһығыҙ!

Зөләйхә. Һаумы, Солтан туған!

Солтан. Әле «Түңәрәк»тән ҡайтып килгән уңай ине. *(Зөләйхәгә.)* Партияға инеү өсөн тимерсе Ғилман ағайҙан рекомендация һорарға тип барғайным. Мин үҙем дә тимерсе. Ғилман ағайҙан өйрәнгәйнем. Утығыҙ булғас, керҙем инде. Ғәфү итегеҙ.

Гөлбәдуан. «Түңәрәк»тәр имен генә торалармы?

Солтан. «Түңәрәк» гөрләп тора, Гөлбәдуан әбей. Лавкаларына таҡта сәй килтереп өйгәндәр, тау ҡәҙәр.

Гөлбәдуан. Ана бит ул нисек, лавкасы уңған бул-ғас...

Солтан. Бына үҙеңә, әбей, бер юлы ике таҡта алып ҡайттым. Ҡурғашҡа төрөлгән — иң шәбе. Рәхәт-ләнеп эс тә ултыр. *(Кеҫәһенән алып бирә.)*

Гөлбәдуан *(ала, еҫкәп тора)*. Бөтә өйгә таралып китте бит быныың хуш еҫе. Бына рәхмәт үҙеңә, Сол-танғәли.

Солтан *(китә башлай)*. Эй, әбей, юлда ирмәк хәл булды әле. «Түңәрәк»тән сыҡҡанда ғына, шулай Ҡотлыев тигән кешене осраттым. Теге әйтә миңә: «Эшең мөшкөл бит», — ти. Мин аптырап киттем.

Гөлбәдуан. Анау терпе мыйыҡлы әҙәмме? Әллә ниндәй шауҡымлыға оҡшай ул нәмә.

Солтан. Шул. Ниңә, мин әйтәм. Һин, ти, ниңә улай кеше өҫтөнән жалоба бирәһең, ти.

Зөләйхә *(ҡыҙыҡһыныт)*. Ҡотлыев! Юл начальнигымы?

Солтан. Эйе. Беләһегеҙме ни?

Зөләйхә. Ишеткәнем бар. Шунан?

Солтан. Шунан, ул һөйләй, мин тыңлап торам. Һинең жалобаң хәҙер кем ҡулында, шуны беләһеңме, ти. Шәүкәтов ҡулында, ти.

Зөләйхә. Минең белеүемсә, ул Гәрәй ҡулында.

Солтан. Тимәк, һеҙгә уныһы ла билдәле. *(Ҡырҡа.)* Ярай, Гәрәй иптәш ҡулында ла булһын, ти. Ә ни өсөн ул башта Ҡотлыев ҡулына килеп ингән? Ни өсөн уны Гәрәй иптәш алып ҡалған? Ни өсөн Ҡотлыев миңә бармаҡ янай? Юл буйы шуны уйлап ҡайттым, ә осона сығырға баш етмәне.

Зөләйхә. Жалобанды Ҡотлыевтан алып Гәрәй дөрөҫ эшләгән. Һәм беҙ уны башта бында, «Яңғыҙ ҡайын»да, тикшерергә ҡарар иттек.

Солтан. Ғәфү итегеҙ мине, Зөләйхә апай, ләкин ул Гәрәй иптәш исеменә яҙылмағайны. Һәм, ғөмүмән алғанда, был Шәүкәтовты яҡларға тырышыу булып сыға түгелме?

Зөләйхә. Шәүкәтовты түгел, һеҙҙе яҡларға тырышыу, урындағы кешеләрҙең тауышын урында яҡларға тырышыу булып сыға.

Солтан. Ғәфү итегеҙ, ҡапыл ғына аңлап еткерә алмайым.

Зөләйхә. Үҙебеҙ хәл итә алырлыҡ нәмәләр хаҡында жалоба тотоп, районға йүгереү үҙе үк бер ауырыу түгелме? Минеңсә, ауырыу, яман ауырыу.

Солтан. Мин теләһә ҡайҙа сигнал бирә алам, Зөләйхә апай.

Зөләйхә. Һине ул хоҡуҡтан бераү ҙә мәхрүм итергә теләмәй. Ләкин һин бит сигналсы ғына түгел.

һин, бөтәһенән дә элек, комсорг. Ошо жалобала яҙылған нәмәне комсомол ойошмаһында тикшерҙегеҙме? Партия ойошмаһына мөрәжәғәт иттегеҙме?

Солтан. Юҡ.

Зөләйхә. Идара ултырышында йәки колхоз йыйылышында һөйләнегеҙме был хаҡта?

Солтан. Юҡ, унда башҡа мәсьәләләр ҡаралды.

Зөләйхә. Тура тейҙереү өсөн, ҡыйыҡ атып йөрөү — егетлек түгел, Солтан туған. Бына ошо көндәрҙә үк йыйылыш булыр. Шунда, Шәүкәтовтың йөҙөнә тура ҡарап, бөтәһен дә һөйләп бир. Ә үҙебеҙҙең көсөбөҙҙән килмәгән нәмәләр хаҡында районға ғына түгел, Өфөгә лә барып етербеҙ.

Солтан. Быныһы бик үк еңелдән түгел шул. Беҙ уға бит тура әйтеп өйрәнмәгәнбеҙ. Ҡапыл ғына әллә нисегерәк кеүек.

Гөлбәдуан. Ошо осҡон кеүек егет көйөңә әллә шөрләп төштөңмө, Солтанғәли?

Солтан. Минме, Гөлбәдуан әбей? Юҡ. *(Батырланып.)* Әгәр кәрәк икән, Гөлбәдуан әбей, ярам да һалам. Ярай, Зөләйхә апай, һау булып тороғоҙ. Сәйең бөткәс, тағы ла алып ҡайтырмын, Гөлбәдуан әбей. *(Китә.)*

Гөлбәдуан. Ниндәй жалу ул, Зөләйхә?

Зөләйхә. Шәүкәтов өҫтөнән.

Гөлбәдуан. Улай икән. Мин дә уның менән бөгөн бер аҙ һүҙгә килештем. Ойобораҡ китте ул... Һелкетеп алырға ине үҙен. Һин дөрөҫ әйтәһең: жалу йөрөтөү еңел эш ул!

Зөләйхә. Ҡайтыуыма бер тәүлек тә юҡ әле. Ә Шәүкәтов тураһында байтаҡ һүҙ ишеттем. Шулай яман кешеме ни ул?

Гөлбәдуан. Яман кеше булһа, мин уның менән ирешеп, һүҙ әрәм итер инемме ни? Бынау һуғыш ваҡытында ил алдындағы заданиеларҙы районда беренсе үтәп килгән кеше ул булды, фронт өсөн бына тигән аттар үҫтереп биргән кеше ул булды. Әле самолетына, әле танкыһына тип, күмәртәләп аҡса биргән кеше ул булды. Үрелһә буйы, ҡараһа төҫө, уйлаһа башы бар уның. Әйтәм бит, һелкетеп алырға кәрәк үҙен. *(Пауза.)* Зөләйхә, күҙҙәрең шәйләһә, бынау энәне генә күҙләп бирсе. *(Зөләйхә, алып, энәһен күҙләп бирә.)* Күҙем әллә

ни эшләп китте был йылдарҙа. Элек бер ҙә улай булмай торғайны. Һай-һай, күҙҙәрең бигерәк үткер икән.

Тышта ат килгән һәм «тпру» тигән тауыш ишетелә.

Зөләйхә *(тәҙрәгә ҡарап)*. Бында килә. Был кем тағы?

«Түңәрәк» колхозының председателе Арсланов Тимербулат ишек аса. Уның ҡулында — трубка итеп төрөлгән ҡағыҙҙар, икенсе ҡулында — сыбыртҡы.

Тимербулат. Инергә ярайҙыр бит? *(Ишек төбөндә аяғын ышҡып тора.)*

Гөлбәдуан. Уҙ, уҙ. *(Ҡарап тора.)* Колхоздары «Түңәрәк», туғайында күбәләк, председателе Тимербулат. Һин дә баһа был, Тимербулат, шәп кенә йөрөйһөңмө?

Тимербулат. Эйе, мин. Иҫәнлекме, еңгә? Таныш булайыҡ. *(Зөләйхә менән күрешә.)* Арсланов, «Түңәрәк»тән.

Зөләйхә. Иштуғанова.

Тимербулат. Иҫән килеп еттегеҙме, иптәш Иштуғанова? Мин бер генә минутҡа. Әле районан ҡайтышлай юл төшөп китте.

Гөлбәдуан. Килгән ҡунаҡ минут һанап тормай беҙҙә. Ултыр. Ҡана, мин самауырҙы яңыртып алайым. *(Сыға.)*

Тимербулат. Мин һеҙҙе районда ла эҙләп йөрөнөм. Китеп барғанһығыҙ икән.

Зөләйхә. Мин ашыҡтым шул. Нимә эшләп баҫып тораһығыҙ? Ултырығыҙ.

Тимербулат. Рәхмәт. *(Ҡағыҙҙарын ҡуя.)* Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, бына пландар, идеялар күтәреп йөрөйөм.

Зөләйхә. Яҡшы.

Тимербулат. Үтә яҡшы түгел шул. Кейәү бик көйһөҙ булып сыҡты.

Зөләйхә. Көйөн табырға кәрәк, улай бик ҡәҙерле кейәү булғас.

Тимербулат. Минең үҙемдән генә булмай шул. Яусы кәрәк.

Зөләйхә. Гөлбәдуан еңгәгә әйтеп ҡарағыҙ...

Пауза.

Тимербулат. Шаярыу — шаярыу ҙа, иптәш Иштуғанова. Бөгөн райисполком председателе «Түңәрәк» тураһында һораштты. Ә мин уға әкиәттән башҡа нәмә һөйләй алманым.

Зөләйхә. Әкиәттең дә яҡшыһы була.

Тимербулат. Был шәп әкиәт түгел, шулай ҙа тыңлаһағыҙ, һеҙгә лә һөйләйем.

Зөләйхә. Күптән бирле әкиәт ишеткәнем юҡ ине, һөйләгеҙ.

Тимербулат. Беҙ, иңе-буйы бер ҡолас тигәндәй, бәләкәс кенә өйҙә үҫтек. Үҙебеҙ генә саҡта ҡалай етте шулай ятыр-торор урын табыла торғайны. Ә ҡунаҡтар саҡырғанда, әсәйем табынға кеше һыйҙыра алмай ыҙалана ине. Урһәләнеп йөрөгәндә, ике ҡуллап өйҙөң стеналарын туҡмап ала торғайны: «Ҙурай, исмаһам, ошондай саҡта аҙыраҡ ҙурай!» — ти торғайны ул. Ғәжәп тойола ине шул саҡта миңә әсәйемдең ярһыуы.

Зөләйхә *(көлә)*. Шунан?

Тимербулат. Бына ошо хәл утыҙ-утыҙ биш йылдан үҙ башыма төштө. Эйе, үҙ башыма, «Түңәрәк» колхозының башына төштө. Тормош ҙур талаптар ҡуя, күңел үҫеп китте. Ә «Түңәрәк»тең дәрт бар, дарман юҡ. Ары һуғылаһың, бире һуғылаһың, осорға кәрәк, ә ҡанат йәйеп булмай.

Зөләйхә. Ҡанат йәйеү өсөн киңлек кәрәк шул.

Тимербулат. Бөтә мәсьәләнең үҙәге лә шунда шул, иптәш Иштуғанова. *(Ҡағыҙҙарын аҡтара.)* Бына ҡарағыҙ. Бына түп-түңәрәк булып ваҡ өс бригадалы «Түңәрәк» ултыра. Ә бына ике бригадалы «Яңғыҙ ҡайын» һерәйеп тора. Сәсеүлектәренә күҙ төшөрөгөҙ, сәсеүлектәренә! Ҡораманан тегелгән юрғанмы ни? Ҡалай итеп ошонда әҙәм рәтле сәсеү әйләнеше һәм техника индереп булһын инде? Был уйҙыҡ-уйҙыҡ ерҙәр — беҙҙең көтөүлектәр, тегеләре — «Яңғыҙ ҡайын»дыҡы. Малтыуарлы кешегә, иптәш Иштуғанова, көтөүлек тә, сабынлыҡ та бик ҡәҙерле. Шулар бөтәһе лә үҙҙәре ҡушылырға торғандай торалар бит.

Зөләйхә *(картаға күрһәтә)*. Ә бының тураһында нимә әйтерһегеҙ?

Тимербулат. Был бит *(тәҙрәгә күрһәтә)* ана тегендәге һаҙлыҡ.

Зөләйхә. Эйе.

Тимербулат. Ул хаҡта уйлап еткермәнем әле.

Зөләйхә. Мин ҡайтҡанда тап шул турала уйлап ҡайттым. Бер нисә йылдан бында 300 гектар һаҙлыҡ түгел, иген баҫыуы булырға тейеш. Ә Ҡыйҙаш һыуы хаҡында ни уйлайһығыҙ?

Тимербулат. Эйе, күрә тороп заяға үткәрәбеҙ беҙ Ҡыйҙаш ғүмерен. *(Йәнләнеп.)* Күңелем менән ошо ике планды бергә ҡушып ҡарайым. Күҙ алдыма бөтә Ҡыйҙаш буйының ҙур тормошо килеп баҫа. Ниндәй киңлек, ниндәй иркенлек буласаҡ. Шуларҙы уйлаһаң, хатта тындарың иркенәйеп китә. *(Тәрән итеп һулыш ала.)*

Зөләйхә. Беҙҙең бөтәбеҙҙе лә бер үк нәмәләр елкендерә.

Тимербулат. Ошо елкенеү менән хәҙер үк эшкә күсергә ине. Тик Шәүкәтов менән уртаҡ тел табып булмай. Әле ҡыш уҡ берләшеү тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайным, ул мине саҡ ҡына оккупант тип атаманы.

Зөләйхә. Шәүкәтовтың да, әлбиттә, аңлауы кәрәк, ләкин унан ҙурыраҡ партия ойошмаһы бар, халыҡ бар.

Тимербулат. Халыҡ бар ҙа ул...

Зөләйхә. Ә беҙҙең тормоштағы берҙән-бер эшебеҙ — шул халыҡтың теләгән алданыраҡ аңлау һәм ул теләккә хеҙмәт итеү түгелме?

Тимербулат *(Зөләйхәгә ышаныс менән ҡарап тора)*. Ярай. Мин иртәгә үк, беҙҙең йыйылыш ҡарарын алып, «Яңғыҙ ҡайын»ға киләм. Хәҙергә хушлашайыҡ.

Самауыр күтәреп, Гөлбәдуан инә.

Гөлбәдуан. Яҡшы ниәт менән йөрөйһөң, Тимербулат. Бәрәкәт, ниңә һин улай, ярһыу ат кеүек, тапанып тораһың?

Тимербулат. Китәм инде.

Гөлбәдуан. Ҡуҙғалма ла, нитмә лә, бынау ғүмер эсендә тәү килгән кешене бер сынаяҡ сәйһеҙ ебәрә буламмы һуң?

Зөләйхә. Ысынлап, иптәш Арсланов, сәй эсеп китегеҙ.

Тимербулат. Рәхмәт, башҡа ваҡытта. *(Сыға башлай.)*

Ишекте киң асып, Шәүкәтов инә.

Шәүкәтов. Һаумыһығыҙ! *(Тимербулатҡа.)* Имен йөрөйһөңмө, күрше? Һин ябалаҡ кеүекһең, әй, үҙеңде «Яңғыҙ ҡайын»да төндә генә күреп була.

Тимербулат. Юл төштө шул.

Шәүкәтов. Әле саптарыңдың ҡабырғаларын һәрмәп керҙем, арыу сабаһың, ахыры. *(Зөләйхәгә.)* Йә, Зөләйхә, ҡалайыраҡ һулыш алаһың тыуған ерҙә?

Зөләйхә. Иркен итеп, иптәш Шәүкәтов. Иртәгәнән эшкә лә тотонһам, тағы ла яҡшыраҡ булыр. *(Сынаяҡтар килтереп, сәй табынын әҙерләшә.)*

Шәүкәтов. Эш ҡасмаҫ... Әлегә ял итегеҙ. *(Тимербулаттың ҡулындағы ҡағыҙҙы күрә.)* Грамотный кешенең эше башҡа. *(Алып һүтеп ҡарай.)* Улай икән... Нимә эшләп һин «Яңғыҙ ҡайын» планын да күтәреп йөрөйһөң?

Тимербулат. Ул плаң ғына шул әле...

Шәүкәтов. Әллә тағы «Яңғыҙ ҡайын»дың үҙен күтәреп йөрөр инеңме?

Гөлбәдуан. Өйҙөң йәмен ебәреп, ҡунаҡтан допрос алырға тотонмаһаңсы, Мырҙахан. Ғүмер эсендә ике председатель бер юлы өйгә килеп ингән икән, әйҙәгеҙ, ултырып, татыу ғына сәй эсәйек. Бына өр-яңы таҡтаны башлап ҡына сәй һалдым. *(Икеһенең дә урындыҡтарына һырма һала.)* Ултырығыҙ.

Шәүкәтов *(һырманы төҙәтеп ултыра)*. Ярай, хуш. Ултырҙыҡ. Хәтерең ҡалмаһын, күрше, һорау ғәйеп түгел. Ултыр.

Тимербулат. Мин ашығам, Мырҙахан күрше, тиҙ арала тура үҙеңә киләм, шунда эсербеҙ сәйҙе. *(Китә.)*

Шәүкәтов. Тағы берәй хикмәт сығарырға йөрөй, ахыры, был.

Гөлбәдуан. Ҡаты бәрелмәһәңсе кешегә...

Шәүкәтов. Ул яҡтан һиңә еткереп булмаҫ инде, еңгә.

Гөлбәдуан. Йә, йә, кенә ҡыума, тейешлеһе әйтелгәндер.

Тыштан Тимербулат тауышы: «Гөлбәдуан еңгә, күнәк алып сыҡсы, атты һуғарып алайым»

Хәҙер... *(Сыға.)*

Оҙаҡ пауза.

Шәүкәтов. Зөләйхә.

Зөләйхә. Тыңлайым.

Шәүкәтов. Байтаҡ ғүмер үтеп китте бит, ә? Анау 1935 йылда, ирең менән ҡунаҡҡа ҡайтҡан сағыңда ла, өйҙә була алманым. Ихласын әйткәндә, һиңә күренгем килмәне минең ул саҡта.

Зөләйхә. Ә мин һеҙҙе лә күрермен тип ҡайтҡайным. Һиңәлер бик күргем килгәйне.

Шәүкәтов. Ә бөгөн инде бына мин үҙем килдем. Күңелем тартты тип әйтһәм, килешмәҫ төҫлө — аяҡтарым тартты, Зөләйхә.

Зөләйхә. Сәйегеҙ һыуына.

Шәүкәтов. Зөләйхә! Теге саҡ Ташауар баяры ерендә бергәләп ураҡ урғандағы Зөләйхәгә ҡалай оҡшамағанһың һин. Ә мин ул төбәкте үткән һайын һине хәтерләйем.

Зөләйхә. Мин, Имәнлек моронон үткәндә, бөгөн һеҙҙе уйланым. Хаталанмаһам, һеҙ шунда тороп ҡалғайнығыҙ булһа кәрәк.

Шәүкәтов. Һөйләмә инде тиле саҡтарҙы, Зөләйхә. Шул яҙҙы ғына өлөшөмә тейгән еремде ташлап китергә көсөм етмәне. Шул моронда ине минең ер, ыҙанын атлап сыға алманым... Башҡа юлдан барһаҡ, әллә тороп та ҡалмаҫ инем.

Зөләйхә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә шул бер юлдан, үҙ ыҙаныбыҙҙы аша атлап, алға киттек. Миңә лә бит ер һымаҡ уҡ ҡәҙерле кешене ташлап китергә тура килде. Шул хаҡта уйлағанығыҙ бармы һеҙҙең? Мин һаман да шикләнәм: беҙ әле лә шул ыҙандың икебеҙ ике яғында түгелме икән?

Шәүкәтов. Юҡ, ул ыҙан артта ҡалды. Ул Мырҙахан үҫте, ныҒыны. Мине замана кеше итте. Еӊ һыҙҒанып, колхоз төҙөштөм. Мин, аҡрынлап булһа ла, баҫҡыстан баҫҡысҡа күтәрелә барҙым. Һине колхоз председателе сифатында ҡаршылауыма ла бик ризамын. Оло нәфселе түгелмен мин.

Зөләйхә. Халыҡ күрһәткән ҙур ышаныс, әлбиттә.

Шәүкәтов. Халыҡтың ниндәйе булмай?

Зөләйхә *(барып тәҙрәне яба)*. Ҡайһылай ҡапыл һалҡын төшөп китте.

Шәүкәтов *(урынынан тороп)*. Бөгөн кис, тап һин ҡайтҡан кисте, тәү тапҡыр үҙемде яңғыҙ итеп һиҙҙем. «Ниндәй яҡын кешем, берҙән-бер яҡын кешем бар һуң?» — тип уйлап ултырҙым. Таба алманым. Табылырмы ул, әллә бөтөнләй табылмаҫмы инде?

Зөләйхә. Табылмаһа, ҡыҙғаныс.

Шәүкәтов *(көлөп)*. Ҡыҙғаныуың өсөн дә рәхмәт. Ләкин әлегә мин ҡыҙғаныс уҡ түгелмен.

Зөләйхә. Мин дә һеҙҙең ҡыҙғаныс булмауығыҙҙы теләйем.

Шәүкәтов. Ҡалай йомшаҡ ине һинең күңелең?

Зөләйхә. Йәш алмағас та емеш биргәнгә тиклем йомшағыраҡ була, тиҙәр.

Гөлбәдуан инә.

Гөлбәдуан. Таң һыҙылып килә.

Шәүкәтов. Таң? Ниңә был тиклем етеҙ үтә был көндәр? Хатта таңы ла тиҙ ата.

Гөлбәдуан. Атмай. Ул һин сәй эсеп бөтөргәнде көтөп тормаҫ инде!

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Өсөнсө картина

Колхоз идараһы алды. Ағастар, ағастар төбөндә — буялмаған артлы эскәмйә, һул яҡта — идараға инә торған бейек болдор. Сыбыртҡыһын һелтәй-һелтәй Шаһи Туҡтамышев инә. Ул һикереп эскәмйәнең артына менеп ултыра.

Шаһи *(йырлай)*. Ал итә, итә, итә,
Гөл итә, итә, итә,
Яндарыңа барыр инем
Ял итә... итә... итә...

Их, үгеҙгә ултырып йөрөгәндә бынан да шәберәк йыр йырлап булмайҙыр шул инде. Атлар-атламаҫ, ойоп ҡына бара бит мәхлүгең. Үҙ ҡәҙерен үҙе белә ул. «Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем...» Бына шулай уйлай ул, ҡәһәрең. Эй, ниңә бошонорға? Әле бер көн эсендә генә күпме нәмә уйланым. Үҙемде баштан-аяҡ тикшереп, анализ яһап сыҡтым. «Кем һин, Шаһи?» — тигән мәсьәләне хәл иттем. Әгәр берәй йыл шулайыраҡ йөрөлһә, Шаһиҙың аҡыл эйәһе булып китеүе лә бик ихтимал... или шағир... *(Пауза, башын сайҡап тора.)* Шулай йыуат инде, бахыр, үҙеңде.

Гөлбәдуан инә, ҡултыҡ аҫтында — тоҡтар.

Гөлбәдуан. Бәрәкәт, быны Шаһидулла тиһәм, ҡулында сыбыртҡыһы бар, Шаһидулла түгел тиһәм, бик юғары ҡунаҡлаған.

Шаһи. Минен мин дә.

Гөлбәдуан. Әллә машинаң тыңламай башланымы, сыбыртҡы тотоп тораһың?

Шаһи. Шулайыраҡ шул.

Гөлбәдуан. Булыр, булыр. Үҙең бик миңрәүләнеп китһәң, машина түгел, үгеҙ ҙә тыңламай башлар шул.

Шаһи. Һин бик көлмә лә әле, Гөлбәдуан ҡоҙағый, заманы еткәс, Шаһиҙың тағы ла руль тотоп ултырғанын күрерһегеҙ. Ыласындың да ергә төшкән сағы була бит хатта, белгән кешегә.

Гөлбәдуан. Күрергә насип булһын.

Шаһи. Насип булмаһа, үҙебеҙ насип итербеҙ. Ултыр әле, ҡоҙағый. *(Эскәмйәнән һикереп төшөп, Гөлбәдуанды ултырта.)*

Гөлбәдуан. Эш бик тығыҙ ине бит әле. Әлеге калдаушикты эҙләп йөрөй инем.

Шаһи. Ул юҡ бында.

Гөлбәдуан. Ошонда китте тигәйнеләрсе. Улайһа, нимә ҡылайыҡ икән һуң?

**Шаһи.** Һин, ҡоҙағый, тыңлап тор, мин һөйләйем. Мине юҡһа бүтәндәр аңлап еткермәйҙәр.

**Гөлбәдуан.** Донъя булғас, төрлө кеше барҙыр шул.

**Шаһи.** Бар, бар, ҡоҙағый... Әммә бит, ҡоҙағый, мин мотор өсөн яратылған кеше. Минең тарихи урыным кабинала. Бына ошо кеше хәҙер әрәм булып йөрөй — үҙемде әйтәм.

**Гөлбәдуан.** Бер дәртләнгәс, шулайҙыр шул. Бына мин дә анау тоҡтар менән һаташып сығам. Һис арттырып әйтмәйем, төштәремә керә.

**Шаһи** *(һиҙмәй ҡырҡа әйтеп ташлай)*. Тоҡ — тоҡ инде. Ваҡ мәсьәлә уныһы.

**Гөлбәдуан.** Ни эшләп ваҡ мәсьәлә булһын? *(Тора.)* Тоҡһоҙ ни эшләмәк кәрәк бынау ваҡытта? Һин, Шаһидулла, уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. Юғиһә, хәҙер үк киттем барҙым.

**Шаһи.** Әйтәйек, ҡоҙағый, тоҡ та — кәрәкле нәмә. Иллә-мәгәр, хәтерең ҡалмаһын, ҡоҙағый, машинаға етмәй инде.

**Гөлбәдуан** *(ултыра)*. Бүтән ауыр һүҙ әйтмәҫ булһаң ни...

**Шаһи.** Мине бит әле бындай ябай автомашинанан, ерҙә йөрөй торғанынан, ҡыуып төшөрҙөләр, эйе, ҡыуып төшөрҙөләр. Ә бит мин бер ваҡыт күктә оса торған автомобилде йөрөтәсәк кешемен.

**Гөлбәдуан.** Ярапланды тимәксе булаһыңмы?

**Шаһи.** Яраплан түгел. Ошондай уҡ машина, үҙе осоп йөрөй.

**Гөлбәдуан.** Әлләсе, бер ҙә күргән нәмәм түгел шул.

**Шаһи.** Уны әлегә мин үҙем дә күргәнем юҡ. Иллә-мәгәр, ҡоҙағый, ундай машина бар. *(Онотолоп.)* Уны теләһәң ҡайҙа, хатта ана Ярулла бабайҙарҙың өй ҡыйығына ла, ҡундырып була.

**Гөлбәдуан.** Ай-һай, бер ҙә ишеткән нәмәм түгел шул. Өйөңдә радио булмағас ни. Кит инде, һаңғырау кеше кеүек йәшәйбеҙ.

Шул арала Фәйрүзә инеп тыңлап тора.

**Шаһи.** Ишетеү генә түгел, үҙең ултырып йөрөрһөң әле. Әйтәйек, һинең кесе ҡоҙаң Шаһидулла Туҡтамы-

шев, йәғни мин, кәләш алды, ти. Шул көндө мин, оса торған автомобилгә ултырып ҡына, һинең ҡураңа киләм дә төшәм. Әйҙә, ҡоҙағый, мин әйтәм, туйға рәхим ит!

Гөлбәдуан. Бер ҙә ултырған нәмәм булмағас, башым әйләнмәсме икән?

Шаһи. Әйләнеп торамы һуң? Шунан, һине ултыртып, ҡабат һауаға күтәреләм. Иң элек ауыл өҫтөнән өс тапҡыр әйләнеп сығам, ҡоҙағый ҙа донъя күреп ҡалһын әйҙә, тим. Шунан ғына үҙебеҙҙең өй алдына килеп төшәм.

Гөлбәдуан *(йәнләнеп)*. Ҡалай рәхәт булып китте.

Фәйрүзә. Шаһи, һин хыяли.

Шаһи *(ҡапыл әйләнә)*. Ә? Фәйрүзә?

Гөлбәдуан. Хыяли тимәгәйҙәре, әллә нимә тиһендәр, йәренгә ошо ваҡытҡа мең тоҡ һанап ҡуймаһаммы! Ҡайҙа ғына булды һуң әле шул ҡалдаушик? *(Китә.)*

Фәйрүзә. Эсеңдә йәнең бармы һинең, Шаһи?

Шаһи. Йәнемме, эсемдәме? Барҙыр, тип уйлайым.

Фәйрүзә. Юҡ һинең йәнең! Бына шул. Бынау йәмле йәй айҙарында баштарымды ҡайғыларға һалдың һин!

Шаһи. Ни булды һиңә, Фәйрүзә?

Фәйрүзә. Һорашып тора бит әле. Көн кеүек яҡты йөҙҙәремде төн кеүек ҡараңғы иттең! Таң ваҡыттарында уфтанып уянам.

Шаһи. Арттыраһың, Фәйрүзә, йөҙҙәрең әле лә ал янып тора.

Фәйрүзә. Янһа, хурлыҡтан яна ул... Уйлап ҡараһаң, уйылып китерлек бит... Бынау йәмле йәй айҙарында һөйгән егетеңде автомашина менән ҡуян ҡыуҙырып стена газетаһына баҫып сығарһындар әле! Нисек итеп мин хәҙер баҡсаға барайым да, нисек итеп иптәш ҡыҙҙарыма күренәйем... *(Илай.)*

Шаһи. Туҡта әле, Фәйрүзә, эште ҙурға ебәрәһең бит!

Фәйрүзә. Тулы ай кеүек яҡты өмөттәремде өҙҙөө-өң... Бына көҙ етер, тинем, шул саҡ, үҙебеҙ үҫтергән кәбеҫтәләрҙе һинең машинаға тауҙай итеп тейәп, икәү ҡалаға, колхоз баҙарына, йөрөрбөҙ, тинем...

Шаһи. И һәм йөрөрбөҙ ҙә.

Фәйрүзә. Үгеҙ менәнме?! Дошман тигән бәндәләреңә күрһәтмәһен... Дөрләп янып торған йөрәктәремде бер көн эстәрендә һыуыттың!

Шаһи. Ә? Эш йөрәккә барып тоташты түгелме һуң?

Фәйрүзә. Тоташты шул! Йөрәкһеҙ эш булмай донъяла.

Шаһи. Ә, шулаймы?

Фәйрүзә *(илауҙан туктап)*. Шулай!

Шаһи. Так-так. Улайһа, бына һин әйт әле, ниңә һеҙ, сибәр ҡыҙҙар, егеттәрҙе шәп саҡта ғына яратаһығыҙ? Уларға герой давай ҙа, орденоносец давай, тракторист давай ҙа, шофер давай! Әле, минең дан яңғырамаған саҡта, ниңә пыр туҙаһың? Минең янда кабинала ғына йөрөгәндә арыу ине бит әле, ә?

Фәйрүзә. И-и-и, бер тапҡыр һабантуйға барғанды әйтәһеңдер инде. Битәрләргә лә тотондо.

Шаһи. Кабинала бер ултырыу үҙе бер ғүмер ул. Әле Шаһи ҡыйыш баҫҡайны, тотоноп киттеләр. Ҡуян бит ул бер эпизод ҡына минең ҡайнап торған тормошомда.

Фәйрүзә. Артығыраҡ ҡайнаттың шул.

Шаһи. Һин, Фәйрүзә булһаң, бына шундай ваҡытта Шаһиға шәфҡәт ҡулыңды һуҙып кил, уның яралы йөрәгенә дауа, кителгән күңеленә ямау бул!

Фәйрүзә. Шул ямау булып йөрөргә ҡалды ла инде!

Шаһи. Ә-ә, улаймы? Улай булһа, Фәйрүзә, бөгөн үк, хәҙер үк башымды алып сыҡтым киттем. Әйтһәң, әйтеп ҡал һуңғы һүҙеңде, әйтмәһәң, прощай мәңгегә. *(Китә башлай.)*

Фәйрүзә *(ҡулы менән ишара яһай)*. Шаһи...

Шаһи. Әү.

Фәйрүзә. Китмә!

Шаһи *(оҙон паузанан һуң)*. Шулаймы? Ҡалһам да, һинең өсөн генә ҡалам.

Фәйрүзә. Улай күтәрелеп бәрелмә әле, Шаһи. Бынау йәмле йәй айҙарында һайрашып ҡына йәшәйек, йәме?

Шаһи. Йә.

Фәйрүзә. Шаһи.

Шаһи. Әйт, Фәйрүзә, әйт!

Фәйрүзә. Һин төрлө әкәмәт уйлап сығара торған кеше, эйе бит?

Шаһи. Булғылай ул эш.

Фәйрүзә. Бына һин йәшелсә баҡсаһын һуғарырға берәй нәмә уйлап сығарыр инең. Йәй буйы Ҡыйҙаштан һыу ташып, билдәребеҙ ҡалманы, саҡ ҡына ла ҡыҙғанмайһыңмы ни мине?

Шаһи. Ҡыҙғанам. Бик ҡыҙғанам, Фәйрүзә.

Фәйрүзә. Ҡыҙғанһаң, тап шуның берәй әмәлен.

Шаһи. Их Фәйрүзә, Ҡыйҙаш буйында гөрләп эшләп ултырған электростанцияң булһа ине, ул саҡта мин кнопканы баҫып ҡына баҡсағыҙ өҫтөнә ямғыр яуҙырып ебәрер инем. *(Фәйрүзәнең танауына баҫа.)*

Фәйрүзә. Ул саҡта мин бөгөн һин егеп йөрөгән үгеҙ башы дәүмәле кәбеҫтәләр үҫтерер инем.

Шаһи. Ҡуй, Фәйрүзә, үгеҙ башы килбәтһеҙ нәмә ул!

Фәйрүзә. Шаһи.

Шаһи. Әйт, Фәйрүзә, әйт.

Фәйрүзә. Һине тағы машинаға ҡуйырҙармы икән?

Шаһи. Көн кеүек асыҡ.

Фәйрүзә. Ҡасан?

Шаһи. Яҡын киләсәктә! Ә хәҙер башҡа фронтта эш күрһәтеп алырға кәрәк, Фәйрүзә. *(Йәнләнеп.)* Үҙем дә машинаның ҡәҙерен белер инем.

Фәйрүзә. Шаһи.

Шаһи. Әйт, Фәйрүзә, әйт.

Фәйрүзә. Ҡайғыларым таралып китте бит әле. Иптәш ҡыҙҙарыма барам да әйтәм: «Бер ҙә иҫегеҙ китмәһен, тим, Шаһи һәйбәтләнергә вәғәҙә итте», — тим.

Шаһи. Мин улай уҡ насар ҙа түгел бит әле.

Фәйрүзә. Тағы ла, еще ла һәйбәтерәк булырға, тим.

Шаһи. Еще ла тиһәң, ҡаршылығым юҡ.

Фәйрүзә. Ә һин бойоҡма, Шаһи, йәме. *(Уның башын һыйпай.)* Әтеү бынау йәмле йәй айҙарында миңә ҡыйын була. *(Йырлай, Шаһи ҡушыла.)*

Ал булмай, булмай, булмай,
Гөл булмай, булмай, булмай.
Бер болғанмай, һыу ҙа тонмай,
Болғанмай булмай, булмай.

Шаһи. Фәйрүзә, Гөлфәйрүзә! *(Уның ҡулдарын тоторға уйлай, Фәйрүзә Шаһиҙың ҡулдарына һуғып ҡаса.)* Ҡалай һәйбәт булалар бит ҡыҙҙар... Ә һин? *(Ҡулы менән маңлайын туҡмай.)*

Мәликә инә. Ҡулындағы «Тәмәкене ошонда тарт!» тигән ҙур табличканы эскәмйә янына ҡаҙай. Шаһиға ҡарап тора.

Мәликә. Нимә тултырғандар унда?

Шаһи *(һиҫкәнеп китә)*. Ә? Алтын, ахыры. Бик сыңлап тора.

Мәликә. Шуға оҡшаған... Шаһи, һиңә телдән дә әйтәм: тәмәкеңде ҡайҙа етте шунда тартып йөрөмә, ишетһен уны ҡолағың.

Шаһи. Шул тәмәке менән кесе усаҡҡа бәйләнеп йөҙәттең инде, Мәликә апай.

Мәликә. Бәйләнмәй ни, йәй етһә, һәр тәмәжник, һәр кесе усаҡ, һәр мунса: «Ут сығарам, ут сығарам», — тип кенә тора бит.

Шаһи. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә ул шулай.

Мәликә. Бөтә колхоздың мөлкәте өсөн башың менән яуап биргәс, ҡурҡырһың да шул.

Шаһи. Уныһы правильно, апай.

Мәликә. Шаһидулла туған, анау Миңһылыу килендең мөрйәһе ишелеп төшкән. Үгеҙең көйшәп алғансы, шуны барып әтмәләп бирер инең.

Шаһи. Була ул.

Мәликә. Әйҙә әле, туған. Пожарға ҡаршы көрәштә актив икәнеңде бер күрһәтеп ал әле.

Китәләр. Сәхнә буш тора. Бер аҙҙан, урам ҡапҡаһын киң асып, тирләп-бешеп Шәүкәтов килеп сыға. Ул кеҫәһенән ҙур яулыҡ алып елкәһен һөртә.

Шәүкәтов. Көндәр ҡыҙыулатып китте ҡалай. Кругом ҡыҙа көндәр! Шәүәли, Шәүәли, тим!

Шәүәли *(идаранан сыға)*. Мин бында.

Шәүкәтов. Ниңә бик һүлпән ҡыланаһың? Йүгереп тор, мин әйткәс.

Шәүәли. Ҡайҙа йүгерәйем, бажа?

Шәүкәтов. Мин бында һиңә бажа түгел, председадатель, тулайым әйткәндә, хәҙер бажа ла түгел, балдыҙыңдың донъя ҡуйыуына ла биш былтыр бит инде. Шунан бирле ни эшләп торһон ул бажалыҡ?

Шәүәли. Ғәҙәт, председатель ҡорҙаш, ғәҙәт.

Шәүкәтов. Ташла ул ғәҙәтеңде! Бар, хәҙер үк теге дежурный бәләкәс өҫтәлде бында сығар. Мин ошонда ғына ултырам.

Шәүәли. Хәҙер, председатель ҡорҙаш. *(Идараға инә.)*

Шәүкәтов. Шулай, эштәр ҙурға китергә тора. Анау Арсланов та йөрөй ҙә йөрөй. Тағы шул *(ирония менән)* ҡушылыу, берләшеүҙер инде. Ул килеп еткеләгәнсе, районға тайырға кәрәк...

Кескәй өҫтәл өҫтөнә бер ултырғыс яҡҡырып һалып, Шәүәли сыға.

Шәүәли. Теге кәнсир ҡалайындағы сәскәләрҙе лә сығарырғамы, председатель бажа... ҡорҙаш?

Шәүкәтов. Һеҙҙә сәскә ҡайғыһы. Ҡайҙа ҡояшҡа алып барып ҡуйҙың? Бынау ергә, ҡарама күләгәһенә ултырт. Баш та һуң үҙеңдә, Шәүәли.

Шәүәли. Була, була, ҡорҙаш.

Шәүкәтов *(ултыра. Портфеленән ҡағыҙҙар аҡтарып ала, ҡарай)*. Йә, һал хәбәрҙе, Шәүәли. Һин бөтә ауыл буйлап саба торған кеше. Нимә күрҙең, нимә ишеттең?

Шәүәли. Иҫ китерлек нәмәләр юҡ был арала. Бөгөн иртән сатан Ҡормойҙоң быҙауы тағы баҫыу еренә инеп тотолдо.

Шәүкәтов. Быҙау һорайыммы ни мин һинән?

Шәүәли. Өсөнсө көн Миңзифа ҡарсыҡтың ҡомғанға абынып...

Шәүкәтов. Китте, китте был... Минең турала халыҡ нимә һөйләй?

Шәүәли. Бик ҡолаҡ һалып йөрөнөм, бажа... ҡорҙаш, тик гонаһлы булыр хәлем юҡ, һинең турала бер нәмә лә ишетмәнем. Ниңә, ҡорҙаш, халыҡтан һүҙ ишетәһең килһә, собрание йыйып һөйләт. Мин, һә тигәнсе, халыҡты йөҙ проценты менән йыйып алам.

Шәүкәтов. Уныһы һинең ҡайғың түгел! Бар, тағы бер-ике урындыҡ сығар ҙа эшеңдә бул.

Шәүәли. Мин хәҙер, ҡорҙаш. *(Инеп китә.)*

Шәүкәтов *(оҙаҡ паузанан һуң)*. Бына ғүмер булғас, кешеләр ҡасан килеп осраша. Күңелдең ҡайһы ерелер һаман бысҡып янып тора... Ә ул үҙен бөтөнләй ят кеше итеп тота... Нимә ғәйепле быға — үткән ваҡытмы, улмы, әллә үҙемме? Бит ҡасандыр беҙ уның менән бик яҡындар инек... Нисәмә йылдар буйы мин уны хәтеремдә һаҡланым...

Шәүәли *(ике урындыҡ күтәреп сыға)*. Эй, ҡорҙаш, онота яҙғанмын. Ярулла ҡыҙы сентябрҙә үк «Түңәрәк»тең Мөхәммәтйәр малайына кейәүгә сыға, тип бик асыҡ һөйләйҙәр.

Шәүкәтов. Ә? Бирермен мин уға «Түңәрәк» егетен! Үҙебеҙҙең егеттәрҙең нимәһе ярамаған?

Шәүәли. Ни эшләп йөрөй һуң беҙҙең егеттәр, ә, ҡорҙаш? Шулар урынында үҙем булһам, ҡорҙаш, маҡтана тимә, «Түңәрәк»тең ярты ҡыҙын «Яңғыҙ ҡайын»ға сығарып алып бөтөр инем. Заманында өс ҡыҙ менән йөрөгән егет мин.

Шәүкәтов. Их, күҙ көйөгө. Һин дә һөйләйһең бит.

Шәүәли. Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә, тиҙәр, ҡорҙаш. *(Пауза.)* Эй, ҡорҙаш, тағы ла ҙурыраҡ һүҙҙәр йөрөй.

Шәүкәтов. Тағы нимә?

Шәүәли. «Түңәрәк» әйтә, ти, әгәр «Яңғыҙ ҡайын» риза булһа, тип әйтә, ти, бергә ҡушылыр инек, тип әйтә, ти. Бөгөн иртән уларҙа собрание ла булған, бәлки, баш ҡоҙалар беҙгә лә килеп етер әле. Беҙҙең халыҡта ла имеш-мимеш йөрөй. Тик кешеләр әйтә: «Кантон хәҙрәт ҡалай уйлай икән?» — ти. Һине шулай тиҙәр, председатель ҡорҙаш.

Шәүкәтов. Кантон! Ха-ха-ха... Тапҡандар кантонды! Әйт кешеләргә: «Яңғыҙ ҡайын», йәғни, мин быйылға риза түгел. Ни өсөн мин тиктомалға, һау башыма сир алып, «Түңәрәк»тең йөгөн тартайым ти? Бар байлығыңды бүлеш, уларға бәлә-ҡаза килһә, яртыһын һин күтәр — бына бит мәсьәлә нисек тора.

Шәүәли. Эйе лә баһа, ҡорҙаш.

Шәүкәтов. Эйе шул! Бар йүгер, хәҙер үк Мансур туры айғырҙы егеп, бында килһен. Районға китәм.

Шәүәли. Мин хәҙер, ҡорҙаш. *(Сығып китә лә әйләнеп керә.)* Таҫмалы ҡыҙыл дуғаны егергәме, әллә ағын ғынамы?

Шәүкәтов. Таҫмалы ҡыҙыл дуға егергә ниндәй байрам таптың? *(Ҡулын һелтәй.)* Бар!

Шәүәли. Районға барғанда, элек гел шул таҫмалы ҡыҙыл дуғаны егә инек түгелме ни, ҡорҙаш?

Шәүкәтов. Үҙем беләм. Бар, тиҙәр бит һиңә.

Шәүәли. Хәҙер, хәҙер. Мин ни, мин ни, тик әйтәм генә. *(Китә.)*

Шәүкәтов. Ҡыҙыл дуға, ти... Шәүкәтовтың таҫмалы ҡыҙыл дуға егеп фарсит иткән саҡтары бар ине.

Зөләйхә менән Гәрәй инә. Зөләйхәнең ҡулында — арыш, бойҙай, һоло усмалары.

Зөләйхә. Һаумыһығыҙ, иптәш Шәүкәтов.

Шәүкәтов. Әйҙә, рәхим ит, Зөләйхә.

Гәрәй. Идараны халыҡҡа яҡыныраҡ иткәнһең икән, Мырҙахан ағай.

Шәүкәтов. Көндәр бик бөркөүләнеп китте. Ни эштәр бөтөрөп йөрөү, Зөләйхә?

Зөләйхә. Әле башларға ғына тороу. Бына һеҙҙең менән бик күп нәмәләр тураһында һөйләшәһе, иркенләп кәңәшләшәһе килә.

Шәүкәтов. Кәңәшеп көн итеүҙе мин үҙем дә яратам. Тик бына ағымдағы эштәр бик ҡыҙып китте бит әле. *(Зөләйхәнең ҡулындағы арыш усмаһын ала.)* Ана, арыш та бешеп килә. Ниндәй тулы башаҡтар, ә? Ерҙе әйтәм, йомарт беҙҙең ер.

Зөләйхә. Тап ошо ер тураһында башламаҡсы ла инем һүҙемде. Әле бына беҙ Гәрәй менән «Яңғыҙ ҡайын»дың бөтә баҫыуҙарын тиерлек урап сыҡтыҡ...

Шәүкәтов. Күркәм бит беҙҙең игендәр, һәр бер башағы, сәләмәт сабый бала кеүек, бәүелә-бәүелә уйнап үҫә.

Зөләйхә. Игендәр күркәм, ә шулай ҙа арыш «Түңәрәк»текенән ҡайтыш күренә.

Шәүкәтов. Булыуы ла бик ихтимал. Анау егерме бишенсе майҙағы ямғыр тау буйлап килде лә «Түңәрәк» менән «Партизан» яғына бороллдо ла китте. Беҙ ҡойроғон ғына күреп ҡалдыҡ.

Зөләйхә. Эш бер ямғырҙа ғына түгел. Тупраҡ үҙе бик йонсоуға оҡшай. Беҙҙән ярҙам һәм мәрхәмәт көтә ул.

Шәүкәтов. Ҡулдан килгәнсә, ара-тирә тиреҫтер, көлдөр сығарып һипкеләйбеҙ ҙә бит. Ныҡлап тотонорға ҡул етмәй. Ағымдағы эштәрҙән бер ҙә арынып булмай, Зөләйхә.

Гәрәй. Беҙҙең бөтә эшебеҙ, Мырҙахан ағай, ағымдағы эш. Тик беҙ ағымды йүнәлтә алмайбыҙ, ағымға эйәреп кенә барабыҙ. Һин быны үҙең дә яҡшы беләһең бит.

Шәүкәтов. Туҡта әле. Гәрәй ҡустым, һин әйт әле: «Яңғыҙ ҡайын» кемдән кәм?

Зөләйхә. Улайһа, һеҙ ҙә әйтегеҙ: ә кемдән артыҡ?

Шәүкәтов. Артыҡ булырға бик тырышып ятҡан да юҡ. По крайней мере, бынау ут күрше «Түңәрәк» менән генә бәхәсләшеп була әле. Арырағы мине ҡыҙыҡһындырмай.

Зөләйхә. Ә бына ни өсөн шулай?

Шәүкәтов. «Яңғыҙ ҡайын»дыңмы? Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн, күңеле көр, екһә, бейеп торған аттары, ултырһа, келтерәп торған арбалары бар.

Зөләйхә. Дөрөҫ, ҡасандыр аслыҡҡа һәм яланғаслыҡҡа дусар ителгән кешеләрҙең тамаҡ туҡлығы ла, өҫ бөтөнлөгө лә, әлбиттә, бик ҙур шатлыҡ. Хәҙер ошо кешеләр, арбанан төшөп, ҙур-ҙур машиналарға ултырырға теләй...

Шәүәли йүгереп инә.

Шәүәли. Автомашина менән «Түңәрәк»тәр килә ята, председатель ҡорҙаш!

Шәүкәтов. Арсланов сәй э-с-ер-гә киләлер. Күҙен алартты ла баһа «Яңғыҙ ҡайын»ға был бәндә! Төн йоҡолары ҡасты бит бының!

Зөләйхә. Нахаҡ һүҙ һөйләйһегеҙ, иптәш Шәүкәтов! Дошманығыҙ түгел, дуҫығыҙ килә, бәхәскә түгел,

кәңәшкә килә ул. Бөтә Ҡыйҙаш буйының киләсәге тураһында ялҡынланып янып йөрөй ул кеше.

Шәүкәтов. Төшөнәм, төшөнәм, беҙ ҙә алыҫ киләсәктең килеүенә ышанабыҙ.

Тимербулат, Сулпан инә.

Тимербулат. Ҡунаҡтар килә, ҡаршы ал, күрше! Һаулыҡмы? *(Күрешә.)* Исәнлекме, иптәш Иштуғанова? *(Күрешә. Сулпанды таныштыра.)* Беҙҙең идара ағзаһы, Сулпан иптәш.

Сулпан *(күрешә)*. Сулпан Ҡаһарманова.

Шәүкәтов *(ирония менән)*. Рәхим итегеҙ, иптәш Арсланов, түрҙән уҙығыҙ, иптәш Ҡаһарманова. Бик ваҡытлы йөрөйһөгөҙ.

Тимербулат. Кәйефең көйлө саҡҡа тура килдек, буғай, күрше. Бик асыҡ күренәһең.

Шәүкәтов. Һәләк шәп... Теләһәгеҙ, барығыҙ правлениеға инеп ултырығыҙ.

Тимербулат. Ә үҙең?

Шәүкәтов. Үҙем китәм. Үҙемдең бараһы ерем бар.

Гәрәй. Бараһы ергә һуңыраҡ барырға тура килмәгәйе, Мырҙахан ағай, бәлки, идара ултырышын үткәреү тураһында уйлашырбыҙ.

Шәүкәтов. Хәҙер уйлай алмайым. *(Кағыҙҙарын йыйыштыра)*. Йомошоғоҙ булһа, әйтеп ҡалығыҙ.

Зөләйхә. Иптәш Шәүкәтов, бит кешеләр ут алырға ғына килмәгәндәр.

Шәүкәтов. Тыңлап ҡарайыҡ, улайһа.

Йүгерә-атлай Мәликә инә, уның ҡулында әлеге табличкалар.

Мәликә. Ҡунаҡтар килгән, тигәйнеләр шул. Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар!

Шәүкәтов. Йомошоң булһа, Мәликә, һуңыраҡ һуғылып китерһең.

Мәликә. Минең йомошом Тимербулат ағайҙа. Бындалығын ишетеп килдем. Анау көтөүсе малайҙарыңды тыйыр инең, Тимербулат ағай. Шулар бит урман ситен-

дә торалар ҙа ут яғалар. Нимә ҡарап тора шунда һеҙҙең пожарнигығыҙ? Пожар бит ул...

Шәүкәтов. Шул пожарыңды саҡ ҡына ҡуйып торор инең, Мәликә.

Тимербулат. Яҡшы һүҙең өсөн рәхмәт, килен.

Мәликә. Әтеү!

Шәүкәтов *(ҡунаҡтарға боролоп)*. Йә, тыңлап ҡарайыҡ.

Сулпан. Арсланов ағай менән мине бында «Түңәрәк» колхозының ағзалары ебәрҙе. Бына улар ошондай ҡарар сығарҙылар. *(Сумкаһынан ҡағыҙ алып, Шәүкәтовҡа һуҙа.)*

Шәүкәтов *(ҡағыҙҙы ала)*. Сығарһа ни, ул ҡарар миңә закон түгелдер бит әле.

Тимербулат. Закон түгел, ләкин ул беҙҙең халыҡтың теләге. Беҙ шуны һеҙгә еткерергә килдек. Беҙҙекеләр берләшеүҙе һорай.

Шәүкәтов. Һорай, һорай, имеш. Малайға һөйлә ул һүҙеңде! Һин бик һорап тора торғандарҙан түгелһең бит, Арсланов. Ҡайҙандыр закон табып, ер тигеҙләйбеҙ тип, өсөнсө йыл минең Һыйырбатҡан сабынлыҡты, былтыр Таштүбә буйындағы көтөүлекте киҫеп алдың. Ярай, өнөң тығылһын, тип ҙур тауыш күтәрмәнем. Хәҙер «Яңғыҙ ҡайын»ды бөтөнләй баҫып алырға йөрөйһөңмө? Ни етмәгән һуң һиңә? Өс бригадалы үҙ колхозыңдың ҡайһы ере ярамаған? Исмаһам, нәфсеңде тыйыр инең саҡ ҡына.

Тимербулат. Ауыҙлыҡты тешләйһең, Шәүкәтов, ситкә ҡайыраһың. Теге ваҡытта «Түңәрәк» һинең атайыңдан мираҫ булып ҡалған ерендә түгел, «Яңғыҙ ҡайын» файҙалана алмаған дәүләт ерен алды.

Шәүкәтов. Атайҙан миңә, мираҫ булып, оҙон сыбыртҡы ғына ҡалғанын һин яҡшы беләһең. Ул мираҫты мин һинән ҡыҙғанмаҫ та инем. Ә «Яңғыҙ ҡайын»дың ерҙәрен, малдарын уңға ла, һулға ла таратырға мин ул тиклем үк йомарт түгелмен.

Зөләйхә. Иптәш Шәүкәтов, күршеләр бит беҙгә мал һорап та, ер һорап та килмәгәндәр. Үҙ малдарын, үҙ көстәрен беҙҙең менән уртаҡлашырға тип килгәндәр.

Шәүкәтов. Доходыбыҙ, аҡрынлап булһа ла, арта бара. Кеше малына мохтажлыҡ юҡ, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күреп ятабыҙ.

Гәрәй. Беҙҙә мохтажлыҡ юҡмы, Мырҙахан ағай? Быуа быуырға көс етмәй, клуб һалырға ҡул теймәй, юлдар төҙөргә ваҡыт юҡ, хатта бит бер силос ямын да өс көн буйына тултыра алмайбыҙ.

Шәүкәтов. Шул ғынамы?

Гәрәй. Юҡ, былары ваҡ мохтажлыҡтар әле. Ә иген? Ни өсөн беҙ, йәй буйы ҡара тир түгеп, ун-ун ике центнерҙан артыҡ уңыш үҫтерә алмайбыҙ? Ҡулдан килмәйме? Ҡулдан килер ине, көс етмәй. Ыҙандар тар, машиналар аҙ. Ә ана-ау һаҙлыҡты күрәһегеҙме? Йыл һайын нисәмә мең бот иген батып ҡала бит шунда! Бойҙай үҫтерә торған ер бит ул.

Шәүкәтов. Атайың мәрхүм дә, осоп барған ҡошто тотам тип, ҡулын күккә һона торған кеше ине. Ауыр тупрағы еңел булһын... *(Ҡырҡа.)* Һин дә таптың мәшәҡәт! Донъя яралғандан бирле ятҡан бит ул һаҙлыҡ. Тағы ла шул тиклем ята бирәсәк.

Тимербулат. Ятмаясаҡ, күрше, беҙ ул һаҙлыҡтың аҫтын-өҫкә килтерәсәкбеҙ. Күр ҙә тор бына.

Шәүкәтов. Нәфсе лә һуң үҙеңдә... Барына шөкөр итергә кәрәк, барына.

Гәрәй. Шул һаҙлыҡтағы әкәм-төкәмдәр генә барына шөкөр итһә итәлер, ләкин беҙ, кешеләр, шөкөр итеп кенә йәшәй алмайбыҙ, Мырҙахан ағай!

Шәүкәтов. Миңә төрттөрөүеңме был? Ләкин, Гәрәй ҡустым, һин үҙеңдең икенсе бригаданың бригадиры ғына икәнлегеңде лә онотоп ебәрмә.

Гәрәй. Минең бригадир ғына түгел икәнемде һин яҡшы беләһең. Беҙ һинең менән бер партия ойошмаһында торабыҙ.

Шәүкәтов. Минең партияға хилафлыҡ эшләгәнем юҡ буғай әле.

Гәрәй. Партияға хилафлыҡ эшләмәү менән маҡтанырға ла, тынысланырға ла урын юҡ. Партияға, халыҡҡа мөмкин тиклем күберәк яҡшылыҡ эшләргә кәрәк. Беҙ һинән бына шуны талап итәбеҙ.

Шәүкәтов. Ҡыҫҡаһы, минең кәңәш шул: был һөйләшеүҙе бер йылға кисектереп торорға. Мин бит бер-

ләшеүгә төптө ҡаршы түгелмен. Районда беҙҙең кеүек колхоздар байтаҡ әле. Ана шулар тәүҙә, берләшеп, беҙгә өлгө күрһәтһендәр. Шунан һуң беҙ ҙә уйлашырбыҙ.

Сулпан. «Яңғыҙ ҡайын» менән «Түңәрәк» коммунистары өлгөнө илдәге меңәрләгән бүтән колхоздарҙан алырға теләйҙәр. Ундай өлгөләр күп һәм беҙ үҙ районыбыҙҙа беренселәр булырға ынтылабыҙ.

Мәликә. Минән дә бер һүҙ әйттерегеҙ әле, председатель иптәштәр. Минең пожар каланчаһынан бөтә Ҡыйҙаш буйы көн-төн күҙ алдымда тора. Үҙ каланчамдан ҡарайым да уйға ҡалам...

Шәүкәтов. Шул каланчаң менән башты ҡатырҙың инде, Мәликә!

Мәликә. Донъяны ҡайҙан күрәһең, шуны һөйләйһең инде, Мырҙахан ағай. Әлеге каланчамдан ҡарайым да «Партизан» ерен күрәм. Яҙ булһа, ҡырҙарында етеһигеҙ трактор эшләй, йәй булһа, бишәр-алтышар комбайн йөрөй. Төндәрен ауылдары өҫтөндә нур уйнап тора. Ә «Түңәрәк» менән «Яңғыҙ ҡайын» баҫыуында йә бер, йә ике трактор, аҙашҡан бәрәс кеүек, әйләнгеләп маташа шунда. Үҙ каланчамдан ҡарайым да, тора торғас, эс тә бошоп китә тегеләй. Беҙ кемдән кәм икән һуң әле, тип тә ҡуяһың.

Шәүкәтов. Күргәндәрең, белгәндәрең бөттөмө, Мәликә?

Мәликә. Бөттө, Мырҙахан ағай.

Шәүкәтов. Беҙҙә, «Яңғыҙ ҡайын»да, дөрөҫөн генә әйткәндә, бының өсөн шарттар өлгөрмәгән. Иртә әле, иртәрәк. Бер йылдан һуң тап ошо урында, тап ошо хаҡта һөйләшербеҙ. Хәҙергә хушығыҙ. *(Китә башлай.)*

Зөләйхә. Ә идара ултырышы?

Шәүкәтов. Булмай, минең районға бараһым бар. *(Йомшара төшөп.)* Был турала райком ни әйтер бит әле, иптәш Арсланов. Һөйләшеп ҡарарға ла ниәт юҡ түгел.

Тимербулат. Райкомдың фекере һиңә лә сер түгелдер, тим, күрше. Мин кисә иптәш Вахитов менән байтаҡ уҡ кәңәшләшеп ултырҙым.

Шәүкәтов. Һин өлгөрәһең инде ул. Әллә ниндәй хикмәт сығарып йөрөгәнсе, ана, станция юлындағы күперҙе төҙәт.

Тимербулат. Уртаҡ күпер бит ул, күрше, бергәләп ҡарарбыҙ.

Шәүкәтов *(ҡул һелтәй)*. Кем, Шәүәли, быңдараҡ килтер атыңды! *(Шәүкәтов китә, бөтәһе лә уға ҡарап ҡалалар.)*

Зөләйхә. Бирелгән власты дөрөҫ аңламау кешене бына нимә эшләтә. Һеҙ бөтәгеҙ ҙә, иптәш Гәрәй, уны колхоз председателе түгел, колхоз директоры иткәнһегеҙ.

Гәрәй. Беҙ уға оло һәм тәжрибәле кеше итеп ҡарап килдек. Уның яҡшы хужа булыуына иҫебеҙ китеп, етәкселегендәге кәмселектәрҙе аҙыраҡ күрҙек. Әйтһәк тә, хәтер һаҡлап әйттек. Бына хәҙер шуның емештәрен күрәбеҙ.

Зөләйхә. Күмәкләп боҙғанды күмәкләп төҙәтергә тура киләсәк.

Гәрәй. Әйҙәгеҙ, иптәштәр, эскә инәйек. Бөтәһе тураһында ла шунда ентекләп һөйләшербеҙ.

Китәләр. Мәликә туҡтап ҡала.

Гәрәй. Һин, Мәликә, ниңә инмәйһең?

Мәликә. Мин үҙ һүҙемде әйттем. Бына шул. *(Китә.)*

Гәрәй эскә инә. Акрын атлап, иркенәйеп, Шәүәли инә.

Шәүәли. Ҡорҙашты оҙаттым. Ҡалай рәхәт булып китте. Ни әйтһәң дә, эшемә тел тейҙерерлек түгел. Был ҡорҙаштың бер уты булһа, бер һыуы була. Бына хәҙер ҡайтып, бер аҙ серем итеп алырға ла ярай. Счетовод инде ул йыуаш кеше. Бары ла минең файҙаға. Ярай, был юлы атлап ҡына ҡайтып китәйем әле.

Тояҡ тауышы ишетелә.

Тағы кемдер килә, мәшәҡәт сыҡҡылағансы, ҡайтыу хәйерле. *(Китә.)*

Шәүкәтов инә.

Шәүкәтов. Шәүәли! Шәүәли, тим! Ҡайҙа баттың?

Шәүәли *(алыҫтан)*. Ки-ләм. *(Инә.)* Бәй, ҡорҙаш, был ни эш?

Шәүкәтов. Бар, хәҙер үк идара члендарын йый, эштән буш халыҡтың бөтәһенә лә әйт. Килһендәр. Идара ултырышы уҙғарам. *(Идараға инеп китә.)*

*Шаршау*

**Дүртенсе картина**

Төн. Шәүкәтовтың ҡунаҡ өйө. Был өйгә айырым ишек бар. Уң яҡта — икенсе бүлмәгә инә торған ишек. Өй эсе ҡаласа тип әйтерлек йыһазландырылған, стеналарға биҙәкле балаҫтар эленгән. Уртала ҙур өҫтәл тора. Тик сөйҙәге сигелгән таҫтамалдар ғына ауыл өйөн хәтерләтә. Сәхнә буш, бер аҙҙан Шәүкәтов инә.

Шәүкәтов. Көнбикә, Көнбикә тим, килен! Һин өйҙәме?

Көнбикә *(икенсе бүлмәнән инә)*. Эйе, ҡайным.

Шәүкәтов. Һалҡын айран сығар.

Көнбикә. Хәҙер, ҡайным. *(Сыға.)*

Шәүкәтов *(килеп ултыра, ҙур ҡулъяулыҡ сығарып тирен һөртә)*. Эйе... Саҡ ҡына иҫ тә ауышып китте, ахыры. *(Башын тотоп тора.)* Ҡалай һүҙгә оҫтарып китте был халыҡ. Мәликәне, Солтанды ҡара, телдәре телгә йоҡмай. Үҙ улыма, Хәйҙәргә, ни етмәгән тағы? Ә Зөләйхә әйтә: «Ҡыҙғаныусһығыҙ һеҙ, иптәш Шәүкәтов, ағын һыуҙың әле бер яғына, әле икенсе яғына һуғылған юнышҡыны хәтерләтәһегеҙ», — ти. Улар — ағын һыу, мин юнышҡы булып сығаммы икән ни инде?

Ҡулына ҙур туҫтаҡ тотоп, Көнбикә инә.

Көнбикә. Ҡапыл эсмә, ҡайным, үтә һалҡын, тамағыңа тейер.

Шәүкәтов. Минең турала ҡайғыртыусы бер кеше бар икән әле.

Көнбикә. Ниңә улай тиһең, ҡайным?

Шәүкәтов. Шулай тимәй сарам юҡ, балам. *(Айранды алып, ҡапыл эсә лә туҫтағын кире бирә.)* Мә, тағы

ҙурыраҡ туҫтаҡ менән килтер, быныһы йоҡмай ҙа ҡалды.

Көнбикә. Һиңә ни булды, бөтөнләй төҫтәрең ҡасҡан да баһа?

Шәүкәтов. Миңәме? Миңә правление ултырышы булды. Бар, килен, бар.

Көнбикә китә.

Тамаҡҡа ғына түгел, ут бында бауыр менән талаҡҡа барып йәбеште инде. Илле биш йәшкә етеп, беренсе ҡат хөкөмгә эләктем. Ҡайҙа хөкөм иттеләр тиген? Үҙемдең правление ултырышында... Туҡта әле, ниңә былай булып сыҡты һуң әле был? Ниңә мине яҡлап бер генә һүҙ ҙә әйтеүсе булманы? «Күп эшләгән кеше, фәләнтөгән», — тинеләр, уны бит маҡтау өсөн түгел, арҡаға таяҡтың бешерәген төшөрөү өсөн әйттеләр. Эйе...

Көнбикә инә.

Көнбикә. Хәйҙәр ҙә шунда инеме, ҡайным?

Шәүкәтов. Шунда булмай, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға барған ул. *(Айранды алып, бер аҙ эсә лә туҫтаҡты өҫтәлгә ҡуя.)* Рәхмәт, килен... Ҡолоштағы бесәнде бөтөрөп ҡайттығыҙмы?

Көнбикә. Һуңғы кәбәнде ослап ҡалдылар. Эй күп булды унда бесән.

Шәүкәтов. Үҙебеҙҙең малдарҙың ризығына яҙған булһа ярай ҙа бит.

Ҡотлыев инә. Көнбикә икенсе бүлмәгә сыға.

Ҡотлыев. Сәләм бирҙек, Шәүкәтов иптәш.

Шәүкәтов *(боролоп)*. Ә, алдыҡ.

Ҡотлыев. Мин тағы килдем.

Шәүкәтов. Килгәнһең шул.

Ҡотлыев. Значит, эштәр шәптән түгел.

Шәүкәтов. Ә һинең ни ҡыҫылышың бар эшкә? Һин эш кешеһеме ни?

Ҡотлыев. Мин һинең эштәрҙе әйтәм.

Шәүкәтов. Нимә һин, киске күләгә кеүек, минең арттан һөйрәлеп йөрөйһөң? Һыйырҙы фермаға килтереп тапшырҙыңмы?

Ҡотлыев. Тапшырылды.

Шәүкәтов. Колхоз алған ташты ҡайтарып бирергә булды... Бар, үҙ яйыңды үҙең ҡара.

Ҡотлыев. Минең яй ни ул — яйлы инде.

Шәүкәтов. Һиңә нимә, үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.

Ҡотлыев. Дөрөҫ әйтелгән һүҙгә үпкә юҡ.

Шәүкәтов. Үпкәләй ҙә белмәйһең бит, үпкәләү бик һәйбәт сифат булмаһа ла, кешегә хас сифат, исмаһам. Һин шунан да мәхрүмһең бит, бахыр.

Ҡотлыев. Улай уҡ бөтөрөп тә ташлама әле һин. Ваҡытлы булһа ла, пост биләп торған кеше мин... Дөрөҫөрәге, яңы пост биләргә торған кеше.

Шәүкәтов. Яңы пост? Уныһы нимә тағы?

Ҡотлыев. Мине юл эшенән бушатып торалар. Ләкин, иптәш Шәүкәтов, ул-был булып китмәһә, бик йылы бер урын сиртеп ҡуйҙы бит әле.

Шәүкәтов. Урында бик йылынып китһәң, өшөтөп тә алалар ул. Ҡалтырап тораһың, тешең тешкә теймәй.

Ҡотлыев. Кеше урындың ҡотлоһона эләгергә йөрөгән саҡта, күңелһеҙ нәмәләр һөйләмә әле. Ысынлап ҡотло урын — ваҡытлыса булһа ла, тирмән директоры буласаҡмын.

Шәүкәтов. Тағы ваҡытлы? Мин һине ун биш йыл беләм инде. Башта һин раймагтың ваҡытлыса завы инең, шунан ваҡытлыса сельпоға төштөң, унан һуң тағы ла унлап ергә, сират сире кеүек, инеп сыҡтың. Берәй ерҙә төпләнеп кенә эшләгәнең бармы һинең? Йә ваҡытлы, йә вазифа үтәүсе... Бәлки, һин, ғөмүмән, тормошта кеше вазифаһын үтәп йөрөүсе бер мәхлүктер, ә?

Ҡотлыев. Уны һинән таныш-йәшереп тормайым инде. Мин ҡош кеүек йәшәргә яратам.

Шәүкәтов. Бер ағастан ҡыуһалар, икенсеһенә барып ҡунаһыңмы?

Ҡотлыев. Ҡунам.

Шәүкәтов. Ә иң һуңғы ағастан ҡыуһалар, ҡайҙа ҡунырһың?

Ҡотлыев. Барыбер урын табырмын, һаҙлыҡта, түңгәк араһына булһа ла барып һыйынырмын.

Шәүкәтов. Һыйынып күп йәшәй алмаҫһың. Ул һаҙлыҡты киптергәндә, үҙеңде бөтә хәшәрәттәр менән бергә киптереп, ҡатырып ташлаясаҡтар, ҡыҙғаныс әҙәм. Бына кем ҡыҙғаныс, исмаһам.

Ҡотлыев. Как так улай?

Шәүкәтов. Шулай. Йә, һүҙең бөттөмө?

Ҡотлыев. Ашыҡтырма. Мин һиңә изге ниәт менән килдем. Һинең хәлең, кем әйтмешләй, шалтай-балтайыраҡ һиҙелә. Мин үтәнән-үтә күреп торам бит. Бөгөнгө идара ултырышын да беләм. Тура һүҙгә үпкәләмә, берләшкән колхозда һин председатель булып ҡала торған кеше түгел. Ҡолас етмәй һинең уға. *(Ҡолас йәйеп күрһәтә.)* Ҡолас тарыраҡ.

Шәүкәтов. Етер, тим һиңә, күрәҙә аҡтығы.

Ҡотлыев. Ҡыҙма һин. Мин һиңә изге ниәт менән килдем. Мин тирмән директоры булғас, әйҙә миңә кладовщик булып кил, күҙеңә сүп һалмам.

Шәүкәтов *(һикереп тора)*. Юғал күҙ алдымдан, ҡотһоҙ бәндә. *(Йоҙроғон өҫтәлгә һуға.)* Үҙең һаҙлыҡта аунаған етмәгән, мине лә шунда һөйрәмәксе булаһыңмы, ташбаш, бирермен мин һиңә йылы урынды! Так йылытып ташлармын!

Ҡотлыев *(курҡып артҡа сигенә)*. Ҡуй, Шәүкәтов иптәш, ағай, улай ҡыҙма.

Шәүкәтов. Ҡас бынан тиҙерәк, һөйәгеңде он итәм хәҙер.

Ҡотлыев *(ишеккә сигенә)*. Ҡуй, иптәш, аш менән атҡанға таш менән атма.

Шәүкәтов. Һинең ишеләрҙе ағас мылтыҡ менән атып бөтөрөрлөк, донъя һөрһөтөп йөрөйһөгөҙ. *(Ишектән төрткөләп сығара.)*

Ҡотлыев *(боролоп)*. Только үкенмә. *(Юғала.)*

Шәүкәтов *(ҡарап тора)*. Эй, туҡта әле. Туҡта, тиҙәр бит һиңә!

Ишектән Ҡотлыевтың башы күренеп ҡала.

Ҡотлыев. Һыуындыңмы?

Шәүкәтов. Һыйырҙың быҙауын да килтерҙеңме?

Ҡотлыев *(инә)*. Быҙау, иптәш Шәүкәтов, закон буйынса ла, шәриғәт буйынса ла, тигәндәй, миңә тейеш.

Шәүкәтов *(ҡыҙып)*. Күрһәтермен мин һиңә шәриғәтте, мин һиңә тамуғын күрһәтермен. Бар, иртәгә иртүк быҙауҙы килтереп еткер.

Ҡотлыев. Ни, иптәш Шәүкәтов, был выжданһыҙлыҡ була түгелме?

Шәүкәтов. Бар, яҡшы саҡта әйткәнде эшлә! Юҡһа...

Ҡотлыев. Эшләрмен, но ләкин был ҡылығың үкенескә булмаһын. *(Китә.)*

Шәүкәтов *(йөрөнә, килеп ултыра)*. Бына ниндәй ваҡытта бысраҡ килеп йәбешергә тора икән! Бына кем мине үҙенә иш итергә йөрөй! Юҡ, мин һаҙ ҡошо түгелмен, ер кешеһемен, мин «Яңғыҙ ҡайын» еренең кешеһемен. *(Оҙаҡ пауза. «Яңғыҙ ҡайын»дың стенаға эленгән планын ҡарап тора.)* Туғыҙ йыл бит инде ошо ерҙең хужаһы булып торам. Ә унынсы йылды?.. *(Күҙе ҡапыл стеналағы һүрәттәргә төшә. Бер бәләкәс рамканы ала.)* Зөләйхә! Нимә эшләп өйгә килеп ингән был һүрәт? Шәүләһе булмаһын. *(Асыҡ тәҙрәнән ташларға булып күтәрә һәм тыйылып ҡала, ҡарап тора.)* Ҡалһын, һүрәт зарарһыҙ күләгә генә бит ул... *(Мөйөштәге бәләкәй өҫтәлгә ҡуя, икенсе бүлмәгә сыға.)*

Хәйҙәр инә.

Хәйҙәр *(ҡарана)*. Ҡотлыев әле генә беҙҙән атылып килеп сыҡты шай. Ниңә шымған былар? *(Кепкаһын һалып сөйгә элә.)* Үҙ атаң менән һүҙгә килешеү еңел нәмә түгел икән. Ләкин бит, атай хәтерен һаҡлайым, тип, халыҡ хәтерен ҡыйрата ала инемме мин?

Сынаяҡтар тотоп, Көнбикә инә.

Көнбикә. Хәйҙәр, ниңә улай бик оҙаҡ? Ҡайным бая уҡ ҡайтты бит.

Хәйҙәр. Атай алдан сығып ысҡынды. Ҡайҙа әле ул?

Көнбикә. Оло кешене шулай асыуландырып ҡайтармайҙар инде, Хәйҙәр. Һуңғы көндәрҙә йоҡоһо йоҡо түгел, мин ҡыҙғанам уны.

Хәйҙәр. Мин дә ҡыҙғанам.

Көнбикә. Әле ул урта бүлмәлә ары-бире һуғылып йөрөй.

Хәйҙәр. Ҡаты башлы беҙҙең атай. Ҡаты башлы атты ла бит ҡатыраҡ тартҡылайҙар.

Көнбикә. Ул әле теге ҙур мыйыҡлы кешене эй орошто, эй орошто. Саҡ-саҡ ҡына туҡмап сығарманы. Мин ишек ярығынан ҡарап торҙом, ҡурҡып бөттөм, Хәйҙәр.

Хәйҙәр. Ҡотлыевтымы?

Көнбикә. Шул. Теге меҫкен ҡойолоп төштө.

Хәйҙәр. Ҡыҙғаныс.

Көнбикә. Ә мин ул кешене ҡыҙғанманым.

Хәйҙәр. Ҡотлыевтың туҡмалмауы ҡыҙғаныс. Шулар аяҡ аҫтында уралып йөрөмәһә, алға атлау тағы ла еңелерәк булыр ине.

Көнбикә. Ҡайныма ҡаты әйтә күрмә инде, яйына ғына тор, йәме, Хәйҙәр.

Хәйҙәр. Уның яйына тороу ҡыйын хәҙер. «Ҡырҡ кеше — бер яҡлы, ҡырын кеше — кире яҡлы», тип беҙҙең атай хаҡында әйткәндәрҙер, ахыры.

Көнбикә. Ниңә шулай ҡылана икән ул бер үҙе генә? Бөтә әҙәм: «Түңәрәк» менән ҡушылабыҙ», — тип дәртләнеп тора. Тик Шәүәли ағай ғына: «Ай-һай, барып сығырмы икән ул эш?» — ти.

Хәйҙәр. Шәүәлиҙең үҙ иҫәбе, атайҙың үҙ иҫәбе бар...

Көнбикә. «Яңғыҙ ҡайын» тип үлеп барған кешенең тағы ниндәй иҫәбе булһын инде?

Хәйҙәр. Бөтә бәлә шунда. Уның бөтә иҫәбе «Яңғыҙ ҡайын» сигенән сыҡмай.

Ишекте киң асып, Шәүкәтов сыға. Ул тура ҡатып баҫып тора.

Шәүкәтов. Ҡайттыңмы, батыр?

Хәйҙәр. Ҡайттым, атай. Ә ниңә һин ултырыш бөтөр-бөтмәҫтән ташлап ҡастың?

Шәүкәтов. Барыбер хәл ителде бит инде.

Хәйҙәр. Әлбиттә, берләшергә хәл ителде.

Шәүкәтов. Шәпле кешеләр ҡалай күбәйеп китте. Аба-а... Бар, килен, сығып тор. Мин Хәйҙәр менән һөйләшергә теләйем. *(Барып тәҙрәне яба.)*

Көнбикә. Ярар, ҡайным. *(Хәйҙәргә.)* Яйына ғына тор.

Хәйҙәр. Тыңлайым, атай.

Шәүкәтов. Ҡарап-ҡарап торам да һиңә, ҡалайыраҡ сарланып алғанһың һин. Ҡайҙа сарланылар? Кем сарланы һине? Минең быны шуны беләһем килә.

Хәйҙәр. Хәтереңә ауыр булһа ла, әйтәйем, атай, һин түгел.

Шәүкәтов. Кем өйрәтте, тип һорайым мин һинән!

Хәйҙәр *(тыныс)*. Мине башта пионер һәм мәктәп, унан комсомол, армия өйрәтте, партия, тормош үҙе өйрәтә.

Шәүкәтов. Улар һине собраниеға барырға ла, атайыңды элеп алып, һелкеп һалырға ла өйрәттеләрме? Шулаймы?

Хәйҙәр. Улар мине намыҫлы булырға өйрәттеләр.

Шәүкәтов. Ә мин һине нимәгә өйрәттем?

Хәйҙәр. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атай, һин минең менән аҙ ҡыҙыҡһындың. Мин ете йыл мәктәпкә йөрөнөм. Ошо ваҡыт эсендә: «Был бала нимә уҡый, нимә өйрәнә икән?» — тип минең китаптарымды йәки дәфтәрҙәремде асып ҡараныңмы? «Был баланың күңелендә нимәләр бар икән?» — тип минең менән яҡын итеп һөйләшкәнеңде хәтерләйһеңме? Мин хәтерләмәйем, атай. Ә хәҙер ғәжәпләнәһең; «Һин кем һуң?» — тип һорайһың.

Шәүкәтов. Илле биш йәшкә еткән атайыңа рәхмәтең шулмы? Ярты ғүмерен «Яңғыҙ ҡайын» колхозына биргән Шәүкәтовҡа рәхмәтегеҙ шулмы? Ләкин шуны аңла: мин, һинең кеүек, оянан сыҡҡас та ҡанат елпеп пырылдап осоп китә алманым. Ярты ғүмеремде һөйрәлеп үткәрҙем. Һинең йәшеңдә мин, бүркемде ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, кеше тупһаһында йөрөнөм. 1917 йылдың аҙағында ғына минең алда киң юл асылды. Ул саҡта ла, ҡапыл һикереп түгел, аҡрын ғына үрмәләп, баҫҡыстан баҫҡысҡа өҫкә күтәрелдем, «Яңғыҙ ҡайын»дың председателе булдым. Минең өсөн иң бейек түбә — шул. Шунан юғарыны өмөт тә итә алмайым һәм ҡулымдан да килмәй.

Хәйҙәр. Мин һине аңлай башланым булһа кәрәк, атай.

Шәүкәтов *(йомшаҡ)*. Аңламаҫҡа, һин башһыҙ бала түгел бит.

Хәйҙәр. Ләкин үҙ уйымдан үҙемдең тәндәрем сымырлап китте... Һин шул бәләкәс кенә түбәгә менеп ултырғанһың да үҙең дә артабан китергә теләмәйһең, башҡаларҙың да салғыйынан тотаһың.

Шәүкәтов. Мин ултырған түбә аша йөрөмәһәләр, тотмаҫ инем. Нисек инде ул егерме йыл буйынса «Яңғыҙ ҡайын» булып йәшәгән колхоз иртәгәнән «Түңәрәк» булып китһен? Нисек инде анау ерҙәр *(планға күрһәтә)*, анау тау буйында йөрөгән малдар, бынау ҡуралар иртәгәнән Арслановтыҡы булһын ти? Башыма һыймай. Һеҙгә нимә? Һеҙ йыйған малдармы ни улар? Ә минең шулар өсөн түккән тиремде генә бергә йыйһаң да, күл булыр ине.

Хәйҙәр. Һин тир түгеп тапҡандарҙы, бөгөн үк эшелонға тейәп, сит илгә оҙатырға йыйынмайҙар бит, атай. Ошо уҡ ерҙә ҡаласаҡтар улар, тик бөтәһе лә ике тапҡыр күберәк буласаҡ.

Шәүкәтов. Хисап өйрәтмә миңә. Мин туғыҙ йыл буйына бойороп өйрәнгәнмен. Үҙ ҡулымдан китеп, Арсланов ҡулына күскәс, минең өсөн уларҙың ни ҡыҙығы ҡала? Ни ҡыҙығы ҡала, тип һорайым мин һинән?

Хәйҙәр. Атай! Һин шулай уҡ власть яратаһыңмы ни? Һәм уны юғалтыуҙан шул тиклем үк ҡурҡаһыңмы ни һин?

Шәүкәтов. Бирелгән властыны яратырға тура килә. Ә ятраҡан нәмәңде юғалтыуҙан һәр ваҡыт ҡурҡаһың ул.

Хәйҙәр. Бына ҡалай икән.

Шәүкәтов. Шулай. Һәм был минең үҙ эшем, атайыңдың эше.

Хәйҙәр. Атайым халыҡҡа эшләргә тейеш, тип беләм мин.

Шәүкәтов. Ә мин кемгә эшләйем? Шайтаныма эшләйемме ни мин? Шәүкәтовҡа капитал йыяммы ни мин? Ә?

Хәйҙәр *(өйгә күҙ йөрөтөп сыга)*. Һин үҙеңде лә онотмайһың булһа кәрәк...

Шәүкәтов. Үҙең торған өйҙө әйтәһеңме?

Хәйҙәр. Өйҙө лә әйтәм. Беҙҙең теге йорт та иҫке түгел ине әле.

Шәүкәтов. Икенсе рәхмәтте ишеттем. *(Ҡыҙып.)* Өмөтһөҙ һин! Мин, улым армиянан ҡайтҡас, рәхмәт әйтер тип, уға дворец кеүек өй һалып ҡуйҙым. Һинең кеүек саҡта, бындай өй атайыңдың төшөнә лә кермәгәйне. Кем өсөн һуң был? Кем өсөн һуң ана аҙбарҙағы малдар? Һинең өсөн бит! Һинең өсөн! Бөтәһе лә хәләл аҡсама төҙөлгән.

Хәйҙәр. Колхоздың да аҡсаһы бар бит. Ни өсөн элек уның малдарына стандарт аҙбарҙар һалынмаған, ауыл өсөн клуб төҙөлмәгән. Бына нимә борсой мине. Хәҙергә мин өс бүлмәле өйҙә торорға уңайһыҙланам хатта.

Шәүкәтов. Уңайһыҙланһаң, дүрт яғың ҡибла. Оҡшаған ерҙә тор!

Хәйҙәр. Бәлки, торорға ла тура килер.

Шәүкәтов. Бар, хәҙер үк, ошо минутта үк кит! Яҡшылыҡ эшләнем, яманлыҡ ишеттем. Бар! *(Йөрөнә.)* Бик таман һиңә, ҡарт шайтан! Бына ниндәй көнгә килеп еттең! Үҙ балаң һинең өҫтөңә ғәйеп ташлай.

Хәйҙәр. Атай!

Шәүкәтов. Өндәшмә миңә, өмөтһөҙ! Юғал хәҙер үк күҙ алдымдан! Йый мөлкәтеңде. *(Стеналағы һалдат шинелен, унан икенсе сөйҙәге фуражкаһын алып, Хәйҙәргә ырғыта.)*

Тауышҡа Көнбикә инә.

Көнбикә. Ни булды? Тыныслан, ҡайным!

Шәүкәтов. Тағы нимәң бар? Ана сумкаңды онотма! Нимә эшләп бағана шикелле ҡатып тораһың? Ҡуҙғал, тиҙәр бит һиңә!

Көнбикә. Ҡайным! Ниңә улай кеше көлдөрәһегеҙ?

Шәүкәтов. Мин оялыуҙан уҙғанмын, Көнбикә! Китегеҙ, икегеҙ ҙә китегеҙ.

Хәйҙәр *(Көнбикә менән аптырашып ҡарап торалар)*. Әйҙә, Көнбикә. Ул тиҙ үк һыуынасаҡ бит. *(Әйберҙәрҙе алмай китәләр.)*

Шәүкәтов *(ишек яңағына һөйәлеп, оҙаҡ баҫып тора. Һиҫкәнеп китә)*. Балалар!.. Киттеләр. Дүрт стена эсендә япа-яңғыҙ тороп ҡалдым. Минең кеүек яңғыҙ тағы нимә бар икән? Ҡыйҙаш буйында яңғыҙ ҡайын бар ине, уны ла хәҙер йәш урман солғап алған. Ә мин үҙ балаларымды үҙем ҡыуып ебәрҙем. *(Йөрөнә.)* Үҙеңдән үҙең ҡасып булһа ине, мин ошо минутта уҡ үҙемде ташлап ҡасыр инем, хушлашып та тормай сығып йүгерер инем. *(Ишеккә бара.)*

Зөләйхә инә. Шәүкәтов уға аптырап ҡарап тора ла, боролоп икенсе бүлмәгә сыҡмаҡсы була.

Зөләйхә. Туҡтағыҙ!

Шәүкәтов *(туҡтай)*. Мин һине көтмәгәйнем.

Зөләйхә. Мин килмәй булдыра алманым. «Яңғыҙ ҡайын» председателе Шәүкәтов менән түгел, Мырҙахан исемле кеше менән һөйләшергә теләйем мин. Онотоғоҙ үҙегеҙҙең тәкәббер икәнлегегеҙҙе, тик бер генә минутҡа онотоп тороғоҙ. Беҙ бында икәүҙән-икәү генәбеҙ һәм һеҙҙең менән икәү бөгөнгө йыйылыштағы Шәүкәтовты күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Кем һуң ул? Нимә эшләргә теләй һуң ул?

Шәүкәтов. Улмы? Минме?

Зөләйхә. Һеҙ түгел, ул! Ул кеше бөтә йәне-тәне менән халыҡтан өҫтөнөрәк булырға, унан айырымыраҡ торорға ынтыла. Ләкин шуны аңлағыҙ, Мырҙахан. Халыҡтан айырылған кеше — ағасынан өҙөлөп төшкән япраҡ ул. Хатта ағастың иң осонда маһайып ултырған япраҡ та, бер өҙөлөп төшкәс, барыбер кибергә һәм, тупраҡҡа күмелеп, серергә тейеш. Һәләкәт килеп етмәҫ борон, төптәнерәк уйлап ҡарағыҙ.

Шәүкәтов. Ниндәй енәйәт эшләнем һуң әле мин? Һин миңә шуны әйт!

Зөләйхә. Һеҙме? Һеҙ, ниндәйҙер ваҡ иҫәптәрегеҙҙән сығып, бөтә халыҡтың теләгенә ҡаршы төштөгөҙ, йоҙроҡ йомарлап ҡаршы төштөгөҙ. Юҡ, һеҙ быны менән генә сикләнеп ҡалманығыҙ — бөтә йыйылышты һанға һанамай, күтәрелеп-бәрелеп, сығып киттегеҙ. Юҡ, быны менән генә лә сикләнмәнегеҙ — өйгә ҡайтып, үҙ балаларығыҙҙы үҙегеҙ ҡыуып сығарҙығыҙ. Ҡайҙа

һеҙҙең кешелегегеҙ? Ҡайҙа булды һеҙҙең аталыҡ тойғоғоҙ, Мырҙахан?

Шәүкәтов. Әрнегән яраға ҡағылма, Зөләйхә...

Зөләйхә. Минең үҙемдең бөтә йәнем әрней. Беҙ бит һеҙҙең менән бер тупраҡта үҫкән кешеләрбеҙ, йәшлектең иң саф, иң матур йылдарын бергә үткәргән кешеләрбеҙ, хәҙер инде бер үк партияның сафында торған кешеләрбеҙ. Бына шуларҙың бөтәһе алдында ла: тыуған тупраҡ алдында ла, йәшлегебеҙ алдында ла, партия алдында ла һеҙҙең өсөн ҡыйын миңә. Рәнйейем дә, үпкәләйем дә, ғәрләнәм дә! *(Зөләйхә көскә генә күҙ йәшен тыя.)*

Шәүкәтов. Етте, етте, Зөләйхә, мин шунан артығын күтәрә алмам. *(Бөршәйеп сығып китә. Зөләйхә уға әйләнеп ҡарап ҡала.)*

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### Бишенсе картина

Ҡыйҙаш буйы. Аҫта йылға ағып ята. Алғы планда ҙур яңғыҙ ҡайын ултыра, уның эргәһендә үк йәш урман һуҙыла. Алыҫтараҡ йылға аша һалынған иҫке күперҙең мөйөшө күренеп тора. Был күпергә ике юл килә: береһе — «Яңғыҙ ҡайын»дан, икенсеһе — «Түңәрәк»тән. Гәрәй, Хәйҙәр, Фәйрүзә, Шаһи (ул ҡайышына балта ҡыҫтырған) һәм тағы ла бер нисә колхозсы һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар бысҡылар, көрәктәр күтәреп инәләр. Уларҙың ҡайһыһы ҡоралын рәтләй, кемдер көрәген игәй, икенсеһе балтаһының үткерлеген бармаҡ менән ҡарай. Егеттәр пинжәктәрен һалалар, ҡыҙҙар алъяпҡыстарын алмаштыралар. Тәүге һүҙҙәрҙе Хәйҙәр ситтәрәк баҫып тыңлай, ул атаһын мыҫҡыллап хәтергә төшөрөүгә борсола.

Шаһи *(һүҙен дауам итеп)*. Беҙ кисәге идара ултырышы бөткәнде егеттәр менән болдорҙа көтөп торҙоҡ. Мырҙахан ағай, автомашинанан өркkән ат һымаҡ, атлығып килеп сыҡты, әй, бер заман. Мине саҡ-саҡ ҡына тапап китмәне.

2-се колхозсы. Ҡойроҡ аҫтына нишатыр ҡыҫтырған кеүегерәк, тимәксеһеңдер инде. Шәп була ул нишатыр.

1-се колхозсы. Борослап-һуғанлабыраҡ өшкөртөү ҡайһы кешегә килешә лә, тип һөйләйҙәр. Әллә тағы... Хи-хи-хи...

Уның көләүенә бер нисә кеше ҡушыла ла ҡапыл туҡтай. Гәрәй көләүгә ҡушылмай.

Шаһи. Шунан ни...

Хәйҙәр *(аҡрын ғына яҡын килә)*. Тағы нимә «шунан?»

2-се колхозсы. Шунан ни, атайың ултырған да шыуған, ти. *(Ултырған еренән шыуып күрһәтә.)* Бына шулай.

Хәйҙәр. Шыумайыраҡ торһон әле! Их, Ҡолмәт ағай, кеше тураһында һөйләгәндә сама белергә кәрәк саҡ ҡына, һин оло кеше бит. Юрый ҡарап торҙом: ауыҙың асылған һайын, һинең һәр бер әҙәпһеҙ һүҙеңде раҫлаған шикелле, һаҡалың һелкенеп ҡуя. Үҙең өсөн түгел, шул һаҡалың өсөн нисектер уңайһыҙ булып китте.

2-се колхозсы. Тимәк, атайыңды тәнҡитләү һиңә оҡшап етмәй.

Хәйҙәр. Кисә атайҙы бик дөрөҫ тәнҡитләнеләр, ә бөгөн һин уны мыҫҡыл итәһең. Яҡшы түгел. *(Ситкә китә.)*

2-се колхозсы. Минеңсә, был тәнҡит...

Гәрәй *(ирония менән)*. Ә минеңсә, тәнҡит түгел, ләстит.

Күбеһе Хәйҙәр алдында уңайһыҙланып, тынып ҡала.

Фәйрүзә *(яр ситенә килә)*. О-о-о, ни тиклем таш, бүрәнә, таҡта килтереп өйгәндәр! Шаһи, һин ташыныңмы уларҙы?

Шаһи. Мин дә, машина ла инде.

1-се колхозсы. Нисәмә йыл ошо күпер өсөн Шәүкәтов менән Арсланов һүҙгә килешеп йәшәгәйне.

Шаһи. Күпере күпер тиерлекме һуң? Машина менән сыҡҡан һайын, йәнем ус төбөнә килеп етә торғайны.

Яңы күперҙән ниндәй бәхетле шофер беренсе булып сығыр икән?

2-се колхозсы. Ниңә, үгеҙгә ултырып, һин сығырһың.

Гәрәй. Тәү башлап ошо күпер аша беҙҙең ергә үҙе йөрөй торған комбайндар киләсәк, ғәләмәт ҙур тракторҙар үтәсәк...

Шаһи. Их, егеттәр, ул ваҡытта беҙҙең яҡта ла моторҙар эпохаһы башланыр ине. Күгәүен урынына геүләп торор ине ул саҡта моторҙар. Ерҙә мотор, күктә мотор, һыуҙа мотор, тигәндәй. Бына ниндәй замандар киләсәк бит Ҡыйҙаш буйына, ә!?

3-сө колхозсы. «Түңәрәк» менән ҡушылыу алдынан күпер һалырға дәрт итеп, бик һәйбәт эшләнде бит әле, тимен, Гәрәй туған. Бер пример булыр, тимен.

Фәйрүзә. Берләшкәс, йәшелсә баҡсаһын электр менән һуғарыу ҙа булыр әле, эйе бит, Шаһи.

Колхозсы ҡатын. «Партизан»да веялканы ла мотор ғына әйләндерә. Зырылдап ултыра теге.

Шаһи. Ундай нәмәләрҙе мин үҙем дә яйлап ебәрә алам да ул, тик электры ғына булһын.

Бер ҡыҙ. «Түңәрәк» яғынан ниндәй халыҡ килә ул? Эй күптәр!

Гәрәй *(әйләнеп ҡарай)*. Беҙгә өмәгә киләләр улар. Әйҙәгеҙ, күршеләрҙе эштә ҡаршы алайыҡ.

Бер ҡыҙ. Иллә ярышабыҙ ҙа икән бөгөн!

Шаһи. Киттек, Ғәбдрәшит ағай, шул михнәт күперен пыран-заран килтереп ташлайыҡ әле. «Иҫкене емермәй, яңыны төҙөп булмай ул!» — ти наука.

Колхозсы ҡарт *(арттараҡ ҡала, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, күккә ҡарай)*. Анау болоттарҙың ҡабарыуы бер ҙә күңелгә ятмай. Ниндәйҙер мәкерҙән ҡабара төҫлө шулар. *(Китә.)*

Ел иҫеп ҡуя. Бөтәһе лә китә. Шунда уҡ иҫке күперҙе емергән тауыштар ишетелә. Бер аҙҙан Сулпан, егеттәр, ҡыҙҙар инә, ҡулдарында — шулай уҡ ҡоралдар.

Сулпан *(түбәндәге балта тауыштарын ишетеп)*. Эш башланған, иптәштәр! Ишетәһегеҙме?

1-се егет. Тәүге эш бергәләп күпер төҙөүҙән башлана, яҡшы бит был, Сулпан апай, ә? Ошо күпер ғүмер буйы ике председателгә тынғы бирмәгәйне.

Ҡыҙ. Ошо күперҙә хәҙер беҙҙең дуҫлығыбыҙ башланасаҡ.

Сулпан. Ҡарағыҙ уны, йәштәр, һынатмағыҙ, һеҙ Ҡыйҙаш йылғаһы аша ғына түгел, киләсәктәге беҙҙең берҙәм хеҙмәткә күпер һаласаҡһығыҙ.

1-се егет. Беҙ уны төшөнәбеҙ, Сулпан апай.

Сулпан. Һаумыһығыҙ, «Яңғыҙ ҡайын»дар! *(Ҡул болғай, яр ситенә үк килеп баҫа.)*

Түбәндә йыр менән ҡаршы алалар. Өҫтәгеләр, припевҡа ҡушылып йырлай-йырлай, күпер эргәһенә китәләр.

Йыр.

Колхоздары «Түңәрәк»,
Туғайында күбәләк,
Ҡыйҙаш буйҙарын гөрләтеп,
Кил, эшләйек бергәләп.
Их, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш,
Беҙҙең Ҡыйҙаш ҡыҙҙарының
Буйы зифа, ҡаш ҡыйғас.

Өҫтәгеләр яуап бирә.

Ҡайындары аҡ ҡына —
Тыуған-үҫкән яҡ ҡына.
Күкрәп үҫер, күкрәп эшләр,
Күкрәп йәшәр саҡ ҡына.
Их, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш,
Беҙҙең Ҡыйҙаш ҡыҙҙарының
Буйы зифа, ҡаш ҡыйғас.

Йыр аҡрынлап тына. Сәхнә буш тора. Йүгерә-атлай, Гөлбәдуан инә.

Гөлбәдуан. Эй, кешеләр, кем бар унда? Кешеләр тим! Бында килегеҙ әле.

Башта Гәрәй, һуңынан Фәйрүзә, тағы бер нисә кеше күренә.

Гәрәй. Ни булды, Гөлбәдуан еңгә?

Гөлбәдуан. Шомло хәбәр!

Гәрәй. Ниндәй шомло хәбәр?

Гөлбәдуан. Әле генә арҡыры юлдан Шәүәли һыбай сабып үтте... *(Күккә ҡарай.)* Ҡалай ҡапыл ғәрәсәт күтәрелде.

Ел көсәйә.

Уф!

Гәрәй. Әйт инде, еңгә!

Гөлбәдуан. Мырҙахан әллә нәмә эшләгән. Диуана кеше кеүек, таңдан бирле бер үҙе баҫыу буйлап йөрөй ҙә йөрөй, ти. Башта уны Себенле күлдә күргәндәр, унан һуң Юлсы ташында осратҡандар. Әле Сәләм талы яғына киткән, ти. Үҙе яланбаш, ти, сәсе-башы туҙған, ти, бер кешегә бер нәмә өндәшмәй, ти, әле генә Шәүәли һөйләп торҙо.

3-сө колхозсы. Уны хәҙер үк табырға кәрәк. Кешенең ярһыу сағы...

Гөлбәдуан. Бик дыуамал әҙәм, үҙенә ҡул һала-нитә күрмәһен. Тфү, тфү!

Ел көсәйә.

Гәрәй. Ҡул һалмаҫ. Шәүкәтов кеүек кешеләр еңел генә һынмайҙар. Бәлки, ул үҙенең иҫке сиктәре менән хушлашып йөрөйҙөр. Шулай ҙа уны хәҙер үк табырға кәрәк. Мин Сәләм талы ярына йүгерҙем. *(Китә.)*

Фәйрүзә. Ниндәй яман дауыл күтәрелде...

Гөлбәдуан. Шәүәли әйтә, Мырҙахан күлдәктәрен йыртып бөтөргән, имеш, ти.

Хәйҙәр, Шаһи, тағы бер нисә кеше йүгереп инә.

Шаһи. Гөлбәдуан ҡоҙағый, Фәйрүзә, ниндәй бәлә килә өҫкә!

Гөлбәдуан. Бәлә? Тағы ниндәй бәлә?

Шаһи. Ҡарағыҙ әле, беҙҙең бойҙай баҫыуына табан ап-аҡ нәмә яуып килә.

Гөлбәдуан. Ҡәһәр генә төшһөн был күгенә. Боҙ бит был!

Бер нисә кеше. Боҙ!..

Фәйрүзә. Нисек ажғырып килә!

Колхозсы ҡыҙ. Нимә эшләп торабыҙ һуң? Килеп етте бит инде!

Хәйҙәр. Үҙ күкрәгең менән ҡаплап ҡала алһаң ине шул ерҙе! *(Дауылға ҡаршы йүгерә. Уның артынан башҡалар эйәрә.)*

Шаһи. Иллә-мәгәр килер бер көн... Барыбер шул боҙ болотоноң яғаһынан алырбыҙ, валлаһи, тип әйтәм, алырбыҙ!

Бөтәһе лә дауылға ҡаршы йүгереп сыға.

Гөлбәдуан. Бындай ваҡытта бәләнең эсендә булыу кәрәк... *(Китә.)*

Сәхнә буш тора. Көслө йәшен, дауыл. Яңғыҙ ҡайынды йәшен ата. Боҙ ҡатыш ямғыр яуа. Аҡрын ғына атлап, Мырҙахан инә. Ул ялан баш, сәстәре туҙған. Килеп ҡайын төбөнә ултыра. Байтаҡ һүҙһеҙ тора.

Шәүкәтов. Үтте... *(Дауыл үткән яҡҡа ҡарай.)* Ләкин нисегерәк үтте! Күҙ асып йомғансы, йөҙләп гектар игенде ҡара тупраҡ менән бутап ташланы. Тупраҡ өҫтөндәге бойҙай бөртөктәре, сабый баланың күҙ йәштәре кеүек, мөлдөрәп ятала. Йөрәк ярғыс. Бына бәләнең ысыны ҡасан килде ул. Ә мин, үҙемдең борсаҡ дәүмәле ҡайғыма сыҙай алмай, таң менән бөтә баҫыуҙы ҡыҙырып йөрөгән булам... Туҡта әле, туҡта... Бит егерме бишенсе йылды үҙемдең арышты ла боҙ һуғып киткәйне. Ә ниңә мин ул саҡта был тиклем өҙгөләнмәнем икән? Бәлки, йәшлек хәсрәтте еңелерәк кисерәләр? Юҡ, хәсрәте бәләкәй ине уның... *(Башын тотоп тынып ҡала.)*

Гәрәй, Хәйҙәр, Шаһи, Гөлбәдуан һәм башҡалар аҡрын ғына киләләр. Улар Шәүкәтовты күрмәйҙәр. Шәүкәтов уларға шулай уҡ иғтибар итмәй.

Шаһи. Орлоҡтоң да күгәрсен күҙе кеүеге генә сәселгәйне бит ошо баҫыуға. Үҙем ташыным мин ул орлоҡто.

Колхозсы ҡыҙ. Утағанда ла беҙ был буйҙы йүгереп кенә үттек. Шундай таҙа ине был бойҙай.

Гөлбәдуан. Мәрхүм кеше тураһында хәтергә алған кеүек һөйләмәгеҙ, балалар. Былай ҙа еңел түгел бит.

Гәрәй. Бойҙай һәләк булды. Ҙур ҡаза. Бик ауыр. Ләкин еребеҙ ҙә, үҙебеҙ ҙә иҫәнбеҙ бит.

Гөлбәдуан *(Мырҙаханды күрә. Аҡрын ғына эргәһенә килә)*. Һиңә ни булды, Мырҙахан?

Фәйрүзә. Мырҙахан ағай!

Шәүкәтов *(күтәрелеп ҡарай)*. Миңә шайтаным да булмаҫ, ана, бойҙай, бойҙай һәләк булды.

Гөлбәдуан. Күреп килдек. Әҙәм башына унан да ҙурыраҡ яфалар төшә, Мырҙахан.

Шәүкәтов. Йыуатма мине, Гөлбәдуан еңгә, был бөтә колхоз башына төшкән яфа. Йәй буйы түккән тирҙәр бит улар.

Гөлбәдуан. Һин арығанһың, йонсоғанһың, Мырҙахан. Ҡайтып ял итер инең.

Шәүкәтов. Ниңә һеҙ бөтәгеҙ ҙә минең өсөн борсолаһығыҙ әле? Бойҙай тураһында уйлағыҙ аҙыраҡ. Һуң саҡ ҡына ла ҡайғыра белмәйһегеҙме ни һеҙ? Исмаһам, саҡ ҡына.

Гәрәй. Улай тип кешеләрҙең тойғоһон мыҫҡылларға кәрәкмәй, Мырҙахан ағай. Яҡшы түгел. Әгәр бөтәбеҙҙең йөрәгендәгеләрҙе бергә ҡушһаң, әҙәм батырлыҡ ҡайғы донъяһы булыр ине. Ләкин хәсрәткә батып, ҡанат төшөрөргә беҙ ундай көсһөҙ кешеләр түгелбеҙ бит.

Шаһи. Былай булғас «Түңәрәк» беҙҙең менән берләшеүҙән кире уйлар инде.

Шәүкәтов. «Түңәрәк»тең башына тай типкән, ти, ана, һинең бөлгән колхозың менән берләшергә, уларға һинең бәлә-ҡазаң бик танһыҡ, ти. Нимә эшләмәк кәрәк инде хәҙер, Гәрәй, Гөлбәдуан еңгә, уйлашып ҡарайыҡ.

Зөләйхә инә. Унының өҫтөндә — брезент плащ, аяҡтарында — итек.

Зөләйхә. Һаумыһығыҙ, иптәштәр!

Гөлбәдуан. Һаулыҡ барын бар ҙа, Зөләйхә, бына хәлдәр мөшкөлләнеп тора бит әле.

Зөләйхә. Беләм, үҙ күҙҙәрем менән күреп килдем.

Шәүкәтов. Бөлдөк, Зөләйхә, күҙ асып йомғансы бөлдөк.

Зөләйхә. Дөрөҫ, бик ҙур зыян күрҙек, ауылдаштар. Ләкин һеҙ бит ауырлыҡтарҙы ла, хәсрәттәрҙе лә түҙемлек менән кисергән кешеләрһегеҙ.

Шәүкәтов. Хәсрәт менән хәсрәттең айырмаһы бар. Күтәрелмәгән бәлә бит был.

Гөлбәдуан. Бәләне бер ваҡытта ла күтәреп алмайҙар, Мырҙахан.

Фәйрүзә. Иң ауыры шул бит: үҙең ҡарап тораһың, үҙеңдең ҡулыңдан бер нәмә лә килмәй. Янғынды һүндереп була, ташҡынды быуып була...

Шаһи. Тере дошманды юҡ итеп була... Ә быны?

Зөләйхә. Быны ла еңербеҙ. Тиҙ арала еңербеҙ.

Шәүкәтов. Бөгөнгөһө ауыр бит, бөгөнгөһө, бына хәҙергеһе.

Зөләйхә. Бөгөнгөһө, иртәгәгә ҡарағанда, һәр ваҡыт ауырыраҡ була.

Колхозсы ҡатын. «Түңәрәк» яғынан ниндәйҙер һыбай сабып килә. Ҡалай яман ҡыуа атын.

Бөтәһе лә ҡарайҙар. Шәүкәтов иғтибар итмәй.

Шаһи. Эйәрҙә ултырыуына ҡарағанда, Арсланов булырға тейеш. Әллә «Түңәрәк»тең кире уйлауын әйтергә киләме икән?

Шәүкәтов. Ҡото осмаһын, көсләп тағылырға тормайбыҙ.

Зөләйхә. Яман хәбәр алып килә торған кеше булһа, шул тиклем ашыҡмаҫ ине.

Арсланов инә. Ғәҙәттәгесә, ҡулында — ҡамсыһы.

Тимербулат. Иҫәнлекме, күршеләр! *(Күрешә.)*

Шәүкәтов. Үҙең күрәһеңдер инде, иҫәнлек бар, именлек юҡ!

Тимербулат. Эйе, ҙур ҡазалы булып кителде. Иларҙай булып, ҡарап торҙоҡ. «Партизан»дың да бер утыҙлап гектарын әләктергән.

Шәүкәтов. «Партизан»ға нимә уға? Ҡанаттан төшкән бер ҡауырһын, ә беҙҙең төбө-тамыры менән ҡанат йолҡоноп сыҡты.

Тимербулат. Дөрөҫ түгел, тамыры йолҡонған ҡанат үҫмәй ул.

Шәүкәтов. Уратма, Арсланов, былай ҙа баш әйләнеп бөткән. Тураһын әйт. Кире уйлауығыҙҙы хәбәр итергә килдеңме?

Тимербулат. Юҡ, кире уйламайбыҙ, күрше, ыңғай уйлайбыҙ. «Яңғыҙ ҡайын» риза булһа, берҙәм тормошто бәлә-каза уртаҡлашыуҙан башлайыҡ. Халыҡ бына шуны әйтергә ебәрҙе мине.

Шәүкәтов. Ә? *(Аптырап ҡала.)*

Зөләйхә *(Арслановҡа)*. Рәхмәт һеҙгә, тап ошо минутта килеүегеҙ өсөн рәхмәт.

Шәүкәтов. Төшөнөп етмәйем, Арсланов, һин теүәл аҡыл менән һөйләйһеңме?

Тимербулат. Мин үҙебеҙҙең халыҡтың теләген әйттем. Һин дә уратма, иптәш Шәүкәтов. Ризамы? Риза булһаң, давай.

Ҡулын һуҙа. Шәүкәтов ситкә ҡарай, ҡулды күрмәй.

Гөлбәдуан. «Яңғыҙ ҡайын» риза. *(Тимербулаттың һуҙған ҡулын ҡыҫа.)*

Гәрәй. Беҙҙең халыҡ риза. *(Тимербулаттың ҡулын килеп ҡыҫа.)*

Шаһи, Фәйрүзә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә риза.

Шәүкәтов *(аптырап)*. Төшөнөп етмәйем. Йөҙәрләгән мең һумлыҡ зыянды уртаҡлашырға килгән был кеше! Ишетәһегеҙме?

Тимербулат. Кил әле бынау ҡыуаҡлыҡҡа, күрше.

Шәүкәтов. Бойҙай ерен бынан да күрәм. *(Килә.)*

Тимербулат. Һин былай борол. Ҡыйҙаш буйынан өҫкә ҡара, өҫкәрәк, юғарыраҡ ҡара: ана тегендәге бойҙай баҫыуы ла беҙҙеке, шунан һулдараҡ һоло баҫыуы ла, анау арыштар ҙа беҙҙеке — бөтәһе лә беҙҙеке. Арыраҡ «Партизан» ерҙәре, улар ҙа беҙгә ят түгел.

Шәүкәтов *(йылмая)*. Ошо ерҙән нисәмә тапҡыр үтеп киткәнем булды, ә күтәрелеп тирә-яҡҡа ҡарау уйға ла килмәгән. Ниндәй алыҫ ерҙәр күренә икән дә

баһа бынан. Ҡалай киң икән дә баһа беҙҙең Ҡыйҙаш буйҙары. *(Сәстәрен һыйпай.)* Һеҙ ҙә шуларҙы тәү тапҡыр күрәһегеҙме, туғандар?

Шаһи. Беҙ элегерәк күргәйнек уларҙы, Мырҙахан ағай.

Шәүкәтов. Йәш саҡта күҙ үткерерәк була шул.

*Шаршау*

## Алтынсы картина

Бишенсе картиналағы урын. Артта ҙур яңы күпер күренә. Яңғыҙ ҡайындың эргәһендә яңы телефон бағанаһы. Күпер башында Шаһи баҫып тора, бөйөрөнә таянып, Шәүәли түбәндәге йыр көйөнә һелкенгеләп тора, ҡулында — сәскәләр бәйләме. Түбәндә гармун һәм йыр тауышы ишетелә.

Ҡыйҙаш икән һыуҙары,
Таллы икән буйҙары,
Талдар менән ярышып үҫә
Беҙҙең Ҡыйҙаш ҡыҙҙары.

Их, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш,
Беҙҙең Ҡыйҙаш ҡыҙҙарының
Буйы зифа, ҡаш ҡыйғас...

Шәүәли. Беҙ йәш саҡта ла, ҡыҙҙар ҡыйғас ҡашлы була торғайны.

Шаһи. Шулай ҙа беҙҙең ҡыҙҙарға етмәҫ инде, Шәүәли ағай.

Шәүәли. Бәхәсләшмәйем, хәҙер донъя иркен бит. Иллә-мәгәр мин үҙем илдә бер тигән ҡыҙҙар менән йөрөгән кешемен.

Шаһи. Һинең кеүек егеттәр ҙә һирәк булғандыр, Шәүәли ағай.

Шәүәли. Барын бар ине, иллә-мәгәр күп түгел ине...

Шаһи. Шәүәли ағай, шәп бит, ә?

Шәүәли. Шәп-шәп.

Шаһи. Шәп тиһең, ә үҙең нимә икәнен беләһеңме һуң?

Шәүәли. Үҙең беләһеңдер әле.

Шаһи. Берләшеүҙе әйтәм, Шәүәли ағай.

Шәүәли. Тик был эш Мырҙахан ҡорҙаштың күңеленә ятып етмәгәндәй бит әле.

Шаһи. Ә үҙеңдең күңелеңә һуң?

Шәүәли. Миңә ни? Мин ни ғәләм күргәнде күрермен инде. Шаһи ҡустым, әйт әле, ул берләшкән колхозда минең пост һаҡланырмы икән?

Шаһи. Һинең посмы?

Шәүәли. Эйе, унда йомош-юлға йөрөү булырмы икән?

Шаһи. Һин обязательно сокращениеға эләгәсәкһең.

Шәүәли. Сокращениеға мин бер эләккәйнем инде.

Шаһи. Ҡасан?

Шәүәли. Элек бит мин Аллабирҙин Мөхәммәтшәүәли йөрөй инем. Анау алла менән Мөхәммәт моданан сыҡҡан йылдарҙа Бирҙин Шәүәлигә тороп ҡалдым. Сельсовет секретары Мөри ҡыҫҡартты.

Шаһи *(көлә)*. Мин исемеңде әйтмәйем. Һинең должность ҡыҫҡарасаҡ, Шәүәли ағай.

Шәүәли. Ҡалай итеп ҡапыл ғына ундай хәл булыр икән? Әле, һинән йәшереп тороп булмай инде, эшем дә ауыр түгел ине, өй-ҡураға ла ҡулым тейеп тора ине.

Шаһи. Хәҙер һинең батшалыҡ бөттө.

Шәүәли. Унда йомош-юл шулай бер ҙә булмаҫмы ни?

Шаһи. Һинең урынға бөтә ерҙә быҙна нимәләр: *(Телефон бағаналарын күрһәтә.)* телефон, радио эшләйәсәк.

Шәүәли. Улай икән.

Шаһи. Шулай, Шәүәли ағай.

Шәүәли *(йәнләнеп)*. Һин, Шаһидулла ҡустым, быҙна былай тиген, берләшкән ҙур колхоз, тиген, үҙеңә, тиген, быҙна тигән мотоциклет алып бирер, тиген... Ул ваҡытта инде фермаһына ла, бригадаһына ла, кәрәк була икән, и даже районына ла выжлатып ҡына барып ҡайтыр ине ағаҡайығыҙ. Тик, ҡустым, тегене йөрөтөргә башта өйрәтеп бирерһең инде.

Шаһи. Була ул. Эшләйбеҙ уны, Шәүәли ағай.

Шәүәли. Быҙна рәхмәт, ҡустым.

Шаһи. Һаҡалың елберләп кенә бара инде мотоциклда, ә?

Шәүәли. Ҡулың һөнәр белгәс, рәхәт шул. Бына бит һине, оҫта шофер булғас, машинаға тағы ла ҡуйҙылар.

Шаһи. «Домашний аресың бөттө!» — тине кисә Мырҙахан ағай. Машина менән Яҡупов «Түңәрәк»кә киткәйне. Тегенең янына йәйәү тороп саптым, әй.

Шәүәли. Тик ниңәлер бөгөн бик яй алып килдең әле. Машинаңда бара-бара эсем бошоп бөттө.

Шаһи. Бер ауыҙың бешкәс, өрөбөрәк ҡабаһың шул.

Шәүәли *(ҡулындағы сәскәне еҫкәп, кет-кет көлә)*. Знамы, бер ауыҙың бешкәс ни...

Шаһи. Ана йәштәр һыу төшөп тә сыҡты.

Шәүәли. Улайһа, халыҡ йыйылғансы, мин дә битте, ҡулды сайҡаштырып киләйем әле. *(Китә.)*

Шаһи *(түбәндәге йәштәргә ҡысҡыра)*. Бында килегеҙ, егеттәр, ҡайын күләгәһенә.

Солтан, Фәйрүзә, «Түңәрәк»тең бишенсе картинала күренгән ҡыҙҙары менән егеттәре инә. «Түңәрәк» егете аҡрын ғына гармун уйнай, ҡыҙҙарҙың ҡулдарында — сәскәләр.

Йырлайҙар:

Ҡыйҙаш буйы тал-тирәк,
Тирәккә ҡунмай өйрәк,
Ошо айҙарҙа бигерәк
Ашҡынып тора йөрәк.

Солтан. Гармун, тороп тор саҡ ҡына! Ошо сәғәттә, иптәш комсомолдар, бөтәгеҙ ҙә ишетәһегеҙме? Һин гармунды ҡуйып тор, Баязит! Ошо сәғәттә беҙ, берләшкән колхозға исем табып, вообщем, йыйылышҡа тәҡдим итергә тейешбеҙ.

1-се ҡыҙ. Эй уратып әйтте.

Баязит. Бына бурыс... Беҙҙең күрше Саттарҙар бәләкәс кенә, туҡмаҡ саҡлы ғына балаларына бер аҙна исем эҙләнеләр.

1-се ҡыҙ. Һин әкиәт һөйләмә, Баязит, йәме.

Солтан. Ниндәй тәҡдимдәр булыр?

Фәйрүзә. Ниңә, «Яңғыҙ ҡайын» ярамағанмы ни?

Шаһи. Булмай. Кеше шул яңғыҙлыҡтан ҡасып бара түгелме?

2-се ҡыҙ. Ә «Түңәрәк»?

Шаһи. Булмай. Түңәрәк нәмә бәләкәй була ул. Вообще, түңәрәк нәмәне яратмайым. Собраниела Мөхәтдин ҡарт һүҙен түңәрәкләһә генә, рәхәт булып китә.

Солтан. Тағы ниндәй тәҡдимдәр булыр, иптәштәр?

Бөтәһе лә маңлайҙарын ыуа-ыуа уйлайҙар.

Баязит. Таптым. «Оркестр» йә «Марш». *(Гармунын баҫып ала.)*

Солтан. Юҡ, артыҡ моңло булыр.

1-се ҡыҙ. Ә минеңсә, йә «Йондоҙ», йә «Таң» — ошонан да матуры юҡ.

Шаһи. Матурын матур ҙа, бигерәк шым исем. Минеңсә, яңы колхоздың исеме үк гөрләп торорға тейеш. Мин тәҡдим итәм: «Мотор тауышы» и точка.

Солтан. Юҡ, иптәштәр, тауыш ҡына етмәй, хәрәкәт кәрәк, алға барғаныбыҙҙы күрһәтеп торһон.

Шаһи. Мотор тиккә генә геүләп ултырамы ни ул?

Фәйрүзә. Шаһи әйткән «Мотор тауышы» миңә оҡшай.

2-се ҡыҙ. Шиғри түгел. Унан һуң, моторҙың туҡтап ҡуйған сағы ла була.

Баязит. Әйттем бит, исем табыу уйын эш түгел ул.

Шаһи. Хәрәкәт тиһең дә, ҡайҙа табан хәрәкәт итеү бит, Солтан. Алға тинем бит.

Фәйрүзә. «Алға» тип ҡушайыҡ, улайһа.

1-се ҡыҙ. «Алға» ғына бигерәк ҡоро шул.

Солтан. Әһә, таптым, иптәштәр! Алда беҙҙең маҡсатыбыҙ нимә? Коммунизм. «Алға, коммунизмға», тип ҡушайыҡ, булдымы?

Гөлбәдуан инеп тыңлап тора.

2-се ҡыҙ. Ике һүҙҙән булмаһын ине шул.

Фәйрүзә. Улайһа, «Алға»һын төшөрөп ҡалдырайыҡ.

Шаһи. Дөрөҫ, «Коммунизмға». Сөнки коммунизм тигән һүҙ үҙе үк моторҙар геүләүен аңлатып тора.

Баязит. Коммунизмға барып еткәс, «ға»һын тағы алып ташларбыҙмы? Әйҙәгеҙ булмаһа хәҙер үк эшен бөтөрөп ҡуябыҙ. «Коммунизм» и все, «Коммунизм» колхозы. Шәп яңғырай бит, ә?

Солтан. Хәл иттекме, иптәштәр, ризамы?

Бөтәһе лә. Иттек, иттек, риза!

Гөлбәдуан. Әммә, балалар, шуны ныҡ иҫтә тотоғоҙ. «Коммунизм» булғас, колхозыбыҙ гел алда ғына барырға тейеш. Исеме бер тигән.

Солтан. Колхозы ла бер тигән буласаҡ.

Шаһи. Һеҙгә шуны белдерәм, иптәштәр: «Түңәрәк» халҡының төп массаһы, мин алданыраҡ килгән иптәштәрҙе әйтмәйем, ике минуттан йыйылыш урынына килеп етәсәк. Ана ҡалҡыулыҡҡа килеп сыҡтылар. Байраҡ тотоп, иң алдан Сулпан килә. Байрағы ҡалайыраҡ елберләй. Юҡҡа исемде «Коммунизм байрағы» тип ҡушманыҡ.

1-се ҡыҙ. «Коммунизм» исеме ҡыҫҡа һәм матур.

Солтан. Әйҙәгеҙ, иптәштәр, беҙ ҙә йыйылыш урынына барайыҡ. *(Сығалар.)*

Шаһи. Фәйрүзә, тороп тор әле саҡ ҡына...

Фәйрүзә. Ҡуйсы, әйҙә бергә барайыҡ...

Шаһи. Исмаһам, үҙем өсөн генә берәй һүҙ әйт.

Фәйрүзә. Үҙең өсөн генәме? Һин машина йөрөтә башлағас, тағы ла матурланыбыраҡ киттең әле.

Шаһи *(оялып)*. Минең дә һиңә генә әйтә торған һүҙҙәрем бар ҙа бит. Бында *(йөрәген күрһәтә)*.

Фәйрүзә. Башҡа ваҡытта әйтерһең, йәме. Йүгерҙек! *(Етәкләшеп йүгерәләр.)*

Шәүкәтов, Гәрәй, Хәйҙәр, Көнбикә инәләр.

Шәүкәтов. Барығыҙ, балалар, халыҡ янында булығыҙ.

Китәләр. Шәүкәтов менән Гәрәй ҡала.

Шәүкәтов. Замандар үҙгәрҙе, Гәрәй ҡустым, бынан егерме йыл элек, ошо уҡ ҡайын төбөндә ултырып, ун ете кеше колхоз булырға кәңәшләшкәйнек. Бәләкәс колхоздың исемен дә алыҫтан эҙләп торманыҡ: ҡаршы-

лағы ҡайындан алдыҡ та ҡуштыҡ. Ул саҡ Ҡыйҙашта күпер заты ла, был йәш урмандар ҙа юҡ ине... Эйе, унда мин үҙем юл башлап йөрөгәйнем. Ә хәҙер үҙемде етәкләп килтерҙеләр.

Гәрәй. Тарткылашмай ғына килһәң, тағы ла бер хәл ине, Мырҙахан ағай.

Шәүкәтов. Ярай, ярай, һуңғы судҡа килдем бит инде.

Гәрәй. Бөгөн суд түгел. Бөгөн байрам. Бындай көндө хатта гонаһтарҙы ла кисерәләр.

Шәүкәтов. Нимә әйтһәң дә, һинеке дөрөҫ. Зөләйхә ҡайҙа икән?

Гәрәй. Ул халыҡ менән түтә юлдан киткәйне.

Һәр саҡтағыса ҡабаланып, Арсланов инә.

Тимербулат. Кәңәштәр берекһен! Икегеҙҙе лә бөгөнгө көн менән ҡотлайым, һине лә, иптәш Гәрәй, һине лә, элекке күрше. *(Күрешә.)*

Шәүкәтов. Туҡта әле, кем, Тимербулат, ни өсөн «элекке»? Әллә бөтөнләй күршелектән дә сығарып ташларға итәһеңме?

Тимербулат. Хәҙер ни бер өй кешеләре булабыҙ тип торабыҙ ҙа, Шәүкәтов иптәш. Ниңә бойоҡ күренәһең?

Шәүкәтов. Шатлығым күп саҡта мин шулай бойоҡ булам.

Тимербулат. Үҙеңә башҡа бер кешеһең һин, Шәүкәтов иптәш.

Шәүкәтов. Төрлө кеше була шул донъяла. Ап-аҡ атта ла бер ҡара тап була.

Тимербулат. Иптәштәр, эш башында уҡ яйланып тора. Бөгөн МТС-ҡа барып килдем. Беҙгә бер юлы өс комбайн бирергә вәғәҙә иттеләр. Кәрәк булһа, дүртенсеһен дә ебәрерҙәр.

Шәүкәтов. Шәпле председатель булырһың, ахыры, Тимербулат: атмаған ҡуянға, аҫмаған ҡаҙанға ҡашыҡ тотоп йөрөйһөң.

Тимербулат. Мин һеҙҙең өсөн, ҡалаһы кешеләр өсөн, тырышып йөрөйөм, ә һин, Шәүкәтов, күңелгә ауыр һүҙ әйтәһең.

Шәүкәтов. Ҡайҙа, әллә Өфөгә министр булып китәһеңме?

Тимербулат. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, уҡырға китәм. Тотош ике йылға. *(Түш кеҫәһенән яҙыу сығарып күрһәтә.)* Йыйылыш ҡаршы килмәҫ, тип уйлайым.

Гәрәй. Ниңә улай бик ҡапыл, иптәш Арсланов?

Тимербулат. Ҡапыл түгел, туған. Борон-борон заманда алынған алты класлыҡ белем менән һәрмәнеп йәшәү ҡыйын хәҙер.

Шәүкәтов *(оҙаҡ уйлағандан һуң)*. Китәһең? Аңлап еткермәйем.

Тимербулат. Нимәне, Шәүкәтов иптәш?

Шәүкәтов. Һине. Ни шайтаныма, тиреңдән сығырҙай булып, бынау мәшәҡәт менән йөрөүеңде аңламайым, улай китер ниәтең булғас...

Тимербулат. Үҙ тиреңә генә һыйып йәшәй торған заманмы ни, иптәш Шәүкәтов? Бына бит һин дә бара торғас үҙ ҡабығыңды ярып сығып киләһең. Хәҙер мин ышанам, мин ҡайтҡансы һеҙ бик күп эштәр башҡарасаҡһығыҙ.

Шәүкәтов. Бына ниндәй бәндә булып сыҡтың һин! Ә мин уйлағайным... Яман уйҙар уйлағайным һинең турала.

Тимербулат. Ахыры хәйерле булыу яҡшы, күрше! *(Күккә ҡарай.)* Ниндәй һәйбәт иртә! *(Һулыш ала.)* Ә икмәк еҫе ҡалайыраҡ аңҡый.

Алыҫта көлөү тауыштары, шау-шыу ишетелә. Шәүәли инә.

Шәүәли. Председателдәр, иптәштәр, халыҡ йыйылып бөттө.

Гәрәй. Әйҙәгеҙ, председателдәр.

Тимербулат. Әйҙә, һин олораҡ кеше, алдан бар, күрше.

Шәүкәтов. Әйҙә, Гәрәй, минең ҡара иҫәбемсә, хәҙер һин алдан барырға тейешһеңдер.

Шәүәли. Председателдәр, иптәштәр, халыҡ көтә.

Китәләр. Шәүәли ҡала.

Берләшкән колхозда үҙемдең бурысты үтәй башлауым ошо булһа ярар ине. Туҡта әле. Был икәүҙең ҡайһыһы

председатель булыр икән? *(Тамашасыға борола.)* Күрәҙәлек ҡылыу үҙ ҡулыбыҙҙа ла баһа. Хәҙер беләбеҙ уны. *(Күҙҙәрен йомоп, бармаҡҡа бармаҡты тура килтерергә маташа.)* Иң элек Тимербулатты һынап ҡарайыҡ... Юҡ, тура килмәне... Хәҙер Мырҙахан ҡорҙашты. Ни ғәжәп, был да тура килмәне. Давай, улайһа, яңынан ҡарап ҡарайыҡ... Тимербулат... Тимербулат... Тимербулат... Юҡ, булманы. Инде, Мырҙахан ҡорҙаш, һинең бәхетте тағы һынайыҡ... Мырҙахан, Мырҙахан, Мырҙахан. *(Аҡрын ғына килтерә, бер күҙен аса.)* Барып сыҡты — Мырҙахан ҡорҙаш!.. Былай булғас, эш көйлө... Саҡ ҡына хәйләләнең буғай ҙа хәйләләүен, Шәүәли... Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ. *(Башын сайҡап тора. Ҡапыл һикергеләп бейей-бейей әйләнгеләй.)* Айҙар ғынайым, вайҙар ғынайым, председатель булыр әле Мырҙахан ҡорҙашҡынайым...

Шаһи менән Фәйрүзә инә.

Шаһи. Иң ҡыҙығынан тороп ҡалдың бит, Шәүәли ағай. Колхоздар берләште. Председатель итеп беләһеңме кемде һайланылар?

Шәүәли. Минең Мырҙахан ҡорҙаштымы?

Шаһи. Председатель итеп...

Шәүәли. Шәүкәтов иптәштеме?

Шаһи. Председатель итеп халыҡ бер тауыштан агроном Зөләйхә апайҙы һайланы.

Шәүәли. Эһе?! Бына донъялар ҡайһылай булып китте бит. Бында йөрөү ярамаҫ, яңы председателдең күҙ уңындараҡ торорға кәрәк. *(Сыға.)*

Шаһи. Фәйрүзә! Гөлфәйрүзә!

Фәйрүзә. Собраниенан кешене шулай тартҡылап алып сыҡмайҙар инде.

Шаһи. Ошондай саҡта түҙеп тороп буламы һуң? Сәғәте, минуты ҡәҙерле. Ваҡыт көтөп тормай бит ул.

Фәйрүзә. Нимә булған ваҡытҡа?

Шаһи. Үтә, үтә лә китә.

Фәйрүзә. Ни эшләтәйек һуң ул ваҡытты?

Шаһи. Ваҡыт ни үтһен ул. Эш ваҡытта түгел, Фәйрүзә, эш беҙҙә. Бөтә колхоз, бөтә кешеләр әле та-

рихи сәғәт кисерә, эйе, тиген. Ошо тарихи сәғәтте мин тағы ла бер нәмә менән бизәр инем.

Фәйрүзә. Бизәп ебәр, булмаһа. *(Көлә.)*

Шаһи. Көлмә, Фәйрүзә, көлмә, уның ни көлкөһө бар. Ошо сәғәттә ике колхоз берләште, эйе, тиген. Без зә һинең менән язмышыбыззы берләштерергә ошо сәғәттә вәғәзә ҡуйышһаҡ, ҡалай күркәм буласаҡ... Бынан күп йылдар үткәс, колхоздарзың ҡасан берләшкәнен хәтерләгәндә, ҡарттар былай тиерзәр: «Ҡасан берләшкәйне һуң әле беззең колхоз? Ә-ә, Шаһи менән Фәйрүзә вәғәзә ҡуйышҡан саҡта», — тиерзәр. Бына ниндәй тарихи дата буласаҡ.

Фәйрүзә. Улай ҡапыл ғына вәғәзә биреүе ҡыйын бит әле. Ә минең үземдең уйым бар ине.

Шаһи. Әйт уйыңды, Фәйрүзә, әйт.

Фәйрүзә. Бынау йәмле йәй айзары үтеп, көз килер, тигәйнем. Һинең машинаға мин үстергән кәбестәләрзе таузай итеп тейәрбез, тигәйнем, шул саҡта, тигәйнем...

Шаһи. Һуң, Фәйрүзә, ул саҡтың килеүенә мин бынау яңғыз ҡайындың барлығына... әй юҡлығына... ышанған кеүек ышанам. Тик һинең генә ышаныуың кәрәк.

Фәйрүзә. Мин дә һиңә ышанам, Шаһи.

Шаһи. Фәйрүзә, Фәйрүзәкәй... Ниңә донъялағы бөтә нәмәләрзең дә исемдәре Фәйрүзә түгел икән? Көнөнә мең тапҡыр әйтер инем мин һинең исемеңде!

Шаһи менән Фәйрүзә сығып китә. Аҡрын ғына Шәүкәтов килеп инә, күпер өстөндә туҡтай.

Шәүкәтов. Бер минут эсендә председатель Шәүкәтовтан ҡоро Шәүкәтовҡа тороп ҡалдым. Үз еремдең, хосуси еремдең, ызанынан алыс киткәс, «Яңғыз ҡайын» ызанында килеп абындым. Ахмаҡ, ҡарт ахмаҡ. Кешеләр мине етәкләп бейеккәрәк алып менергә, «Яңғыз ҡайын» еренән арыны күрмәй торған күззәремде асырға теләнеләр. Ә мин тартҡылаштым. Мин, мин, тинем. Нимә ул мин ошо кешеләр ҡаршыһында? Улар мине шулай уҡ бөтөнләйгә ташларзармы икән ни? *(Ҡапыл онотолоп.)* Шәүәли, тим, атты! Юҡ, хәзер Шәүәли миңә ат килтермәс инде.

Зөләйхә инә.

Зөләйхә *(һаҡ ҡына)*. Мырҙахан.

Шәүкәтов *(аҡрын ғына күтәрелеп ҡарай)*. Шулай, Зөләйхә. Беҙ ғүмеребеҙҙә икенсе ҡат ыҙанда айырылыштыҡ. Һәр икеһендә лә һин артабан киттең, ә мин тороп ҡалдым. Һине ҡасан да булһа табырмын тип өмөт иткәйнем, бара торғас, үҙемде лә юғалттым, ахыры.

Зөләйхә. Был юлы мин һине ташлап китергә түгел, үҙем менән алып барырға теләр инем... Ун туғыҙ йәштә лә мин шулай уйлағайным. Ләкин ул ваҡытта асыҡ итеп әйтә алманым. Ә хәҙер миңә илле йәш, Мырҙахан.

Шәүкәтов. Ҡайҙандыр, бик алыҫтан иҫкән йылы ел килеп бәрелгәндәй итте, Зөләйхә. Онотолған йылылыҡ.

Зөләйхә. Донъяла бөтә нәмә лә онотолоп бөтмәй, Мырҙахан.

Күперҙең теге яғында йәштәр йыр башлайҙар. Йыр көсәйә бара.

Йыр.

Алтын икән ҡырҙары,
Ҡыйҙаш икән һыуҙары,
Бөтә илгә дандар сәсһен
Беҙҙең Ҡыйҙаш буйҙары.

Их, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш, Ҡыйҙаш,
Ҡыйҙаш буйҡайҙары йәмле,
Ҡыйҙаш өҫтөндә ҡояш!

Зөләйхә һаҡ ҡына Шәүкәтовтың ҡулын тота һәм, уны етәкләп, күперҙең өҫтөнә, юғарыға күтәрелә. Теге яҡтан халыҡ йыр менән күтәрелә.

Шәүкәтов. Бына ошолай ҡулға-ҡул тотоношоп икәү бергә бик оҙон юл үтәһе ине. Осо ла, ҡырыйы ла булмаһын ине ул юлдың.

Зөләйхә. Һәм ул, аҙ ғына булһа ла, шулай һаман юғарыға, бейеккә күтәрелһә ине...

*Шаршау*

*1950*

## ҠЫҘ УРЛАУ

*Өс шаршаулы комедия*

КАТНАШАЛАР:

Йәмилә
Мөхәммәтша
Баян
Маһибәҙәр
Ҡотләхмәт
Шөкөр
Йәмлегөл
Ильяс
Мөнирә
Әжмәғол — Йәмиләнең атаһы, 65 йәштә
Уңғанбикә — уның бисәһе, 58 йәштә
Иштимер — уларҙың ейәне
Дәүләтбай — тол ир
Туҡтабикә — тол ҡатын
Кәмилә — Ҡотләхмәттең апаһы, 55 йәштә
Гөлсирә — күрше килене, 25 йәштә
Сабира — 70 йәштә
Иркәбикә — 80 йәштә
Шәмсулла — хисапсы, 50 йәштә
Ирдәүләт — маляр, 60 йәштә
Шәрәй — юҡағас мулла, 65 йәштә

Һабантуйға килгән егеттәр, ҡыҙҙар.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Пожар каланчаһы янындағы майҙан. Июнь баштары. Яҡтырып килә. Ҡайҙалыр һуңлаған әтәс ҡысҡыра. Һул яҡта пожар аласығының ишеге генә күренә. Бер ситтә — арбаға ҡуйылған пожар мискәһе, ишек эргәһендәге сөйҙәрҙә биҙрәләр һәм башҡа пожар һүндереү ҡоралдары эленгән. Баян — каланча башында. Мөхәммәтша — аласыҡта. Ҡолға күтәреп, Әжмәғол инә. Ҡолға башына биҙәкле таҫтамалдар, ҡулъяулыҡтар, тәмәке янсыҡтары, һырлап бәйләнгән бирсәткәләр тағылған. Әжмәғол ҡыҙмаса. Каланчалағы Баянға төртөп күрһәтә лә йырлай.

Әрәмәлә ҡоштар һайрай,
Әллә таң ата инде,
Уҡлау менән беште ҡарсыҡ,
Әллә ярата инде.

Әбей ҡарсыҡтан була,
Көршәк балсыҡтан була.
Бәреп ваттым көршәкте,
Тешләп булмай терһәкте.

Эсеп йөрөнөм ҡасып һуң,
Күңелен киттем ҡарсыҡтың,
Эштәр түгел бик шәптән —
Ҡыуҙы йылы түшәктән.

Әбей, әбей, әбһәнә,
Ишегеңде асһана,
Тәҙрәңде, тим, япһана,
Бер ҡосаҡлап ятһана.

Баян *(өҫтән)*. Иртә һайрай башлағанһың, Әжмәғол ағай.

Әжмәғол. Ҡоштоң дәртлеһе таң менән һайрар. Күңелеңә һалып ҡуй шуны, ҡустым.

Баян. Улайһа, иң дәртлеһе әтәс булып сыға инде.

Әтәс ҡысҡыра.

Әжмәғол. Дөрөҫ, ҡустым. Әтәс дәрте һиндә булһа, йәй буйы каланчала ел йотоп ултырмаҫ инең.

Аласыҡтан Мөхәммәтша сыға.

Мөхәммәтша. Имен йөрөүме, Әжмәғол ағай?

Әжмәғол. Бик арыу әле... Кем тип әйтәйем? Хәҙергә Мөхәммәтша тип кенә әйтәйем. Йәштәрҙе белеп бөтмәҫһең.

Мөхәммәтша. Йәмилә менән беҙҙең вәғәҙәләр ныҡ та ул.

Әжмәғол. Әй, һин, елйотор! Төш әле *(Мөхәммәтшаға)*. Вәғәҙәләр ныҡ тиһең икән. Үҙеңә хоҙай ярҙам бирһен. Инәһенә оҡшаһа, ут булыр...

Мөхәммәтша. Унынынан ҡурҡҡан юҡ та ул, мин үҙем сабыр әҙәм.

Әжмәғол. Ошо көндө, хоҙайҙың помощнигы үҙе кешеләрҙе бер-береһенә тура килтереп, пар-пар итеп бүлеп ултыра, ти, бит: «Бер матурға бер йәмһеҙ, бер аҡыллыға бер ахмаҡ, бер сабырға бер дыуамал... Бер йүнлегә бер йүнһеҙ, бер уңғанға бер ялҡау...» *(«Ахмаҡ», «дыуамал», «йүнһеҙ» тигәндә Мөхәммәтшаға күрһәтә, «матур», «йүнле», «уңған» тигәндә үҙенә күрһәтә.)*

Баян *(төшә)*. Һабантуй ҡотло булһын, Әжмәғол ағай.

Әжмәғол. Мин ҡотланым инде. Һеҙгә лә шатлыҡ менән үткәрергә яҙһын.

Баян, Мөхәммәтша бер-береһенә ҡарашалар.

Баян. Беҙгә ни?

Мөхәммәтша. Ә, шулай булһын...

Әжмәғол *(нимәлер хәтерләп, уйланып тора)*. Әй, егеттәр, әйтегеҙ әле, төн уртаһында, әҙәм бимазалап, ниңә саң ҡаҡтығыҙ? Уйын эшме ни ул?

Баян. Хаталыҡ булды, ағай.

Әжмәғол. Минең ревкомиссия председателе икәнлегемде беләһеңдер бит? Яуап бир, ниндәй хата?

Мөхәммәтша. Әйтеүе лә оят.

Әжмәғол. Пожар саңы ҡағып, ҡыҙҙар саҡырҙығыҙмы, мошенниктар?

Баян. Юҡ, ағай.

Мөхәмм ә тша. Баян менән икәү уяу ғына ҡарап тора инек... Бер заман сусҡа фермаһының түбәһенән гөлт итеп ялҡын күтәрелде. Ҡоттар осто. Баян саң ҡағырға тотондо, мин һикереп төшөп аттарҙы егергә керештем. Инде сығып саптыҡ тигәндә, ферма яғына тағы бер ҡараһам, ана ул нәмә булып сыҡты *(айға күрһәтә)*.

Баян. Ай шунан килеп ҡалҡыр тип кем уйлаған.

Әжмәғол. Ха-ха-ха, ҡамыр батырҙар! Зирәк кеше буласаҡ минең кейәү!

Баян. Иртәгә һабантуй тигәндә генә, хур булдыҡ шул, Әжмәғол ағай. Төндә үк беҙҙең мажара ярты ауылға таралды... Хәҙер төртмә йырҙы көт тә тор...

Әжмәғол. Айҙы һүндермәй шулай ҙа яҡшы иткәнһегеҙ, егеттәр, ана ниндәй матур булып күкте биҙәп тора...

Баян. Күкте биҙәй ҙә ул...

Әжмәғол *(колғаһын ергә ҡаҙай)*. Элек еңеүселәргә бүләкте өйҙән өйгә йөрөп йыя инек. Хәҙер халыҡ сознательный, теләгән кеше үҙе килтереп элер әле. Күҙ-ҡолаҡ булығыҙ. Ҡарағыҙ уны, анау ҡыҙыл таҫтамалды «һүндерә» күрмәгеҙ.

Баян. Башланды күңелле тормош...

Әжмәғол *(китә башлай)*. Ә? Үҙемде ҡайҙа китте, тиһегеҙме? Туҡтабикә килендең балы әсеп, мискәһенән ташып бара, ти, саҡ ҡына һемереп киләйем тим шуны... *(Йырлай. Китә.)*

Араҡы әсе, бал сөсө,
Ҡарсығым буйға кесе,
Даром что буйға кесе,
Ҡуйыны ожмах эсе.

Мөхәмм ә тша. Ҡарт рәхәткә сыҡҡан.

Баян. Ожмах ҡапҡаһына етеп бара.

Мөхәмм ә тша *(тәмәке төрә)*. Кемдәргә ожмах, кемдәргә тамуҡ бөгөн. Сыҡмаған пожарҙы көтөп ултыр инде.

Баян. Ниңә, Мөхәммәтша, көндөҙ беребеҙ торһа — еткән.

Мөхәммәтша *(ҡапыл төшөнөп)*. Конечно, ҡараңғы төшөүгә, мин ҡайтып етермен.

Баян. Юҡ. Мин ҡайтып етермен.

Мөхәммәтша. Тыңла инде, Баян. Өс хеҙмәт көнө бирәм.

Баян. Күҙ ҙә йоммай дүртте бирәм.

Мөхәммәтша. Ал биште!

Баян. Алмайым.

Мөхәммәтша. Тыңла инде. Минең Йәмилә бар бит.

Баян. Минең Мәһибәҙәр бар.

Мөхәммәтша. Һинең ышаныслы, исмаһам. Анау Аҡтаныҡ ауылының Ҡара Ҡотләхмәте кисә үк килеп еткәйне. Икенсе йыл инде Йәмилә тирәһендә урала ул.

Баян. Һинеңсә, минең Мәһибәҙәргә кеше күҙе төшөрлөк түгел инде, ә?

Мөхәммәтша. Төшөрлөк тә...

Баян. Шулай булғас...

Мөхәммәтша. Мәңге онотмам яҡшылығыңды, Баян...

Баян. Һабантуй йылына бер генә була.

Мөхәммәтша. Ну, тиҫкәре әҙәмһең, әй.

Баян. Үҙең һуң?!

Мөхәммәтша. Юҡ, һин!

Баян. Һин!

Мөхәммәтша. Минең Йәмилә бар тип торам бит.

Баян. Минең — Мәһибәҙәр.

Мөхәммәтша. Һинең Мәһибәҙәреңә кем тейһен...

Баян. Һинең Йәмиләң...

Мөхәммәтша. Ауыҙыңды самалап ас, малай.

Баян *(каланчаға табан бара)*. Улайһа, икебеҙ ҙә ҡалайыҡ.

Мөхәммәтша. Ҡалмайыҡ.

Баян. Әйҙә ғәҙел генә ризалашайыҡ.

Мөхәммәтша. Ҡайһылай?

Баян. Аҡса сөйөп. *(Кеҫәһенән биш тин аҡса сығара.)* Бына сөйәм. Орел яғы өҫкә төшһә, һин китәһең, мин ҡалам. Решка төшһә, мин китәм, һин ҡалаһың. Ризамы?

Мөхәммәтша. Риза, сөй давай!

Баян *(сөйә)*. Решка!

Мөхәммәтша. Тимәк, мин китәм!

Баян. Юҡ, мин.

Мөхәммәтша. Бутаның. Сөй яңынан.

Баян *(сөйә)*. Решка!

Мөхәммәтша. Тимәк, һин ҡалаһың.

Баян. Юҡ инде, туған, башты бутама.

Мөхәммәтша. Аҡса менән белеп булмай ул. Әйҙә шыбаға тотабыҙ.

Баян. Ярай, һинеңсә булһын. *(Теҙген килтерә.)* Кем китә?

Мөхәммәтша. Өҫкә сыҡҡан.

Баян. Аҫҡа ҡалған бында ҡала.

Мөхәммәтша. Башла.

Баян. Үҙең башла.

Мөхәммәтша. Олораҡ чинлы кеше әйтә икән, башла!

Баян. Әйҙә! *(Шыбаға тоталар.)*

Мөхәммәтша. Буш тотаһың.

Баян. Ә һин бармаҡтарыңды тырпайтма! *(Баян өҫкә сыға)*. Бына күрҙеңме? Ғәҙеллек һәр ваҡыт өҫтөн сыға ул.

Мөхәммәтша. Значит, һинең шыбағанан бәхет бар. Елгә осто өмөттәр. Йәмиләгә күҙ-колаҡ була күр инде, Баян. Юғиһә анау Аҡтаныҡтың Ҡара Ҡотләхмәте бик сос малай.

Баян. Борсолма. Был маңлайҙа ике күҙ, ике күҙгә ике ҡыҙ. Береһе ҡояш, береһе ай, ике ҡыҙға — бер малай. *(Каланчаға үрмәләй.)*

Балсыҡ өйрәк ҡысҡыртып Иштимер инә.

Мөхәммәтша. Ҡайҙа киттең, Иштимер?

Иштимер. Олатайымды эҙләйем. Ҡәртнәйем әйтте, олатайың хәҙер үк ҡайтһын, тине. *(Таҫтамалдар элен-гән ҡолғаны күреп.)* Оһо! *(Һыҙғырта.)* Күпме сепрәк! Бер бәке юҡ.

Баян. Ниндәй бәке?

Иштимер. Ҡылыс юна торған.

Баян. Ана, Мөхәммәтша, еҙнәң булғас бәке бирер әле.

Иштимер. Кәрәге бер тин.

Мөхәммәтша. Ниңә, Иштимер, һиңә ике йәпле бәке оҡшамаймы ни?

Иштимер. Оҡшаһа ни, Йәмилә апайымды ике йәпле түгел, биш йәпле, хатта меӊ йәпле бәкегә лә алмаштырасағым юҡ.

Мөхәммәтша. Ниңә?

Иштимер. Тик.

Мөхәммәтша. Ҡыҙҙар тауына сыҡҡас, теге Ҡотләхмәт апайың тирәһендә урала башлар әле бына.

Иштимер. Уралып ҡына ҡараһын. Таш менән бәреп, ботон һындырырмын ул ҡара тауыҡтың.

Баян. Тағы ике күҙ булды...

Иштимер *(аңламай)*. Һин үҙең ике күҙ! Мин олатайымды эҙләйем.

Мөхәммәтша. Туп-тура Туҡтабикәләргә бар. Олатайың шунда.

Иштимер *(һыҙғырып китә, сығыр алдынан ҡапыл ҡысҡырып)*. Апайымдар әле генә һеҙгә йыр сығарҙы! *(Йырлай.)*

Мин юғары, ай түбән,
Каланчала төш күрәм.
Каланчала төштәр күрәм:
Имеш, айҙы һүндерәм.

*(Телен сығарып күрһәтә лә йүгерә.)*

Баян. Бына һиңә һабантуй...

Иштимер әле генә әйткән йырҙы йырлап, Йәмилә, Маһибәҙәр, Йәмлегөл, Мөнирә һәм башҡалар инә. Ҡайһыһы ҡайыған таҫтамал, ҡайһыһы ҡулъяулыҡ, шарф, янсыҡ тотҡан.

Маһибәҙәр. Ярай әле аулаҡ саҡҡа тура килдек, ҡыҙҙар... Юғиһә мин оялам.

Йәмилә. Беҙҙең йоҡо батырҙары шундай хәтәр эштәрҙән һуң тиҙ генә уянмаҫтар әле.

Йәмлегөл. Айҙы һүндереп ҡуйһалар, ирмәк булыр инеме икән, ҡыҙҙар?

Мөнирә *(көрһөнөп)*. Ай әллә ҡасан һүнгән инде ул.

Йәмилә *(ҡолға төбөнә килә)*. Күпме бүләк йыйылған! Арғы урам ҡыҙҙары тырышҡандарҙыр инде... Улар ҡул эшенә оҫталар шул...

Мөнирә. Уның урынына комсомолкаларына хәтле ҡылансыҡтар.

Маһибәҙәр *(бүләген килтереп бәйләй)*. Көрәштә еңеүсе егеткә эләкһен ине минең бүләгем.

Йәмлегөл. Мин иң шәп йүгереккә юрайым. Йә бағана башына менгән кешегә... Һин, Мөнирә?

Мөнирә. Мин береһенә лә юрамайым. Барыбер миңә күҙ һалыусы юҡ.

Йәмилә. Күр ҙә тор, үҙеңә бына тигән егет ғашиҡ булыр әле.

Мөнирә. Ун етем тулғансы булмағас, булмаҫ инде. *(Көрһөнә.)*

Йәмлегөл. Кисә уйында Аҡтаныҡтың йырсы Ильясы үҙеңде йоторҙай булып ҡараны инде, Мөнирә.

Мөнирә. Бер ҡарау менән.

Ҡыҙҙар. Йәмилә, ә һин кемгә юрайһың бүләгеңде?

Йәмилә. Минме? *(Көлә.)* Күҙ бәйләп көршәк ватыусыға...

Ҡыҙҙар шарҡылдап көләләр.

Йәмлегөл. Теше төшөп бөткән берәй ҡартҡа эләкһә, ирмәк тә була инде. *(Көлөшәләр.)*

Йәмилә *(көйләп ала)*.

Ҡыптыр-ҡыптыр туныңды
Ҡыптырлатып кейерһең,
Бәхетеңә тура килһә,
Ҡарт булһа ла күнерһең...

Ә быныһы йоҡола еңеп сыҡҡан Мөхәммәтша батырға.

Маһибәҙәр. Быныһы Баян баһадирға.

Йәмилә менән Маһибәҙәр мөйөшөнә еп тағылған кескәй генә мендәрҙәрҙе каланчаның ике бағанаһына бәйләп ҡуялар.

Йәмлегөл. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, сәңгелдәк йырлайбыҙ.

Йәмилә. Башла, Йәмлегөл!

Йәмлегөл. Маһибәҙәр башлаһын.

Маһибәҙәр. Һә-һә, һә-һә, һә-һә.

Йәмлегел. Ә-ә, ә-ә, ә-ә-ә.

Йәмилә. Бәлли-бәлли, бәү, бәү, бәү.

Мөнирә. Бәү, бәү, бәү, бәү, бәү, бәү, бәү.

Бергә.

Таш яуһа ла йоҡларҙар,
Төш ауһа ла йоҡларҙар,
Йоҡонан һарай һалырҙар,
Төштә кәләш алырҙар.
Кәләштәр дан, имештер,
Бөтә яҡтан килештер,
Буй-һындары һөлөктәй,
Ирендәре еләктәй,
Йөҙҙәре нур сәсәлер,
Телдәре ут сәсәлер,
Бәү-бәү-бәү-бәү...
Бәү-бәү-бәү-бәү...

Баян *(юғарыла саң ҡаға)*. Пожар!

Ҡыҙҙар ситкә һибелә.

Маһибәҙәр. Ҡайҙа пожар?

Баян *(төшә)*. Мөнирә йөрәгендә...

Мөнирә *(хурланып)*. Абау!

Мөхәммәтша *(сыға)*. Ҡыҙҙарға минән сәләм!

Йәмилә. Йоҡо туйҙымы?

Мөхәммәтша. Бынау көндө йоҡо ҡайғыһымы? Йөрәк күкрәктән: «Бына сығам, бына сығам!» — тип тора.

Йәмилә. Ҡапыл уянһаң, шулай була шул.

Ҡыҙҙар *(тағы бергә йырлайҙар)*.

Каланчанан төшмәһәгеҙ,
Беҙҙән ҡолаҡ ҡағырһығыҙ,
Йоҡоғоҙҙо асмаһағыҙ,
Мәңге буйҙаҡ ҡалырһығыҙ.

Алыҫта ҡыңғыраулы гармун, йыр тауышы ишетелә.

Мөхәммәтша. Аҡтаныҡтар фарсит иткән була.

Йәмилә. Ҡулдарынан килгәс, итерҙәр шул.

Мөнирә. Аҡтаныҡтар дәртле улар. Каланчала ла ҡарттар ғына тора унда.

Баян. Шуға күрә былтыр тимерсе аласыҡтары янып китте лә...

Мәһибәҙәр. Харап икән. Тимерсе аласығы янған, имеш! Бында йөрәк дөрләп янғанын һиҙеүсе юҡ.

Ҡыҙҙар. Кистән дә яна йөрәк,
Иртән дә яна йөрәк,
Яна йөрәк, яна йөрәк,
Яна, пожарник кәрәк!

Йыр яҡыная. Бер аҙҙан Ҡотләхмәт, Шөкөр, Ильяс, йәнә ике-өс егет инә. Шөкөр гармун уйнай. Беренсе йыр алыҫта ишетелә, икенсеһенең яртыһын сәхнәлә йырлап бөтөрәләр. Йыр «Аҡтаныҡ» көйөнә йырлана.

Беҙ үҙебеҙ Дәү Аҡтаныҡ,
Көн итмәйбеҙ маҡтанып,
Беҙ урамдан үткән саҡта,
Ҡыҙҙар ҡала уфтанып.

Их, илдәре лә илдәре,
Илдәрендә — күлдәре,
Был илдәрҙә ҡыҙҙар йырлай,
Һандуғастай телдәре.

Аҡтаныҡтар ингәндә, ҡыҙҙар ҡолға тирәһендә бүләктәр ҡараған булалар. Баян баҫҡыста ултыра. Мөхәммәтша мискәгә һөйәлгән. Гармун саҡ ҡына тынып тора ла, Ильяс ҡул һелтәй. Шөкөр сыңлатып «Аҡтаныҡ» көйөн уйнап ебәрә.

Егеттәр. Урам аша сыҡҡан саҡта,
Әллә абындығыҙмы?
Һарыға һабышҡанһығыҙ,
Әллә һағындығыҙмы?

Ҡыҙҙар. Килеп китер юлығыҙға
Әллә ауҙымы ҡайын?
Һеҙҙе уйлап йәш түгәбеҙ
Һуған тураған һайын.

Ҡотләхмәт *(ҡул һелтәп гармунды туҡтата. Ҡулындағы пакеттан алып кәнфит һибә)*. Кәрешкә ауылының һылыу ҡыҙҙарына, беренсе сиратта, сибәрҙәрҙең-сибәре Йәмиләгә сәләм! *(Кепкаһын һалып, башын эйә.)*

Ильяс. Йәмиләгә, Мөнирәгә, Йәмлегөлгә, Мәһибәҙәргә сәләм! *(Кәнфит ырғыта.)*

Башҡалар. Сәләм! *(Баш эйәләр.)*

Йәмилә. Сәләмегеҙҙе алдыҡ, кәнфитле һүҙҙәрегеҙҙе кире ҡайтарып бирҙек. *(Кәнфиттәрҙе кире ырғыта.)*

Шөкөр. Бер биргәнде беҙ кире ҡайтарып алмайбыҙ, Йәмилә. Күктә йондоҙ күп, ә ай бер генә.

Ильяс. Йәмилә ай булһа, һеҙ, ҡыҙҙар, ай тирәһендәге йондоҙҙар.

Шөкөр. Ҡайһығыҙ Сулпан, ҡайһығыҙ Зөһрә, ҡайһығыҙ иләк йондоҙ, ҡайһығыҙ силәк йондоҙ тигәндәй... Тик бөгөн айҙы һүндерә яҙғандар, ти, бит әле.

Бөтәһе лә Баян менән Мөхәммәтшаға борола.

Ҡотләхмәт. Шулаймы ни? Хәйерлегә булһын! Һаумыһығыҙ, егеттәр!

Баян. Арыубыҙ әле.

Мөхәммәтша баш ҡына ҡаға.

Шөкөр. Ҡунаҡтарҙы бик һүрән ҡаршылайһығыҙ, хужалар!

Ҡотләхмәт. Әллә йоҡо туйманымы?

Мөхәммәтша. Ҡунаҡ булһаң, Ҡотләхмәт, тыйнаҡ бул. Кеше баҡсаһына ингән кәзә кеүек, һөмһөҙ ҡыланма, йәме. Юғиһә...

Ҡотләхмәт. Юғиһә, нимә?

Мөхәммәтша. Юғиһә, бына! Эйеме? *(Йоҙроҡ күрһәтә.)*

Ҡотләхмәт. Үткән һабантуйҙа Ҡотләхмәттең, елкәһенә ҡырҡмыш тай һалып, майҙанды ике тапҡыр әйләнгәнен оноттоңмо ни?

Баян. Беҙ ҙә ҡамырҙан яһалмаған...

Шул арала ҡыҙҙар быш-быш һөйләшәләр. Ильяс Мөнирәгә текләп ҡарап тора.

Йәмилә. Сәсән бәхәстә, батыр майҙанда һыналыр. Бөгөн көн һеҙҙеке. Алдан маҡтанмағыҙ!

Ҡотләхмәт. Ҡуй, Мөхәммәтша, бир ҡулыңды. Майҙанда осрашырбыҙ.

Мөхәммәтша. Яҙған булһа...

Шөкөр. Бына шулай. *(Уйнап ебәрә лә туҡтай.)*

Ильяс *(Мөнирәгә)*. Мин һиңә һүҙ ҡушырға самалайым, Мөнирә.

Мөнирә. Ҡыҙҙар тауында, Ильяс! *(Ситкә йүгереп китә.)*

Шөкөр *(каланча бағанаһына аҫылған мендәрҙәрҙе күреп ҡала)*. Егеттәр!.. Быларҙы һөйәләп йоҡларға яйлағанһығыҙҙыр инде! Тыныс йоҡо! *(Гармун тарта.)*

Ҡыҙҙар һәм егеттәр «Аҡтаныҡ»ты йырлап сығалар.

Мөхәммәтша *(асыуланып мендәрҙәрҙе йолҡоп ала ла ҡарап тора)*. Йоҡонд о асырҙар былар! Һинән дә уңманым, Баян, уяу түгелһең. Ошо мендәрҙәрҙе лә күрмәгәс инде!

Баян. Мин һинән уңманым. Һүлпәнһең һин!

Мөхәммәтша. Тәнҡитте туҡтат ошонда.

Баян. Бөттө!

Мөхәммәтша. Ун хеҙмәт көнө бирәм, тыңла инде, Баян!

Баян. Булмай.

Мөхәммәтша. Ун биште бирәм.

Баян. Булмай. Анау Шөкөрҙөң күҙҙәре уйнап тора. Маһибәҙәргә өс тапҡыр ҡараны.

Мөхәммәтша. Их, егет кеше эшеме ни пожар һаҡлау? Йәмилә менән һөйләшеп тә булманы, исмаһам.

Баян. Улар бында ҡырҡ тапҡыр һуғылыр әле. Ярай, мин дә ҡайтып өҫтө-башты алмаштырайым.

Мөхәммәтша. Наказды онотма! Бер күҙең унда, бер күҙең һулда булһын.

Баян. Тырыштырырмын! *(Китә.)*

Мөхәммәтша. Ярай, бер көнгә теште ҡыҫып булһа ла түҙербеҙ. Ҡайһылайыраҡ ҡылана Ҡотләхмәт. Йәнәһе, Йәмилә алдында шәпле булып күренергә тырыша... Шулай ҙа Әптерәйҙең биноклен һоратып торорға тура килер. Ул саҡ Ҡыҙҙар тауы беҙҙең ҡулда буласаҡ. *(Каланчаға менә.)*

Бер нисә ҡыҙ-ҡырҡын, бала-саға ҡолғаға тағы бүләктәр элеп китә... Әжмәғол менән Дәүләтбай инә. Иштимер эйәргән. Әжмәғол нығыраҡ ҡыҙмаса.

Әжмәғол. Туктабикә киленгә күҙем төштө, тиһең икән.

Дәүләтбай. Төштө шул.

Әжмәғол. Бисәлеккә димлә, тиһең икән.

Дәүләтбай. Димләй күр инде, Әжмәғол ағай.

Әжмәғол. Ә һин беләһеңме Туктабикә килендең кемлеген?

Дәүләтбай. Беләм.

Әжмәғол. Белмәйһең һин. Туктабикә килен алтын ул. Районда, Башкортостанда, СССР-ҙа, хатта бөтә донъяла унан уңған доярка юк. Первый сорт!

Дәүләтбай. Беләм.

Әжмәғол. Белһәң, тик тор! Кана сак кына ултырып алайым әле, ә һин баҫып торһаң да ярай, Дәүләтбай кусты.

Иштимер. Кәртнәйем әйтте, олатайыңды тиҙ үк алып кайт, тине.

Әжмәғол. Кайтып килә ятабыҙ ҙа. Бар, ана, каланчаға менеп, йыһанды карап төш.

Иштимер. Әрләмәҫтәрме?

Әжмәғол. Олатайым үҙе кушты тиген.

Иштимер менеп китә.

Дәүләтбай. Ике йыл тол йөрөнөм. Бисәһеҙ кыйын. Күңелгә окшағаны ошо Туктабикә инде.

Әжмәғол. Тороп тор. Һорауға ғына яуап бир. Кайһы ауылдыкы, кем булып эшләйһең?

Дәүләтбай. Әжмәғол ағай! Быны тора торғас, һин мине бит бынау сактан беләһең.

Әжмәғол. Мин, «Етегән йондоҙ» колхозының ревкомиссия председателе буларак, һиңә рәсми һорау бирәм. Туктабикәне кемгә коҙалағанымды мин тағы бер тапкыр тикшереп сығырға тейешмен. Тәүге һорауға яуап бир, Дәүләтбай!

Дәүләтбай. «Комбайн» колхозында һыйыр фермаһы мөдире булып эшләйем. Ферма быйыл һәр һыйырҙан...

Әжмәғол. Уныһы кәрәкмәй. Нисә йәштә?

Дәүләтбай. Кырк өстә.

Әжмәғол. Тәүге бисәңдән нисә балаң калды?

Дәүләтбай. Бер ир бала, бер ҡыҙ бала. Икеһе лә мәктәпкә йөрөй.

Әжмәғол. Пленда булманыңмы?

Дәүләтбай. Окружениела булдым. Йырып сыҡтыҡ.

Әжмәғол. Молодец! Шулай йырып сығырға кәрәк. Эсеп йөрөй торған ғәҙәтең юҡмы?

Дәүләтбай. Юҡ.

Әжмәғол. Унда, фермала, бисә-сәсә тирәһендә ялаһып йөрөмәйһеңме?

Дәүләтбай. Исеме сыҡҡан кеше түгелмен.

Әжмәғол. Шулай ҙа булғыланымы ни?

Дәүләтбай. Йәшереп булмай, берәү менән аҙ ғына сыуалдым. Хәҙер юҡ.

Әжмәғол. Берәү генә булғас, ничево...

Дәүләтбай. Ул да аҙғынлыҡтан түгел...

Әжмәғол. Аҡланыу кәрәкмәй. Эшең буйынса выговор юҡмы?

Дәүләтбай. Шелтә бар. Бер һыйыр силос ямына төшкәйне.

Әжмәғол. Ә? Халатность? Быныһы насар, ҡустым.

Дәүләтбай. Уныһы ла былтырғы хәл бит.

Әжмәғол. Ярай, был гонаһыңды ла списать итәм — йәғни ярлыҡайым... Шулай. Һинән арыу кейәү сығыр һымаҡ. Мин баш ҡоҙа булырға ризамын. Тик бер шартым бар.

Былар һөйләшкәндә, Иштимер каланчанан төшөп йүгерә. Ул бәке менән ағас юна. Тимәк, Мөхәммәтша менән килештеләр.

Дәүләтбай. Шартыңды әйт, ағай.

Әжмәғол. Беҙҙең колхозда 60 мең һумлыҡ газогенераторный бер двигатель бар. Үҙебеҙ ходҡа ебәрмәҫкә булдыҡ. Ә 60 мең һауала аҫылынып тора. Күндер председателеңде. Һатып алығыҙ шуны.

Дәүләтбай. Беҙҙә электричество бар бит, ағай.

Әжмәғол. Ҙур колхозда урын табылыр.

Дәүләтбай. Белмәйем шул!

Әжмәғол. Улайһа, мин дә белмәйем. *(Китә башлай.)*

Дәүләтбай. Улай тотҡан ерҙән һындырма әле, ағай, уйлашайыҡ.

Әжмәғол. Хаҡын саҡ ҡына кәметергә лә була, 40-ҡа төшөрөргә мөмкин.

Дәүләтбай. Өгөтләрмен.

Әжмәғол. Бына, исмаһам, ир һүҙе! Ул саҡта Туҡтабикә һинеке.

Дәүләтбай. Ә Туҡтабикә риза булмаһа?

Әжмәғол. Уныһы минең эш. Бер ҙә яйға килмәһә, урлап ҡасырбыҙ.

Дәүләтбай. Ҡуй, ағай, тере кешене нисек урламаҡ кәрәк?

Әжмәғол. Их, һеҙ, шыйыҡ быуындар! Урлап алған бисә ҡәҙерле була ул. Уңғанбикә еңгәңде урлап ҡасыуым тураһында әллә нисә йыл тоташ һөйләнеләр. Хәтәр егет инем мин заманында!

Бая киткән егеттәр йырлап килеп туҡтайҙар.

Ете ҡат йөҙөп ураным
Күлдәрҙең түңәрәген,
Ошо илдә йәшәй минең
Мөхәббәт күбәләгем.

Егеттәр. Әжмәғол ағайҙың үҙенә сәләм!

Әжмәғол. Алдыҡ. *(Дәүләтбайға.)* Әлбиттә, ул быларҙың ҡулынан килә торған эш түгел.

Ҡотләхмәт. Нимә, ағай?

Әжмәғол. Ҡуй, һорашма ла...

Шөкөр. Бәлки, ҡулдан да килер.

Әжмәғол. Булмаҫ. Ҡыҙ урлай торған егеттең ҡиәфәте башҡа була уның. Уларға ҡара ла миңә ҡара...

Ильяс. Һин дә шыттыраһың, ахыры...

Әжмәғол *(ҡыҙып китә)*. Һеҙ Әжмәғол бәһлеүәндең кемлеген белмәйһегеҙме ни әле? Молокососстар! Минең ҡыҙ урлап ҡасыуымды күргән кешеләр әле лә шаҡ ҡаталар.

Йәштәр аҡрынлап ҡарт тирәһенә йыйыла.

Көпә-көндөҙ әллә нисә мең кешенең күҙ алдында урлап ҡастым мин Уңғанбикәне.

Шөкөр. Ул тиклем үк булмаҫ та.

Әжмәғол. Телеңде тый, егет! Юғиһә, баштан-аяҡ һөйләнем ташланым булыр...

Егеттәр. Һөйлә, ағай, һөйлә әле!

Мөхәммәтша ла каланча баҫҡысына төшөп ултыра.

Әжмәғол. Тсс! Тауыш сығараһы булмағыҙ... Тссс!

Иштимер, бинокль алып, Мөхәммәтша эргәһенә эре генә бара, биноклдең әле бер яғынан, әле икенсе яғынан ҡарай. Баҫҡысҡа менеп китә.

Ҡотләхмәт. Шауламағыҙ, егеттәр! Әжмәғол ағай үҙе һөйләп бирә.

Мөхәммәтша *(ситкә)*. Ҡайһылайыраҡ ялағайлана!

Әжмәғол *(мыйыҡтарын һыйпаштырып)*. Беҙҙән тукһан саҡрымдар самаһы ерҙә Ҡолош тигән ауыл бар.

Шөкөр. Спидометр буйынса Ҡолош 37 километр.

Әжмәғол. Төкөрҙөм мин һинең спидометрыңа ласт иттереп. *(Төкөрә.)*

Егеттәр. Бүлдермә әле! Ҡыҫылма!

Әжмәғол. Туҡһан тигәс, туҡһан! Ана шул Ҡолошта Ҡырыҫбай исемле эштән ашҡан тиҫкәре бер ҡарт бар ине. Әлеге Уңғанбикәнең атаһы шундай әҙәм ине, мәрхүмең, ауыр тупрағы еңел булһын... Һи-и, ул саҡтарҙа Ҡолош һабантуйҙары! Дан була торғайны. Бер һабантуйҙа Уңғанбикәгә күҙ төштө бит. Ул да миңә керпектәрен һирпеп ҡарап ҡуйҙы... Мин ҡайт та ҡалым йыйырға тотон. Тау өйөп ташланым. Бөтәһе лә затлы нәмә. Шунан баяғы Ҡырыҫбайға яусы ебәрәм. Башта: «Ҡыҙым йәш», — тип киреләнде. Ҡыҙы, ысынлап та, йәш ине. Унан: «Бик сая халыҡ», — тип, затымды яратмай маташты. Бара торғас, йылдар ауырға һылтай башланы. Теге ярман һуғышы заманы ине.

Ильяс. Вәт ниндәй ҡарттар булған, әй!

Әжмәғол *(тамаҡ ҡырып)*. Йылға яҡын ваҡыт үтеп китте шулай. Тағы һабантуйҙары килеп етте. Һи... Ул ваҡыт һабантуйҙары! Ҡыҙ урлап ҡасыу тиһеңме, әҙәм туҡмау тиһеңме — мәрәкә өҫтөнә мәрәкә була торғайны. Һәр һабантуйҙан, кәм тигәндә, ике-өс кеше туптура баструкка олаҡтырыла ине...

Шөкөр. Ҡолош һабантуйы, тиһеңме?..

Әжмәғол. Эйе. Бөгөнгөләй хәтеремдә. Июндең беренсе йомаһында булды ул оказия. Өҫкә ап-аҡ елән, башҡа ап-аҡ эшләпә, аяҡҡа ҡап-ҡара итек кейеп, билбауға револьвертты ҡыҫтырып, сөм-ҡара айғырҙы еҙ эйәр менән эйәрләп атландым да киттем Ҡолошҡа. Ала бейәһенә атландырып, Танау Сәхипте лә эйәртеп алдым. Хәҙер мәрхүм инде. Тере саҡта ғәйрәтле ир ине. Һабантуй ҡыҙыуға ғына барып еттек. Майҙан гөж килә. Аттан төшмәй генә, бер яҡ ситтән ҡарап торабыҙ. Бөтә ғаләм шатлана, ә минең эсем тулы ут. Бер мәл күрәм, бейеү түңәрәге уртаһына Уңғанбикә сыҡты. Орсоҡ кеүек, ойотоп бейергә кереште. Һай, бейей ҙә һуң! Хоҙай ҡанат ҡына бирмәгән! Шул ваҡыт эсемдәге йөрәк-бауырым леп итеп өҙөлөп төштө. «Түҙемем бөттө, Әжмәғол!» — тинем үҙ-үҙемә. Ғүмеремдә тәү тапҡыр ҡара айғырға ҡамсы һуҡтым. Арғымаҡ урынынан уҡ осоп китте. Майҙанды икегә ярып, түңәрәк эсенә килеп тә туҡтаным. Халыҡ төркөмө, уртаға киҫелгән икмәк кеүек, икегә айырылды ла ҡуйҙы. Кешеләр асыҡ ауыҙҙарын ябырға ла өлгөрмәнеләр, эйәрҙә көйө генә Уңғанбикәне һул ҡул менән эләктереп тә алдым. Атым үрә ырғыны. Килгәс, бөтә формаһы килһен тип, ә ҡайһы берәүҙәр кемдең кем икәнлеген белһен тип, револьвертты сығарып, өс тапҡыр гөп, гөп, гөп һауаға аттым. Арғымағым йәйәнән ысҡынған уҡ кеүек атылды.

Ҡотләхмәт. Бына кем егет, исмаһам!

Ильяс. Була бит ҡуш йөрәкле әҙәмдәр!

Әжмәғол, маһайып, мыйығын һыйпай.

Шөкөр. Ә аръяғы, ағай?

Әжмәғол. Уңғанбикәне ҡосаҡлап алдым да, илле саҡрымды артҡа әйләнеп тә ҡарамай, саптым, аҡбуҙ атым ҡара тиргә батты...

Шөкөр. Ҡара айғырҙа һыбай инең бит, Әжмәғол ағай!

Әжмәғол. Ниндәй ҡара айғыр? *(Хәтерләп.)* Ундай саҡта күҙгә аҡ-ҡара күренәме ни? Йүнһеҙ, ахмаҡ телең менән аҡыллы һүҙҙе бүлдерҙең...

Егеттәр. Телеңде тешләп ултыр әле, Шөкөр! *(Үҙҙәре пырх-пырх көләләр.)*

Әжмәғол. Бына һеҙгә бер история, еүеш танауҙар!

Ильяс. Ала бейәле дуҫың тороп ҡалдымы?

Әжмәғол. Ала бейә? Ә... Ҡайтты. Тик өс ҡабырғаһын һындырып ҡайтарҙылар. Тиҙ төҙәлде улай...

Шөкөр. Унан ары нимә булды?

Әжмәғол. Ана шул булды.

Уңғанбикә *(алыҫтан ҡысҡырып килә)*. Әжмәғол! Әжмәғол, тим... *(Инә.)* Һабантуй ҡотло булһын, тай-тулаҡ.

Егеттәр аяҡ үрә баҫа.

Шөкөр. Һеҙ ҙә, Уңғанбикә еңгә, уйын-көлкө, һыйхөрмәт эсендә үткәрегеҙ.

Уңғанбикә *(картына яһалма йылмайып)*. Мин уны, майҙа ғына йөҙҙөрөп, ҡоймаҡтар бешереп көтәм... Мунсам да өлгөрҙө... Ҡыҙыу саҡта сабынып сығырһың тигәйнем...

Әжмәғол *(ҡаушай, ләкин иҫереклеген еңә алмай)*. Төшөнәм, төшөнәм, ҡарсыҡ... Һай, үҙемдең ҡарсыҡты әйтәм, ун һигеҙ йәшлек ҡыҙға биргеһеҙ. Бөгөн үк урла ла ҡас үҙен!

Уңғанбикә. Әтеү...

Әжмәғол. Әллә юҡҡа тиһеңме, аҡбуҙ атты көмөш эйәр менән эйәрләп, револьвертты һул яҡҡа, авторитет сумкаһын уң яҡҡа аҫып...

Уңғанбикә *(картын семтеп ала)*. Әйҙә инде, ҡарт, төшөңдө өйҙә һөйләп бөтөрөрһөң.

Иштимер ултырған баҫҡыс эргәһенә килә, шул саҡ Мөхәммәтша өҫкә менеп китә. Уңғанбикә Иштимерҙе бороп семтеп ала.

Йомошто шулай йомошлайҙармы ни?

Иштимер. Ҡайтып килә ятабыҙ ҙа... *(Танауын тарта.)*

Уңғанбикә. Әйҙә, олатайың менән икәүләп мунса керерһегеҙ...

Әжмәғол *(Дәүләтбайҙы ымлап саҡыра)*. Әйҙә, Дәүләтбай ҡустым, әйҙә беҙгә, бергәләп сәй эсербеҙ...

Уңғанбикә. Әйҙәгеҙ, әйҙә, әйҙә...

Әжмәғол, Дәүләтбай, Уңғанбикә, Иштимер сығалар.

*(Ситтән ишетелә.)* Мин мунса кертермен әле һеҙҙе, тамуҡ киҫәүҙәре, зобаныйҙар...

Шөкөр. Заманында ҡыҙҙың хәтәрен урлаған икән был Әжмәғол ҡарт.

Ильяс. Шулай ҙа әҙәм урлау эш түгел инде, егеттәр.

Ҡотләхмәт. Егеттәр! Башҡа бер фекер килеп төштө.

Шөкөр. Һирәк була торған хәл.

Ҡотләхмәт. Ташла шул ут төкөрөүеңде!.. Килегеҙ әле...

Егеттәр Ҡотләхмәтте уратып алалар.

*(Ҡарана. Мөхәммәтшаның юҡлығын белә. Бышылдап һөйләй.)* Дәүләтбай ағайҙың «Москвич»ы хутлы. Эш ҙурға китһә, Әжмәғол ҡарт үҙе ҡотортто, тиербеҙ.

Беренсе егет. Баш китерлек эш был. Кеше бит — бесәй балаһы түгел...

Шөкөр. Ҡурҡаҡтар һеҙ, дуҫтар, имеш... *(«Аҡтаныҡ» көйөнә гармун тартып ебәрә, үҙе йырлай.)*

Аҡтаныҡ һыуҙары тәрән,
Иңләнем, буйламаным,
Ғишыҡтан моңайырмын, тип
Һис кенә уйламаным.
Аҡтаныҡ туғайҙарында
Ҡарағат менән муйыл,
Ғүмергә буйҙаҡ ҡалырмын,
Һин ҡарамаһаң быйыл.

Егеттәр йырлап сығып китәләр. Бинокль тотоп, Мөхәммәтша төшә. Биноклдән ҡарай.

Мөхәммәтша. Ҡыҙҙар тауын минең кеҫәлә тип иҫәпләргә мөмкин хәҙер. Йәғни бына ул ҡайҙа Ҡыҙҙар тауы. *(Усын йомарлай.)* Ну, Ҡотләхмәт, бер килеп

эләгерһең эләгеүен, көнө бөгөн түгел. Шулай ҙа каланча һаҡларға бирәйһен көндәрәһе ине.

Полевой сумка аҫҡан Шәмсулла һәм биҙрә, бумала күтәргән Ирҙәүләт ҡарт инә. Мөхәммәтша башта уларҙы күрмәй.

Шәмсулла. Быныһын дөрөҫ эшләгәнһең, туған, янғынға ҡаршы көрәштә бөтә техника файҙаланылырға тейеш. Шул иҫәптән бинокль дә. *(Счет төймәһе тартыу хәрәкәте яһап ҡуя.)*

Мөхәммәтша. Авторитет сумкалары аҫып, иртә таңдан ҡайҙа киттең былай, Шәмсулла ағай?

Шәмсулла. Эш муйынынан, туған. Һабантуй майҙаны өсөн иң яуаплы кеше мин. Пока! *(Фуражкаһын һала.)*

Ирҙәүләт. Пока! Пока! *(Йәмшәйеп бөткән эшләпәһен һала.)*

Шәмсулла *(кире килә, уның артынан Ирҙәүләт тә борола Мөхәммәтшаға)*. Бөгөн, туған, үҙең беләһең, ауыл өсөн иң яуаплы кеше һин. Пока! *(Фуражкаһын һала. Китерғә бара.)*

Ирҙәүләт. Пока! Пока! *(Эшләпәһен һала.)*

Мөхәммәтша. Ирҙәүләт ҡоҙа, тороп торсо саҡ ҡына.

Ирҙәүләт. Хәбәреңде тиҙ һөйлә.

Мөхәммәтша. Ҡайҙа былай ашығаһың?

Ирҙәүләт. Һин һорашма, мин әйтмәйем.

Мөхәммәтша. Ирҙәүләт ҡоҙа, һиңә бик ҙур үтенес бар ине.

Ирҙәүләт. Әйт үтенесеңде.

Мөхәммәтша. Көтөү ҡайтҡансы минең өсөн бында тороп тормаҫһыңмы икән, тигәйнем.

Ирҙәүләт. Эш муйынынан.

Мөхәммәтша. Биш хеҙмәт көнө бирәм.

Ирҙәүләт. Алмайым.

Мөхәммәтша. Унды...

Ирҙәүләт. Кәрәкмәй.

Мөхәммәтша. Ун биш көн, бер аҡ баш, бер киҫәк таҡта сәй.

Ирҙәүләт. Булмай. Сәй менән араҡыға алдана торған ваҡыттар үтте инде, ҡоҙа. Вәссәләм!

Шәмсулла *(ҡысҡырып кире инә)*. Ирҙәүләт күрше, әңгәмә һөйләр саҡмы ни? Әңгәмә бөгөн — саботаж менән бәрәбәр! *(Мөхәммәтшаға.)* Пока!

Ирҙәүләт. Пока! Пока! *(Китәләр.)*

Мөхәммәтша *(арбалағы мискәгә барып ҡаплана)*. Былай булғас, уф, тиһәң дә ярай.

Йәмилә менән Йәмлегөл үтеп барған була. Мөхәммәтшаны күреп, шарҡылдап көләләр. Мөхәммәтша башын күтәрә.

Йәмилә. Әллә мискәгә сумырға самалай инеңме, Мөхәммәтша?

Мөхәммәтша. Мискәгә түгел, диңгеҙгә сумһаң да, баҫылырлыҡ түгел минең күкрәгемдәге хәсрәттәр, Йәмилә.

Йәмлегөл. Бахырҡай...

Йәмилә. Ул тиклем йәлләмә, йә илатырһың.

Йәмлегөл. Илаһа, йәшен һөртөр кеше бар ҙа баһа.

Йәмилә. Ҡайыған ҡулъяулыҡ менән һөртөргәме әллә простойы ла ярармы?.. Әйҙә, Йәмлегөл, унда беҙҙе көтәләрҙер.

Мөхәммәтша. Ниңә, Йәмлегөл бара торһон, ә һиңә, Йәмилә, бер ауыҙ ғына һүҙем бар ине.

Йәмлегөл. Серҙәр берекһен. *(Китә. Оҙаҡ пауза.)*

Йәмилә. Әү, тим бит.

Мөхәммәтша. Күрмәгән һабантуй түгел инде, Йәмилә. Барма һин унда.

Йәмилә. Күрмәгән шул.

Мөхәммәтша. Бынау көндә яңғыҙымды ташлап китмә һин, Йәмилә, йөрәгең таш булмаһа...

Йәмилә. Һин пожар һаҡларһың, мин һине һаҡлармынмы?

Мөхәммәтша. Икегеҙҙе лә мин һаҡлармын, Йәмилә.

Йәмилә. Миңә тиҙ генә ут тоҡанмай ул.

Мөхәммәтша. Ут тоҡанмаһа, күҙ тейеүе бар.

Йәмилә. Тейҙермәһәң, теймәй ул.

Мөхәммәтша. Барма, зинһар.

Йәмилә. Бынау йөрәк, һандуғас булып, талпынып торғанда, ни йәнем менән өйҙә ултырайым, ти?

Мөхәммәтша. Мин һине ебәрмәйем.

Йәмилә. Бойораһыңмы?

Мөхәммәтша. Нығытып бойорам.

Йәмилә. Һауала осҡан ҡошҡа бойороп булмай ул, Мөхәммәтша. Бына тыңла:

Мин азат ҡош. Ағасты
Үҙем һайлап ҡунамын,
Мин күктәге йондоҙмон,
Теләгәндә янамын.

Мин иртәнге шаян ел,
Иҫәм тиһәм, иҫәмен.
Мин ҡырҙағы сәскәмен,
Үҙ иркемдә үҫәмен.

Мин тулҡынмын, бер саҡта
Һыйынырмын ярыма —
Ғүмерлеккә килермен
Һөйгән кешем янына.

Мөхәммәтша *(йырҙы мискәне ҡосаҡлап тыңлай)*. Уф! Барыбер китмә, ҡош булһаң да, ел булһаң да, сәскә булһаң да, йондоҙ булһаң да китмә, Йәмилә.

Йәмлегөл *(тыштан)*. Йәмилә! Әллә Мөхәммәтшаның ауыҙы бик ҙур булып сыҡты инде. Бер ауыҙ һүҙе һаман да бөтмәй.

Йәмилә. Елде еңер, ҡошто эйәләштерер, күктәге йондоҙҙо үрелеп алыр егеттәр бар донъяла, Мөхәммәтша.

Мөхәммәтша. Ихтимал, мин дә шундайҙыр.

Йәмилә. Ихтимал! Хуш хәҙергә... Ихтимал! *(Йүгереп китә.)*

Мөхәммәтша *(тағы мискәне ҡосаҡлай)*. Былай булғас, өс тапҡыр, уф, уф, уф, тиһәң дә, уфтанып бөтөп булмаҫ инде. Тағы бер уф! *(Каланча баҫҡысына баҫып һөйләй.)*

Уф! Ни хәл генә итәйем,
Ялҡын алған донъяһын.
Ут ялманы мискәләрен,
Насосын, каланчаһын.

Теге пожар пожармы ни?
Бына был пожар — пожар!
*(Йөрәген күрһәтә.)*
Хәсрәт пожары тоҡанды,
Яңғыҙым уфтанамын,
Ҡарап ятҡа, һалдың утҡа,
Һалам төҫлө янамын.
Теге пожар пожармы ни?
Бына был пожар — пожар!!!
*(Йөрәгенә һуға...)*

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Ҡыҙҙар тауы. Тирә-яҡта — ҡайын, имән, йүкә ағастары, ҡыуаҡтар. Уртала — ҙур ғына майҙан. Бер ағастан икенсе ағасҡа плакат һуҙылған: «Рәхим итегеҙ барсағыҙ ҙа!» Ирдәүләт имән, йүкә ағастарын аҡҡа буяп йөрөй. Шәмсулла төп башында бәләкәс кенә счеттың төймәһен тартып ултыра.

Шәмсулла. Был егерме өсөнсө имәнме әле?

Ирдәүләт. Егерме өсөнсө.

Шәмсулла *(счет тарта)*. Ун һигеҙ йүкә, егерме өс имән, йәмғеһе — ҡырҡ бер төп ағас.

Ирдәүләт. Ҡырҡ бер төп.

Шәмсулла. Һабантуй башланыуға, тимәк, ҡара ҡабыҡлы бер генә ағас та ҡалмай.

Ирдәүләт. Ҡалмай.

Шәмсулла. Бынау байрам көндө ап-аҡ ҡайындар араһында ҡап-ҡара имәндәр менән ҡап-ҡара йүкәләр ҡарайып, йәм боҙоп торһалар, килешер инеме? Килешмәҫ ине.

Ирдәүләт. Килешмәҫ ине.

Шәмсулла. Уларҙы ошолай ап-аҡҡа буятырға счетовод Шәмсулланан башҡа кемдең башы етер ине?

Ирдәүләт. Етмәҫ ине. Ярай әле имәне менән йүкәһе һирәк.

Шәмсулла. Ҡуйы булһа ла ҡаушап ҡалмаҫ инем. Яҡшы идея өсөн ҡорбан биреүҙән ҡурҡырға ярамай ул, ҡарт.

Ирдәүләт. Ярамай, ярамай...

Шәмсулла. Ҡарт булһаң да, яңылыҡты тояһың һин. Шуның өсөн уважать итәм мин һине.

Ирдәүләт. Итәһең, итәһең. *(Һуңғы ағасын буяп бөтөрә.)*

Шәмсулла. Был буяу расходын сусҡа фермаһын ағартыу иҫәбенә кертәбеҙ ҙә ҡуябыҙ уны.

Ирдәүләт. Һин ситауат — хөкөмөң үҙ ҡулыңда.

Ирдәүләт. Дөрөҫ. Үҙ ҡулымда. Кил, эргәмә генә ултыр әле. *(Сумкаһынан яртыны сығара, бер сынаяҡ өҫтөө ала.)*

Ирдәүләт. Бәрәкәте менән бирһен. *(Ултыра.)*

Шәмсулла. Саҡ ҡына өҫтәп ебәрәйек.

Ирдәүләт. Ебәрәйек. *(Шәмсулла үҙе эсә. Унан картҡа бирә. Эскәс, икеһе лә баш кейемдәрен һалып еҫкәйҙәр.)*

Шәмсулла. Ҡара әле, бөтә Ҡыҙҙар тауы ялт итеп тора бит.

Ирдәүләт. Ялт итеп тора.

Шәмсулла *(шешәне күтәреп, самалап, оҙаҡ ҡарап тора)*. Әллә етмәйерәк ҡалды инде, ҡарт?

Ирдәүләт *(тегенең ҡулындағы араҡыға күрһәтә)*. Хөкөмөң үҙ ҡулыңда.

Шәмсулла. Дөрөҫ. Үҙ ҡулымда. *(Үҙе эсә лә Ирдәүләткә бирә.)*

Ирдәүләт. Араҡыға алдана торған замандар үтте инде.

Шәмсулла *(иҫерә төшә)*. Үтте, ағай, үтте. Ә урман күҙ яуын алып тора. *(Башына төртә.)* Әҙәмдә фекер булырға тейеш.

Ирдәүләт. Бик тейеш.

Шәмсулла. Аҡ буяу түгел, кеше фекере яҡтырта был ағастарҙы.

Ирдәүләт *(нык иҫерә, урынынан тора)*. Теләйем икән, мин бөтә Уралдағы, хатта Рәсәйҙәге имәндәрҙе ағартам да сығам. Беҙгә нипочем ул! *(Биҙрәһе менән бумалаһын барып ала.)*

Шәмсулла. Ирдәүләт ағай, һин майҙанға тағы бер күҙ һалып сыҡ әле. Һыйыр тиҙәге-фәлән ҡала күрмәһен.

Ирдәүләт. Ҡалмаҫ, ҡалһа, аҡҡа буяйбыҙ уны. Беҙгә бөгөн барыһы ла нипочем... Вот! *(Сыға.)*

Шәмсулла. Тел тейҙерер әҙәм түгел. Тырыш ҡарт.

Алыҫта шау-шыу, гармун, ҡыңғырау тауыштары ишетелә.

Халыҡ ҡуҙғалды... Рәхим итһендәр барсаһы ла. Их, рәхәтлеккә сыҙап булмай. Бер йырлап ебәрһәң инде! *(Шешәнең бөкөһөн тығып, сумкаһына һала.)*

Йырлар инем дә, һүҙем юҡ,
Йырламайса, түҙем юҡ,
Моңаяһыңдыр, сибәрем,
Яндарыңда үҙем юҡ.

Аҡ беләгеңдән тотайым,
Ай битеңде үбәйем.
Үпмәҫ инем ай битеңде,
Үпмәй нисек түҙәйем?

Их, донъяның рәхәтлектәре! Мин бит үҙем счетовод булһам да, хис кешеһе, илһам кешеһемен! Счет төймәһенең һәр теҙмәһе шиғыр юлы кеүек күренә миңә. *(Счет ала, тарта.)* Ектереп пар ат, Ҡазанға туп-тура киттем ҡарап... *(Сығып китә.)*

Һабантуйға килеүселәрҙең йыры, шау-шыуы бөтөнләй яҡыная. Әжмәғол, Дәүләтбай, Иштимер инә. Әжмәғол бүләктәр эленгән ҡолғаны күтәргән, Дәүләтбай сирек менән бал тотҡан, Иштимер балсыҡ өйрәкте һыҙғырта.

Әжмәғол. Бисә шулай срочный кәрәк булғас, председателең менән телефон аша һөйләш. Туҡтабикә двигатель хаҡы ғына тормаймы ни?

Дәүләтбай. Туҡтабикәгә баһа юҡ уға, Әжмәғол ағай.

Әжмәғол. Һуң?

Дәүләтбай. Телефон аша һөйләштем. Риза түгел.

Әжмәғол. Улайһа, аллаһы әкбәр... *(Ҡарана.)* Имәнгә быйыл да ҡорт төштөмө икән ни? Дарыу һөрткәндәр. Майҙанды арыраҡ яһарға кәрәк...

Иштимер. Олатай, ҡәртнәйем әйтте, олатайыңа күҙ-ҡолаҡ бул, тине. Мөхәммәтша ағай әйтте, Йәмилә апайыңа күҙ-ҡолаҡ бул, тине. Мин нимә эшләйем инде?

Әжмәғол. Бар, үҙ тиҫтерҙәрең менән уйнап йөрө.

Иштимер. Ярай, олатай. *(Китә.)*

Әжмәғол *(ҙур кеҫә сәғәтен сығара, Дәүләтбайға)*. Председатель ағайыңдың аяғына йығыл: «Кәләш кәрәк», — тиген. Яуапты ун икеләрҙә бирерһең. Әле унынсы ете минут.

Дәүләтбай. Биреп булһа, бирермен дә... *(Үтәләр.)*

Ирҙәр уҙғас, Уңғанбикә менән Туҡтабикә үтә. Улар икеһе бер төрлө күлдәк кейгәндәр. Буйға ла бер самалар. Ҡулдарында — төйөнсөктәр. Ашамлыҡтар булырға тейеш.

Уңғанбикә. Анау Дәүләтбайҙы әйтәм, имәндәй ир көйөнә, әрәм булып йөрөй.

Туҡтабикә. Әрәм булып йөрөгәндәр был донъяла бер ул ғына түгел инде, еңгә.

Уңғанбикә. Иншалла, фәрештәнең «амин» тигән сағына тура килеп, бәндәнең күңел күҙе асылып ҡуйыуы ла бар.

Туҡтабикә. Ғүмер буйы шулай ситләтеп һөйләнең, еңгә.

Уңғанбикә. Мин ситләтһәм, һин тура аңла. *(Әйләнеп Туҡтабикәне баштан-аяҡ ҡарап сыға.)* Үҙеңә ҡарайым да уйлап ҡуям: Туҡтабикә, һин барҙа ни ет-те ҡыҙҙарың бер ситтә торһон — йүн белгән ир өсөн. Матурлығың да, уңғанлығың да, буй-һының да — күрер күҙгә бәрәкәт! Валлаһи, бәрәкәт, киленкәйем!

Шарҡылдашып көлөшәләр. Арттан Әжмәғол ҡысҡыра.

Әжмәғол. Ҡарсыҡ...

Уңғанбикә. Хәҙер! Ғүмер буйы көйһөҙ бала кеүек булды ошо Әжмәғол! *(Сығалар.)*

Ҡыҙҙар йыры:

Һыуҙар алдым шишмәләрҙән
Таң атҡан саҡта,
Ағын һыуҙай, тынмай күңел,
Яратҡан саҡта.

Ел менән сәләм ебәрәм,
Таң атҡан саҡта.
Һандуғастар өҙҙөрәләр
Мөхәббәт йырын,
Сәскә һайын һипкән был яҙ
Мөхәббәт нурын.
Бер һиңә генә йырлайым
Мөхәббәт йырын.

Маһибәҙәр. Йәмилә ҡайҙа ҡалды, ҡыҙҙар?

Мөнирә. Күбәләкте әйтәм, әрекмән ауына эләгеп ҡуймаһа ярар ине.

Бер ҡыҙ. Эләктерә торғаны Ҡотләхмәт түгел.

Йәмлегөл. Ниңә, Ҡотләхмәт әллә ҡыҙ ҡарамаҫлыҡ егетме? Йәмилә артынан юҡҡа ғына йөрөй ул — ботинка туҙҙырып, ваҡыт уҙҙырып.

Маһибәҙәр. Маҡтансыҡ ул Ҡотләхмәт.

Йәмлегөл. Күрәһең, маҡтаныр урыны барҙыр.

Мөнирә. Әллә күҙең төштөмө?

Йәмлегөл. Төшһә лә, ғәжәп түгел.

Мөнирә. Уңыш теләйем.

Йәмлегөл. Һиңә лә.

Шул арала ҡыҙҙар сәскә өҙә-өҙә сыға башлайҙар.

Маһибәҙәр. Башым әйләнеп йығылғансы бейейем әле бөгөн... Йығылһам, Баян мине күтәреп алыр инеме икән?

Мөнирә. Һин тәүҙә йығылып ҡара.

Маһибәҙәр. Биллаһи, йығылам...

Ҡыҙҙар юҡ булалар. Бер ҡайынға һөйәлгән Мөнирә генә ҡала. Шөкөр менән Ильяс инә. Шөкөр «Аҡтаныҡ» көйөн уйнай. Ильяс йырлап ебәрә.

Ильяс.

Ектем шул аттың ерәнен,
Ялы ергә тейгәнен,
Һөйҙөм шул йәрҙең сибәрен,
Илдәрҙә бер тигәнен.

Аҡтаныҡ буйҙары ҡамыш,
Ҡамышы ҡатыш екән.
Эскәйҙәрем тулы һағыш,
Тик ул һағышлы микән?

Мөнирә *(үҙе лә һиҙмәҫтән бышылдай)*. Һағышлы... Бик һағышлы...

Ильяс *(Мөнирәне күреп ҡала)*. Мөнирә!.. Һин нимә тинең?

Мөнирә. Әйтмәнемсе. Һинең йырыңды ғына тыңланым.

Шөкөр. Һин ҡайһы арала шулай үҫеп, һылыуланып киттең әле, Мөнирә?

Мөнирә *(оялыбыраҡ)*. Быйыл яҙ. Май ямғырынан һуң.

Шөкөр. Күҙ теймәһен!

Мөнирә. Ә һеҙ ул тиклем ҡарамағыҙ.

Ильяс. Бына ниндәй һәйбәт булып сыҡты! *(Шөкөргә китергә ымлай.)*

Шөкөр. Күреп, төшөнөп торам һәм... китәм. *(Гармунын уйнап, бейей-бейей сығып китә.)*

Мөнирә *(ҡайын артына йәшеренә)*. Йә, әйт, Ильяс.

Ильяс. Анау саҡта ҡыш көнө алдынғылар кәңәшмәһендә һине күрҙем дә... Шунан бирле ҡайҙа ғына барһам да, нимә генә эшләһәм дә, һин гел эргәмдә кеүекһең. Мин уның һайын һәйбәтерәк булырға тырышам. Әсәйем әйтә, тамаҡҡа нескәреп киттең, ти... Ун һигеҙгә етеп, бер шулай булғаным юҡ ине. Ә һин ниңә өндәшмәйһең?

Мөнирә. Тыңла әле, Ильяс. Анау ҡоштар нимә тип һайрай икән?

Ильяс. Улармы? Улар аҙашмаҫ өсөн һайрашалар, Мөнирә.

Мөнирә. Тағы?

Ильяс. Тағымы? Бер-береһен һағынған өсөн һайрашалар.

Мөнирә. Тағы?

Ильяс. Шул инде.

Мөнирә. Минеңсә, улар иң тәүҙә һайрашып табышалар, табышҡас, һайрашып танышалар.

Ильяс. Уларҙың эш еңел. Бер урманда йәшәйҙәр. Ә беҙ икебеҙ ике ауылда.

Мөнирә. Хатта ул яҡшы ла. Бер һағыныу үҙе ни тора!

Ильяс. Ярай ҙа икебеҙ ҙә һағынһаҡ...

Мөнирә. Мин һағынырмын...

Ильяс. Ысынмы, Мөнирә? *(Мөнирәгә яҡын килә, беләгенән тоторға итә.)*

Мөнирә *(ситкә тайпыла)*. Һаҡ бул, Ильяс, анау сәскәгә ҡунған күбәләкте ҡурҡытырһың.

Ауыҙ эсенән мығырлап, Шәмсулла сыға. Уның тауышын ишеткәс, Мөнирә менән Ильяс урман эсенә йүгереп инеп китәләр.

Шәмсулла. Аҡ беләгеңдән тотайым,
Ай битеңде үбәйем.

Эй, ағай-эне, йәш-елкенсәк! Майҙан башлана, һәммәгеҙ ҙә рәхим итегеҙ!

Үпмәҫ инем ай битеңде,
Үпмәй нисек түҙәйем?

Майҙанға, майҙанға! *(Үтеп китә.)*

Туҡтабикә, уның артынан Дәүләтбай инә.

Дәүләтбай. Туҡтабикә, туҡта әле.

Туҡтабикә. Туҡтаным.

Дәүләтбай. Әйтер һүҙем бар ине.

Туҡтабикә. Булғас, әйт.

Дәүләтбай. Һүҙ тип ни, һүҙ генә түгел шул.

Туҡтабикә. Йырың булһа, йырлап бир, Дәүләтбай ағай.

Дәүләтбай. Һин миңә «ағай» тимә әле. Ике йыл инде бисәһеҙ ҡаңғырып йөрөйөм.

Туҡтабикә. Мин ун ике йыл ирһеҙ ҙә, башты ташҡа һуғып булмай.

Дәүләтбай. Ниңә башты ташҡа һуғырға, Туҡтабикә. Үлгән артынан үлеп булмай бит инде.

Туҡтабикә. Уратма, Дәүләтбай ағай.

Дәүләтбай. Һин миңә «ағай» тимәй тор әле. Етем күңелем һиңә килеп һуғылды, Туҡтабикә. Ғүмер буйы һин мине беләһең, мин һине беләм тигәндәй. Өҙөп кенә әйт тә ҡуй.

Туҡтабикә. Ир уртаһы кешегә улай уҡ ҡауҙыр булыу килешмәй. Дәүләтбай ағ... Уйлашайыҡ, кәңәшләшәйек.

Дәүләтбай. Уйланаһы уйланған инде.

Туҡтабикә. Яусы-фәлән ебәреү ҙә илдә юҡ эш түгел, әҙәм алдында йөҙ яҡты булыр ине.

Дәүләтбай. Әжмәғол ҡартҡа әйтеп ҡараным, риза ул. Тик һиңә өҫтәп анау тутығып ятҡан двигателегеҙҙе һатмаҡсы була беҙҙең колхозға. Беҙҙекеләр риза түгел.

Туҡтабикә *(тоҡанып китә)*. Әлеге двигатель! Шул двигатель арҡаһында еләк кеүек бер бисә ирһеҙ ҡалған аҙмы икән ни әле ул ҡарт төлкөгә? Былтыр бит Шәмсинур әхирәтемде Аҡманайҙың Хисмәтенә димләп бөтөргәс, Әжмәғол шул двигателен килтереп ҡыҫтырҙы. Инде минең алдыма килгән ашҡа тараҡан булып төшөргә йөрөймө? Мин тиҙ баҫырмын ул төлкөнөң ҡойроғона! Туҡтабикә ярты юлда туҡтап ҡала торған бисә түгел! Алаптай ауыҙын асып, тапҡан әйтер нәмә! Майлы күҙ!

Дәүләтбай. Һин контрактовать ителгән мал түгел дә баһа.

Туҡтабикә. Әйтмә лә. *(Пауза.)* Артымдан илап ҡалыр балам юҡ, Дәүләтбай. Һинең балаларыңа әсә булырмын, Дәүләтбай. Мин тәүәккәлләнем, Дәүләтбай... Теләһәң, бөгөн үк, хәҙер үк ал да кит! Мин һинеке, Дәүләтбай!

Дәүләтбай *(шатлығынан ни эшләргә белмәй)*. Туҡтабикә! Йырлар инем, моңом юҡ, илар инем, килешмәҫ. Дәүләтбайҙың ҡорғаҡһыған күңеленә лә эркелеп шатлыҡ тулыр көн бар икән. Ҡана үҙеңде бер ҡосаҡлайым, Туҡтабикә!

Туҡтабикә. Ҡуй, улай сабырһыҙ булма. Ҡауышыу сәғәтенең хазинаһына ҡул һонмай торайыҡ, Дәүләтбай.

Дәүләтбай *(ике ҡулы менән башындағы кәпәсен йәмшәйтеп һуға)*. Мин күтәргә риза! Үҙеңде бөгөн үк алып китәм! Хатта хикмәт сығарып алып китәм...

Туҡтабикә. Хикмәтһеҙ генә ярамаҫмы һуң?

Дәүләтбай. Егеттәрҙе һемәйтәйек әле! Йыуаш Дәүләтбайҙан да бер мәрәкә сыҡһын әйҙә!

Туҡтабикә *(аптырап)*. Минең арттан йөрөгән егет юҡ та.

Дәүләтбай. Эш былай, Туҡтабикә. Бөгөн беҙҙең ауылдың Ҡотләхмәте минең «Москвич»та Йәмиләне урлап ҡасмаҡсы булып йөрөй.

Туҡтабикә. Бына тағы яңы ауыҙҙан иҫке һүҙ!

Дәүләтбай. Әжмәғол ҡарт үҙе әңгәмә һөйләп ҡотортто малайҙарҙы.

Туҡтабикә. Ҡуй, булмаҫ эште һөйләмә. Теләһә кемгә эйәреп китергә Йәмилә етем быҙау түгел дә.

Дәүләтбай. Шуға күрә теге ҡуҡырайған егетте һемәйтергә кәрәк тә. Мин тегеләргә Йәмиләне урлашҡан булып йөрөйөм дә, ығы-зығыла «Москвич»ҡа ултыртып, Йәмилә урынына үҙеңде алам да китәм. Бер аҙҙан һин бына ошо төп башына килеп ултыр. Ҡалғанын үҙем ҡарармын.

Туҡтабикә. Әйҙә, һинеңсә булһын, Дәүләтбай. Тамашаға тамаша өҫтәлһен! *(Пауза.)* Берәһе тутыҡҡан двигателгә ҡушып кәләш яусыларға йөрөй, икенсеһе көпә-көндөҙ бынау заманда ҡыҙ урларға маташа. Һаташҡандар! Айнытыр әле һеҙҙе Дәүләтбай менән Туҡтабикә. *(Ҡапыл рухланып таҡмаҡ әйтә, тыпылдатып бейей башлай.)*

Туҡта, туҡта, Туҡтабикә!
Туҡтабикә, тол бикә.
Тупылдатып бейеп килә —
Кем йәре икән был бикә?

Дәүләтбай *(сәпәкәй итә)*. Дәүләтбайҙыҡы!

Туҡтабикә. Туҡта, туҡта, Туҡтабикә,
Туҡтаһаң да, әйләнер,
Был бикәнең, һай, кем менән
Сәсе сәскә бәйләнер?

Дәүләтбай. Дәүләтбай менән!

Туҡтабикә. Туҡта, туҡта, Туҡтабикә,
Туҡтабикә ни әйтер?
Дәүләтбайы ниҙәр әйтһә,
Туҡтабикә шуны әйтер.

Мин-минлектән миңрәүҙәрҙе
Ошо икәү һемәйтер.

Дәүләтбай *(ҡул саба)*. Бына әйттең, исмаһам...

Туҡтабикә бейей-бейей сығып китә. Дәүләтбай уға эйәрә. Йәмилә, уның артынан Ҡотләхмәт, һуңыраҡ Иштимер боҫа-боҫа сыға.

Ҡотләхмәт. Бер генә минутҡа туҡта әле, Йәмилә.

Йәмилә. Мин ашығам.

Ҡотләхмәт. Ярты ғына минутҡа.

Йәмилә. Йә, туҡтаным.

Ҡотләхмәт *(өҙөлөп)*. Ҡояш артынан йөрөгән ай кеүек, икенсе йыл йөрөйөм бит инде, Йәмилә. Ни нәмәм оҡшамай һуң һиңә? Төндәр буйы уйлап ятам — ҡыҙ яратмаҫ бер генә ҡылығымды ла таба алмайым.

Йәмилә. Бәлки, ысынлап ундай ҡылығың юҡтыр. *(Көлә.)*

Ҡотләхмәт. Юҡ шул, Йәмилә. Бына һанап сығам: Ҡотләхмәт бына тигән тракторист — бер булдымы? Аҡсаны, икмәкте көрәп алам — ике булдымы? Комсомолда бер шелтә алғаным юҡ — өс булдымы? Былтыр ғына үҙемә яңы өй һалып ебәрҙем, мотоцикл менән патефон алдым, йыл башынан «Совет Башҡортостаны» газетаһына яҙылдым — былар бөтәһе бергә дүрт булдымы? Саманан ашыу эсмәйем, тәмәкене ауыҙға алғаным юҡ, ғәрип-ғөрәбә түгелмен, нәҫел-ырыуым бына тигән.

Йәмилә. Ҡара әле, Ҡотләхмәт, һин бик шәп кешеһең дә баһа.

Ҡотләхмәт. Бик шәп шул. Үҙеңде өф итеп кенә торормон, ауыр эш эшләтмәм, утынын-һыуын үҙем кертермен. Теләгәнең кейерһең... Главный — мин һине яратам.

Йәмилә. Ана шул главныйында бөтә хикмәт, Ҡотләхмәт.

Ҡотләхмәт. Һин бына тигән алдынғы тауыҡ фермаһының мөдире. Йөрәк менән уйнама, аҡыл менән уйлап ҡара — минең кеүек егетте сәсеп үҫтереп кенә булмай ул. Сознательныйыраҡ уйлап ҡара тағы бер тапҡыр.

Иштимер *(ағас ышығынан)*. Хороша, хороша, замечательная. Сознательный булыу кәрәк обязательная.

Ҡотләхмәт. Иштимер, анау ҡыуаҡ артында минең мотоцикл тора, бар шуға ултырып уйна. Бар, Иштимер, бар...

Иштимер. Мотоциклға ултыртып, ултыртыуҙан булмаһын түлке.

Ҡотләхмәт. Юҡ.

Иштимер. Ярай, улайһа. *(Китә.)*

Ҡотләхмәт. Әйт һин, Йәмилә, килмәгән ерем булһа, тураһын әйт, мин төҙәтергә тырышырмын. Ҡояш тирәһендә йөрөгән ай кеүек...

Йәмилә. Минең өсөн ана шул ай кеүекһең һин, Ҡотләхмәт. Шәүләң бар. Йылың юҡ...

Ҡотләхмәт. Бәлки, һин генә һиҙмәйһеңдер, эсем тулы ялҡын.

Йәмилә. Ҡауышһаҡ та, беҙ һинең менән — ҡояш менән ай ҡауышҡан көндө генә ҡауышырбыҙ. Ғәйепләштән булмаһын! *(Көлә. Йүгереп сыға.)*

Ҡотләхмәт. Ниндәй тәкәббер! Әжмәғол ҡыҙы! Ярай, ҡыҙыҡай! Һин барыбер минеке буласаҡһың. Әгәр һүҙемдән кире ҡайтһам, башым кәпәс күрмәһен! *(Кепкаһын ергә һуға. Папирос тоҡандыра.)*

Ашығып, Баян инә.

Баян. Ҡыҙҙар ҡайҙа?

Ҡотләхмәт. Мин һиңә ҡыҙҙар бригадиры түгел бында.

Баян *(кепкаһын күреп)*. Кәпәс һуҡтыңмы? Кәпәс һуғып ҡына этәс булып булмай, туған.

Ҡотләхмәт. Күп телеңә һалынма, юғиһә аҫыл ҡошоңдоң Шөкөр уҙаман ауына килеп эләгеүе бар.

Баян. Эләкмәйерәк торһон әле. Ә һин кәпәс орғансы, башыңды анау имәнгә һуғып ҡара, бәлки, тинтәклегең сәсрәп сығыр, кейәү аламаһы. *(Китә.)*

Ҡотләхмәт. Пожарник! *(Бармаҡтарын ауыҙына тығып әсе һыҙғыра.)*

Шөкөр, Дәүләтбай инә.

Шөкөр. Бойор, ханым-солтаным!

Ҡотлаһмәт. Йырма әле шул ауыҙыңды! Эш ризалыҡ менән барып сыҡманы, егеттәр. Тимәк, урлап ҡасабыҙ.

Шөкөр. Урларға булғас, урларға! Ә ҡалайтып урлайбыҙ? Әжмәғолдоң аҡбуҙ аты юҡ бит беҙҙә!

Дәүләтбай. Әгәр кәрәк саҡта минең дә йомошто тыңлар булһағыҙ, барын да үҙем рәтләйем.

Ҡотлаһмәт. Ҡолоң булырға риза, Дәүләтбай ағай!

Шөкөр. Ә ҡалайтып урлайбыҙ?

Дәүләтбай. Мә, Ҡотлаһмәт, һиңә «Москвич»тың асҡысы. Һин бер аҙҙан машинаны ходҡа ебәреп, кабинала көтөп ултыр. Мин: «Һүҙем бар», — тип Йәмиләне майҙандан саҡырып сығарырмын. Ул мине яҡын ағаһы күрә, шикләнмәҫ. Ҡыҙ төрөргә шаршау бармы?

Шөкөр. Күл дәүмәллеге.

Дәүләтбай. Булды. Уны машинаға килтереп ҡуйығыҙ. Төшөндөгөҙмө?

Ҡотлаһмәт. Төшөндөк.

Дәүләтбай. Мин ҡыҙҙы алып килгәс тә, һин сразу газ бирерһең дә туп-тура Аҡтаныҡҡа һыҙҙырырһың. Аңлашылдымы? Өс минуттан өйҙә булырбыҙ!

Ҡотлаһмәт. Аңлашылды.

Шөкөр. Ә мин?

Ҡотлаһмәт. Һин күҙәтеп торорһоң. Ул-был булһа, әҙер тор!

Дәүләтбай. Уны ул-был сыҡмаҫлыҡ эшләрбеҙ инде.

Ҡотлаһмәт. Вәғәҙә! Эй, Шөкөр, әллә һин минең мотоцикл менән алдан елдерәһеңме? Апайыма хәбәр итергә кәрәк. Әҙерләнеберәк торһон. Кәләш алып ҡайтыу бәрәс алып ҡайтыу түгел бит.

Дәүләтбай. Был да мең аҡыл.

Ҡотлаһмәт. Ысҡын, Шөкөр!

Шөкөр. Була ул! *(Китә башлай.)*

Ҡотлаһмәт. Араҡың мул булһын.

Шөкөр. Магазин үҙ ҡулыбыҙҙа! *(Китә.)*

Дәүләтбай. Билдә бирмәй генә башта майҙанға барайыҡ. Ҡотлаһмәт, һин, шик-фәлән тыумаһын өсөн, бер бейеп алһаң да ярар.

Ҡотләхмәт. Бейейбеҙ уны, дошмандарҙың йөрәген яндырырлыҡ итеп бейейбеҙ, Дәүләтбай ағай! Ух!

Артта шау-шыу, гармун, бейеү ишетелә.

Донъялары тигеҙ кешеләр күңел асалар. Беҙ ҙә тигеҙләрбеҙ әле ул донъяны! *(Урман эсенә инеп китәләр.)*

Иштимер йүгереп инә, балсыҡ өйрәген һыҙғырта.

Иштимер. Мотоцикл осто! Фиу. Тәки ултыртты теге ҡара тауыҡ. Апайыма күҙ-колаҡ булайым әле. *(Үтә.)*

Шәмсулла инә. Ул айнымаған.

Шәмсулла. Эй, ағай-эне, йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро! Майҙанда көрәш башлана! Барсағыҙ ҙа йәүитсә булығыҙ! Дейеү менән Алпамыша көрәшә! Мәхрүм булып ҡалмағыҙ! Пока! *(Үтә. Уның артынан бер нисә йәш-елкенсәк майҙанға йүгереп уҙа.)*

Әжмәғол ҡартты Уңғанбикә майҙандан ситкәрәк алып китә.

Уңғанбикә. Ҡаптыңмы, ҡарт бесәй?

Әжмәғол. Ни ғәйебем бар, ҡарсыҡ?

Уңғанбикә. Белмәмешкә һалыша бит әле, суйын бит!

Әжмәғол. Әйтеп һөйлә, ҡарсыҡҡай.

Уңғанбикә. Юхаланма, балланма! Эсең тулы этлек уй. Кешегә әҙәп кермәгәс, кермәй икән, биллаһи!

Әжмәғол. Әҙәпһеҙләнеп нимә эшләнем һуң әле, Уңғанбикәкәй?

Уңғанбикә. Уңғанбикә, Уңғанбикә! Алма кеүек ҡарсығың бар ваҡытта, ҡаршы төшөп бейергә ниңә Туҡтабикә киленде саҡыраһың һин? Бейергә аяғым, шартлатырға бармағым юҡмы ни минең?

Әжмәғол. Хаталыҡ булды, ҡарсыҡ. Икегеҙ йәнәшә инегеҙ. Буй-һынығыҙ ҙа, күлдәктәрегеҙ ҙә бер иштән.

Уңғанбикә. Булһа һуң?

Ә ж м ә ғ о л. Бейей-бейей ҡыҙып кителгән дә, һиңә килеп баҫам тип, уға килеп баҫҡанмын, күрәһең ҡәһәрең.

У ң ғ а н б и к ә. Яйлама ла, майлама ла, күҙҙәреңдән күреп торам... Әйттем мин ул Туҡтабикәгә, бер остан алма күлдәклек тип, тыңламаны. Уның бер хәйләһе булғандыр әле, моғайын.

Ә ж м ә ғ о л. Булмаҫ, ҡарсыҡ. Киленгә, һүҙ тейҙермә!

У ң ғ а н б и к ә. Һин яҡлама уны! Тай ҡойроғона йәбешкән дегәнәк кеүек, йәш-елкенсәккә эйәреп йөрөр сағыңмы? Эсеп ултыр ана тал төбөндә балыңды. Һинең майҙанда бейер сағың әллә ҡасан үткән инде.

Ә ж м ә ғ о л. Үтмәгән! Әле етеп кенә килә. Типһәм — тимер өҙөрлөк, һуҡһам — айыу йығырлыҡ ир әле мин!

У ң ғ а н б и к ә. Хәсрәт тиһәм, аҙ булыр, ахмаҡ тиһәм, күп булыр. Исмаһам, бер һынабыраҡ ҡара үҙеңә.

Ә ж м ә ғ о л. Ҡараһаң да, ҡарамаһаң да, торғаны менән бәһлеүән.

У ң ғ а н б и к ә. Бәһлеүән! Харап икән, биллаһи! *(Таҡмаҡлап бейей, һуңыраҡ Әжмәғол да һелкенә башлай.)*

Ат аҙғыны ҡартайһа,
Ағас күрһә ышыныр.
Ир аҙғыны ҡартайһа,
Бисә күрһә ымһыныр.

Ҡабыҡ кеүек ҡаҡ арҡаң
Ҡамыт төҫлө ҡалтайған.
Билгә еткән һаҡалың
Ҡылған төҫлө һарғайған.

Муртлап бөткән һөйәгең
Шалтыр-шолтор шалтырай.
Шырт-шырт иткән быуының
Баҫҡан һайын ҡалтырай.

Шул көйөнсә оялмай,
Ҡолаҡтарын ҡарпайтып,
Ҡулбаштарын уйнатып,
Ҡашын-күҙен аҡшайтып,

Бер эйелә, бер сүгә,
Төшкән була бейергә,
Майландырып күҙҙәрен
Туҡтабикә киленгә!..

Хурлыҡ, биллаһи!

Әжмәғол. Ҡыҙҙар тауын һелкетә,
*(Ергә тибеп ҡуя.)*
Әжмәғол ҡарт баҫҡанда.
Йөрәктәрҙе елкетә,
Әжмәғол ҡарт баҡҡанда.

Теле менән таш ярыу —
Әжмәғолдоң ғәҙәте.
Мыйығында — хикмәте,
Һаҡалында — ҡөҙрәте.

Уңғанбикә. Мин тотонһам утарға,
Эйәгеңдә йөн ҡалмаҫ.
Телен тыймаҫ ауыҙыңда
Икмәк ашар йүн ҡалмаҫ...

Бейей-бейей арып, икеһе ике төп башына барып ултыра, саҡ тын алалар, уф та уф киләләр.

Уңғанбикә. Рәтең киткән инде, өтөк! Минең менән ярышҡан була тағы!

Әжмәғол. Постой, бисә! Мин өтөкмө! *(Һикереп тормаҡсы була, бил ебәрмәй.)*

Уңғанбикә. Һин шул!

Әжмәғол. Минме?

Уңғанбикә. Һин, һин!

Әжмәғол. Намыҫҡа теймә, ҡарсыҡ. *(Һикереп тора.)* Намыҫҡа бик тейһәң... Беләһеңме?

Уңғанбикә. Артың менән кәртә емерәһеңме? *(Баҫа.)*

Әжмәғол. Мин дулаһам, кәртә емереп кенә ҡалмам. Мине ҡыҙҙырма! Мине ҡыҙҙырһаң, Туҡтабикәне урланым ҡастым киттем булыр!

Уңғанбикә *(тыныс)*. Алыҫҡамы инде?

Әжмәғол. Целинаға! Хатта аръяғына ла мөмкин... Әллә мин ҡыҙ урламаған ирме?

Уңғанбикә. Ниндәй хан ҡыҙҙарын урланы икән был?

Әжмәғол. Ә үҙеңде кем урланы? Мин түгелме ни?

Уңғанбикә. Әстәғәфирулла, тиһәм, аҙ булыр. Ниңә һин күҙгә терәп алдашаһың, ир аҡтығы? Иманың ҡайҙа һинең?

Әжмәғол. Имандың ҡыҫылышы юҡ бында. Минең һине урлап ҡайтҡанымды бөтә ил белә.

Уңғанбикә. Урланың ауыҙыңа өҙөлөп төшкән алманы!

Әжмәғол. Урланым тигәс, урланым!

Уңғанбикә. Өтөк! Бисара! Йолҡош! Ҡалым түләргә бер ҡорсаңғы тайың да булмағас, атайың килеп минең атайымдың аяғына йығылды бит. Боронғо һалдат дуҫлығы хөрмәтенә ҡарттар үҙ-ара килештеләр ҙә... Шунан һуң һин, хурлыҡтан ҡасып, төндә арыҡ ат менән килеп мине алып киттең. Етмәһә, ярты юлда арыны ул атың. Маҡтансыҡ!

Әжмәғол. Уныһы пустяк! «Әжмәғол кәләш урлап ҡайтҡан!» — тигән хәбәр шунда уҡ тирә-яҡҡа таралып киттеме? Китте! Бөтә ғәләм һимеҙ ҡалъя бешкән ҡаҙан урынына ҡайнанымы? Ҡайнаны.

Уңғанбикә. Үҙең бутағас, ҡайнай инде ул. Асыуымды бик ҡабартһаң, бел уны, ҡартлас, ил алдында фашлап хур итәм үҙеңде, рисуай ҡылам! Ҡыҙ урланым тип ҡырҡ йыл маҡтанған ауыҙың тиҙ ябылыр. Атайың мәрхүм йөҙ һыуы түгеп килмәһә, әлегә саҡлы буйҙаҡ йөрөр бер мәжнүн инең бит һин, алла ҡоло! Шәпкә сыҡҡан! Бар кит! Күҙ алдымда һерәйеп торма! Түшәгем харам булғыры!

Әжмәғол. Ҡуй, ҡарсыҡ, үткән эштән төш яҡшы.

Уңғанбикә. Ана бара юлың, тим бит!

Әжмәғол. Ҡайҙа китәйем?

Уңғанбикә. Дүрт яғың ҡибла.

Әжмәғол. Төшөндөм, ҡарсыҡ. *(Уйын, йыр ишетелгән яҡҡа китә башлай.)*

Уңғанбикә. Унда түгел!

Әжмәғол *(кире яҡҡа борола)*. Ярай, ҡарсыҡ.

Уңғанбикә. Унда ла түгел!

Әжмәғол *(ауыл яғына борола)*. Ауылғамы?

Уңғанбикә. Ауылға. Бар, ҡайтып картуф әрсей тор!

Әжмәғол. Ҡушҡас ни... *(Китә.)*

Уңғанбикә бая Дәүләтбай Туҡтабикәгә әйткән төп башына ултырып ҡала. Бер аҙҙан Туҡтабикә инә. Уңғанбикәне күреп, кире урман эсенә инеп китә.

Уңғанбикә. Үтте ошоноң менән ғүмеркәйҙәрем заяға! *(Ҡарты артынан йоҙроҡ күрһәтеп ҡала. Бер аҙ уйлана, нимәлер хәтерләй, йылмая.)* Уңғанбикәне урларға йөрөгән егет булманы түгел, булды. Тик ул һин түгел, Сәйфелмөлөк ине. Сәрби еңгә артынан хәбәр ҙә иттергәйне. Бөгөн төндә икенсе әтәс ҡысҡырғас та, өй артындағы ҡайын эргәһенә сыҡһын, тип әйттергәйне, пар атым урамда торор, үҙем кәртә аша ғына һикереп төшөрмөн дә үҙен ебәк шаршауға төрөп кенә алып сығырмын, тип әйттергәйне. Әйткән һүҙе ниндәй бит: ебәк шаршауға төрөп кенә...

Уңғанбикә мауығып һөйләнгәндә, Дәүләтбай ҡыуаҡ артынан сыға; уның һүҙен ишетмәй, ишара яһап, машина заводить итергә ҡуша. Унан ҙур шаршауҙы Уңғанбикә башына килтереп ҡаплай һәм шунда уҡ баштан-аяҡ төрөп ала.

Уңғанбикә. Ярабби!

Дәүләтбай *(күтәреп ала)*. Бына, бикәсем, һин минең ҡуйынымдаһың. Бикәм, бикәм, бикәсем, матурым һин, көләсем! *(Уны күтәреп бер әйләнә.)* Тик һин үҙем һүҙ ҡушмай, өндәшмә лә, йөҙөңдө лә асма, йәме, бикәсем! Мәрәкә итәйек әле үҙҙәрен. *(Уңғанбикәне күтәреп ҡыуаҡ эсенә инеп китә.)*

Сәхнә буш тора. Шәмсулла йүгереп инә.

Шәмсулла. Себер китерлек эш, йәмәғәт! Әле генә ошо ерҙән әҙәм урлап киттеләр! Әй, әй, тим! Барсағыҙ ҙа бында йәүитсә булығыҙ?

Баян менән Маһибәҙәр йүгереп инә.

Баян. Кемде урлағандар? Кем урлаған?

Шәмсулла. Машина эсендәге Ҡотләхмәттең ҡылыс танауын ғына күреп ҡалдым.

Баян *(Мәһибәҙәргә)*. Ҡайҙа Йәмилә?

Мәһибәҙәр. Улар шишмәгә һыу эсергә төштөләр.

Баян. Былай булғас, төштө инде. Ҡотләхмәттең һыуһыны ҡана икән. Китте Йәмиләбеҙ...

Иштимер йүгереп инә.

Иштимер. Шаршауға төрөлгән әллә кемде «Москвич»ҡа ултыртып алып киттеләр. *(Көлә.)*

Баян. Кемде булһын, апайыңды! Ниңә ҡысҡырманың?

Иштимер. Ҡысҡырҙым да, тауыш сыҡманы.

Баян. Асыҡ ауыҙ! Бына ҡолаҡ ҡаҡтың хәҙер апайыңдан.

Иштимер. Ап-ап-айым! *(Илап ебәрә.)*

Баян. Ебеп торма. Бар, ауылға йүгер. Ҡыуа сығырға Мөхәммәтша аттарҙы егә торһон.

Иштимер. Апаҡайым! Апаҡайым! *(Тыпырсынып илай.)*

Баян. Ысҡын хәҙер үк, йүгерә-йүгерә иларһың.

Иштимер йүгерә.

Шәмсулла. Асыҡ ауыҙҙар! Егет аҡтыҡтары! Бына тигән ҡыҙҙы урлаттығыҙ. *(Ары-бире йөрөп ҡысҡыра.)* Барсағыҙ ҙа бында йәүитсә булығыҙ, әй, әй, тим!

Баян. Был малайға ышаныс юҡ. Ауылға үҙем йүгерәйем. *(Мәһибәҙәргә.)* Һаҡ бул, һине лә сәлдермәһендәр! *(Китә.)*

Ильяс менән Мөнирә, ҡыҙҙар, егеттәр инә.

Мөнирә. Нимә булған? Ниңә уйын таралды?

Мәһибәҙәр. Йәмиләне урлап киткәндәр.

Ҡыҙҙар. Йәмиләне?

Йәмлегөл. Булмаç та. Ысынлапмы?

Шәмсулла. Ысын шул. Үҙем күреп ҡалдым.

Ильяс. Йыйын алйот, тапҡандар һөнәр!

Халыҡ гөж килә: «Ниткән эш был?», «Ҡыуа сығырға кәрәк», «Тотоп туҡмау аҙ быларҙы», «Мошенниктар!» — тигән һүҙҙәр ишетелә. Шул саҡ Йәмилә килеп инә.

Мөнирә. Йәмилә бында бит!

Маһибәҙәр. Эй әхирәткәйем, нисек ҡасып ҡотолдоң?

Йәмилә. Кемдән ҡасайым мин?

Йәмлегөл. Һине урлап киткәйнеләр бит!

Йәмилә *(көлә)*. Көпә-көндөҙ һаташма, Йәмлегөл!

Шәмсулла. Былай булғас, ҡыҙҙарҙы барлап сығам. *(Счетын һала башлай.)* Йәмилә бында. Йәмлегөл бындамы?

Халыҡ. Бында, бында!

Шәмсулла. Маһибәҙәр бындамы? Мөнирә бындамы? Рәшиҙә бындамы? Ҡәмәрбаныу бындамы? Ғабдрахман ҡыҙҙары бындамы? Алмагөл бындамы? Нурия бындамы? Хисмәт Хәҙисәһе бындамы?

Халыҡ. Бында, бында!

Мөнирә. Ә Туҡтабикә апай ҡайҙа?

Шәмсулла *(ҡысҡыра)*. Туҡтабикә, Туҡтабикә! *(Бөтәһе лә ҡысҡырып эҙләй башлайҙар. Шәмсулла урап килә.)* Дәүләтбай иртәнән бирле урала ине уның тирәһендә. Иң яҡшы доярканан ҡолаҡ ҡаҡтыҡ былай булғас! Председателгә ни тип яуап бирермен? Йыйын асыҡ ауыҙ! Туҡтабикә! Туҡтабикә! Юҡ Туҡтабикә.

Халыҡ тағы гөжләшә башлай. Туҡтабикә йүгереп инә.

Туҡтабикә. Ниңә һөрән һалаһығыҙ? Нимә бар?

Халыҡ *(иркен һулап ҡуя)*. Туҡтабикә үҙе...

Туҡтабикә. Туҡтабикә — Туҡтабикә инде. Ниндәй һуған баҙары был?

Маһибәҙәр. Әллә кемде урлап ҡасҡандар.

Туҡтабикә. Кем урлаған? Ауыҙығыҙға һыу уртланығыҙмы әллә, ниңә өндәшмәйһегеҙ? Кем урлаған?

Шәмсулла. Үҙем дә точно ғына белмәйем шул. Ҡыҙҙы күтәреп машинаға ултыртҡанын Дәүләтбайға оҡшаттым.

Туҡтабикә. Дәүләтбай? Булмаç, булмаç! Минән башҡа тейер кешеһе юҡ уның.

Шәмсулла. Хоҙай һаҡлағас, һиңә теймәгән шул.

Туҡтабикә. Бына ниндәй булып сыҡты ул, таҫма тел! Йыуаш булып ҡылана, эсендә юха йылан ята икән. Йөҙөнә әйләнеп ҡарар булһам, исемем Туҡтабикә булмаһын!

Ильяс. Бына һиңә йыуаш Дәүләтбай.

Йәмлегөл. Аҫтыртындыр ул.

Туҡтабикә. Һеҙ тел тейҙермәгеҙ уға, үҙем әрләгән дә еткән. *(Бая Уңғанбикә ултырған төпкә килеп ултыра.)*

Мәһибәҙәр. Былай булғас, кемде урлағандар һуң?

Мөнирә. Бөтәһе лә буш хәбәр. Әйҙәгеҙ, уйынға китәйек.

Шәмсулла. Күрәһең, сит ауыл ҡыҙы булғандыр! Тише! Һәммәгеҙ ҙә майҙанға йәүитсә булығыҙ. Уйын дауам итә!

Халыҡ таралыша башлай. Хәле бөткән Әжмәғол килеп инә.

Әжмәғол. Ҡыҙымды кем урлаған?

Шәмсулла. Ҡыҙың бында, борсолма!

Әжмәғол. Ә ҡарсығым ҡайҙа? Минең ҡарсыҡ ҡайҙа? *(Туҡтабикәне күреп ҡала, арҡаһынан килеп һыйпай.)* Ә... Ҡарсығым бында икән. Ҡотто алдың бит, бисәкәй. *(Туҡтабикә әйләнеп ҡарай.)* Постой! Ҡайҙа минең ҡарсыҡ? Табып бирегеҙ хәҙер үк ҡарсығымды! *(Халыҡ араһынан эҙләй.)*

Шәмсулла. Ҡарсығыңдың күлдәге ни төҫлө ине?

Әжмәғол. Алһыу ал, буй-буй шаҡмаҡлы ине!

Шәмсулла. Дәүләтбай машинаға күтәреп ултыртҡанда, алһыу күлдәк итәге күренеп ҡалды шул.

Әжмәғол. Алһыу күлдәкле булһа, минең ҡарсыҡ ул. Шайтан балалары, берҙән-бер бисәмде урлағандар!

Туҡтабикә *(шарҡылдап көлә)*. Былай булғас, теге тутыҡҡан двигателеңде ҡарсығыңа ҡушып бир инде. Бирнәһе шул булыр. Бына ниндәй ҙур мәшәҡәттең осона сыҡтыҡ бит, Әжмәғол яусы!

Бөтәһе лә көлә башлай.

Әжмәғол. Ниңә ауыҙ күтәреп кешнәйһегеҙ һеҙ? Ниндәй ирмәк таптығыҙ? *(Ары-бире йүгерә.)* Көлөргә түгел, иларға кәрәк! Кәләш урлай торған заманамы ни хәҙер? Ҡайҙа закон? Ҡайҙа начальство? Ни ҡарайҙар улар бынау салт аяҙ көндә? Әҙәм ҡараҡтарын хәҙер үк тотоп аҫырға, киҫергә, атырға кәрәк! Бирегеҙ миңә хәнйәр, бирегеҙ ҡылыс! Револьвер бирегеҙ миңә! *(Аяҡ тибә, китә башлай.)*

Халыҡ шарҡылдап көлә.

*Шаршау*

**ӨСӨНСӨ ШАРШАУ**

Ҡотләхмәт йортоноң ишек алды. Йорт ҡойма менән уратылған. Алыҫ түгел аласыҡ. Өй ҡаршыһында — яңы келәт. Ишек алдында — сыуал. Кәмилә һыуҙан ҡайта. Һыуҙың бер күнәген ҡаҙанға һала, икенсеһен болдорға ултырта.

Кәмилә. Уф! Күпме әйтәм ошо Ҡотләхмәткә — йә кәләш ал, тим, йә өйгә вадаправуд индер, тим. Әллә ниндәй моңһоҙ бер бәндә булып сыҡты. *(Һыуҙы өйгә индереп һала ла күнәктәрен йәпле бағана башына элтеп элә.)* Вадаправуд керетһә, һыйыр һауа торған иликтр алһа, кер йыуа торған машина килтерһә, миңә килен дә кәрәкмәй. Ул саҡта мин үҙем килен. *(Нимәлер күрә.)* Көш-көш! Бынау Иркәбикә ҡарсыҡтың сыбар тауығы ҡуйманы бит шул ҡыяр түтәлен! Кө-өш! Үләт йыҡҡыры! *(Көйәнтә һелтәй.)* Ҡунаҡ та килмәй бит үҙҙәренә, исмаһам, тотоп һуйырҙар ине шул мәлғүнде! *(Болдорға килеп ултыра.)* Мин яратҡаны килмәй, килгәненен мин яратмайым, тип йөрөһәң, ғүмергә буйҙаҡ ҡалырһың. Күҙеңде йом да ал да кил. Килгәс, килен була ул. Ул саҡта әсәйең урынына ҡалған апайың, ҡәйнә булып, түр башына менер ине. Менер ине лә, моңайып йырлап, тик ултырыр ине. Бына шулай итеп:

Даръяларға ҡарап, ярһыҙ, тимә,
Даръяһына күрә яры бар.
Бәндәләргә ҡарап, зарһыҙ, тимә,
Бәндәһенә күрә зары бар.

Илләә яратам да ошондай үтә моңло йырҙы! Йөрәгемдән ебәк еп үтеп киткәндәй була.

Һарғайып та таңдар атҡан бер мәл,
Таштар тәсбих әйтер мәл икән,
Михнәт эстәрендә үтмәһә лә,
Үтеп киткән ғүмер йәл икән.

Илаһаң да, йырлаһаң да, үтәһе ғүмер үтә инде. Күкрәп ултырған сәскә лә ҡойола. *(Үҙ хисенә үҙе бирелеп ултыра.)*

Урамда мотоцикл тауышы. Ҡапҡа төбөндә туҡтай.

Ниткән эш был? *(Һиҫкәнеп китә.)* Бынау ваҡытта таралған һабан туйы буламы?

Шөкөр, гармунын ҡултығына ҡыҫтырып, ҡапҡанан атылып килеп инә. Уның бите туҙанлы.

Шөкөр. Ҡоҙағый, һөйөнсө! Килен төшә!
Кәмилә. Ҡайҙан төшә?
Шөкөр. Әлбиттә, күктән түгел.
Кәмилә. Ҡайҙа төшә, ниңә төшә?
Шөкөр. Ошонда. *(Күрһәтә.)* Ә ниңә төшкәнен мин үҙем дә белеп еткермәйем әле.
Кәмилә. Арыу ерҙәнме? Заты кем?
Шөкөр. Исемен-атын, ырыуын-затын һорап та торма. Килмәгән ере юҡ. Үҙен бер ҡашыҡ һыуға һал да йот. Во! *(Үҙе ҡаҙандан сүмес менән һыу алып эсә.)*
Кәмилә. Бирнәлеме икән?
Шөкөр. Бирнә генә түгел, ҡоҙағый, хазина! Алтын тауы!
Кәмилә. Һин, Шөкөр, ашыҡмай ғына, нимәләре бар, нимәләре юҡ — бөтәһен дә бәйнә-бәйнә һөйләп бир.
Шөкөр. Һөйләп торорға ваҡыт юҡ. Килен бына хәҙер төшә.
Кәмилә. Нисек хәҙер?
Шөкөр. Шулай. Тик, ҡоҙағый, һин аптырап ҡалма. Кәләште саҡ ҡына йәшереп алып киләләр, шулай тура килде.

Кәмилә *(төшөнөп)*. Уныһы була торған хәл. *(Ҡапыл иҫенә төшә.)* Килен төшә тип торабыҙ, ҡырҡ эш ҡырылып ята! Ҡаҙан аҫырға кәрәк, ҡамыр баҫырға кәрәк, иҙән йыуырға кәрәк, өйҙө йыйырға кәрәк. Ун икенең береһе юҡ. *(Ары һуғыла, бире һуғыла.)* Гөлнисаһы ҡунаҡта, Миңнисаһы йыраҡта, Миңнәхмәте ҡалаға китеп олаҡҡан. Инде нимә ҡылырға? *(Уң яҡтағы күршеләргә барып ҡысҡыра.)* Гөлсирә, Гөлсирә, ин әле тиҙ генә. *(Һул күршегә ҡысҡыра.)* Иркәбикә инәй, Иркәбикә инәй! Намаҙыңды ташлап булһа ла ин әле! *(Ҡоймаға менеп, урам аша ҡысҡыра.)* Сабира апай, Сабира апай, ти-м! Ҡомғаныңды ҡуй ҙа беҙгә кил, тиҙ үк! *(Папирос сығарып тоҡандырған Шөкөргә.)* Һин нимә, яуҙа еңгән батыр кеүек, түш киреп баҫып тораһың?

Шөкөр. Минең үҙемдең эшем бар. *(Боғаҙына сиртеп.)* Был яҡты ҡарарға кәрәк.

Кәмилә. Уныһы магазиндан сығып ҡасмаҫ. Мин ни ҡушһам, шуны тыңла. Бар, мөгәрәпкә төшөп, май килтер, артҡы келәттән бал килтер, тауҙай итеп утын киҫ, малай йүгерт көтөүгә, бер тәкә ҡыуып ҡайтарһын, йорт алдын һепереп ҡуй. Эшең бөткәс, миңә әйт! Табырмын! *(Үҙе нимәгә тотонорға ла белмәй.)*

Шөкөр. Була ул, ҡоҙағый. Беҙ, беҙ, беҙ инек, беҙ ун ике ҡыҙ инек. Келәткә керҙек, бал ашаныҡ, баҙға төштөк, май ашаныҡ! *(Гармунын йәпле бағанаға элеп ҡуя ла китә.)*

Кәмилә. Яланып йөрөмә һин унда, ишетһен ҡолағың!

Иркәбикә, унның артынан уҡ Сабира инә.

Иркәбикә. Намаҙымды бүлдерҙең, изге эшкә булһын, Кәмилә килен.

Кәмилә. Изгенең дә изгеһе — йортҡа килен көтәбеҙ.

Сабира. Бәрәкәте менән килһен. Әйҙәгеҙ, ултырып доға ҡылайыҡ. *(Доға ҡылалар.)*

Иркәбикә. Бер ҙә генә һөйләнмәй инегеҙ, әллә ҡапылыраҡ булдымы?

Кәмилә. Ҡапыл шул. Ана Шөкөр артынан хәбәр иттергән; хәҙер килен алып ҡайтам, тигән.

С а б и р а. Был саҡтағылар шундайыраҡ шул. Анау Хисмәт ҡарттың уртансы улының теге шуфир малайы...

К ә м и л ә. Мин ни килен төшөрөп өйрәнмәгәс, рәтен-сиратын белмәйем. Кәңәш бирегеҙ, инәйҙәр.

И р к ә б и к ә. Ниндәй ерҙән, киленде әйтәм?

К ә м и л ә. Ошо ерҙән инде. *(Ҡарап.)* Ҡайҙа батты анау Гөлсирә? *(Кәртәгә барып ҡысҡыра.)* Имеҙмәгән балаңмы инде, килен! Илаһа, шартламаҫ әле! Бөтәбеҙ ҙә илап үҫкән. *(Ҡарсыҡтар эргәһенә килә.)*

С а б и р а. Заты-ырыуы арыу кешеләрме?

К ә м и л ә. Арыу, бик арыу.

И р к ә б и к ә. Оло ерҙән тип әйтеп тора бит һиңә, йә брсиҙәтель, йә ситауат ҡыҙылыр инде.

К ә м и л ә. Оло ерҙән түгел, ошо ерҙән, тим.

И р к ә б и к ә. Ошо ерҙән булһа ла, Ҡотләхмәт ни етте кеше менән аралашмаҫ.

К ә м и л ә *(өйгә инеп, шырпы, сыралар алып сыға)*. Эште ут менән һыуҙан башлайыҡ әле. *(Ҡаҙан аҫтына ут яға, өф-өф! Өрә.)*

Ш ө к ө р *(бер ҡултығына силәк, бер ҡултығына көршәк ҡыҫтырған)*. Бер ҡулымда бал ғына, бер ҡулымда май ғына, килә ятам яй ғына. *(Юрамал абынған була.)* Ой!

К ә м и л ә. Фу, ҡотомдо алды! Һин айыуға дуға бөгөргә ҡушһаң да шул.

Ш ө к ө р. Ҡайҙа ҡуйырға? *(Ҡарсыҡтар ауыҙҙарын сапылдатып алалар.)*

К ә м и л ә. Кесе яҡҡа.

Ш ө к ө р сыға.

С а б и р а. Ошо Кәмилә килен бал-майҙан һис өҙөлмәҫ.

К ә м и л ә *(усаҡҡа өрә)*. Ниндәй тоҡанмаҫ усаҡ булды был? Хәйерлегә юрағыҙ, инәйҙәр.

И р к ә б и к ә. Иншалла, уңы менән килер.

С а б и р а. Юрайбыҙ, юрайбыҙ. *(Өсәүләп усаҡ өрөргә тотоналар. Усаҡ тоҡана.)*

К ә м и л ә *(ялана-ялана сығып килгән Шөкөргә)*. Тиҙ үк утын килтереп өҫтә.

Ш ө к ө р баш сайҡап китә. Г ө л с и р ә инә.

Гөлсирә. Ниңә саҡырҙың, дәү еңгә?

Кәмилә. Килен көтәбеҙ, Гөлсирә, бына-бына килерҙәр. Һин саҡ ҡына ҡул арама керер инең. Юғиһә бер үҙем бишкә ярылырҙай булып йөрөйөм.

Гөлсирә. Нимәләр эшләйем, әйт, дәү еңгә.

Кәмилә. Бер-ике көйәнтә һыу килтер, аҡ келәтте йыуып сығар, йәштәрҙе шунда ҡуширбыҙ, ике самауырҙы ла ҡуй, быҙау ҙурлығы итеп ҡамыр баҫ, тәкә ҡайтҡансы, өс тауыҡ тотоп һуйҙыр, аласыҡта йолҡоп та ҡуй, кейеҙҙәрҙе, балаҫтарҙы сығарып ҡаҡ. Ҡалғанын үҙем ҡарармын. *(Гөлсирә китә башлай.)* Туҡта әле. *(Иркәбикәгә.)* Инәй, анау сыбар тауығың йомортҡа һалмай, ахырыһы. Шуны тотһаҡ ярамаҫмы, урынына оҡшатҡаныңды һайлап алырһың.

Иркәбикә. Былай мәшәҡәт сыҡҡас, үҙебеҙ ҙә берәй нәмә уйлаширбыҙ, иншалла.

Кәмилә. Ярар, барыбер. Бөтөрөлөп йөрө, Гөлсирә, табаныңдан ут сыҡһын. Үҙем ниҙән башлайым икән?

Гөлсирә. Тырышырмын, дәү еңгә. *(Көйәнтә, күнәк алып һыуға китә.)*

Шөкөр утын килтереп усаҡҡа һала ла китә.

Иркәбикә. Һин эшеңде саҡ ҡына ҡуйып тор, Кәмилә килен, кәңәшләшәйек, кәңәш иткән кәм булмаҫ, тигәндәр.

Сабира. Һүҙҙе никахтан башларға кәрәк. Теге радио Ниғмәтулла ла вафат булып китте. Ауылда никах уҡыр кеше лә ҡалманы.

Иркәбикә. Кафыр Шәрәй аҙ-маҙ һупалай, тиҙәр ҙә.

Кәмилә. Бер ҙә белмәйем шул.

Иркәбикә. Белгәндәре лә онотолоп бөттө. Ана минең бабайым элек шыңғырлатып уҡып ебәрә торғайны, хәҙер оноттом, ти.

Сабира. Кәрешкәлә элекке Мөтәүәлли бар ҙа, бик эсә, тиҙәр үҙен. Уҡыуы ла ҡабул булмаҫ.

Кәмилә. Ҡотләхмәт риза булмаҫ, шәриғәт менән татыулығы юғараҡ шул уның.

Иркәбикә. Ярай, улайһа, никах-миках менән баш ватмайыҡ.

Сабира. Ниңә ватмаҫҡа, ти? Никах уҡытыу, хәйерсаҙаҡа биреү — шәриғәт ҡушҡан эш. Ана, тимерсе Әхмәдулланың улы комсомол булһа ла, ата-әсә хәтерен һаҡлаған...

Иркәбикә. Ҡуй, Сабира. Ул да никах уҡытмаған. Әсәһе буш хәбәр һөйләп йөрөнө шунда.

Сабира. Шәриғәт буйынса булмаһа, йола буйынса ҡабул ит киленде, сеңләүеңде әйт, тупһаңа мамыҡ мендәреңде һал. Ҡыҙҙар үҙенә һыу юлы күрһәтерҙәр...

Кәмилә *(хәтерләп)*. Күнәктәрем дә иҫкергән, көйәнтәм дә алама. Килен иңенә нисек шуны һалайым? Шөкөр, Шөкөр, тим!

Шөкөр *(балта тотоп сыға)*. Бойор, ханым-солтаным.

Кәмилә. Ете ҡат ер аҫтына төш, ете ҡат күккә мен, ете өйгә кер, вә әммә өр-яңы сәскәле күнәктәр менән өр-яңы сәскәле көйәнтә табып килтер.

Шөкөр. Була ул, ҡоҙағый. *(Ҡойма аша һикерә.)*

Кәмилә. Мин эшемде ҡарайым, һеҙ ҙә өйгә инегеҙ. *(Инеп китә.)*

Иркәбикә. Хәҙер инербеҙ.

Сабира *(Иркәбикәгә)*. Тороп торсо саҡ ҡына. Никахһыҙ туйҙы шәриғәт ҡабул итмәй, тиҙәр бит, Иркәбикә апай.

Иркәбикә. Селпәрәмә килгән шәриғәтеңде ҡамыр менән йәбештереп кенә төҙәтеп булмаҫ инде.

Сабира. Тәүбә, тиген.

Иркәбикә. Тәүбә, тәүбә. *(Торалар.)*

Тамаҡ ҡыра-ҡыра, Шәрәй инә. Ул өтөк кенә, йолҡош ҡына бер кеше.

Шәрәй. Аманлыҡмы, ил инәләре.

Иркәбикә. Шөкөр.

Шәрәй. Шулай булһын. Әйҙә бер доға ҡылып алайыҡ. *(Ултырышып бит һыйпайҙар.)* Әле Гөлсирә балдыҙ хәбәр итә һалды. Килен көтәһегеҙ икән.

Сабира. Көтәбеҙ, бойорған булһа.

Шәрәй. Никахын ни үҙем уҡып бирәмдер инде, иншалла.

Иркәбикә. Никах-фәлән менән мәшәҡәтләнмәҫкә булдыҡ инде, Шәрәфетдин.

Сабира. Улай өҙөп үк әйтмә әле. Бәлки, уйлашырҙар. Бер ҙә булмаһа, Шәрәфетдин запаста торор, запас ашарға һорамай ҙа.

Шәрәй. Һорамай тип ни инде, еңгә, запас та ас тора алмай бит.

Кәмилә *(өйҙән)*. Иркәбикә инәй! Инегеҙ әле.

Сабира. Әйҙә, Шәрәфетдин, һин дә ин. Ҡала торған эшең юҡтыр.

Шәрәй. Был арала ҡарт-ҡоро араһында үлем-етем һирәгәйҙе шул.

Иркәбикә. Ауыҙыңдан ел алһын.

Сабира. Тәүбә, тиген.

Шәрәй. Тәүбә, тәүбә. *(Өйгә инеп китәләр.)*

Бер көйәнтә һыу күтәреп, Гөлсирә ҡапҡанан инә. Асыҡ тәҙрәнән Шәрәйҙе күрә.

Гөлсирә. Бынау Кафыр Шәрәй ҡартҡа әллә юҡҡа әйттем инде. Еҫкәнеп килеп тә еткән. *(Өйгә инә.)*

Шәрәй *(өйҙән тауышы ишетелә)*. Әллә, изге сәғәткә тура килтереп, бер Ҡөрьән уҡып ебәрәйемме?

Гөлсирә тағы һыуға китә. Шөкөр инә.

Шөкөр. Сәлдерҙем Хөбби ҡарсыҡтың көйәнтәһе менән күнәктәрен. Ҡарты уҙған аҙнала ғына ҡаланан алып ҡайтҡайны. Кем көйәнтәләре кемдең йылы индәренә килеп һалынасаҡ бит, ә? Биллаһи, был күнәктәр, был көйәнтә менән үҙем һыу юлы башлар инем. *(Йәпле бағанаға илтеп элә.)* Хәҙер давай, Шөкөр, ҡулыңа һепертке ал да был яҡты донъяны туҙан болото менән ҡапла. *(Келәт алдынан һепертке барып ала.)*

Өйҙә был арала Кәмилә ары-бире һуғыла, уның тауышы йыш ҡына ишетелә.

Башланыҡ! *(Бер ҙә һелтәй алмай.)*

Өйҙән Кәмилә ҡысҡыра.

Кәмилә. Шөкөр, Шөкөрйән! Килсе, бынау карауатты аҡ келәткә илтәйек.

Шөкөр. Була ул, ҡоҙағый.

Өйгә атылып инә. Шунда уҡ Кәмилә менән икәү күпертеп түшәк, яҫтыҡ һалынған никелле карауат күтәреп сығалар.

Кәмилә. Ипләп, Шөкөр. Ишек яңағына бәрәһең бит.

Шөкөр. Була ул, ҡоҙағый.

Кәмилә. Әйҙә, атла.

Болдорҙан төшәләр.

Шөкөр. Аҫта мамыҡ түшәк, өҫтә ебәк юрған, ҡуйында йәш кәләш. Шуларҙың бөтәһе лә бер кешегә бит, ә? Рәхәттең сиге ошолор инде.

Кәмилә. Атла.

Китәләр.

Шәрәй *(өйҙән)*. Ошондай ут кеүек көндө Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡом сүлендә дәһриҙәр менән һуғышып йөрөгән...

Иркәбикә. Уныһын үҙебеҙ ҙә беләбеҙ.

Кәмилә менән Шөкөр урап килә.

Кәмилә. Хәҙер һеперткеңә тотонһаң да ярай.

Шөкөр *(һеперткe ала)*. Эшең шул булғас ни. Ихма! *(Һелтәй-һелтәй йырлап бейей.)*

Беҙ улай ҙа итәбеҙ,
Беҙ былай ҙа итәбеҙ,
Һоратҡанда килмәгәнде
Урлайбыҙ ҙа китәбеҙ.

Улай ҙа алдырырбыҙ,
Былай ҙа алдырырбыҙ,
Кәрешкәнең егеттәрен
Кәләшһеҙ ҡалдырырбыҙ.

Улай итһәк тә ярай,
Былай итһәк тә ярай,

Сығарып алһаҡ та ярай,
Урлап китһәк тә ярай.

Вот килеп эләктем, исмаһам, туйҙың ҡыҙыуына. Ҡотләхмәт уҙаман сибәр кәләш алып ҡыуана, Шөкөрйән диуана туҙан туҙҙырып йыуана. *(Һеперткеһен ҡосаҡлап тора.)*

Гөлсирә һыуҙан ҡайта.

Гөлсирә. Ҡауыштығыҙмы ни?

Шөкөр. Ҡауыштыҡ.

Гөлсирә өй алдына үтә.

Ҡарап торам да атлауҙарыңды, Гөлсирә, атлауға түгел, ҡауырһын ҡәләм менән мөхәббәт хаты яҙыуға оҡшатамын.

Гөлсирә. Ул хат эйәһенә барып юлыҡҡан инде. *(Болдорға менә.)*

Шөкөр. Гөлсирә, бер ҙур ғына ашъяулыҡ сығар әле.

Гөлсирә. Ярай. *(Өйгә инә.)*

Шөкөр. Бөтә хаттар ҙа эйәләренә юлығып бөтөп бара. Миңә тигәне генә әллә ҡайҙа аҙашып йөрөй. «Ҡай болонда оса икән мөхәббәт күбәләгем...»

Гөлсирә *(өйҙән сығып)*. Мә. Кейәү менән кәләшкә әллә сатыр ҡораһыңмы?

Шөкөр. Юҡ, Гөлсирә — йөрөгән юлға гөл һибә, хәҙер һыйыр батҡан быуаға барам да эреле-ваҡлы шайтан балаларын тейәп ҡайтам.

Гөлсирә. Шайтан тотоп йөрөгәнсе, әйҙә миңә тауыҡ тотош.

Шөкөр. Ҡурҡам шул.

Гөлсирә. Әтәстәнме?

Шөкөр. Һинең уҫал иреңдән. У-ух, ул!

Гөлсирә. Ҡурҡһаң, бар, юлыңда бул.

Шөкөр *(ашъяулығын төрөп тота ла эсендә шешәләр бар тип хис итә)*. Берене бәләкәй, береһе ҙур, береһе ҡыҙыл, береһе аҡ. Ҡыҙылын эсһәң, ҡыҙҙырыр, ағын эсһәң, аҡыртыр, аҡыртһа ла, эсәбеҙ, эскән һайын үҫә-

беҙ... *(Таҡмаҡлап, бейегән кеүегерәк ҡыйыш-мыйыш баҫып, сығып китә.)*

Гөлсирә *(аҙбар яғына уҙа)*. Себей-себей, сип-сип, себей-себей, сип-сип.

Шәрәй *(тауышы өйҙән ишетелә)*. Әллә, аллаға тапшырып, Ҡөрьән уҡып ебәрәйемме?

Иркәбикә *(өйҙән)*. Уҡыһаң да, күҙеңде йоммай уҡы...

Шәрәй. Әғүзе биллаһи минашай... раззим.

Гөлсирә *(тауышы аҙбарҙан ишетелә)*. Себей-себей, сип-сип, себей-себей, сип-сип.

Тауыҡ сырылдағаны ишетелә. Урамға «Москвич» килеп туҡтай. Өс тапҡыр тантаналы сигнал бирә. Өйҙә шау-шыу күтәрелә. Башта Кәмилә атылып килеп сыға.

Кәмилә. Ҡайтып та төштөләр! Ун икенең береһе юҡ! *(Барып ҡапҡа асырға итә, кире борола.)* Гөлсирә, Шөкөрйән!

Шәрәй, ҡарсыҡтар сыға.

Шәрәй *(тамаҡ ҡыра. Ҡулдарын ыуа)*. Эһем, эһем, бойорған булһа...

Сабира. Я хоҙай, йәштәрҙең күңеленә иман керт!..

Кәмилә. Ҡапҡаһы ла асыҡ түгел, исмаһам. Ни ҡараған шул Шөкөр? *(Барып ҡапҡаны аса башлай.)*

Ул арала бәләкәй ҡапҡанан киленде күтәреп, Ҡотләхмәт, уның артынан ауыҙы ҡолаҡ артына еткән Дәүләтбай инә.

Ҡотләхмәт. Бына, апайым, үҙеңә килен алып ҡайттым.

Кәмилә *(төрөлгән киленде күреп башта аптырап ҡала)*. Собханалла, машалла! Был ни эш? Сабыр итсе саҡ ҡына, киленде ҡаҡ ергә баҫтырма. *(Өйгә йүгерә, мендәр алып сыға.)*

Ҡарсыҡтар һәм Шәрәй ни әйтергә лә белмәй тора.

Иркәбикә. Я хоҙай!

Сабира. Бәлә-ҡазаңдан һаҡла!

Шәрәй. Эһем... эһем...

Дәүләтбай. Шаҡ ҡатмағыҙ, инәйҙәр, киленегеҙ бик оялсан, йөҙөн шуға ҡапланы.

Кәмилә *(тупһаға сәскәле мендәр ташлай)*. Баҫтыр шунда киленде.

Сабира *(Иркәбикәгә)*. Хәйерлегә булһын, һул аяғы менән баҫты.

Кәмилә. Бына, килен, үҙең донъя көтәсәк йортоңдоң тупһаһына аяҡ баҫтың.

Иркәбикә. Йортҡа бәрәкәт алып килеүең ошо булһын, балам.

Шәрәй. Йома көн өйлә ваҡытында төшкән килендең баш өҫтөндә фәрештә һәр ваҡыт ҡанат йәйеп торор, ти китап.

Кәмилә *(Гөлсирәне күреп)*. Барсы, килен, тиҙ генә аҡ келәтте йыуып сыҡ. Ә унан һуң киленгә һыу юлы күрһәтерһегеҙ.

Гөлсирә китә.

Сабира. Инсафлы балалыр, күрәһең, улай оялсан булғас...

Ҡотләхмәт. Йә, апай, киленде йонсотмайыҡ, өйгә алып инәйек.

Дәүләтбай. Беҙ киленде тупһала тотор өсөн килтермәнек.

Кәмилә. Әсәйең урынына ҡалған апайыңмын. Килен өйгә кергәнсе, теләгемде теләйем, фатихамды бирәйем.

Иркәбикә. Борондан килгән шундай йола бар, уландар.

Сабира. Фатиха алмай инеү ярамаҫ.

Ҡотләхмәт. Әйтһәң, фатиханды әйт тә, апай, кәмит ҡороп тормайыҡ.

Сабира. Йола кәмит була тиме икән?

Ул арала ҡойма башында — бала-саға, ҡойма өҫтөндә ололарҙың баштары күренә башлай.

Дәүләтбай *(ситкә)*. Йонсоталар бикәмде...

Кәмилә. Әйтер һүҙем шул минең:

Ҡотоң менән кил, килен.
Еңел булһын аяғың,
Ел урынына ел, килен!
Мөлкәт килһен көрәлеп
Уңыңдан да һулыңдан,
Алтын-көмөш шылтырап,
Тамып торһон ҡулыңдан.
Күҙең яман булмаһын,
Яман күҙ ер көйҙөрә,
Һүҙең яман булмаһын,
Яман һүҙ йән биҙҙерә.
Хәләлеңә ғәҙел бул,
Ни әйтһә лә, әҙер бул,
Кеселәргә оло бул,
Ололарҙың ҡоло бул.

Ҡотләхмәт. Етте, аңлашылды инде, апай!

Кәмилә. Хәҙер әйтеп бөтөрәм.

Ҡотләхмәт. Тиҙ бул!

Сабира. Ашыҡма, Ҡотләхмәт, килгән килен кире китмәҫ.

Кәмилә. Күрше хаҡы — гүр хаҡы,
Унһыҙ усаҡ үрләтмә,
Ҡәйнә — килен тупрағы,
Тупрағыңды хөрмәтлә.
Әйтер һүҙем шул минең —
Ҡотоң менән кил, килен...

Ҡотләхмәт. Бөттөмө?

Кәмилә. Бөттө. Фатихамды бирҙем, килен.

Ҡарттар тағы доға ҡыла.

Шәрәй. Хәҙер килендең ай йөҙөн күрәйек, эһем, эһем...

Иркәбикә. Һин, Шәрәфетдин, күҙеңде бик тызрайтып тормаһаң да ярар.

Ҡотләхмәт. Бына хәҙер, Йәмилә, үҙең ғүмер итәсәк ҡурсаҡ өйө кеүек йортоңдо күрәсәкһең. *(Шаршауҙы аҡрын ғына күтәрә башлай.)*

Дәүләтбай. Эргәңдә генә мәңгелек тормош юлдашың баҫып тора.

Ҡотләхмәт. Ул һине ҡаҡмаç, һуҡмаç.

Дәүләтбай. Һинең таяныcың һәм ярҙамсың булыр.

Ҡотләхмәт. Һинең һылыу йөҙөңдән башҡа берәүгә лә күҙ һалмаç.

Дәүләтбай. Күтәрелеп тә ҡарамаç...

Ҡотләхмәт. Бына һин барыбер минеке булдың, Йәмилә... *(Сисеп бөтөрә.)* Йәм... Йә... Ә???

Бөтәһе лә аптырап ҡалалар.

Иркәбикә. Я хоҙайым, бәлә-ҡазаларыңдан һаҡла бәндәләреңде.

Сабира *(яҡ-яғына төкөрә)*. Тфү, тфү, өнөммө был, төшөммө?

Шәрәй. Уҡының никахты...

Кәмилә. Һин миңә килен түгел, ҡәйнә алып ҡайтҡанһың бит, туғанҡайым? Ниңә шулай ил алдында мәсхәрә итәһең олоғайып бөткән апайыңды?

Ҡойма башындағы малайҙар көлә башлайҙар. Ҡотләхмәт менән Дәүләтбай һаман һуштарына килә алмайҙар.

Уңғанбикә *(сәскәрөп ебәрә)*. Фу, оңҡоттар, тонсоҡтороп үлтерә яҙҙылар! Кәләш кәрәк булған икән быларға! Бына килдем. Ниңә аҡ кәләткә алып кермәйһегеҙ, тинтәктәр? *(Болдорға килеп ултыра.)* Башыма сепрәк килтереп япҡас та, һиҙҙем мин быларҙың этлеген. Әйҙә, барыбер Рәсәйҙән ситкә алып китмәçтәр әле, тим. Шымдым. Луфкауайҙа йөрөү бик рәхәт икән дә баһа, һөйәктәрем иреп киткәндәй итте. Тик юлы ҡыçҡа булды. Өс саҡрым ара ни, күпмегә етһен... Эҙләһен әле мине теге ҡарт алйот. Аҡылға ултыртырмын әле мин уны! *(Яулығы менән тирен һөртә.)*

Сабира *(Иркәбикәгә)*. Әллә, апай, хәйерле саҡта ҡуҙғалайыҡмы?

Шәрәй. Эһем... эһем... Көтәйек әле.

Ҡотләхмәт. Баштан көлөүең шулмы, Дәүләтбай ағай? Ни үсең бар ине миндә?

Дәүләтбай *(башын сайҡап тора)*. Башым әйләнеп китте әле, туған.

Ҡотләхмәт. Ҡыҙып китһәм, ул миңрәү башыңды кире яҡҡа ла бороп ҡуйырмын мин, быҙау! Һине Быҙау Дәүләтбай тип юҡҡа ғына йөрөтмәйҙәр икән...

Дәүләтбай. Юҡҡа түгел икән шул, туған. Их Туктабикә, Туктабикә, әйләндерҙең бит баштарымды! *(Башын тотоп ултыра.)*

Уңғанбикә. Йәш саҡта урлана яҙып, урлана яҙып ҡалғайным, яҙмыштан уҙмыш юҡ икән, тәки урландым... Дәүләтбай кеүек ирҙең бер күтәреп йөрөтөүе үҙе бер ғүмер бит йүн белгән кешегә. *(Көлә.)*

Төйөнсөк тотоп, Шөкөр ҡайтып килә. Ул бик шат, саҡ ҡына ҡыҙмаса.

Шөкөр. Донъя рәхәте минең ҡулда, бөтәһе лә ошонда! Ҡоҙа өсөн асы бар, ҡоҙағыйға татлы бар. Ҡыҙ-ҡырҡынға шәрбәтле... Ҡиәмәте, йәннәте — барыһы ла ошо ҡулымда... Их-ма! Бәй, ҡоҙағый ҙа килеп еткән икән. Һаумы, ҡоҙағый? *(Уңғанбикәгә ҡул бирә.)* Вот, маладис, ҡоҙағый, шулай сознательный булырға кәрәк. Фатиха килтерҙеңме?

Уңғанбикә. Күмәртәһе менән.

Шөкөр. Шулай йомарт булыу яҡшы. Килен ҡайҙа?

Кәмилә. Килен ни, ошонда инде.

Шөкөр. Йәмилә ҡайҙа? *(Ҡараштырып ала.)* Ә һеҙ ниңә шатланмайһығыҙ? Ничего! Шатланыр көнөгөҙ алда әле. *(Төйөнсөгөн күрһәтә.)*

Ҡотләхмәт. Ахмаҡ һин! Саҡ ҡына ла башың эшләмәйме ни?

Дәүләтбай. Кәләш тип, ана, Уңғанбикә еңгәне хаталыҡ менән алып ҡайтҡанбыҙ.

Шөкөр *(лып итеп ергә ултыра)*. Былай булғас, кем ахмаҡ икәнен тикшереберәк ҡарарға кәрәк булыр... Ә мин тырышҡан булам, ҡара тирҙәргә баттым. Ана, киленгә һыу юлы башларға яңы күнәктәргә тиклем килтерҙем. Бар, улай булғас, үҙең һыу юлы башла... Тфү, тырышыуҙарым елгә осто!

Кәмилә. Күпме торһаҡ та, хәҙергә икенсе килен килмәҫ... Әйҙә, Уңғанбикә ҡорҙаш, өйгә инеп сәй эсәйек. Бер түгел, ике самауырым ҡайнап ултыра. Әйҙәгеҙ, әбейҙәр. Шәрәфетдин, һин дә ин. *(Инә башлай.)*

Сабира. Мәрәкә сыҡты тип кенә аштан оло булып булмаҫ... *(Инә башлай.)*

Шәрәй. Бәндәне ризыҡ йөрөтөр, ти торғайны Ишмырҙа хәҙрәт.

Уңғанбикә. Йыяһы ризыҡ теш һындырып керә икән шул. Ололап саҡырыуыңа рәхмәт, Кәмилә. *(Егеттәргә әйләнеп ҡарай.)* Ошо йортҡа килен булып төшөрмөн тип ғүмер уйлағаным юҡ ине.

Ҡарттар инеп китәләр.

Шөкөр *(ултырған көйө)*. Ха-ха-ха.

Урамдағы халыҡ та ҡушылып көлә.

Ҡотләхмәт *(ҡойма башындағыларға)*. Ҡасығыҙ! Айыу бейетәләрме әллә бында!

Шөкөр. Ха-ха-ха. Былай булғас, һеҙҙең дан таралды инде бөтә Рәсәйгә! Бара торғас, һеҙҙең хаҡта театр китабы ла яҙырҙар әле. Кәмитселәр, ха-ха-ха.

Ҡотләхмәт. Йырма шул ауыҙыңды, юғиһә икмәк шүрлегеңә менеп төшөүем бар.

Шөкөр. Төшмәйерәк тор инде. Мин ҡатнашмаған эштә йүн буламы ни ул! Их һеҙ!

Алыҫта ҡыңғырау тауышы, ат сабып килеүе ишетелә.

Дәүләтбай. Киләләр! *(Тыңлайҙар.)*

Ҡотләхмәт. Килһендәр.

Шөкөр. Бына улар икмәк шүрлегеңә менеп төшөргә может.

Дәүләтбай. Был Мөхәммәтшаның пожар арбаһына оҡшай...

Шөкөр. Ҡасырға кәрәк, егеттәр.

Ҡотләхмәт. Мин үҙ өйөмдә үҙем хужа.

Дәүләтбай. Ә улар кем хужа икәнен һорап тормаһалар?

Шөкөр. Ҡастыҡ, егеттәр.

Дәүләтбай. Ҡайҙа ҡасабыҙ һуң?

Ҡотләхмәт. Әйҙәгеҙ мөгәрәпкә.

Шөкөр. Унда һыуыҡ.

Ҡотләхмәт. Улай булғас, киләткә.

Шөкөр *(ҡул һелтәй)*. Һыҙҙыҡ! Бына һиңә кәрәк булһа. *(Һуҙып.)* «Киләткә керҙек, бал ашаныҡ, баҙға төштөк, май ашаныҡ. *(Ҡапыл.)* Таң атҡансы юҡ булдыҡ...»

Ҡыңғырау тауышы килеп үк етә. Арттарына ҡарай-ҡарай йүгерәләр. Бер аҙҙан киләт яғынан ҡулына мунсала тотҡан Гөлсирә килә. Ул ҡура уртаһында аптырап баҫып тора.

Гөлсирә. Ниндәй хикмәтле туй булды был?

Эстән өй тәҙрәләрен ябалар. Шунда уҡ йортто ике яҡтан уратып, ҡулдарына брандспойттар тотҡан Мөхәммәтша менән Баян килеп сыға. Мөхәммәтша — пожарник кейемендә. Улар артынан шлангылар һуҙылған.

Беҙ янмайбыҙ бит, ағайҙар.

Мөхәммәтша. Һеҙ янмаһағыҙ, беҙ янабыҙ! Ҡайҙа ҡасырҙығыҙ? Йәмиләне?

Гөлсирә. Мин күрмәнем

Баян. Ҡараҡтар ҡайҙа? Ух, ҡул ҡысый!

Мөхәммәтша. Бөтә донъяғыҙҙы ватам, емерәм, яндырам, һүндерәм...

Өйҙән Кәмилә сыға.

Кәмилә. Тағы ниҙәр күрәһем бар икән? Абау! Үҙең һаҡла, Хоҙайым! *(Сырылдап кире өйгә йүгерә.)*

Гөлсирә ҡасырға уйлай.

Баян. Урыныңдан ҡуҙғалаһы булма. Һин беҙҙең әсир! Пленный!

Мөхәммәтша *(тәҙрәгә бара)*. Өй эсендә ниндәй йән эйәһе бар, бөтәһе лә сыҡһын!

Баян. Сыҡмаһағыҙ, һыуға батырып, тонсоҡтороп үлтерәбеҙ.

Мөхәммәтша. Өскә тиклем һанайым: бер... ике... өс... *(Урамға ҡысҡыра.)* Качай насосты, Әптерәй!

Сыр-сыу килеп, Уңғанбикәнән башҡа, ҡарсыҡтар һәм Шәрәй килеп сыға.

Баян. Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ!

Мөхәммәтша. Ҡайҙа ҡуйҙығыҙ ҡыҙҙы? Энә күҙенә йәшерһәгеҙ ҙә, табырмын!

Иркәбикә. Бер үҙең һаҡла, илаһым!

Сабира. Ахыры замандыр был!

Шәрәй. Бән-бән-бәндә күрәсәген күрмәй... *(Тотлоға.)*

Мөхәммәтша. Әйтегеҙ. Яҡшылыҡ менән, юғиһә йортоғоҙҙоң аҫтын-өҫкә килтерәбеҙ.

Кәмилә. Бөртөкләп йыйған йортомдо тарата күрмәгеҙ, зинһар! Бер ниндәй ҡыҙ ҙа юҡ.

Баян. Ҡараҡ үҙе ҡайҙа? Ҡайҙа Ҡотләхмәт? Дәүләтбай, Шөкөр ҡайҙа? Ҡасҡандар, ҡуян йөрәктәр!

Мөхәммәтша. Яуыздарҙың ҡасҡан ерен күрһәтегеҙ!

Баян. Имениеғыҙҙың көлөн күккә осорам!

Гөлсирә. Ҡотләхмәт ни, ул анау аҡ келәттә.

Мөхәммәтша. Ҡыҙ ҡуйынындамы? Баш китһә китер, әйҙә, Баян!

Келәткә йүгереп киләләр.

Сабира. Үлеш кенә булмаһа ярар ине!..

Кәмилә. Йорттоң бәрәкәте китте, былай булғас...

Шәрәй. Ябраил фәрештә үҙенең ҡанаты аҫтына алһа...

Бөтәһе лә өйгә инеп китә.

Мөхәммәтша. Ас!

Баян. Ас!

Мөхәммәтша. Асығыҙ! Эҫкерттәге сысҡан балаһы урынына яндырам икегеҙҙе лә! Батырам! Тонсоҡторам!

Баян *(урамға ҡысҡыра)*. Ҡасай насосты, Әптерәй!

Мөхәммәтша. У-у-у! *(Үкереп килеп ишеккә тибә, ишек асылып китә.)*

Ҡотләхмәт, Дәүләтбай, Шөкөр килеп сыға.

Баян. Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ! Марш алға!

Мөхәммәтша *(Ҡотләхмәтте төртөп ебәреп, келәт эсенә инеп сыға)*. Ҡайҙа илттегеҙ Йәмиләне?

Ҡотлаҳмәт. Ҡыҙҙар тауында ҡалды ул.

Мөхәммәтша. Ҡурҡаҡ ҡына түгел, ялғансы ла икән әле һин, әшәке нәмә! Кеше бәхетенә ҡул һуҙған өсөн мин һинең ҡулдарыңды йолҡоп алырмын.

Баян. Атлағыҙ! *(Брандспойтты тоҫҡап, быларҙы болдор эргәһенә алып киләләр, бәйләп алалар.)*

Дәүләтбай. Бында хаталыҡ сыҡты, егеттәр.

Баян. Судта яуап бирерһең. Аҫтыртын!

Мөхәммәтша. Йәмилә? Йәмилә ҡайҙа, әҙәм ҡараҡтары?!

Шөкөр. Бында аңлашылмау бар.

Баян *(берҙе эләктереп ала)*. Аңлашылмаһа, аңлатырмын мин һиңә, кәзә тәкәһе!

Артабан Ҡотлаҳмәт менән Шөкөр, ҡулға алынған кеше кеүек, ҡулдарын артҡа ҡуйып, баш эйеп, баҫып торалар.

Мөхәммәтша. Йәмиләне табып бирегеҙ! Килтерегеҙ ҡыҙҙы!

Урамға ниндәйҙер машина килеп туҡтай. Шунда уҡ Йәмилә, Ильяс, Мөнирә, Маһибәҙәр йүгереп инәләр. Бәләкәй ҡапҡа асыҡ ҡала.

Йәмилә. Туйҙар ҡотло булһын!

Ильяс. Туйҙың иң ҡыҙыу ваҡытына тап булдыҡ, ахырыһы.

Мөхәммәтша *(аптырап ҡала. Брандспойты ҡулынан төшөп китә)*. Й... Йә... Йәмилә? Көндөҙ йондоҙ күрәмме мин?

Йәмилә *(Мөхәммәтша эргәһенә бара)*. Һаташҡанһың һин, Мөхәммәтша.

Мөхәммәтша. Һин һаташтырҙың мине, Йәмилә!

Баян. Әптерәй, отбо-о-й!

Йәмилә *(Ҡотлаҳмәткә)*. Әсәйҙе ҡайҙа иттең, дәртле егет?

Уңғанбикә тәҙрәне асып ебәрә, бер ҡулында — сынаяҡ аҫты, өрә-өрә сәй эсә.

Уңғанбикә. Мин бында, ҡыҙым!

Йәмилә. Әсәй! *(Өйгә йүгерә.)*

Мөхәммәтша. Их һин, бешмәгән кейәү!

Туҡтабикә янып-бешеп килеп инә. Туп-тура Дәүләтбайҙың күкрәгенә башын килтереп һала.

Туҡтабикә. Мине янған уттарға һалыуың шулмы ни, Дәүләтбай? Биргән вәғәҙәләреңде, әйткән татлы һүҙҙәреңде аяҡ аҫтына һалып тапайһыңмы ни? Ни йөҙҙәрем менән кешеләргә күренәйем мин хәҙер?

Дәүләтбай. Мин ғәйепле бында, Туҡтабикә, туҡта әле саҡ ҡына.

Туҡтабикә. Туҡтабикә ярты юлда туҡталмаҫ. Бына үҙем артыңдан килдем. Балаларың-ниең менән тейәп хәҙер үк Кәрешкәгә алам да китәм. Шулай ышаныслыраҡ булыр.

Дәүләтбай. Тимәк, һин мине ғәфү итәһең, Туҡтабикә?

Туҡтабикә. Уныһын күҙ күрер! Әйҙә, әйҙә, йыйын ҡырҡмыш тай артынан эйәреп йөрөгән ат аламаһы! Киттек! *(Шөкөр менән Ҡотләхмәткә бармаҡ янап.)* Әҙәм ҡотортоп йөрөйһөгөҙ, өтөктәр! *(Еңенән тотоп алып сыға башлай.)*

Асыҡ ҡапҡанан велосипедҡа ултырған Әжмәғол килеп инә. Велосипедын килгән уңайға йығып ҡына атлап китә.

Әжмәғол *(Дәүләтбайға осонop килә)*. Төрмәлә серетәм мин һинең башыңды! Ҡара йылан!

Туҡтабикә *(араға инә)*. Ҡағылаһы булма, һинең үҙ гонаһың үҙеңә еткән!

Әжмәғол *(Ҡотләхмәт менән Шөкөргә)*. Мошенниктар, көҙгө әтәстәр! Ҡайҙа ҡуйҙығыҙ минең ҡарсыҡты? Бөтәгеҙҙе лә Себер ебәртәм! Ҡайҙа закон? Начальство ҡайҙа? Мөгәрәпкә ябып һыуытырға кәрәк был шайтан балаларын! Ил өҫтөнә тап төшөрөп, законға хилаф эш эшләгәндәре өсөн, илдән ҡыуырға кәрәк быларҙы! Уңғанбикә, тауыш бир, исмаһам!

Шөкөр. Һин ҡоторттоң беҙҙе! Ҡотҡо һалған өсөн һинең үҙеңде яуапҡа тарттырырға кәрәк, һөрһөп бөткән капитализм ҡалдығы!

Ҡотләхмәт. Һин һөйләмәһәң, ҡыҙ урлау башҡа ла кергән нәмә түгел ине бит, Әжмәғол ағай.

Әжмәғол. Һеҙ йәш башығыҙ менән бер ҡарт ахмаҡтың һүҙен тыңламаҫ инегеҙ! Һеҙҙе нимәгә өйрәттеләр? Капитализм ҡалдығына ҡаршы көрәшергә өйрәтмәнеләрме ни һеҙҙе, таш баштар? Хәтерһеҙҙәр! Ультимат шул: ҡарсыҡты табып бирмәһәгеҙ, хәҙер үк бола күтәрәм, валлаһи, күтәрәм! Табығыҙ! Уңғанбикә, тауыш бир!

Уңғанбикә аҡрын ғына ишектән сыға. Бер аҙҙан Йәмилә лә күренә.

Уңғанбикә. Әү.

Әжмәғол. Һине эҙләп ҡаңғырып бөттөм бит, ҡарсыҡ! *(Болдорға менмәксе була.)*

Уңғанбикә. Тороп тор! Беҙгә Ҡотләхмәт менән алдым-бирҙем булды инде.

Әжмәғол. Бирермен мин уға алдым-бирҙемде!.. *(Әтәсләнеп егеткә ташлана.)* Һөйәген онтайым хәҙер! Мошенник!

Уңғанбикә. Ҡарағыҙ әле бынау әҙәмгә! Ҡыҙ урланым тип, ҡырҡ йыл ҡороға маҡтанып йөрөнө. Үҙе бер ҡарсығын да һаҡлай алманы. Ир тиергәме әллә сир тиергәме быны?

Әжмәғол. Әйҙә, ҡарсыҡ, нимә әйтһәң дә әйт, тик үткәнде хәтерләмә. Әйҙә яйлап ҡына ҡайтып китәйек. *(Егеттәргә.)* Мин һеҙҙең арт һабағығыҙҙы уҡытырмын әле! Әйҙә, ҡарсыҡ.

Уңғанбикә. Юҡ инде, луфкауайҙарға ултырып килеп, йәйәү ҡайтыр хәлем юҡ. Луфкауай килтер.

Әжмәғол. Ҡайҙан алайым мин уны?

Уңғанбикә. Кәрәккәс, кеше таба бит, һин дә тап.

Әжмәғол *(ары-бире ҡарана, Дәүләтбай эргәһенә килә)*. Дәүләтбай туған, оло башымды кесе итеп һорайым, һүҙемде йыға күрмә.

Дәүләтбай *(Туҡтабикәгә ҡарай)*. Туҡтабикә ни әйтер?

Туҡтабикә. Ниңә газогенераторный двигателеңде алып килмәнең? Шуға ултырып ҡайтыр инең.

Әжмәғол. Улай итмә инде, килен.

Туктабикә. Ярар, еңгә үҙебеҙҙең янға һыйыр әле. Әйҙә, Уңғанбикә еңгә...

Ҡуҙғала башлайҙар. Мөхәммәтша Йәмилә эргәһенә болдорға менеп баҫа.

Уңғанбикә. Тороп торoғoҙ саҡ ҡына. Үҙ туйымдың никахын үҙем уҡытып китәйем әле, булмаһа... Башлағыҙ, йәштәр!..

Ильяс *(гармунды Шөкөргә алып бирә)*. Йә, Шөкөр, «Аҡтаныҡ»ты тарт.

Шөкөр. Их-ма! *(Уйнай.)*

Ильяс йыр башлай, бөтәһе лә күтәреп ала.

Бөтәһе лә. Аҡтаныҡ буйы әрәмә —
Тал ғына, муйыл ғына,
Аҡтаныҡ егеттәренә
Ҡыҙ урлау уйын ғына.
Уйын ғына, көлкө генә,
Йырла ла бейе генә,
Тик ниңәлер китеп барҙы
Кейәүҙең көйө генә.

Ҡотләхмәт *(ҡушыла)*.
Ҡыҙҙы урлап булманы ла
Әбей урлап уңманым.

Бөтәһе лә. Шулай илгә дан тарата
Егеттәрҙең уңғаны.
Аҡтаныҡ буйҙары туғай,
Туғайында күл генә,
Оятыңа сыҙамаһаң,
Аяҡ үрә үл генә.

Ҡотләхмәт. Их-ма! *(Баҫкан еренән ҡапыл бөгөлөп төшә.)*

*Шаршау*

*1958*

## ЙЫРЛАНМАҒАН ЙЫР

*Өс шаршаулы драма*

ҠАТНАШАЛАР:

Дүсмәт Ярлыҡапов — ҡала комитетының икенсе секретары
Мәстүрә — уның бисәһе
Япар Юлдашев — газета редакторы
Дилбәр — Дүсмәттең ағаһының ҡыҙы. Институтта уҡыта
Вәзир — газета эшсеһе. Дилбәрҙең ире
Низам — художник
Рәхимә — техникум студентҡаһы. Ярлыҡаповтарҙа тора
Арыҡбаев — предприятие директоры
Гөлбикә — тегенсе ҡыҙ
Ҡарт — уҙғынсы
Зәйтүнә — Ярлыҡаповтың секретары
Исмәғил — Рәхимәнең ауылдашы

Ваҡиға 1954—1955 йылдарҙа бара.

### БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Ярлыҡаповтар дачаһы. Зал. Бер яҡ стенаға һунар мылтығы, патрондар эленгән. Өҫтәлдәге вазаға шиңә төшкән сәскәләр һәм ҡыҙара башлаған саған япраҡтары ҡуйылған. Залға бер яҡтан ике ишек сыға. Тәҙрәләр асыҡ. Саҡ ҡына һарғая башлаған ҡыуаҡтар күренә. Аяҙ көн кискә ауышып бара. Август аҙаҡтары.

Мәстүрә яңғыҙ. Ул ҡырҡты уҙған, ләкин әле шиңеп бөтмәгән матур, һылыу бисә. Мәстүрә эске бүлмәнән киҫелмәгән сәскәле ситса алып сыға. Уны иңенә ҡуйып, көҙгө эргәһенә килә.

Мәстүрә. Ни эшләп оҙаҡланы был Гөлбикә? Ошо арала тектереп киймәгәс, ул күлдәктең ни ҡыҙығы ҡала? *(Ситсаны әйләндерғеләп ҡарай.)* Биҙәктәре лә көҙгө япраҡтар төҫлө моңһоуҙар. Был күлдәкте кейгәс, үҙем дә бик яманһыу күренермен, ахыры. Хәйер, барыбер түгелме ни?.. Элегерәк яңы кейем бөтөрөп кейеү үҙе бер шатлыҡ була торғайны. Ә хәҙер кейем бөтөрөүҙең дә ҡыҙығы ҡалманы. Көҙгө сәскә кеүек йәшәлә инде шунда — төҫө бар, хуш еҫе юҡ. *(Ситсаһын шул алдында торған көйө тәҙрә эргәһенә бара, алыҫҡа ҡарай.)* Ҡайһылай һиҙҙермәй генә боҫоп килә көҙ. Әле йәй бөтмәгән, ә көҙ башланды ла инде.

Япар ҡапыл тәҙрә ҡаршыһына килеп баҫа. Ул аҡ сәсле, уртаса буйлы, ҡаҡса кеше. Илле тирәһендә. Өҫтөндә — таушала төшкән костюм. Аяғында — ҡара ботинка. Һөйләгәндә баҫым менән һөйләй.

Япар. Эйе, көҙ етә, дачниктар! Һаумы, Мәстүрә.
Мәстүрә *(һиҫкәнеп китә)*. Ә?.. Яп-пар ағай?..
Япар. Эйе, мин. Ниңә шаҡ ҡаттың? Йә, күрешәйек.

Мәстүрә ситсаһын күкрәгенә ҡуя, унан атып бәрә. Тәҙрә аша күрешәләр.

Мәстүрә. Тәҙрә аша күрештек, хәйерлегә булһын.
Япар *(шаярып)*. Амин, шулай булһын.
Мәстүрә. Япар ағай, өйгә рәхим ит...
Япар. Килгәс, инмәй китмәм. *(Ишеккә үтә.)*
Мәстүрә. Ошо Япар ағай кәүҙәгә лә ҙур түгел, ә ул килеп инһә, өй тула ла китә торғайны. Бына әле лә...
Япар *(инә)*. Ел-ямғыр ситләтеп үткән, ахыры, үҙеңде, Мәстүрә, бер ҙә үҙгәрмәгәнһең.
Мәстүрә. Әллә инде...
Япар. Ә Дүсмәт нисек?
Мәстүрә. Әүәлгесә, көн-төн башы эштән сыҡмай.
Япар. Эйе, горкомда икенсе секретарь булыу еңел эш түгел. Күпме кешенең хәстәрен хәстәрләргә кәрәк бит уға.

Мәстүрә. Һеҙ һуң, Япар ағай, ҡайҙа шулай ғәйеп булдығыҙ? Әллә биш-алты йыл үтеп китте инде.

Япар. Һигеҙ йыл. Бәләбәй яғында нефть сиҙәме күтәрәбеҙ, Мәстүрә, ғәжәп тәмле эш. Әле бында кәңәшмәлә йөрөнөм.

Мәстүрә. Һигеҙ йыл... Шул тиклем ғүмер үтеп тә киттеме ни әле!

Япар. Ғүмер үтә, Мәстүрә. Ул үткән һайын, йәшлек дуҫтары яҡыная бара. Хатта һағындыра. Бына һеҙгә лә атлай-йүгерә тигәндәй килдем.

Мәстүрә. Бик рәхмәт. Дүсмәт тә шатланып бөтә алмаҫ инде!

Япар *(караштырып)*. Дачағыҙ һәйбәт икән. Йыл да сығаһығыҙмы?

Мәстүрә. Йыл һайын. Ҡояш саҡ ҡына йылыта башлағас та, күсенеп киләбеҙ. Ә быйыл ҡышҡа ла ҡалабыҙ. Ҡалалағы өйөбөҙҙө һипләйҙәр.

Япар. Беҙ бәләкәй саҡта, өйҙә тараҡан һәләк күп була торғайны. Өй саҡ ҡына йылынһа, улар ярыҡтарҙан сығып, бөтә ергә тарала, ә өй һыуына башлаһа, яңынан тишек-тошоҡҡа йәшеренеп бөтә ине.

Мәстүрә *(аңламай)*. Шөкөр, беҙҙә тараҡан юҡ. Нимә эшләп һеҙ ҡапыл ул хаҡта хәтерләнегеҙ әле?

Япар *(көлөп)*. Мин дачниктарҙы шул эреле-ваҡлы ҡара, ҡыҙыл, ала тараҡандарға оҡшатам.

Мәстүрә. Һеҙ һаман да әсе теллеһегеҙ икән әле, Япар ағай.

Япар. Хәҙер тағы ла әсерәк. Арыш сүпрәһе торған һайын нығыраҡ әсей төшә бит.

Мәстүрә. Улай булғас, һеҙ, ҡарт сүпрә, әсей ултырығыҙ, мин тиҙ генә сәй әҙерләйем. *(Сыкмаксы була.)*

Япар. Кәрәкмәй. Ҡабыр ерем дә юҡ. Мин Дүсмәтте көтәм. Һин һөйләй ултыр.

Мәстүрә. Нимә һөйләйем?

Япар. Балалар, Дилбәр хаҡында.

Мәстүрә. Балалар икеһе лә Свердловскиҙа уҡый. Ошо көндәрҙә генә оҙаттыҡ. Дилбәр хәҙер үҙе ҙур кеше. Институтта уҡыта. Кейәүгә сыҡты. Бөтәбеҙ ҙә бергә торабыҙ.

Япар. Бына ғүмер. Кейәүе кем?

Мәстүрә. Газетала эшләй. Вәзир Ҡәнзәфәров тигән егет. Кемлеген белеп бөтөрә алғаным юҡ әле. Дүсмәт үҙен бик ярата мәгәр. Хатта *(көлөп)* үҙе баш ҡоҙа булды.

Япар. Вәзир Ҡәнзәфәров... Яҙыуына ҡарағанда, сос егеткә оҡшай.

Мәстүрә. Сосораҡ шул.

Япар *(стеналағы һунар ҡоралдарын ҡарап йөрөй)*. Дүсмәт ныҡлап алып айыу-бүре ауларға тотонған, ахыры.

Мәстүрә. Юҡ. Кейәү артынан килгән малдар улар.

Япар. Кейәү шулай хәтәр һунарсымы ни?

Мәстүрә. Әлләсе, бишенсе ай эленеп тора. Ҡул тейҙергән кеше юҡ. Ҡыҫыр мылтыҡ ул.

Япар. Мылтыҡтың да ҡыҫыры буламы икән ни? *(Көлә.)*

Мәстүрә. Атмағас ни, аптырап әйтәм инде.

Япар *(үҙ алдына)*. Ҡыҫыр мылтыҡ тиген, ә? Үҙе мылтыҡ, ҡот осҡос нәмә, үҙе — ҡыҫыр!

Тыштан уҡ һөйләнеп, Гөлбикә инә. Ул ҡаҡса ғына, буйға бәләкәс кенә 20—22 йәшлек ҡыҙ. Башҡа тегенселәр кеүек алдашмай. Ләкин күргән-белгәнде түкмәй-сәсмәй һөйләргә ярата. Кеше шатлығы менән шатлана белә.

Гөлбикә. Көнө лә көнө! Бөтә донъя, ысын гәрәбә төҫлө, үтәнән-үтә күренеп тора. *(Япарҙы күрмәй.)* Көтә-көтә арып бөткәнһегеҙҙер, Мәстүрә апай, асыуланмағыҙ инде. Башта Тәслимә апайҙарҙа, унан министр Ҡорҙашовтарҙа... *(Япарҙы күреп, ҡатып ҡала.)* Ҡунаҡ бар икән дә баһа! *(Ҡул һуҙып, Япарға бара.)* Һаумыһығыҙ, — Гөлбикә булам.

Япар. Арыуҙыбыҙ әле, Гөлбикә туташ.

Гөлбикә. Туташ булырға мин боронғо ҡыҙ түгел дә, ағай...

Мәстүрә. Ваҡытһыҙыраҡ саҡ бит әле, Гөлбикә. *(Япарға.)* Бик оҫта тегенсе ул беҙҙең Гөлбикә.

Гөлбикә. Улайһа, мин икенсе ваҡытта килермен, йәме, Мәстүрә апай. *(Сыға башлай.)*

Япар *(Мәстүрә ырғытҡан ситсаны дивандан барып ала. Гөлбикәгә һуҙа)*. Мәгеҙ, үлсәгеҙ, киҫегеҙ. Мин һеҙгә ҡамасауламайым.

Мәстүрә. Һуңынан, Япар ағай, һуңынан...

Япар. Һуңынан түгел, хәҙер. Эш кешеһе үҙ эшендә булырға тейеш. Дүсмәттең бүлмәһе ҡайҙа? Мин шунда ултырып торормон.

Мәстүрә. Улайһа, Япар ағай, һеҙ журнал ҡараштырып ултырығыҙ. Беҙ хәҙер бөтөрөрбөҙ. *(Япарға ишек асып күрһәтә. Гөлбикә ситсаны алып ҡарай.)*

Гөлбикә. О, хәҙер был иң модный тауар. Һары сәскәле ситса өсөн Мәскәүҙә үлеш, ти бит. *(Үлсәүен ала.)*

Мәстүрә. Мин һине төшкә саҡлы уҡ көткәйнем.

Гөлбикә. Эй, Мәстүрә апаҡайым, башта Тәслимә апайҙарҙа булдым. Йөн күлдәк тектерә. Беләһең бит инде, Тәслимә апайҙың иңен-буйын үлсәп сығырға ғына бер сәғәт ваҡыт кәрәк. Етмәһә, үҙе холоҡһоҙ.

Мәстүрә. Холоҡһоҙ булып, нимә эшләй һуң ул?

Гөлбикә. Имеш, күлдәктәренең биле нескә, иңбаштары ҡыйғас булһын, осалары һыланып торһон. Ә һин бына һылап ҡара Тәслимә апайға. *(Мәстүрәнең үлсәүен ала башлай.)*

Мәстүрә. Йөрәге ауырыу бит уның.

Гөлбикә. Йөрәге ауырыу булғас, шул тиклем ашамаһын... Нәфсеһен тыйһын. Ярамһаҡланып әйтмәйем, Мәстүрә апай, һеҙгә кейем тегеү үҙе бер рәхәт. Килмәгән ерегеҙ юҡ. Муйындарығыҙ шалҡан төҫлө ап-аҡ, билегеҙ һығылмалы, осаларығыҙ тап үҙ урынында, күкрәктәрегеҙ — ҡыҙҙар күкрәге кеүек, ултырып тора. Торғаны менән кейем ҡалыбы инде. *(Мәстүрәне әйләнеп йөрөй.)*

Мәстүрә. Һин, Гөлбикә, бөтөнләй ат маҡтаған кеүек, маҡтап ташланың мине...

Гөлбикә. Эй, Мәстүрә апай, шундай һылыу аттар була, үҙҙәренә иң һуңғы фасон буйынса ебәк күлдәк тегеп кейҙерерге килә. Ә һеҙ был күлдәк өсөн ниндәй фасон һайлар инегеҙ?

Мәстүрә. Бығамы? Балерина Иҙелбаеваның Парижда тектереп ҡайтҡан сыбар күлдәге бар бит.

Гөлбикә. Теге шыршы урманы төшкәнме?

Мәстүрә. Юҡ, шыйыҡ һарыға йәшел сиңерткә һүрәте төшкән.

Гөлбикә. Ә-ә-ә. Иҫемә төштө. Асыҡ яғалы, бик килешер ул һеҙгә. Улар менән һеҙ табындарҙа осраш-майһығыҙ. Шулай булғас, күсерәбеҙ ҙә ҡуябыҙ.

Мәстүрә. Тик яғаһын ул тиклем үк асыҡ яһама, мин артистка түгел бит. Йәш яғы ла бар...

Гөлбикә *(эйелә)*. Оҙонлоғон күпмерәк итәбеҙ? Шулай ярармы? *(Сирағына төртөп күрһәтә.)*

Мәстүрә. Таман булыр.

Гөлбикә *(ситсаны ала)*. Бик матур күлдәк буласаҡ. Шатлыҡ менән кейергә генә яҙһын...

Мәстүрә. Ни эшләп һин, Гөлбикә, моңһоу ғына итеп ҡапыл ундай теләк теләп ҡуйҙың әле?

Гөлбикә. Былай ғына. Ҙур кешеләрҙә әллә нисек хәсрәт күберәк була шул.

Мәстүрә. Ҡайғы-хәсрәт ни ул ҙурын-бәләкәйен ҡарап йөрөмәйҙер ҙә.

Гөлбикә. Йөрөй шул. Ҙур кешеләр өйөндә аш уңмаһа — хәсрәт, мәктәп балаһы икеле алып ҡайтһа — хәсрәт, бәләкәй малай өҫтөн сылатып керһә — хәсрәт, тектерелгән кейемдең килешмәгән ере килеп сыҡһа — хәсрәт, хатта кинола насар урын эләкһә лә — хәсрәт. Ә бала-саға институтҡа инә алмай ҡалһа — өйҙә ярты йыллыҡ траур. Ә беҙҙең кеүек простой кешеләр ундай нәмәләрҙе иҫәпкә лә алмай.

Мәстүрә. Кешеһенә ҡараптыр инде.

Гөлбикә. Әллә тағы. Күргәнемде әйтәм. Ана, министр Ҡорҙашовтың уртансы малайы институтҡа эләк-мәй ҡалған. Бер аҙна инде бөтә өй эсе ҡанлы йәш түгеп ултыра.

Мәстүрә. Һәйбәт уҡый ине бит ул бала.

Гөлбикә. Күрәһең, унан да һәйбәтерәктәр күп бул-ғандыр. Ҡорҙашовтың бисәһе иренә әйтә: «Бар, институт директоры менән һөйләш», — ти. Тегеһе ҡарыша: «Үҙем дә бармайым, һиңә лә рөхсәт итмәйем, ундай замандар үтте инде, — ти. — Ана заводҡа эшкә керһен, арыш икмәгенең тәмен белер. Беҙ ҙә эшләп уҡыныҡ», — ти. Ә ағай-энеләре теге малайҙың күҙен дә астырмай-ҙар, өтөп баралар: «Семьяға хурлыҡ килтерҙең!» — тиҙәр. Теге бахыр бала, аптырағас, толчоктан тире тун, олтан һалған быйма, ҡолаҡсын бүрек алып ҡайтҡан. «Северный полюс-четыреға китәм», — ти.

Мәстүрә. Бахыр бала...

Гөлбикә. Китһен әйҙә, атаһы әйтмешләй, икмәктең түмен белер.

Теге яҡта Япар барын онотала.

Мәстүрә. Арыш икмәге тигәс, әйтәйем әле, беҙ ҙә Дүсмәт менән арыш икмәген бик яратып ашайбыҙ. Эшсе-крәҫтиән тамағы бит, ни тиһәң дә... Күлдәкте лә, күрәһең, ситсанан тектерәбеҙ. Дүсмәт әйтмешләй, ябай кешеләрҙән айырылмаҫҡа кәрәк.

Гөлбикә. Бына үлсәп тә бөтөрҙөм. Ярай. Иртәгә тағы керер сығырмын әле, көндәр йылы саҡта, рәхәтләнеп кейеп ҡалырһығыҙ. *(Йыйына.)* Эй, яратам да һуң ошо йәй айҙарын...

Мәстүрә. Йәйҙе кем яратмай, Гөлбикә!.. Ә һеҙ йәштәр өсөн уның сәскәләре, баҡсалары, тансалары, тағы мең төрлө шатлыҡтары бар.

Гөлбикә. Йәйҙең тағы бер яғы бар, Мәстүрә апай. Йылы саҡта ҡатын-ҡыҙҙар мин теккән күлдәктәрҙе кейеп йөрөй. Эшемде кеше күрә. Кейеме килешеп торған ҡатын артынан мин һиҙҙермәй генә икешәр-өсәр квартал эйәреп барам. Минең ҡулдарым кешене нисек матурлай, тип ҡыуанам. Шатлығым эсемә һыймай. Мин теккән кейемде ҡәҙерһеҙ кейгәнде күрһәм, эсем әрней. Ҡулдарым эшкә бармаҫ була. *(Пауза.)* Көҙлө-ҡышлы хет тек, хет текмә, барыбер берәү ҙә күрмәй. Театрға ғына бармаһалар...

Мәстүрә *(ғәжәпләнеп тора)*. Ысынлап та, үҙ эшеңде ситтән күреү ҡыҙыҡтыр, ә?

Гөлбикә. Күңелле, бик күңелле, Мәстүрә апай. Ярай, мин китәйем. *(Нәмәләрен сумкаһына һала.)* Иртәгә килермен.

Мәстүрә *(ишеккә тиклем оҙата. Ҡарап ҡала)*. Бәләкәсем, шатлана белеү ниндәй ҙур бәхет!

Япар *(сыға, сәғәтенә ҡарап)*. Һин кисер мине, Мәстүрә, йомошланмаған бик ҡыҫтау бер йомошом иҫемә килеп төштө. Миңә китергә кәрәк.

Мәстүрә. Исмаһам, Дүсмәт ҡайтҡанды көтөгөҙ.

Япар. Беләһең бит мине: ҡалған эшкә ҡар яуғанды яратмайым.

Мәстүрә. Беләм дә...

Япар. Күңелеңә ауыр алһаң да, әйтәйем әле, Мәстүрә.

Мәстүрә. Ә, нимә? Әйтегеҙ, Япар ағай.

Япар. Ишек асыҡ ҡалғайны, һеҙ үтә ҡысҡырып һөйләштегеҙ. Ирекһеҙҙән тыңларға тура килде.

Мәстүрә. Хоҙайым! Япар ағай! Йыйын юҡ-барҙы һөйләп, эсегеҙҙе бошороп бөтөргәнбеҙҙер инде.

Япар *(тыныс)*. Юҡ, эсем бошманы, йәнем әсенеп китте. Ҡыҙғанып ҡуйҙым үҙеңде. Был һинме, Мәстүрә?

Мәстүрә. Һеҙ мине бөтөнләй аптыраттығыҙ, Япар ағай.

Япар. Сәйер, сәйер.

Мәстүрә. Нимәһе сәйер?

Япар. Дүсмәт менән татыу тораһығыҙмы?

Мәстүрә. Сәйер һорау. Ниңә, былай татыу тораbыҙ.

Япар. Ярай, юл төшһә, тағы һуғылырмын әле. Йә, хуш!

Мәстүрә. Мин ни тип әйтергә лә белмәйем инде, Япар ағай.

Япар *(Мәстүрәнең арҡаһынан ҡаға)*. Һин наборщик Йәғәфәр ҡыҙы Мәстүрә инең бит. Ә хәҙер ситса күлдәк кейеү йәки арыш икмәге ашау менән генә ябай халыҡтан айырылмаусы Мәстүрәгә әйләндеңме ни шулай? Быны мин ни тип әйтергә лә белмәйем. Йә, хуш. *(Ҡапыл боролоп сығып китә.)*

Мәстүрә. «Сәйер, сәйер...» — ти ул. Нимәһе сәйер һуң әле? *(Пауза. Башын сайҡай.)* Күрәһең, сәйерҙәр. *(Диванға килеп ултыра.)*

Низам инә. Ул ҡултыҡ аҫтына ҡағыҙ менән ҡапланған ҙур ғына картина ҡыҫтырған. 24—25 йәштәрҙәге егет. Урта буйлы, күҙҙәре бик моңһоу. Мәстүрә уның ингәнен ишетмәй.

Низам. Һаумыһығыҙ, Мәстүрә апай?

Мәстүрә *(һиҫкәнеп китә)*. Ә... Низам? Һаумы?

Низам. Әллә борсоном инде? *(Тапанып тора.)*

Мәстүрә. Уҙ тип әйтер инем, Дилбәр өйҙә юҡ.

Низам. Улай икән. Мин уйлағайным... Һеҙҙе борсоном, ахыры!

Мәстүрә. Юҡ, Низам, ниндәй борсоу булһын, ти. *(Низамды баштан-аяҡ ҡарап сыға.)* Һаман да шул һүрәт төшөрөү эшендәме, Низам?

Низам. Эйе.

Мәстүрә. Өҫ-башыңды ла бөтәйтеп алғанһың икән. Шулай һәйбәт кенә эшләйһеңме ни?

Низам. Эйе, һәйбәт кенә. Минең әҫәрҙәремде күргәҙмәгә ҡуйҙылар.

Мәстүрә. Уҙ тип әйтер инем...

Низам. Ярай, улайһа, мин Дилбәр ҡайтҡанын тышта көтөрмөн. *(Сыға башлай.)*

Мәстүрә. Күңелеңә ауыр алма, Низам, әйтмәй тура килмәй.

Низам. Нимәне, Мәстүрә апай?

Мәстүрә. Дилбәр — хәҙер ир ҡатыны. Һинең килеп йөрөүең Вәзиргә оҡшамаҫ. Һыуынырға тырыш.

Низам. Биш ай инде мин һеҙҙең тупһағыҙға аяҡ баҫҡаным юҡ. Мин Дилбәрҙе кейәүгә сыҡҡас күргәнем дә юҡ.

Мәстүрә. Шул тиклем ғүмер үттеләме ни әле?

Низам. Эйе, унан һуң биш ай түгел, минең өсөн биш йөҙ йыл үтте... Биш мең йыллыҡ айырылышыу, аңлайһығыҙмы?

Мәстүрә. Барыбер, Низам, күнегергә тура килер.

Низам. Юҡ, күнекмәйем, Мәстүрә апай, үлгәнсе лә, үлгәс тә күнекмәм. Ә һеҙ ҡурҡмағыҙ, мин һеҙгә һуңғы тапҡыр килдем.

Мәстүрә. Беҙ ни эшләп ҡурҡайыҡ ти, һин юлбаҫар түгел дә, мин тик Дилбәрҙең тормошо өсөн генә борсолам. Уҙып ултырыр инең, бәлки.

Низам. Юҡ, мин урманда йөрөп торормон. Дилбәрҙе күрмәй, барыбер китә алмам. *(Картинаһын күтәреп, сығып китә.)*

Мәстүрә. Быныһы ла бер мәжнүн. Типһә тимер өҙөрлөк егет, бер ҡыҙҙың йөрәген яулап ала алманы. Кит инде, биллаһи! Дүсмәте лә иртәле-кисле шул Вәзирҙе теленән төшөрмәне. Бер баланың башын бутарға күп кәрәкме ни? Күл уртаһында ултырған аҡ томбойоҡ

кеүек кенә ҡыҙ ине Дилбәребеҙ... *(Эске бүлмәгә инеп китә. Сәхнә буш тора.)*

Дилбәр менән Рәхимә инә. Рәхимә таҡта сумаҙан, төйөнсөк тотҡан.

Дилбәр. Был беҙҙең өй, Рәхимә. Беҙҙеке тип, атайым менән бер туған ағайымдың өйө, мин 14 йәштән уларҙа үҫтем.

Рәхимә. Бик матур өй, кинолағы кеүек! *(Уҙмай тора.)*

Дилбәр. Уҙ, Рәхимә, уҙ, тартынма. Апай! Һин өйҙәме?

Мәстүрә *(инә)*. Өйҙә. Ҡайттыңмы? Ҡунаҡ алып килгәнһең икән дә. Һаумы, ҡыҙым.

Рәхимә. Иҫән генә тораһығыҙмы, Мәстүрә апай? Мин Рәхимә исемле ҡыҙ.

Дилбәр. Рәхимәне мин үҙебеҙгә торорға алып килдем.

Мәстүрә. Беҙгә хәҙер хеҙмәтсе кәрәкмәй бит.

Дилбәр. Ул нефть техникумында уҡыясаҡ, унын торор ере юҡ.

Рәхимә. Әсәйем ауырыны ла, иртәрәк килә алманым. Ятаҡта урын бөткән. Нисек ауылға ҡайтайым инде, тип ишек төбөндә илап тора инем, Дилбәр апай үтеп барышлай алды ла китте. *(Сак-сак иламай.)*

Дилбәр. Апай, үтенеп һорайым, ҡалһын беҙҙә Рәхимә. *(Мәстүрәгә һыйына.)*

Рәхимә. Мин үҙем шундай бәләкәс булһам да, һәләк эш рәте беләм. Ҡул эше лә тотҡаным бар. Дәрестән буш саҡта ҡул арағыҙға керермен. Ҡалдырығыҙ мине, Мәстүрә апай.

Мәстүрә *(Дилбәргә)*. Ағайың ни әйтер бит?

Дилбәр. Һинең һүҙеңдән сыҡмаҫ ул. Үҙегеҙҙең балаларығыҙ ҙа ситтә.

Мәстүрә. Ярай, мин риза.

Дилбәр *(килеп ҡосаҡлап)*. Бына рәхмәт, апай. Мин, тап шулай булыр, тип уйлағайным да.

Рәхимә *(Мәстүрәнең муйынына аҫылына)*. Рәхмәт, Мәстүрә апай! Был яҡшылығығыҙҙы ғүмергә лә, ғүмергә лә онотмам.

Мәстүрә. Рәхимә залда йоҡлар. Һәмәләреңде ана кухняға сығар, Рәхимә.

Рәхимә сыға.

Дилбәр. Эй апайым минең. *(Килеп һыйына.)* Был бала юл буйынса Туҡай шиғырҙарын һөйләп килде. Иҫ киткес матур һөйләй:

Ғалибанә яҡтыртып, аҡрын ғына
Ал таң ата,
Моңланып, хәсрәтләнеп, ялҡау ғына
Аҡ ай бата.

Шиғыр ятҡан кеше насар күңелле булмай ул.

Мәстүрә. Һинең өсөн бөтә кеше лә яҡшы күңелле инде.

Дилбәр. Юҡ, бөтәһе лә түгел. Мин ямандарҙы ла беләм. Ләкин барыбер донъя ла, кешеләр ҙә һәйбәт, апай! Мин урамға сыҡһам, табандарым ергә теймәй. Осорҙай булып барам. Ҡояш, ер, кешеләр — бөтәһе лә минең туғандарым төҫлө. Ә һауа... *(Тәҙрәгә килә.)* Зәп-зәңгәр һауа — үҙе генә лә бит ғүмерлеккә бирелгән бер матурлыҡ.

Рәхимә *(кухнянан сыға, гөл төптәрен ҡарай)*. Гөл төптәре кипкән. Һыу һибәйемме, Мәстүрә апай?

Мәстүрә. Һип. Халыҡ йыйыла башланы. Мин дә аш-һыуҙы ҡарайым. *(Кухня ишегенә бара. Рәхимә гөлдәргә һыу һибеп йөрөй.)* Онотҡанмын да, Низам бында ине.

Дилбәр *(ҡаушап)*. Низам? Ҡайҙа ул? Ниңә килгән?

Мәстүрә. Һине көтә. «Урманда йөрөй торам», — тине.

Дилбәр *(тәҙрәгә килеп ҡысҡыра)*. Низам! Низам! *(Сығып йүгерә. Тауышы ситтә ишетелә: «Низам!»)*

Рәхимә *(һыу алып сыға. Кескәй гөл менән һөйләшә)*. Һыуһаныңмы, бәләкәс? Мә эс, бәләкәй саҡта яңғыҙ йәшәү ҡыйын була шул. *(Ҙур гөлгә.)* Һин ҙурһың, сабыр ит. Һиңә лә сығарырмын. *(Тағы һыу алып сыға. Ҡарана.)* Бында бөтә бүлмәләр ҙә ҡунаҡ өйө кеүек икән, хатта унан да матурыраҡ! *(Һәмәләрҙе тотоп ҡарай,*

*диванға ултырып ала. Үҙе бер аҙ шикләнә лә. Мәстүрәнең көҙгөлө туалет өҫтәле ҡаршыһына килеп ултыра. Көҙгөгә ҡарана. Башын борғолай.)* Мин дәрестәремде ошонда әҙерләрменме икән? Ярар, ҡайҙа ҡушһалар, шунда әҙерләрмен.

Дилбәр Низамды һөйрәп кереткәндәй етәкләп керетә.

Дилбәр. Ғүмер буйы ҡырыҫ булдың, Низам.

Низам. Ә һин мине ғүмер буйына малай урынына күрҙең.

Дилбәр. Малай булғас.

Рәхимә *(аптырап ҡарап тора)*. Ирегеҙ, иптәшегеҙ ошомо ни, Дилбәр апай? *(Килеп күрешә.)* Һаумыһығыҙ?

Низам *(Рәхимәне, һүрәткә төшөргәндәге кеүек, ҡарап ала)*. Ә һин кем?

Рәхимә. Мин — Рәхимә. Исемемдән башҡа хәҙергә бер нәмәм дә юҡ әле минең.

Дилбәр. Рәхимә, бар һин баҡсаға сығып, һуған йолҡоп кер. Ана беҙҙең түтәлдәр! Күп йолҡ, йәме.

Рәхимә. Ярай, апай. *(Шым ғына сығып китә.)*

Дилбәр. Һине етәкләп ултыртмаһаң, ултыра ла белмәҫһең... *(Беләгенән тотоп килә.)*

Низам. Мин хушлашырға килдем.

Дилбәр. Китәһеңме ни?

Низам. Юҡ, китмәйем. Мин өмөтөм менән хушлашырға килдем, Дилбәр.

Дилбәр. Хәҙер бер нәмә лә үҙгәртеп булмай бит, Низам.

Низам. Ул башта уҡ шулай ине, һин мине ғүмер буйы иптәш күрҙең, ләкин ярата алманың. Йыуашлығым өсөн ҡыҙғандың ғына. Ә Вәзир йылғыр ул, осҡон кеүек. Мин һине ғәйепләмәйем.

Дилбәр. Вәзиргә ҡағылмайыҡ.

Низам. Ҡағылмайыҡ. *(Картинаны аса.)* Хәтерендәлер, дүрт йыл элек ана тегендә, Ҡариҙел ярында, һинең рәсемеңде яһай башлағайным... Этюд эшләгәйнем...

Дилбәр. Беҙ икебеҙ ҙә егермелә инек ул ваҡытта.

Низам. Дүрт йылымды мин ошо портретҡа арнаным. *(Аса.)* Оҡшағанмы?

Дилбәр. Оҡшаған да, ләкин мин был тиклем матур түгел бит.

Низам. Бында һинең матурлығыңдың йөҙҙән бер өлөшө лә юҡ, Дилбәр, ләкин кисер, ҡулдарымдың һәләтлелеге шунан артығына етмәне.

Дилбәр *(хайран ҡалып ҡарап тора. Башын сайҡай)*. Был мин түгел, һинең хыялың был, Низам.

Низам. Нимә генә булмаһын, дүрт йыл ғүмерем был. Ә ул ғүмер һинеке, һәр бер секунды һиңә арналды ул ғүмерҙең. Мин уны һиңә килтерҙем, мә ал, Дилбәр! Зинһар, ал!

Дилбәр. Үҙеңдә ҡалһын, мин был тиклем ҙур иҫтәлеккә хаҡлы түгелмен бит.

Низам. Ҡотҡар мине! *(Пауза.)* Уны күргәҙмәгә ҡуйғым килмәй. Һатырға намыҫым, яндырырға көсөм етмәй. Йәшерен гонаһ йәки йәшерен алла кеүек ул миңә. Һис нәмә эшләтә алмайым. Бүлмәмдә эленеп тора. Төндәрен йоҡлар-йоҡламаҫ мин уға ҡарап ятам. Ул — һинең рәсемең түгел, ә үҙемдең йөрәгем шулай эленеп тора, имеш. Үҙенән тып-тып-тып ҡан тама. Һушыма киләм. Ҡаршы стеналағы сәғәт теле тыҡ-тыҡ-тыҡ ваҡыт һанай. Аҡылдан яҙырға мөмкин.

Дилбәр *(Низамдың маңлайына ҡулын ҡуя)*. Етер, Низам, етер, һөйләмә...

Низам *(үҙен ҡулға ала)*. Артына бер йыр ҙа күсереп йәбештерҙем. Ул йырҙы һин яҡшы беләһең. *(Ҡыҫҡырып уҡый.)*

Һыуҙарға һыуһап йөрөнөм,
Үҙем — һыу буйҙарында.
Ғүмеремдең буйҙарына
Булырһың уйҙарымда.

Мин дә бала саҡтан уҡ ғүмер буйы һинең менән гел бергә булдым. Ләкин ғүмер буйы...

Дилбәр. Ә ниңә беҙгә яҡын дуҫтар булып ҡалмаҫҡа?

Низам. Башҡа йыуаныс ҡалмағас, шулай: «Дуҫ булайыҡ», — тиҙәр инде. Уҙған йыл мин ауылда һабантуйҙа булдым. Көрәшселәрҙе ҡараным. Икеһе бигерәк сая көрәште. Һуңынан еңгәненә һарыҡ бирҙеләр, ә еңел-

гәненә күҙә бәрәсе килтереп тотторҙолар. Бәрәс менән йыуатма һин мине, Дилбәр. Мин еңелдем, ләкин ғорурмын.

Дилбәр. Бәлки, һин хаҡлылыр. Беҙгә, бәлки, бөтөнләйгә күрешмәҫкә кәрәктер.

Низам. Бәлки... Мә, рәсемде ал, элергә теләмәһәң, берәй ергә йыйып ҡуй. Ул бит ғүмерҙең ҡартаймай торған бер киҫәге. Шәфҡәтле бул һин уға.

Дилбәр рәсемде ала, диванға һөйәй.

Бына хәҙер китһәм дә ярай.

Дилбәр. Мин һине ҡал тип ҡыҫтай алмайым.

Низам. Аңлайым. *(Ишеккә бара.)* Бир ҡулдарыңды. *(Дилбәр ике ҡулын да һуҙа. Низам оҙаҡ ҡыҫып тора.)* Йә, хуш! *(Китмәксе була.)*

Дилбәр. Низам! *(Уның муйынынан ҡосаҡлай, үпмәй, башын Низамдың ҡулбашына һала, тағы ҡыҫып ҡосаҡлай. Дилбәр ҡосаҡлағанда, Мәстүрә сығырға итә, күреп, кире борола.)* Хәҙер бар, кит инде, бала сағым, йәшлегем минең! Хуш!

Низам. Тик бер генә нәмәне үтенәм һинән — ҡыҙғанма мине. *(Ҡапыл боролоп сығып китә.)*

Дилбәр *(башта ҡуҙғалмай, унан ҡапыл ишеккә ташлана)*. Әйләнеп ҡарармы икән?

Бер ус йәшел һуған тотоп Рәхимә инә. Ул болдорҙа Дилбәрҙе күргән, ғәжәпләнгән.

Рәхимә. Былай булғас, теге ағай Дилбәр апайымдың ире булып сыҡманы. Ниңә ире түгел икән? Бик һөйкөмлө кеше бит. Дилбәр апай үҙе ағасҡа һөйәлгән, үҙенең күҙҙәренән мөлдөрәп йәш аға. Ниңә илай икән? Шундай ҙур кеше, институтта уҡыта торған апай, ерле юҡҡа ғына иламай торғандыр. *(Үҙенең күҙенән йәш аға.)* Иламай түҙеү мөмкин түгелдер, күрәһең. *(Илай.)*

Мәстүрә *(сыға)*. Дилбәр ҡайҙа, Рәхимә?

Рәхимә. Өй алдында тора.

Мәстүрә. Ә һин ниңә илайһың?

Рәхимә. Мин ашҡа һуған өҙҙөм, бына, мә, апай...

Дилбәр инә.

Мәстүрә. Дилбәр! Бына тағы, етмәһә...

Дилбәр. Борсолма, апай, ул бөтөнләйгә китте. Тик нимәмделер үҙе менән алып китте. Шуға ғына яманһыу.

Рәхимә *(ситкә әйтә.)* Моғайын, мәктәптә бергә уҡыған иптәшелер әле, минең менән Исмәғил кеүек...

Мәстүрә *(рәсем эргәһенә килә. Әйләндереп ҡарай)*. Абау, тап фәрештәһең бит, туғанҡайым.

Дилбәр. Ҡанатһыҙ фәрештә.

Рәхимә. Эй оҡшаған...

Мәстүрә. Хәҙергә йыйыбыраҡ ҡуй. Вәзир алдында уңайһыҙ. Әллә ни уйлауы бар.

Дилбәр. Уйлаһасы.

Мәстүрә. Улай тимә. Бына ошолай төр ҙә шкаф артына ҡуй. *(Портретты төрөп бирә.)*

Дилбәр. Ярай, һинеңсә булһын. *(Үҙ бүлмәһенә инеп китә.)*

Дүсмәт инә. Ул урта буйлы, тулы ғына кәүҙәле кеше, ыҡсым ғына кейенгән. Фуражкаһын һала, Мәстүрәне һүҙһеҙ генә маңлайынан үбә, Рәхимәгә ҡарап ала, өндәшмәй. Ул, папкаһын тотоп, тура үҙ бүлмәһенә уҙа. Папкаһын ҡуйып сыға. Ике ҡулы менән сәсен һыйпай. Ул тештәрен күрһәтмәй генә бик йыш йылмая. Ләкин йылмайыуы ни аңлатҡанын белеп булмай — шатлыҡмы, хәйләме, мыҫҡыллаумы?

Дүсмәт *(еҫкәнеп йылмая)*. Ашҡа һуғанды күберәк һалғанһығыҙ, ахыры. *(Рәхимә һиҫкәнеп китә.)*

Мәстүрә. Көндәгесә инде.

Дүсмәт *(йомшаҡ ҡына)*. Ҡайҙа беҙҙең эшем эйәләре?

Мәстүрә. Дилбәр өйҙә, Вәзир ҡайтмаған әле.

Дүсмәт. Дилбәр!

Дилбәр. Нимә, ағай?

Дүсмәт. Ултырышығыҙ. *(Рәхимәнән башҡалар ултыра.)* Бынан егерме биш йыл элек һинең атайың, Дилбәр, йәғни минең бер туған ағайым Ишкилде Ярлыҡапов, колхоз төҙөшөп йөрөгәндә, дошман ҡулынан һәләк булғайны.

Дилбәр. Ниңә хәтерләтәһең инде уны?

Дүсмәт. Сабыр ит. Ул саҡ үҙем дә — Мәстүрә белә — ғаризалар яҙып бөткәс, китә алмай ҡалдым.

Мәстүрә. Ниңә, Ватан һуғышы башланғас та, китергә беренсе теләк белдереүсе һин булдың инде, тик ебәрмәнеләр генә.

Дүсмәт. Һүҙ ул хаҡта бармай. *(Урынынан тора. Мәстүрә менән Дилбәр ҙә тора.)* Мин һеҙгә белдерәм: мин, партия саҡырыуына яуап итеп, ауылға эшкә ебәреүҙе һорап ғариза бирҙем. Горком секретары, тимәк, мин үҙем был эштә юл күрһәтәм.

Башҡалар аптырабыраҡ ҡалалар. Ләкин Дүсмәт көткәнсә үк эффект тыумай.

Мәстүрә. Үҙең төптән уйлағанһыңдыр инде.

Дүсмәт. Бик төптән. *(Дилбәргә.)* Һинең атайыңдың эшен ҡулдан килгәнсә дауам иттерергә китәм. Заман шуны талап итә. Заман!

Дилбәр. Рәхмәт, ағайым! Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр һөйләгәндә күкрәк һуғалар, эшкә күскәндә ышыҡҡа ҡасалар.

Дүсмәт *(йылмая)*. Беҙ — энтузиастар тоҡомо... *(Мәстүрәгә.)* Ә һин нисек уйлайһың?

Мәстүрә. Мин һинең бисәң, командир бисәһе.

Дүсмәт. Тимәк, ҡаршылыҡ юҡ?

Мәстүрә *(баш ҡаға)*. Юҡ.

Дүсмәт *(Рәхимәгә, шаярып)*. Ә һин?

Рәхимә. Минме?

Дүсмәт. Ауылға китәһеңме?

Рәхимә. Мин әле кисә генә ауылдан килдем. Юлдар ифрат бысраҡ. Килә-килә ыҙаланып бөттөк. Һеҙ юл төшкәсерәк ҡуҙғалығыҙ инде, ағай.

Дүсмәт *(ҡарап тора)*. Ә һин кем булаһың һуң әле?

Дилбәр. Мин уны үҙебеҙҙә торорға алып килдем. Ул — студентка.

Дүсмәт *(Мәстүрәгә, Дилбәргә ҡарап тора)*. Торорға? Ныҡлап уйлаштығыҙмы һуң?

Мәстүрә. Уйлаштыҡ, бик уйлаштыҡ.

Дүсмәт *(йылмая)*. Юғиһә ҡатын-ҡыҙ күп ерҙә тауыш ҡуйы була...

Рәхимә. Үҙем шундай ғына булһам да, минең холҡом һәләк һәйбәт, ағай.

Дилбәр. Рәхимәнең беҙгә килеүе бик йәтеш тә булып сыҡты. Үҙегеҙ китеп барһағыҙ, бынау тиклем өйҙә Вәзир менән икәүебеҙ генә аҙашып бөтәрбеҙ, юғиһә.

Дүсмәт. Аҙашһағыҙ, табышырһығыҙ әле. *(Рәхимәне бармағы менән ымлап саҡыра. Теге килә. Һаҡын ғына арҡаһынан ҡаға.)* Улай холҡоң да һәйбәт булғас, ҡалырһың. Ҡара һин уны, һабағыңды яҡшы уҡы.

Рәхимә. Тешем-тырнағым менән тырышырмын.

Дүсмәт. Бына шулай. Ҡарт көндә бер һелкенеп алырға булдыҡ... *(Тора, йөрөнә.)* Үҙемә мылтыҡ һатып алырға кәрәк булыр... *(Өҫтәлдәге газеталарҙы ҡарай.)*

Тышта мотоцикл тауышы ишетелә. Тына. Рәхимә тәҙрәгә бара.

Мәстүрә. Бөтә ҡашыҡтарҙың да хужалары йыйылып бөттө. Аш ултыртырға кәрәк. Әйҙә, Рәхимә. *(Сығалар.)*

Вәзир инә. Кескәй буйлы. Ҡакса. Күҙлекле. Кейеме модно, һауалы кеше. 32—33 йәштәрҙә. Танауын йыйырып, йыш ҡына еҫкәнә. Дүсмәт Мәстүрәне үпкән шикелле, Дилбәрҙе тойғоһоҙ үбә. Дилбәр уңайһыҙланғандай итә.

Вәзир. Донъяның иң тыныс мөйөшөнә сәләм.

Дүсмәт. Ә-ә, матбуғат арыҫланы. Сәләм, сәләм!

Вәзир. Әлегә арыҫлан уҡ түгел.

Дилбәр *(шаярып)*. Айыумы?

Вәзир. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бурҙай. Көн буйы сабырға тура килә. *(Кухня ишеген асып саҡыра.)* Эй, Мәстүрә Хисамовна, онотмаҫ борон әйтәйем әле, дүртенсе базаға һеҙ һораған нәмә килгән.

Дилбәр. Вәзир, аҡыллым, ташла һин шул база тирәһендә еҫкәнеп йөрөүеңде. Килешмәй.

Вәзир *(йомшаҡ ҡына, бәләкәй балаға аңлатҡан кеүек)*. Мин унда башҡа эш менән барҙым. Мин, әйттергең килһә, грандиоз статья өсөн ҡараҡтар шайкаһын күҙәтәм. Мин — йүгереп тамаҡ туйҙыра торған хәбәрсе. Еҫкәнеп йөрөү — минең эшем, минең икмәгем.

Дүсмәт *(йомшаҡ ҡына итеп өҫтәлгә өс тапҡыр һуға)*. Туғандар! Бөгөн беҙҙең өйҙә бәхәс көнө түгел. Бөгөн!.. *(Бармағын күтәрә. Йылмая.)*

Вәзир *(ҡапыл хәтерләп, йүгереп барып, плащ кеҫәһенән газета полосаһы ала)*. Һ-и-и, онотоп торам, Дүсмәт Ҡорбанович! Һеҙҙең исемде иртәгә бөтә республика телдән төшөрмәйәсәк.

Дүсмәт. Ниндәй гонаһтарым өсөн? *(Йылмая.)*

Вәзир. Мәстүрә Хисамовна, сығығыҙ әле!

Мәстүрә *(сыға)*. Ни бар?

Вәзир. Иртәгә газетала кешеләр ошо мәҡәләне уҡыясаҡтар. Һеҙ бөгөн донъяны бер төнгә уҙып киттегеҙ. Тыңлағыҙ! «Патриоттар ауылға китәләр». Бисмиллаһын уҡып тормайым... «Ошо патриотик ғаризалар ташҡынының башында ҡала партия комитетының икенсе секретары Дүсмәт Ҡорбанович Ярлыҡаповтың ғаризаһы тора. Үҙенең йөрәгенән сыҡҡан был документында яҙған ул: «Мин ошо ғаризамды биреүем менән шатмын», — тигән. Ағымдағы көн ахырына ҡәҙәр ундай ғаризалар һаны бер нисә йөҙгә етте». *(Пауза.)*

Дилбәр. Кем был тиклем емерҙе беҙҙең туған телде?

Вәзир. Факттар ғына минеке. Яҙыуын Суҡмаров яҙҙы. Әлбиттә, бындай фактты юғарыраҡ шиғриәт менән һуғарырға кәрәк ине. Йөрәк һалҡын ул Суҡмаровта!

Дүсмәт *(байтаҡ ҡына өндәшмәй тора. Ризаһыҙ)*. Ә кем ҡушты һеҙгә ул хәбәрҙе яҙырға?

Вәзир. Ҡушҡанды ғына көтөп торһаң, газета сығармаҫҡа кәрәк.

Дүсмәт. Ниңә, ут сыҡҡан кеүек, шул тиклем?.. *(Үҙен тотоп ҡала.)* Кәңәшләшергә кәрәк ине. Газета баҫылмағанмы әле?

Вәзир *(аңламай)*. Баҫылып ята. Ниңә, Дүсмәт Ҡорбанович, дөрөҫ түгелме ни?

Дүсмәт. Мин былай шапырыныуҙы, шау-шыуҙы яратмайым. Партия работнигы скромный булырға тейеш.

Вәзир. Ниңә, Дүсмәт Ҡорбанович, яҡшы хәбәрҙе бөтәһе лә ишетһен. Был һеҙҙең дан өсөн кәрәкмәй, һеҙҙең дан былай ҙа етерлек. Ә, үҙегеҙ әйткәнсә, кешеләргә ваҡытында өлгө күрһәтә белергә кәрәк.

Дүсмәт *(урынынан тора. Ул риза түгел, йылмая)*. Етер. Аңлашылды.

Мәстүрә. Верандала аш һыуына торғандыр. Ултырыша башлайыҡ. Дүсмәт, бара тороғоҙ. Мин хәҙер. *(Йәштәр сығалар. Мәстүрә китмәйерәк тора.)*

Мәстүрә. Бөгөн Япар ағай килгәйне.

Дүсмәт. Ҡайһы Япар? Ә, теге Япармы?

Мәстүрә. Эйе.

Дүсмәт. Ниңә көтмәне?

Мәстүрә. Башта көтәм тип ултырҙы ла ҡапыл, ашығыс эшем бар, тип сыҡты ла китте.

Дүсмәт. Һаман шул элекке орҙо-бәрҙе Япар икән. Бер нәмә лә әйтмәнеме?

Мәстүрә. Ваҡ-төйәк шунда. Ә-ә: «Дүсмәт менән килешеп тораһығыҙмы?» — тип һораны. Тағы нимә? Дачниктар ҡандалағамы, сиңерткәгәме оҡшаған, тине...

Дүсмәт. Шуны әйтер өсөн генә килгәнме икән ни?

Мәстүрә. Әлләсе.

Дүсмәт. Сәйер.

Мәстүрә. Ярай, Дүсмәт, китергә тәүәккәлләп, һәйбәт иткәнһең. *(Эргәһенә килә. Һыйына.)* Миңә лә үҙемә күрә берәй эш табылыр. Әйтәйек, элекке эшем — балалар баҡсаһында.

Дүсмәт. Эш ни табылыр ул. Тик, Мәстүрә, ғариза бирһәм дә, обкомдың ебәреүенә ышанып етә алмайым. «Ярлыҡапов кеүек партийный работниктар бында ла артып бармай, улар, телеграм сыбығында теҙелешеп ултырған ҡарлуғастар кеүек, теҙелешеп тормайҙар...» — тип әйтеүҙәренән ҡурҡам... Ебәреүҙәре бик икеле, Мәстүрә. Бик шикле.

Мәстүрә. Ундай шигең булғас, башта юғарынан ризалыҡ алыу кәрәк иңе.

Дүсмәт. Их һин, командир бисәһе... Беләһең бит, ауылда, таң атҡанды белдереп, иң элек бер әтәс ҡысҡыра. Шунан уға ҡалған әтәстәр ҡушыла. Бындай ваҡытта тәү башлап ҡысҡырыу мөһим. *(Баш бармағын күтәрә. Йылмая.)*

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе картина

Дүсмәт Ярлыҡаповтың кабинеты. Ҙур бүлмә. Яҙыу өҫтәле һәм стена буйында кәңәшмәләр уҙғара торған «Т» формаһындағы өҫтәлдәр, ҡаланың планы, республика картаһы. Дүсмәт өҫтәл артында бөршәйеп кенә ултырған. Ниндәйҙер документтар уҡый. Ишекте аҙ ғына шаҡып секретарь ҡыҙ Зәйтүнә инә. Кире сығырға уйлай. Дүсмәт башын күтәрә.

Дүсмәт. Ни бар, Зәйтүнә?

Зәйтүнә. Һеҙҙе оло ғына бер апай күрергә теләй.

Дүсмәт. Ниндәй йомош менән?

Зәйтүнә. Ингәс әйтермен, ти.

Дүсмәт. Иләп кенә аңлат: иртәгә килһен. Бөгөн көн бик тығыҙ. Туҡта әле! Кисә мин һиңә ремзавод директоры Арыҡбаев менән газета работнигы Ҡәнзәфәровты саҡырырға ҡушҡайным. Саҡырҙыңмы?

Зәйтүнә. Саҡырҙым, Дүсмәт Ҡорбанович. *(Сыға.)*

Дүсмәт *(документтарҙы өҫтәл тартмаһына һала)*. Барлыҡ мәшәҡәттәреңде, борсолоуҙарыңды шулай тартмаға бикләп булһа икән. Шартлатып асҡысты борҙоңмо... *(Асҡысты бора.)* Эше лә бөттө...

Зәйтүнә *(йүгереп инә)*. Обкомдан һорайҙар.

Дүсмәт. Кем?

Зәйтүнә *(бер бармағын күрһәтә)*. Беренсе!

Дүсмәт. Беренсе булғас, беренсе секретарға тоташтыр.

Зәйтүнә. Ул һеҙҙе һорай. *(Сыға.)*

Дүсмәт *(смирно баҫа, әллә йөрәген, әллә партбилетын ҡапшап ҡарай)*. Тыңлайым, тыңлайым һеҙҙе! Һәйбәт кенә, рәхмәт, рәхмәт. Эйе, эйе, биргәйнем. Газеталамы? Булды. Бер өс аҙна элекме икән? Уныһын, әлбиттә, юҡҡа шауланылар. Кәрәкмәҫ ине. «Ниңә тауыш-тын сығармайһың», — тиһегеҙме? Мин ни һеҙҙең фатихағыҙҙы һәм артабан бойороғоғоҙҙо көтәм. «Обком ҡаршы килмәй», — тиһегеҙме? *(Лып итеп ултыра. Йөрәгенме, партбилетынмы ҡапшай. Үҙен ҡулға ала, һикереп тора.)* Мин һалдат! Бөгөн үк әҙер! Тик, тик бер ҙур эш башлап тора инек... Сиҙәм ерҙәрҙә йәшәүселәрҙе... ғөмүмән, ауыл халҡын кәрәк-яраҡ менән

тәьмин итеү буйынса урындағы промышленность предприятиеларының ярышын ойоштороп йөрөйбөҙ... Күп нәмәне үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Әгәр һеҙ рөхсәт итһәгеҙ, шул эште юлға һалып бөтөрөргә ине. Күпме тип ни.. Ике-өс аҙна етер, тим. Рәхмәт, рәхмәт... Мин һалдат, иптәш... Эйе, эйе, иҫәпләгеҙ, мине, бөгөндән китергә әҙер, тип иҫәпләгеҙ. Рәхмәт, ышанысығыҙ өсөн рәхмәт. Хушығыҙ. *(Трубканы ҡуя. Аптырап тора.)* Ошо газетаға яҙып, эште ҙурға ебәрҙеләр... Ахмаҡтар! Бына хәҙер йыя башла, командир бисәһе, мөлкәтеңде. Төйнә төйөнсөктәреңде!.. Юҡ, ашыҡмай тор әле. Хәҙер ваҡыт өсөн көрәш башланасаҡ. Аҙна, ун көн, ай өсөн. Тегеһенән дә көслөрәк шау-шыу күтәрергә! *(Йылмая.)* Шулай ҙа был юлы уйланмайыраҡ ҡысҡырылды... Ә ваҡытһыҙ һөрән һалған әтәстең муйынын бороп, ҡаҙанға ырғытырға ла күп һорамайҙар. *(Әсенеберәк.)* Миңә эйәреп ғариза яҙған йөҙәрләгән кеше ауылға китте. Шул етмәйме икән ни? Минең урыным бында икәнен ни эшләп аңламайҙар улар? *(Пауза.)* Эшкә! Предприятиеларҙы ярышҡа күтәрергә! Бөтәһе лә сиҙәм ер өсөн! Бөтәһе лә ауыл өсөн! *(Пауза.)* Ә мин ебәрмәҫтәренә шул тиклем ныҡ ышанғайным. *(Лып итеп ултыра.)*

Ишек төбөндә ниндәйҙер тартыш бара. Зәйтүнә тауышы ишетелә: «Ул бөгөн бер кемде лә ҡабул итмәй...». Япар тауышы: «Минең йомошом юҡ». Япар килеп инә.

Япар. Ниндәй ғәҙәт был? Ни йомош менән килеүеңде ишек төбөндә үк энәһенән ебенә тиклем төпсөнөргә тотоналар! Эс бошорғостар! Һаумы, Дүсмәт дуҫ!

Дүсмәт *(урынынан тороп, ҡосаҡ йәйеп ҡаршы килә)*. Нисәмә ҡыш, нисәмә йәй тигәндәй!.. Һаумы, Япар ҡорҙаш, һаумы? *(Ҡосаҡлай.)* Һин һис тә үҙгәрмәгәнһең икән, әүәлгесә үк, йөрөгән ереңдә күсәр башың әләгергә генә тора.

Япар. Юлың тулы түмәр-томар булғас, әләгер ҙә шул. *(Көлә.)* Уяу һаҡлайҙар икән үҙеңде, һай-һай! Унда һине ике балалы бер ҡатын көтөп ултыра. Дүртенсе көн йөрөйөм, ти. Үҙ балаларың тураһында йышыраҡ уйлайһыңдыр әле, моғайын.

Дүсмәт. Килгән кешене тура индер, тип күпме әйттем мин уға... Йә, әйҙә, хуш килдең, ултыр, бына түрҙән уҙып ултыр.

Япар (*кабинетты, унан Дүсмәтте баштан-аяҡ ҡарап сыға*). Кабинетың оҡшамай миңә, артыҡ ҙур, шыҡһыҙ икән. (*Ултыра.*)

Дүсмәт. Кабинет тороп торһон. Йә, һөйлә, үҙең ниҙәр ҡыйратып йәшәйһең?

Япар. Ҡыйралғаны әллә ни түгел, бына төҙөлгәне байтаҡ.

Дүсмәт. Ишетеп торабыҙ, ишетеп торабыҙ. Элекке газета редакторынан шундай шәп промысла директоры сығыр, тип һис уйламағайным. Тырышҡан ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан шул булалыр, күрәһең.

Япар. Тапшырылған эште башҡарырға тура килә, Дүсмәт дуҫ. Ул ваҡытта, күрәһең, унда кәрәгерәк булғанмындыр.

Дүсмәт. Ә хәҙер һуң?

Япар. Әле мин ҡаланан Ҡалтайға китер ваҡытта Ҡалтайҙан ҡалаға килеп сыҡтым. Саҡыртып алдылар.

Дүсмәт. Уныһы инде партия ихтыярында.

Япар. Ә һин ауылға китергә ниәтләп шәп эшләйһең. Хуплайым, дуҫ. Хуплайым һәм ҡотлайым. Партия работнигының юғары үрнәге был.

Дүсмәт. Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин ундай юғары үрнәктәр тураһында уйлап торманым. Партия саҡырҙы, намыҫ талап итте.

Япар. Бына мине колхозға китергә йыйынып бөткәс тотоп ҡалдылар. Сәбәпсеһе һин йәки газета редакторы Шәрипов икәнен бында килгәс кенә аңланым.

Дүсмәт (*аптырап*). Бында ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ бар, Япар! Һинең турала бер ерҙә лә, бер ҡасан да ауыҙ асып өндәшкәнем булманы. Бәлки, Шәрипов?..

Япар. Ул да өндәшмәгән.

Дүсмәт. Тимәк?

Япар. Тимәкме? Шәрипов ауылға киткән. Һин дә китәһең. Ә мин бөкөнө ике буш урындың береһенә килтереп тығырға уйлайҙар. Обкомда иң тәүҙә миңә һинең эште тәҡдим иттеләр. Һайлаһалар, әлбиттә...

Дүсмәт. Тимәк?.. Сәйер... Өйҙән мәйет сыҡмаҫ борон уҡ, туй башлауға оҡшамаймы һуң был? *(Йөрәгенме, партбилетынмы тотоп ҡарай, Япар уны күрмәй.)*

Япар. Ул тиклемен әйтә алмайым. Әммә мин әлегә ризалыҡ бирмәнем... Кәңәш ит миңә...

Дүсмәт *(яһалма дәрт менән)*. Урынымда һинең кеүек сыныҡҡан тоғро кешенең ҡалыуына мин бары шатланырға ғына тейешмен. Мин шатланам да быға!.. Быны мин һиңә горком секретары булараҡ әйтәм. Ә дуҫ булараҡ...

Япар. Һин икеһен дә бергә әйт.

Дүсмәт. Икеһен дә бергәме? Улайһа, тыңла. Эшкә тигәндә, икенсе секретарь йөк аты. Күпме һалһаң да, тартырға тейеш. Ашҡа тигәндә, йыш ҡына ымһынып та ҡала ул.

Япар. Ашҡа мин ҡомһоҙ түгелмен. Уныһы мине өркөтмәй.

Дүсмәт. Ни тиһәң дә, беҙ ни бары кешеләр генә бит, Япар. Бәндәгә хас нәфсе беҙҙә лә бар.

Япар. Үҙ нәфсемә мин үҙем баш һәм уны күптән еңгәнмен дә инде. Мин һинән бүтән нәмә һорамайым. Һин тураһын әйт: минең ҡулымдан килерме?

Дүсмәт. Уныһын, эшләп ҡарамай, әйтеүе ҡыйын. Әммә беренсе менән килешеү еңел булмаясаҡ. Икегеҙ ҙә саҡматаш кеүек кешеләрһегеҙ, бәрелешкән һайын, осҡон осоп торасаҡ.

Япар. Ә мин ундай кешеләрҙе яратам. Ундайҙар менән бер әрләшеп алһаң да, рәхәт булып ҡала.

Дүсмәт. Үҙең минән кәңәш һорайһың, үҙең һәр һүҙемде юҡҡа сығарып тораһың, Япар.

Япар. Һин өҙөп әйт.

Дүсмәт. Өҙөпмө? Өҙөп әйтәм: газетала ике ҡулыңа бер эш. Ә бында... Унан һуң, минең кәм тигәндә бер айлыҡ мәшәҡәтем ҡалды әле. Обкомдың биргән заданиеһы бар. Беренсе үҙе яңы ғына шылтыратып әйтте.

Япар. Мин, бер ҡатлы, һинән кәңәш һораған булам тағы. Ә һин, шамбы кеүек, ҡойроғондан да, башыңдан да тоттормайһың, шыуып тик тораһың.

Дүсмәт *(йылмайып)*. Һин дә, Япар дуҫ, ҡойроҡҡа үрелеүселәрҙән түгел бит... Боғаҙға ынтылырға яратаһың. Кәңәш һорарға түгел, ә мине ашыҡтырырға

килмәнеңме икән һин? Әммә мин партия дисциплинаһын боҙа алмайым. Команда булғас, рәхим ит!

Япар. Күрәк һорағанда, һәнәк бирә торған ғәҙәтең элек тә бар ине, һаман ташламағанһың икән шул ғәҙәтеңде.

Дүсмәт. Һин дә тотҡан ерҙән шартлатып һындыра торған рабфак студентының ҡылыҡтарын ташламағанһың, дуҫ.

Япар. Ташламаным, бынан һуң да ташлата алмаҫтар. Бөгөлөп-һығылып йәшәй алмайым, быуындарым ҡатҡан, ебәрмәй! Үҙең әйтмешләй, әммә шуны онотма: эйәр ҡашағаһына үтә йәбешеп ятҡан һыбайлы ат өҫтөнән тиҙерәк ҡолап төшөүсән була. Ә миңә ҡалһа, борсолма, мин һинең урынға эшкә килмәҫкә ҡарар иттем. *(Сыға.)*

Дүсмәт. Горком секретары булырға йөрөйһөңмө? Тороп тор әле саҡ ҡына. Урын буш түгел.

Креслоға ултырып ала. Звонокка баҫа. Зәйтүнә инә.

*(Йомшап.)* Саҡырған кешеләр килдеме, Зәйтүнә?

Зәйтүнә. Килде.

Дүсмәт. Инһендәр.

Секретарь сыға. Арыҡбаев менән Вәзир инә. Арыҡбаев ҙур таҡыр башлы йыуан кеше. Йөҙөнә ҡарағанда яҡшы күңелле булырға тейеш. Ләкин бик йыуаш һәм ҡурҡаҡ.

Арыҡбаев. Эштәр ырамлы булһын, Дүсмәт Ҡорбанович.

Дүсмәт бүлмә уртаһына сығып, Арыҡбаевты ҡаршылай. Вәзиргә баш ҡағып «Т» төҫлө өҫтәл эргәһенән урын күрһәтә. Ул ултырып ниҙер яҙа башлай.

Дүсмәт. Һаумы, Арыҡбаев... Эштәр ырар ине лә, бына һинең кеүектәр аяҡ салғылап ҡуя.

Арыҡбаев. Ауыҙығыҙҙан ел алһын, Дүсмәт Ҡорбанович, битебеҙ менән ер һеперәбеҙ.

Дүсмәт. Ултыр әле. *(Йылмая.)* Һин битең менән ер һепермә, танауыңды емерерһең. Ә бына урындағы промышленность предприятиелары араһында ярышты һиңә

асырға, заманға яраҡлы яңы йөкләмәләрҙе башлап һиңә алырға тура килер.

Арыҡбаев. Кисә һеҙҙең инструкторығыҙ беҙҙең хәлде үҙе күреп китте. Эштәр мөшкөл беҙҙең. Алған йөкләмәләрҙе лә үтәп бөтөрөп булмай.

Дүсмәт. Теге йөкләмәләрҙең быға ҡатнашы юҡ.

Арыҡбаев. Һуң, иптәш Ярлыҡапов, беҙҙән көсләрәктәр бар бит.

Дүсмәт. Алыш башларға көс кәрәкмәй, дәрт кәрәк. Дәрт! Һабантуйҙа көрәште кем башлай? Бот буйы малайҙар башлай. Аръяғы үҙенән-үҙе китә уның.

Арыҡбаев. Барыбер күрәләтә шапырына алмайым мин, иптәш Ярлыҡапов.

Дүсмәт. Һине маҡталыу бер ҙә ҡыҙыҡһындырмаймы ни шулай? Бурһыҡ! Һинең исемең берәй ваҡыт ташҡа баҫылып сыҡҡаны бармы?

Арыҡбаев. Бар. *(Көлөп.)* Башҡа кеше тураһындағы фельетонда: «Хуш күңелле, йомшаҡ баш Арыҡбаев...» — тип бер телгә алғайнылар.

Дүсмәт. Ул ғына аҙ. Йәғни ул икенсе нәмә. Әгәр ярышты башлап ебәрһәң, һинең фамилияң газета биттәренән төшмәйәсәк. «Арыҡбаев етәкселек иткән завод... Арыҡбаев заводының инициативаһы...» Балаларыңдың балалары ғорурланырлыҡ нәмә бит. Ниндәй дан! *(Йылмая.)*

Арыҡбаев. Шулайҙыр ҙа... Беҙҙең кеүек ваҡ халыҡҡа дандың кәрәге бик самалы уның...

Дүсмәт. Улай булһа, бына нәмә. Мин һинең менән һатыулашырға уйламайым. Хәҙер үк берәй буш бүлмәгә инеп ултыр ҙа ярыш асыуҙың идеяһы хаҡында уйла. Сиҙәм ерҙәрҙең перспективаһы менән бәйлә. Бер сәғәттән местпром предприятиелары директорҙарының кәңәшмәһе йыйыла. Шунда башлап сығыш яһарһың.

Арыҡбаев. Һеҙ минең бөтөнләй һушымды алдығыҙ, Дүсмәт Ҡорбанович, ни тип тә әйтә алмайым.

Дүсмәт. Бар, һушыңды ла, аҡылыңды ла шунда бергә йыйырһың. Быны һиңә горком ҡуша. Аңлашыламы?

Арыҡбаев. Аңлашыла ла...

Дүсмәт. Һуң?

Арыҡбаев. Бер ҙә генә тәнем тартмай.

Дүсмәт. Миңә һинең тәнең кәрәкмәй, йәнең, халыҡ эше өсөн янып торған йәнең кәрәк. Идея кәрәк миңә!.. Илдә ниндәй бөйөк эштәр башҡарылғанды аңламайһыңмы ни һин?!

Арыҡбаев. Аңлайым, Дүсмәт Ҡорбанович.

Дүсмәт. Аңлаһаң, алғы сафта булырға, башҡаларға үрнәк күрһәтергә ынтыл.

Арыҡбаев. Бик ынтылыр инек тә...

Дүсмәт. Юҡ, Арыҡбаев, һин ауылға яҡты йөҙ күрһәтергә теләмәйһең. Мин һине башҡаса төшөнә алманым. *(Пауза. Йомшаҡ ҡына өндәшә, ауыр ҡараш ташлай.)* Йә, нисек?

Арыҡбаев. Ҡурғаш һипкән төҫлө шул тиклем ауыр ҡарамағыҙ миңә, Дүсмәт Ҡорбанович. Мин уйлармын.

Дүсмәт. Әллә ҡасан шулай кәрәк ине.

Арыҡбаев сыға.

Вәзир *(урынынан тора)*. Консерватор! Шулар менән коммунизм төҙө инде...

Дүсмәт. Аңлашылдымы?

Вәзир. Беҙ грандиоз хәрәкәт башланыу алдында торабыҙ! Һеҙ зирәк аҡыллы кеше, Дүсмәт Ҡорбанович, ысын патриот! Үҙегеҙ ауылға эшкә киткәнсе үк, ауыл тураһында ҡайғыртып китәһегеҙ.

Дүсмәт. Башҡаса мөмкин түгел, матбуғат арыҫланы. *(Вәзирҙең иңбашына ҡулын һала.)*

Вәзир. Мәҡәләнең исемен «Сиҙәм ергә йөҙ менән» тип ҡуйһаҡ, килешерме?

Дүсмәт. Килешер. Әммә аҡыллы яҙ. Инициативаның түбәндән килеп сыҡҡанлығы ярылып ятһын. Беҙ ул инициативаны бары күтәреп алыусылар ғына. Миңә даны кәрәкмәй. Эш кәрәк миңә! Эш!

Вәзир. Һиҙеп торам, Дүсмәт Ҡорбанович.

Дүсмәт. Тағы бына нәмә: минең фамилияны бик алдан атама. Беренсе урында Арыҡбаев торорға тейеш. Бер сәғәттән кәңәшмәгә рәхим ит. Аңланыңмы?

Вәзир. Аңлашылды, Дүсмәт Ҡорбанович... *(Танауын тартып еҫкәнә. Сыға.)*

Дүсмәт *(кнопкаға баҫа. Зәйтүнә инә. Дүсмәт бүлмә уртаһына сығып баҫа. Сәғәтенә ҡарай)*. Хәҙер 9 сәғәт

17 минут, 10 сәғәт 17 минутта кисә биргән исемлектәге барлыҡ директорҙар ошонда булһын. *(«Т» өҫтәлде күрһәтә. Өҫтәлдәге телефондарға ишара яһай.)* Бөтә телефондар һеҙҙең ҡарамаҡта. Аңлашылдымы?

Зәйтүнә баш ҡаға. Дүсмәт икенсе ишектән сыға башлай. Ут һүнә.

*Шаршау*

**Икенсе картина**

Ҡариҙелдең текә яры. Ҙур ҡая эргәһенән һуҡмаҡ үтә. Бер мөйөштә Ярлыҡаповтар дачаһының ҡыйыҒы күренә. Көҙ. Кискә табан. Ҡояш нуры, һары япраҡтарға, һары үләндәргә төшөп, донъяны алтынға манған төҫлө. Аяҙ. Йылы. Ағас төбөнә ышыҡланып, Ярлыҡаповтар дачаһынан күҙен ала алмай Исмәғил баҫып тора. Ул бил ҡайышына китаптар ҡыҫтырған.

Исмәғил. Ишектәре асыла ла ябыла, асыла ла ябыла, ә кем сыҡҡанын күреп булмай. Әллә бер һыҙғырып ҡарарға инде? Рәхимә шунда уҡ танып алыр ине. Таныһа ла, иҫе китмәҫ шул йыуаш Исмәғилгә. Килгәс-килгәс, күрмәй китеп булмай инде. Бынау ағас башына менәм дә ҡарайым да ултырам. Бер сыҡмаһа, бер сығыр. Йөҙө күренмәһә, күлдәген булһа ла күреп ҡалырмын, ул да ярап торор. Тфү. *(Ҡулдарына төкөрөп ала ла ағас башына үрмәләй.)*

Мольберт күтәреп, Низам инә.

Низам *(ағастарға, таштарға)*. Һаумыһығыҙ, иҫке дуҫтар! *(Ҡуш ҡайынға.)* Һеҙ әүәлгесә үк татыу йәшәйһегеҙ икән. Тик бына бер аҙ һарғая төшкәнһегеҙ. Зарар юҡ, яҙ килгәс, уянып, тағы йәшәрерһегеҙ. Мөхәббәт тураһында бер-берегеҙгә матур төштәр һөйләрһегеҙ. Хәтерегеҙҙәме, бынан дүрт йыл элек бер йәш ҡыҙ күп тапҡырҙар һеҙгә һөйәлеп торғайны. *(Ҡайындарҙы килеп һыйпай.)* Уның иңбаштары һеҙҙең аҡ тәнегеҙгә тейгәйне. Бына бөгөн ул тағы эргәгеҙгә килде. Дилбәр, һөйәл һин иҫке дуҫтарыңа. Бөтәһе лә яңынан башлана. *(Мольбертын алып, эшкә тотона.)* Башыңды саҡ ҡына

ҡояшҡа бор. Битеңә яҡты төшһөн. Ул саҡта сәстәреңде ел тарата ине. Бөгөн тыныс шул. Ниңә ҡапыл турһайҙың? Юҡ, битеңә япраҡ күләгәһе төшкән икән... Башланыҡ! Изге сәғәттә! *(Мауығып һыҙғыларға тотона.)*

Шул ваҡыт нәҡ Дилбәр һөйәлергә тейеш ергә таяҡ таянған бер бабай килеп һөйәлә.

Низам *(башын күтәрә, аптырап ҡала, күҙҙәрен ыуа)*. Ә?

Ҡарт. Ниңә ауыҙыңды астың?

Низам. Ҡайҙан килеп төштөгөҙ һуң әле һеҙ? *(Күккә күрһәтә.)*

Ҡарт. Ғәжәпләнмә, мин Хыҙыр Ильяс түгел. Таяҡты толпар итеп *(таяғын күрһәтә)*, былтыр һайраған һандуғастың тауышын быйыл эҙләп йөрөүсе бер ҡартмын мин.

Низам. Ғәжәп. Әле генә бында бер кем дә юҡ ине.

Ҡарт. Тар булһа ла, һуҡмаҡ бар. Юл булған ерҙә кеше өҙөлмәй ул. Ағас һүрәте төшөрәһеңме?

Низам. Юҡ, бик матур, бик һәйбәт ҡыҙҙың һүрәтен яһай инем.

Ҡарт *(янына килә)*. Ә ҡыҙың ҡайҙа һуң?

Низам *(башта ҡарт таянған ағасты, унан йөрәген, маңлайын күрһәтә)*. Ана шунда... Юҡ, бына бында, бында. Күңелдән төшөрәм.

Ҡарт. Ә-ә? Үҙе «хуш»мы ни?! *(Ҡул болғап күрһәтә.)*

Низам *(башын ҡаға)*. «Хуш» шул! Юҡ, ошо ҡалала йәшәй, ләкин барыбер... Эйе, «хуш». *(Ҡул һелтәй.)*

Ҡарт. Әйҙә, эшлә, мин ҡамасауламайым.

Низам. Әҙәпһеҙлек булһа ла, һорайым әле?

Ҡарт. Бынау тау-таш араһында нимә эшләп йөрөй был хыялый ҡарт, тиһеңме?

Низам. Хыялый уҡ тимәйем дә.

Ҡарт. Хыялый. Һинең кеүегерәк.

Низам *(күкрәгенә төртә)*. Тимәк, мин хыялый?

Ҡарт *(ҡарап)*. Әлегә бөтөнләй үк түгел.

Низам. Ғәжәп!

Ҡарт. Нимә эҙләй был ҡарт, тиһеңме?

Низам. Эйе.

Ҡарт. Һыуынған көлдән ут эҙләйем.

Низам. Мәрәкә. *(Көлә.)*

Ҡарт. Мәрәкә түгел, аяныс.

Низам. Валлаһи, тип әйтәм, һис нәмә төшөнмәйем...

Ҡарт. Минең йәшкә еткәнсерәк ошо ҡаяла ултырһаң, төшөнөрһөң әле.

Низам. Шомло һүҙҙәр һөйләйһең, бабай.

Ҡарт. Шомло шул. Был ҡая минең өсөн хәтирәле урын. Күп йылдар элек, һинең кеүек йәш саҡта, берәү менән ошо ярға килеп йөрөгәнебеҙ бар ине. Һүрәт төшөрөргә түгел, былай ғына.

Низам. Шунан?

Ҡарт. Шунан уны бүтән берәү минән тартып алды. Заманы шундай ине. Кеше әйбер менән бәрәбәр ине ул саҡта.

Низам. Эйе, заман башҡа, ә мөхәббәт һаман аяныслы.

Ҡарт. Юҡ, улай түгел. Ана, таштарҙағы тамғаларға ҡара. Күпме бәхетле исемдәр уйылған унда. Күпме йөрәктәр серләшә.

Низам. Мин ул яҙыуҙарҙың бөтәһен дә яттан беләм. Быныһын хатта күсереп тә алдым. *(Уҡый.)*

Һыуҙарға һыуһап йөрөнөм...

Ҡарт. Эйе, мөхәббәт ебегәндәр өлөшө түгел, ул — көслөләр өлөшө. Уны көтөп тормайҙар, яулап алалар.

Низам. Ә ул кире ҡайтмаҫҡа киткән булһа?

Ҡарт. Ул саҡта ла көслө бул! Онот. Онота алыу — үҙе бер батырлыҡ ул. Минең шикелле япа-яңғыҙ, әллә ҡасан һүнгән усаҡтың көлөн бутап, осҡон эҙләп йөрөмә, ағас ҡурпыламаһа, урман ҡорой, кеше ҡурпыламаһа, тоҡом ҡорой... Ярай, мин китәйем инде. Ҡояш байығансы, өйгә ҡайтып етергә кәрәк.

Низам. Хуш бул, сәйер бабай!

Ҡарт. Хуш! *(Китә.)*

Низам *(ултыра. Ағасҡа әйләнеп ҡарай)*. Ҡайҙа булдың һин, Дилбәр? Һин бит башҡаса ғүмергә лә был ҡуш ҡайын төбөнә килеп баҫмаҫһың. Һин йондоҙ кеүек алыҫһың, яҡтыһың. Ләкин яҡтың миңә төшмәй,

үҙенде генә яҡтырта. Ә мин һине һаман да саҡырам: Дилбәр, Дилбәр, Дилбәр! Ха-ха-ха... Төштө өн итергә маташаммы? Һыуынған көлдән ут эҙләйемме мин? Онотορға, онотορға, онотορға! *(Нәмәләрен тиҙ-тиҙ генә йыйып, ҡултығына ҡыҫтыра. Ҡулына яңынан кисточка ала. Ҡая эргәһенә килә, яҙа.)* «Һыуынған көлдән ахмаҡ ҡына ут эҙләр...» Бәлки, берәүгә һабаҡ булыр. *(Нәмәләрен алып, ҡаяға күтәрелә башлай. Исмәғил ултырған ағас башынан китап килеп төшә. Низам аптырап китә.)*

Низам. Ниндәй шайтан шаяра минең менән? *(Китапты ала. Уҡый.)* «География дәреслеге». Эй, кем унда донъяға шулай ғилем таратып ултыра?

Исмәғил *(өҫтән)*. Мин, ағай. *(Һикереп төшә.)*

Низам. Һин кем?

Исмәғил. Исмәғил. Техникум студенты.

Низам. Таныш булайыҡ. Низам.

Исмәғил. Мин һеҙҙе беләм. Һеҙ — художник.

Низам. Бына мин һине белмәйем. Салбар туҙҙырып, ниңә ағас башына үрмәләүеңде лә белмәйем.

Исмәғил. Ағас башында ултырып һабаҡ уҡырға һәләк яратам мин, ағай. Бигерәк тә география дәресен. Үҙең һабаҡ уҡыйһың, үҙең әллә ҡайҙағы тауҙарҙы, күлдәрҙе, урмандарҙы күреп тораһың.

Низам. Тағы нимәләр күренә?

Исмәғил. Башҡа әллә нәмә юҡ. Завод торбаһы күренә...

Низам *(көлә)*. Дәрес башҡа керәме һуң?

Исмәғил. Яратҡан дәресең булғас, керә инде

Низам. Ә үҙегеҙҙең техникум тирәһендә ағас юҡмы ни?

Исмәғил. Бар ҙа. Бындай уҡ һәйбәт түгел...

Низам. Ҡара әле, Исмәғил, әллә һин бындағы дачниктарҙың берәй нәмәһен сәлдерергә самалап йөрөйһөңмө? Һин яман затҡа оҡшайһың.

Исмәғил. Ҡуй, ағай...

Низам. Мин һинән шикләнәм.

Исмәғил. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ағай, бынау йортта *(дачаны күрһәтә)* минең ауылдаш ҡыҙ тора. Рәхимә исемле. Шуны күреп булмаҫмы тип килгәйнем.

Низам. Һуң?

Исмәғил. Баянан бирле ултырам, бер сығып әйләнмәне. Башта бәләкәс кенә бер ағай өйгә инде, унан Ярлыҡапов ағай сығып китте. Шунан, пар-пар булып, матур кейенгән бер нисә кеше килде. Һуңынан, нимәләрҙер күтәреп, Дилбәр апай ҡайтты.

Низам *(Дилбәр исемен ишеткәс, һиҫкәнеп китә)*. Ә һин Дилбәр апайыңды ҡайҙан беләһең?

Исмәғил. Бер саҡ ауылдан ебәргән күстәнәсте Рәхимәгә килтергәйнем. Шунда күреп ҡалдым мин уны. Бик һәйбәт апай, ти, ул. Әллә һеҙ ҙә беләһегеҙме?

Низам. Мин дә күреп кенә ҡалғайным уны.

Исмәғил. Ә Рәхимә юҡ та юҡ.

Низам. Һин дөбөрләтеп барып ин дә: «Һаумы, Рәхимә», — тиген.

Исмәғил. Ҡуй, ағай, оялдырта.

Низам. Улайһа, һин Рәхимәне яратмайһың.

Исмәғил. Минме, минме яратмайым? Һеҙ минең эсемә инеп ҡарамағанһығыҙ бит. Әгәр яратмаһам, бер күрәйем тип, шул ғүмер ағас башында ултырыр инемме ни? Их һин, ағай!

Низам. Шулай булғас, саҡырып сығар ҙа әйт: «Яратам һине, Рәхимә!» — тиген.

Исмәғил. Уныһын уҡ булдырып булмаҫ. Бына бер һыҙғырып ебәрһәм, ул, бәлки, сығыр ине. Минең һыҙғырыуҙы таный ул.

Низам. Һуң, шулай булғас, һыҙғырып ебәр. Егет кешегә бер һыҙғырыу ни тора?

Исмәғил. Бөгөн йә өйҙә юҡтыр әле ул.

Низам. Ҡурҡаҡ һин, Исмәғил. Ебегән!

Исмәғил. Мин ҡурҡаҡмы? Минме? Иртәгә киләм дә бына ошолай итеп һыҙғырам да ебәрәм. *(Әсе итеп һыҙғыра ла, китабын онотоп, ҡала яғына йүгерә.)*

Низам *(башын сайҡап тора)*. Беҙгә лә алмаш үҫә... Минең йырым шулай уҡ йырланып бөттөмө икән ни? Бәлки, ул бөтөнләй башланмағандыр ҙа... *(Дача яғына ҡарап тора.)*

Рәхимә йүгереп килеп сыға.

Рәхимә *(Низамды күреп, аптырай)*. Бында һеҙ?.. Һаумыһығыҙ, ағай!

Низам. Һаумы, Рәхимә!

Рәхимә. Һауын һау ҙа... Бес, бес, бес... *(Тирә-яҡтан эҙләнгән була.)* Әле генә бесәйебеҙ сығып йүгерҙе. Бына шундай ғына, йөнтәҫ кенә ала бесәй. Күрмәнегеҙме, ағай? Бер ҡолағы аҡ, бер ҡолағы ҡара... Ҡойроҡ осо ла ҡара... Ә һеҙ ни эшләп тораһығыҙ бында?

Низам. Минең дә бесәйем юғалды.

Рәхимә. Ни төҫлө ине?

Низам. Ап-аҡ ине. Тик бик ныҡ юғалды шул ул. Һинеке табылыр. Бына, мә. *(Исмәғилдең китабын бирә.)*

Рәхимә *(китапты ала, китаптың ҡабығаһына ҡарай, унда Исмәғилдең исеме яҙылған)*. Аҡйегетов Исмәғил. Исмәғил... Исмәғил!

Низам ҡулы менән Исмәғил киткән яҡҡа күрһәтә.

Исмәғил!.. *(Исмәғил киткән яҡҡа йүгерә.)*

Низам *(алыҫтарға ҡарап уйланып тора)*. Юҡ! Аҡҡанға күрә, йылғаның һыуы кәмемәй, янғанға күрә, йөрәктең уты һүрелмәй. Онота алыу түгел, бәлки, онота алмау батырлыҡтыр. Шул тиклем һөйөүҙе күтәреп йөрөтөү, бәлки, үҙе егетлектер. Ул башҡа берәүҙеке лә булһын, ти, ләкин мин бит барыбер уныҡымын. Кисә лә, бөгөн дә, иртәгә лә уныҡымын. Иртәгә лә... Ниндәй көн һуң әле иртәгә? Иртәгә йома көн. 20 сентябрь. Бөгөн ун туғыҙы. Ни эшләп бик таныш әле был көн? Туҡта! Бөгөн уның тыуған көнө бит. Уға егерме дүрт йәш тулды. *(Ҡайындарға.)* Ҡайындар, ҡайҙа ул? Ниңә шунда икегеҙҙең арағыҙҙа тотоп ҡалманығыҙ уны?.. Әлегә тиклем мин уның үҙен яраттым, ә бынан һуң уның шатлыҡтарын, бәхетен, хатта ҡайғыларын да яратасаҡмын. Юҡ, йондоҙ кеүек алыҫ түгелһең һин, Дилбәр. Һинең яҡтың, һинең йылың һәр ваҡыт миңә төшәсәк, мине йылытасаҡ. Һин шат булһаң, минең ижадым һәр ваҡыт ҡанатлы буласаҡ. Был ерҙә һин бәхетле булһаң, мин үҙемде һис ҡасан да бәхетһеҙ һанамаясаҡмын. Минең өсөн һин шатлыҡтың, матурлыҡтың, сафлыҡтың тере һыны булып ҡаласаҡһың, ғүмерлек дуҫым, юлдашым, илһамым минең! Күңелемдә һинең яңы һының тыуа, Дилбәр. Ул һын инде ҡуш ҡайын араһында баҫып тормай, ә ҡояшлы, сәскәле ялан аша

миңә табан килә... Ҡояшлы ялан аша... Күҙҙәреңдә, йөҙҙәреңдә күпме нур балҡый, бәхет нурҙары... «Ҡояшлы ялан аша...» «Ҡояшлы ялан аша!..» Был һүрәтеңде һинең бейек ҡаяға баҫып ҡына ижад итә алаҫаҡмын. Киңлек кәрәк миңә! Иркенлек! Һаумы, яңы ғазаптар! Яңы шатлыҡтар, һаумы! *(Ҡаяға күтәрелә.)*

Ауаз. Һау!

Сәхнә бер аҙ буш тора. Алыҫтан Дилбәр тауышы ишетелә: «Йә, тиҙерәк бул инде, Вәзир!» Бер аҙҙан үҙе йүгереп килеп сыға. Ул аҡ күлдәк кейгән.

Дилбәр. О, ерҙең изге мөйөшө! Бына мин һиңә тағы ла килдем. Был юлы яңы таныш алып килдем. Яҡшы ҡабул ит һин уны. Вәзир ул.

Вәзир *(инә)*. Ҡунаҡтарҙы былай ташлап китеү килешмәҫ, Дилбәр.

Дилбәр. Бер генә минутҡа бит. Минең һиңә бәләкәс кенә серем бар.

Вәзир. Тыңлайым, ниндәй сере бар икән минең аҡ күгәрсенемдең?

Дилбәр. Һуңғы бер нисә йылда минең тыуған көнөмдә беҙ дуҫтарым менән йыйылышып ошонда килә торғайныҡ. Беҙ уны ҡала ситендәге һарайыбыҙ тип атаныҡ.

Вәзир *(шаярып, күккә ҡарай)*. Тик түшәме бейегерәк икән.

Дилбәр. Һин шаярма әле, Вәзир. Ә миңә егерме йәш тулған көндө дуҫтарым был һарайҙы миңә бүләк иттеләр. «Дилбәр һарайы» тип атанылар. Хәҙер ул беҙҙең икебеҙҙеке булыр. Тик икебеҙҙеке генә, Вәзир!

Вәзир. Рәхмәт, Дилбәр. *(Маңлайынан үбә.)* Мин һинең күңел нескәлегеңде баһалайым.

Дилбәр. Һин баһалап торма... Һин ҡыуан, Вәзир. Һин күҙ алдыңа килтер. Ошо турала ғына *(күккә күрһәтә)* төндәрен күпме яҡты йондоҙ яна. Беҙҙең йондоҙҙар!

Вәзир. Мин шатмын, Дилбәр. Ә хәҙер һарайҙың йыһаздарын ҡарарға мөмкинме?

Дилбәр. Рәхим ит. Һин — хужа.

Вәзир (*ташҡа яһалған йөрәк һүрәттәрен, яҙылған яҙыуҙарҙы ҡарап йөрөй*). Беҙҙең һарай ғишыҡ тотоп сел-пәрәмә килгән йөрәктәрҙең валсыҡтары менән тулған икән. (*Уҡый.*) «Онотма...» «Ташлама...» «Һөйәм һине» «Һағынам һине...» Күпме инәлеү, ялбарыу, һағыш...

Дилбәр. Бәлки, бында имгәнгән йөрәктәр түгел, ә ҡауышҡан йөрәктәр серләшәләр? Бәлки, кешеләр, мәңгелеккә әйтелгән өсөн, ул һүҙҙәрҙе ташҡа яҙғандарҙыр? Бәлки...

Вәзир. Юҡ. Ҡауышҡандар бында килеп, таш соҡоп йөрөмәй ул. Улар һөйөшәләр һәм шуға күрә уларҙың башҡа ваҡ-төйәккә ваҡыттары ҡалмай. Бына беҙ һинең менән таш соҡоп йөрөмәнек бит...

Дилбәр. Әгәр таш соҡорлоҡ мөхәббәтең булһа, ниңә соҡомаҫҡа?

Вәзир. Һин улай тимә. Мин бит һине былай ҙа яратам.

Дилбәр. Ә мин ир булһам, яҙыр инем...

Вәзир (*ары китә, уҡый*).

Һыуҙарға һыуһап йөрөнөм,
Үҙем һыу буйҙарында.
Ғүмеремдең буйҙарына
Булырһың уйҙарымда.

Ә быныһына нимә тиерһең?

Дилбәр. Ҙур йөрәкле кеше яҙған.

Вәзир. Минеңсә, бер эшлекһеҙ бушҡа ғүмер үткәргән. Шул тиклем таш соҡоған көстө файҙалы эшкә түкһә, бер ғәмәлгә ярар ине.

Дилбәр. Бында бит кеше үҙенең яҙмышын яҙған, Вәзир.

Вәзир. Булдыҡһыҙ бер ебегәндең яҙмышы. Имеш, һыу буйында һыуһап йөрөгән, бахыр. Кешеләр, тау ярып, һыу тапҡандар, таш сүкеп, ут алғандар. Һәм мөхәббәттә лә шулай... Билдән ҡар ярып юл һалған шикелле ынтылырға тейеш кеше үҙенең мөхәббәтенә, үҙенең һөйөү бәхетенә.

Дилбәр. Бәлки, һин хаҡлылыр. Ләкин ҡар ярып барған һәр берәү хазина күтәреп килмәҫкә мөмкин бит

әле. Хазинаһы ауыр кешегә, бәлки, ҡар ярып килеү ҡыйыныраҡтыр, бәлки, ул оҙағыраҡ киләләр.

Вәзир. Беҙ фәлсәфәгә инеп киттек, ахыры, Дилбәр. Бөгөн тик шатлыҡ көнө генә. Һинең көнөң бөгөн!

Дилбәр. Һинеңсә булһын. *(Иронияллы шаярып.)* Йә, кенәз, был моңһоу һарайҙы ҡабул итеп алдығыҙмы?

Вәзир *(баш эйеп)*. Ҡабул иттем. Рәхмәт, княгиня. Рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар көтәләр. *(Китә башлайҙар, яҫы ташта яҙыу күрә.)* Туҡта әле. *(Уҡый.)* «Һыуынған көлдән ахмаҡ ҡына ут эҙләр».

Дилбәр *(Низам почеркын танып, ҡаушап ҡала)*. Әйҙә, киттек инде.

Вәзир. Быныһын яңы ғына аҡылға ултырған ахмаҡ яҙған булырға тейеш. Буяуы ла кибеп етмәгән.

Ҡаянан Низам һикереп төшә. Дилбәр менән Вәзир аптырап ҡалалар.

Низам. Ғәфү итегеҙ! Мин ҡая башында этюд яҙып ултыра инем. Ирекһеҙҙән бүленеп ҡалдым. Был яҙыуҙы мин яҙғайным. Ләкин иртәрәк яҙғанмын. Мин уны кире юям. *(Кисточка менән буяп ташлай.)* Һәм үҙемде, әле аҡылға ултырмаған, тип иҫәпләйем!.. *(Оҙаҡ пауза.)* Тыуған көнөң менән ҡотлайым, Дилбәр. *(Баш эйә.)*

Дилбәр. Рәхмәт...

Вәзир. Мин һине ҡалдырып торор инем дә, Дилбәр, өйҙә ҡунаҡтар көтә.

Низам. Ҡалдырып торорға ул һиңә әйбер түгел! Хушығыҙ. *(Сығып китә.)*

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Ярлыҡаповтар дачаһы. Шул уҡ обстановка. Бер мылтыҡ эленгән стенала хәҙер — икәү. Мәстүрә нәмәләр төйнәй. Китергә йыйыналар.

Дилбәр өҫтәл эргәһендә лекцияға әҙерләнә. Рәхимә диванға менеп ултырған да китап уҡый. Ҡыш. Тышта ҡар яуа.

Мәстүрә. Күпме нәмә йыйылған. Мүк басҡан таш кеүекһең, йырынып сығып булмай. Күбеһенең хәҙер кәрәге лә ҡалмаған. Ә заманында шуларҙың һәр береһен табыу, алыу өсөн күпме хәстәрлек күрелгән. Ошоларға ҡарап, Мәстүрәнең биографияһын да яҙып булыр ине. *(Көлә.)* Ояһына байтаҡ йөн йыйған был сәпсек.

Дилбәр. Ҡасаныраҡ ҡуҙғалырға булдығыҙ?

Мәстүрә. Белмәйем. Ағайың, йыйынып тор, тине.

Дилбәр. Ни эшләптер яманһыу күренәһең һин, апай.

Мәстүрә. Юлға йыйыныу күңелһеҙ эш икән. Бына балаларҙың бәләкәс кейемдәре килеп сыҡты. Дүсмәттең күн фуражкаһы. Үҙемдең әллә ҡасан моданан сыҡҡан оҙон ҡуңыслы ботинкаларым... Һәр береһе тик үткәнде генә хәтерләтә. Киләсәк тураһында һөйләүсе бер нәмә осрамай.

Рәхимә. Дилбәр апай, ниңә бынау ерҙә идеал тигән исемде бәләкәй хәрефтән яҙғандар? Тыңла әле: «Һин минең яҡты уйҙарым, һин минең идеалым».

Дилбәр. Шулай тейеш.

Рәхимә. Тейеш түгел. Кеше исеме ҙур хәрефтән яҙыла.

Дилбәр. Был кеше исеме түгел.

Рәхимә. Кеше исеме шул.

Дилбәр. Ундай исем булмай.

Рәхимә. Була, апай, була. Беҙҙең класта Идеал исемле үтә шуҡ бер малай бар ине.

Дилбәр. Рәхимә аҡыллым, барыбер дөрөҫ исем ҡушмағандар ул малайға.

Рәхимә. Улай булғас, нимә һуң ул идеал?

Дилбәр. Идеалмы? Идеал ул... *(Уйлана.)*

Мәстүрә. Беҙ ҙә йәш саҡта: «Алға, алға, изге идеалға», — тип йырлай инек.

Рәхимә. «Алға, алға, изге идеалға». Ә дауамы нисек?

Мәстүрә. Онотолған инде.

Рәхимә. Алдағы идеал үҙе нимә һуң?

Дилбәр. Идеал ул, Рәхимә, иң ҙур, иң яҡшы, иң бөйөк маҡсат. Кешеләр шуға ынтылалар, шуға ирешер өсөн көрәшәләр, хатта ҡорбан булалар.

Рәхимә. Был шиғырҙа бит мөхәббәт тураһында яҙылған.

Дилбәр. Тимәк, бында егет *(китапты ала)* үҙенең һөйгән ҡыҙын, идеалым, йәғни донъяла иң һәйбәт кешем, тип атай.

Рәхимә. Ундай ҡыҙ бармы икән ни?

Дилбәр. Яратҡан кеше өсөн, күрәһең, барҙыр.

Рәхимә *(ситкә китә. Көрһөнә)*. Ә Дилбәр апай был шиғырҙа әйтелгән идеалына ирештеме икән? Әллә юҡмы икән?

Дилбәр. Нимә һин унда үҙ алдыңа бышылдайһың?

Рәхимә. Минеңсә, апай, идеал һүҙен барыбер ҙур хәрефтән яҙырға кәрәк. Асығыраҡ күренеп торһон.

Вәзир бүлмәһенән сыға. Галстуктан. Пижама кейгән.

Вәзир. Рәхимә аҡыллым.

Рәхимә. Әү.

Вәзир. Барсы, йүгереп кенә папирос алып ҡайт.

Рәхимә. Йомош ҡушыр булһа, ошо Вәзир ағай гел, Рәхимә аҡыллым, тиер.

Вәзир *(аҡсаның эреһен дә, вағын да тинләп һанап бирә)*. Аҡыллы булғас. Ике ҡап «Казбек», Мәскәүҙекен ал. Ике ҡап шырпы.

Рәхимә *(кейенә)*. Ә ундай булмаһа?

Вәзир. Табырға тырыш, һин бит уңған ҡыҙ.

Рәхимә. Мин хәҙер йүгереп ҡайтырмын. *(Китә.)*

Дилбәр. Исмаһам, ял көндө аҙыраҡ тартыр инең, Вәзир. Тышта ниндәй матур ҡар яуа, әйҙә сығып йөрөйөк.

Вәзир. Ваҡыт юҡ, Дилбәркәй, иртәгә грандиоз ваҡиға. Өлкә комитетта Дүсмәт Ҡорбанович башлаған теге ярыштың йомғаҡтарын тикшерәләр. Миңә лә ҡайһы бер һорауҙарға яуап бирергә тура килер. Шуға әҙерләнәм.

Мәстүрә. Бер дәрт иткәс, әллә ҡасан китеп кенә бармай. «Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы», — тип боронғолар юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Һаман шул, эш күрһәтәм, тип йөрөүе булды.

Вәзир. Беҙ, Мәстүрә Хисамовна, йыш ҡына эш күрһәткән булып, үҙебеҙҙе күрһәтергә тырышабыҙ ҙа ул. Яңы итеген күрһәтер өсөн бейегән бейеүсе кеүек...

Дилбәр. Һин ысынлап һөйләйһеңме был һүҙеңде?

Вәзир *(йылмая, танауын йыйырып еҫкәнә)*. Әлбиттә, шаярып. Былай ғына. Унан беҙ тигән һүҙ *(өй эсен күрһәтә)* беҙ түгел бит әле ул.

Дилбәр. Ә кем?

Вәзир. Бар шундай кешеләр. Арыҡбаев, мәҫәлән.

Дилбәр. Шулай ҙа ғәжәп.

Вәзир. Донъяла ғәжәптәр күп ул, Дилбәркәй. Һин Мәстүрә Хисамовнаға йыйынырға булышыр инең. Ултырған тауыҡ кеүек, бөтөнләй өйҙән сыҡмаҫ булды.

Мәстүрә. Шөкөр, бөттө инде. Бынау тоҡтарҙы ғына теккеләйһе ҡалды. Бөгөн үк күтәрен дә сыҡ та кит...

Дилбәр. Ғүмер буйына йәшәгән ерҙән китеү тураһында шундай еңел һөйләйһең, апай.

Мәстүрә. Хатта ашҡынып торам бер төрлө. Китһәк, яҡшыраҡ булыр һымаҡ. Торорға бәләкәс кенә бер йортҡа инербеҙ. Мәшәҡәт тә әҙ булыр. Мин, бәлки, әүәлге эшемә, балалар баҡсаһына, урынлаша алырмын.

Вәзир. Ул да бер маҡсат. Шағирҙар әйтмешләй, идеал!

Дилбәр. Нимә эшләп, Вәзир, һин бөгөн тиҫкәре тун шикелле тырпайып тораһың? Нимә булды һиңә?

Вәзир. Башҡа еҫ тейҙе. *(Йылмая.)* Әле һорарға тип сыҡҡайным, анау Хәбир күстәнәс итеп килтергән ҡытай тәмәкеһен эҙләй-эҙләй, күҙем тоноп бөттө. Күргән кеше юҡмы шуны?

Дилбәр. Шкаф башында ине бит.

Вәзир. Унан да ҡараным. Юҡ.

Дилбәр. Йә артҡа төшкәндер, йүнләберәк эҙлә.

Мәстүрә. Был эш тә тамам булды. *(Төйөнсөктәрҙе Дүсмәт бүлмәһе ишеге янына өйөбөрәк ҡуя.)*

Вәзир. Шайтан алғыры, өйҙә бер тартырлыҡ тәмәке ҡалмаған!.. *(Гөл төптәрен ҡарай, төпсөк таба, тоҡандыра.)*

Дүсмәт *(сыға. Телефонға бара. Төйөнгә абынып саҡ йығылмай)*. Аҙым һайын абындырырға ғына торалар. Һиңә генә етмәгән тағы, Мәстүрә.

Мәстүрә *(төйөнсөктәрҙе ала)*. Әле генә ҡуйғайным да.

Дүсмәт. Әле генә, әле генә. Ваҡыты еткәс, өлгөрмәҫ инең шул.

Мәстүрә. Төйнәштереп торорға үҙең ҡуштың бит.

Дүсмәт *(йомшаҡ)*. Мин бит һиңә сепрәк тауы өйөргә ҡушманым, бисәкәй. Ниңә һуң һин, исмаһам, саҡ ҡына ла ҡаршы әйтмәйһең?

Мәстүрә. Шулай өйрәтелгәнмен.

Дүсмәт *(йомшаҡ булырға тырышып)*. Ял көнөмө әле бөгөн? Беҙҙе ни нәмә менән һыйларға әҙерләнәһегеҙ?

Мәстүрә. Хәҙер Дилбәр менән билмән яһарға ултырмаҡсы инек.

Дүсмәт. Улайһа, хәҙер үк тотонһағыҙ ҙа ярай.

Дилбәр. Ниңә инде ағай, уны уратып тораһың? «Бар сығығыҙ», — тиген дә ҡуй. *(Тора.)*

Дүсмәт. Ҡайһылай аңлаһағыҙ ҙа ярай.

Бисәләр сыға. Дүсмәт телефон эргәһенә килеп ултыра.

Вәзир *(диванға ҡырын ята)*. Һеҙҙең мылтыҡ шәберәк, ахырыһы, Дүсмәт Ҡорбанович. Ике көбәкле.

Дүсмәт. Атып ҡараған юҡ. Белмәйем. Мылтыҡ ҡайғыһы китеберәк тора әле.

Вәзир. Беләм.

Дүсмәт. Нимәне беләһең?

Вәзир. Өлкә комитетта иртәгә буласаҡ кәңәшмәне. Һеҙҙең менән беҙ сәскәнде урып ҡараясаҡтар. Ураҡҡа эләкһә.

Дүсмәт. Ташла әле шул төртмә теллелегеңде!

Вәзир. Һеҙ үтә борсоу күренәһегеҙ, Дүсмәт Ҡорбанович, әллә йоҡо ла самалы булдымы?

Дүсмәт. Күңелең булһын, эйе, самалы. Һине лә саҡырҙылармы ни?

Вәзир. Саҡырҙылар, Дүсмәт Ҡорбанович. Белмәйем, минең ни кәрәгем барҙыр. «Горком секретары ҡушты, мин яҙҙым. Төшөнөп еткермәгәнмен, язаһын бирегеҙ!» — тиермен.

Дүсмәт. Мин һине аңламайым, Вәзир. Бөтөнләй икенсе кеше һин.

Вәзир. Түгел. Шул уҡ кеше.

Дүсмәт. Юҡ, мин һинән быны көтмәгәйнем. Һин йығылғанды түбәләргә әҙер торалың. Бөтә яҡшылыҡты бер юлы онотторға ярамай ул.

Вәзир. Ләкин мин һеҙ уйлағанса уҡ насар түгел. Өйрәтегеҙ: нимә эшләргә тейешмен мин?

Дүсмәт. Һин яҙған статьяға минең ҡатнашым юҡ. Шул ғына.

Вәзир. Тимәк, газетчик булараҡ, мин горкомда ҡыҙыҡлы кәңәшмә барлығын һиҙеп ҡалдым да *(еҫкәнә)* йүгереп барҙым. Арыҡбаев речь һөйләп ята ине. Арыҡбаев бөтә предприятиеларҙы ярышҡа саҡырҙы, Арыҡбаев күкрәк һуҡты, Арыҡбаев, Арыҡбаев, Арыҡбаев...

Дүсмәт *(тора, йылмая)*. Дөрөҫ, дөп-дөрөҫ...

Вәзир *(дауам итә)*. Иптәш Ярлыҡаповтың урындағы инициативаны күтәреп алмай ни сараһы бар? Уның бурысы шул. Ә бына Арыҡбаев күҙ буяусы бер эшлекһеҙ бәндә булып сыҡты. Башҡалар ҙа шундай уҡ.

Дүсмәт. Арыҡбаевты артыҡ бөтөрөп ташларға ла ярамай. Ул насар кеше түгел.

Вәзир. Ә, «Ярыш иптәш Ярлыҡаповтың инициативаһы менән йәйелдереп ебәрелде һәм артабан дауам итәсәк» тигән ташҡа баҫылған һүҙҙәрҙе хәҙер ҡайҙа итәбеҙ?

Дүсмәт. Мин бит һиңә улай яҙырға ҡушманым. Быныһы һинең башбаштаҡлыҡ.

Вәзир. Уны хәҙер нисек иҫбат итәһең?

Дүсмәт. Иблис һин, Вәзир, бәләкәс кенә иблис.

Вәзир. Ашыҡмағыҙ. Бөтәһе хаҡына, бигерәк тә Дилбәр хаҡына, уныһын да үҙ өҫтөмә алам. «Бутағанмын, ашыҡҡанмын. Арыҡбаев фамилияһы урынына хаталыҡ менән Ярлыҡапов фамилияһы киткән. Икеһе лә боронғо фамилиялар, оҡшаштар ҙа. Хаталыҡ миндә. Язаһын бирегеҙ!» Шуға ризамы?

Дүсмәт. Бына быныһы, исмаһам, ир һүҙе. Матбуғатта таянысым, уң ҡулым булырһың тип, мин һинең менән юҡҡа ғына туғанлашманым бит, Вәзир... Быны бер ваҡытта ла онотторға ярамай.

Вәзир. Ләкин алдан әйтәм: эш үтә ҙурға китһә, белеп тә булмай.

Дүсмәт. Китмәҫ. Нык бул. *(Беләгенән тотоп.)* Мин ышанам һиңә.

Вәзир. Арыкбаев менән үҙегеҙ килешегеҙ инде. *(Эҙләнә.)* Өйҙә бер һурырлык тәмәке юк. *(Эҙләнә. Диван аҫтынан төпсөк табып токандыра.)* Тфү, тфү. *(Үҙенә инеп китә.)*

Дүсмәт *(артынан карап кала).* Кайһылайырак һөйләшә, кесерткән турғайы. *(Телефон ала.)* Бына донъялар. Арыкбаев квартирына шылтыратырға тура килер, тип кем уйлаған? Уның номерын да белмәйем бит әле. *(Йыя.)* Справочный? Миңә Фәсхетдин Арыкбаевтың квартиры кәрәк. Ярыкбаев түгел, Арыкбаев, Арык... Эй, тукта, тукта, кәләм алайым. *(Кәләм алып килә.)* Трубканы куйған. Элемтә начальнигын сакырып, иртәгә үк шелтәләргә кәрәк булыр. Был справочный бюрола бюрократтар ултыра икән. *(Тағы йыя.)* Арыкбаев квартиры кәрәк. Ниңә шул тиклем ашығаһығыҙ? Мин хисап машинаһы түгел бит. Кабатлағыҙ. *(Яҙа.)* Ниндәй тупаҫтар! *(Тағы йыя.)* Арыкбаев квартирымы? Сәскә магазины? Кәрәкмәй. Был ни эш? Телефон номеры йыйыу ҙа онотолоп бара, ахыры. *(Яңынан йыя.)* Арыкбаев квартирымы? Кем? Атайыңды сакырып килтер әле, егет кеше. Сакыр. Һуңынан кырынып бөтөр. *(Көтә.)* Һаумы, Арыкбаев? Иртәгә хисап көнө икәнен беләһеңдер бит. Һин бер нисә минутка ғына миңә инеп сығыр инең. Цифрҙар кәрәкмәй. Үҙең кәрәк. Юк, горкомда түгел, өйҙә... Эйе. Мин быйыл дачала кышлайым. Шулай ит әле. Кәңәшеп алырға кәрәк. Куркма. Эшләмәгән кеше генә хаталанмай. Ә беҙ һинең менән эш кешеләре. Ярай, килгәс һөйләшербеҙ. *(Трубканы куя.)* Әүәлерәк йылдарҙа күпме оран һала торғайным, берәү ҙә аҙағын тикшереп маташмай ине. Иң мөһиме — һыуға беренсе башлап һикереү. Был — минең вазифам. Аръякка мин йөҙөп сыкмаһам, башкалар йөҙөп сығыр. Был бәләкәй эшме ни? Хәҙер әйтәләр: «Һикергәнһең икән, йөҙөп сык!» — тиҙәр. Ә мин бөтөнләй йөҙә лә белмәһәм? Белмәһәң, бат, тонсок! Йәки камышка тотоноп, кире ярға үрмәлә. *(Көрһөнә.)* Үрмәләп ятабыҙ түгелме һуң инде беҙ һинең менән, Дүсмәт Ярлыкапов. *(Үрмәләгән шикелле, акрын ғына бүлмәһенә инеп китә.)*

Низам килтергән портретты күтәреп, Вәзир сыға.

Вәзир *(ирония менән)*. Сәнғәт хазинаһын, харам нәмә шикелле, йәшереп ҡуйғандар. Тимәк, бында йәшерен сер, хатта... хыянат булыуы мөмкин. Ә Дилбәр ниндәй матур, суҡынған бисә. *(Һоҡланып ҡарап тора.)* Әллә үҙенән дә матурыраҡ инде? Был рәсемде кем, ҡайҙа, ҡасан, ниңә яһаған? Миңә бына шуны асыҡларға кәрәк. Кем яһауын төшөнөү ҡыйын түгел. Главное — ҡасан һәм ниңә? Маҡсат? Маҡсат? *(Әйләндереп, үҙ алдына уҡый.)* Таныш йыр! Тимәк, маҡсат асыҡ. Бәлки, ул маҡсат инде күптән артта ҡалғандыр. Бәлки, уның һыуһыны әллә ҡасан ҡанғандыр. «Һыуҙарға һыуһап йөрөнөм...» Бахыр! Ә кем бахыр? Бәлки, мин үҙем бер бахырмындыр? Кем бахыр икәнен хәҙер асыҡлайбыҙ. Дилбәр, Дилбәр! Сыҡ әле бында!

Дилбәр *(сыға. Алъяпҡыс бәйләгән, ҡулдары онло)*. Нимә бар, Вәзир?

Вәзир. Бына, тәмәке эҙләй торғас, шкаф артынан ниндәй гүзәл нәмә таптым. Күргәс, хатта тартҡы килеү баҫылды.

Дилбәр. Нимәһе гүзәл булһын инде, Вәзир?

Вәзир. Гүзәл. Кемдең ҡулы барып, шунда, туҙан эсенә ташлаған?

Дилбәр. Ташланған, күрәһең.

Вәзир *(киҫкен)*. Миңә точно белергә кәрәк. Ҡасан, ҡайҙа һәм ниңә яһаны уны?

Дилбәр. Бына, тора торғас, бер допрос.

Вәзир. Мин яуап көтәм, Дилбәр. Ҡасан?

Дилбәр. Ҡуй, Вәзир, тилермә, һинән барыбер Отелло сыҡмаҫ. Ул ҡом ғәрәбе булған һәм, өҫтәүенә, Дездемонаны аҡылынан шашып яратҡан. *(Көлә.)*

Вәзир. Минең тилерергә уйлағаным да юҡ. Мин белергә теләйем. Был рәсем уның хыялы аша ҡасан уҙған?

Дилбәр *(тыныс)*. Бик белгең килһә, әйтәйем... Көҙ көнө Низам килтергәйне. Йәшлек, балалыҡ иҫтәлеге итеп...

Вәзир. Аяҡ аҫтында уралды бит шул мәжнүн!

Дилбәр. Аяҡ аҫтында уралһа, мәжнүн дә булмаҫ ине. Аяҡ аҫтында уралыусылар маҡсаттарына тиҙерәк ирешәләр улар. Һин уны яҡшы беләһең.

Вәзир. Артыңдан бер тотам ҡалмай яныып йөрөүемде һин аяҡ аҫтында уралыу тип аңлағанһың икән. Быныһын да белдек.

Дилбәр. Белһәң, белерһең инде. Ә Низам хаҡында мәсхәрәләп һөйләмә. Һин яҡшы беләһең, ул минең балалыҡ дуҫым. Ғүмер буйы миңә йәнен ярып бирергә әҙер булды ул. *(Көрһөнә.)* Әле лә иҫемдә, һуғыш осоро ине. Сатлама һыуыҡ көндө өйҙә яңғыҙ ултырам. Түбәһе күккә тейерҙәй булып шатланып, Низам килеп керҙе. Үҙе дер-дер ҡалтырай. Күстәнәс килтергән. Шкаф тартмаһын аҡтарғанда, ҡасандыр кәнфит һалынған ҡағыҙ ҡап тапҡан. Ялап ҡараһа, кәнфит тәме килә икән. Табышын тотҡан да беҙгә йүгергән. Ҡаптың яртыһынан ҙурырағын миңә йыртып бирҙе. Икәүләшеп ялаҡ. Бына кем ул, Низам?!

Вәзир *(портреттың артын әйләндерә)*. Бына кем ул, Низам?! Уҡы!

Дилбәр *(тулҡынланып, рәхәтләнеп уҡый)*.

> Һыуҙарға һыуһап йөрөнөм,
> Үҙем һыу буйҙарында.
> Ғүмеремдең буйҙарына
> Булырһың уйҙарымда.

Юҡ, Вәзир. Низам аяҡ аҫтында уралмай. Ошо арала ғына уның картиналары ҡуйылған күргәҙмәлә булдым. Ижады менән ниндәй юғары ул. Мин, муйынымды һуҙып, уның картиналарын ҡарап йөрөнөм. Ҡанатлы сәнғәт! Шулай булғас, кемдең кем аяғы аҫтында уралыуын әйтеүе ҡыйын.

Вәзир. Нимәгәлер бик *(пауза)* үкенәһең, ахыры, Дилбәр.

Дилбәр. Үкенергә мәжбүр итмәҫкә тырыш, Вәзир... Зинһар! Бөтәһе лә һинең иркеңдә бит.

Вәзир. Улай үкенер булғас, элегерәк уйларға кәрәк ине. Мәҫәлән, бынан ете ай элек.

Дилбәр. Һин ул саҡта уйларға түгел, тын алырға ла ирек бирмәнең. Низам 23 йәшкә тиклем өндәшмәне.

һин бер ай эсендә башымды әйләндерҙең. Һин Гейне, Есенин шиғырҙарын уҡының, Бетховен, Мусоргский, Репин, Пикассоларға ғашиҡ булыуыңды һөйләнең. Ә Низам 23 йәшкә тиклем өндәшмәне. Һин мәңгелеккә миңә ғашиҡ булғаныңды, бөтә донъяла тик мине генә күреүеңде, ай яҡтыһында ла, таң нурында ла, ямғыр тамсыһында ла минең йәнемдең өлөшөн һиҙеүеңде һөйләнең. Ниндәй матур һөйләй инең һин ул көндәрҙә. Ә Низам 23 йәшкә тиклем өндәшмәне. Мин, мөхәббәт шундай матур телле булалыр, тип уйланым. Һәм әле лә уйлайым. Мөхәббәттең теле матур, татлы, ялғанһыҙ булырға тейеш. Йырланмаған йыр — йыр түгел, әйтелмәгән мөхәббәт — мөхәббәт түгел. Бына шуға ла мин һине осратҡанға тиклем Низамды яратып өлгөрә алманым.

Вәзир. Шулай булғас, миңә ни үпкәң бар? Мин һине йәберләмәйем, хыянат итмәйем.

Дилбәр. Мөхәббәт тоғролоҡло булырға тейеш. Ләкин, Вәзир, мөхәббәткә тоғролоҡ ҡына етмәй. Бигерәк тиҙ күнектең һин миңә. Хатта яңы кейемгә лә оҙағыраҡ күнегәләр. Шуға күрә һинең көнләшкән булып ҡыланыуың көлкө генә.

Вәзир. Кемгә көлкө, кемгә әрнеү.

Дилбәр. Миңә — көлкө.

Вәзир. Миңә — әрнеү. *(Ҡоро.)* Барыбер мин белергә тейешмен. Был рәсем ҡасан, ҡайҙа, ниндәй ағас янында яһалған? Миңә тынысланырға кәрәк.

Дилбәр. Тынyслан. Бынан дүрт йыл элек яр буйындағы «һарай»ҙа яһай башлағайны. Ҡалғанын яттан эшләп бөтөргән, күрәһең.

Вәзир. Ялған. Ышанмайым. Яттан был тиклем яҡшы эшләргә ул гений түгел дә.

Дилбәр. Бәлки, генийҙыр.

Вәзир. Ышанмайым! Бына еҫкәп ҡара, хатта буяу еҫе сығып тора. *(Танауын тартып еҫкәнә.)* Дүрт йылдан һуң шундай еҫ сыҡмай ул.

Дилбәр. Үҙең генә еҫкә инде.

Вәзир. Ҡайҙа, ҡасан осраштығыҙ?

Дилбәр. Туҡта мине мәсхәрәләүҙән, Вәзир. Етер! *(Китә башлай.)*

Вәзир. Сабыр ит! Мин бөтәһен дә белергә тейешмен.

Дилбәр. Өйләнешкәндән һуң, Низамды бер тапҡыр ғына, ошо портретты килтергән сағында ғына, күрҙем.

Вәзир. Ышанмайым!

Дилбәр. Ышанмаған, һорашма.

Вәзир. Ә һин ышандырырлыҡ итеп һөйлә.

Дилбәр. Рәсемгә яҡшылабыраҡ ҡара. Минең студентка икәнлегемде кейгән күлдәгемә тиклем әйтеп тора бит. Ул күлдәк әллә ҡасан туҙҙы инде.

Вәзир. Эйе, күлдәгең хәҙерге түгел. Ләкин мин дә бер ҡатлы түгел. Күҙ буяр өсөн, ул һүрәтсе теләһә ниндәй күлдәк кейҙерә, теләһә ниндәй яулыҡ бәйләтә алмаймы ни?

Дилбәр. Алмай.

Вәзир. Бына алған бит. Ул мәжнүн һиңә был күлдәкте кейҙергәнгә тиклем уйы менән, хыялы менән һине аҡрын ғына, ашыҡмай ғына сисендергәндер, унан танһығы ҡанғансы ҡарап торғандыр, шунан һуң ғына был сепрәкте буяп ҡуйғандыр. Ниндәй хәйләкәр, тәмле тамаҡ!

Дилбәр. Вәзир, Вәзир! Тыйыл! Һин шул тиклем үк оятһыҙ кешеме ни, күңелең шул тиклем үк боҙоҡмо ни һинең, Вәзир! Ниндәй оят! Ниндәй хурлыҡ! *(Ҡысҡырып илап ебәрә.)*

Вәзир. Ила, ила. Ә мин һинең күҙ йәштәреңә ышанмайым. Бер нәмәгә лә ышанмайым мин. Хатта үҙемә лә ышанмайым. *(Портретты күтәреп, диван башына һуғып йыртмаҡсы итә, унан йоҙроғо менән төртөп тишә.)* Мә һиңә, бөйөк сәнғәттең гүзәл хазинаһы!

Ишектән Рәхимә килеп инә. Ҡатып ҡала. Вәзирҙең портретты тишеүен күреп, ҡысҡырып ебәрә.

Рәхимә. Ай! Ҡулығыҙ ҡороһон һеҙҙең, Вәзир ағай! *(Башын сайҡап тора.)* Бына һиңә идеа-ал!

Вәзир үҙ бүлмәһенә инеп китә. Ишек яртылаш асыҡ ҡала, Рәхимә аптырап тора ла ҡулындағы ике пачка «Казбек»ты берәм-берәм Вәзир бүлмәһенә ырғыта.

Мә, мә! Сдачаһы юҡ! *(Йүгереп барып, Дилбәрҙе ҡосаҡлай.)*

Тауышҡа Дүсмәт сығып, үҙ ишеге төбөнә баҫа. Мәстүрә кухня ишеге төбөндә туҡтай. Дилбәр үкһеп илай. Бик шат ҡиәфәт менән Гөлбикә инә.

Гөлбикә. Тышта әйләнеп-әйләнеп шундай матур күбәләк ҡар яуа. Ә һеҙ бөтәгеҙ ҙә өйҙә. *(Өйҙәге хәлде күреп, ҡапыл күңелһеҙләнә.)* Һаумыһығыҙ!

Мәстүрә. Һаумы, Гөлбикә.

Дүсмәт баш ҡаға ла өндәшмәй үҙ бүлмәһенә инеп китә.

Гөлбикә. Үҙҙәре юлға йыйыналар. Үҙҙәре, мәйет сыҡҡан өйҙәге шикелле, күңелһеҙҙәр. Дилбәркәй, ни булды һиңә?

Дилбәр. Һорашма, Гөлбикә. *(Кухняға сыға.)*

Гөлбикә. Бына теге кофтаны төҙәтеп килтергәйнем. Гел ваҡытһыҙ саҡҡа тура киләм, Мәстүрә апай.

Мәстүрә. Артыҡ нәмә юҡ, Гөлбикә, былай ғына. Донъя бит.

Гөлбикә. Донъя күңелле булырға тейеш ул.

Мәстүрә. Тейеш тә бит.

Гөлбикә *(әйберҙәргә ҡарап)*. Әллә ике айлап йыйынаһығыҙ инде?

Мәстүрә. Булһа ла булыр. Ағайынды һаман ебәрмәй торалар. Яҡытты инде. Юлға бер йыйынғас, күтәрелеп сыҡ та кит икән ул.

Гөлбикә. Эйе шул. Ҡорҙашовтарҙың институтҡа эләкмәгән теге малайы Северный полюс — четыреғамы әллә Себергәме — икеһенең береһенә инде, тәки сығып киткән бит. Инәһе зар илап ултыра.

Мәстүрә. Бала бит...

Гөлбикә. Ярай, Мәстүрә апай, улайһа, мин ҡуҙғалайым. Кейем үлсәргә башҡаса килеп йөрөргә тура килмәҫ инде.

Мәстүрә. Бүтән ергә күсәһеңме ни?

Гөлбикә. Юҡ та.

Мәстүрә. Хәйер, беҙ үҙебеҙ китәбеҙ шул.

Гөлбикә. Ғәйепләп ҡалмағыҙ инде. Хуш, апай, тышта Тимерғазы көтөп тора.

Мәстүрә. Алып инеү кәрәк ине.

Гөлбикә. Һалҡында аҙыраҡ бейеһен әле. Ҡәҙеремде белә төшөр... Ул бахыр ни төн буйы көтөргә лә риза инде. Ярай, яңы ерҙә яңы шатлыҡтар менән йәшәгеҙ. *(Ҡул биреп күрешә. Сыға.)*

Мәстүрә. Ҡыҙыҡайҙың бәхете эсенә һыймай. Йәшлек, мөхәббәт, өмөт, ышаныс — бөтәһе лә бер күкрәккә йыйылған шул.

Ишектә звонок. Рәхимә йүгереп сығып аса. Арыҡбаев инә. Ул аяғына — бурки, өҫтөнә айыу доха кейгән. Башында — осло ҡаракүл бүрек.

Арыҡбаев. Иптәш Ярлыҡапов фатиры ошомо?

Рәхимә *(гәжәпләнеп, арты менән сигенә)*. Эйе, ошо.

Арыҡбаев. Ниңә күҙең тоҙҙай булды, ҡыҙым?

Рәхимә. Һеҙ ниндәй йыуанһығыҙ, ағай, оһо! Һеҙ, моғайын, көрәшсеһегеҙҙер әле.

Арыҡбаев. Хәтәр көрәшсе... Атайың өйҙәме?

Рәхимә. Атайым түгел, Дүсмәт ағай ул. *(Дүсмәттәр ишеген ҡаға.)* Ағай, көрәшсе килде, һеҙҙе һорай. *(Арыҡбаевҡа.)* Сисенә тороғоҙ.

Дүсмәт сыға. Ул яҡшы костюмдан. Галстук бәйләгән.

Дүсмәт. Рәхим ит, Арыҡбаев. Оҙаҡ эҙләргә тура килмәнеме? Һаумы? *(Күрешә.)*

Арыҡбаев. Таксиға ултырҙым да туп-тура килдем. Был тирәлә һеҙҙең мөрйәнән генә төтөн сыға. *(Сисенеп, кейемен элә.)*

Дүсмәт. Әйҙә, бына диванданмы, ултырғыстанмы, ҡайҙа теләйһең, шунан ултыр.

Арыҡбаев. Йыл әйләнәһенә дачниктар булырға уйлағанһығыҙ икән.

Дүсмәт. Шулай тура килде... Бар, Рәхимә, шунда ғына яһап, ике сынаяҡ сәй сығар.

Рәхимә. Лимон менәнме? Әллә һөтләпме?

Дүсмәт. Һиңә, Арыҡбаев?

Арыҡбаев. Мәшәҡәтләнмәгеҙ. Миңә ҡайһылай ҙа ярай. Һөтләп тә яраған.

Рәхимә сыға.

Дүсмәт. Хәл-әхүәлдәр нисегерәк? *(Йылмая.)*

Арыҡбаев. Дөрөҫөн генә әйткәндә, төн йоҡолары ҡасты, иптәш Ярлыҡапов. Ошо йәшкә етеп, күрәләтә был тиклем уңайһыҙ хәлдә ҡалғаным юҡ ине әле.

Рәхимә сәй сығара. Дүсмәткә лимонлы, Арыҡбаевҡа һөтлө.

Дүсмәт. Сәйенән етеш.

Арыҡбаев. Сәй күп эселә был арала, Дүсмәт Ҡорбанович. *(Көрһөнөп ҡуя.)*

Дүсмәт. Эйе, ышанысты аҡлай алманығыҙ. Ярышты өҙҙөгөҙ генә тиһәң, аҙ булыр. Бысаҡһыҙ һуйҙығыҙ һеҙ мине.

Арыҡбаев. Ул эш башланғансы уҡ өҙөлгәйне инде, Дүсмәт Ҡорбанович. Үҙ йөктәрен бер көй тартып барған аттарға һеҙ тағы ни саҡлы йөк өҫтәнегеҙ. Бер көй үтәлә килгән планды пыран-заран килтереп ташланығыҙ. Бара торғас, бына шул күтәртеү хәленә килеп еттек инде.

Дүсмәт *(йылмая)*. Мин бит уҫал ниәт менән эшләмәнем.

Арыҡбаев. Ниәт һәйбәт булғандыр ҙа бит, нәтижә яманыраҡ килеп сыҡты. Байтаҡ предприятиелар был кварталда дәүләт планын тултыра алманылар.

Дүсмәт. Сәбәпсе — хәҙер бер мин, тимәксеһегеҙме?

Арыҡбаев. Улай тиергә мин дә бит малай түгел. Директор. Бына ниндәй ҙур башым да бар. *(Йылмая.)* Һеҙ тик ана шул башты бутабыраҡ ебәрҙегеҙ.

Дүсмәт. Хәтерең дәме, Арыҡбаев, кәңәшмәлә ниндәйерәк телмәр һөйләп ебәргәйнең. Буталған баш улай оҫта һөйләй алмай ул. Оноткан булһаң, протоколын күрһәтергә мөмкин.

Арыҡбаев. Ғүмер ҙә һөйләй белмәгән кешегә ҡайҙан һүҙе табылған? Ғәжәп илһам килеп киткәйне шул саҡта. Хәҙер үкенеп бөтә алмайым. Кешенән оят. Хәрап иттегеҙ һеҙ мине, Дүсмәт Ҡорбанович.

Дүсмәт. Бәлки, балауыҙ һығып алырһығыҙ?

Арыҡбаев. Һығырһың да шул.

Кейенеп-яһанып, Вәзир сыға. Пальтоһын кейергә бара. Арыҡбаев менән баш ҡағып ҡына исәнләшә.

Дүсмәт. Вәзир, тороп тор әле. Бына ҡунаҡ та бар.

Вәзир. Мин барыбер араҡы эсмәйем бит.

Дүсмәт. Ахмаҡтарса шаярыуыңды ҡуй, Вәзир.

Вәзир. Минең ваҡытым юҡ, Дүсмәт Ҡорбанович. Иптәш Арыҡбаев мине кисерер, тип ышанам.

Дүсмәт. Һатыулашма. *(Йылмая.)*

Вәзир. Башым ауырта, кәйефем юҡ.

Дүсмәт *(ҡырҡа)*. Миңә һинең кәйефең кәрәкмәй, үҙең кәрәк. Ултыр.

Вәзир *(диванға барып ултыра)*. Ултырҙым. *(Тәмәке тоҡандыра.)*

Дүсмәт. Бына Арыҡбаев кәңәшләшергә килгән.

Арыҡбаев. Саҡырып килтергәс ни, Дүсмәт Ҡорбан...

Дүсмәт. Эш унда түгел. Килгәс, кәңәшләшергә кәрәк. Рәхимә! Сәйеңде яңырт.

Рәхимә инеп сыға. Ул Вәзиргә ҡарамай ҙа.

Йә, иртәгә беренсе яуапты һинән, башлап майҙан асҡан кешенән, һорарҙар. Әҙерләндеңме?

Арыҡбаев. Нимәһен әҙерләнеп тораһың инде. План өҙөлгән. Ярыш — буш ҡыуыҡ. «Ғәйеплемен. Язаһын бирегеҙ», — тиермен. Эш нисек булғанын баштан-аяҡ һөйләп бирермен. Обком үҙебеҙҙеке, тотоп ашамаҫтар әле.

Дүсмәт. Нимәһен баштан-аяҡ һөйләп бирергә уйлайһың?

Арыҡбаев. Һеҙҙең иң башта инструктор ебәреүегеҙ хаҡында.

Дүсмәт. Минең бер ниндәй ҙә инструктор ебәргәнем юҡ.

Арыҡбаев. Әллә тағы, ебәргән кешегеҙ үҙе шулай тигәйне... Унан үҙегеҙ мине саҡыртып килтерҙегеҙ. Мин, предприятиеның хәлен белгәнлектән, башта ҡарыштым, һуңынан күҙҙе йомдом да, һеҙ ҡушты тип, саң ҡағырға тотондом. Бына шул. Шулай ҙа, Дүсмәт Ҡорбанович, мин һеҙҙең маҡсатығыҙҙы аңлап еткермәнем.

Дүсмәт. Нимәһен аңламаның? Сиҙәм ерҙәрҙе, үҙем киткәнсе, тауар менән күмеп ташлау ине. *(Йыйылған*

*нәмәләргә күрһәтә.)* Барып сыҡманы. Ҡанатты ҡайырҙығыҙ.

Вәзир. Иртәгә «яҡшы маҡсат», «объектив сәбәп», «тыныштыҡ инде» тигән төбө тишек һүҙҙәр иғтибарға алынмаясаҡ, түрә иптәштәр. *(Һикереп тора.)* Һеҙ унда, Арыҡбаев иптәш, ауыҙығыҙҙа бутҡа бешермәгеҙ. Был шау-шыуҙың бөтә яуаплылығын өҫтөгөҙгә алығыҙ ҙа ҡуйығыҙ. Башҡаларҙы бутап маташмағыҙ.

Арыҡбаев *(гәжәпләнеп, һикереп тора)*. Күҙгә терәп алдаширғамы? Юҡ, мин уныһын булдыра алмайым.

Дүсмәт. Һин кешене улай ҡапыл өркөтөп ташлама әле, Вәзир. Уйлашайыҡ. Ҡайһылай яҡшыраҡ булыр?

Арыҡбаев. Дөрөҫлөк яҡшы булыр.

Вәзир. Бәләнән нисек итеп еңелерәк ҡотола алаһың, шул дөрөҫ тә, яҡшы ла булыр.

Дүсмәт. Ултырышығыҙ. Уйлашайыҡ. Әйтәйек, Арыҡбаев, һинеңсә, башлап мин хаталандым, ти, ә һеҙ күмәкләп минең хатама эйәрҙегеҙ, ти. Быға кем ышаныр тиһең? Берәү ҙә ышанмаҫ. Әгәр һеҙ түбәндән уйлап еткермәй шау-шыу күтәреп, мин шуға эйәргән булһам, уныһы икенсе мәсьәлә. Быға ышанырға мөмкин. Тимәк, мин положениены тәрән тикшереп ҡарамағанмын.

Арыҡбаев. Уныһы дөрөҫ. Һеҙ тикшереп тормағыҙ.

Дүсмәт *(йылмая)*. Йәнә уйлап ҡара, Арыҡбаев. Башлап хаталаныу кемгә нығыраҡ килешә: миңәме әллә һиңәме?

Арыҡбаев. Беребеҙгә лә килешмәй, Дүсмәт Ҡорбанович.

Дүсмәт. Дөрөҫ. Ләкин хаталыҡ эшләнгән бит инде. Шулай ҙа миңә, етәксе кешегә, нығыраҡ уңайһыҙ. Ә һин — хозяйственник, бәләкәй кеше. Бер хатаң артыҡ ни, бер хатаң кәм ни — ни айырмаһы бар?

Арыҡбаев. Бәләкәй булһаҡ та, беҙҙең эстә лә йән бар бит, Дүсмәт Ҡорбанович.

Вәзир. Һеҙҙән йән һораған кеше юҡ. Ҡурҡмағыҙ, йәнегеҙ эсегеҙҙә ҡалыр.

Дүсмәт. Иртәгәге кәңәшмәнән һуң донъя бөтһә, бәлки, бөгөн һөйләшеп тороуҙың кәрәге лә булмаҫ ине. Саҡ ҡына алға ла күҙ ташларға кәрәк. Әгәр кәңәштән сыҡмаһаң, ҙур уҡ булмаһаң да, хур уҡ та булмаҫһың.

Арыҡбаев. Шулай ҙа ҡатлы-ҡатлы кеше икәнһегеҙ, иптәш Ярлыҡапов, һеҙгә тарыма, тарыһаң, арыма...

Дүсмәт. Халыҡ алдында мин дә аҙыраҡ тәнҡитләрмен һине. Унһыҙ ярамай. Ләкин ысынға алма. Аңланыңмы?

Арыҡбаев. Эйе, байтаҡ нәмә аңланым. Йәнегеҙ шул тиклем үк ғәзиз булғас, ярай! Бөтә гонаһ, бөтә ғәйеп минеке! *(Һикереп тора.)* Мин бәләкәй кеше, түҙермен, барыһын да күтәрермен. Тыныс йоҡлағыҙ! Ҙур кешегә борсолорға ярамай. Ә мин тағы, артабанғы эште юлға һалыу тураһында фекерләшәбеҙ икән, тип килгән булдым. Иртәгә бит һорарҙар: «Йә, артабан ҡайһылайыраҡ итергә уйлайһығыҙ?» — тиерҙәр. Беҙ нимә тип яуап бирербеҙ шуға?

Дүсмәт. Уйлашайыҡ бына.

Арыҡбаев. Көйөнмәгеҙ, Дүсмәт Ҡорбанович, һеҙҙә дин ҡайғыһы түгел, көн ҡайғыһы. Тыныс йоҡлағыҙ! *(Кейенә.)*

Дүсмәт. Ҡалай ҡапыл ҡыҙып киттең, Арыҡбаев. Ултыр, хәҙер аш өлгөрә. Мәстүрә, ашығыҙ әҙерме?

Мәстүрә *(кухнянан)*. Саҡ ҡына көтөгөҙ!

Арыҡбаев. Рәхмәт. Был юлы аштан оло булырға тура килә. Көтә алмайым. Ҡабатлайым, тыныс йоҡлағыҙ. Арыҡбаев әйткәндән ҡайтмаç! *(Китә.)*

Дүсмәт. Ҡайһылай ҡапыл кәперәйеп китте. Әйтерһең, ҡорал күтәреп, иртәгә яу ҡырына китә. Быҙау!

Вәзир. Яу ҡырына китмәһә лә, торғаны менән наемщик инде! Элекке заманда бит бай малайҙары үҙҙәре өсөн һалдатҡа кеше яллап ебәргәндәр. Наемщик итеп. Наемщиктар хәтәр һөйләшкәндәр улар.

Дүсмәт. Урынлы-урынһыҙ һаман шаяраһың һин, Вәзир.

Вәзир. Был юлы шаярмайым, Дүсмәт Ҡорбанович. Һеҙҙең бер үҙегеҙгә ике наемщик булды — мин һәм Арыҡбаев! Шәп бит, ә?

Дүсмәт. Иçерекһең, тиһәм, эсмәй торған кешеһең. Нимә булды һиңә?

Вәзир. Япар ҡарт редактор булғандан бирле, эсем тышҡа әйләнде. Пәрей алмаштырҙы мине. *(Кейенә.)* Мин атайымдарға киттем. Улар бөгөн ат һуялар. Теләһәгеҙ, әйҙәгеҙ майлы ҡарта һоғонорға! *(Китә.)*

Дүсмәт *(ҡарап ҡала)*. Оятһыҙ! Кемдәр һинең менән арҡа терәп һөйләшәләр, ә? Быныһы бер хәл әле. Япары нисек теш ҡайрай икән? Газета полосаһына һалып, бөтә ил алдында ҡалай рәхәтләнеп сыбыҡлаясаҡ ул мине!.. Сыбыҡлаһын. Сыҙарбыҙ. *(Бүлмәһенә бара. Төйөнсөккә абына.)* Әлеге төйөнсөктәр! Шул ғаризаны яҙмаған булһам, аҡ һаҡаллы ҡарт булам икән. Йәнәһе, кешеләргә дәрт бирәм, ә үҙемә политический капитал туплайым. Тупланың түбәңә туҡмаҡты! *(Түбәһен һыйпап, үҙ бүлмәһенә инеп китә.)*

Рәхимә сыға. Сынаяҡтар йыя.

Рәхимә. Сәйҙе ҡабып та ҡарамағандар. Ниңә шулай форма өсөн генә кеше мәшәҡәтләйҙәр икән? Анау дәү ағайҙың күҙҙәре, беҙҙең күбенеп үлгән ҡола һыйыр күҙҙәре төҫлө, моңһоу ҡарайҙар. Күрәһең, ҡайғы-хәсрәте барҙыр. *(Кухняға сыға.)*

Дилбәр, уның артынан Мәстүрә, һуңыраҡ Рәхимә сыға.

Дилбәр. Биш минут эсендә тапап, иҙеп, бысраҡҡа бутап ташланы.

Мәстүрә. Тыныслан, Дилбәр, үтер әле. Аҡрынлап күнегергә, түҙергә өйрәнергә кәрәк.

Дилбәр. Нимәгә күнегергә? *(Ҡабатлап.)* Нимәгә күнегергә?

Мәстүрә. Тормоштоң әсеһенә лә, сөсөһөнә лә...

Дилбәр. Уныһына күнегергә мин риза. Ә бына һин мөхәббәт юҡлығын йәки уның ялған икәнлеген һиҙеп ҡалһаң, нимә эшләр инең?

Мәстүрә. Сабыр булырға тырыш.

Дилбәр. Тәүбә, тиген, апай. Һин нимә һөйләйһең?

Мәстүрә. Үҙ тормошомдо.

Дилбәр. Мин бөтәһенә лә күнәм. Әрләнеүгә, йәберләнеүгә, түбәнлек булһа ла, хатта туҡмалыуға ла түҙермен. Аслыҡҡа, яланғаслыҡҡа, һыуыҡҡа сыҙармын. Көнләшеүҙе, ғәйбәтте кисерергә көсөм етер. Ләкин мөхәббәт хаҡына. Ә инде мөхәббәт юҡлыҡҡа күнегә алмам. Сөнки шунан да ҙур фәҡирлек, меҫкенлек булыуы мөмкин түгел.

Мәстүрә. Ул тиклем өҙгөләнмә, Дилбәр. Бәлки, ысынлап та, яраталыр, бәлки, был көнләшеү ғәләмәте генәлер.

Дилбәр. Башта мин дә шулай уйларға тырыштым. Ләкин уның һуңғы һүҙҙәре, апай, бигерәк ҡот осҡос ине шул. Мин һинең күҙ йәштәреңә ышанмайым, бер нәмәгә лә, бер кемгә лә ышанмайым, тине. Әйт, зинһар, апай, ышаныуһыҙ мөхәббәт булыу мөмкинме?

Мәстүрә. Юҡ, мөмкин түгел.

Дилбәр. Ниңә һуң һин үҙең мине түҙергә, сыҙарға, күнегергә, көтөргә өгөтләйһең? Тағы бер ғүмерҙең заяға үтеүенән кемгә файҙа?

Мәстүрә. Аптырап әйтәм. Шулай уйларға күнеккән өсөн генә әйтәм.

Дилбәр. Кәрәкмәй, әйтмә, апай. Мөхәббәтһеҙ йәшәргә мин барыбер күнегә алмам. Улай йәшәү ҡоллоҡтан да яманыраҡ буласаҡ! Ете генә айҙы, ете генә айҙы кире ҡайтарып булһа икән; мин быуна, ап-аҡ ҡар өҫтөнән ялан аяҡ йүгереп, Ҡариҙел ярына барыр инем, апаҡайым! Әсәкәйем! *(Стена янында аунап ятҡан теге йыртыҡ рәсемде алып.)* «Мин килдем!» — тиер инем. *(Йөҙөн ҡаплап, диванға ауа. Тын ғына илай.)*

Рәхимә *(китабын тотоп килә)*. Илама, апай. Һин шундай матурһың, һәйбәтһең. Һинең кеүек кешеләр иламаҫҡа тейеш. Һин байрам көн кеүекһең, ә байрам көнгә болотло булыу килешмәй. Илама, апай, илама. *(Үҙенең күҙҙәренән йәш тәгәрәй. Китабын күкрәгенә ҡыҫып.)* Идеал һүҙен барыбер ҙур хәрефтән яҙырға кәрәк. Уның идеал икәне әллә ҡайҙан күренеп торорға тейеш!

*Шаршау*

## ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Ярлыҡаповтар дачаһы. Бөтә обстановка өсөнсө шаршауҙағыса. Ҡараңғы төшөп килә. Бүлмәлә бер кем дә юҡ. Мәстүрә — кухняла, Дилбәр — үҙ бүлмәһендә. Рәхимә йүгереп инә. Ул бик шат. Пальтоһын сисеп элә. Көҙгө янына килеп борғолана.

Рәхимә. Был йорт, ысынлап та, сәйер булып сыкты, хәс тә ҡунаҡ өйө. Берәү ҙә бында ғүмер буйы йәшәргә уйламай, бөгөн-иртәгә ҡайтып китергә йыйына төҫлө. Мин дә ултырма ҡыҙы ғына булдым. Тәү күргәндә, ошо көҙгөләр, өҫтәлдәр, дивандар нур сәсеп тора кеүек ине. Хәҙер әллә ниндәй бойоҡтар. Баштараҡ, ҡаты баҫып йөрөһәм, анау мылтыҡтар атылып китер, тип ҡурҡа торғайным, атылмағанын белгәс, хәҙер уларға ла күнегелде. Бында килеп инеүе лә күңелле булғайны, сығып китеүе лә күңелле. Нәмәләрҙе тиҙ генә йыйыштырырға ла, әйҙә! *(Кухняға инеп китә. Бер аҙҙан һуң таҡта сумаҙанын күтәреп сыға.)*

Уның артынан уҡ Мәстүрә сыға.

Мәстүрә. Ниңә ул тиклем ҡапыл ҡуҙғалырға булдың, Рәхимә? Бына инде, әллә берәй нәмәгә хәтерең ҡалдымы?

Рәхимә. Юҡ, апаҡайым, мин яҡшылыҡтан башҡа һис нәмә күрмәнем һеҙҙә.

Мәстүрә. Һуң, шулай булғас?

Рәхимә. Дөйөм ятаҡтан бөгөн генә бер урын бушаны. Мөслимә исемле ҡыҙ, һабағын төшөнә алмағас, ауылға ҡайтып китте. Тылҡыныҡ-тылҡыныҡ, файҙаһы булманы. Уның башы эшләмәй, апай.

Мәстүрә. Китһә ни? Һин беҙҙә ҡал. *(Ҡаушап уҡ төшә.)* Үҙеңә эйәләшеп бөткәс кенә, улай итмә инде.

Рәхимә *(нәмәләрен йыйыштыра)*. Бөтәһе өсөн дә рәхмәт, Мәстүрә апай, яҡшылығығыҙҙы үҫкәс тә онотмам. Минең үҙ тиңдәштәрем араһында булғым килә. Ебәрегеҙ мине!

Мәстүрә. Мин һине тотмайым, ҡыҙым. Дилбәр, Дилбәр! Рәхимә китә бит!

Дилбәр *(сыға)*. Ҡайҙа китәһең, Рәхимә?

Рәхимә. Ятаҡта урын бушаны, апай.

Мәстүрә. Бер ҙә булмаһа, иртәгә китер инең.

Рәхимә. Йә тағы башҡа кешене кертеп ҡуйырҙар, анау саҡтағы кеүек...

Дилбәр. Беҙҙә еләттеләме ни шулай?

Рәхимә. Әллә инде, Дилбәр апай. Һеҙҙең өйҙә ҡаты баҫып йөрөп булмай. Нимәлер бына-бына емере-

ләргә, ҡолап төшөргә торған шикелле. Ә тегендә бөтәһе лә үҙем кеүектәр.

Дилбәр *(башынан һыйпап)*. Аҡыллым минең.

Рәхимә. Мин һеҙгә аҙна һайын килеп йөрөрмөн, һағынып китһәм, аҙнаһына ике тапҡыр ҙа килермен, йәме, апай?

Мәстүрә. Сабыр ит әле саҡ ҡына. *(Үҙҙәренең бүлмәһенә инә.)*

Дилбәр. Һағынһаң да, кил, асығып китһәң дә, кил!

Рәхимә. Мин бында иркәгә өйрәнеп бөттөм. Асығыу тигән нәмәне бөтөнләй онотоп барам. Хәйер, иҫкә тиҙ төшөр ҙә ул. Һеҙҙе мин мәңге лә, мәңге лә онотасаҡ түгелмен.

Мәстүрә *(бер косынка алып сыға)*. Бынау косынка, Рәхимә, моғайын, килешер һиңә. Әллә ҡасан үҙеңә бүләк итәйем тигәйнем. Йәй көнө яндырып бәйләп йөрөрһөң.

Дилбәр үҙ бүлмәһенә инеп китә.

Рәхимә. Ҡуй, кәрәкмәй.

Мәстүрә. Минең төҫөм итеп тоторһоң. Бүләкте улай кире ҡағырға ярамай. Юҡһа мин үпкәләрмен.

Рәхимә *(шатланып)*. Рәхмәт, Мәстүрә апай! *(Башына бөркәнеп, көҙгө эргәһенә бара.)* Ҡайһылай килешеп тора.

Дилбәр *(бер ебәк кофта алып сыға)*. Ә быныһы минең төҫөм булыр.

Рәхимә. Был тиклем бүләкте алырға минең ҡулым бармай, Дилбәр апай. Һеҙгә минең ни яҡшылығым тейгәне бар һуң?

Дилбәр. Кешеләргә һинең яҡшылығың тейер көнөң алда әле. Яҡшылығың бик күп тейәсәк һинең.

Рәхимә. Ул саҡта, бәлки, уңайһыҙ ҙа булмаҫ ине.

Дилбәр. Рәхимә! Апайыңдың хәтерен ҡалдырырға уйлайһыңмы ни шулай?

Рәхимә *(кофтаны алып, алдына ҡуя)*. Ни тип әйтергә лә белмәйем инде.

Дилбәр. Әйтмә лә.

Мәстүрә, Дилбәр йыйынырға булышалар. Сумаҙан һәм бер төйөнсөк йыйыла.

Бына ниндәй бай кәләш булдың. Ике күтәрем әйберең йыйылды.

Рәхимә. Улай тимә, Дилбәр апай, оялдырта.

Дилбәр. Ҡунаҡҡа килгәндә, иптәштәреңде лә алып кил. *(Йомшарып.)* Әллә китмәйһеңме, Рәхимә? Беҙ бит был өйҙә Вәзир ағайың менән икәүҙән-икәү генә тороп ҡаласаҡбыҙ.

Рәхимә. Китергә булғас, китәм инде, апай. Тик бына ҡапыл ғына ҡыйын булып китте. Илағы ла килә *(сумаҙанына лып итеп ултырып, илап ебәрә)*.

Дилбәр. Киткәндә, улай илап китмә инде.

Рәхимә. Бер ҙә иламаҫ инем, һеҙҙең икегеҙҙе ҡыҙғанам. Минән башҡа интегеп бөтмәһәгеҙ ярай ҙа...

Мәстүрә. Һинһеҙ бик күңелһеҙ булыр беҙгә, балаҡай. Һин бит һайрап торған ҡош инең. Ярай инде, әйҙә, иркеңдә, үҙең теләгән ерҙә һайра!

Рәхимә *(үҙенә.)* Унда мине көтөп тора...

Дилбәр. Ҡайҙа?

Рәхимә. Ҡойо тирәләп бейеп йөрөй.

Мәстүрә. Кем һуң ул? Ниңә саҡырмайһың?

Рәхимә. Беҙҙең ауылдыҡы. Исмәғил исемле. Элек бергә уҡығайныҡ, әле икебеҙ ике техникумда. Йыуаш ул. Сумаҙан күтәрешергә килде.

Мәстүрә. Ни тигән ғәҙәт был? Бөтәһе лә егеттәрен, мосафир таяғы шикелле, ишек артында ҡалдырып керәләр.

Дилбәр *(көрһөнөп)*. Ысын мөхәббәт, бәлки, шундай оялсан булалыр, ә, апай?

Мәстүрә. Онотолған инде.

Дилбәр. Хәҙер үк саҡыр үҙен, Рәхимә.

Рәхимә. Саҡырһаң да, инмәҫ. Ояла ул.

Ишекте киң асып, Исмәғил килеп инә.

Исмәғил *(уҡыусы малайҙарса бүркен һалып)*. Һаумыһығыҙ!

Рәхимә. Исмәғил!

Дилбәр. Һаумы, Исмәғил! Әйҙә, уҙ!

Исмәғил. Уҙып тормайым инде. Юғиһә ҡараңғы төшә. Әйҙә, Рәхимә! *(Бер урында тапана. Беренсе шаршауҙағы Низамға оҡшабыраҡ тора.)*

Рәхимә *(кейенә)*. Инде ғәйепләп ҡалмағыҙ!

Дилбәр. Телгә бөткән! Йә, хуш, бәхетле бул, туғанҡайым.

Мәстүрә *(ҡосаҡлай)*. Иҫеңә төшкән һайын йүгер ҙә кил!

Рәхимә *(илауҙан саҡ тыйылып)*. Ярай, апай, иҫәнһау булығыҙ. Исмәғил! Сумаҙанды уң ҡулыңа, төйөнсөктө һул ҡулыңа тот. *(Үҙе китаптарын ала.)*

Исмәғил *(нәмәләрҙе күтәрә)*. Хушығыҙ. Иҫән булып тороғоҙ.

Мәстүрә. Һау булығыҙ.

Дилбәр. Икәүләп килегеҙ.

Исмәғил. Беҙ хәҙер берәм-һәрәм йөрөмәбеҙҙер инде.

Рәхимә. Әйҙә, Исмәғил. *(Китәләр.)*

Оҙаҡ пауза.

Дилбәр *(тәҙрәгә ҡарап тора)*. Күреп кенә ҡалдыҡ күбәләкте — бер тәҙрәнән осоп керҙе лә икенсе тәҙрәнән осоп та сыҡты. Бәхетле булырмы-юҡмы был бала, белмәйем, ләкин аңлаған кеше өсөн ул үҙе бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәхет буласаҡ.

Мәстүрә *(ултыра)*. Ниндәй яман тынлыҡ.

Дилбәр. Башын түбән эйеп, ағайым ҡайтып килә. Саҡ-саҡ атлай. Әллә ауырынымы икән?

Мәстүрә *(тәҙрәгә килә)*. Күрәһең, бер-бер хәл булғандыр.

Дүсмәт инә.

Дүсмәт. Рәхимә киттеме ни?

Мәстүрә. Ятаҡҡа күсте.

Дүсмәт. Ул китте, ә беҙ килеп еттек. Хәҙер атты туғарырға, йөктө бушатырға мөмкин. *(Әсе йылмая.)*

Мәстүрә. Һиңә ни булды, Дүсмәт, әллә ауырыйһыңмы?

Дүсмәт *(сисенә)*. Ауырымайым.

Мәстүрә. Ниндәйҙер ат, ниндәйҙер йөк хаҡында һөйләйһең?

Дүсмәт. Дүсмәт Ярлыҡаповты һөйрәп йөрөткән атты әйтәм: тамам аҡһаны, аяҡтан яҙҙы.

Дилбәр *(аптырап)*. Йомаҡ тиһәң, йомаҡ түгел, әкиәт тиһәң, әкиәт түгел. Нимә һөйләйһегеҙ һеҙ? Ни булды һиңә, ағай?

Дүсмәт. Артыҡ бер нәмә лә юҡ, Дилбәр. Ана, почта йәшнигендә газеталар күренә.

Дилбәр. Ярар, ағай. *(Шәл бөркәнеп сыға башлай.)*

Мәстүрә. Дүсмәт, Дилбәр бала түгел. Унан йәшереүҙән генә яман нәмә яҡшыға әйләнмәç. Тураһын әйт, ни булды?

Дүсмәт. Бөтәһе лә емерелде, пыран-заран килде.

Мәстүрә. Башта уҡ күңелемә ниндәйҙер шом кергәйне. Юҡҡа ғына булмаған икән. Барыр булғас, башҡалар кеүек, тауыш-тынһыҙ кит тә бар ине. Ә һин, һөрән һалып, бүтәндәргә юл күрһәтәһең, имеш. Күрһәтелгән юлдан күндәм генә атлаһаҡ, беҙгә шул еткән ине.

Дүсмәт *(асыуланып)*. Мине алдашыуҙа фаш иттеләр инде. Һиңә эш ҡалманы. Был нәмәләреңде кире һүт! *(Төйөнсөктәргә тибә.)* Кире тарат! Күҙ көйөгө булып ятмаһындар.

Мәстүрә. Кире уйланыңмы ни?

Дүсмәт. Кире уйланылар. Ғаризамды кире ҡайтарҙылар. Бөтәһе лә кире, кире, кире...

Дилбәр. Һин ни һөйләйһең, ағай?..

Мәстүрә. Хаҡ һүҙ һөйләй ул... Үҙеңде, беҙҙе, кешеләрҙе алдау ниңә кәрәк булды һиңә, Дүсмәт?

Дүсмәт. Минең маҡсатымдың ҙурлығын, минең миссиямдың мәғәнәһен аңламанылар, шуға күрә мин алдашырға мәжбүр булдым.

Мәстүрә *(төйөнсөктәргә, мылтыҡҡа иларҙай булып күрһәтә)*. Ә былар ниңә кәрәк ине һуң? Былар?

Дүсмәт. Ебәреп ҡуйыуҙары ла ихтимал ине...

Дилбәр. Һис нәмә аңламайым. Бәлки, был өн түгел, төштөр! Бәлки, яман һаташыуҙыр был? Уянығыҙ, тиҙерәк уянығыҙ!

Ишек шаҡыйҙар. Тағы шаҡыйҙар. Япар инә.

Япар. Әллә бөтәгеҙ ҙә мәрткә киттеме?

Дүсмәт. Бәлки, өйгә ингәс, сәләм бирерһең.

Япар. Һаумы? Һаумы, Мәстүрә? Һаумы, Дилбәр ҡыҙым? *(Өсөһө менән дә күрешә.)*

Дүсмәт. Яуап алырға килдеңме? Ләкин шундай ҡағиҙә бар: ауырыу булһа, хатта енәйәтсенән дә яуап алмайҙар.

Япар. Семтешмә. Барыбер миңә еткерә алмаҫһың.

Дүсмәт. Ултыр.

Япар. Ултырайыҡ. Йүгереп ҡуян ҡыуғандар, ултырып аҡыл йыйғандар боронғолар.

Шул арала Дилбәр кухняға инә.

Дилбәр, беҙҙең йәшерен серҙәребеҙ юҡ.

Дилбәр. Бөгөн көн буйы башым сатнай, Япар ағай. *(Китә.)*

Мәстүрә. Мин сәй ҡарайым.

Япар. Һин ҡал әле, Мәстүрә. Тыңлап булһа ла ултыр.

Дүсмәт. Хуш. Нимәлер һуҙаһың.

Япар. Һин тырпайырға торма әле, Дүсмәт. Мин һинең менән кәңәшләшергә, күҙгә күҙ ҡарап һөйләшергә килдем.

Дүсмәт. Рәхмәт. Нисек итеп кәңәшмәлә өндәшмәй түҙеп ҡала алдың? Шуға аптырайым.

Япар. Асыуымды әйтеп бирерлек һүҙ таба алманым. Шуға өндәшмәнем.

Дүсмәт. Уның ҡарауы, һинең сотруднигың фашлау телмәрен оҫта һөйләне.

Япар. Вәзир Ҡәнзәфәров бөгөндән башлап беҙҙә эшләмәйәсәк...

Дүсмәт. Шуның менән һин мине йыуатмаҡсы булаһыңмы?

Япар. Ҡара әле, Дүсмәт, беҙ бит һинең менән берберебеҙҙе утыҙ йылға яҡын беләбеҙ. Күҙ бәйләш уйнап тормайыҡ.

Дүсмәт. Һин үҙең бит нимәлер уратып маташаһың.

Япар. Бөгөнгө кәңәшмә һинең ауылға китмәҫ өсөн төрлө әкәмәттәр ҡороуыңды йәки ялған авторитет артынан ҡыуыуыңды ғына түгел, иң насары — һинең

ошондай түбәнлеккә һәләтле булыуыңды күрһәтте. Иҫкә төшһә, ҡоҫҡо килә. Тфү!

Дүсмәт. Күҙгә күҙ ҡарап һөйләшергә түгел, йөҙгә төкөрөргә килгәнһең икән һин, элекке дуҫ Япар! Быныһына ла сыҙарбыҙ.

Япар. Мин татлы һөйләй белмәнем. Ғәфү ит. Һин бөгөн миңә помой ямына төшкән бесәй балаһы кеүек күренәһең. Ләкин бит иртәгә лә көн бөтмәй. Һиңә кипшенергә, таҙарынырға кәрәк.

Дүсмәт *(йылмайырға тырышып)*. Һинең рәхимең менән...

Япар. Бүлдермә! Юғиһә мин дулай башлармын. *(Тороп, пальто кеҫәһенән газета полосаһы ала.)* Бына иртәгәге газетала әлеге кәңәшмә һәм һинең мажаралары тураһында ҙур информация бирелгән. Газета әле баҫылмай. Ҡапыл уйланым да һиңә килдем. Һинең фекереңде белгем килде.

Дүсмәт. Минең фекеремдең кемгә кәрәге бар?

Япар. Миңә кәрәк. Мә, ашыҡмай ғына уҡып сыҡ.

Дүсмәт полосаны ала, ҡаушауы күренеп тора. Унан уҡып сыға. Япар уны күҙәтә.

Мәстүрә. Анау саҡта, Япар ағай, мин бөтөнләй аптырап ҡалғайным.

Япар. Ҡуй, Мәстүрә, үткән эштән төш яҡшы, тиҙәр.

Мәстүрә. Үткән эш кенә булһа ине... Һеҙ киткәс, мин байтаҡ нәмә тураһында уйланым.

Дүсмәт *(тыныс)*. Яла. Клевета.

Япар *(ҡапыл аптырап)*. Ялғанмы?

Дүсмәт. Ялған түгел, яла, клевета.

Япар. Кемгә?

Дүсмәт. Әлбиттә, минең шәхесемә түгел.

Япар. Кемгә?

Дүсмәт *(тыныс, бер аҙ тантаналы)*. Партия работнигына, тимәк, партияға, тимәк, Совет власына.

Япар *(тағы ла гәжәпләнеберәк)*. Ә? *(Газетаны алып, текләп ҡарай.)*

Дүсмәт. Был русса подкоп тип атала.

Япар. Мә, Мәстүрә, һин дә уҡы! *(Газетаны бирә. Мәстүрә уҡый башлай. Дүсмәткә.)* Ә башҡортса ҡайһылай?

Дүсмәт. Подкоп, йәғни партияның тамырына балта сабырға маташыу.

Япар. Тағы нимә?

Дүсмәт. Мин бары шуны ғына аңланым.

Япар *(асыуланып һикереп тора)*. Тимәк, һин, Ҡорбан улы Дүсмәт Ярлыҡапов, үҙеңде партияға, Совет власына һәм беҙҙең стройға тиңләйһең. Тимәк, Дүсмәткә тел тейҙереү — партияға тел тейҙереү менән бер булып сыға. Ауыҙың ни һөйләгәнде ҡолағың аҙ ғына ишетәме һуң һинең?

Дүсмәт. Мин бөтәһенән элек Дүсмәт Ярлыҡапов тигән шәхес түгел, ә партия ҡала комитетының икенсе секретары. Рәхим итеп, һүҙҙе шунан башлайыҡ.

Япар. Һин бейек артлы ултырғыстың артына боҫмаҡсы булаһыңмы, Дүсмәт дуҫ? Яңы хәйлә түгел.

Дүсмәт. Мин дә алйот түгел, ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлайым. Һин Дүсмәт Ярлыҡапов яманатын түгел, горком яманатын һатырға теләйһең. Үҙең секретары булырға йөрөп тә, секретары була алмаған горкомдың яманатын, Япар Юлдашев!

Япар. Былай булғас, аңлаштыҡ, буғай. Хәҙер китергә лә мөмкин. *(Китә башлай.)*

Мәстүрә. Туҡтағыҙ, Япар ағай! Бер нәмә лә аңлашманыҡ әле.

Дүсмәт *(ҡырҡа)*. Миңә адвокат кәрәкмәй, Мәстүрә.

Мәстүрә. Һиңә кәрәкмәһә, миңә кәрәк. Ултырығыҙ әле, Япар ағай!

Дүсмәт. Һинең ҡайғың түгел.

Мәстүрә. Һинең ҡайғың — минең ҡайғым! Минең бик күптән инде үҙемдең ҡайғым да, үҙемдең шатлығым да булғаны юҡ.

Дүсмәт. Туҡта, Мәстүрә!

Япар. Һөйләһен.

Мәстүрә. Бәлки, мин аңлап та еткермәйемдер, Дүсмәт. Ләкин һин нахаҡты һөйләйһең — бында бер төрлө лә яла яғыу юҡ. Һин тиҫкәреләнеп кенә шулай тиһең. Беҙ бит бергә үҫкән, тормош юлын бергә башлаған кешеләр! Тыныс ҡына аңлашайыҡ.

Дүсмәт. Һеҙ икәүләп минән нимә талап итәһегеҙ? Теҙләнергә, үкереп иларға, ер үбергә бойораһығыҙмы?

Япар. Артыңа әйләнеп ҡарап, аҙ ғына һабаҡ алһаң, шул еткән.

Дүсмәт. Һеҙҙеңсә, минең бөтә юлым енәйәт.

Япар. Енәйәт түгел. Һинең артыңда бушлыҡ. Ҡот осҡос бушлыҡ. Һин — партия работнигы. Һин йәнең, тәнең, бөтә барлығың менән партияныҡы, тимәк, кешеләрҙеке, булырға тейеш инең. Ә һин үҙеңдеке генә булғанһың икән, бары үҙеңдеке генә. Бына мин шуны аңланым. Ышаныс, тоғролоҡ, маҡсат, коммунистик әхлаҡ кеүек изге һүҙҙәрҙе ғүмереңдә нисәмә тапҡырҙар ҡабатланың икән һин? Шуларҙы әйткәндә, нисек телең көрмәлмәгән һинең?

Дүсмәт. Һин мине бысраҡҡа һалып иҙәһең, Япар дуҫ! Әйҙә, рәхәтен күр.

Япар. Юҡ, миңә рәхәт түгел. Эсем тулы әрнеү... Аҙаҡ килеп, арыу ғына хужалыҡ работнигы Арыҡбаевты ҡорбан итергә маташыуың аҡылыма һыймай. Иркә шәкертең Вәзир бит үҙеңде башың, тояғың менән һатты.

Дүсмәт. Ҡәнзәфәров менән Арыҡбаев өсөн мине хәҙер *(газетаны ала, төртөп күрһәтә)* бөтә ил алдына баҫтырып сыбыҡлайһығыҙмы? Һин крәҫтиән балаһы бит, белергә тейешһең: аяҡ аҫтында ем сүпләп йөрөгән тауыҡты яңылыш тапап имгәткән өсөн генә яҡшы хужа атын йығып һуймай. Ә ат аяғы аҫтында тауыҡ уралыусан була ул.

Япар. Тимәк, һин — ат, Арыҡбаев — тауыҡ?

Дүсмәт. Мин аңлатып әйттем шикелле.

Япар. Эйе, аңлашылды. Бөтәһенән дә тыш һин әҙәпһеҙ ҙә икәнһең.

Дүсмәт. Әҙәпһеҙ булһам да, һинең өйөңә барып, бисәң менән татыу тороуыңды, тормауыңды тикшереп йөрөгәнем юҡ әле.

Мәстүрә. Дүсмәт! Иманың бармы һинең?

Япар *(көрһөнә)*. Фу... Ярай. Башҡаса һүҙем юҡ...

Мәстүрә. Япар ағай, Дүсмәттең борсоулы сағы... Йығылғанды түбәләмәгеҙ. Баҫмағыҙ был мәҡәләне.

Япар. Килеүемдең бөтә маҡсаты ла шул ине, Мәстүрә. Кешенең күҙҙәренә ҡарап, выждан ғазабы

күрһәм, үкенеү һүҙҙәре ишетһәм, был мәҡәләне алып ташларға, бәлки, көсөм етер, тигәйнем. Хатаһын таныҒанды ҡат-ҡат яҙаламайҙар. Кешегә иртәгә лә йәшәргә кәрәк бит. Иртәгә лә...

Мәстүрә. Зинһар, шулай итегеҙ.

Япар. Юҡ, хәҙер улай итә алмайым. Мин уның күҙҙәрендә үкенеү ҙә, кисереш тә, өмөт тә күрмәнем. *(Дүсмәткә.)* Ике күҙең туп-тулы асыу һинең, Дүсмәт. Асыуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ.

Дүсмәт. Һин минең күҙҙәремдә йәштәр күрә алмаҫһың, өмөт тә итмә.

Япар. Тимәк, насар коммунист һин. Бәлки, коммунист та түгелһеңдер.

Дүсмәт. Уныһын билдәләү инде һинең эшең түгел. Ләкин бел: мин ярты ғүмерем буйы партияламын һәм унан башҡа йәшәй алмаясаҡмын.

Япар *(кейенеп, өҫтәлдәге газета полосаһын барып ала)*. Үҙең бая телгә алған ат талпанһыҙ йәшәй алған шикелле, партия һинһеҙ йәшәй аласаҡ. Быныһына минең иманым камил. *(Китә.)*

Дүсмәт. Көсө еткәнгә көсөк тә өрә!..

Мәстүрә. Ярһыма улай, Дүсмәт. Үҙеңде ҡулға алырға тырыш.

Дүсмәт. Бәй, һин аҡыл өйрәтергә оҫтара башлағанһың да баһа.

Мәстүрә. Ысынлабыраҡ илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға, тиҙәр.

Дүсмәт. Ә мин иларға теләһәм дә, сәләмәт күҙҙәремдән йәш сығасаҡ түгел. *(Өҫтәл өҫтөнә башын һала.)*

Вәзир ҡайта.

Вәзир *(ирония менән)*. Тышта буран ҡотора. Ә беҙҙең өй, әкиәттәге кеүек, йылы, тыныс... Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Әбей еп иләгән, ти, бабай тун теккән, ти... *(Өйҙәгеләр өндәшмәгәс, тынып тора ла дауам иттерә.)* Көңгөр-каңғыр һөйләшеп, һүҙҙәре бөтмәҫ булған, ти...

Мәстүрә. Мыҫҡыллауҙың да бер сиге булырға тейештер бит, Вәзир?

Вәзир. Кисерегеҙ. *(Үҙ бүлмәһенә үтмәксе.)*

Дүсмәт. Тороп тор әле, егет кеше.

Вәзир. Бойороғоҙ, Дүсмәт Ҡорбанович!

Дүсмәт. Мин һинән бер генә нәмәне үтенәм.

Вәзир. Асыуланмағыҙ. Мин: «Эш ҙурға китмәһә», — тип алдан иҫкәрттем... Һеҙ ашын ашаған, йәшен йәшәгән инде, Дүсмәт Ҡорбанович. Ә минең әле, нимә тип әйтәйем, карьерам яңы ғына башлана. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ.

Дүсмәт. Мин һинән бары бер нәмәне генә үтенәм.

Вәзир. Бойороғоҙ.

Дүсмәт. Минең һиңә асыуланырлыҡ та көсөм юҡ. Үтенәм: кит был өйҙән. Күҙемә күренмә.

Вәзир *(танауын йыйырып еҫкәнә)*. Оҡшамайыммы ни?

Дүсмәт. Битһеҙ һин.

Вәзир *(иҫ киткес тыныс)*. Был өй, йәғни дача, Дүсмәт Ҡорбанович, һеҙҙең хосуси милкегеҙ түгел. Хөкүмәттеке. Мин бында прописка менән торам. Ҡалалағы квартирала ла шулай уҡ... Әгәр мин оҡшамайым икән, мин һеҙҙе был өйҙә көсләп тотмайым! Эйе, мин, Вәзир Ҡәнзәфәров, шаярырға яратмайым, мине хайуан урынына ҡыуа башлаһалар, асыуым килә.

Дүсмәт *(тыныс, асыулы)*. Кит һин был өйҙән!

Вәзир. Ашыҡтырмағыҙ! Улайһа, бер һүҙ сыҡҡас, бөтә иҫәп-хисаптарҙы бөтөрөп ҡуяйыҡ. *(Үҙ бүлмәһенә керә.)*

Мәстүрә. Тағы нимәләр ҡуптарырға уйлай икән был?

Дүсмәт. Әйҙә, бар һөнәрен күрһәтеп бөтөрһөн инде.

Вәзир *(бер бит ҡағыҙ тотоп сыға)*. Хәҙер, ҡәрҙәшҡырыуҙар, һүҙ миңә бирелә...

Дилбәр сығып, ишек яңағына һөйәлә. Ҡатып тик тора. Вәзир уны күрмәй.

Күптәнге хәлдәрҙе хәтерләргә, иҫке ҡайғыларҙы яңыртырға тура килә. Кисерегеҙ! Мин Дилбәр менән танышҡас та, минең атайым, элекке районный нотариус Ғосманғәле Ҡәнзәфәров, әйтте.

Дусмәт. Теге взятка алып, йорт һалған Ҡәнзәфәровмы?

Вәзир. Эйе, шул Ғосманғәле Ҡәнзәфәров әйтте: «Йыһазлы кәләшкә күҙең төшкән, Вәзир», — тине. Аҙна ла үтмәне, бик әһәмиәтле документтың күсермәһен алып ҡайтып миңә бирҙе. Бына ул. *(Икеһенә лә күрһәтә.)* Танышмы? *(Өндәшмәйҙәр.)* Дилбәрҙең әсәһе үлгәс, һеҙ уның опекуны булып ҡалғанһығыҙ икән. Бик яҡшы эшләгәнһегеҙ. Изге күңелле кешеләр икәнһегеҙ. Документта күренеүенсә, Дилбәр менән бергә түбәндәге нәмәләрҙе лә һаҡлау өсөн үҙ өйөгөҙгә алып ҡайтҡанһығыҙ. Быныһы ла яҡшы. Хәҙер ҡысҡырып барлап сығайыҡ.

1. Затлы шкаф — шулай, затлы тип яҙылған — 1200 һум.

2. Диван — йомшаҡ — 1100 һум.

3. Буфет — 1275 һум.

4. Карауат — тимер, никелгә манылған, ике дана, 675×675 — барлығы — 1350 һум.

5. Толоп — тышлы — 890 һум.

6. Һауыт-һаба, йәмғеһе 86 әйбер — 1655 һум.

Бөтәһен дә уҡып тормайым. Йыйыныһы 47 пункт, нәмәләрҙең дөйөм суммаһы 16 635 һум. Әйтергә кәрәк, ошо әйберҙәрҙең 11 320 һумлығы күҙгә салына. Үҙем барлап ҡараным. Ә 5 315 һумлыҡ йыһаз күренмәй. Уларын аҡсалата ҡайтарырға тура килер.

Бөтәһе лә, приговор тыңлаған шикелле, Вәзир һүҙен баҫып тыңлайҙар.

Дилбәр *(уянып киткәндәй)*. Туҡта! Кемде хөкөм итәһең һин?

Вәзир *(Дилбәрҙе яңы күрә)*. Ул тиклем нескә тойғоло булырға ярамай, Дилбәр; беҙ һинең менән әле аҡса һанаулы замanda йәшәйбеҙ.

Дилбәр. Юҡ! Мин һинең менән йәшәмәнем, йәшәмәйем, йәшәмәйәсәкмен! Һин минең замандашым түгел! Һин үлгәнһең! Һин әллә ҡасан үлгәнһең, был һинең өрәгең генә!

Вәзир. Самалап, Дилбәр! Һин минең бисәм икәнлегеңде онотоп ебәрмә, мине түбәнһетеп, һин үҙеңде лә түбәнһетәһең.

Дилбәр *(үҙен ҡулға ала)*. Ошо минуттан башлап минең өсөн борсолмаҫҡа мөмкин. Беҙ хәҙер бер-беребеҙгә сит кешеләр. Кит һин беҙҙең өйҙән. Исмаһам, шул яҡшылыҡты эшлә. Минең сыҙамлығым бөттө. Һинең менән бер өйҙә артыҡ бер генә минут та йәшәй алмайым. Кит, Вәзир! Кит!

Вәзир. Мин ағайыңа әйттем инде: оҡшамаһам, мин һеҙҙең берегеҙҙе лә көсләп тотмайым, ҡәрҙәш-ырыуҙар! *(Үҙ бүлмәһенә инергә итә лә туҡтай.)*

Дилбәр. Кисер, апай! Мин был йортта башҡаса ҡала алмайым. Алдандым, йәберләндем мин был өйҙә! Ағайым, атайым урынына ҡалған ҡәҙерле ағайым, һин алданың мине. *(Вәзиргә.)* Йөрәгемде талап алып, һин алданың, Вәзир. Өй түгел, ҡырағай урман был. Мин ҡалаға, кешеләр араһына, китәм.

Мәстүрә. Мин һине тотмайым, Дилбәр, бар...

Дилбәр *(Мәстүрәне ҡосаҡлап)*. Һин сыҙамһың, апай. Һин ниндәй сыҙамһың! Минең сыҙам булғым килмәй! *(Кейенә, сығырға йыйына.)*

Ҡапыл киң итеп ишек асыла. Өйрөлөп ел керә, Низам инә. Уның кейемен ҡар һырып алған. Ул ҡуйынына төрөлгән картина ҡыҫтырған.

Низам. Һаумыһығыҙ.

Өндәшмәйҙәр. Аптырап ҡалалар.

Һаумыһығыҙ!.. Мин бер генә минутҡа.

Мәстүрә. Һаумы, Низам!

Низам. Теге рәсемде ҡайтарып бир, Дилбәр. Унда һин моңһоуыраҡһың. Мин бүтәнде, бына әле генә яҙып бөткәнен, килтерҙем... «Ҡояшлы ялан аша» тип атала. Һин унда нурҙар эсендә йөҙәһең. Ал, Дилбәр.

Дилбәр *(оҙаҡ, өндәшмәй тора)*. Миңә рәсем кәрәкмәй, Низам. Миңә кеше кәрәк. Йән эйәһе кәрәк миңә! *(Атылып сығып китә.)*

Уның артынан Низам йүгерә. Тышта «Дилбәр» тигән тауыш ишетелә.

Вәзир. Хәҙер тынысланырға мөмкин. Был документтың көсө бөттө. Уны йыртырға ла ярай. *(Йыртырға итә, туҡтай.)* Ниңә ашығырға? Ашарға һорамай ҙа ул. *(Үҙ бүлмәһенә инеп китә.)*

Дүсмәт. Йә, Мәстүрә, ниңә һин дә дулап сығып китмәйһең?

Мәстүрә. Бик китер инем. Китеп, ҡайҙа барайым?

Дүсмәт. Урмандан ҡалаға.

Мәстүрә. Был йорттан башлап Рәхимә китте. Уның алдында киләсәге, тирә-яғында дуҫтары бар. Дилбәр китте — уның яратҡан эше, күҙҙәренә йотолоп ҡарап ултырған студенттары бар. Тегенсе Гөлбикәнең үҙ шатлығы — уның теккән күлдәктәрен кейеп йөрөүсе кешеләр бар. Ә минең нимәм бар?

Дүсмәт. Йортоң бар.

Мәстүрә. Йорт түгел, һин бар. Мин бөтә ғүмеремде һиңә арнаным, Дүсмәт. Һин ҙур эштәр башҡараһың, кешеләргә күп яҡшылыҡтар эшләйһең, кәрәк саҡта уларға таяныс булаһың, тип уйланым. Баҡһаң, һинең үҙеңә ҡырҡ яҡтан ҡырҡ терәү кәрәк икән. Бына минең ғүмерем кемгә исраф булған.

Дүсмәт *(әкрен)*. Етер! Исмаһам, һин дә ыҙалама. Китһәң, ташла ла кит!

Мәстүрә. Барыр ерем юҡ минең. «Ауыр саҡта мин һиңә ярҙам иткәйнем, хәҙер миңә ауыр, ярҙам ит», — тип күҙ төбәп кемгә барайым мин? Беҙ һинең менән фәҡирҙәрбеҙ, Дүсмәт. Беҙ алырға ғына өйрәнгәнбеҙ, шуға күрә фәҡирҙәрбеҙ. *(Таралып төшкән Дүсмәттең беләгенән тота.)* Әйҙә, инеп ят. Нисек кенә булмаһын, ҡалған ғүмерҙе барыбер йәшәп бөтөрөргә тура киләсәк.

Дүсмәт *(баш ҡаға)*. Эйе, беҙҙең йыр йырланып бөттө, буғай. Ләкин йырлағаныбыҙ күңелле йыр булып сыҡманы. Уф. *(Эсен тота.)*

Мәстүрә. Бар, инә тор!

Дүсмәт бүлмәһенә инеп китә.

Мин хәҙер ҡайнар грелка килтерәм. *(Кухняға инә.)*

*Шаршау*

*1956—1963*

## АЙ ТОТОЛҒАН ТӨНДӘ

*Өс шаршаулы трагедия*

ҠАТНАШАЛАР:

Аҡйегет — 17-лә
Зөбәржәт — 17-лә
Тәнкәбикә — 50—52-лә
Шәфәҡ — 21-ҙә
Диуана — 30-ҙа
Дәрүиш — 55-тәрҙә
Ырысҡол — 60-тарҙа
Ишмырҙа — 11-ҙә
Ялсығол — 30-ҙарҙа
Беренсе аҡһаҡал
Икенсе аҡһаҡал
Өсөнсө аҡһаҡал
Сапҡын — 25-тәрҙә
Ирҙәр, ҡатындар

### БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Йәй башы. Дала. Тирмәләр теҙелеп киткән. Тәнкәбикәнең тирмә алды. Усаҡ. Бейек тағанға ҙур ҡаҙан аҫылған. Төрлө ергә балаҫтар, келәмдәр киптерергә эленгән. Күрәһең, был йәйләүгә яңы килгәндәрҙер. Шәфәҡ ҡаҙан тирәһендә урала. Тирмәнән Тәнкәбикә сыға. Ҡулында ҡамсы. Ул ҡайҙалыр китергә йыйынған.

Тәнкәбикә. Әле булһа ҡайтманымы шул Ялсығол?

Шәфәҡ. Күренмәне.

Тәнкәбикә. Ул йыбытҡының ауыҙынан һүҙе сыҡҡансы, ҡош бала сығарып өлгөрөр. Шуны ебәргән мин...

Шәфәҡ. Ашығып ҡайҙа барһын да атлығып ҡайҙа ҡайтһын? Мөңрәр малы, илар балаһы бармы уның? Алда рәхәтлек көткән кеше генә ашыға бит ул, ҡәйнәм.

Тәнкәбикә. Ярай. Ниткән эш ул — бөтәгеҙҙә шул Ялсығолдоң араһына керәһегеҙ.

Шәфәҡ. Ҡыҙғаныс бит. Бер башына ҡәҙер юҡ бахырҙың.

Тәнкәбикә. Бәндәләргә яҙмышты беҙ тәғәйенләмәгән, килен.

Ағас атҡа атланып, Ишмырҙа инә. Йырлай.

Ишмырҙа.

Атай миңә ат бирҙе:
— Эйәрлә лә сап, — тине, —
Сибәр кәләш алып бирәм,
Ҡосаҡла ла ят, — тине.

Тпру, ҡамыш сираҡ, уҡ ҡолаҡ!

Тәнкәбикә. Кит, телең ҡороғоро! Йүнһеҙ йыр йырлап йөрөйһөң, алйот булдыңмы әллә? Бынау ҡамсы менән өҙә һыҙырырмын тегеләй.

Ишмырҙа. Был бит кейәү йыры, әсәй.

Тәнкәбикә. Бирермен һиңә кейәүҙе! Кит, бар бынан. *(Шәфәҡкә.)* Был арала ниңәлер эсем бошоп тора, килен. Яуҙағыларҙан да хәбәр юҡ. Сапҡын килгәнгә лә йыл тулып уҙҙы.

Шәфәҡ. Юлмырҙамды һаҡлай күр, тип сәхәр ваҡыттарында, ҡанлы йәштәр ҡойоп, аҡ теләктәр теләйем дә бит...

Тәнкәбикә. Түккән йәштәр тупраҡҡа һеңһә лә, теләгән теләктәр ерҙә ятып ҡалмаҫ. Фәрештәләрҙең амин тигән саҡтарына тура килеп, ҡабул булыр әле, иншалла.

Шәфәҡ. Шулай ғына була күрһен.

Ишмырҙа. Диуана әйтә, әсәй, күк тулы фәрештә күрҙем, ти, әсе ҡатыҡтағы ҡорт төҫлө, мыжғып торалар, ти, Диуана әйтә. Ниндәй була ул фәрештә?

Тәнкәбикә. Әле һаман бында уралаһыңмы ни? Бар, уйыныңда бул! *(Саҡ ҡына ҡамсы тейҙереп ала.)*

Ишмырҙа. Диуана белгәнде лә белмәйҙәр... *(Шыңшып китә.)*

Тәнкәбикә. Ишмырҙа! Бар, йылҡысы Күсәрбайға әйт — күк дүнәнде тотоп эйәрләһен.

Ишмырҙа *(алыҫтан)*. Ярай!

Тәнкәбикә. Ҡуйсылар эргәһенә барып ҡайтайым тигәйнем. Күңелем бер ҙә генә урынында түгел.

Шәфәҡ. Өс йыл буйы көтә-көтә, эс-бауырҙарым көйөп бөттө инде, ҡәйнәм. Ун туғыҙ йәшемдә генә тороп ҡалдым бит мин унан. Киске шәфәҡ төҫлө һүнә барам, һүнә барам...

Тәнкәбикә. Хоҙа ҡушмағас, буйыңа ла уҙмай ҡалдың шул. Бала үҫтереп торор инең, исмаһам. Бер йыуаныс булыр ине.

Шәфәҡ. Насип булмағандыр, күрәһең.

Тәнкәбикә. Теләккәйҙәребеҙ ҡабул булып, аҡ батшаның изге фармандары сығып, яу баҫылһа, бына ҡайтып та етерҙәр. Дан менән ҡайтырҙар, бойорған булһа.

Шәфәҡ. Ҡасан ғына күрербеҙ ул көндәрҙе...

Тәнкәбикә. Ялсығол ҡалым менән эште яйлап ҡайтһа, ололар ҡоро уҙғарырбыҙ. Барсы, килен, ҡара тирмәгә инеп сыҡ, ҡымыҙ бешә торһондар. Мал һуйырға үҙем ҡушырмын.

Шәфәҡ. Ярар, ҡәйнәм. *(Китә башлай.)*

Тәнкәбикә. Аҡйегет ҡайҙа китеп олаҡты?

Шәфәҡ. Бая ғына Зөбәржәт килгәйне. Тау яғына ҡарай икәүһе һыбай сапты.

Тәнкәбикә. Ун етеләре тулһа ла, һаман балалар шул.

Шәфәҡ. Ҡолонсаҡтар кеүек, һикереп уйнап ҡалһындар кейәү менән кәләш саҡтарында. Көткәндәре бары бәхет кенә. Зөбәржәте далала бер ҡыҙ. Аҡйегете торғаны менән Йософ пәйғәмбәрҙең игеҙ һыңары. Өҫтәүенә, үҙе сәсән.

Тәнкәбикә. Ҡуй, килен, әҙәм балаһын пәйғәмбәргә тиңләмә, яҙыҡ булыр.

Алыҫтан тауыш. «Байбисә!.. Күк дүнән далаға ҡасты!»

Гонаһ ҡына шомлоғо икән. *(Китә башлай.)*

Тәкмәс атып, Диуана килеп инә.

Диуана. Тәнкәбикә байбисә апай! Тәнкәбикә байбисә апай! Бер ирмәк һөйләйем әле. *(Шарҡылдап көлә.)*

Тәнкәбикә. Һөйлә, Диуана, һөйлә.

Диуана *(һикереп аяҡ үрә баҫа)*. Анау Тәкүлгән ҡая бар бит әле. Шул ҡаяның башында бер инә бөркөт үҙенең дүрт балаһын талап үлтерҙе. Башта күҙҙәрен суҡыны ла шунан ҡанаттары менән тегеләрҙе ҡаянан бәреп төшөрҙө. Бына шулай тәкмәс-төкмәс, тәкмәс-төкмәс *(тәкмәсләп күрһәтә)* тәгәрәп төштөләр. Ирмәген күрмәй ҡалдың, байбисә апай. *(Шарҡылдап көлә. Ҡапыл тәрән һағыш менән.)* Ниңә шулай итте икән ул инә бөркөт?

Тәнкәбикә. Һин хата күргәнһеңдер, Диуана. Бөркөттөң балаһы берәү йә икәү генә була.

Диуана. Быныҡы дүртәү ине. Улайһа, ҡалғандары сит ояныҡы булғандыр.

Тәнкәбикә. Бар, килен, Диуананың тамағын туйҙырһындар. Асыҡҡандыр. Ас күҙгә берәү ҙә дүртәү булып күренә ул.

Шәфәҡ. Әйҙә, Диуана.

Диуана. Теге бөркөт ниңә шулай итте икән, байбисә апай? Ниңә һеҙ йәлләп иламайһығыҙ, таштан яралғандар! *(Илай.)*

Китәләр.

Тәнкәбикә *(яңғыҙ)*. Булмаҫ, булмаҫ. Бөркөт ише ҡош батшаһы үҙ балаһын үҙе таламаҫ. Улай тиһәң, үҙ балаһын үҙе талап үлтергән батша бермә-бер. Дәрәжәһе ҙур булған һайын, бәндәләрҙең ҡаны ҡаты була. Ярай, был Диуананың һүҙҙәрен хәйерлегә юрайыҡ.

Рәнйеткән кешеләрем булһа, хоҙа ярлыҡаһын мине... Билдәһеҙ хәүеф талай бауырымды. Күрәҙәгә күренмәй булмаҫ. Ҡуйсылары ҡасмаҫ, иртән барырмын. *(Тирмәгә инә.)*

Ялсығол ҡайта. Ултыра.

Ялсығол. Юлың уңып, эштең осона сығып ҡайтһаң, һиңә яңы көпө, тигәйне байбисә. Көпөһөн бирер, һүҙен елгә сәсә торғандарҙан түгел ул. Яңы көпө кейеп сығырға ни байрамым бар һуң минең? Шулай ҙа күңелем тынысланды. Бер тамырҙан ғына шытып сыҡҡан ике һабаҡ төҫлө, Аҡйегет менән Зөбәржәт ғүмерлеккә бергә ҡушыла. Бына шуға күңелем үтә риза. Ун ете йыл буйы ҡарап үҫтерҙем мин уны. Балам кеүек булып бөткән инде... *(Ҡысҡыра.)* Байбисә! Һин өйҙәме? Мин ҡайттым.

Тәнкәбикә сыға.

Тәнкәбикә. Бына бер иҫәүән. Ҡайтҡан да йәйелеп ултырған. Йә, имен йөрөп ҡайттыңмы? Ҡаҫҡын-ҡараҡҡа тап булманығыҙмы? Киткән мал теүәл барып етте-ме?

Ялсығол. Имен, байбисә. Әммә Ырыҫҡол бей башта әҙһенде. Тағы егерме биш баш йылҡы, илле баш ҡуй өҫтәгеҙ, ти.

Тәнкәбикә. Шулай булыр уҡ тип шикләнгәйнем. Ул ҡомһоҙҙоң туйыр көнө булырмы? Илмырҙа бей үҙе иҫән саҡта Ырыҫҡол менән бөтәһе тураһында ла һөйләшеп, килешеп ҡалғайны ла баһа. Аҡйегеттең ун етеһе тулғас, ҡалымдың ҡалғанын түләп бөтөрөрһөгөҙ, тип васыятын әйтеп үлде. Беҙ вәғәҙәбеҙҙә торҙоҡ.

Ялсығол. Мин дә шуны әйттем. Ырыҫҡол бей оторо ҡарыша. Вәғәҙә ҡуйышҡанда, Илмырҙа бей иҫән ине, уның бейлек дәрәжәһен дә мин ҡалым иҫәбенә индергәйнем, ти. Хәҙер бей үҙе лә, дәрәжәһе лә юҡ, ә тегендә бөтә бәндә тигеҙ, ти. Мин малдарҙы кире ҡыуырға ҡушҡас, шулай ҙа ризалашты.

Тәнкәбикә. Теле барып, шулай тинеме? Бындай мөртәтлеге өсөн Ырыҫҡол йәйләүенә бөгөн үк яу са-

быр инем. Ярай, балалар хаҡына ҡалып торһон. Иллә Юлмырҙа яуҙан иҫән-һау ҡайтһа, ата намыҫын намыҫламаҫ ир түгел.

Ялсығол. Шул дегәнәк төбөндә нисек үҫкән шундай аҫыл сәскә? Зөбәржәтте әйтәм. Мин мал ҡыуып барғанды күргәс тә: «Мин уныҡы!» — тип беҙҙең яҡҡа һыбай сапты.

Тәнкәбикә. Зөбәржәткә минең фатихамдан башҡа һүҙем юҡ. Ә Ырыҫҡол бей был һүҙҙәрҙе мал алыр өсөн түгел, беҙҙе кәмһетер өсөн әйткән булыр. Әйткәненә үкенмәгәйе әле. Донъяныҡы донъялыҡта ҡайтмағайы...

Ялсығол. Ырыҫҡол бей йәнә шуны әйтте икән: Һаҡмар далаһынан Ҡарағужа бейҙән Зөбәржәтте һоратып яусылар килде, әммә мин кире ҡаҡтым, Илмырҙа бейгә биргән вәғәҙәмдә ҡалдым, ти. Байбисәгә быныһын айырата әйт, минең ихласлығымды белеп торһон, ти.

Тәнкәбикә. Йәнәһе, ул беҙгә рәхимлек күрһәтә. Хаттин ашты бит быныӊ тәкәбберлеге! Етәр шунда, шул Ырыҫҡолға һүҙем әрәм. Һин, Ялсығол, йәһәт кенә ҡуйсыларға хәбәр иттер. Матур ғына бер-ике ҡуй тотоп һуйһындар. Ни тиһәң дә, йола бар. Өлкәндәрҙең күңелен күреү кәрәк.

Ялсығол. Ярай, байбисә, башҡарырмын. *(Китә.)*

Тәнкәбикә *(ҡысҡырып ҡала)*. Эй, Ялсығол, яңы көпөң ҡотло булһын! Әйткәндән ҡайтыу юҡ.

Ялсығол *(ситтән)*. Рәхмәт, байбисә!

Тәнкәбикә. Ырыҫҡолдо әйтәм, ҡалай шашына, ир арыҫландары яуҙа булғас та... *(Тирмәнең икенсе яғына үтә.)* Эй, кем бар унда? Гөлйемеш! Бынау балаҫтарҙы аҡ тирмәгә илтеп йәй. Ҡорҙо шунда уҙғарырбыҙ. *(Китә.)*

Бер аҙҙан һуң бер ҡатын инеп, эленгән балаҫтарҙы алып сыға. Дала яғынан Дәрүиш килә, тирмә артынан Диуана сыға.

Диуана *(ҙур һөйәк кимерә)*. Ниңә уныӊ иң тәмлеһен эсенә һалалар икән? Алып булмай ҙа булмай. *(Салҡан ятып, електе ауыҙына төшөрөргә маташа.)* Юҡ, төшмәй, ныҡ йәбештергәндәр. Ҡуй, ашап туймағанды ялап туйырһыңмы? Һәлберғолаҡ кимереп бөтөрөр әле.

Һәлберғолаҡ, маһ, маһ, маһ! *(Ҡарап тормай, һөйәкте ырғыта, ул килә ятҡан Дәрүишкә тейә.)*

Дәрүиш. Ярабби! Мосафирҙы шулай таш атып ҡаршылайҙармы ни, игелекһеҙ?!

Диуана. Таш түгел, һөйәк тә ул. Кимереп бөтөрөп булманы.

Дәрүиш *(һөйәкте күреп, ирендәрен ялап ала)*. Ризыҡты атыу гонаһ ул, ир-егет.

Диуана. Мин ир-егет түгел, мин — Диуана! Һинең кәпәсең ҡалай мәрәкә! *(Дәрүиштең фәсен алып кейеп ҡарай.)* Тәт-тә-тә-тә. *(Һала, әйләндереп ҡарай.)* Суғы ла бар икән. Эт ҡойроғо төҫлө. Ҡойроғонан ғына тотоп кейәһеңме? *(Дәрүиште әйләнеп ҡарап сыға.)* Ябалаҡ төҫлө ҡалай йөнтәҫһең һин. Йә һинең үҙеңдең дә ҡойроғоң барҙыр әле. *(Шарҡылдап көлә.)* Ә һин ниңә көлмәйһең?

Дәрүиш. Мин алыҫ ерҙән киләм, алла бәндәһе, йонсоном. Кем йәйләүе була был?

Диуана. Минеке лә, байбисәнеке лә.

Дәрүиш. Далала йөрөгән малдар ҙа уныҡымы?

Диуана. Уныҡы ла, минеке лә. Анау ҡаялар ҙа, болоттар ҙа минеке. Ултырҙым киттем булыр шул болоттарға... Байбисәне генә ҡыҙғанам шул.

Дәрүиш. Байбисәнең кеме булаһың һуң һин?

Диуана. Диуанаһы. Әүәл минең Әҙерғол тигән исемем дә булған. Хәҙер юҡ инде. Байбисә әйтә, Диуананы рәнйетмәгеҙ, яҙыҡ булыр, ти.

Дәрүиш *(Диуанаға текләп ҡарап тора)*. Маңлайыңда ҡара миңең дә бар икән...

Диуана. Миң түгел ул, фәрештә мөһөрө.

Дәрүиш. Нисә йәштәрҙә һин, алла ҡоло?

Диуана. Алла ҡоло түгел, Диуана мин. Һин үҙең ҡол.

Дәрүиш. Йәшеңде лә белмәйһеңдер шул, бисара.

Диуана. Йәшем юҡ минең. Былай ғына, йәшһеҙ генә йәшәйем мин. Ә һин кем һуң? Көпө салғыйҙарыңды ла эт талап бөткән.

Дәрүиш. Мин — Дәрүиш. Илдән илгә йөрөп, иман таратам. Байбисәгә илтсе мине, Диуана, аяҡ балтырҙарым талды, хәлем бөттө. Өс көн инде тары бөртөгөләй ризыҡ ейгәнем юҡ.

Диуана. Байбисәнең тирмәһе ошо инде. Байбисә апай! Байбисә апай! Дәрүиш килде, Дәрүиш килде! Кәпәсенең суғы ла бар.

Турһыҡ күтәреп, тирмә эргәһенә Шәфәҡ килә. Дәрүиште күреп, туҡтап ҡала.

Дәрүиш *(үҙенә)*. Собхан алла! Ниндәй һыу һылыуы килеп басты минең алдыма? *(Күкрәген тотоп, эйелеп, һүҙһеҙ сәләм бирә.)*

Диуана. Аяҡ балтырҙары талған Дәрүиш был, Шәфәҡ.

Шәфәҡ тирмәгә инергә бара.

Дәрүиш. Алйыған мосафирға бер йотом һыу бирһәң, һылыу ҡыҙ, үҙеңә сауап булыр ине.

Диуана. Ҡыҙ түгел ул, килен, Юлмырҙаның бисәһе. Юлмырҙа үҙе аҡ батшала яуҙа йөрөй. Төндә тояҡ тауыштары килә ине. Ҡайтырҙар шәт.

Дәрүиш *(доға ҡыла)*. Шулай булһын.

Диуана. Аллаһы әкбәр!

Шәфәҡ тирмәгә инә. Дәрүиш аҫтыртын ғына ҡарап ҡала.

Дәрүиш. Тәңренең ҡөҙрәте киң, аҫылын да, иҫәрен дә ярата. *(Ултыра.)*

Диуана. Һин иҫәрме әллә аҫылмы?

Дәрүиш. Аҫыл түгел.

Диуана *(һикергеләп)*. Аҫыл, аҫыл! Көпө салғыйҙарың аҫылынып-аҫылынып төшкән.

Шәфәҡ ҙур туҫтаҡ менән ҡымыҙ сығара.

Шәфәҡ. Мә, ҡымыҙ эс, бабай, йөрәгеңә ял булыр.

Дәрүиш *(ҡымыҙҙы ала, нимәлер уҡына, яйлап ҡына эсә)*. Рәхмәт, һылыу, теләгән теләктәрең ҡабул булһын.

Шәфәҡ. Шулай ғына булһын.

Байбисә күренә.

Диуана. Байбисә! Дәрүиш, Дәрүиш килде!

Дәрүиш *(урынынан тора)*. Йорт-ерең, мал-тыуарың именлектә, күңел-хәтерҙәрең бөтөнлөктә булһын, байбисә. Баш өҫтөңдән ырыҫ ҡошо китмәһен.

Тәнкәбикә. Рәхмәт, мосафир, амин, шулай булһын. Һинең дә күңелең таплы, күҙең яман булмаһын. Төклө аяғың менән рәхим ит әйҙә.

Дәрүиш. Ултырышып доға ҡылайыҡ.

Доға ҡылалар.

Диуана. Мин икенсе тапҡыр доға ҡылдым инде.

Дәрүиш. Ҡылған һайын доға яңырыр, ти. *(Байбисәгә текләп ҡарай.)*

Тәнкәбикә. Алыҫтан юл тотаһыңмы, мосафир? Ниәттәрең яҡшылыр тип өмөт итәбеҙ.

Дәрүиш. Мин пәйғәмбәр илсеһе, байбисә. Пәйғәмбәрҙең изге ҡәбер ташын үҙ ҡулдарым менән һыйпап, зәмзәм ҡоҙоғонан тамсы-тамсы һыу эсеп килгән әҙәммен мин. Был фани донъяла бәндәләргә иман таратыуҙан башҡа шөғөлөм юҡ минең.

Тәнкәбикә. Юлың изге икән, мосафир.

Дәрүиш. Изге.

Тәнкәбикә. Йөрөгән ерҙәреңдә именлекме?

Дәрүиш. Именлек, байбисә. Һеҙгә лә яҡшы хәбәрҙәр килтерҙем. Аҡ батшаның ғәскәрҙәре еңеп, илегеҙгә тыныслыҡ ҡайтты. Көткән кешеләрегеҙҙең юлы аҡ булыр. *(Шәфәҡкә ҡарай.)* Оҙаҡламай ҡайтып етерҙәр.

Диуана *(ергә ятып тыңлай)*. Юҡ, бөгөн тояҡ тауыштары ишетелмәй.

Тәнкәбикә. Һин, Диуана, мосафирҙың һүҙен бүлдермә. *(Дәрүишкә.)* Яҡшы хәбәрең өсөн, изге кеше, саҙаҡа итеп, көтөүемдән үҙеңә оҡшаған йылҡыны һайлап ал.

Дәрүиш. Юҡ-юҡ, байбисә. Мин көн кешеһе түгел, дин кешеһе. Туҡланырлыҡ ризыҡ, төн төнәрлек урын бирһәң, саҙаҡаң шул булыр. Донъя малы миңә кәрәкмәй.

Шәфәҡ *(үҙ-үҙенә)*. Ниндәй изге йәнле әҙәм...

Тәнкәбикә. Һинеңсә булһын, көсләмәйем. Килен, был тирмәгә генә тиҙ үк ҡор әҙерлә. Тамаҡ ялғап, мосафир ял итер.

Шәфәҡ. Ярар, ҡәйнәм. *(Тирмәгә инә.)*

Тәнкәбикә. Яҡшы ҡунаҡ үҙ ризығы менән йөрөр, ти. Бик уңайлы мәлгә тап булдың. Уртансы улымдың кәләше өсөн бөгөн генә ҡалым түләп бөтөрҙөм. Аҡ тирмәлә кисен мәжлес булыр. Түр башыма рәхим итерһең.

Дәрүиш. Мин дәрүиште ололауың өсөн, хоҙа үҙеңде ололаһын, гонаһтарыңды кисерһен. Бәндә гонаһһыҙ булмаҫ...

Диуана. Мин дә гонаһлымы, Тәнкәбикә байбисә апай?

Тәнкәбикә. Һинең гонаһың юҡ, Диуана.

Дәрүиш *(үҙ-үҙенә)*. Тәнкәбикә?..

Тәнкәбикә. Әйҙә, тирмәгә уҙ, мосафир.

Дәрүиш. Тәнкәбикә тинеме исемеңде, байбисә?

Тәнкәбикә. Минең исемемде шул бер Диуананан башҡа кеше әйтмәй. Илмырҙа бей үлгәндән бирле байбисә тип кенә йөрөтәләр. Минең исемем, ахыры, һине шомландырҙы.

Дәрүиш. Юҡ, байбисә, үтә матур исем. Тәү тапҡыр ишетәм. Шуға ғына бер аҙ сәйер тойолдо. Илмырҙа бей исеме миңә таныш. Үҙен белмәһәм дә, данын беләм. Мәрхүм икән, урыны ожмахта булһын.

Тәнкәбикә. Тирмәгә уҙ, Дәрүиш, тамаҡ ялға. *(Инәләр.)*

Диуана. Был Дәрүиштең күҙҙәре тап ябалаҡ күҙе төҫлө. Бер урында тәгәрәшеп тик тора... Ҡая төбөндәге теге бөркөт балаларын күмеп ҡайтайым әле. Үлгәндәрҙе ергә күмәләрсе... *(Китә.)*

Икеһе тирмәнең ике яғынан йүгереп, Зөбәржәт менән Аҡйегет сыға. Икеһе лә һыбай кейемендәләр. Зөбәржәт Аҡйегеттең ҡосағына атылып килеп инә.

Зөбәржәт. Ғүмерлеккә һинең ҡосағыңа инеүем ошо булһын ине, ҡыйғыр ҡошом!

Аҡйегет. Зөбәржәтем! Хәҙер беҙҙе һис кем айыра алмаҫ.

Зөбәржәт. Хоҙа мәрхәмәтле, Аҡйегет, икебеҙҙе бер тупраҡта яратҡан. Беҙ тыуғас та, беҙҙе ҡауыштырған, шулай булғас, беҙҙе кем айырһын, ти.

Аҡйегет.

Нурланып та балҡып ҡояш ҡалҡа, —
Ул уң битең һинең, Зөбәржәт,
Моңайып та бойоғоп аҡ ай бата, —
Ул һул битең һинең, Зөбәржәт.
Ай ҡалҡҡан саҡта, һул битеңдән
Үбеп йоҡлатырмын, Зөбәржәт.
Ҡояш сыҡҡан саҡта, уң битеңдән
Үбеп уятырмын, Зөбәржәт.
Көткән моратыма етермен,
Үбеп үлһәм, шаһит китермен.

Зөбәржәт. Һин үбеп үлһәң, мин һине үбеп тергеҙермен, мин үлһәм, һин үбеп тергеҙерһең, шулай булғас, беҙгә үлем юҡ, Аҡйегет! *(Тағы ҡосағына ташлана.)*

Аҡйегет. Әгәр ҙә һин сит ерҙәрҙә тыуып үҫһәң, ғүмергә һине күрә алмаған булһам, мин ни эшләр инем икән, Зөбәржәт? Ул саҡта ла һине эҙләп табыр инем, тауҙар ашыр, даръя кисер инем, әммә табыр инем.

Зөбәржәт. Тауышыңдан танып, үҙем эҙләп килер инем һине, Аҡйегет. Таянған таяҡтарым энә ҙурлығы, аяғымдағы итек табандарым япраҡ ҡалынлығы ҡалһа ла, һине эҙләп табыр инем. *(Шаярып, һуҙып һөйләй.)*

Мин Зөбәржәт атлы инем,
Аҡйегеттең йәре инем,
Шуны эҙләп бара инем, —

тиер инем. *(Көлә.)*

Аҡйегет. Бер ҡасан да беҙ ундай көндәргә төшмәбеҙ.

Зөбәржәт. Уйнағандар — уйға килмәһендәр. Тәүбә, тәүбә!

Аҡйегет. Хәҙер килмәҫтер инде.

Күкрәгемдә кәрем бар,
Яндарымда йәрем бар.
Береһе сыҡһа, береһе ҡалыр —
Эсемдә ике йәнем бар.
Кәр тигәнем — Зөбәржәт,

Йәр тигәнем — Зөбәржәт,
Эстәремде нурлап торған
Йән тигәнем — Зөбәржәт!

Зөбәржәт *(ҡапыл һағышлы)*. Донъялар бит беҙ тигәнсә генә түгел, Аҡйегет, аҡ батша тағы, ағайың кеүек, һине лә яуға ебәрһә, мин ни эшләрмен?

Аҡйегет. Шәфәҡ еңгәм һымаҡ, сабырлығың йыйып, көтөрһөң.

Зөбәржәт. Юҡ, Аҡйегет, улай көтөргә минең сабырлығым етмәç. Һинән башҡа бер көн торор хәлем юҡ. Ауға китһәң дә, яуға китһәң дә, һинән ҡаласаҡ түгелмен. Ниндәй егеттән кәм һыбай сабам да, ниндәй мәргәндән ҡайтыш уҡ атам?

Аҡйегет. Бисәм түгел, уң ҡанатым булырһың һин, Зөбәржәт. Уң ҡанатһыҙ ҡайҙа осһон шоңҡар? Һинһеҙ барған юлым абындырыр. Бер ҡасан да яңғыҙ юлға сыҡмам... Ысынлап та, һин бигерәк хәтәр һыбай сабаһың. Бая хатта мине уҙып киттең.

Зөбәржәт. Һин эргәмдә саҡта миңә һис ни ҡурҡыныс түгел, хатта, хатта...

Аҡйегет. Ҡуй, Зөбәржәт, әйтмә ундай һүҙҙе.

Зөбәржәт *(шатланып, иркәләнеп)*. Аҡйегет! Әгәр мине дейеү урлап китһә! Бына шулай ҡапыл юҡ булһам. *(Ҡысҡырып көлөп тирмә артына йүгерә.)*

Аҡйегет. Ә мин уны ҡыуып етермен дә һине шулай тартып алырмын. *(Икенсе яҡҡа тирмә артына йүгерә.)*

Бер аҙҙан баяғыса ҡара-ҡаршы йүгереп килеп, бер-береһенең ҡосағына ташланалар.

Зөбәржәт. Абау, ниндәй ҡурҡыныс икән был дейеү. Ҡосағына ҡыçып, йәнемде сығара яҙҙы. *(Аҡйегеттең күкрәгенә башын һала.)*

Аҡйегет. Ишетәһеңме, йөрәгем нисек талпына, ҡанатлы ҡошмо ни?

Зөбәржәт. Ул ҡошто мин алтын ситлектә генә тотормон. Берәүгә лә, берәүгә лә бирмәм.

Аҡйегет. Һыртына эйәр теймәгән байтал кеүек, ҡырыҫ инең быға тиклем һин, Зөбәржәт. Бөгөн бөтөнләй бүтәнһең.

Зөбәржәт. Бөгөн мин ғүмерлеккә, мәңгелеккә һинеке булдым.

Аҡйегет. Әүәл төндә төшөмдә бер төйләгән күк күгәрсенде инде типте тигәндә генә уяныып киттем. Уянғас та, һине уйланым.

Зөбәржәт. Анау Ҡарағужа тоҡомонан яусылар килеүгә булғандыр. Шулар килгәс, быуындарым талды.

Аҡйегет. Ярай әле атайың ныҡ торған, ҡөҙрәтле Ҡарағужа тип ҡойолоп төшмәгән.

Зөбәржәт. «Минең ҡыҙым да, биргән вәғәҙәм дә берәү генә, ҡат-ҡат бирә торған ҡыҙым да, ҡат-ҡат үҙгәртә торған вәғәҙәм дә юҡ», — тигән атайым. Асыуланып аттарына ҡамсы һуғып, атайыма ниҙер янап, тегеләр төн йөҙөндә кире сапты. Атайым шулай ҙа шомланып ҡалды.

Аҡйегет. Ҡарағужа кеүек бейҙең ниәтен кире ҡағыу уйын түгел, Зөбәржәт. Шулай ҙа батыр кеше һинең атайың.

Зөбәржәт. Атайым миңә бары бәхет теләй. Минең бәхетем бары һин генә.

Аҡйегет. Моғайын, бөгөн әсәйем ҡор уҙғарыр. Йәш-елкенсәк, күл буйына сығып, беҙҙең хаҡҡа уйын ҡорор. Күл уртаһындағы аҡ томбойоҡ төҫлө, уйын уртаһында һин булырһың, Зөбәржәт. Ә мин йөҙөп кенә барырмын да шул сәскәне өҙөп алырмын.

Зөбәржәт. Өҙ, Аҡйегет, өҙ! Ул һинеке!.. Ә беҙ шундай тыйнаҡһыҙ балаларбыҙ, әсәйең алдына теҙләнеп, рәхмәт әйтмәнек, фатиха алманыҡ.

Аҡйегет (*Зөбәржәтте етәкләп тирмә ишегенә килә, икеһе лә теҙләнәләр*).

Әсәкәйем, хәләл һөтөң биреп,
Һөйөп үҫтергәнһең улыңды,
Изге фатихаңды бирсе, әсәй,
Башыбыҙға һал шәфҡәт ҡулыңды.

Һин йорттамы, әсәй?

Тирмәнән һаҡалын һыйпап, башта Дәрүиш сыға. Йәштәр аптырап ҡала. Унан һуң Тәнкәбикә сыға.

Тәнкәбикә *(Дәрүишкә)*. Улым Аҡйегет менән булыр киленем Зөбәржәт ошо инде. Фатихаңды бирсе, мосафир.

Дәрүиш. Раббым! Аҡйегет илә Зөбәржәт атлы ҡолдарыңа ғүмерлек инсаф вә итәғәтлелек бир, татыулыҡ вә мөлкәт бир. Аллаһы әкбәр!

Тәнкәбикә. Был — пәйғәмбәр илсеһе, Дәрүиш — изге әҙәм, балалар. Бар шөғөлө — бәндәләргә иман таратыу.

Дәрүиш баш эйә. Йәштәр ҙә уға ихтирам менән баш эйә.

Аҡйегет. Беҙҙе ҡауыштырып, мәңгелек сауап алдың, әсәй, атайымдың васыятына тоғро булдың. Алдарыңа теҙләнеп, мең рәхмәттәр уҡыйбыҙ.

Тәнкәбикә. Васыят, йола, ҡанун — беҙҙең өсөн изге. Һеҙ ҙә уларға ҡарата хыянатта булмағыҙ. *(Башта Зөбәржәттең башына уң ҡулын һала.)* Күкрәк һөтөм биреп үҫтермәһәм дә һине, Зөбәржәт, күкрәгемә ҡыҫып, фатихамды бирәм. Минең ояма киләһең, балам булырһың. *(Аҡйегеттең башына ҡулын һала.)* Йәшермәйем, иң яратҡан улым һин, Аҡйегет, аҡ бәхеттәр генә юлдашың булһын. Амин.

Аҡйегет *(һикереп аяҡ үрә баҫа, Зөбәржәт тә тора)*. Әсәкәйем, һин мине ошо яҡты донъяға килтереп бер бәхетле иттең, йәнә тағы донъя саҡлы бәхет бирҙең — Зөбәржәтем менән ҡауыштырҙың. Шунан башҡа бәхет тә, мөлкәт тә кәрәкмәй миңә, әсәкәйем.

Ҡояшым бар, айым бар,
Хозурланыр йәйым бар,
Һин бирҙең бит шуларҙы, әсәкәй!
Аҡ бәхеткә юл булдым,
Мөхәббәткә ҡол булдым, —
Һин бирҙең бит шуларҙы, әсәкәй!

Тәнкәбикә. Әммә, балам, йөрәк ҡоло булмағыҙ, аҡыл ҡоло булығыҙ. Юғиһә күңел — дарья, ерле юҡҡа тулҡынланыусан була.

Аҡйегет. Кәңәш һүҙең өсөн рәхмәт, әсәй. Тик шулай ҙа изге ниәтле йөрәк кешене яманлыҡҡа өндәмәҫ инде.

Тәнкәбикә. Әле һин бала шул. Аҡыл менән йөрәк тартышы нимә икәнен белмәйһең. Әгәр шундай хәлгә дусар булһаң, аҡылыңды тыңла.

Аҡйегет. Әсә һүҙе — миңә яҙмыш һүҙе. Ә яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиҙәр, яҡшы һүҙеңдән сыҡмабыҙ, әсәй.

Дәрүиш. Шулай... Шулай итәғәтле булығыҙ.

Дәрүиш бер ситкә китеп, башын эйеп ултыра.

Дәрүиш *(үҙ алдына)*. Алдарында башланмаған күпме наҙ, күпме рәхәтлек. Арттарында үкенерлек һис нәмә юҡ. Ах, ғүмер, ғүмер...

Тәнкәбикә. Бына ағайың яуҙан ҡайтҡас та, бөтә даланы шаулатып туй яһарбыҙ, бәйге асырбыҙ. Илмырҙаның тоҡомо исән әле! Ә хәҙергә уйнап-көлөп ҡалығыҙ.

Аҡйегет. Беҙ китәйекме инде, әсәй?

Тәнкәбикә. Сабыр итегеҙ. Килен! Шәфәҡ!

Шәфәҡ тирмәнән сыға.

Шәфәҡ. Мине саҡырҙыңмы, ҡәйнәм?

Тәнкәбикә. Эйе. Анау ике ҡытай сынаяғы барсы. Шуларға ҡойоп ҡымыҙ сығар.

Шәфәҡ. Ярар, ҡәйнәм. *(Китә.)*

Тәнкәбикә. Һеҙ ул саҡта әле икегеҙ ҙә имсәк балаһы инегеҙ. Ошондай бик матур көндө атайың мәрхүм ҙур бәйге уҙғарҙы. Оло ҡорҙа ил уҙамандары шығырым тулы ине. Шул ҡорҙа Ырыҫҡол бей менән Илмырҙа бей, һеҙҙе йәрәштереп, туҫтаҡ эсте. Байрам йәнә өс көн барҙы. Аҡман сәсән, бисара, һеҙгә йыр ҙа сығарҙы.

Аҡйегет.

Күккә баҡһам — ни күрәм —
Ике йондоҙ ҡуш икән.
Ергә баҡһам — ике сабый —
Ике йондоҙ ошо икән.

Ошо йырмы, әсәй?

Тәнкәбикә. Эйе.

Сынаяҡтар тотоп, Шәфәҡ сыға.

Бына ошо сынаяҡтарҙан эстеләр улар. Ун ете йыл тулғас, хәҙер үҙ ырыҫығыҙ өсөн үҙегеҙ эсегеҙ. Ошо пар сынаяҡ төҫлө, бәхетегеҙ тулы булһын.

Шәфәҡ сынаяҡты башта Зөбәржәткә бирә, Зөбәржәт сынаяҡты иреренә килтерә лә туҡталып ҡала. Аҡйегеткә һуҙғанда, Шәфәҡтең ҡарашы Дәрүиш ҡарашына тап була. Шәфәҡ сынаяҡты төшөрөп ебәрә. Бөтәһе лә ҡаушап ҡала.

Тәнкәбикә. Ни булды һиңә, килен?

Шәфәҡ. Белмәйем. Ҡапыл зиһенем таралып китте. Ҡулыма кемдер һуҡҡандай булды.

Тәнкәбикә. Яҡшы йорого түгел, хәйерлегә булһын.

Аҡйегет. Хафаланма, әсәй, сынаяғы бөтөн ҡалды. Түгелгән һәр тамсы ҡымыҙҙы яманға юрамайыҡ.

Шәфәҡ. Көйөнмәсе, ҡәйнәм. Бер мин генә ғәйепле.

Аҡйегет. Күрәҙәгә, төрлө ырымға ғүмер буйы үтә ныҡ ышандың, әсәй. Ҡара, ана, бер ни үҙгәрмәне. Ҡояш баяғыса уҡ балҡый, үләндәр баяғыса уҡ йәшелдәр. Шомло уйҙарыңды ситкә ат, әсәй. Бөгөнгө ҡыуаныҫҡа күләгә төшөрмәйек. Һин фатихаңды бирҙең. Бер түгел, биш туҫтаҡ түгелһә лә, хәҙер беҙгә һис ни булмаясаҡ.

Дәрүиш. Тәҡдирҙәребеҙ маңлайҙарыбыҙға яҙылған. Уны һис ни юя алмай. Хәүефләнмә, байбисә, яҙғаны булыр.

Аҡйегет. Әсәй! Икәүебеҙ бер туҫтаҡтан эсәйек тә ҡуяйыҡ. Был хатта яҡшыраҡ та. Шулай бит, әсәй?

Тәнкәбикә өндәшмәй.

Зөбәржәт. Ниңә өндәшмәйһең, байбисә? Туҫтағыбыҙ мөлдөрәмә тулы. Мә, Аҡйегет, һин башлап эс уны!

Аҡйегет. Юҡ, Зөбәржәт. Үҙ өлөшөңдән тәүҙә һин ауыҙ ит.

Тәүҙә Зөбәржәт ауыҙ итә, унан Аҡйегет түңкәреп эсеп ҡуя.

Бындай тәмле ҡымыҙҙы ғүмерҙә лә эскәнем юҡ ине.

Тәнкәбикә. Яртышар ризыҡ ейҙегеҙ, балалар, бәхетегеҙ ярты-йорто була күрмәһен.

Аҡйегет. Икебеҙгә бер бөтөн булһа, беҙ шуға бик шөкөрбөҙ, әсәкәйем.

Диуана йүгереп инә, уның артынан Ишмырҙа эйәргән.

Диуана. Байбисә! Байбисә! Һөйөнсө!

Ишмырҙа *(һикерғеләп)*. Һөйөнсө! Һөйөнсө! Һөйөнсөгә биш алтын, һөйөнгәнгә ун алтын!

Диуана. Һөйөнсө! Һөйөнсө! Ниңә һеҙ һөйөнмәйһегеҙ?

Тәнкәбикә. Имен хәбәрең менән әле беҙҙе һөйөндөрмәнеңсе, Диуана.

Диуана. Әле генә сапҡын сабып үтте. Яуҙағылар ҡайтып килә, ти. Ғәскәр инде Ҡаҡтүбәне артылды, ти.

Ишмырҙа. Теге сапҡындың аты ҡара тиргә батҡан. Үҙенең уҡ-йәйәһе көйәнтә саҡлы. Ағайымдың йәйәһен мин дә тартып ҡарармын әле.

Бөтәһе лә йәнләнеп китә.

Тәнкәбикә. Урының ожмахта булһын, Диуана. Һөйөнсөгә һиңә баштан-аяҡ яңы кейем, ә, Ишмырҙа, һиңә ебәк елән.

Диуана. Һөйөнсөһөнә һин миңә кәләш алып бир, байбисә. Бөтәһенең дә кәләше бар, бер минеке генә юҡ. Ишмырҙаға ла кәләш бир.

Тәнкәбикә. Ни әйтәһең инде был иҫәргә. Бөтә кеше лә кәләшле булмай ул.

Шәфәҡ *(баҫҡан ерендә сайҡалып китә)*. Был шатлыҡтарҙы ла күрер көнөм бар икән! Йөрәгем, йөрәгем ойой, әсәкәйем. *(Тәнкәбикәгә килеп һыйына.)*

Тәнкәбикә. Ҡапыл шатлыҡ ҡайғынан да ауыр, ныҡ бул, балам.

Диуана *(ятып тыңлай)*. Тояҡ тауыштары ишетелә. Берәүһенең аты үтә ҡаты баҫа. Шул, моғайын, Юлмырҙалыр әле.

Тәнкәбикә. Бына йыйыр ризыҡ булғас, тартып ҡайтара.

Аҡйегет. Зөбәржәт менән беҙ ағайыма ҡаршы сабайыҡмы, әсәй? Беҙҙең аттар эйәрләнгән көйө тора.

Тәнкәбикә. Яуға киткәнде оҙата бармайҙар, яуҙан ҡайтҡандың юлына йүгереп сыҡмайҙар, балам. Боронғолар сабыр булырға ҡушҡан.

Дәрүиш. Бына, байбисә, минең хәбәрҙәрем хаҡ, һинең теләктәрең ҡабул булды.

Тәнкәбикә. Беҙҙе шатландырҙың, үҙеңде хоҙа ҡыуандырһын.

Шәфәҡ. Сабырлығым бөттө, ҡәйнәм, донъя зыр әйләнә. Ебәрһәнә мине, ҡаршы йүгерәйем. Юлмырҙаны йөрөтөп ҡайтҡан аттың ялын һөйөп, ике ҡашын берсә үбәйем.

Тәнкәбикә. Сабырлығың юйма, килен, ярамай.

Зөбәржәт *(Шәфәҡ эргәһенә килә)*. Шатлыҡ һине нескә талдай бөктө. Башың күтәр, булыр килендәшем. Бөтәбеҙ ҙә бергә хөр йәшәрбеҙ.

Шәфәҡ. Йылдарын көтөү былай түгел ине, ошо күҙ күремен көтөү бигерәк ауыр.

Диуана. Ана, һыртҡа һыбай килеп сыҡты. Тағы... тағы... ҡалай күптәр!

Бөтәһе лә шул яҡҡа ҡарай. Дәрүиш кенә ҡуҙғалмай.

Ишмырҙа. Алдан өсөнсөһө әллә ағайым инде.

Тәнкәбикә. Юҡ, ул түгел. Үҙ һөйәгемде үҙем таныр инем.

Аҡйегет. Анау дүртенсеһе булһа булыр ағайым.

Тәнкәбикә *(Шәфәҡҡә ҡарап ала)*. Килен! Яуҙан ҡайтҡан ирҙе шулай ҡаршылайҙармы ни? Өҫ-башыңды ҡара, ирең ни уйлар?

Шәфәҡ *(ҡапыл аңына килә)*. Әсәкәйем! Ысынлап та! Бына бер иҫәүән. Ниндәй кейемемдә кейәйем икән, ҡәйнәм?

Тәнкәбикә. Оҡшағанын үҙең һайлап кей.

Шәфәҡ. Юлмырҙа менән ҡауышҡан көндө туйҙа кейгән кейемемдә кейһәм, нисек булыр?

Зөбәржәт. Шуныһын кей, Шәфәҡ, шуныһын! Был ҡауышыу туйға бәрәбәр.

Шәфәҡ тирмәгә йүгереп инә. Оҙаҡ пауза.

Тәнкәбикә. Теге сапҡын ни эшләп беҙгә ҡағылманы икән?

Диуана. Кешеһеҙ бер ат етәктә аҡһап килә. Үҙе тартыла.

Аҡйегет. Ни эшләп һуң мин һаман ағайымды таный алмайым? Һин танайһыңмы, әсәй?

Тәнкәбикә. Күҙҙәрем томалана, һис ни күрмәйем.

Аҡйегет. Алдағылар йәйләүгә лә етте. Ағайым, йөҙ башы кеше, алда булырға кәрәк ине.

Диуана. Теге аҡһаҡ аттың йүгәнен һалдырып, далаға ебәрҙеләр. Юҡ, китмәне, йәнә эйәрҙе...

Бөтәһе лә һүҙһеҙ ҡарап торалар. Кейенеп, Шәфәҡ сыға.

Шәфәҡ *(үҙ алдына)*. Бына, туй күлдәге кейеп, һинең менән ҡауышырға сыҡтым, Юлмырҙа. Ә һин атыңа ҡамсы һуғып, ниңә сабып ҡына ҡайтмайһың? Тәҡәттәрем, тәҡәттәрем ҡалманы бит инде. *(Аҡйегет менән Зөбәржәт араһына килеп баҫа.)* Күренәме инде? Ҡайһыһы Юлмырҙа? Юлмырҙа ҡайһыһы?

Өндәшмәйҙәр. Тирмә артынан ғәскәр үтә башлай.

Тәнкәбикә *(алдағы һыбайлыға өндәшә)*. Байыш, был һин түгелме һуң? Ниңә эргәңдә Юлмырҙа юҡ? *(Һыбайлы һүҙһеҙ үҙа.)* Ниңә өндәшмәйһең, Байыш?

Аҡйегет. Башын ғына эйеп уҙҙы.

Тәнкәбикә. Эй, Барлыбай, Юлмырҙа ни эшләп артҡа ҡалды? *(Алға ынтыла.)*

Аҡйегет. Быныһы ла башын эйеп үтте.

Тәнкәбикә. Һин яуап бир, исмаһам, Ҡолош, ниңә арағыҙҙа Юлмырҙа юҡ?

Диуана. Бөтәһе лә үтеп бөттөләр.

Тәнкәбикә. Был ни тағы? Ниңә береһе лә яуап ҡайтарманы?

Яуҙан ҡайтыусыларҙың береһе инеп, байбисә алдына йүгән һәм кескәй төйөнсөк илтеп ҡуя. Диуана йүгереп йүгәнде барып ала, төйөнсөктө ҡапшай.

Диуана. Бынау төйөнсөктә әллә алтын инде, байбисә?

Тәнкәбикә *(төйөнсөктө сисә)*. Тупраҡ! Ҡара тупраҡ! Юлмырҙаның ҡәбер тупрағы! Ах балам, балам!

Шәфәҡ. Юлмырҙа! Юлмырҙа! Яныңа ал, үҙ яндарыңа ал мине, Юлмырҙа! Ошо туй күлдәгем кәфенем булһын! *(Үкһеп Зөбәржәт менән Аҡйегет араһына ауа, тегеләр тайшанып китә, Шәфәҡте берәү ҙә тотмай.)*

Тәнкәбикә. Ғүмерем буйы ниңә язалайһың мине, тәңрем? Ниңә? Гонаһтарым шулай уҡ ғүмергә язаларлыҡмы икән ни? *(Ҡапыл тынып ҡала.)* Балам... балам... балам...

Диуана Шәфәҡ эргәһенә килеп сүгәләй. Башын һыйпай.

Диуана. Илама, Шәфәҡ, һин минең кәләшем булырһың.

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Бер нисә көн үткән. Тәнкәбикәнең тирмә эсе. Аҡһаҡалдар килгән. Дәрүиш тә бар. Әле генә ит ашап бөткәндәр. Ҡымыҙ эсергә керешергә торалар. Шәфәҡ бер ситтә.

Тәнкәбикә. Аҡһаҡалдарҙың ҡулдарына һыу ҡой ҙа, килен, эшеңде ҡара.

Шәфәҡ, тас, ҡомған тотоп, ҡунаҡтарҙың ҡулдарып йыуҙыра.

Беренсе аҡһаҡал. Рәхмәт, байбисә, һыйың тәмле булды. Ризығыңды һәр саҡ шулай киң ҡылһын.

Икенсе аҡһаҡал. Илмырҙаның йомартлығы ҡороңдо ташлап китмәне, килен, бәрәкәт өҫтөнә бәрәкәт күр. Һин байбисә генә түгел — бейбисәһең.

Өсөнсө аҡһаҡал. Йомартлыҡтан мөлкәт кәмемәй ул. Көн-фәйәкүн. Донъя беҙҙән дә тороп ҡалыр. Ашап-эсеү, эһем, үҙе бер ғүмер ул. *(Шәфәҡ һыу ҡойғансы, бармаҡтарын ялап ҡуя.)*

Тәнкәбикә. Инде ҡымыҙынан етешегеҙ.

Өсөнсө аҡһаҡал. Аштан оло булып булмаҫ, етешербеҙ. *(Ҡомһоҙланып ҡымыҙ эсә.)* Тамырҙарға таралып китте бөтөнләй.

Шәфәҡ сыға.

Тәнкәбикә. Ырыҫҡол бейгә лә хәбәр иттергәйнем. Ниңәлер, килмәй ҡалды.

Өсөнсө аҡһаҡал. Ил башының илдә эше булғандыр.

Икенсе аҡһаҡал. Бей биләмдә йөрөмәҫ.

Беренсе аҡһаҡал. Килмәҫ бейҙе көтөп булмаҫ.

Өсөнсө аҡһаҡал *(ҡымыҙ эсә)*. Эйе лә баһа.

Тәнкәбикә. Төндәр йоҡламайса уй уйланым. Бер төрлө лә осона сыға алманым. Һеҙҙән һорай торған оло кәңәшем бар. Ғәҙел хөкөмөгөҙҙө сығарығыҙ, аҡһаҡалдар.

Беренсе аҡһаҡал. Эйе, байбисә, донъяң кителеп ҡуйҙы. Әммә үлгән артынан үлеп булмай. Тереләр тере тормош менән көн күрә.

Өсөнсө аҡһаҡал *(ҡымыҙ эсә)*. Ашай-эсә, донъя көтә.

Беренсе аҡһаҡал. Үтә өҙгөләнмә, байбисә.

Тәнкәбикә. Өҙгөләнеп хәҙер ни ҡылаһың? Донъяны бер яйға һалыу кәрәк.

Икенсе аҡһаҡал. Бына кәңәшәйек.

Тәнкәбикә. Шәфәҡ килен еләк кеүек көйө ирһеҙ ҡалды. Беләһегеҙ, уның өсөн көтөү-көтөү мал түләнем. Аҡйегетем өсөн дә Ырыҫҡолға ҡалым түләнеп бөттө. Инде ни ҡылайым, аҡыл бирегеҙ.

Икенсе аҡһаҡал. Олатайҙар беҙгә васыят әйтеп, аҡыл биреп, йола ҡалдырған. Шул йоланан уҙып булмаҫ, байбисә.

Өсөнсө аҡһаҡал. Кинйә улың тураһында ла онотмайыҡ әле, килен. Үҫеп, буйға етеп килә кинйәң. Нисә йәштә инде?

Тәнкәбикә. Бала ғына әле. Ун икеһе яңы тулып килә.

Өсөнсө аҡһаҡал. Мин туғыҙҙа еңгә бисә ҡуйынына индем.

Беренсе аҡһаҡал. Саҡырғас та, ниәтеңде белдем, байбисә. Бер һинеке генә түгел, бөтә ырыу хәстәре был. Уйлай килдем, уйлай ултырҙым. Бына, ҡорҙаш әйткәнсә, боронғолар кәңәшенә ҡолаҡ һалайыҡ.

Икенсе аҡһаҡал. Ишмырҙаны еңгә бисә ҡуйыны-на индереп булмай, уның тере ағаһы бар. Йола быны ҡабул итмәйәсәк, ҡарттар.

Беренсе аҡһаҡал. Уйлай килдем, уйлай ултырҙым. Бында бары бер генә сара ҡала, байбисә. Шәфәҡ килен Аҡйегеткә яҙған, күрәһең. Ә Ырысҡол алған ҡалымды ҡайтарһа, ҡыҙын, ана, Ҡарағужа тоҡомона бирер. Яусылары ла килеп йөрөнө.

Дәрүиш борсолоп китә.

Тәнкәбикә. Ҡалымы ҙур, ҡайтара алырмы икән? Бейҙең дә бит малы иҫәпле.

Өсөнсө аҡһаҡал. Ҡайтармаһа, Зөбәржәтте кинйәң Ишмырҙаға йәрәштереп, ике туйҙы бергә үткәрерһең. Ашап-эсеп, күңел асып ҡалыр ырыу. Илдә булмаған эш түгел дә.

Тәнкәбикә. Аҡйегет менән Зөбәржәт бер-берен үлеп ярата. Ун ете йыл көткән өмөттәрен өҙөү ҡыйын бит әле.

Икенсе аҡһаҡал. Һөйөшөү ул — шайтан шауҡымы. Бәндәләрҙе аҙҙырып, харам эш эшләтеп, бәлә килтергән шул түгелме ни? Шул. Илдә быны ғибрәттәре бик күп.

Тәнкәбикә *(һиҫкәнеп китә)*. Эйе, уныһы шулай.

Беренсе аҡһаҡал. Беҙҙең ихтыярҙа түгел, килен, йола шулай ҡуша. Ырысҡолдан ҡалым кире ҡайтмаһа, ике улыңды берсә кәләшле итәһең. Әммә Юлмырҙаның хәбәре килеүгә ҡырҡ көн тулғанды көтөү кәрәк.

Икенсе аҡһаҡал. Был кәңәште доға менән беркетәйек, ҡарттар.

Дәрүиш. Ил ағалары, саҡ ҡына сабыр итегеҙсе. Мосафирҙың да бер кәлимә һүҙен тыңлағыҙ.

Өсөнсө аҡһаҡал. Йә, пәйғәмбәр илсеһе ни әйтер?

Дәрүиш. Уйлап эш итегеҙ, аҡһаҡалдар. Ун икеһе тулмаҫ үҫмер әле никах йәшенә инмәгән. Был — изге ҡанундарға һыя торған эш түгел. Уйлашығыҙ.

Өсөнсө аҡһаҡал. Даланың үҙ ҡануны, үҙ йолаһы бар, Дәрүиш, улар беҙҙең өсөн изгеләр.

Дәрүиш. Юҡ, юҡ, уҙамандар, һеҙ пәйғәмбәргә хилаф эш эшләйһегеҙ. Шәфәҡтең, тәңребеҙгә иман килтереп, гонаһһыҙ йән булып, тол йәшәүе ырыуығыҙға бәрәкәт кенә арттырыр, уйлашығыҙ.

Ҡарттарҙа икеләнеү һиҙелә.

Тәнкәбикә. Дәрүиш, бәлки, хаҡ һөйләйҙер, аҡһаҡалдар. Хөкөм сығарырға ашыҡмағыҙ.

Икенсе аҡһаҡал. Юҡ, байбисә, барыбыҙҙан да оло йолабыҙ бар. Беҙ донъяла байтаҡ йәшәгән ҡарттарбыҙ — күпте күрҙек. Әммә йола боҙған әҙәмдәрҙең игелек күргәнен күргәнебеҙ юҡ әле.

Дәрүиш. Өҫтөгөҙгә олуғ гонаһ алаһығыҙ, ҡарттар.

Беренсе аҡһаҡал. Бына, кем әйткәнсә, беҙҙән оло ил йолаһы бар. Беҙ бары ул ҡушҡанды ғына башҡарабыҙ.

Дәрүиш. Пәйғәмбәр зыяратының изге ташы менән ант итеп әйтәм — хөкөмөгөҙ хата.

Өсөнсө аҡһаҡал. Пәйғәмбәрҙең зыяраты, Дәрүиш, беҙҙән алыҫ, тәүбә, тәүбә, беҙ хөр далала йәшәйбеҙ, уның үҙ хөкөмө бар. Иманыбыҙ һеҙҙеңсә булһа ла, инаныуыбыҙ үҙебеҙсә.

Дәрүиш. Әле булһа ҡырағайҙар һеҙ! Ҡанундарығыҙ ҙа ҡырағай. Һеҙгә иман һеңмәй.

Беренсе аҡһаҡал. Беҙҙе былай кәмһетергә бирәүгә лә юл ҡуймайбыҙ, Дәрүиш! Хатта һиңә лә...

Икенсе аҡһаҡал. Әйҙәгеҙ, ҡарттар, доға ҡылып, һүҙҙе теүәлләйек.

Дәрүиштән башҡалары доға ҡыла.

Беренсе аҡһаҡал. Ярай, килен, беҙ ҡуҙғалышайыҡ инде. Һый-хөрмәтең өсөн рәхмәт, дәүләттәрең артһын.

Тора башлайҙар.

Өсөнсө аҡһаҡал *(ҡымыҙ эсә)*. Беҙҙең ашыға торған заманыбыҙ уҙған да... Табын ташлап китеү килешерме?

Икенсе аҡһаҡал. Килешер! Әйҙә, әйҙә, ҡуҙғалайыҡ.

Тәнкәбикә. Оло башығыҙҙы кесе итеп килдегеҙ, олатайҙар. Сауабығыҙ артһын, аяҡ-ҡулдарығыҙ һыҙлауһыҙ булһын.

Китәләр. Тәнкәбикә оҙата сыға.

Дәрүиш. Ҡәһәр һуҡҡыры! Юҡ! Барыбер мин тигәнсә булыр. Тәнкәбикә — минең ус төбөмдә. Теләһәм — асам, теләһәм — йомам. *(Усын бер асып, бер йома.)*

Тәнкәбикә урап инә.

Тәнкәбикә. Һүҙең йыҡҡан өсөн рәнйемә, Дәрүиш. Һин беҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәрҙе белеп бөтөрмәйһең. Үҙемә лә, йөрәгемде һурып алған кеүек, ауыр был ҡарарға килеү. Нисә күҙҙән ҡанлы йәштәр ағасаҡ. Әммә йола беҙҙең өсөн барынан да өҫтөн. Һин белмәйһең шул...

Дәрүиш. Һеҙҙең ҡырағай йолаларығыҙҙы белмәйем, байбисә. Уныһы дөрөҫ. Әммә мин үҙемә нимә кәрәген беләм.

Тәнкәбикә. Теләгеңде әйт, мосафир, бары үтәлер.

Дәрүиш. Вәғәҙәңде улай еңел бирмә, байбисә. Ахыры ауырға тура килмәһен.

Тәнкәбикә. Ниндәйҙер шомло һүҙҙәр һөйләйһең, ҡунаҡ. Ҡылыҡтарың да үтә сәйер. Сит донъя кешеһе һин беҙгә.

Дәрүиш. Ҡырҡ йыл ошо юлда йөрөп йонсоном мин, байбисә. Был ҡулдарымдың мосафир таяғынан башҡа нәмә тотҡаны юҡ. Унда ла бит йылы ҡан йүгерә.

Тәнкәбикә. Торған һайын һүҙең сәйерерәк. Уны ниңә миңә һөйләйһең?

Дәрүиш. Һөйләр кешем бер һин булған өсөн.

Тәнкәбикә. Бәндәләрҙе яҙмыш йөрөтә, Дәрүиш. Һине беҙгә ул килтерҙе, ул уҡ алып китер.

Дәрүиш. Минең дә ашығыр заманым үтеп бара, байбисә...

Тышта тояҡ тауышы ишетелә. Кемдер аттан һикереп төшә.

Тәнкәбикә. Кемдер аттан һикереп төштө. Аты үтә ярһыған. Алыҫ юлдан сапҡан һыбай булыр.

Ырыҫҡол инә. Байбисә ҡаршыға бер нисә аҙым атлай.

Ырыҫҡол. Йорт-ерең, мал-тыуарың имен булһын, байбисә. Әссәләмәғәләйкүм, Дәрүиш!

Дәрүиш. Вәғәләйкүмәссәләм, бей!

Тәнкәбикә. Шулай булһын, Ырыҫҡол бей. Әйҙә, түремдән уҙ. Килмәүеңә аптырап, әллә үҙем барайыммы, тип тора инем әле.

Ырыҫҡол. Сапҡынның килгәндә, һунарҙа инем. Хәбәр еткәс, кире боролоп ҡайттым. Аҡһаҡалдар таралышҡан икән.

Тәнкәбикә. Оҙаҡ көттөләр шул.

Ырыҫҡол. Йә, ултырып доға ҡылайыҡ.

Доға ҡылалар.

Тәнкәбикә. Һунар шәп булдымы, Ырыҫҡол бей?

Ырыҫҡол. Юҡ, байбисә, кейек йонсоу быйыл. Ике һуйыр алдым ни бары. Йылдар ауыр килер, ахыры.

Тәнкәбикә. Хәйерлегә булһын.

Ырыҫҡол. Аҡһаҡалдар ни хөкөмгә килде, байбисә?

Тәнкәбикә. Шул, йоланан уҙып улар ни әйтһен. Аҡйегет өсөн йортта — төшкән килен бар. Алған ҡалымды теүәл ҡайтарһаң, Зөбәржәткә йәнә үҙең хужа. Ҡайтармаһаң, етеп килгән кинйә улым бар. *(Бей алдына ҡымыҙ ҡойоп ҡуя.)* Ҡымыҙынан рәхим ит, бей, итенә өлгөрә алмай ҡалдың.

Ырыҫҡол. Мин үҙем дә шуға ашығып килдем, байбисә. Зөбәржәткә яусы килгән ер ҙә бар. Ҡарағужа ҡуймаҫ, ныҡыш бәндә, тағы ебәрер. Туғанлашырға насип булмағандыр, күрәһең.

Дәрүиш. Мал-мал тиһегеҙ ҙә балаларығыҙҙы онотаһығыҙ, Ырыҫҡол бей.

Ырыҫҡол. Унығы, Дәрүиш, һинең ҡайғың түгел. Шулай, байбисә, бар малыңды кире ҡыуҙырырмын. Бары ла иҫәпле.

Тәнкәбикә. Әүәл йылдарҙа биргәндәрҙең үрсемен дә берәм-берәм һанап ҡайтарырһың.

Ырыҫҡол. Бына һөйләшәйек. Үрсемен күпме һорайһыңдыр?

Тәнкәбикә. Бүтән кеше булһа, бермә-бер тип әйтер инем, һинең бейлек дәрәжәңде лә мал иҫәбенә индереп, ике башҡа бер баш булһа, күнермен. Бер аҡһаҡ бәрәс тулмаһа ла, риза түгелмен.

Ырыҫҡол *(һикереп тора)*. Һин самалап һөйлә, байбисә! Бейлек дәрәжәмде мал иҫәбенә индереп, минең исемемдә хурлайһың.

Тәнкәбикә. Ҡуй, ярһыма, Ырыҫҡол бей, үҙең дә иҫән, дәрәжәң дә иҫән, шуға күрә генә мал иҫәбенә индерәм.

Ырыҫҡол *(ниҙер хәтерләп)*. Ярай, байбисә, бурысыңды ҡайтарҙың был йәһәттән. Минең шаян һүҙҙәремде ысынға алғанһың икән теге саҡта.

Тәнкәбикә. Шулай, Ырыҫҡол, бейлек ғүмерлек булһа ла, ғүмер мәңгелек түгел. Ә тегендә бөтә бәндә тигеҙ.

Ырыҫҡол. Ай-һай, кенәсел дә икәнһең.

Тәнкәбикә. Хөрмәтенә күрә доғаһы, бей.

Ырыҫҡол. Үрсем һорап, мине терелэй талайһың бит, былай булғас.

Тәнкәбикә. Хәләл малымды һиңә харам итеп ҡалдыра алмайым.

Ырыҫҡол. Ул замандан бирле нисәмә йот үтте. Күпме мал ҡырылды. Шулай булғас, ниндәй үрсем торһон? Һин мине бөтөнләй хафаға һалдың.

Тәнкәбикә. Дөрөҫ, бей. Йоттар булды. Әммә үҙең яҡшы беләһең, ҡалым малына йот ҡағылмай, үҙ малыңды ғына ҡыра.

Ырыҫҡол. Ырыҫҡол бей тигән атым бар. Һүҙ әрәм итеп, ваҡлашып тормам. Тейерен генә һора.

Тәнкәбикә. Мин тейерен әйттем.

Дәрүиш. Байбисәнең нәфсеһе былай ҙа ҙур түгел, бей. Артыҡ һораһа ла, форсаты бар.

Ырыҫҡол. Һин дин әһеле, Дәрүиш, донъя мәшәҡәттәренән алыҫ кеше. Ҡыҫылмағанда ла зарар булмаҫ.

Дәрүиш. Ихтыярығыҙҙа, бей.

Тәнкәбикә. Ярай *(баҫым яһап)*, минең ихласлығымды бел, бишкә берҙе өҫтәһәң, ҡабул итермен.

Ырыҫҡол. Унға берҙе ал да бәхилләшәйек.

Тәнкәбикә. Бей һүҙе түгел, бисә һүҙе был.

Ырыҫҡол. Ярай, еңдең мине, байбисә. Малым ҡиммәт түгел, ихтыярым ҡиммәт. Бишкә берҙе ҡушып, ҡыуып килтерерҙәр. Хуш, байбисә, тар һуҡмаҡта осрашырға насип булмаһын һинең менән. Ҡыҙым һинең ырыуыңдан кире ҡайтыуына үтә ризамын.

Ҡапыл боролоп китмәксе итә. Тышта йәнә ат килеп туҡтай. Бөйөрөн тотоп, Сапҡын килеп инә.

Сапҡын. Яман хәбәр, бейем, яман хәбәр! *(Ауыр тын ала.)* Бөйөрөмә уҡ тейҙе.

Ырыҫҡол. Бөйөрөңдө ҡуй, хәбәреңде һөйлә.

Сапҡын. Үткән төндә алыҫ көтөүҙәргә ҡара болот төҫлө яу ябырылды. Ҡарағужа кешеләре барымтаға килгән шулай. Бөтә малды ҡыуып алып киттеләр.

Ырыҫҡол *(сапҡынға ҡамсы менән һуға)*. Ә һеҙ нимә ҡарап торҙоғоҙ? Ҡурҡаҡтар! *(Тағы һуға.)*

Сапҡын *(бөгөлөп төшә)*. Беҙ төн буйы һуғышып ҡыуа барҙыҡ. Бөтә көтөүселәр үлеп ҡалды. Бер мин генә, ятып һушым йыйғас, йәйләүгә саптым. Эсемә ҡан һауҙы. Хәлем бөтә.

Ырыҫҡол. Ҡарағужа яман юлға баҫҡан. Барымтаға ҡаршы хәҙер ҡанлы үс — ҡарымта көтһөн — мин Ырыҫҡол беймен! *(Ҡамсы һелтәй.)*

Тәнкәбикә. Ҡарымтаһы әле ҡар яуғанда. Малһыҙ ҡалып бөлдөң түгелме, бей?

Ырыҫҡол. Бөлдөм, бөлдөм! Күңелең булһын, байбисә, ҡыуан!

Тәнкәбикә. Ни эшләп ҡыуанайым, ти, минең малым да бит шунда китте.

Ырыҫҡол. Малың китһә, һиңә килен ҡалды. Ә минең малым да, ҡыҙым да ҡалманы. Ах, аяуһыҙ мөртәт

Ҡарағужа! Тамсы-тамсы ҡаныңды ҡоймаһам, Ырыҫҡол бей тигән атым ҡороһон, барса затым ҡороһон!

Тәнкәбикә. Былай булғас, Ырыҫҡол бей, туғанлашмай башҡа сарабыҙ юҡ.

Ырыҫҡол. Һин теләгәнсә булды барыһы ла. Тағы еңдең, байбисә.

Дәрүиш *(үҙ алдына)*. Тимәк, әле уйын дауам итә.

Тәнкәбикә. Иманым камил, Зөбәржәтте үҙ ырыуымдан ебәргем килмәгәйне. Күңелем риза.

Ырыҫҡол *(сапҡынға)*. Тиҙерәк барып атыңа мен. Халыҡ йыйып, ҡыуа сығырбыҙ. Бәлки, баҫтырып та өлгөрөрбөҙ. Йәһәтерәк ҡуҙғал, тимен һиңә!

Сапҡын саҡ атлап сығып китә.

Тәнкәбикә. Аҡ юл теләп ҡалам.

Ырыҫҡол. Амин! Хуш, байбисә. Фатиханды бирсе, Дәрүиш.

Дәрүиш. Доға ҡылып, теләк теләрмен. *(Аҫтыртын йылмая.)*

Ырыҫҡол китә.

Тәнкәбикә. Баҫтырырһың инде далалағы елде! Бәлә ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй, Ырыҫҡол бей.

Дәрүиш. Бына тағы икәү генә тороп ҡалдыҡ, байбисә.

Тәнкәбикә. Форсат булһа, яңғыҙ ҡалыр инем. Дәрүиш. Уйҙарымдың осона сыҡҡым килә.

Дәрүиш. Мин ашыҡмайым, уйла. Әммә уйың төптө дөрөҫ түгел. Аҡйегет менән Зөбәржәтте айырып, ирең васыятына хыянат итәһең. *(Башын эйеп сығып китә.)*

Тәнкәбикә. Ни эшләп һуң был Дәрүиш гел бер яҡты ҡайыра? Беҙҙең мәшәҡәттә уның ни эше бар? Әллә ысынлап та Илмырҙаның васыятына хилафлыҡ эшләйбеҙме? Был бәләләр килерен ул белгәнме ни? Уртаға һуҡҡан йылан кеүек, өҙгөләнә йәнем... Ни ҡылайым?

Пауза. Диуана йүгереп инә.

Диуана. Байбисә апай, байбисә апай! Талҡыуаҡҡа еткәс тә, Ырыҫҡол бейҙең аты йығылып үлде. Бына шулай тәкмәс-тәкмәс, тәкмәс-тәкмәс ҡолап китте теге. *(Тәкмәсләп күрһәтә.)*

Тәнкәбикә. Бей иҫәнме?

Диуана. Шунда уҡ һикереп торҙо. Ялсығол уға беҙҙең ҡола юртаҡты тотоп килтерҙе.

Тәнкәбикә. Улай имен ҡотолғас, ярай, бик һәйбәт.

Диуана. Бейҙең кәпәсе әллә ҡайҙа тәгәрәп китте. Кәпәсһеҙ башында бынау саҡлы *(йоҙроғон күрһәтә)* ороһо бар.

Тәнкәбикә. Яныма килсе, Диуана.

Диуана Тәнкәбикә эргәһенә килә. Тәнкәбикә уның башынан һыйпай.

Диуана. Һин сәсемдән һөйһәң, шундай рәхәт була. *(Көлә.)* Гел шулай мине һөйөп кенә тор, йәме, байбисә.

Тәнкәбикә. Гонаһһыҙ йән эйәһе бит һин, Диуана. Һиңә ҡағылһам, үҙемдең дә күңелем йомшарып китә.

Диуана. Ә минең илағым килә лә ҡуя. Тик иламайым ғына. Мин илаһам, һиңә ҡыйын була.

Тәнкәбикә. Илама, Диуана. Миңә былай ҙа бик ҡыйын. *(Башынан һыйпай.)*

Диуана *(һуҙып)*. Миңә рәхәт. Ишмырҙаны ла шулай ярат, йәме.

Тәнкәбикә. Донъяларыбыҙ сыуалды, Диуанам, бик сыуалды. Ниҙәр ҡылырға ла зиһенем етмәй.

Диуана. Һинең менән икәү генә бүтән йәйләүгә күсәйек тә китәйек. Ишмырҙаны ла алайыҡ йәнә. Әйҙә, Шәфәҡ тә барһын. Аҡйегет менән Зөбәржәтте лә ҡалдырмайыҡ. Икеһенә генә уларҙың ҡыйын булыр, юғиһә. Ялсығол да һәйбәт, уны ла алырбыҙ. Дәрүиш ана Ырыҫҡол йәйләүенә китһен.

Тәнкәбикә. Һин тигәнсә генә ҡотолоп булһа икән. Күрер ҡазаларыбыҙ бында тороп ҡалмаҫ шул. Улар ҙа эйәреп барыр.

Диуана *(онотолоп)*. Йәнә Һәлберғолаҡты ла алайыҡ. Юғиһә ҡалған һөйәкте кем кимерер?..

Тәнкәбикә. Ярай. *(Як-яғына ҡарана.)* Ана, ҡойоп ҡымыҙ эс.

Диуана *(ҡымыҙ ҡоя)*. Аҡйегеттәр аҡ тирмә эргәһендә уйын ҡорған булған.

Тәнкәбикә. Көн шулай кисләнеме ни?

Диуана. Ҡояш Тәкүлгән ҡаяға килеп төртөлдө. Әле ҡая башында эленеп тора.

Тәнкәбикә. Барсы, Аҡйегетте бында саҡырып килтер. Зөбәржәт тә әле китмәгәндер.

Диуана. Шәфәҡ әйтте уға, бөгөн ҡайтмаҫһың, тине, минең ҡунағым булырһың, тине. Шәфәҡ әйтте.

Тәнкәбикә. Шәфәҡ менән Ишмырҙаны ла саҡыр.

Диуана. Ырғып сабайыммы, юртып ҡына барайыммы, байбисә?

Тәнкәбикә. Юртып ҡына бар.

Диуана. Ярай. *(Китә.)*

Тәнкәбикә. Рухыма ныҡлыҡ бир, хоҙайым, ихтыяр бир, күңелемдәге ҡаушау, икеләнеүҙәрҙе алып ташла. Хөкөм ҡаты, әммә уны мин түгел, яҙмыш үҙе алдан сығарған.

Дәрүиш инә.

Дәрүиш. Кисер мине, байбисә. Далаға сығып ғибәҙәт ҡылайым тигәйнем. Бәлки, һуңғы ғибәҙәтем булыр. Тиҫбем бында ҡалған. Шуны ғына алып китәйемсе.

Тәнкәбикә. Ал. Әле балаларҙы саҡырттым. Аулаҡ саҡта, аҡһаҡалдарҙың хөкөмөн еткерәйем тигәйнем.

Дәрүиш. Төшөнәм, байбисә. Ҡамасауым теймәҫ. Әммә һуңыраҡ һиңә һуғылмайса тәҡәтем юҡ. Әйтер һүҙем йөрәгемде өйкәй, тынғы бирмәй.

Тәнкәбикә. Бәлки, иртән, хәйерлерәк мәлдә килерһең.

Дәрүиш. Минең иртән түгел, кис һөйләшә торған һүҙем бар. *(Башын эйеп сыға.)*

Тәнкәбикә. Торған һайын шомландыра был Дәрүиш...

Аҡйегет менән Зөбәржәт инә. Шаттар.

Аҡйегет. Әсәй! Һин саҡырҙыңмы беҙҙе? Диуана килеп шулай һөрәнләне.

Тәнкәбикә. Эйе. Ағайыңдың үле хәбәре килеүенә ҡырҡ көн тулмаған. Нисек күңелегеҙ төшә шул уйынға?

Аҡйегет. Беҙ бит былай ғына, әсәй, эс бошҡандан ғына.

Зөбәржәт. Ағаһына арнап, Аҡйегет бөгөн йыр сығарҙы. Күңеле бойоҡ уның. Был моңһоҙ икән тип уйлама, байбисә.

Аҡйегет. Ағайым ҡайғыһы мине аяғымдан йыға, әсәй.

Шыбырлап ҡына яуған ямғыр, тимә,
Күҙ йәштәрем ҡойола, ағайым,
Ямғыр һыуы йыуған ҡара ярҙай,
Йөрәккәйем уйыла, ағайым...

Тәнкәбикә. Етер, улым, бауырымды телгеләмә. Барыбыҙҙың да өмөт-шатлыҡтарыбыҙҙы үҙе менән ҡара гүргә алып китте Юлмырҙа. Эй Юлмырҙа, Юлмырҙа!

Аҡйегет *(ҡаушап)*. Улай тимә, әсәй. Алда беҙҙең башланмаған ғүмеребеҙ бар. Ғүмер булғас, шатлығы ла булыр. Бөтөнләйгә өмөт өҙмәйек.

Ишмырҙа йүгереп инә.

Ишмырҙа. Әсәй, әсәй! Ҡуйсы Бәймәт менән һорай, кәләш алғас, уны ни эшләтәһең, ти? Минме, минме, уны ҡамсы менән ярам, тинем. Дөрөҫ әйткәнменме, әсәй?

Тәнкәбикә. Дөрөҫ түгел! Иҫәр һүҙ һөйләйһең. Ҡамсы менән кәләш ярғанды ҡайҙа күргәнең бар?

Ишмырҙа. Анау ҡылый Йылҡыбай кәләшен көн дә яра.

Тәнкәбикә. Ҡанһыҙҙыр ул.

Шәфәҡ, уның артынан Диуана инә.

Шәфәҡ. Саҡырыуың хата түгелдер, ҡәйнәм?

Тәнкәбикә. Түгел. Йәгеҙ, ултырышығыҙ. Һин, Диуана, тыңлап ҡына тор.

Диуана. Ярар, байбисә.

Аҡйегет. Кискә ҡаршы йыйҙың беҙҙе, әсәй, әйтер һүҙең яҡшы була күрһен.

Тәнкәбикә. Алдан әйтеп ҡуям — төнгә ҡаршы имен хәбәр көтмәгеҙ.

Бөтәһе лә борсола.

Шәфәҡ *(үҙ алдына)*. Уйлағандарым алдарыма ғына килмәһен...

Тәнкәбикә. Ни тип башларға ла аптырайым. Шулай. Бая аҡһаҡалдарҙы — ырыуыбыҙҙың күркен йыйып, кәңәш һораным. Ырыҫҡол бей ҙә бында булып китте. Донъябыҙҙың бер яйына сығыу кәрәк. Аҡһаҡалдар боронғолар васыятына тоғро хөкөм сығарҙы.

Аҡйегет *(һикереп тора)*. Ниндәй хөкөм ул, әсәй? Беҙҙең сығыр хөкөмөбөҙ сыҡҡан.

Тәнкәбикә. Беҙҙең хөкөмөбөҙ ҙә, хакимыбыҙ ҙа быуындан быуынға күсеп килгән йола, балам. Унан уҙып һис ни ҡыла алмайбыҙ.

Аҡйегет. Нимә булды, әсәй? Йәнде ыҙалама, тиҙерәк әйт!

Тәнкәбикә. Ағайың Юлмырҙа үлеп ҡалғас, донъябыҙҙың аҫты-өҫкә килде. Көткән өмөттәребеҙ өҙөлөп ҡалды. Аҡһаҡалдар, йолабыҙҙы раҫлап, шуны әйттеләр: Аҡйегет, һиңә Шәфәҡ яҙған икән, ә һиңә, Ишмырҙа, — Зөбәржәт. Ағайың хәбәренә ҡырҡ көн тулғас, туй яһарбыҙ.

Ҡаушап ҡалалар.

Ишмырҙа. Миңә кәләш кәрәкмәй, әсәй! Бая бит мин юрамал ғына әйттем. Диуанаға ана кәләш кәрәк. Миңә кәләш кәрәкмәй, кәрәкмәй, кәрәкмәй! *(Тирмәнән сығып йүгерә.)*

Диуана. Ҡуй, ҡуй, байбисә, миңә кәләш кәрәкмәй! Кәләш алһам, миңә яҙыҡ була. Ҡуй, байбисә, ҡуй, ҡуй. Ана, икеһен дә Аҡйегетҡә бир. *(Арты менән шыуып, тирмәнән сыға.)*

Зөбәржәт менән Аҡйегет һаман аңына килә алмай тора.

Шәфәҡ. Теләһәң аҫ, теләһәң киҫ, ҡәйнәм, ғүмерлек был яфаларға һалма мине. Саҡ эленеп торған күҙгә япраҡ кеүек кенәмен. Теймә миңә, үҙем тиҙ үк өҙөлөп төшөрмөн. Тағы өс кешенең күҙ йәштәренә сәбәпсе итмә мине, әсәкәйем! *(Быуылып илай.)*

Аҡйегет *(ҡысҡырып көлөп ебәрә)*. Ҡаянан ҡаяға һикереп йөрөгән ҡоралайға бойороҡ биреү менән бәрәбәр был, әсәй. *(Көлә.)* Бойороп түгел, уны атып ҡына алырға мөмкин. Беҙгә атырға һинең ҡулың бармаҫ. Йәндәребеҙ беҙҙең ҡушылып үҫкән. Һеҙ уларҙы үҙегеҙ ҡуштығыҙ. Ә, беләм, әсәй, һин был һүҙҙәрҙе беҙҙе һынар өсөн генә әйтәһең.

Зөбәржәт. Ғүмер буйы ҡолоң, олторағың булырға әҙермен, байбисә, тик айырма мине Аҡйегеттән!

Аҡйегет. Улай тимә, Зөбәржәт, беҙ ҡол булып түгел, хөр булып йәшәргә килгәнбеҙ. Атайым бит үҙе: «Хөрлөк — бәхет», — ти торғайны. Ниңә өндәшмәйһең, әсәй? Әйт инде, әйт, һеҙҙе һынайым, тиң.

Тәнкәбикә. Һеҙ һыналған, һынап тораһы юҡ. Күктәгеләр ихтыярын алдан белмәйенсә, ашыҡҡанбыҙ икән, балалар. Тәҡдир беҙ тигәнсә түгел икән.

Зөбәржәт *(Тәнкәбикәнең аяғына йығыла)*. Беҙҙең тәҡдиребеҙ — һин, байбисә. Ни ҡылһаң да, үҙ иркеңдә. Айырма беҙҙе! *(Илай.)*

Аҡйегет *(Зөбәржәттең ҡулынан тота)*. Теҙләнеп ялбарырға беҙҙең ни ғәйебебеҙ бар? Тор, Зөбәржәт! Беҙ тыуғас та ҡауышҡанбыҙ, айырһа ла, ҡара гүр генә айыра алыр беҙҙе.

Тәнкәбикә. Тәңренең ҡөҙрәте сикһеҙ икән.

Зөбәржәт. Улай булғас, ниңә яҡшылыҡҡа түгел, яманлыҡҡа ғына сикһеҙ ул?

Тәнкәбикә. Тәүбә, тәүбә, тиген. Яҙыҡ һүҙ һөйләйһең, Зөбәржәт!

Зөбәржәт. Ҡушылып ҡына үҫкән ике талды тамырынан ҡырҡып алыу яҙыҡ түгелме ни, байбисә? Беҙҙең күҙ йәштәребеҙ һинең бауырыңа ҡара ҡан булып һарылыр бит, байбисә.

Аҡйегет. Әсәй! Әгәр беҙҙе был ҡайғыға һалыуың хаҡ булһа, хәләл һөткәйҙәрең харам булыр. Юҡ, юҡ, әсәй! Аяҡ-ҡулдарыбыҙға тимер бығауҙар һалығыҙ, тик күңелдәребеҙҙе азат ҡалдырығыҙ!

Тәнкәбикә. Тулҡын дулап ҡына ярҙан сыға алмай, улым. Ярға һуғылып, кире ҡайта. Яҙмыш йылғаһының ярҙары бейек, тешле. Уны әле һикереп сыҡҡан әҙәм юҡ.

Аҡйегет. Ә бына беҙ һикереп сығасаҡбыҙ!

Зөбәржәт. Бөтәһе лә һинең иркеңдә, байбисә!

Тәнкәбикә. Мин тәңре ҡоло, йола ҡоло. Минең иркем юҡ.

Аҡйегет. Ах, шул ҡоллоҡ! Бәндә — бәндә ҡоло, ҡанун ҡоло, йола ҡоло. Ҡол, ҡол, ҡол! Үҙҙәренә ҡанун яһайҙар ҙа, шул ҡанундың ҡоло булалар. Беҙ бит мәйет түгел, әсәй, тере кешеләр. Ниңә һәр бер тере йәнде ҡанун ҡәберенә тығырға! Беләм, йола ҡуша — Шәфәҡ менән миңә ҡауышырға. Ул да, мин дә быға риза түгел. Ут менән һыу нисек ҡауышһын?

Тәнкәбикә. Беҙҙең теләк түгел, күктәгенең ирке.

Шәфәҡ. Зарҙарыбыҙ ниңә уға барып етмәй? Шундай алыҫмы икән ни? Барса ҡолон ниңә тиң күрмәй ул?

Аҡйегет. Алла ҡоло булыу, еңгәм, әле бер хәл. Үҙ-үҙебеҙгә әле беҙ ҡол булып йәшәйбеҙ. Мин табынған Аҡман сәсән әйткән:

Ҡолдар булыу яман түгел,
ҡоллоҡ яман.
Еребеҙҙә ҡолдар бөтөр
берәй заман.
Ҡолдар бөтөр. Рухыбыҙға
батша булып,
Йән түрендә тәхет табыр
ҡоллоҡ һаман.
Рухтарҙы шул бахыр иткән
ҡоллоҡ яман.

Тәнкәбикә. Аҡман сәсәнде илдән ҡыуҙылар, шуны ла онотма.

Аҡйегет. Уның йырын да, рухын да илдән ҡыуа алманылар барыбер.

Тәнкәбикә. Ырыу уға ләғнәт уҡыны.

Аҡйегет. Ул ырыуға үҙе ләғнәт уҡып китте.

Тәнкәбикә. Мин илле йыл йәшәп, күпте күрҙем. Йолаларҙы һанға һанамаған берәүҙең дә әле һәләкәттән ҡотолғаны юҡ. Эйе, быны мин бик яҡшы беләм. Бар теләгем — һеҙҙе шунан аралау.

Аҡйегет. Аралама, әсәй. Беҙҙе айырыу үҙе һәләкәт буласаҡ.

Шәфәҡ. Эсемдәге йәнем саҡ-саҡ быҫҡып яна. Юлмырҙа хаҡына ҡалдыр мине, ҡәйнәм! Үҙем янып, үҙем генә һүнәйем. Ҡалдыр мине, ҡәйнәм!

Тәнкәбикә *(ҡаты)*. Һүҙең, килен, үтә күбәйҙе. Сығырыңдан сыҡма. Ырыу һине көтөү-көтөү мал биреп алды. Һиңә ырыу хужа. Юлмырҙа менән һөйөшөп ҡауыштығыҙ. Шуға күрә бәхетең булманы. Мөхәббәт ул кешеләрҙе шулай зарлы итә.

Шәфәҡ. Зарлы итһә лә, моңло итһә лә, барыбер татлы ул.

Тәнкәбикә. Етте! Хисап көнөндә һеҙҙең өсөн мин яуап бирәсәкмен. Күңелемдә икеле уй юҡ. Аҡһаҡалдар ҡалай әйткән, шулай булыр. Иләҫ күңел болғаныр ҙа йәнә баҫылыр.

Зөбәржәт *(күтәрелеп Аҡйегеткә ҡарай)*. Йә хоҙайым, ни был, Аҡйегет? Ике сикә сәсең ағарған!

Аҡйегет. Рәхмәт, әсәй, ошо мәлдә мине утыҙ йәшкә олоғайттың, йөрәгемә аҡыл индерҙең. Хәҙер инде егет булып түгел, ир уртаһы булып әйтәм: Зөбәржәтһеҙ бер көн йәшәй алмаясаҡмын. Йәнебеҙ ҙә, тәнебеҙ ҙә бергә буласаҡ. Ҡарғау түгел, бөтә ырыу аяғыбыҙға йығылып ялбарһа ла, әйткәнемдән ҡайтасағым юҡ, әсәй. Күңелем ҡатты. Бер ни ҡыла алмаҫһың. Донъя ҡапыл ҡараңғыға батты. Бер ҡояшым — Зөбәржәтем генә ҡалды. *(Зөбәржәттең ҡулын тота.)* Биргән фатиханды ҡабатла, әсәй!

Зөбәржәт. Был ҡарарың мине оторо ярһытты, байбисә. Тәнемдә бер тамсы ҡаным ҡалһа, ул Аҡйегеттеке булыр. Фатиханды яңырт, булыр ҡәйнәм, булыр әсәйем!

Тәнкәбикә. Мин фатиха яңыртам тип түгел, уны кире алам тип һеҙҙе саҡырҙым. Алдығыҙҙа бына кире алам. Аҡһаҡалдар хөкөмө — хөкөм булыр. Бынан ары күрешеүегеҙгә ризалығым юҡ.

Аҡйегет. Ҡояш яҡтыһынан мәхрүм итһәң, ай яҡтыһы беҙҙе ҡауыштырыр, әсәй!

Аҡйегет менән Зөбәржәт китә.

Тәнкәбикә. Көндәр шомло, күрәсәктәр билдәһеҙ.

Шәфәҡ *(сығырға бара)*. Ҡалай ҡуйы ҡара томан төшкән.

Тәнкәбикә. Тороп торсо, Шәфәҡ, саҡ ҡына.

Шәфәҡ. Нимә, ҡәйнәм?

Тәнкәбикә. Ҡәйнә менән килен булып түгел, тиңдәш ике бисә булып һөйләшәйек әле.

Шәфәҡ. Дәрәжәбеҙ тиң түгелсе барыбер.

Тәнкәбикә. Бисә — бисә инде. Дәрәжәһе уның үҙе менән. Минең дә йәш сағым бар ине.

Шәфәҡ. Һин әле лә, ҡәйнәм, оло түгелһең.

Тәнкәбикә. Һин йәш, матурһың. Шул ғүмерҙе ниңә заяға үткәрергә? Өлөшөңә һөлөк кеүек егет яҙған. Миңә лә бик ауыр. Әммә, килен, һис бер нәмә беҙҙең ихтыярыбыҙҙа түгел.

Шәфәҡ. Йәшләй ҡапыл ҡартлыҡ басты мине.

Тәнкәбикә. Һинең йәштә мин дә, әжәл саҡырып, ғибәҙәттәр ҡылдым. Килмәне. Әҙәм бөтәһен дә үткәрә.

Шәфәҡ. Мин үткәрә алмам.

Тәнкәбикә. Күңелеңде шуға күнектер. Аҡйегеткә ихласыңды бәйлә. Башҡа сарабыҙ юҡ.

Шәфәҡ. Ыҙалама мине, ҡәйнәм. Кеше бәхетен урлап, рәхәт күрә алмам. Ундай бәхет миңә кәрәкмәй ҙә.

Тәнкәбикә. Алдағыһы, дөрөҫ, беҙгә ҡараңғы. Ә хәҙергә күнергә кәрәк.

Шәфәҡ. Күнә алмам. Үҙ аяғым менән уның эргәһенә аҡ тирмәгә барыр хәлем юҡ. Яҙығынан ҡурҡам... Унан, ҡәйнәм, бынау Дәрүиш миңә әллә нисек яман итеп ҡарай. Ҡайҙа барһам, шунда тап була...

Дәрүиш инә.

Дәрүиш. Һуңғы ғибәҙәтемде ҡылып килдем, бай-бисә. Нимә эшләптер, ҡапылғара томан төштө, хәйерлегә булһын.

Тәнкәбикә. Ҡара томан хәйерлегә булмаҫ.

Шәфәҡ шым ғына сығып китә.

Дәрүиш. Ерҙә боҙоҡлоҡ күп.

Тәнкәбикә. Ерҙә бәндәләр йәшәй. Бәндә булған ерҙә бары ла бар.

Дәрүиш. Хуш, байбисә, йәштәрҙе күндерә алдыңмы?

Тәнкәбикә. Мин уларға ырыу ихтыярын әйттем. Күнеү-күнмәү улар иркендә түгел.

Дәрүиш. Улай икән...

Тәнкәбикә. Күптән әйтәйем тип уйлап йөрөйөм, Дәрүиш. Һинең ҡылығың мине торған һайын борсой. Беҙҙең өсөн бөтөнләй ят кеше һин. Әллә, тимен...

Дәрүиш. Нимә «әллә»?

Тәнкәбикә. Әллә, тимен, беҙҙән китәһеңме? Ни теләйһең, шуны ал да кит һин беҙҙән... Донъябыҙ ҙа тыныс түгел. Оҙата барырға кешеләр бирермен.

Дәрүиш. Миңә мал кәрәкмәй, төйәк кәрәк. Йыһанды күп гиҙҙем. Тамам арыным.

Тәнкәбикә. Улай булғас, төйәгеңде эҙлә.

Дәрүиш. Байтаҡ эҙләй торғас, килеп таптым уны. Ҡартайырға һиңә килдем, Тәнкәбикә.

Тәнкәбикә. Минең төйәгемдә йыйыр ризығың бөттө, Дәрүиш. Юлыңда бул.

Дәрүиш. Мин хужаһыҙ эт түгел, байбисә. Алдатып, бер һөйәк ырғытып ҡына ҡыуып сығара алмаҫһың мине. Аңлайһыңмы?

Тәнкәбикә. Ниҙәр ишетәм мин? Бер ни аңламайым.

Дәрүиш. Аңламаһаң, аңлатырмын.

Тәнкәбикә. Юҡ, аңлатма, кәрәкмәй, тик кит бынан! Нимә кәрәк, шуны ал да кит!

Дәрүиш. Кәрәгемде, эйе, алырмын. Әммә китмәм. Китер өсөн килмәнем мин бында!

Тәнкәбикә. Юҡ, китерһең. Байбисәнең йөҙө яҡты ғына түгел, ҡулы ла ҡаты. Әйт, ни кәрәк? Бирергә ҡушырмын.

Дәрүиш. Киленең Шәфәҡ кәрәк миңә, шуны бир. Ҡалған ғүмеремде ошонда ғүмерләйем. Ниңә шулай яман ҡарайһың? Миңә әле бары илле биш кенә.

Тәнкәбикә. Туҡта! Туҡта! Өнөммө был, яман һаташыуыммы? Һин баяғы изге кеше түгелме һуң? *(Ситкә тайшана.)*

Дәрүиш. Байтаҡтан бирле изге түгелмен инде мин. Йөрөй торғас, хоҙай хәҡиҡәтенең бушлығын, ялғанлығын аңланым. Көтөү-көтөү бисә тотҡан, алтын һарайҙарҙа көн-төн кәйеф асҡан хакимдарҙың именлеген яҡлап ҡырҡ йыл буйы доға ҡылдым, ҡырҡ йыл буйы үҙемдең хәйерсе яҙмышыма табындым. Алмашына нимә алдым һуң?

Тәнкәбикә. Донъялыҡта булмаһа, әхирәттә күрерһең.

Дәрүиш. Әхирәт ул бында, ер өҫтөндә. Шәфәкте тәү күргәс, мин тертләп киттем. Емешһеҙ ағас, балаһыҙ ҡош кеүек ғүмеремдең үтеп барғанын ҡапыл хәтеремә төшөрҙө ул. Күктән ергә һөрҙө ул мине. Баҡһаң, ерҙең күпме ниғмәттәренән, ләззәттәренән мәхрүм булғанмын мин. Ҡыҫыр үткән ғүмерем өсөн үкенәм мин. Ләкин йәйге ҡояш байығанда ла янып байый. Эсемдә томаланып ҡалған ғәйрәтем, ҡанмаған танһыҡтарым тынғы бирмәй миңә. Ҡаным дау күтәрә. Мин күмелгән янар тау кеүекмен. Шәфәкте бир миңә. Бөгөн үк бир.

Тәнкәбикә. Һин аҡылдан яҙғанһың, Дәрүиш. Аңыңа кил.

Дәрүиш. Аңыма килгәнгә күрә лә кәрәгемде даулайым мин, байбисә!

Тәнкәбикә. Кит хәҙер үк бынан! Ҡарыша ҡалһаң, кешеләр саҡырып, ҡамсы һуҡтырырмын!

Дәрүиш. Донъя миңә байтаҡ ҡамсы һуҡты. Ҡамсы менән мине өркөтмә. Кешеләргә иман таратып, үҙем хәҙер мин иманһыҙ ҡалдым! Иманһыҙҙар ҡурҡаҡ булмайҙар ул.

Тәнкәбикә. Әгәр тағы бер һүҙ әйтер булһаң, аяҡ-ҡулың бәйләтеп, далаға ас бүреләргә сығарып ташлатырмын.

Дәрүиш. Ташлатырһың. Әүәл бер әңгәмә тыңла — күптән үткән хәлдәр тураһында...

Тәнкәбикә. Ҡуй, һөйләмә.

Дәрүиш. Бер мәрәкә генә ул. Бәлки, күңелең күтәрелеп китер.

Тәнкәбикә *(шикләнеп)*. Юҡ, юҡ! Мәрәкәләр тыңлар заман түгел.

Дәрүиш. Тыңлаһаң да, тыңламаһаң да, һөйләйем. Бынан утыҙ йылдар самаһы әүәл... Шулай, утыҙ йылдар булырға тейеш.

Тәнкәбикә *(үҙ алдына)*. Утыҙ йылдар?!

Дәрүиш. Эйе, утыҙ йылдар әүәл... Бынан алыҫ ерҙәрҙә йәйләүҙәрҙең береһендә йәшәгән матур йәш бер килендең ире яуға киткән. Бик һағынған, бик интеккән был башта. Әммә бәреп сыҡҡан шишмә ағыр юлын таба. Юлын тапҡас, юлдашын да таба. Әлеге килен дә күрше йәйләүҙән килеп йөрөгән бер егеткә ғашиҡ була. Көндөҙ ирен уйлай, ә төндәрен егет ҡосағына инә. Йыл да үтмәй, донъяға бер ир бала килә. Был турала кендек әбейенән башҡа бер кем бер ни белмәй. Тик баланы ҡайҙа итергә әмәл тапмай яфа сигә былар. Ләкин хоҙайҙың мәрхәмәте киң. Бирәһе килгән ҡолона — сығарып ҡуйыр, ти, юлына. Әлеге бала тыуған көндө йәйләү аша бер йәш дәрүиш уҙа. Яҙмыш ҡушҡанмылыр, ул тап әлеге тирмәгә һуғыла. Уға ҡаршы баяғы ҡарсыҡ йүгереп сыға. Шундай, шундай хәл, ти, күпме алтын кәрәк, шуны һора, ти, тик беҙҙе бәләнән ҡотҡара күр, ти. Баланы алып далаға сыҡ та иртән йәйләүгә әйләнеп кил. Килгәнеңде халыҡ күреп торһон, ти. Халыҡҡа әйт, сит йәйләү яғында бала табып алдым, шуны ни эшләтәйем икән, тиң. Һиңә әйтерҙәр, ҙур тирмәгә илт, унда бей ҡатыны йәшәй, ни эшләтергә үҙе белер, тиерҙәр. Дәрүиш бөтәһен дә теге ҡарсыҡ әйткәнсә эшләй. Баланы алып ҡалалар ҙа ҡуйсы ҡатынына имеҙеп үҫтерергә бирәләр. Дәрүиш шул көндө үк китеп бара. Бына әңгәмә ошо ине, байбисә.

Тәнкәбикә *(нык борсолоп)*. Донъя гиҙгән кешелә әңгәмә күп булыр.

Дәрүиш. Тағы шуны әйтәйем: Тәнкәбикә тигән исем әле булһа Дәрүиш ҡолағында сыңлап тора, ти.

Тәнкәбикә. Ундай исем далала күп осрай.

Дәрүиш. Йәнә тағы шул ғилләһен онота яҙғанмын. Баланың маңлайында ҙур ҡара миңе булған. Бына һинең Диуанаңдың миңе төҫлө. Мин күргәс тә уны төҫмөр-

ләнем... Ул яҡтарҙан һин күптән күсеп киткәнһең икән, әммә үткәндәр безгә барыбер эйәреп йөрөй. Бына мин дә, кәрәк булғас, һине эҙләп таптым.

Тәнкәбикә. Ҡәһәр генә һуҡһын һине, Дәрүиш! Ул саҡ Хызыр Ильяс тигәнем иблис булған икән. Хәҙер килеп түләү талап итә. Утыҙ йыл ғазапланған ғазаптарым аҙ булдымы икән ни? Бер гонаһҡа күпме яза алдым. Буйымда саҡта төндәр буйы һыҡтап, аҡылымдан сыға яҙҙым, шуға күрә илай белмәҫ иҫәр бала таптым. Уға ҡарап, утыҙ йыл әрненем. Йәшерен гонаһ емеше үтә әсе булды.

Дәрүиш. Үкен, байбисә, үкен.

Тәнкәбикә. Үкенәм. Бер гонаһым өсөн хоҙай ҡырҡ йәшем тулмаҫ ирһеҙ ҡалдырҙы. Улымды тартып алды. Сама ҡайҙа һуң? Ғәҙеллек ҡайҙа?

Дәрүиш. Үкен, байбисә, үкен! Гонаһтарың өсөн үкен. Ә мин шул утыҙ йыл буйы гонаһ эшләмәүем өсөн үкенәм хәҙер. Егерме биш йыл әүәл Бағдадта бер бай сауҙагәр ҡыҙына кейәү итергә теләне мине. Ә мин дин юлын көн юлына алмаштырманым. Хәҙер шуға үкенәм. Әле ун йыл ғына элек Истамбулда бер тол дәһри ҡатын ҡосағына саҡырҙы — барманым. Шуға үкенәм. Йәнә Бохарала, Һарайлыла... Үкенәм, үкенәм!

Тәнкәбикә. Әҙәм түгел, иблис, дейеүһең һин.

Дәрүиш. Иблис булһам, көслө булыр инем. Ни бары бер бахыр дәрүиш инем. Бына хәҙер миндә утыҙ йыл йоҡлаған иблис уянды. Исраф ителмәгән көсөм таша. Ҡанмаған һыуһыным яндыра мине.

Тәнкәбикә. Һуң, һуң инде, Дәрүиш!

Дәрүиш. Дөрөҫ, тормош ағасында миңә тигән емеш һирәгәйгән. Шулай ҙа мин бөтөнләй өлөшһөҙ ҡалырға теләмәйем. Иң һуңғы, иң ахырғы емештәрен булһа ла өҙөп аласаҡмын, буйым етмәһә, ағасын һындырып аласаҡмын!

Тәнкәбикә. Ҡот осҡос йән эйәһе һин, Дәрүиш.

Дәрүиш. Һинең яҙмыш, Тәнкәбикә, минең ҡулда. Бөтә серҙең баһаһы — бер Шәфәҡ. Шәфәҡте бир миңә!

Тәнкәбикә. Юҡ, ант итеп әйтәм, юҡ! Бар ырыуҙы һәләк итәсәкһең. Бер хоҙам, ярҙамыңды бирсе!

Дәрүиш. Ул ишетмәй — быны яҡшы беләм мин. Берәүҙе лә язаламай ҙа, ярлыҡамай ҙа ул. Бер-береһен кешеләр үҙҙәре язалай. Һинең язаң — бына мин. Теге саҡ алтыныңды алмағайным. Бурысыңды түлә!

Тәнкәбикә. Юҡ! Бер ғәйебемде ҡаплар өсөн өҫтөмә йәнә мең ғәйеп аласаҡ түгелмен. Кит! Кит бынан, Дәрүиш!

Дәрүиш. Мин китмәйем. Әгәр күп ныҡышһаң, ил алдында фашлап, хур итермен. Дәлилем минең — ана Диуанаң!

Тәнкәбикә. Күпме генә яуыз булһаң да, ундай уҡ яуызлыҡты эшләмәҫһең. Һин ир бит әле, улай тигәс тә.

Дәрүиш. Был көйө мин бер кем дә түгел. Фәрештә лә, иблис тә түгел. Минең өсөн изге һис нәмә юҡ. Шәфәҡте бир. Юғиһә, хур булырһың. Иҫке үкенестәреңә яңыһы өҫтәлер.

Тәнкәбикә. Ҡуй, өркөтмә, Дәрүиш. Минең дә ҡурҡыуҙарым ҡурҡылып бөткән. Үҙем өсөн түгел, балаларым өсөн борсолам. Йола аша атлаһалар, уларға ла шундай яза килер. Иҫән булһам, аша атлатмам. Бар, илгә фаш ит мине! Әммә һаҡ бул! Минең ҡулым ҡаты, бауырымда таш!

Дәрүиш. Шулай ҙа һин ҡурҡаһың, байбисә.

Тәнкәбикә. Һинән хәҙер тамсы ҡурҡмайым. Тиреһен һалған бүре ҡурҡыныс түгел!

Дәрүиш. Күпте күрҙөм, аҙына түҙермен. Тик онотма шуны, байбисә — минең шәүләмһең һин. Мин ни теләһәм, шуны эшләрһең. Һинең йәнең дә, тәнең дә юҡ. Мин сығам хәҙергә. Әммә тынысланма. Шәфәҡте алмай ҡуймаясаҡмын. *(Сыға.)*

Тәнкәбикә. Ҡот осорғос ниндәй яман ен был?! Бөтә нәмә өҫтөмә ишелеп килә. *(Эленгән уҡ-һаҙаҡты күрә.)* Бынау уҡтар миңә төбәлгәндәр. Ана-ана, йәнә тартыла! *(Артҡа сигә.)* Тартыл! Тартыл! Йөрәгемә тоҫҡап ат, исмаһам. Ат! Ауыр миңә! Ауыр, ҡурҡыныс! Нисек әле мине ер күтәрә?! Әй, кешеләр! *(Ҡысҡыра ла ауыҙын ҡаплай, урындыҡҡа ауа.)*

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Шәфәҡ менән Аҡйегет тирмәһе. Эңер төшә. Алыҫта һыҡтау һымаҡ моң ишетелә, «Зөлхизә» көйөн дә хәтерләтә. Аҡйегет, Шәфәҡ.

Шәфәҡ. Үҙәк өҙгөс әллә ниндәй моң яңғырай.

Аҡйегет. Беҙҙең йәндәребеҙ илай. Аҙаштырҙылар беҙҙең йәндәребеҙҙе.

Шәфәҡ. Маңлайҙарыбыҙға яҙылған шул, күрәһең.

Аҡйегет. Юҡ, Шәфәҡ. Яҙмыш яҙғанды юйып, кешеләр үҙҙәре теләгәнде яҙҙылар.

Шәфәҡ. Үҙ-үҙемә ҡул һалып өлгөргән булһам, бындай ғазаптарҙы һеҙ күрмәҫ инегеҙ. Бөтәһенә бары мин ғәйепле. Анау Ялсығол бит, инде баттым тигәндә, ҡулға сумып мине алып сыҡты.

Аҡйегет. Үҙеңә үҙең ҡул һалып, беҙҙе барыбер бәхетле итә алмаҫ инең, гүр һалҡының беҙҙе өшөтөр ине.

Шәфәҡ. Һеҙҙең яфаланыуҙарҙы күҙем күрмәҫ, һыҡтауҙарығыҙҙы ҡолағым ишетмәҫ ине. Ҡоро шәүләгә тороп ҡалдың бөтөнләй.

Аҡйегет.

> Һөйгәнемде алдылар,
> Йәнемә бығау һалдылар.
> Эсем тулы ут ине,
> Уты һүнде, көл ҡалды.
> Күҙҙәремдә көн ине,
> Көнө һүнде, төн ҡалды,
> Йән бығауын алығыҙ,
> Ҡулдарыма һалығыҙ.
> Ике ҡулым ҡол булһын,
> Бер күңелем хөр булһын.

Шәфәҡ. Йән әрнеткес моң яңғырай һаман.

Аҡйегет *(тыңлай)*. Зөбәржәткә ҡушылып дала илай булыр.

Тынлайҙар. Пауза.

Шәфәҡ. Өсөнсө ай инде, ир менән ҡатын булып, бер тирмәлә торабыҙ, Аҡйегет. Миңә күтәрелеп тә ҡарағаның юҡ.

Аҡйегет. Ни эшләйем һуң?

Шәфәҡ. Бынан һуң да шулай булырмы икән?

Аҡйегет. Ғүмер буйы. Әммә ғүмеребеҙ оҙон булмаҫ.

Шәфәҡ. Минең дә эсемдә йәнем бар. Өсөнсө ай... яҫтығыма баш та һалманың.

Аҡйегет *(Шәфәҡ эргәһенә килә, башын һыйпай)*. Минең иркемдәме ни, Шәфәҡ? Беләһең дә, күңелем бында түгел.

Шәфәҡ. Бәхет күрер булһам, исемемде Шәфәҡ ҡушмаҫтар ине. Бер балҡый ҙа һүнә.

Аҡйегет. Ни тип кенә йыуатайым һине, бисәм. Үҙемдең дә ике күҙем тулы ҡанлы йәш.

Шәфәҡ. Бәлки, яҙмышыбыҙға буйһонорға кәрәктер. Беҙҙән генә ҡалған донъя түгел.

Аҡйегет. Буйһоноп та ҡараныҡ бит, еңгәм. Икебеҙҙе ике бәрәс урынына бер тирмәгә килтереп яптылар. Әллә күнегерменме тип уйлағайным мин дә, юҡ, булманы. Мөхәббәтем минән көслөрәк. Мин — уныҡы, бер уныҡы ғына.

Шәфәҡ. Бер тамсы ла өлөшөм юҡмы икән ни шулай?

Аҡйегет. Бер йәнемде өлөштәргә бүлгеләй алмайым шул, шәфҡәтһеҙлек булһа ла, дөрөҫөн әйтәм.

Шәфәҡ. Әйтмәһәң дә беләм.

Аҡйегет. Нимәне беләһең?

Шәфәҡ. Һәр таңғаса һин Зөбәржәт эргәһендә булаһың.

Аҡйегет. Минең арттан күҙәтәһеңме ни?

Шәфәҡ. Күҙәтмәйем, Аҡйегет. Күңелем һиҙә. Мин бит һинең бисәң. Төндәр буйы күҙ ҙә йоммай сығам. Битәрләй тип уйлай күрмә тағы. Һуңғы мәлдә ырыу халҡы һеҙҙе бик ғәйепләп һөйләй. Һағыраҡ бул.

Аҡйегет. Әгәр Зөбәржәтем булмаһа, һиңә генә тоғро ир булыр инем, Шәфәҡ. Эсең тулы хазина һинең. Ни ҡылаһың. Мин — һинеке түгел.

Шәфәҡ. Һин — минеке түгел. Шуға күрә көнләшергә лә хаҡым юҡ минең, ир бисәһе булып...

Аҡйегет. Беҙгә рәнйемә һин, Шәфәҡ.

Шәфәҡ *(көрһөнөп)*. Рәнйергә хаҡым булһа икән?.. Һис нәмәгә, һис нәмәгә хаҡым юҡ минең... *(Илай.)*

Аҡйегет. Илама, Шәфәҡ. Беҙҙең һыҡтауҙы күктәгеләр барыбер ишетмәй... Исмаһам, яу сығып, яуға китһәм, бөтәбеҙ ҙә был ғазаптарҙан ҡотолор инек.

Шәфәҡ. Юҡ-юҡ, яу сыҡмаһын. Китмә! Һин кәрәкһең, беҙгә. Аҡйегеткәй, ҡара бәхетем минең. *(Аҡйегеттең күкрәгенә башын һала.)*

Аҡйегет. Ике ут араһында йәшәүҙәре әжәлдән дә ауыр. Һине йыуатырлыҡ һүҙҙәр телемә килмәй. Ундай һүҙҙәр юҡтыр, күрәһең...

Ялсығол инә, Аҡйегет менән Шәфәҡте был хәлдә күреп, аптырап китә.

Ялсығол. Тирмәгеҙгә татыулыҡ ингәнен күрәм, ҡотло булһын.

Аҡйегет. Ә, Ялсығол ағай! Әйҙә, уҙып ултыр. Шәфәҡ, ҡымыҙ килтер ҡунаҡҡа.

Шәфәҡ. Хәҙер. *(Ялсығол ултырасаҡ урынға һырма һала.)* Ултыр, Ялсығол ағай.

Ялсығол. Мин ҡолоғоҙҙо бары бер тирмәлә, ҡунаҡ күреп, ололап ҡаршы алалар, рәхмәттәр яуһын.

Аҡйегет. Һин түгел ул, бына беҙ ҡолдар.

Ялсығол. Бөтәбеҙ ҙә ҡолдар. Ҡоллоҡ бына бында ултыра. *(Күкрәген күрһәтә.)*

Шәфәҡ ҡымыҙ килтерә.

Ялсығол *(ҡымыҙ эсә)*. Рәхмәт, Шәфәҡ. Бөгөн йөҙөңә нур ингән. Ҡороғоҙға шулай именлек килһен.

Шәфәҡ. Беҙгә тигән именлек Ҡаф тауы артында, Ялсығол ағай.

Ялсығол. Яйлап килер. Һеҙҙе әле былай татыу күргәс, тынысланып ҡалдым.

Шәфәҡ. Бер-беребеҙгә шатлыҡ булып түгел, ҡайғы булып һарылғанбыҙ шул. Уртаҡ хәсрәт кенә беҙҙе тиң итә.

Аҡйегет. Зарланып зар бөтмәҫ, Шәфәҡ.

Ялсығол. Әле бер әңгәмә һөйләйем тип килгәйнем дә, донъяғыҙға былай ҡот ингәс, һөйләмәйем инде.

Аҡйегет. Беҙҙең донъя һаман шул көйө — ҡото ла юҡ, уты ла юҡ.

Шәфәҡ. Ҡотаймаҫ та инде.

Ялсығол. Күңелле хәбәр түгел. Шәфәҡ, бәлки, беҙҙе ҡуйып торор.

Аҡйегет. Шәфәҡ менән арабыҙҙа сер юҡ, һөйлә.

Шәфәҡ. Мин ҡара тирмәгә сығайым, улай булғас.

Аҡйегет. Китмә, Шәфәҡ. Күргәндәрҙән дә яманырағы булмаҫ.

Ялсығол. Өсөнсө ай инде әсәйең тирмәнән сыҡмай.

Аҡйегет. Хәле нисек уның?

Ялсығол. Ауырыу ҙа түгел, иҫән дә түгел. Янына инеп сығыр инең.

Аҡйегет. Үҙе саҡырғанды көтөп торам.

Ялсығол. Саҡырмаһа ла, бар, ул әсә бит.

Аҡйегет. Бөтәбеҙҙе берсә иҙеп ташланы шул... Һүҙ йомғағыңды һаман һүтмәй тораһың, Ялсығол ағай.

Ялсығол *(Шәфәҡкә ҡарап ала)*. Әңгәмә шул, Аҡйегет. Шомло һүҙҙәр йөрөй һеҙҙең хаҡта. Аҡһаҡалдар бик ныҡ асыулана. Никах боҙоп, башҡа менән күңелен аҙҙыра, тип һиңә ләғнәт уҡыйҙар.

Аҡйегет. Ләғнәт уҡыйым тиһә, бер Шәфәҡтең генә хаҡы бар. Башҡа ләғнәт миңә ләғнәт түгел.

Ялсығол. Улар ил аталары, Аҡйегет. Һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай ярамай.

Аҡйегет. Беҙҙең кемгә зыяныбыҙ тейә?

Ялсығол. Йылдар ҡытлыҡ килә. Моғайын, йот булыр. Аҡһаҡалдар шуны һеҙҙән күрә. Бар бәләне һеҙгә юрайҙар.

Шәфәҡ. Нахаҡ, нахаҡ! Аҡйегеттең күңеле саф уның. Илгә ни эшләп бәлә килтерһен ул?

Ялсығол. Йәнә анау Дәрүиш бөтә ырыуҙы бутап йөрөй. Һинең арттан һәр саҡ күҙәтә. Бар күргәнен әсәйеңә, аҡһаҡалдарға еткереп тора. Аҡйегет менән Зөбәржәт ырыуҙа ҡалһа, ырыуыбыҙ ҡороясаҡ, тип ҡотҡо тарата.

Аҡйегет. Әсәйем шуны ниңә һаман ҡыуып ебәрмәй икән?

Ялсығол. Быға бөтә халыҡ ғәжәпләнә. Илде дер һелкетеп тотҡан байбисәнең шуға көсө етмәй.

Аҡйегет. Әсәйемдең сәйер яҡтары бар шул...

Ялсығол. Йә, Аҡйегет, миңә асыуланма. Имен хәбәр менән килә алманым.

Шәфәҡ. Яҡшы хәбәр көтөргә лә баҙнат итмәйбеҙ инде, Ялсығол ағай.

Ялсығол. Йәнә шуны әйтәйем тигәйнем, Аҡйегет. Башыңа бер-бер уй килеп, был йәйләүҙе ташлап китер булһағыҙ, эйәрләнгән ике атым һәр саҡ әҙер торор.

Аҡйегет. Юҡ, Ялсығол ағай, ҡасып ҡотола торған бәлә түгел был.

Ялсығол. Донъя хәлен белеп булмай, туғаным.

Аҡйегет *(ҡапыл)*. Мин әсәйем эргәһенә барам! Аҡһаҡалдарҙы йыйып аңлатһын. Бының бер сиге булырға тейеш! Төшөнөрҙәр, бәлки. Улар ҙа бит әҙәм затынан! *(Сығып йүгерә.)*

Тынлыҡ. Баяғы моң ишетелә.

Шәфәҡ. Анау саҡта ниңә генә мине ҡулдан тартып алдың, Ялсығол ағай? Ҡара гүрҙә тыныс йоҡлар инем был көндәрҙә.

Ялсығол. Болот аҫтындағы ҡояш та яҡтылыҡ бирә, Шәфәҡ, бөтөнләй һүнгән ише түгел.

Шәфәҡ. Һүҙҙәреңде аңлап еткермәйем.

Ялсығол. Был донъяла япа-яңғыҙмын мин. Аҡйегет бар күңелемде арбаған, һин бар... Икегеҙ ҙә ана шул болот артындағы ҡояш кеүекһегеҙ миңә.

Шәфәҡ. Ҡара болот артында...

Ялсығол. Һеңлем кеүек күрәм һине. Әммә хәлдәреңде еңеләйтерлек ҡөҙрәтем юҡ. Ғазаптарың бауырымды талай, ҡәрендәшем. Һинең өсөн түгел, үҙем өсөн ҡотҡарҙым мин һине. Бәхетһеҙ булһаң да, бер йыуанысым һин.

Шәфәҡ. Әйтерһең дә, кешеләр бер-береһенә хәсрәт өсөн генә яратылғандар. Әгәр иректәрендә булһа, күпме шатлыҡ килтерерҙәр ине улар бер-береһенә!

Ялсығол. Ғәйепкә алма был һүҙҙәрҙе, Шәфәҡ. Һинең өсөн йәнен ярып бирер әҙәм барлығын белһен тип кенә әйттем.

Шәфәҡ. Яҡшы зат һин, рәхмәт, Ялсығол ағай.

Ялсығол. Ярай, мин китәйем. Сабыр бул. *(Китә.)*

Шәфәҡ. Донъя ниңә шулай икән? Бахыр Ялсығолдо әйтәм. Далалары яңғыҙ ағас төҫлө, ботағында ҡош ояһы ла, тамырында ҡурпыһы ла юҡ. Япа-яңғыҙ!.. Ә минең нимәм бар? Бер ирем бар, ул да бүтәндеке. Ирһеҙ ҙә тол инем, ирле лә тол. Өсөнсө ай көтәм, яҫтығыма баш та һалғаны юҡ. Яҙыҡмы ни был эш? Ул бит минең ирем! Йософ пәйғәмбәрҙең ише һымаҡ ирем — миңә яҙмаған!

Дәрүиш инә.

Дәрүиш. Әссәләмәғәләйкүм! Хужа өйҙәме?

Шәфәҡ *(ситкә ташлана)*. Юҡ ул. Юҡ, юҡ! Юлыңда бул, Дәрүиш, ары йөрө.

Дәрүиш. Минең йомошом унда түгел, һиндә.

Шәфәҡ. Булмаҫ, булмаҫ. Йорттоң хужаһы бар. Хужа ҡайтҡас килерһең.

Дәрүиш. Был ырыуҙа хужа юҡ.

Шәфәҡ. Ниңә булмаһын, ти, ҡәйнәм барсы.

Дәрүиш. Ҡәйнәң, ҡәйнәң... Уны ҡуйып торайыҡ. Мин һиңә бер яҡшы ниәт менән килдем.

Шәфәҡ. Миңә һис ни кәрәк түгел, донъям бөтөн. Бар, сыҡ бынан, Дәрүиш...

Дәрүиш. Донъяң бөтөн, имеш. Өҫтөгөҙгә һәләкәт тәгәрәп килә. Ырыуығыҙ бөтә.

Шәфәҡ. Тиктомалға ырыу бөтмәҫ, бушты һөйләмә.

Дәрүиш. Һинең ирең йола, никах боҙоп, яман юлға баҫты, һин унан баш тартырға тейеш, ил алдына сығып әйт — хыянатсының гонаһтарын өҫтөмә ала алмайым, унан баш тартам, тиң.

Шәфәҡ. Аҡйегеттең миңә хыянаты юҡ.

Дәрүиш. Һәр төн һайын, Ишмырҙа йоҡлағас, Зөбәржәт тирмәһенә кем йөрөй һуң? Бәлки, миндер, бәлки, Диуаналыр?.. *(Көлә.)*

Шәфәҡ. Мин шымсы түгелмен, белмәйем. Минең ирем — минең түшәгемдә, уныһына шөкөр.

Дәрүиш. Бисә йәне юҡтыр һиндә! Ил белгәнде бер һин белмәйһең.

Шәфәҡ. Илдә минең ҡатнашым юҡ. Йәннәтем дә, тамуғым да — ошо тирмә. Бында йөрөмә, Дәрүиш!

Дәрүиш *(үҙ алдына)*. Әҙәм һөйәктәренән юлыма күпер һалырмын, шулай ҙа моратыма ирешермен. *(Шәфәҡкә.)* Мин тәңребеҙҙең ихтыярын әйттем: Аҡйегеттән баш тарт, гонаһтарыңдан ҡотол! Кеше ғәйебен ҡаплау оло гонаһ ул. Бына әле ирең ҡайҙа тиһең?

Шәфәҡ. Күңеле ҡайҙа тартһа, аяғы шунда булыр. Һинән һорап тормаҫ. Бар, кит бынан. Юҡһа, һөрән һалып, кешеләр саҡырырмын.

Дәрүиш. Ә мин кешеләрҙән ҡурҡмайым, һис нәмәнән ҡурҡмайым. Мин — изге. Үлем дә юҡ миңә, яза ла юҡ. Ни ҡылһам да, ихтыярым сикһеҙ. Теләйем икән, айҙы һүндерәм дә ергә дөм-ҡараңғы төн килтерәм. *(Ҡуйынынан китап сығарып ҡарай. Оҙаҡ уйланып тора. Үҙ алдына.)* Эйе, бөгөн... бөгөн ай тотолорға тейеш. Ашығырға кәрәк!

Шәфәҡ. Ашыҡ, ашыҡ, Дәрүиш! Кит тиҙерәк!

Дәрүиш. Мин бары бер һиңә генә ашығам! Һиңә генә, Шәфәҡ! *(Шәфәҡкә ынтылмаҡсы итә.)*

Шәфәҡ. А-а-а!

Диуана атылып инә.

Диуана. Шәфәҡ, Шәфәҡ! Тирмә тирәһендә әле генә бер ҡара йылан ажғырып йөрөй ине. Бында килеп инмәһен тағы, абай бул! *(Дәрүиште күрә.)* Әллә йылан Дәрүиш һынына керҙе инде?

Дәрүиш. Бушты лығырлама, маңлайыңа шайтан мөһөр баҫҡан нәмә! Бынау таяҡ менән ороrмон.

Диуана. Миңә һуғырға ярамай. Ә ниңә һин, төнгә сыҡһаң, ике тирмә араһында уралаһың! Фәрештәләр миңә әйтте инде — һин яман зат!

Дәрүиш. Ләғнәт уҡып, ташҡа әйләндерһәм, әсәйеңдең ҡәбер ташына ҡуйырҙар ине. Исмаһам, бер ғәмәлгә ярар инең.

Диуана. Минең әсәйем юҡ. Таш булһам, мин һине баҫып үлтерер инем. Һин бит кеше түгел, йылан. Ана ҡойроғоң да бар. Тә-тә-тә, нисек борғоланып тора ҡойроғоң. Кәпәсең дә йылан кәпәсе.

Дәрүиш. Ләғнәт һуҡҡан нәмә! Әле мин һине эткә әйләндереп, табаныма ялатырмын.

Диуана. Ә мин табаныңды яламам, үҙеңде сәйнәрмен. Бына шулай, бына шулай! А-ау-ау! *(Эт булып өрөп, Дәрүиште ҡыуып сығара.)*

Шәфәҡ. Уф! Ҡоттарым ҡалманы.

Диуана. Ҡурҡма, Шәфәҡ. Мин эт түгел. Былай ирмәк итеп кенә өрҙөм мин.

Шәфәҡ. Эт түгел, кеше һин, Диуана.

Диуана. Шәфәҡ!

Шәфәҡ. Нимә, Диуана?

Диуана. Мин кәләш алмайым.

Шәфәҡ. Ниңә?

Диуана. Аҡйегет менән Ишмырҙа кәләш алмаҫ борон ниндәй һәйбәт ине. Берәү ҙә иламай ине. Хәҙер насар. Теге тирмәлә Зөбәржәт илай, был тирмәлә һин илайһың. Ишмырҙа ғына иламай. Байбисә лә минең башымдан һөйөп иланы. Бөтәһе лә илай. Иламағыҙ, иламағыҙ! *(Үҙе үкереп илап ебәрә.)*

Шәфәҡ *(үҙ алдына)*. Диуананың күңеле ниҙер һиҙә булыр.

Диуана. Хәҙер күктә фәрештәләр ҙә күренмәй. Күк йөҙө ҡап-ҡара.

Шәфәҡ. Ҡуй, Диуана, күк асылыр әле.

Диуана. Асылмай ул. Фәрештәләр алыҫ осоп китте.

Шәфәҡ. Бар, урыныңа барып йоҡла инде. Тышта эңер төштө.

Диуана. Яҙға саҡлы йоҡлап булһа икән ул... Юғиһә ҡыш өшөтә.

Зөбәржәт инә. Шәфәҡ аптырап ҡала. Оҙаҡ тынлыҡ.

Зөбәржәт. Миңә асыуланма, Шәфәҡ. Яңғыҙым бик ҡурҡам. Көн буйы уйнап арыған ирем иҙрәп йоҡлап китте.

Шәфәҡ. Әйҙә, түремдән уҙ, килендәш.

Диуана. Ике килен-килендәш, береһе ялҡау, береһе йәш, ике килен-килендәш...

Зөбәржәт. Бар, Диуана, Ишмырҙа эргәһенә инеп йоҡла. Уянып китһә, бер үҙе ҡурҡыр.

Диуана. Ике килен-килендәш, килендәштәре — көндәш. *(Китә.)*

Зөбәржәт. Аяғыңа йығылырға килдем, Шәфәҡ. Һиңә күренергә айҙар буйы оялып йөрөнөм. Инде теләһәң ни эшләт мине, башҡа сыҙар хәлем ҡалманы...

Шәфәҡ. Һиңә минең хөкөмөм юҡ, Зөбәржәт.

Зөбәржәт. Хөкөмөң бар. Аҡйегеттең хәләл ҡатыны һин.

Шәфәҡ. Ҡуй, ҡағылма бауыр яраһына.

Зөбәржәт. Ҡағылмайса сарам юҡ. Күкрәгемә ҡара ҡандар һауҙы. Үҙем менән һис ни ҡыла алмайым. Аҡйегетте бер кис күрмәһәм дә, аҡылымдан шашам. Өсөнсө төн инде килгәне юҡ.

Шәфәҡ. Мине өсөнсө ай күргәне юҡ. Күҙе күрһә, күңеле шәйләмәй. Минең хәлем — тере мәйет хәле. Кеше түгел, бер өрәкмен хәҙер.

Зөбәржәт. Бөтәбеҙ ҙә өрәктәрбеҙ. Йәндәребеҙҙе һурып алдылар. Йәшәмәйбеҙ, бары ҡыймылдайбыҙ ғына.

Шәфәҡ. Ҡыймылдарлыҡ хәл дә бөтөп бара.

Зөбәржәт *(ҡапыл Шәфәҡ алдына теҙләнә)*. Табаныңды үбеп ялбарамын, Шәфәҡ, Аҡйегетемде миңә кире ҡайтар. Унан башҡа бер көн йәшәр хәлем юҡ. Минең өсөн икенең береһе — йәки үлем, йәки ул. Юҡ, юҡ, минең үлгем килмәй!.. Аҡйегетемде миңә ҡайтар, Шәфәҡ!

Шәфәҡ. Тор, Зөбәржәт, улай түбәнһенмә. Әгәр һинең ише мин һөйәлһәм, түбәм һәр саҡ күктә булыр ине. Һис нәмәгә иҫем китмәҫ ине. Бер һөйөлөү үҙе бер ғүмер.

Зөбәржәт *(тормай)*. Һин рәнйемәһәң, башҡа һис ни беҙҙе ҡурҡытмай. Ризалыҡ бир, Шәфәҡ, Аҡйегет менән беҙ йәнә ҡушылайыҡ. Ризалыҡ бир, Шәфәҡ! Шәфәҡ!

Шәфәҡ *(Зөбәржәттең ҡулынан тотоп баҫтыра)*. Айырғанда һеҙҙән ризалыҡ һораманылар. Ҡауышыр булғас, ниңә һорайһығыҙ уны? Өлөшөмә теймәгәнгә мин хужа түгел, Зөбәржәт.

Зөбәржәт. Ах, һин ниндәй яҡшы күңеллеһең! *(Шәфәҡкә һарылмаҡсы итә.)*

Шәфәҡ. Ҡағылма миңә. Миңә бер саҡ үлем ҡағылды. Һин йәшәргә тейеш.

Зөбәржәт. Изгелегең өсөн, рәхмәт, Шәфәҡ!

Шәфәҡ. Изге булмай минең сарам释 бармы? Мин дә үҙ иремде үҙ ҡулдарым менән бүтәнгә бирмәҫ инем. Теш-тырнағым менән йәбешеп ятыр инем. Ирем юҡ минең! Ирем юҡ... Бары һине ирһеҙ ҡалдырҙым, шуға өҙгөләнәм.

*Аҡйегет инә. Зөбәржәт менән бер-береһенә ынтылалар. Шәфәҡ барлығын һиҙеп, туҡталып ҡалалар. Шәфәҡ шым ғына сыға.*

Зөбәржәт. Аҡйегет!

Аҡйегет. Зөбәржәт!

Зөбәржәт. Өс көн өс йыл саҡлы оҙон булды. Түҙә алманым, килдем.

Аҡйегет. Зөбәржәткәй, ситлектәге ҡошом!

Зөбәржәт. Ә мин һине шундай һағындым, Аҡйегет.

Аҡйегет. Бөтмәҫ ҡайғым, бөтмәҫ шатлыҡтарым минең — Зөбәржәтем!

Зөбәржәт. Һин эргәмдә саҡта төнөм дә көн. Хатта дейеүҙән дә ҡурҡмайым. Һинән башҡа тотош һағыштамын.

Аҡйегет. Дейеү тигәс, әле иҫемә төштө. Теге саҡта һин шаярып минән ҡасҡан инең.

Зөбәржәт. Абау-абау, ниндәй ҡурҡыныс. *(Артҡа сигенә.)*

Аҡйегет *(атлығып килеп ҡосаҡлай)*. Ә мин, шулай ҡыуып етеп, ҡосағыма алғайным.

Зөбәржәт. Уйнап-көлгән саҡтар һағынып һөйләргә генә ҡалды.

Аҡйегет. Беҙҙе барыбер айыра алмаясаҡтар.

Зөбәржәт. Айырҙылар бит инде.

Аҡйегет. Бынан ары беҙ гел бергә буласаҡбыҙ. Әсәйемә әйттем, башҡа былай йәшәр хәл ҡалманы, беҙ икебеҙ бер тирмәгә күсәбеҙ, тинем.

Зөбәржәт. Ысынлапмы, Аҡйегет? Ул һуң нимә тине?

Аҡйегет. Өндәшмәне.

Зөбәржәт. Тотайыҡ та икәү алыҫ, алыҫ ергә күсәйек.

Аҡйегет. Беҙҙе бәхетле итер башҡа ер юҡ, Зөбәржәт. Ас бүреләр олоп торған буш далала беҙ ни эшләрбеҙ?

Зөбәржәт. Икәү булғас, ризыҡ табылыр әле. Атайымды анау барымтасы Ҡарағужа кешеләре үлтермәгән булһа, атайым беҙҙе был көндәргә төшөрмәҫ ине.

Аҡйегет. Әйтеүе ҡыйын.

Зөбәржәт. Ҡасайыҡ бынан.

Аҡйегет. Ҡасырға, беҙ ғәйеп эшләмәнек. Ошонда, бер ырыуҙың күҙ алдында, беҙ бергә йәшәйәсәкбеҙ. Әсәйемә шуны әйтеп сыҡтым.

Зөбәржәт. Ҡәйнәм нимә тине?

Аҡйегет. Өндәшмәне. Уның эргәһенә аҡһаҡалдар йыйылып ҡалды.

Зөбәржәт. Аҡһаҡалдар, бәлки, ғәҙел хөкөм сығарып, беҙҙе йәнә ҡушыр булырҙар?

Аҡйегет. Белмәйем.

Зөбәржәт. Улар ҙа бит ҡасандыр йәш булған.

Аҡйегет. Йәшлектәрен улар оноткандар инде. Имен хөкөм көтөү ҡыйын. Үҙебеҙгә беҙ үҙебеҙ хөкөмселәр хәҙер.

Тышта шау-шыу ишетелә.

Зөбәржәт. Был ваҡытта ниндәй шау-шыу тағы?

Аҡйегет. Көтөүселәр, ахыры, мал ҡыуалыр.

Шау-шыу яҡыная.

Зөбәржәт. Мал ҡыуыуға бер ҙә оҡшамай был. Бола ҡупҡан төҫлө йәмһеҙ тауыш. Мин шикләнәм. *(Аҡйегеткә һыйына.)*

Аҡйегет. Мин эргәңдә, йәнем, хафаланма.

Тирмәгә, шаулап, Дәрүиш, өс аҡһаҡал, Тәнкәбикә, йәнә ике-өс кеше килеп инә.

Дәрүиш. Ил намыҫы булған аҡһаҡалдар, үҙегеҙ күрәһегеҙ, улар һаман бергә. Боҙоҡлоҡтоң сиге шул түгелме?

Икенсе аҡһаҡал. Хурлыҡ! Хурлыҡ! Бөтә ырыуыбыҙ өҫтөнә хурлыҡ төштө. Бәләләрҙән, Хоҙай, үҙең һаҡла!

Өсөнсө аҡһаҡал. Ил күрмәгән, ата-баба ишетмәгән хәл был!

Берәү. Харап булдыҡ, илдән бәрәкәт китте.

Дәрүиш. Ырыу тамыры ҡороу намәхрәм эштән башланыр, ти. Нисәмә ай инде күҙ алдығыҙҙа хилаф эштәр эшләнә. Бар язаһы ил өҫтөнә төшә.

Беренсе аҡһаҡал. Йәй башынан илгә ҡытлыҡ килде.

Икенсе аҡһаҡал. Йылғаларҙа һыуҙар кипте, бейәләрҙең елене ҡороно.

Өсөнсө аҡһаҡал. Йәй буйына тамсы ямғыр яуманы, дала ҡара көйҙө, ағастарҙа япраҡ һарғайҙы.

Икенсе аҡһаҡал. Өҫтөбөҙгә ажғырып афәт килә!

Берәү. Бәндәләрҙе үләт сире ҡыра, ырыу бөтә.

Дәрүиш. Был ғынамы әле! Ырыуығыҙҙа былдай кешеләр барҙа ҡояш һүреләсәк, ай һүнәсәк!

Аҡйегет. Ил аталары! Тәҡдиребеҙ һеҙҙең ҡулда. Әммә шуны күңелегеҙгә һалып ҡуйығыҙ. Ул далаларҙы беҙҙең күҙ йәштәребеҙ һарғайтты, ул япраҡтарҙы беҙҙең хәсрәтле һулыштарыбыҙ киптерҙе. Кем төшөрҙө беҙҙе ошо көнгә? Һеҙ түгелме? Беҙҙе рәнйеткәнгә яза итеп, ошо афәттәрҙе һеҙгә тәңре килтерҙе. Аҡылығыҙға килегеҙ, аҡһаҡалдар!

Беренсе аҡһаҡал. Тәүбәңде әйт, Аҡйегет. Бар йоланы тапап, был көнгә төшөргә һине иблис ҡотортҡандыр. Тәүбәңде әйт!

Икенсе аҡһаҡал. Тәүбәңде әйт!

Аҡйегет. Үҙегеҙ тәүбәгә килегеҙ, олатайҙар! Хата хөкөмөгөҙҙән ваз кисеп, ғәҙел бер хөкөмгә килегеҙ. Атайым васыятын иҫкә алып, беҙҙе яңынан ҡауыштырығыҙ.

Өсөнсө аҡһаҡал. Былдай әңгәмәне тыңлап тороу үҙе гонаһ, ҡарттар!

Беренсе аҡһаҡал. Ниңә өндәшмәйһең, байбисә? Бойороғоңдо әйт!

Тәнкәбикә өндәшмәй.

Икенсе аҡһаҡал. Яуап ҡайтар, байбисә, һинең балаң да ул.

Өсөнсө аҡһаҡал. Ырыҫҡол бей үлеп ҡотолмаһа, үҙ яуабын ул да бирер ине. *(Зөбәржәткә.)* Яҡшынан яман тыуған!

Аҡйегет. Зөбәржәткә ҡағылма, олатай! Уның иманы саф.

Икенсе аҡһаҡал. Иманы юҡ уның. Икегеҙ ҙә — иманһыҙҙар!

Беренсе аҡһаҡал. Хөкөмөңдө әйт, Тәнкәбикә килен. Юғиһә, язаһы һиңә лә бәрәбәр төшәсәк.

Тәнкәбикә. Балам инде минең ҡулымдан киткән, ил ҡулына күскән. Ни ҡылһа ла — ил иркендә. Башҡаса әйтер һүҙем юҡ.

Дәрүиш. Илгә ышыҡланма, байбисә. Балаларың өсөн яуап бир. Өсөһөнә өс яуабың әҙер булһын!

Икенсе аҡһаҡал. Өсәү?

Өсөнсө аҡһаҡал. Өсәү?

Дәрүиш. Эйе, өсәү.

Беренсе аҡһаҡал. Яуҙа үлгән Юлмырҙа шәһит китте. Уның өсөн байбисәгә сауап ҡына.

Дәрүиш *(уйынан кире ҡайта)*. Уныһы шулай, ҡарттар, яуҙа үлгән — шәһит!

Икенсе аҡһаҡал. Ни эшләп торабыҙ һуң? Тәүбә иттерәйек. Ил өҫтөнә ҡара ҡарғыш төшөрҙөләр. Тәнкәбикә, ҡарттар һинең һүҙҙе көтә.

Беренсе аҡһаҡал. Хөкөмөңдө сығар, байбисә!

Тәнкәбикә *(өҙгөләнеп)*. Балам! Йолабыҙға ҡаршы ҙур енәйәт эшләнең, тәңребеҙҙең язаһы ҡаты, ғүмер буйы тереләй тамуҡта яндырыр. Бер боҙоҡлоҡ эшләп, мең яза алғандар ғына быны яҡшы белә. Күңел иләҫлеге өсөн аҡыл ғүмер буйы яфа сигә. Аҡылығыҙҙы йыйып, аҡһаҡалдар алдында тәүбә итегеҙ! Тәүбә итегеҙ!

Аҡйегет. Нимә тип, нимә тип тәүбә итергә һуң?

Тәнкәбикә. Бер-берегеҙҙән ваз кисегеҙ! Унан Зөбәржәт менән Ишмырҙаны алыҫ йәйләүгә күсерермен. Мал бирермен, кешеләр ебәрермен.

Аҡйегет. Тәндәребеҙҙе айырып, әсәй, бер ни ҡыла алмаҫһығыҙ. Тәүбә итеүҙән хәҙер эш уҙған!

Зөбәржәт. Олатайҙар! Ер аяғы ергә ҡыуһағыҙ ҙа, мин имгәкләп-имгәкләп булһа ла ҡайтырмын. Тупраҡ ҡауыштырҙы беҙҙе, тупраҡ ҡына айырыр.

Икенсе аҡһаҡал. Ҡара, ҡара! Бисә башы менән һүҙ һөйләгән була.

Өсөнсө аҡһаҡал. Һинең өсөн мал түләнгән. Ырыу малы менән бер иш һин!

Зөбәржәт. Улай малға тиң һанағас, ыҙаламай ғына йығып һуйығыҙ.

Берәү. Һуйыу түгел, тотоп аҫыу кәрәк!

Аҡйегет. Аҫһағыҙ ҙа, киҫһәгеҙ ҙә, хөкөм һеҙҙең ҡулда. Тәндәребеҙ — һеҙҙеке, ә рухтарыбыҙ? Рухтарыбыҙ, йола ситлектәрен емереп, осоп сыҡты. Улар юғарыла, күктә, һеҙҙән алыҫ! Күпме атһағыҙ ҙа, һеҙҙең уҡтар унда етә алмаҫ!

Икенсе аҡһаҡал. Ни эшләтәбеҙ, уҙамандар? Былдай һүҙҙәр өсөн борон заман оятһыҙҙарҙың телдәрен ҡырҡҡандар. Беҙҙән ҡурҡмаһаң, тәңренән ҡурҡ!

Аҡйегет. Минең тәңрем икәү түгел, берәү. Беҙҙе ҡауыштырған хоҙайым бар, башҡа хоҙайҙы мин белмәйем... Ә иманым — бына мөхәббәтем.

Икенсе аҡһаҡал. Әй, бәндәләр! Ишетәһегеҙме? Әҙәм түгел, иблис затылыр был. Былдай һүҙҙе әҙәм һөйләр булмаҫ. Тоҡомобоҙҙо ҡорота, һәләк итә!

Тәнкәбикә. Аяғыңа йығылып инәләм, Аҡйегет. Ололар һүҙен тыңла, тәүбәңде ит. Ҡан ҡәрҙәштәреңде һәләкәттән ҡотҡар!

Аҡйегет. Тәүбә итер ғәйебем юҡ минең, әсәй. Ҡанҡәрҙәштәрҙе беҙ түгел, һеҙ үҙегеҙ, бер-берегеҙҙе талап, һәләк итәһегеҙ. Йола, ҡанун тигән үлек йәндәр тереләрҙе талай.

Беренсе аҡһаҡал. Башҡа сарабыҙ юҡ, аҡһаҡалдар, был икәүҙе ырыуҙан ҡыуыу кәрәк!

Тауыштар. Ҡыуыу кәрәк! Ҡыуыу кәрәк!

Икенсе аҡһаҡал. Икеһенең ҡулын бергә шаҡарып бәйләп, далаға ҡыуырға кәрәк.

Тауыштар. Ҡыуырға кәрәк!

Дәрүиш. Дүрт яҡҡа ла сапҡын саптырығыҙ. Осраған бер кеше урап үтһен. Ҡайһы ырыуға һуғылһалар, шунда һәләкәт килер.

Тауыштар. Һәләкәт килер!

Диуана йүгереп инә.

Диуана. Байбисә! Байбисә! Ирмәк булды! Ирмәк булды! Күктә айҙың сите кителеп төштө.

Икенсе аҡһаҡал. Ҡуй, Диуана, бушты һөйләп йөрөмә.

Диуана *(ишеккә йүгереп бара)*. Ана, ана, үҙең сығып ҡара! Айҙың сите китек!

Өсөнсө аҡһаҡал *(ишеккә бара)*. Көткәнебеҙ килде. Донъя бөтә, йәьжүж-мәьжүж айҙы кимерә.

Дәрүиш. Айһыҙ ҡалаһығыҙ, тип әйттем бит мин.

Беренсе аҡһаҡал. Ай һүнә!

Далала — мал тауышы. Эт өрә. Тирмәлә — ығы-зығы.

Тауыштар. Ай һүнә! Ай һүнә!

Икенсе аҡһаҡал. Боҙоҡлоҡ күп ерҙә, боҙоҡлоҡ күп!

Тауыштар. Боҙоҡлоҡ күп! Харап булабыҙ. Бары ла ошолар арҡаһында килгән ҡәһәр!

Дәрүиш. Аҡһаҡалдар, тәкбир әйтегеҙ.

Халыҡ тәкбир әйтеп сыға.

Аллаһы әкбәр, аллаһы әкбәр,
Лә илаһы иллалла, аллаһы әкбәр;
Аллаһы әкбәр...

Дәрүиш менән Тәнкәбикә арттараҡ ҡала. Аҡйегет менән Зөбәржәт икеһе ике ситтә.

Дәрүиш. Һуңғы яҙың килде, байбисә. Әйт, Шәфәкккә күҙ-колаҡ булһындар. Һинең менән беҙҙең иҫәп-хисап бөтмәгән әле. Күрәһеңдер, донъя мин тигәнсә бара, Шәфәк миңә ҡала.

Тәнкәбикә. Аждаһа һин, мең йыл һаҙҙа ятҡан юха йылан һин!

Дәрүиш. Беҙгә битәрләшер урын юҡ.

Тәнкәбикә. Йә, хоҙам! Бер йәнемде алсы! *(Ауатүнә сыга.)*

Дәрүиш *(көлә)*. Бара торғас, шуға инандым мин — был йыһанда иблистән дә ҡеүәтлерәк зат юҡ! *(Көлә. Сыға.)*

Ут һүнә.

Аҡйегет. Бына айыбыҙ ҙа һүнде.

Зөбәржәт. Күҙҙәребеҙ күрмәһә, тауыштарыбыҙҙан танып табышырбыҙ, Аҡйегет!

Аҡйегет. Зөбәржәт!

Зөбәржәт. Дөм-ҡараңғы, ә мин ҡурҡмайым. Һинең һулышыңды тоям, Аҡйегет!

Аҡйегет. Хәҙер инде бар ҡурҡыныстар ҙа артта ҡалды.

Зөбәржәт. Алда нимә?

Аҡйегет. Алда бушлыҡ.

Бер-береһенә яҡыная баралар.

Зөбәржәт *(хәтерләп)*. Мин Зөбәржәт атлы инем, Аҡйегеттең йәре инем. Шуны эҙләп бара инем... бара инем. *(Быуылып илай.)*

Аҡйегет. Зөбәржәтем! Аҫыл ташым минең. Барыбер һине ҡара ташҡа әйләндерә алманылар. Шуның өсөн яҙмышыма рәхмәт уҡыйым.

Зөбәржәт *(илау ҡатыш)*. Мин һаман да өмөт өҙә алмайым, Аҡйегет! Әжәл беҙҙе ситләтеп үтер һымаҡ. Ҡыҙғаныр ул беҙҙе, ҡыҙғаныр ул! Кешеләр кеүек мәрхәмәтһеҙ булмаҫ. *(Аҡйегеткә һарыла.)*

Дәрүиш Шәфәкте тирмә эсенә этеп ебәрә. Шәфәк тирмә уртаһына килеп ауа.

Зөбәржәт. Кем был?

Шәфәк. Мин.

Зөбәржәт. Шәфәҡ? *(Шәфәккә ташлана.)*

Шәфәк. Эйе, мин. Мин һаман да тере әле.

*Шаршау*

## ЭПИЛОГ

Ай тотолоп бөткән төн. Тирмә алды. Ҡулдарына туҙ яндырып тотҡан кешеләр ҡайҙалыр шаулаша. Тирмә алдында факел тотҡан Ялсығол тора. Уны һаҡҡа ҡуйғандар.

Ялсығол. Ҡәбер ҡарауылларға ҡушып китте мине Дәрүиш. Әйтерһең дә, кешеләр унан ҡаса ала. Әй, Аҡйегет, Аҡйегет! Ҡолон кеүек кенә уйнап үҫкән балалар ошо көнгә төшөр, тип кем уйлаған. Аттар әҙерләп ҡуйҙым, ҡасығыҙ, тинем, ҡасманы. Әй, кешеләр, кешеләр. Бер-береһен тереләй ҡәбергә күмәләр. Йәнәһе, былар *(тирмәгә күрһәтә)* яҙмышҡа буйһонорға теләмәйҙәр. Теләмәһәләр, үҙҙәренсә ғүмер итһендәр... Әҙәмдәрҙең күңелдәре ҡатты...

Диуана инә.

Диуана. Ялсығол! Ә, Ялсығол! Аттарҙы тотторҙоң да китеп олаҡтың. Мин уларҙы, йүгәндәрен һалдырып, далаға ебәрҙем инде. Кәрәк булһа, тағы тоторһоң әле.

Ялсығол. Шаулама, Диуана. Аттар кәрәкмәҫ инде.

Диуана. Нимә булыр икән, Ялсығол?

Ялсығол. Яман эштәр булыр.

Диуана. Ямандың да яманымы?

Ялсығол. Үтә яманы.

Диуана. Үтә яман булғас, нимә була?

Ялсығол. Аҡйегет менән Зөбәржәтте далаға ҡыуалар, Диуана. Уларҙы ас бүреләр сәйнәйәсәк.

Диуана. Ниңә ул бүреләр бер-береһен генә сәйнәмәйҙәр һуң?

Ялсығол. Йыртҡыс үҙ тоҡомон ҡыҙғана ул. Кешеләр генә бер-береһен ашай.

Диуана. Мине лә ашарҙармы?

Ялсығол. Һине әллә ҡасан ашағандар инде, һинең хатта исемең дә юҡ.

Диуана. Мине кем ашаған?

Ялсығол. Уныһы миңә ҡараңғы. Әммә ашағандар.

Диуана. Бушты һөйлә тағы. Бына аяҡтарым, ҡулдарым, башым бар, башымда кәпәсем бар...

Ялсығол. Һинең менән минең бәхетте ашағандар.

Диуана *(баш кага)*. Ә-ә-ә...

Ялсығол *(тыңлай)*. Тирмәләгеләр шымып калды. Шәфәк кенә үкһеп куя.

Диуана. Иртән кояш сыкмаһа, калай итеп йокonan уянырбыз, Ялсығол?

Ялсығол. Кояш сығыр, әммә кара кояш сығыр.

Диуана. Бүтән кояшмы ни?

Ялсығол. Шул уk кояш. Тик хәсрәттән кара көйөп сығыр.

Диуана. Ай-һай, яман булыр.

Факел тоткан кешеләр якынлаша.

Ялсығол. Бында киләләр.

Диуана. Мин уларҙан курkам, йә тағы ла тотоп ашарҙар. *(Тирмәгә инә.)*

Ялсығол. Мал кыумаҫтай төндә әҙәм кыуырға йөрөйҙәр.

Баяғы кешеләр әйләнеп килә. Бер нисә катын-кыҙ ҙа бар.

Икенсе акһакал. Улар ырыу тупрағында сакта, илдән афәт китмәҫ. *(Унын кулында оҙон еп.)*

Өсөнсө акһакал. Кыуырға кәрәк! Кыуырға!

Тауыштар. Кыуырға! Кыуырға!

Беренсе акһакал. Бар, кем, бында сығарығыҙ үҙҙәрен.

Икенсе акһакал. Йөҙҙәренә карап, ғаләм ғибрәт алһын!

Тауыштар. Ғибрәт! Ғибрәт!

Берәү. Ырыуыбыҙ хурлык кисерә!

Өсөнсө акһакал. Әй, бәндәләр! Ғибрәт алығыҙ.

Бер нисә кеше Акйегет менән Зөбәржәтте алып сыға.

Беренсе акһакал. Һеҙ ырыуҙың йөҙөнә төкөрҙөгөҙ. Ырыу һеҙҙән хәҙер баш тарта.

Икенсе акһакал. Иблис коло булыу бәндәләрҙе бына нисек юлдан яҙҙыра.

Дәрүиш. Гонаһына күрә язаһы.

Икенсе аҡһаҡал *(Ялсығолға еп һуҙа)*. Мә, Ялсығол, ошо арҡан менән икеһенең дә ҡулын шаҡарып бәйлә. Ҡауышабыҙ, тинеләр, ҡауышһындар!

Ялсығол. Ҡуй, аҡһаҡал, минең ҡулым бармай.

Икенсе аҡһаҡал. Был мөртәте тағы ҡайҙан килгән? *(Бер кешегә.)* Күсәрбай, мә, йәһәт кенә булаш.

Күсәрбай. Ат тышаулағаным бар, әммә әҙәм тышаулағаным юҡ, аҡһаҡал, ҡулым белмәй. Үҙең бәйлә.

Икенсе аҡһаҡал. Ниндәй эш был? Бөтәһе лә ҡарыша.

Беренсе аҡһаҡал. Үҙең башлағанды үҙең башҡар, ҡорҙаш!

Икенсе аҡһаҡал. Тоҡом именлеге өсөн йәнем фиҙа. *(Аҡйегет менән Зөбәржәттең ҡулдарын бәйләй.)* Бына шулай. Бындай боҙоҡлоҡтар өсөн үҙ балам булһа ла аямаҫ инем.

Бер ҡатын. Был тиклем үк яфалағансы, шунда ғына йәндәрен алығыҙ, исмаһам!

Тауыштар. Ебәрегеҙ уларҙы!

Икенсе аҡһаҡал. Шауламағыҙ! Ниндәй бола тағы?

Хәле бөтөп, Тәнкәбикә инә.

Тәнкәбикә. Аҡһаҡалдар! Сабыр итегеҙсе! Һүҙҙәремә ҡолаҡ һалығыҙ!

Бер ҡатын. Әсәгә юл бирегеҙ!

Халыҡ айырылып юл бирә.

Тәнкәбикә. Мин — әсә! Ике донъяла ла улар өсөн мин яуаплы. Сабыйҙарҙы ҡуйығыҙ, аҡһаҡалдар, мине хөкөм итегеҙ. Мин гонаһлы, мин бик ҙур гонаһлы, ҡарғышығыҙ минең башыма яуһын. Сабыйҙарҙы ҡуйығыҙ, аҡһаҡалдар!

Дәрүиш. Юҡ, байбисә, улар һинең ҡулдан китте. Һин ашыҡма, гонаһтарың өсөн хөкөм һиңә лә етер.

Тәнкәбикә. Тыңламағыҙ уны! Бер шул ғына бөтә донъябыҙҙы бутаны.

Дәрүиш. Самалап һөйлә, байбисә!

Тәнкәбикә. Хәҙер инде һинән ҡурҡмайым. Ырыуҙаштар! Был, был — бик яман зат!

Дәрүиш. Был байбисә, ахыры, аҡылынан яҙа!

Тәнкәбикә. Яҙырһың да! *(Аҡйегеткә.)* Балам, кисер мине. Тәүбәңде әйт, буйһон! *(Аҡйегет өндәшмәй.)* Бәғерең таш түгел ине бит, балам.

Ялсығол. Үҙең уны ташҡа әйләндерҙең, байбисә.

Тәнкәбикә. Һин, исмаһам, иман килтер, Зөбәржәт. Һин бисә бит, улай ҡаты булма. *(Зөбәржәт өндәшмәй.)*

Беренсе аҡһаҡал. Хәҙер һуң инде, байбисә. Хөкөмөбөҙҙө тәңре ҡабул итте. Үҙгәртерлек ҡөҙрәт беҙҙә түгел.

Беренсе шаршауҙа кейеп сыҡҡан туй кейемендә Шәфәҡ сыға. Бер ситтә ғорур баҫып тора. Кешеләр уға ғәжәпләнеп ҡарай.

Бер ҡатын. Әстәғәфирулла!

Тәнкәбикә. Бөгөн туй күлдәге кейер көнмө, Шәфәҡ? Әллә бер-бер шауҡым ҡағылдымы? Ирең әжәлен эҙләп китә, ә һин? *(Шәфәҡ өндәшмәй.)*

Икенсе аҡһаҡал. Йә, ҡан-ҡәрҙәштәр, хоҙайға тапшырайыҡ. Балаң менән бәхилләш, байбисә.

Тәнкәбикә. Бәхил бул, Аҡйегет. Аҡ исемеңә шулай ҡара яғылырға насип булған, күрәһең. Бәхил бул! Һуңғы тапҡыр тауышыңды ишетеп ҡалайым. Әсәйеңә берәй һүҙ әйт, балам!

Аҡйегет. Ишетелер ғәйеп ишетелеп, әйтелер һүҙ әйтелеп бөттө, әсәй. Һиңә түгел, тыуып үҫкән төйәгемә генә һүҙем бар. Тупрағым, һыуҙарым, тауҙарым — төйәгем! Бәхил булығыҙ. Һеҙҙә ун ете йыл хөр йәшәп, сәңгелдәктәгеләй рәхәт күрҙем. Ошо хөрлөк өсөн үкенесһеҙ әжәлемә ҡаршы барам. Хуш, төйәгем!

Күңел ярам ауыр минең, һыҙланамын,
Барыр юлым дөм-ҡараңғы, һыҙланамын.
Һыҙланһам да, юҡ, үҙемде ҡыҙғанмайым,
Ҡан-ҡәрҙәштәр, бары һеҙҙе ҡыҙғанамын.

Ялсығол ағай, Диуана, Шәфәҡ, бәхил булығыҙ. *(Шәфәҡкә борола.)* Ғәйебем булһа, бары һинең алда, ҡәһәрләмә мине, Шәфәҡ!

Шәфәҡ баш эйә, Зөбәржәт менән икеһе, ҡапыл боролоп, ҡараңғыға атлайҙар. Тәнкәбикә ҡатып ҡала.

Икенсе аҡһаҡал. Йә, хоҙайым, был гонаһтарҙан да беҙҙе айырҙың.

Өсөнсө аҡһаҡал *(ҡулын һелтәй)*. Бар ҡарғыштар, бар бәләләр шулар менән китһен.

Тауыштар. Ләғнәт! Ләғнәт! Ләғнәт!

Берәү. Ризыҡ һиҙеп, ас бүреләр олой!

Бер ҡатын. И, илаһым! Бигерәк ҡаты яза!

Ҡапыл боролоп, икенсе яҡҡа Шәфәҡ китә. Уның юлын Дәрүиш бүлмәксе итә, Дәрүиште Ялсығол ситкә этәрә лә Шәфәҡ артынан атлай.

Икенсе аҡһаҡал. Бөтәһе лә иблис ҡолдары, боҙоҡлоҡ ҡолдары. Китһендәр әйҙә, китһендәр. Төйәгебеҙгә именлек килер.

Тауыштар. Именлек килер!

Өсөнсө аҡһаҡал. Боҙоҡлоҡ ҡолдарына үлем!

Тауыштар. Ҡолдарға үлем!

Диуана *(ҡапыл уртаға сыға)*. Ҡолдар ҡайҙа? Ҡайҙа ҡолдар?

Берәү *(китеүселәр яғына төртөп күрһәтә)*. Ана ҡолдар!

Диуана *(шарҡылдап көлә)*. Ҡолдар! Ҡолдар! *(Китеүселәр яғына ҡарай.)* Унда ҡолдар юҡ! Унда бары дүрт батша ғына күренә. Дүртеһененең башында дүрт алтын таж ялтырай. Ҡолдар ҡайҙа? *(Ҡысҡырып көлә.)* Ҡолдар бында! Бында ҡолдар! *(Беренсе аҡһаҡалға.)* Маңлайыңда, ана, ҡоллоҡ мөһөрө ҡара янып тора, ҡара янып тора! *(Икенсе аҡһаҡалға.)* Эсеңдә ана, бөкрәйеп, ғәрип ҡол ултыра. *(Дәрүишкә.)* Һинең эсеңдә ҡол, юҡ, бөгәрләнеп, бөгәрләнеп, бөгәрләнеп ҡара йылан ята... *(Ҡарттар ситкә ташлана.)* Ә... Тәнкәбикә, байбисә? Муйыныңда һинең көмөш муйынса түгел, көмөш тоҙаҡ — ҡоллоҡ тоҙағы. Үҙ тоҙағың ана үҙеңде быуа, быуа, быуа! *(Көлә.)* Балаларыңды upҡынға аттың инде, байбисә, хәҙер үҙең ташлан! Ана, ана, ана, упҡын төбөндә балаларыңдың һөйәктәре ағарып ята! Ағарып

ята! Мин уларҙы барып күмәйем. Үлгәндәрҙе ергә күмәләрсе, үлгәндәрҙе ергә күмәләрсе, үлгәндәрҙе ергә күмәләрсе... *(Китә.)*

Тәнкәбикә аҡрын ғына сүгеп төшә. Алыҫҡа китеүселәр барған ерҙә яҡтылыҡ полосаһы күренә, китеүселәр шунда килеп сығалар.

*Шаршау*

*1963*

## ГӨЛЗИФА

*Опера өсөн либретто өс шаршауҙа, биш күренештә*

ҠАТНАШАЛАР:

Гөлзифа — 21 йәштә, ҡош ҡараусы
Зәйнулла — 23 йәштә
Вадим — 24 йәштә, агроном, рус егете
Ғәйнулла — Зәйнулланың атаһы — 50 йәштә
Гөлмария — 19 йәштә, хат ташыусы, сыуаш ҡыҙы
Әбделхаҡ — 21 йәштә, монтер
Мәҙинә — Гөлзифаның әсәһе, 45 йәштә
Ямай ҡарт — 60 йәштә
Емеш — 55 йәштә
Балыҡсы — 45 йәштә, ул уҡ аяҡсы

Ағиҙел ярына ташҡын ҡарарға килгән йәштәр, ололар, төрлө йәштәге бесәнселәр, балыҡсылар, аш бешереүселәр, бала-саға.

Ваҡиға күп милләтле колхозда бара.

### БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе күренеш

Ағиҙел яры. Иҙелдә боҙ ҡуҙғалған. Яҙғы ташҡын музыкаһы яңғырай. Күктә һабан турғайы талпынып һайрай, ҡайҙалыр шарлауыҡтар сылтырай. Йәше-ҡарты һәр йылдағыса боҙ ҡарарға килгән. Был — ғәҙәткә кергән бер байрам. Башта, сыр-сыу килеп, йәш үҫмерҙәр йүгереп сыға.

Беренсе малай

Ағиҙелдә боҙ килә,
Боҙ өҫтөндә ҡыҙ килә.

Икенсе малай

Көмөш икән толомо,
Алтын икән тарағы.

Балалар хоры

Көмөш икән толомо,
Алтын икән тарағы.

Беренсе малай

Ҡыҙы сумды, боҙ ҡалды,
Боҙ өҫтөндә эҙ ҡалды.

Икенсе малай *(юрамал һыуға һикермәксе итә, башҡалар уны тота, был бер уйынға әйләнә)*.

Мин үҙем дә сумайым,
Ҡыҙҙы алып сығайым.

Балалар хоры

Ҡуй, ҡуй, Тимерйән!
Тимер бата, тилермә!

Икенсе малай

Тотһағыҙ ҙа, тилерәм,
Анау боҙҙо емерәм,
Емермәһәм, кимерәм.

Балалар хоры

Тимер бата, Тимерйән!

Тимерйәнде тарталар, бөтәһе лә ҡолап китә. Шунан малайҙар тәкмәс атып уйнай башлайҙар.

Кескәй ҡыҙҙар

Тимер, Тимер, Тимерйән,
Имеш, ярҙан һикергән,
Имеш, боҙҙо кимергән
Ҡамыр тешле Тимерйән.

Бөтәһе лә бергә

Ирмәк булды, һа-һа-һа,
Ирмәк булды, һа-һа-һа,
һа-һа-һа!

Беренсе малай

Киләләр, киләләр!
Һыу күрергә киләләр!

Икенсе малай

Уң яҡтан да киләләр,
Һул яҡтан да киләләр.

Бөтәһе лә

Киләләр, киләләр!
Һыу күрергә киләләр!

Сыр-сыу килеп таралышалар. Ҡайһы бер малайҙар ағас башына үрмәләй. Ике яҡтан егеттәр, ҡыҙҙар килә. Башта уң яҡтан Әбделхаҡ, һул яҡтан Гөлмария йүгереп сыға.

Әбделхаҡ

Иҙел таша, ярҙан аша, егеттәр!

Гөлмария

Ҡарағыҙсы, бахыр талдар
Һыу аҫтында тороп ҡалған.

Ҡыҙҙар

Сылтыр-сылтыр сылтырашып,
Ҡар һыуҙары аҡтылар,
Гөрләүектәр гөрөлдәшеп,
Яҙ ҡапҡаһын ҡаҡтылар.
Сут-сут итеп сутылдашып,
Ҡоштары һайрар инде,
Мөхәббәт күбәләктәре
Гөлдәрен һайлар инде.

Егеттәр

Мөхәббәтем күбәләге
Йәнеңә ҡунһын ине,

Йәнеңә ҡунһын ине лә
Шаштырғыс булһын ине!

Сут-сут һайрар ҡоштарына
Емдәр табылыр микән?
Ғашиҡ булып шашҡандарға
Имдәр табылыр микән?

Бергә

Сылтыр-сылтыр сылтырашып,
Ҡар һыуҙары аҡтылар,
Ҡар һыуҙары аҡҡан саҡта,
Йөрәккә ут яҡтылар.

Сут-сут һайрар ҡоштарына
Емдәр табылыр әле;
Мөхәббәттән тилерһәк тә,
Имдәр табылыр әле.

Йондоҙҙарға юлдар яра
Ғишыҡтан тилергәндәр.
Ғүмер буйына бисара —
Һөйөүһеҙ тилмергәндәр.

Әбделхаҡ *(яр башына килә)*.

Ағиҙелкәй! Дан йылғабыҙ беҙҙең,
Ағиҙелкәй!

Хор *(Ағиҙелгә маҡтау)*.

Ағиҙелкәй ҡайҙа, һай, туғайҙа,
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа?
Ағиҙелкәй, ерҙең йәме һин,
Уралҡайҙың үлмәҫ йәне һин.
Иҙелебеҙ — иркебеҙ,
Иҙелебеҙ — күркебеҙ.
Һыуҙарыңды эсһәк, көстәр арта,
Ағышыңды күрһәк, дәрт таша.
Алсаҡ күңелебеҙ һинең аша
Бар дуҫтарға барып тоташа.
Иҙелебеҙ — иркебеҙ,
Иҙелебеҙ — күркебеҙ!

Ағиҙелкәй ҡайҙа, һай, туғайҙа, —
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа?
Ағиҙелкәй, илдең йәме һин,
Халҡыбыҙҙың үлмәҫ йәне һин.
Иҙелебеҙ — иркебеҙ,
Иҙелебеҙ — күркебеҙ!

Ағас башындағы малай

Ана, балыҡсылар килә!

Һөҙгөс менән балыҡ һөҙә-һөҙә, яр аҫтынан балыҡсылар үтә, уларҙың баштары ғына күренә.

Балыҡсылар йыры (*хор ҙа ҡушыла*).

Ағиҙелдә аҡ балыҡ,
Ә беҙ балыҡсы халыҡ.
Таңдан бирле һөҙәбеҙ,
Күшекһәк тә, түҙәбеҙ —
Беҙ бит балыҡсы халыҡ.
Өмөт — тулы, һауыт — буш.
Буш булһа ла күңел хуш.
Балыҡсы менән һунар
Ҡырҡ көнгә бер уңыр, —
Буш булһа ла күңел хуш.
Ағиҙелдә аҡ балыҡ,
Балыҡтан да күп халыҡ.
Ҡиммәт түгел кәзәһе.
Ҡиммәт беҙгә мәҙәге, —
Беҙ бит балыҡсы халыҡ.

Балыҡсылар үтеп бөтә.

Ағас башындағы малай

Ағайҙар! Апайҙар! Малайҙар!
Бер балыҡсы бына ниндәй,
Бына ниндәй, бына ниндәй,
Бына ниндәй балыҡ тотто!
(*Ҡулы менән ҙурҙан-ҙур итеп күрһәтә, ағастан йығылып төшә.*)

Тауыштар

Балыҡ тотто?.. Балыҡ тотто!..
*(Һәр кем ҡулы менән күрһәтә.)*
Бына шундай, бына шундай...

Халыҡ буталышып балыҡсылар артынан китә. Вадим ҡала. Дуҫ ҡыҙҙары менән Гөлзифа инә.

Гөлзифа

Әллә инде уйын таралған да...
Беҙ һуңланыҡ, ахыры, әхирәттәр.

Бер ҡыҙ

Эш, эш, тиеп, уйындан да ҡалдыҡ.
Эш бөтмәй ул, уйын ғына бөтә.
*(Вадимды күрә.)*
Был агроном нишләп япа-яңғыҙ?

Вадим

Уйын әле, ҡыҙҙар, башланмаған.
Бер балыҡсы бик ҙур балыҡ тотҡан,
Шуны ҡарай китте бөтә әҙәм.

Бер ҡыҙ

Тере, тиме? Ҡалай ирмәк, ҡыҙҙар,
Әйҙә, беҙ ҙә барып ҡарайыҡ.

Вадим

Тоҙлаған, ти, диңгеҙ балығы, ти.

Бер ҡыҙ

Гел шаяртыр булыр ошо Вадим, һи-һи-һи!

Йүгереп сыға башлайҙар. Гөлзифа артҡараҡ ҡала. Яр аҫтында тауыштар.

Вадим

Гөлзифаҡай!

Гөлзифа

Нимә, Вадим?

Вадим

Быны-бына япраҡ ярыр сағы
Талдарҙың,
Күңелдәрҙе елкендергән сағы
Таңдарҙың,
Үҙәгемдә өҙгән бер серем бар,
Гөлзифа.
Һиңә генә һөйләр бер зарым бар,
Гөлзифа.

Гөлзифа

Зарланырлык заманмы ни, Вадим,
Бар йыһанда яҙғы тантана!
Әйҙә, йәштәр эргәһенә киттек...

Вадим

Гөлзифаҡай, зинһар, тыңласы...
Нисә айҙар, нисә айҙар инде
Тик бер яҡҡа ғына күҙ атам,
Һине уйлап таңды ҡаршылайым,
Һине уйлап көндө оҙатам.

Гөлзифа

Юҡ, юҡ, Вадим! Быны миңә әйтмә,
Башҡа берәүгә әйт был һүҙҙе.

Вадим

Күңелең һинең шундай ҡатымы ни?

Гөлзифа

Әйтә алмайым. Бары шуны беләм:
Күңелем минең бынан алыҫта.

Вадим

Күңел ҡошоң, бәлки, оя тапмай
Урап ҡайтыр?..

Гөлзифа

Ҡайтһа ла, ул инде яңғыҙ ҡайтмаҫ,
Бүтән йөрәктә ул оя тапмаҫ.
Ғәйепләмә, Вадим, ғәйепләмә.

*(Китә.)*

Вадим

Күренде лә тағы ла юҡ булды,
Әйтерһең дә, йондоҙ атылды.
Нисә айҙар, нисә айҙар инде
Тик бер яҡҡа ғына күҙ атам,
Уны уйлап таңды ҡаршылайым,
Уны уйлап көндө оҙатам.
Теҙелешеп торналар ҙа ҡайта,
Юлдар хәтәр тип тә тормаған,
Минең һөйөүемә тел асҡысы
Алып ҡайтығыҙсы, торналар!
Күңелемде айҡап һыуҙар ташты,
Бер ташыр ҙа ҡайтыр ҡар һыуы,
Ҡайтмаҫ инде, ҡайтмаҫ ярҙарына
Минең йөрәгемдең ярһыуы.
Ҡайтмаҫ инде, ҡайтмаҫ —
Ярҙарына...
Минең һөйөүемә тел асҡысы
Алып ҡайтығыҙсы, торналар...

Хор *(аҫта балыҡсылар йыры ҡабатлана)*.

Ағиҙелдә аҡ балыҡ,
Беҙ бит балыҡсы халыҡ.
Өмөт — тулы, һауыт — буш.
Буш булһа ла, күңел хуш —
Беҙ бит балыҡсы халыҡ...

Һөҙгөсөн күтәреп, бер балыҡсы йүгереп керә. Һөҙгөстә бәләкәс кенә бер балыҡ тыбырсына. Балыҡсы артынан халыҡ ябырылып килә. Балыҡсы һөҙгөсөн болғай-болғай әйләнә.

Балыҡсы

Алтын балыҡ! Алтын балыҡ!
Ашығығыҙ күрергә...

Берәү

Бына, исмаһам, балыҡ!
Тын океандан ингән, ахыры.

Хор

Ҡойроҡ менән һуҡмаһын,
Һаҡ бул, бәреп йыҡмаһын.

Бына, исмаһам, балыҡ!
Нисек ҡайтырһың алып?

Балыҡсы

Алтын балыҡ ҙур булмай,
Уны тотҡан хур булмай...
*(Һөҙгөсөн күтәреп әйләнеп йөрөй.)*
Кемдә ниндәй теләк бар,
Кемдә ниндәй ниәт бар —
Барыһын да юрағыҙ,
Барыһын да һорағыҙ! —
Алтын балыҡ башҡарыр.

Берәү *(яңағын бәйләгән)*.

Тешем һыҙлай, сама юҡ,
Түҙер генә сара юҡ.
Шуға әмәл тапмаҫмы?

Баяғы малай

Икеләләрҙе бөтөрөп,
Бишле ҡуйһын дәфтәргә!

Балыҡсы

Шәмсуллаға теш кәрәк,
Иштуғанға биш кәрәк,
Ишетәһеңме, алтынҡай?
*(Балыҡ тыбырсынып ҡуя.)*

Ямай ҡарт

Минең дә бер нужам бар:
Ҡарсығымдың теле оҙон. —
Телен, зинһар, ҡыҫҡартһын, —
Мине шунан ҡотҡарһын...

Балыҡсы

Ҡотҡарыр, ҡотҡарыр...

Хор

Шәмсуллаға теш кәрәк,
Иштуғанға биш кәрәк!
Ямай ҡуйыр яртыны,
Телдән ҡалһа ҡарсығы,
Ишетәһеңме, алтынҡай, ха-ха-ха!

Балыҡсы

Ҡош батшаһы, Гөлзифа!
Өйрәктәрең ҡаҙ кеүек,
Аҡҡош хәтле ҡаҙҙарың,
Ни теләгең бар тағы?

Гөлзифа

Теләктәрем күбен күп,
Ашыҡмайым теләргә,
Көтәм әле...

Балыҡсы *(Әбделхаҡҡа)*.

Ә Әбделхаҡ ни теләр?
Һүҙ әйтмәһә, көй көйләр.

Әбделхаҡ

Беҙҙең теләк ҡуш булыр.

Гөлмария

Беҙҙең теләк ҡуш булыр.

Әбделхаҡ

Ҡуш теләктәр хуш булыр.

Гөлмария

Ҡуш теләктәр хуш булыр.

Балыҡсы

Йә, тиҙерәк әйтегеҙ,
Алтын балыҡ йонсоно...

Әбделхаҡ

Быйыл имен көҙ булһын,
Әммә көҙө тиҙ булһын;
Һеҙҙә яҡшы уй булһын;
Көҙөн беҙҙең туй булһын!
Бөтә колхоз эркелеп,
Алты милләт бер килеп,
Йәше-ҡарты гөр килеп,
Башҡорт-сыуаш туйына
Йыйылһындар өйөмә.
Эйеме, Гөлмария?

Хор

Алты милләт бер килеп,
Йәше-ҡарты гөр килеп,
Башҡорт-сыуаш туйына
Йыйылырҙар өйөңә.

Әбделхаҡ

Бейегәндә тетрәп торһон тауҙары,
Иҙел, тулап, ашып сыҡһын ярҙарын!
Башҡорт, сыуаш, рус, мари, татармы —
Майҙан етер, әллә беҙҙә ер тармы?
Бейеһендәр, бейеһендәр таңғаса,
Ай, сайҡалып, ҡылып торһон тамаша!

Хор

Бейеүҙәр башлана.

Бейегәндә тетрәп торһон тауҙары,
Иҙел, тулап, ашып сыҡһын ярҙарын!
Бейеһендәр, бейеһендәр таңғаса,
Ай, сайҡалып, ҡылып торһон тамаша...
Ана шулай, ана шулай,
Ма-ла-дис!

Төрлө милләттәр бейеүе дауам итә.
Ғәйнулла йүгереп инә, уның ҡулында ҡағыҙ.

Ғәйнулла

Ағай-эне, ҡыҙ-ҡырҡын,
Күрше-күлән, йәмәғәт,
Һөйөнсө, һөйөнсө, һөйөнсө! —
Улым ҡайта, улым ҡайта...
Һөйөнсө, һөйөнсө, һөйөнсө...
Бына хәбәр ебәргән:
Тәүге пароход менән үк
Ҡайтып төшөрмөн, тигән!
*(Яҙыуын кешеләргә күрһәтә.)*

Гөлзифа *(яҙыуҙы күргәс)*.

Тәүге пароход менән үк ҡайтам, тигән,
Ҡайтам, тигән... Зәйнулла...

Ғәйнулла

Дүрт йыл буйы зарығып көттөм уны,
Төн йоҡоларымды йоҡламай...
Күҙ төбәгән берҙән-берем бит ул.
Улым ҡайта, улым ҡайта,
Ишетегеҙ, улым ҡайта!..

Хор

Ирешерһең ниәтеңә,
Улың ҡайта төйәгеңә,
Ғәйнулла!
Аяҡтарың еңел булһын,
Күңелеңә шатлыҡ тулһын,
Зәйнулла!
Атайыңа йыуаныс бул,
Дуҫтарыңа ҡыуаныс бул,
Зәйнулла!

Ағас башындағы малай

Ана, ана... Тулҡындарҙы ярып яман,
Аҡ пароход килә ята былай табан...

Пароход тауышы.

Тауыштар

— Пароход килә...
— Ҡалай етеҙ килә!
— Ҡанаты бар, ахыры...

Ғәйнулла

Пароходта ҡыуанысым килә,
Таянысым, йыуанысым килә...
Улым ҡайта, улым ҡайта,
Улым ҡайта...

Ғәйнулла пароход килгән яҡҡа китә, уның артынан бөтә халыҡ сыға. Гөлзифа ғына тороп ҡала. Вадим бер аҙ туҡтала ла икенсе яҡҡа сығып китә.

Гөлзифа

Ошо туғайҙарҙа уйнап үҫтек,
Хәтерләйһегеҙме, тирәктәр?

Ун биш йәштән изге анттар биреп,
Ҡушылдылар беҙҙең йөрәктәр.
Көткән көнөм килде, сайҡал, Иҙел,
Һайра, турғай, һайра, сибәрем!
Мөхәббәтем ҡайта, мөхәббәтем,
Юлдарыңа гөлдәр һибәрем.
Һағыштарым — болот, һөйөүем — ҡояш.
Ҡояш сыға, болот тарала,
Оҙон йылдар айырғандар ине,
Тик минуттар ҡалды арала.
Уҙған юлы, баҫҡан эҙкәйҙәре
Ҡалды икән ниндәй илдәрҙә?
Анттары ант микән? Тойғоларын
Таратманы микән елдәргә?
Мөхәббәтем ҡайта, мөхәббәтем,
Һайра, турғай, һайра, сибәрем,
Мөхәббәтем ҡайта, йүгереп сығып,
Юлдарына гөлдәр һибәрем,
Мөхәббәтем ҡайта, мөхәббәтем...

*(Ҡосаҡларға барған шикелле ике ҡулын алға һуҙып, халыҡ киткән яҡҡа китә.)*

*Шаршау*

### Икенсе күренеш

Ғәйнулланың өй алды. Кис булып килә. Бағана башында — монтер Әбделхаҡ. Ул, күрәһең, Ғәйнулланың алма баҡсаһына ут үткәрә. Бер аҙҙан, сумкаһын аҫып, хат ташыусы Гөлмария инә.

Әбделхаҡ

Сыуаш ҡыҙы Гөлмария
Арбаны күңелемде.
Ғишыҡ уты бер тоҡанғас,
Һүнәсәк түгел инде,
Мария, Гөлмария,
Ғүмерлеккә һөйгән йәрем
Мария.
Мөхәббәтем килде быйыл
Аҡҡоштар ҡанатында;

Ике ҡояш берсә балҡый
Һинең һәр ҡарашыңда.
Мария, Гөлмария,
Ғүмерлеккә һөйгән йәрем
Мария.
Рәхәтләнеп янам ғына
Мөхәббәт усағында,
Ҡасан ғына, ҡасан ғына
Булырмын ҡосағыңда?
*(Бағананы ҡосаҡлай.)*
Мария, Гөлмария,
Ғүмерлеккә һөйгән йәрем
Мария?!

Гөлмария

Әллә аҙан әйтә инде Әбделхаҡ?

Әбделхаҡ

Эргәмә мен, үбешербеҙ.

Гөлмария

Янымa төш, күрешербеҙ.

Әбделхаҡ

Мине һөйһәң, күккә мен!

Гөлмария

Мине һөйһәң, ергә төш!

Әбделхаҡ

Мөхәббәт ул күккә аштыра, —
Күккә мен!

Гөлмария

Мөхәббәт ул ерҙә ҡауыштыра, —
Ергә төш!

Әбделхаҡ

Рәхәтләнеп янам үҙем
Мөхәббәт усағында,
Ҡасан ғына, ҡасан ғына
Булырмын ҡосағыңда?
Мария, Гөлмария,

Ғүмерлеккә һөйгән йәрем
Мария?!

Гөлмария

Ағиҙелдә боҙ киткәс...

Әбделхаҡ

Ысынмы?

Гөлмария

Алма бешеп етешкәс...

Әбделхаҡ

Күнәмен...

Гөлмария

Ураҡ бөтөп, көҙ еткәс...
Йылғаларҙа һыу туңғас...
Ҡарҙар яуып, ҡыш булғас,
Сана юлдары төшкәс...

Әбделхаҡ

Ҡар уйнатып елербеҙ,
Пар ат егеп санаға...
Шул саҡ инде бөтөнләй
Сама килер самаға.

Гөлмария

Табандарым ергә теймәй, —
Эйелеп ҡара бында.

Әбделхаҡ

Түбәләрем күккә тейгән, —
Үрелеп ҡара бында...

Бергә

Ғүмеребеҙ үтһен ине
Мөхәббәт һарайында,
Мөхәббәт һарайында!..

Ғәйнулла сыға.

Ғәйнулла

Йә, Әбделхаҡ, эштәр бөтәме?

Әбделхаҡ

Бөткәне бар
*(ҡапыл ут тоҡандыра)*,
бөтмәй торғаны бар.

Гөлмарияға күрһәтә, Гөлмария тиҙ үк сығып китә. Әбделхаҡ та бағана башынан төшә.

Ғәйнулла

Бындай эштең бөтмәүе хәйерле, —
Ғүмерлеккә барһын...
Бөтә ауыл ҡалай нур сәсә...

Әбделхаҡ

Һинең шатлығыңдан яҡтырған ул шулай,
Ғәйнулла ағай!
*(Китә.)*

Ғәйнулла

Һай, һай, һай! Һыу йыйылһын соҡорға!
Әй, ҡорҙаштар, дуҫ-иштәр,
Асы балым асыған,
Самауырым ҡайнаған,
Ҡаҙандарым аҫылған,
Ағай-эне, ҡыҙ-ҡырҡын,
Ҡоҙасалар, ҡоҙалар.
Табын тулы һыйҙарым
Һеҙҙе көтөп торалар.
Арғы күрше, һиңә әйтәм,
Бирге күрше, һиңә әйтәм,
Уң күршекәй, һиңә әйтәм,
Ут күршекәй, һиңә әйтәм,
Һай, һай, һай... Һыу йыйылһын соҡорға —
Табыныма килегеҙ!
Улым ҡайтты,
Зәйнуллам,
Зәйнуллам ҡайтты!

Ике йорт араһындағы кәртә эргәһендә Мәҙинә күренә.

Мәҙинә

Шатлыҡтарың кире китмәҫ булһын, күрше!

Ғәйнулла

Шатлығым ҙур, Мәҙинә,
Шатлығым ҙур,
Уртаҡ була күрһен шатлыҡтар.

Мәҙинә

Күңелдәре көр булһа,
Теләктәре бер булһа!..

Ғәйнулла

Ике ағас төҫлө, ике күрше булдыҡ.
Япраҡтарға япраҡ ҡағылманы,
Инде, исмаһам,
Тамырҙарға тамыр уралһын,
Насип булһын туғанлашырға.
Әйҙә, табыныма уҙ, Мәҙинә күрше.

Шаулашып ҡунаҡтар килә башлай. Иң тәүҙә баяғы Ямай ҡарт ҡарсығын эйәртеп килеп етә.

Ямай

Йорт-еренә — бәрәкәт,
Хужаһына — хәрәкәт!
Әссәләмәғәләйкүм, Ғәйнулла!

Ғәйнулла

Әйҙә, ағай, түремдән —
Еңгә менән парлашып,
Ултырығыҙ һайрашып.
*(Ҡарсыҡҡа.)*
Сибәр еңгә, һаулыҡмы?

Емеш

М-м-м...

Ямай

Еңгәң телдән яҙҙы бит.

Емеш *(тиҙ һөйләй)*.

Тел тейҙермә телемә!
Юл буйына саҡ түҙҙем.

Нисек тыйып торайым,
Ауыҙымда мең һүҙем —
Берәүһенә кәңәш бар,
Берәүһенә өгөт бар,
Берәүһенә ғәйбәт бар,
Берәүһенә һәйбәт бар,
Берәүһенә ғибрәт бар —
Нисек түҙеп торайым?

Ҡунаҡтар күп кенә йыйылған. Шарҡылдашып көләләр.

Ғәйнулла

Туп-тура баҡсаға уҙығыҙ,
Табын шунда ҡоролған...
*(Яңы ҡунаҡтар килә.)*
Рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар,
Рәхим итегеҙ!

Ҡунаҡтар килеп бөтә. Ғәйнулла инеп китә. Бер аҙҙан урамдан гармун тартып йәштәр йырлап уҙа.

Йыр

Алъяпҡыстары аҡ икән,
Кеҫәһендә хат икән;
Уҙғас, боролоп ҡарайһың,
Һөйөүҙәрең хаҡ икән.
Беләҙегең төшмәй микән?
Беләккәйҙәрең ескә;
Һөйөүҙәрең, көйөүҙәрең
Булмаһын үкенескә!

Баҡсала ҡунаҡтар йырлаша башлай.

Ҡунаҡтар йыры

Өҫтәл аҫҡайҙары дүрт аяҡ,
Өҫтәл өҫкәйҙәре — сынаяҡ,
Беҙҙең дә генә былай ултырыуҙы
Белә лә микән,
Күрә лә микән,
Ишетә лә микән күрше тирә-яҡ...

Аяҡсы йыры

Кетер-кетер, кетер-кетер
Самоходный комбайн!
Эсеп бөтөр, бөтөр, бөтөр,
Бөтөрмәһәң, алмайым.
Ана шулай, ана шулай,
Түңкәреп ҡуй!

Табынды ташлап Зәйнулла сыға.

Зәйнулла

Һаман да шул ғәҙәт, шул уҡ йырҙар,
Ниндәй ҡыҙыҡ таба торғандарҙыр...
Миңә арнап атай табын йыйҙы,
Туғандарҙы, бөтә дуҫ-иште,
Шул табында бер мин сит кеше.
Үҙ илемдә уҙғынсымын,
Бер башыма юҡ тынғылыҡ,
Йөрәгемә әллә инде
Китмәҫ өсөн ҡунды болот.
Буш күңелем ҡорғаҡһыны,
Ҡалды бары бер өмөтөм —
Йәнем өшөй, йәнем өшөй,
Йылынды бир, мөхәббәтем!
Үҙ илемдә уҙғынсымын,
Бер башыма юҡ тынғылыҡ.
Кил, Гөлзифам, болоттарҙы
Тишеп үткән нурҙар булып.

Үҙҙәре яғынан Гөлзифа килә, Зәйнулла уға ҡаршы ынтыла.

Зәйнулла

Көндөҙ күрешеү төштәй генә булды,
Күпме зарығып көттөм был кисте!..
Ҡарай-ҡарай, күҙҙәрем талды,
Гөлзифа, күҙҙәрем...

Гөлзифа

Дүрт йыл көтөп йөрәккәйем янды,
Йөрәккәйем янды,
Сал тауҙарҙы ашҡан ыласыным!
Ниңә шулай, ниңә шулай оҙаҡ тилмерттең?..

Зәйнулла

Хәҙер инде, йәнем, беҙ бергәбеҙ,
Ғүмерлеккә, ғүмерлеккә, йәнем, бергәбеҙ...

Гөлзифа

Йондоҙ менән йондоҙ табышмаған,
Беҙ табыштыҡ,
Саҡ менән Суҡ мәңге ҡауышмаған,
Беҙ ҡауыштыҡ.
Күгем бейек, ҡояшҡайым яҡты, —
Бәхетлемен,
Татлы төштәр өнөм булып ҡайтты, —
Бәхетлемен!

Зәйнулла

Илдәр буйлап сәсеп йөрөнөм мин
Һағышымды,
Һағынып ҡайттым, аҫыл һандуғасым,
Тауышыңды.
Сит ерҙәрҙең гүзәл сәскәләрен
Өҙгәнемдә,
Ерҙең иң саф гөлө — бер һин булдың
Йөрәгемдә.
Һының нурҙан яратылған, Зифам,
Йәнең — моңдан,
Мөхәббәтең һинең айнытһа ине
Һағышымдан.

Бергә

Йондоҙ менән йондоҙ табышмаған,
Беҙ табыштыҡ,
Саҡ менән Суҡ мәңге ҡауышмаған,
Беҙ ҡауыштыҡ.
Күгем бейек, ҡояшҡайым яҡты, —
Бәхетлемен,
Күҙҙәремә бер тултырып баҡсы, —
Бәхетлемен!

Баҡсанан табын йыры ишетелә.

Табын йыры

Йондоҙҙар өсөн эсәйек, —
Йондоҙҙар яҡтырһындар,
Һыуҙар өсөн күтәрәйек, —
Шатланып аҡһын һыуҙар!
Ҡоштар өсөн бер һалайыҡ, —
Моңло һайраһын ҡоштар,
Түңкәрәйек дуҫтар өсөн, —
Ҡайғы күрмәһен дуҫтар!

Баҡсанан Ғәйнулла сыға.

Ғәйнулла

Табын ташлап сығып киттең, улым,
Аштан оло булыу килешмәҫ...

Гөлзифа китә.

Зәйнулла

Хәҙер, атай...

Ғәйнулла

Әйҙә, әйҙә, һине табын көтә,
Һинең урының түр башында бөгөн...

Был арала табындан халыҡ тарала башлай, алда — Ямай.

Ямай

Һыйыңа шөкөр, Ғәйнулла...

Ғәйнулла

Быныһы тағы ни эш, Ямай,
Таңһыҙ китеү ярамай...

Ямай

Уйын бер, уймаҡ ике, ти,
Иртәгә — эш, һабан туйы түгел.

Емеш

Һай-һай-һай...
Әле ай ҙа батмаған...

Ямай

Самалап ҡылан, ҡарсыҡ.

Емеш

Һи-и-и!
Әле ай ҙа батмаған,
Әле таң да атмаған,
Көрәгәлә бал тулы.
«Ҡайтабыҙ!» — тип, был тиле
Ҡоротто бит тәҡәтте!
Бер ултырыу — үҙе бер ғүмер...

Арттан халыҡ сыға. Аяҡсы, көрәгәһен күтәреп, ижау менән кешеләрҙе эсерә-эсерә килә. Беренсе күренештәге балыҡсы ул.

Аяҡсы

Кетер-кетер, кетер-кетер —
Самоходный комбайн,
Эсеп бөтөр, бөтөр, бөтөр,
Бөтөрмәһәң, алмайым...
Юл аяғы, юл аяғы,
Ана шулай, маладис...

Хор

Ҡыҙҙар өсөн күтәрәйек,
Булһындар сибәр генә,
Быныһы ҡарттар хөрмәтенә,
Йә, ҡаплап ебәр генә...
Эстек, эй эстек балдарҙы,
Бал бөтөрмәҫ малдарҙы.
Бал эсерлек йүн ҡалмаһа,
Шул бөтөрөр дандарҙы...

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Өсөнсө күренеш

Икенсе картинанан һуң ике-өс аҙна ваҡыт уҙған. Ағастар ҡуйы япраҡ ярған, муйыл сәскә атҡан. Мәҙинәләрҙең болдоро. Болдорҙа Гөлзифа ултыра. Болот араһында күктә ай күренә.

Гөлзифа

Ниндәйҙер шом борсой мине һаман,
Күңелем, гүйә, һүрәнәйә бара...
Уның менән һәр күрешкән һайын,
Әйтерһең дә, йыраҡлаша ара.
Ниндәйҙер бер һалҡын һулыш һиҙәм,
Бушлыҡ күрәм уның күҙҙәрендә,
Асыу ишетәм уның һүҙҙәрендә...
Юҡ, юҡ, булмаҫ, оҙаҡ айырылышыу,
Бәлки, ятһындыра торғандыр...
Әллә һөйөү шулай була микән?
Күктә янған ҡуш йондоҙ ҙа
Янмай икән бер тигеҙ —
Береһе яҡты, береһе тоноҡ.
Йондоҙҡайҙар, әйтегеҙ —
Ниңә шулай, ниңә шулай
Янмайһығыҙ бер тигеҙ?
Һеҙ алыҫта, һеҙ бейектә,
Арағыҙҙа томандар.
Беҙ бит бында, беҙ бит бергә,
Бер үк ерҙә тыуғандар.
Таралһындар, таралһындар
Аралағы томандар.
Йә күңелем күккә аша,
Йә ситлеккә бикләнә.
Берсә яна, берсә туңа,
Берсә йәнә шикләнә...
Күккә ашҡан күңелемде
Ситлектәргә бикләмә.

Вадим инә.

Вадим

Аяҡтарым башҡа юлда ине,
Күңелем, ахыры, тартып килтерҙе.
Ни ҡылайым, кисер мине, Зифа,
Аҡылыма йөрәк баш бирмәй...
Был һырышҡаҡ тип үк ғәйепләмә.
Саған инем. Талдай бөгөлдөм...

Гөлзифа

Ни генә тип әйтәйем һуң, Вадим?
Бәлки, ундай һүҙҙәр барҙыр ҙа бит.
Ахыры, улар биккә бикләнгән.

Вадим

Юҡ, юҡ, яуап көтмәйем мин.
Былай бошоноп килдем һинең хаҡта.
Киске уйында ла күренмәйһең,
Һинһеҙ уйындарҙың ҡыҙығы юҡ,
Нимә булды һиңә, Гөлзифа?
Һиңә бойоҡ булыу килешмәй...

Гөлзифа

Эсем боша...

Вадим

Беләм, күңелең урынында түгел,
Йәнең өҙгөләнә.
Тик ашыҡма. Ваҡыт кәңәш бирер,
Ваҡыт — ғәҙел нәмә.

Гөлзифа

Йәшермәйем һинән, йәшермәйем —
Ут менән һыу бер үк йөрәгемдә...

Вадим

Янғын сыҡҡан өйҙөң байлығына
Ҡул һуҙырға килгән тимә мине,
Күңеленә шик-шом һалмайым мин,
Өмөтөңдә алданмаһаң ине.
Мөхәббәтең үкенесле булып,
Хәсрәт уттарында һин янмаһаң ине...

Һүҙһеҙ генә көйләп, Зәйнулла инә: «Ләл-лә, ләләл-ләлә...»

Зәйнулла

Ут бар ергә күбәләктәр оса:
*(Вадимға ымлай.)*
Ҡараһы ла оса, алаһы ла,
Ҡанат көйөр тип тә ҡурҡып тормай.

Гөлзифа *(борсолоп)*.

Зәйнулла!

Вадим

Сәләмеңде алдым, Зәйнулла мырҙа!
Әйтер һүҙең булһа, асығыраҡ әйт.

Зәйнулла

Аңра өсөн ҡат-ҡат сиркәү ҡаҡмайҙар,
Ахмаҡ өсөн ҡат-ҡат аҙан әйтмәйҙәр,
Аңлашылдымы, ала күбәләк?

Вадим

Аңлашылманы. Юҡ...
Мин әҙәмсә генә аңлайым бит...

Зәйнулла

Мин шайтанса әйтәмме ни һиңә?
Юлыңда бул, йәғни кит бынан!

Гөлзифа

Зәйнулла! Был ни тағы?
Шулай һөйләшергә ни хаҡың бар?
Вадим, Вадим! Зинһар, зинһар, кисер!

Зәйнулла

Минең хаҡым үҙем менән бергә...
Ҡайтҡанымдан бирле һиҙәмен:
Был тупһаға тоҙло һыу һипкәндәй,
Китеүе юҡ бынау килмешәктең...
Бына нәмә, егет шәрәмәте:
Һуҡмағыңды башҡа яҡҡа тапа,
Кәләбеңде башҡа тарафҡа һал,
Ҡапҡа бикле, хужа үҙе ҡайтты...

Гөлзифа

Хужа үҙе? Хужа үҙе ҡайтты?
Кем хужаһы? Нимә хужаһы?

Зәйнулла

Мөхәббәттең төп хужаһы ҡайтты.
Ә ул уҫал. Ҡылығы ҡырҡыу уның,
Елкәләп тә сығарыуы мөмкин,
Һөмһөҙөрәк ҡунаҡ йышлай ҡалһа...

Вадим

Мин ҡунаҡ та, килмешәк тә түгел,
Мин — хужа! Башта шуны бел.
Мин ер һөрәм, икмәк үҫтерәм.
Һин аслыҡтан дөмөкмәһен өсөн,
Икмәк үҫтерәм.

Зәйнулла

Икмәгеңде, бар, баҫыуҙа үҫтер,
Эшеңдә бул! Һинең эшең шул.
Бында күп уралма, юғиһә...

Вадим

Янама! Янамай тор,
Айыу үкереп, тауҙы емермәҫ,
Һиңә ҡул күтәрәһем юҡ, көтмә,
Һин теләгән ыҙғыш булмаясаҡ,
Булмаясаҡ!
Ғәрип-ғөрәбәгә теймәйем мин,
Һин бахыр бит, бахыр...

Зәйнулла

Ә мин һуғышырға, һине туҡмарға,
Һине дөмбәҫләргә теләйем!..
Үсем таша, асыуым ҡайнай!..
Ҡаным һөрән һала!
Аулаҡ ерҙә осрай күрмә миңә!
Һаҡ бул!

Вадим

Ә мин ҡурҡмайым.
Ҡурҡытһаң да, ҡурҡмайым.

Зәйнулла

Ярай, ҡалып торһон. Тәртәнде бор!
Ҡапҡа бикле, хужа үҙе ҡайтты.
Мөхәббәттең төп хужаһы ҡайтты!
Аңлашылдымы?

Гөлзифа

Хужа үҙе ҡайтты? Ниндәй хужа?
Мөхәббәттең төп хужаһы ҡайҙа?
Һис ни аңламайым...

Вадим

Аңлашылды. Хәҙер аңлашылды,
Үҙем өсөн түгел, Гөлзифаҡай,
Һинең намыҫың өсөн хурландым...
*(Китә.)*

Зәйнулла

Онотолдом, ахыры, кисер мине,
Ваҡ бәхәсте онотайыҡ, Зифа...
Утҡа килгән күбәләктәй килдем,
Йылыт мине, әммә үртәмә, —
Һүҙҙәремде бөгөн әйтмәй ҡалһам,
Һуңлармын тип ҡурҡам иртәгә.
Ғүмерлеккә йәрең булырмын, тип
Ант иткәйнең ун биш йәшеңдә.
Анттарыңды кире алма минән,
Йөрәгеңде минән йәшермә.
Минеке бул! Ғүмерлеккә!

Гөлзифа

Торған һайын шигем арта бара,
Кем һин?

Зәйнулла

Бер кем түгел, бары Зәйнулла.

Гөлзифа

Минең көткән кешем бүтән ине,
Уйҙары саф, күңеле шат ине.
Һағышым да шуға яҡты булды,
Ауыр уйҙар миңә ят ине.

Ерҙе һөйҙөм, ул йәшәгән өсөн.
Яраттым ул йөрөгән юлдарҙы,
Ул һөйәлгән ҡайындарҙы һөйҙөм,
Эстем мин ул эскән һыуҙарҙы.
Ҡайҙа барһам,
Бер ул ғына булды...

Зәйнулла

Бына ҡаршыңда ул хәҙер,
Әүәлгесә һине ярата.

Гөлзифа

Һин әүәлге түгел, юҡ, түгел,
Быны үҙең дә яҡшы беләһең.

Зәйнулла

Дөрөҫ, Гөлзифа, донъя менән арам боҙолдо.

Гөлзифа

Нишләп шулай булды?

Зәйнулла

Алданылар мине.

Гөлзифа

Кем алданы?

Зәйнулла

Бөтәһе лә мине алданы...
Ҡайҙа барма, һине, егет,
Батырлыҡ көтә, имеш.
Бөтә юлдар — тик дан юлы —
Бәхеткә илтә, имеш.
Сиҙәм ер, имеш, сибәр ер,
Әкиәт, имеш, Себер.
Ҡайҙа барма — шунда хөрмәт,
Ожмах, имеш, бөтә ер.
Китаптарҙы ташлап, эҙләп киттем,
Әкиәт тә, дан да тапманым, —
Ҡайҙа улар?

Гөлзифа

Ә башҡалар унда нимә тапҡан?

Зәйнулла

Ат урынына эшләй улар унда,
Мин ат түгел, мин бит кешемен...
Миңә бүтән яҙмыш вәғәҙә иткәйнеләр.

Гөлзифа

Торған һайын күңелең һинең
Ҡара урманға оҡшай бара.
Ҡара урманда миңә ҡурҡыныс...
Мин ҡояшлы ҡырҙы яратам;
Ҡара урманда миңә ҡурҡыныс.

Зәйнулла

Мин бит һөйәм һине...

Гөлзифа

Ерҙән биҙгән, илдән биҙгән һөйөү
Фажиғәле булыр, аяныс.
Миңә ауыр. Йәнем өҙгөләнә.
Тик була алмам һиңә таяныс.
Дүрт йыл буйы, оҙаҡ дүрт йыл буйы
Бер көнөмдө ике йәшәнем,
Үҙем өсөн бер эш эшләр булһам,
Һинең өсөн өстө эшләнем.
Бар теләгем елгә, елгә осто,
Бар өмөттәремде тапаның.
Мин бит ҡояш көттөм, таң ҡояшын!
Һин күләгә булып атланың,
Ауыр миңә, йәнем өҙгөләнә...

Зәйнулла

Ят бер килмешәккә алмаштырып,
Тимәк, мине һин дә алданың!
Алданылар мине, алданылар!

Ғәйнулла Гөлзифаның арияһы бөтөр алдынан ике аралағы кәртәгә килеп һөйәлә. Был яҡҡа уҙмай.

Ғәйнулла

Кем алданы шулай?

Зәйнулла

Бөтәһе лә, хатта һин дә, атай.

Ғәйнулла

Һин ҡайтҡандан бирле, эсем боша,
Уйың, аҡылың теүәлме, улым?

Зәйнулла

Теүәл ине. Хәҙер белмәйем.

Ғәйнулла

Ни тип алданылар? Ни тип алданым мин?

Зәйнулла

Һинме? Һин бит, тормош — баҡса, тинең,
Мине сәскә тинең,
Ел-ямғыр юҡ, ҡояш һиңә генә
Нурын сәсә, тинең.
Алтын тауҙар вәғәҙә иттең миңә,
Көмөш йылғалар.
Ул тауҙарың ҡайҙа? Йылғаларың
Ҡайҙа ағалар?

Ғәйнулла

Күктән төштөңмө әллә?
Ер һүҙҙәре түгел был һүҙҙәр.

Зәйнулла

Эйе, атай!
Үҙ ҡулдарың менән күккә ашырҙың да,
Тормош мине ергә ырғытты.
Хәҙер, гүйә, мин бер ер ҡорто.

Мәҙинә *(эстә, тәҙрә янында)*.

Яҡшы ата балаһы бит һин, Зәйнулла,
Улай ярһыма...

Зәйнулла

Алтын тауҙар ҡайҙа?
Көмөш һыуҙар ҡайҙа?

Ғәйнулла

Улай булғас, мин дә һорайым —
Һөргән ерең, туҡкан тирең ҡайҙа?
Кемгә ниндәй яҡшы эш эшләнең?

Зәйнулла

Һин бит миңә унының әйтмәнең.

Ғәйнулла

Егерме өс йәштә уны кеше үҙе белер ваҡыт, —
Һөргән ереӊ, түккән тиреӊ ҡайҙа?

Зәйнулла

Тар бураҙна түгел, тап-таҡыр юл
Вәғәҙә иттеӊ миңә. Яҡты таңға илткән
Киӊ оло юл... Юл буйынса уттар балҡып тора...

Ғәйнулла

Барыр юлыӊ тар, ҡараңғымы ни?
Бары һиңә генә донъя тығыҙ.

Зәйнулла

Башҡаларҙа минеӊ эшем юҡ.
Ниңә мине емешле ағас түгел,
Ҡыҫыр сәскә итеп үҫтерҙеӊ?..

Мәҙинә

Һинеӊ өсөн йәнен ярып бирер
Атайыңа ундай һүҙҙәр әйтмә.

Ғәйнулла

Бала саҡта үҙен күтәреүе
Ауыр түгел ине. Ә бына
Һүҙен күтәреүе бик ауыр.
Зәйнулла, Зәйнулла, балам минеӊ...
Әсә итәгенә тотоноп,
Тәпәй баҫа бала,
Тәүге һүҙен «әсәйем» тип
Телен аса бала.
Салбар балағыма тотоноп,
Тәпәй баҫтыӊ, улым,
Тәүге һүҙҙе «атайым» тип
Телеӊ астыӊ, улым.
Әсә наҙын күрмәйһеӊ тип,
Артыҡ иркәләнем...
Йөрәгемә ҡаҙала хәнйәр булып
Һинеӊ үпкәләүеӊ.

Мәзинә

Шул саҡлы уҡ өҙгөләнмә, күрше,
Аҙғын-туҙғын юлға баҫмаған да улың.

Ел ҡуба башлай, күктә йәшен сағылып ҡала.

Ғәйнулла

Аҙашҡанға юл күрһәтеп була,
Мохтаждарға ярҙам ҡулы кәрәк,
Рухы бөлгәндәргә ни сара бар —
Зиһенем етмәй.

Зәйнулла

Үҙегеҙ бөлдөрҙөгөҙ. Хыялымда
Һеҙ төҙөгән өмөт һарайы
Ел өрөүгә емерелеп төштө,
Тик нигеҙе ҡалды ҡарайып.

Ғәйнулла

Бөтәһенә мин ғәйепле —
Көн яҡты, тип алдашҡанмын,
Ер йәшел, тип алдашҡанмын,
Һыу татлы, тип алдашҡанмын,
Бөтәһенә мин ғәйепле. Мин ғәйепле...
Күп күтәргән индәремә
Күтәрмәҫлек ғәйеп төштө,
Илле йәштә иңкәйҙем мин,
Дауыл йыҡҡан имән төҫлө —
Күтәрмәҫлек ғәйеп төштө, ғәйеп төштө...
Хәсрәтемде кемгә һөйләйем,
Йәштәремде ҡайҙа түгәйем?..
Йәштәремде... йәштәремде... йәштәремде
Ҡайҙа түгәйем?..

Илай, сыға. Йәшен көсәйә.

*Шаршау*

## Дүртенсе күренеш

Урман аҡланы. Төн. Дауыл. Йәшен уйнай. Бер аҙҙан көслө ямғыр яуа башлай. Ғәйнулла инә.

Ғәйнулла

Хәсрәтемде кемгә һөйләйем,
Йәштәремде ҡайҙа түгәйем?
Йәштәремде... йәштәремде... йәштәремде
Ҡайҙа түгәйем?..
*(Тирәккә һөйәлә.)*
Йөҙ йәшәгән ялбыр тирәк,
Төптәреңдә йәш ҡурпылар.
Ҡайғы-хәсрәт килтермәҫтәр
Ҡарт көнөңдә һиңә улар.
Эргәмдәге йәшел ҡурпым
Күрмәй үҫте ел-ямғырын.
Йөрәгемдә саҡты балам,
Ғазапланам бер яңғыҙым.
Йәш тулыуға әсәһенән ҡалды,
Үгәйҙе уға әсә итмәнем,
Йәшлегемдең тойғо, теләктәрен
Ете йоҙаҡ менән бикләнем.
«Һин — янаһын янған, һөйгән, көйгән», —
Йөрәгемде шулай алданым.
Алдаманым. Шуға ышандым мин,
Ғүмеремде уға арнаным.
Өмөтөмдөң емештәре ҡайҙа?
Көткән шатлыҡтарым, ҡайҙа һеҙ?
Теләктәрем булды микән ни һуң
Шулай ҡыҫыр, шулай файҙаһыҙ?
Йәберләнгән йәнем, йәнем әрней,
Дауаларын ҡайҙан алайым?
Һығылып төшкән бахыр башҡайымды
Ерем күкрәгенә һалайым,
Ах-ах-ах.
*(Йөҙтүбән ергә ятып илай.)*
Хәсрәтемде ергә һөйләйем,
Йәштәремде ергә түгәйем... Ах-ах-ах...
Йәберләнә йәнем. Бер үҙемде генә
ҡарғайым...

Мәҙинә күренә. Улар бер-береһен күрмәйҙәр.

Мәҙинә

Ғәйнулла!
Бынау ғәрәсәттә ҡайҙа китте?
Ғәйнулла!

Ғәйнулла

Кем саҡыра мине?

Мәҙинә

Мин — Мәҙинә.
Тор! Аунама ерҙә. Бер ебегән менән түгел,
Ир асылы менән һөйләшәм мин.

Ғәйнулла *(теҙләнеп)*.

Тора алмайым, ҡайғыларым баҫа.

Мәҙинә

Яу ҡырында дан юлдашы булған —
Һин түгелме?
Ил өҫтөндә йөҙөк ҡашы булған —
Һин түгелме?
Ҡара ҡайғыларға баш эймәгән —
Һин түгелме?
Эсеңдә ут янһа, уф тимәгән —
Һин түгелме?
Һин түгелме, Ғәйнулла?
Тор!

Ғәйнулла

Ҡайын бөгөлөр ерҙә, Мәҙинә,
Имән шартлап һына икән ул,
Йыуата алһаң, йыуат мине.

Мәҙинә

Йыуанырлыҡ йыуаныстар инде
Артта ҡалды.
Беҙҙең йәштә һүҙҙәр һүрәнәйә, —
Ни әйтәйем?..

Ғәйнулла

Эйе, хәҙер беҙҙе һүҙҙәр генә
Йыуата алмай. Кинәт был мәлде
Бөтә үкенестәрем йөрәгемдә
Ҡанлы төйөр булып төйнәлде.

Мәҙинә

Һинең ярһыу сағың... Тынысланғас,
Урынына ҡайтыр бөтәһе лә.
Ана Иҙел дә ярҙарына ҡайтҡан.

Ғәйнулла *(аяғүрә баҫа)*.

Күңелем боларғанда, әйтеп ҡалам,
Башҡа саҡта баҙнат итә алмам...
Йорттарыбыҙ араһында беҙҙең
Тәпәш ҡойма булды ни бары,
Тәүлегенә әллә нисә тапҡыр
Һикереп сыҡты шуны уйҙарым.
Егерме йыл буйы үҙ уйымды
Үҙемдән дә хатта йәшерҙем,
Гүйә, хәҙер үпкә күҙе менән
Ҡарай төҫлө миңә йәшлегем.
Ниңә шулай текләп ҡарайһың һин?
Ҡараштарың хөкөм итә һымаҡ.
Кисер мине, һаташамдыр, ахыры...

Мәҙинә

Юҡ, Ғәйнулла, хөкөм итмәйем.
Әммә мин дә йәшләй яңғыҙ ҡалдым.
Йәшермәйем, ҡай саҡ таң алдында
Һинең улың илап уянһа,
Шуны барып йыуатаһым килде.
Бары ла хәҙер төштә кеүек инде...

Ғәйнулла

Бала... Бала... Эс-бауырҡайҙарға
ҡан һауҙырған
Берҙән-бер шул ғәзиз бала икән.

Мәҙинә

Ҡара гүрҙән ҡайтып булмағандай,
Үткәндәргә ҡайтыр юлдар юҡ...

Ғәйнулла

Үткәндәргә ҡайтыр юлдар юҡ.

Мәҙинә

Үкенһәк тә, һүнгән усаҡ
Тоҡанмаç ҡабат,
Елкенһәк тә, оса алмабыҙ —
Имгәнгән ҡанат.
Ағын һыуҙар артҡа табан
Аҡмаçтыр инде,
Үткән ғүмер, ҡалған хәтер
Ҡайтмаçтыр инде.
Йөрәкте усҡа йомарлап,
Барына күнәм,
Ҡауышмай ҡала балалар, —
Шуға үкенәм.

Ғәйнулла

Дауыл тынды, йәшендәр ҙә һүнде,
Ерҙә йәнә тыныс таң атыр.
Томан күтәрелер. Эсемдәге
Томандарҙы кемдәр таратыр?
Ерҙә йәнә тыныс таң атыр.
Һәр көн һайын яңы өмөт менән
Ҡаршы ала инем ҡояшты.
Бар уйҙарым, барлыҡ хыялдарым
Ҡара төнгә барып тоташты,
Ҡаршылаған саҡта ҡояшты...
Балҡы, ҡояш! Киптер йәштәремде.
Бар шиктәрен тарат баламдың.
Күңеленә изге нурыңды сәс,
Тамырҙарын көйҙөр ямандың.
Бар шиктәрен тарат баламдың!
Был ер һинең өсөн, ғәзиз бала.
Балам ғәзиз минең өсөн дә,
Балҡы, ҡояшым! Нурла баламды!..

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### Бишенсе күренеш

Беренсе картинала күренгән Ағиҙел буйындағы шул уҡ урын. Бесән өҫтө. Ҡояш байтаҡ күтәрелгән. Бөтә халыҡ бесән өмәһенә килгән. Бында табор. Тирә-яҡта күбәләр күренә. Ағастарға ара-тирә сәңгелдәктәр, кейем-һалым эленгән. Уртала — ҙур ҡаҙан. Бер ситтәрәк — ҡымыҙ мискәһе. Алыҫта кәкүк саҡыра, ҡоштар һайрай, салғы яныйҙар. Хор йырлағаны яңғырап тора.

Хор-ауаз

Саҡыр, кәкүк, саҡыр, кәкүк,
Аҙашҡан йырҙарыңды,
Саҡыр, кәкүк, һанама тик,
Һанама йылдарымды.

Саҡыр, кәкүк, саҡыр, кәкүк,
Саҡырһаң, килер дуҫың...
Саҡыр, кәкүк... Тик бәхетең
Саҡырмай килер булһын.

Тырма тотоп, Гөлмария үтеп китә, саҡ ҡына торғас, һәнәк күтәреп, ҡаршы яҡҡа Әбделхаҡ уҙа.

Гөлмария *(бер яҡтан)*.

Әбделхаҡ!

Әбделхаҡ *(икенсе яҡтан)*.

Гөлмария! Мария!..

Гөлмария

Тапһам, йәнен өҙөр инем...

Әбделхаҡ

Бер ҡосаҡлап үбер инем...

Гөлмария

Ҡолаҡтарын борор инем...

Әбделхаҡ

Ҡосағында ирер инем...

Улар, боролоп килеп, сәхнә уртаһында осрашалар.

Гөлмария

Бөтә әҙәм бесән өмәһендә.
Бер мин генә, аҙашҡан ҡош һымаҡ,
Һине эҙләп болон ҡыҙырам...
Ҡайҙа китеп шулай олаҡтың?
Уф! Бер төн эстәрендә һағындым...
*(Ҡапыл Әбделхаҡтың ҡосағына ауа.)*

Әбделхаҡ

Ҡыҙыл яҡут ташым һин,
Күҙ өҫтөмдә ҡашым һин,
Алтын ҡанат ҡошом һин,
Яҙым, көҙөм, ҡышым һин.
Усымда өф итермен,
Төшөңдә өн итермен,
Төнөңдә көн итермен,
Донъяңды йүн итермен.
Хан ҡыҙҙарын күрһәм дә,
Һала торған күҙем юҡ,
Космонавҡа килһә лә,
Ҡуша торған һүҙем юҡ,
Ҡыҙыл яҡут ташым һин,
Күҙ өҫтөмдә ҡашым һин,
Алтын ҡанат ҡошом һин,
Яҙым, көҙөм, ҡышым һин...

Гөлмария *(ҡапыл һиҫкәнеп, ҡосаҡтан ысҡына)*.

Ә йәйең кем? Йәйең кем?

Әбделхаҡ

Йәйем дә һин, йәнем дә һин.

Гөлмария

Улай булғас, ниңә һуң
Кисә киске уйында,
Онотоп бар саманы,
Арғы урам Заданы
Күҙең менән ялманың?

Әбделхаҡ

Мин бит, мин бит... Зада аша һиңә ҡараным...

Гөлмария

Ҡалтай аша ҡалаға
Йөрөр булма бынан һуң —
Минең аша бүтәнде
Күрер булма бынан һуң.
Көнө килгәс, үҙеңдән
Бау ишермен әле мин,
Сыуаш әпипәһенә
Бейетермен әле мин!

Әбделхаҡ

Мин бейергә әҙер инде,
Тиҙерәк әйт таҡмағыңды...

Гөлмария

Әбделхаҡ!

Әбделхаҡ

Гөлмария!

Гөлмария

Башҡа ауылда тор, имеш,
Көн аралаш күр, имеш...
Һағыныуҙан һарғайырһың,
Зарығып ҡартайырһың.

Әбделхаҡ

Эйе шул.

Гөлмария

Яман күҙ бар, яман һүҙ бар,
Бар дөрөҫө, бар нахаҡ.
Бер көн әйткән тәҡдимеңде
Ҡабул итәм, Әбделхаҡ.

Әбделхаҡ

Туй ҡасан, Мария?

Гөлмария

Егет әйткән ваҡытта...
*(Сыгып йүгерә.)*

Әбделхаҡ *(хискә бирелеп)*.

Рәхәтләнеп янам икән
Мөхәббәт усағында,
Былай булғас, ғүмерлеккә
Керәмен ҡосағыңа,
Мария, Гөлмария,
Өҙөлөп үк һөйгән йәрем, Мария.
*(Китә.)*

Алты ашнаҡсы ҙур бал мискәһе тәгәрәтеп сығара.

Беренсе ашнаҡсы *(ул баяғы балыҡсы һәм аяҡсы)*

Бал мискәһе тышынан уҡ
Балҡып тора,
Сыҙар хәл юҡ — хуш еҫтәре
Аңҡып тора.
Эскәйендә күпме ғәйрәт,
Дарманы бар,
Әҙәмдәрҙе өйөрөлдөрөр
Фарманы бар.
Тәгәрәгән була тағы
Ирмәк өсөн,
Беҙҙе үҙе тәгәрәтер
Әле кисен.
Бал мискәһе тышынан уҡ
Балҡып тора.
Сыҙар хәл юҡ — хуш еҫтәре
Аңҡып тора.

Икенсе ашнаҡсы мискәнең өҫтөндәге тығынын асып, ижау менән бал һоҫмаҡсы итә, уны өсөнсө ашнаҡсы этәреп ебәрә, ишара яһап, бесәнселәр яғына күрһәтә, кеше өлөшөнә инергә ярамағанды аңлата. Дүртенсе ашнаҡсы асыҡ мискә ауыҙынан бал еҫкәп тора, бер аҙҙан ул иҫергәндәй була, тура баҫып, сайҡалып тора, шунан һуң башҡалар ҙа бер-бер артлы бал еҫкәп иҫерәләр, башта улар алтыһы алты ерҙә сайҡалып тора, шунан һалмаҡ ҡына бейей башлайҙар. Бара торғас, билдәрендәге ҙур бысаҡтарын тартып алалар, икенсе ҡулдарына сүместәрен тоталар, ҡыҙып китеп, һуғышсан бейеүгә (ҡылыс, ҡалҡан тотҡандай итеп) күсәләр. Бейеү бик ҡыҙыу темпта дауам итә. Шул саҡ Ямай инә. Бейеү ҡапыл тына, бейеүселәр баҫҡан ерҙәрендә баяғыса сайҡалып торалар.

Ямай

Алты тәкә һуйҙырҙым,
Алты ҡаҙан аҫтырҙым,
Алты атты ектереп,
Алты малай саптырҙым
Алты мискә ҡымыҙға.
Ударниктар бал эсер,
Урталарға ҡымыҙ бар,
Пувыр-убыр-маҙарға
Ағиҙелдең һыуы бар —
Ятһындар ҙа эсһендәр...
Туҡта, туҡта! Был ни эш?
Бал мискәһен кем асты?
Был мәлғүндәр эскән бит!

Беренсе ашнаҡсы

Эсһәк тә иҫерәбеҙ беҙ,
Еҫкәп тә иҫерәбеҙ.
Бер тамсыһын да эсмәнек,
Бары ятып еҫкәнек.

Ямай

Алдайһығыҙ, мөртәттәр!
Эсмәй, әҙәм иҫермәҫ!
Эскәнһегеҙ!

Беренсе ашнаҡсы *(Ямайҙың танауына килеп өрә.)*

Эсмәнек, тигәс, эсмәнек...
Әйҙә әле, әйҙә, һин дә еҫкәп ҡара.

Ямай

Ҡуй, бушты!

Беренсе ашнаҡсы

Танауың туҙмаҫ, Ямай, әйҙә, әйҙә...

Ямай *(мискә ауыҙына танауын тыға)*.

Һа-һа! *(Пауза.)*
Һа-һа-һа!..
Һа-һа, һа-һа, һа-һа...
Туғыҙ тәкә салдырҙым,
Туғыҙ ҡаҙан аҫтырҙым,

Туғыҙ юртаҡ ектереп,
Туғыҙ егет саптырҙым...
Берәү, икәү... биш... туғыҙ,
*(Ашнаҡсыларҙы һанап.)*
Туғыҙ мискә әсе бал.
Көрәгәсе, һоҫоп ал!
Көрәгәсе кис килер.
*(Мискәнең тығынын тыға.)*
Көндөҙ йөҙөп эшләп ҡал.
Тфү, тфү! *(Ҡулына төкөрә.)*
Айт-два!
Минең арттан — өмәгә!

Бөтәһе лә сыға.
Сәңгелдәк күтәреп, Емеш инә. Ул ауылдан килә.

Емеш

Кендеге ҡанғансы иланы, иланы ла,
Әсәһенә яҡынлашҡас, шымып ҡалды.
Ниндәй хәйләкәр... Йоҡла әйҙә, йоҡла.
Бәрхәт икән бәллеүҙәре,
Ебәк икән сатырҙары.
Бәлли-бәү...
Май эсендә бөйөрмө ни —
Рәхәтләнеп ятыуҙары.
Бәлли-бәү...
Һинең өсөн балдар йыя
Нескә билле бал ҡорттары.
Бәлли-бәү...
Ана һиңә матур йырҙар,
Пырлап тора таң ҡоштары.
Бәлли-бәү...
Улым йоҡлай. Туҡта, елкәй.
Япраҡтарҙы ҡаҡма инде.
Бәлли-бәү...
Эй, шишмәкәй! Һиңә әйтәм,
Сылтырап уҡ аҡма инде.
Бәлли-бәү... бәү... бәү...

Емеш китә. Күбә артынан Зәйнулла килеп сыға. Ҡулында сумаҙан.

Зәйнулла

Шул уҡ ярҙар, шул уҡ тирәктәр...
Әйтерһең дә, ғүмер уҙмаған.
Бында ҡалды минең балалығым,
Шул бала сағымды ҡыҙғанам.
Әүәлгесә — өмә, уйын-көлкө,
Шайтандың да миндә эше юҡ.
Бер ҡараҫҡы кеүек тороп ҡалдым,
Хәлдәремә керер кеше юҡ...
Китәм, китәм... Алып китәм! Юҡһа
Аҫылын ҡорт ашай алманың.
Әгәр ҙә ул килмешәккә ҡалһа,
Ғәрлегенә сыҙай алмамын.
Үҙ-үҙемде быуып үлтерермен...

Үҙенең боғаҙына үҙе йәбешә. Ҡыуаҡ араһына инеп китә.

Алыҫта хор-шаңдау

Саҡыр, кәкүк, саҡыр, кәкүк,
Саҡырһаң, килер дуҫың,
Саҡыр, кәкүк... Тик бәхетең
Саҡырмай килер булһын!

Йүгерешеп, көлөшә-көлөшә ҡыҙҙар инә. Араларында Гөлзифа менән Гөлмария ла бар. Улар һыуһап, айран эсергә килгәндәр.

Гөлмария

Эшләмәһәм дә, һыуһаным,
Эй, аяҡсы! Айран килтер!

Йәш ашнаҡсы бер ҙур һауыт айран килтерә. Ҡыҙҙар айран эсә.

Ҡыҙҙар

Бесән йыйыу байрамы,
Татлы икән айраны.
Һыуһындарҙы ҡандыра,
Һыуһындарҙы ҡандыра ла
Дәрттәрҙе тоҡандыра.

Гөлмария

Ошо бесән етте ниһә,
Әллә нисек дәрт ҡуҙғалып китә, ҡыҙҙар.

Бер ҡыҙ

Бер Гөлзифа ғына һаман бойоҡ.

Ҡыҙҙар

Һандуғас ҡунған ҡыйыҡҡа,
Ҡуныр талдары юҡҡа,
Ҡуныр талдары табылыр.
Һандуғасҡай, бойоҡма!
Гөлзифаҡай, бойоҡма!

Гөлзифа

Йөрәккәйем ярһый, йөрәккәйем...
Әллә уға донъя тар микән?
Йөрәккәйем ярһый, йөрәккәйем,
Дауалары шунын бар микән?
Берсә, гүйә, ҡанат ҡаға-ҡаға,
Ай-ҡояшҡа ҡарап юл алам,
Берсә ҡанатымдан ҡандар тама —
Упҡындарға төшөп юғалам.
Бер тамырҙан үҫкән дуҫ ҡыҙҙарым!
Хәлдәремә минең керегеҙ.
Йөрәккәйем ярһый, йөрәккәйем...
Дауаларын табып бирегеҙ.

Гөлзифа, яр башындағы йәш тирәккә һөйәлеп, шым ғына ҡала. Дуҫ ҡыҙҙары, уны борсомайыҡ тип, һаҡ ҡына сигенеп, сығып китәләр. Ҡапыл дәһшәтле моңдар яңғырай. Ҡыуаҡ араһынан Зәйнулла сыға.

Зәйнулла

Гөлзифа! *(Яуап юҡ.)*
Мин китәм, Гөлзифа...

Гөлзифа

Хәйерле юл һиңә —
Теләгем шул.

Зәйнулла (*ҡапыл киҫкен*).

Әммә хазинамды алмай китмәм...
Һине алырға килдем, Гөлзифа.

Гөлзифа

Юҡ, Зәйнулла. Бер өҙөлгән япраҡ
Ағасына ҡабат ялғанмай.

Зәйнулла

Нindәй яман ҡулдар өҙҙө уны?
Нindәй ҡулдар?

Гөлзифа

Һин килтергән һалҡын елдәр өҙҙө,
Һин килтергән ҡырау шиңдерҙе.

Зәйнулла

Ышанмайым! Ялған! Мин беләмен,
Күңелеңдә башҡа биләне.
Йөрәгеңдә бүтән арбаны!

Гөлзифа

Күңелем буш минең,
Үләндәрен сапҡан болон һымаҡ.

Зәйнулла

Ялғанлайһың! Ялған!
Килмешәктәр, ҡара ҡоҙғон булып,
Беҙҙең баш өҫтөндә урайҙар,
Әүәл ер-һыуҙарҙы талағандар,
Хәҙер мөхәббәтте урлайҙар.
Күрә алмайым, ҡаным, ҡаным ҡайнай.
Юҡ, тиҙ генә әле баш эймәм.
Йәнем яуға һыуһай, үсем дөрләй,
Йән бирермен, әммә бирелмәм...

Гөлзифа

Ҡәбер ауыҙынан сыҡмаҫ һүҙҙе
Әҙәм ауыҙынан ишетәм...
Әллә ҡәберенән сыҡҡан мәйетме һин!
(*Ул ярға табан китә.*)

Зәйнулла

Эйе, мәйет. Һин мәйеттең йәре буласаҡһың!
Мин барыбер һине уға бирмәм.
Киттек!

Гөлзифа

Һинең менән бер аҙым да
Атлар юлым юҡ.

Зәйнулла

Беләһеңме, аңла, аңла,
Мин барыбер, мин барыбер!..

Гөлзифа

Янама!

Зәйнулла

Мин барыбер һеҙгә көн күрһәтмәм.

Гөлзифа

Кит, кит, юғал! Һин — күләгә...

Зәйнулла

Юғалһаҡ та, бергә юғалырбыҙ.

Гөлзифа

Кит, кит, юғал!
*(Ярға сигенә.)*

Зәйнулла

Һин минеке! Минеке! Минеке!
Сигенер юлың юҡ.

Гөлзифа

Абау, абау! Ниндәй һаташыу был?
Мине уятығыҙ! Уятығыҙ мине!

Зәйнулла

Йән бирермен, әммә бирмәм һине.

Гөлзифа

Юҡ, юҡ! Һинең йәнең миңә кәрәкмәй!
Ҡараңғы ул, һалҡын... Ул донъянан биҙгән...

Зәйнулла

Мин барыбер ятҡа бирмәм,
Бирмәм! Бирмәм! Бирмәм!

Гөлзифа

Ҡалдыр мине! Ҡалдыр!
Ҡотҡарығыҙ!

Йүгереп Вадим сыға, халыҡ йыйыла.

Вадим

Ебәр уны, ебәр, юлбаҫар!

Зәйнулла

Ә, ҡара ҡоҙғон, килмешәк!
Бына һиңә!..

Зәйнулла, йүгереп барып, Вадимға сәнсергә итә. Гөлзифа күкрәге менән Вадимды ҡаплай, Зәйнулла уға сәнсә.

Гөлзифа

Аһ!

Зәйнулла

Ни эшләнем мин? Мин... мин...
Аҡылымдан шашам.
Был мин түгел, түгел,
Эйе, мин һаташам.
Юҡ, минеке түгел
Ошо ҡанлы ҡулым...
Уп... упҡынға илтә
Барыр юлым, юлым...
Ни эшләнем мин? Мин... мин
Аҡылымдан шашам.
Был мин түгел, түгел,
Эйе, мин һаташам.

*(Ҡот осҡос тауыш менән көлә-көлә артҡа сигенә.)*

Хор

Ләғнәт, ләғнәт ҡанлы ҡулдарыңа;
Ләғнәт, ләғнәт ҡара йөрәгеңә;
Ләғнәт, ләғнәт эскән һыуҙарыңа;
Ләғнәт, ләғнәт харам икмәгеңә!

Вадим Гөлзифаның мәйете эргәһенә килеп теҙләнә.

Вадим

Һөйөүемде бер аңларһың тиеп,
Күпме көйөп, күпме янманым?!
Кисер мине, кисер, Гөлзифаҡай,
Һине яҡлай, һаҡлай алманым.

Ғәйнулла *(йүгереп инә)*.

Нимә булды, нимә булды?
*(Яуап юҡ.)*
Йә, әйтегеҙ, кешеләр, нимә булды?

Берәү

Һинең улың кеше үлтерҙе.

Ғәйнулла

Минең улым кеше үлтергән?
Минең улым, минең улым...
Минең улым кеше үлтергән?..
Мине ер ҙә, күк тә кисермәҫ...
Мин ғәйепле, мин дә ғәйепле,
Яза уртаҡ булһын.
Аһ, аһ, аһ...
Табанымда минең ер өңөлә...
Өҫтәремә күктәр ишелә.
Аһ, аһ, аһ...
Минең улым кеше үлтергән!..
Аһ, аһ, аһ... *(Үкһеп илай.)*

Хор

Ләғнәт, ләғнәт ҡанлы ҡулдарыңа,
Ләғнәт, ләғнәт эскән һыуҙарыңа...

Ярһып Мәҙинә инә.

Мәҙинә

Балам...
Балам!..
Балам!!!
*(Ҡыҙы алдына теҙләнә, сәңгелдәк йырын йырлай.)*

Сабый ғына икән шул,
Йоҡлап ҡына киткән шул,
Бишегенә матур йән
Сәскәләрен һипкән шул.
Ай ҡалҡҡас, торор был,
Сәскәнән таж үрер был,
Йәш кейәүен етәкләп,
Сымылдыҡҡа керер был.
Сымылдығы ҡара ер икән,
Кейәү тигәне — ҡара гүр икән...

*Шаршау*

*1964—1965*

## АЙГӨЛ ИЛЕ

*Алты картиналы романтик драма*

ҠАТНАШАЛАР:

Сит кеше — йәше юҡ
Айгөл — прологта 16 йәштәр, унан 17 йәштә
Йәғәфәр Моратшин — 55 йәштә
Зөлхәбирә Идрисова — ул уҡ синьора Пиккио — 35 йәштә
Синьор Карло Пиккио — 50 йәштә
Ричард Галин — Айгөлдөң йәштәше, буйға ҙур түгел
Илдар Ғаянов — геолог, 25 йәштә
Миләүшә — уның йәрәшкән кәләше, 27 йәштә
Йөҙөм — Миләүшәнең әсәһе
Ҡәҙерйән Ябағаев — берәҙәк, 60 йәштә
Зәлифә, Гөлсирә, Банат, Миңлекәй — буржуй күрергә килгән ҡатындар

1955—1956 йылдар.

### 1955 йыл

Сит кеше сәхнә алдына сыға. Артта — ҡаялар.

Сит кеше. Мин — сит кеше. Автор миңә хатта исем дә биреп тормаған. «Сит кеше» тигән дә киткән. Әҙәмдәр бер-береһен эҙләп тапҡансы сит булалар йәки,

табышҡас, ситкә әйләнәләр. Һәр хәлдә, мин сит кеше. Уйынға ҡатнашмайым. Бүтәндәргә ҡарата мин шулай ҙа изге теләктәмен: юлдағыларға юл булһын, аҙашҡандар ҡауышһындар, эҙләгәндәр табышһындар. Ә кешеләр гел юлда, гел эҙләйҙәр. Бәхеттәрен, мөхәббәттәрен, хәсрәттәрен, хатта әжәлдәрен эҙләйҙәр. Барыһынан да былай үҙҙәрен эҙләйҙәр. Йә табалар, йә таба алмайҙар, йә табып юғалталар... Аңлайым, ҡыҙғанам, хатта һыҙланам, әммә ярҙам итә алмайым. Мин — сит кеше.

Ҡапыл сутылдатып ҡош һайрарға тотона, Сит кеше йотолоп тыңлай. Дауам итә.

Кешеләр генә түгел, ҡоштар ҙа бер-береһен эҙләй, саҡыра... Ҡайһылары өҙгөләнә, бисара... Аңлайым, ҡыҙғанам, һыҙланам... Әммә... *(Ҡулдарын йәйә.)*

Алыҫта, тау башында, Айгөл тауышы яңғырай. Ул үҙе күренмәй.

Айгөл тауышы. Кем һин??? Мин — Айгөл. Айгөл! Айгөл! Тауҙар, урмандар, ишетәһегеҙме: мин Айгөл! *(Урман яуап ҡайтара: «Айгөл! Айгөл! Айгөл!»)*

Сит кеше. Ана, ишетәһегеҙме, ҡыҙ бала үҙен үҙе эҙләй. Ул тиктәҫкә генә былай өҙгөләнмәй. Уның сабыйлыҡтан сығып барған йөрәге юлға йыйына... Аҡылы оҙата барһа ярар ине..

Айгөл тауышы. Мәңге торор таш ҡаялар! Уҙып ҡына барыусы мамыҡ болоттар! Ишетәһегеҙме — мин яратам!

Сит кеше. Кемде? Кемде яратаһың?

Айгөл тауышы. Белмәйем. Ә, беләм. Ерҙе, күкте, ҡояшты, һыуҙы... Йәнә... Кешене! Егет кешене!

Сит кеше. Кем ул? Ул кем?

Айгөл. Белмәйем. Мин уны бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ әле. Ләкин ул бында — минең күкрәгемдә...

Сит кеше *(залға)*. Кешенең мөхәббәткә бөрөләнгән кескәй йөрәге ана нисек талпына. Уның әле мөхәббәтте һауаларҙан, хыял ғына осоп етерлек бейеклектәр-

ҙән эҙләр сағы. И әҙәм балаһының көндөҙ йондоҙ күрә торған дөм һуҡыр заманы!..

Айгөл. Оялмайынса нимә һөйләйем мин тағы? Әсәйем тыңлап торһа, ни әйтер ине? Был ҡыҙ әллә аҡылдан яҙғанмы, тип аптырар ине. Әсәй, әсәйем! Әсәкәйем! Ун өс йыл саҡырам бит инде мин һине, ниңә яуап ҡайтармайһың? Ниңә? Һин миңә бик кәрәкһең, хәҙер бигерәк тә кәрәкһең, әсәкәйем! Миңә бит ун алты йәш! Ун алты! Оһо-һо!

Сит кеше. Айгөлдөң әсәһе юҡ. Бәлки, барҙыр ҙа... Өҙөп кенә әйтә алмайым. Ул хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Исеме Зөлхәбирә ине уның. Бына шул Зөлхәбирә 1943 йылда фронтҡа яҡын бер госпиталдә үлем хәлендә ятҡан ирен күрергә тип китте лә юҡ булды. Зөлхәбирә, бәлки, иҫәндер ҙә... Илдә бер сибәр ине. Ҡатын-ҡыҙҙы сибәрлек һаҡлаусан була... Кешеләр тураһында бына ни саҡлы нәмәләр беләм мин. Шуға күрә лә аңлайым, ҡыҙғанам, һыҙланам, әммә ярҙам итә алмайым. Сөнки мин — сит кеше.

Алыҫта, тау башында, Айгөл тауышы. Сит кеше юҡ була. Яҡтылыҡ Айгөл баҫып торған бейеклеккә күсә. Йәй урталары. Ҡояшлы көн. Ул баяғыса уҡ өҙгөләнә.

Айгөл. Ниңә яуап ҡайтармайһың, әсәкәйем! Мин һине эҙләп табырға, нисек кенә булһа ла табырға тейешмен... *(Оҙаҡ ҡына түбәнгә ҡарап тора. Кемгәлер ҡул болғай.)* Әй! Арыҫлан йөрәкле Ричард! Ричард Галин! Мин бында!

Ричард Галин инә. Ул, ғәҙәтенсә, полевой сумка аҫып алған.

Ричард. Һин миңә «арыҫлан йөрәк» тимә. Кеше арыҫландан да көслөрәк, хатта батырыраҡ ул.

Айгөл. Оһо! Һин дәме?

Ричард. Кәрәк икән — мин дә.

Айгөл. Һин йыуаш шул, Ричард Галин.

Ричард. Мин йыуаш түгел, мин сабырмын, сыҙамлымын...

Айгөл. Уф! Минең сабырлығым бөттө!

Ричард. Нимә булды һиңә?

Айгөл. Әсәйемде табырға кәрәк. *(Боғаҙын күрһәтә.)* Бына шулай...

Ричард. Һуң, эҙләйек.

Айгөл. Йәғәфәр бабайым ҡайҙарға ғына яҙып бөтөрмәне инде.

Ричард. Ул бит үҙебеҙҙең илдән генә эҙләне. Ә беҙ бөтә донъянан эҙләйек.

Айгөл. Ә нисек?

Ричард. Тотайыҡ та икебеҙ донъяның ике башынан эҙләп китәйек. Әҙәм бит ул, табылыр әле.

Айгөл. Донъяның башы, аҙағы булһа икән...

Ричард. Әйҙә, улайһа, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына яҙайыҡ. Беҙгә фәлән кешене табып бирегеҙ, зинһар өсөн, үтенеп һорайбыҙ, тиәйек.

Айгөл. Ҡайғыһы бар, ти, уның кешеләр... Кеше уның өсөн сүп кенә...

Ричард. Эйе шул... Минеңсә, ныҡ ҡына уйлашҡанда...

Айгөл *(ҡапыл)*. Туҡта, туҡта... Ҡағыҙ-ҡәләмең бармы?

Ричард *(сумкаһын аҡтара)*. Бар.

Айгөл. Минеңсә, туранан-тура кешелек донъяһының үҙенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ричард. Ә ҡалай?

Айгөл. Бына шулай: мин әйтеп торам, һин яҙ! «Ер йөҙөндә йәшәүсе бөтә кешеләргә мөрәжәғәт». «Мөрәжәғәт» тигәнененең аҫтына ике тапҡыр һыҙ.

Ричард. Һыҙҙым.

Айгөл. Шуның аҫтына уртаға былай тип яҙ: «1955 йыл, июлдең туғыҙы, «Ватан» колхозының умарталығы». Быныһының аҫтына бер генә һыҙ.

Ричард. Һыҙҙым.

Айгөл. «Бөтә ер йөҙөндә көн күреп ятыусы кешеләр! Мин Айгөл Идрисова булам, 1943 йылда минең әсәйем хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Зөлхәбирә Идрисова. Тирә-яҡта бер матур ине, тиҙәр...»

Ричард. Юҡ, быныһы кәрәкмәҫ, йөҙ матурлығы менән маҡтаныу килешмәй ул.

Айгөл. Оҡшамағас, һыҙ, улайһа. Әммә бынан һуң бүлдермә. Ары яҙ: «Хәҙер ул утыҙ биш йәштә. Сөнки мине тапҡанда ни бары ун туғыҙҙа ғына булған. Ке-

шеләр! Һеҙ күршеләрегеҙҙе, күршеләрегеҙ үҙ күршеләрен, ул күршеләр йәнә ары күршеләрен белә. Шуға күрәлер бит инде яҡшы-яман күп хәбәрҙәр телдән телгә күсеп, «һә» тигәнсе бөтә Ер шарын урап сыға. Минең үтенесем — яҡшы хәбәр. Уны өйҙән өйгә, ауылдан ауылға, илдән илгә таратығыҙ! «Айгөл әсәһен эҙләй!» — тип оран һалығыҙ. Төнгә ҡаршы берәй бала урманға инеп аҙашһа, беҙҙең барлыҡ ауыл халҡы күтәрелә лә, ҡулға-ҡул тотоноп, бөтә урманды арҡырыға-буйға аралап сыға. Нығытып эҙләгәс, табыла теге бала. Был донъя — төнгө ҡара урман, әсәйем аҙашҡан кескәй бала булһа ла, уны табырға мөмкин. Мөмкин! Кешеләр! Һеҙ уны ҡулға-ҡул тотоношоп эҙләгеҙ. Һеҙҙә бит биш миллиард ҡул бар. Биш миллиард!» О-һо-һо! *(Ричардҡа.)* Яҙып өлгөрәһеңме?

Ричард. Өлгөрәм, хатта һине уҙып китәм.

Айгөл. Уҙмай ғына яҙ. *(Дауам итә.)* «Бөтә илдәрҙең радиолары һәм газеталары! Телдәрегеҙ, диндәрегеҙ, төҫтәрегеҙ, политик ҡараштарығыҙ ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, һеҙгә мөрәжәғәт итәм. Һеҙҙә лә бит көлә, илай, ҡайғыра белә торған кешеләр эшләйҙәр. Кешеләр кешеләрҙе аңларға тейеш. Аңлағыҙ минең ҡайғымды! Кешелек донъяһына йүнәлтелгән минең ошо хатымды, газеталар, бер-берегеҙҙән күсереп баҫығыҙ, радиолар, бөтә биш материктың да эфирына таратығыҙ! Мине бәхетле итеүгә йүнәлтелгән был ҙур изге эшегеҙҙә һеҙгә уңыш теләйем».

Ричард. Был мөрәжәғәт буржуйҙарға ла йүнәлтеләме инде?

Айгөл. Йүнәлтелә.

Ричард. Ә бүтәнсәрәк итеп... уларҙан башҡа ғына нитеп... булмаймы?

Айгөл. Булмай шул. Бер Ер шарында йәшәгәс, улар менән дә иҫәпләшергә тура килә.

Ричард. Уныһы шулайын шулай ҙа... Бөттөмө инде?

Айгөл. Юҡ әле. Барыһын да алдан күрергә, алдан хәстәрләргә кәрәк. *(Дауам итә.)* «Бөтә донъяның тимер юл, һыу юлы, һауа юлы кампаниялары! Әгәр әсәйемдең ҡайтыр юлға аҡсаһы булмаһа, уны бушлай ултыртығыҙ. Бөтә расходын һуңынан үҙем түләрмен. Быға

тулы гарантия бирәм!» *(Ричардҡа.)* Гарантия биреүен бирәм дә, әгәр көс етмәҫлек ҡыйбатҡа төшһә...

Ричард. Төшә бирһен... Мин балыҡсылар бригадаһында эшләйем, һин — умарталыҡта. Тапҡан-табылған уртаҡ ҡаҙанға йыйылыр. Тырышыбыраҡ эшләһәк, беҙ һинең менән самолет һатып алырлыҡ аҡса йыя алырбыҙ.

Айгөл. «Тулы гарантия бирәм» тигәндең аҫтына өс тапҡыр һыҙып ҡуй.

Ричард. Һыҙҙым. Ә быны хәҙер ни эшләтәбеҙ?

Айгөл. Нимәне?

Ричард. Кешелек донъяһына яҙған мөрәжәғәтте.

Айгөл. Өйгә ҡайт та, ҡара менән яҙып, дүрт күсермә эшлә. Өсөһөн Өфөгә өс газетаға, береһен радиоға ебәрербеҙ. Тырышып яҙ, ҡара тамыҙма. Имзаһын үҙ ҡулым менән ҡуйырмын. Бар, һин төшә башла. Мин саҡ ҡына кешелек донъяһына ҡарап торайым.

Ричард ҡуҙғалып та өлгөрә алмай, ут һүнә. Пролог бөттө.

### Беренсе картина

Бер йыл ваҡыт үткән. Шул уҡ тау башы. Көн кискәрәк ауышҡан. Айгөл менән Ричард шул уҡ позала.

Ричард *(бик етди, тыныс)*. Икенсе донъя һуғышы тамамланыуға ун бер йыл тулып уҙҙы, ә ер йөҙөндә һаман да тәртип урынлашҡаны юҡ.

Айгөл. Тағы бер йыл үтеп китте. Һинең менән беҙ әле булһа шул ҡая башында ултырабыҙ.

Ричард. Ултырабыҙ шул. Ә беҙгә осорға кәрәк.

Айгөл. Осорға? Ҡайҙа осорға?

Ричард. Ҡайҙа булһа ла, хыт айға...

Айгөл. Осоп китһәк, химиянан көҙгө һынауҙы һинең өсөн кем бирер?

Ричард. Яҙғы һынау, көҙгө һынау, ҡышҡы һынау... Һынау, һынау, һынау кешегә! Тәртип юҡ был ер йөҙөндә, һынау ғына бар. Ана, кешелек донъяһы ла оҙон бер йыл буйы беҙҙең сыҙамлыҡты һынай. Шул тәртипме?

Айгөл. Оҙон бер йыл уҙып китте. Эҙләгән әсәйем дә табылманы, көткән мөхәббәт тә килмәне... *(Ричардка окшатып.)* Тәртип юҡ был ер йөҙөндә...

Ричард. Айгөл! Айгөл, тим... Миңә ҡара әле. *(Ричардтың күҙҙәрендә шундай һағыш.)* Туп-тура ҡара, йәме.

Айгөл. Йә, ҡараным.

Ричард. Беләһеңме нимә, Айгөл... Бәлки, теге һин әйткән нәмә... Шул мөхәббәт тип әйткәнең, бәлки, ул эргәңдәлер, бәлки, ул миндер, Айгөл. Ихтимал, миндер...

Айгөл *(Ричардтың алдына килеп теҙләнә, уның сәстәрен һыйпай)*. Их һин, Ричард Галин... Ричард Галин!.. Мөхәббәт бит ул иҫ киткес бейеклектәрҙе артылып, уйҙар ғына осоп иңләр алыҫ араларҙы аша үтеп, күҙ яуын алырлыҡ нурҙар сәсеп, ҡояш кеүек балҡып килергә тейеш... Был ғына ла түгел, Ричард Галин, мөхәббәт ул үҙенең ғазаптарына, әрнеүҙәренә йыуаныс, йөрәк яраларына дауа эҙләп килергә тейеш. Килергә лә: «Һиңә ғашиҡ булғандан бирле йөрәгем әрней. Ҡотҡар мине был күңел ғазаптарынан!» — тип минең алдыма теҙләнергә тейеш.

Ричард *(ҡапыл Айгөл алдына теҙләнә)*. Ҡотҡар мине был күңел ғазаптарынан, ҡотҡар мине!

Айгөл. Юҡ. Мөхәббәт былай булмай. Иң тәүҙә уның һыны төшкә керергә тейеш. Мин уны бер тапҡыр төшөмдә күрҙем дә инде. Ул әлегә тиклем мин күргән кешеләрҙең береһенә лә оҡшамаған. Үтә матур ҙа түгел, әммә шундай ғәйрәтле, һоҡланып туя алмаҫлыҡ мөләйем. *(Ричардка.)* Һин дә мөләйем, Ричард Галин, тик һин барыбер мөхәббәт түгел. Туғыҙ йыл бер партала ултырып, бергә һабаҡ уҡыған кеше мөхәббәт була алмай ул. Һин бит гел эргәмдәһең, ерҙә, түбәндәһең, минән тотам да ҡалмай эйәреп йөрөйһөң. Бейеклектәр, аралар, ғазаптар, яралар ҡайҙа? Береһе лә юҡ бит.

Ричард. Мин ғазапланам, Айгөл. Кәрәк икән, әгәр теләйһең икән, тағы ла нығыраҡ, тырышыбыраҡ ғазапланырмын.

Айгөл. Һин тырышырһың да ул. Ә теге килер ҙә бер ҡарауҙа йәнемде ҡол итер. Йөрәгем, атылған ҡош төҫлө, ҡанаттарын йыйып, уның алдына килеп төшөр.

Ҡайҙалыр мылтыҡ атыла. Шул саҡ урман һуҡмағынан Ҡәҙерйән Ябағаев килеп сыға. Ул, атыу тауышынан тертләп, ситкә ташлана.

Ябағаев. Шул мылтыҡ атыуҙан ҡасан туҡтарҙар?

Ҡарттың ҡапыл килеп сығыуы, мылтыҡ атыу йәштәрҙе шулай уҡ шомландыра.

Ричард. Кем атты?

Ябағаев. Мин атманым. Мин үҙ ғүмеремдә мылтыҡ тотҡаным юҡ... Һаумыһығыҙ!

Ричард. Һуғышта ла мылтыҡһыҙ ғына һуғыштығыҙмы?

Ябағаев. Мин һуғышманым. Һаумыһығыҙ? Мин Ябағаев Ҡәҙерйән Ябағаев.

Ричард. Мин — Ричард Галин. Ул Айгөл Идрисова.

Ябағаев. Эйе, бик һәйбәт. Әйттем, буғай, инде: мин Ябағаев.

Ричард. Әйттегеҙ.

Айгөл *(үҙ алдына)*. Һәр кешенең үҙенә хас исеме була. Әйтерһең дә, кеше исемде тапмай, исем үҙе кешене таба. Был бабайҙың исеме бүтән булыу мөмкин дә түгел: Ҡәҙерйән Ябағаев.

Ябағаев. Миңә өндәштегеҙме? Ғәфү итегеҙ, минең һеҙгә зыяным теймәҫ, минең бер кемгә лә зыяным теймәҫ. Мин бында аҙашып килеп сыҡтым, ахыры...

Айгөл. Ҡайҙа бараһығыҙ һуң һеҙ, бабай?

Ябағаев. Мин эҙләйем. Инде күп йылдар эҙләйем.

Айгөл *(ҡыҙғанып)*. Кемегеҙ юғалды? Кемде эҙләйһегеҙ? Һеҙ ҙә минең кеүек...

Ябағаев. Нимә эҙләй инем һуң әле мин? Ә... Хаталарыма ғәфү, йәнемә тыныслыҡ эҙләйем. Әжәлем тап булһа, уға ла ҡаршылығым юҡ...

Айгөл. Эйе, бабай... *(Көрһөнөп.)* Һәр кем үҙенә кәрәкте эҙләй...

Ричард. Һуң, һеҙ эҙләгән нәмә — ғәфү менән тыныслыҡ ошо урмандамы ни? Әжәл тигәнең бында юҡ — уныһын яҡшы беләм.

Ябағаев. Ҡайһыһы табылһа ла — ярай. Ошонда тигәйнеләр... Был тирәлә Йәғәфәр Мoратшин атлы

умартасы булырға тейеш. Һеҙ миңә шул тарафҡа юл күрһәтә алмаҫһығыҙмы?

Айгөл. Моратшин Йәғәфәрме? Ул бит минең әсәйем менән бер туған бабайым. Һеҙ уның кеме, йәшлек дуҫымы? Һалдатта бергә булдығыҙмы?

Ябағаев. Мин һалдатҡа алынманым, ҡаралдым, әммә алынманым, хеҙмәткә яраҡлы тапманылар... Был һуғышҡа барырға йәшем үткәйне... Йәғәфәр Моратшин менән мин бөтәнсә таныш. Башҡаса таныш...

Айгөл *(ҡысҡыра)*. Бабайым! О-һо-һо! Һин ҡайҙа?

Ябағаев. Һин ул тиклем үк һөрән һалма әле, ҡыҙым. Мин уның үтә зарығып көткән ҡунаҡтарынан түгелмен. Юлын өйрәт, үҙем яйлап барып табырмын.

Айгөл. Бына ошо һуҡмаҡ менән туп-тура түбән төшәһең дә китәһең. Унда урман аҡланында бер йорт тора. Бабайым йә умарталыҡта, йә аҫта, һыу буйында, булыр.

Ричард. Әгәр йорт тирәһендә ике балалы айыу күрһәгеҙ, ҡурҡмағыҙ, ул беҙҙең Тыйнаҡ. Бәләкәстән ошонда үҫте. Үсекләмәгән кешегә теймәй.

Ябағаев. Хәҙер инде мин айыу үсекләр йәштән үткәнмен. Ғөмүмән, айыуҙы үсекләмәү хәйерле. Ярай, мин китәйем. *(Китә башлай.)*

Артта айыу үкергән тауыш ишетелә. Тағы ҡабатлана.

Айгөл. Был Тыйнаҡ тауышы бит! Нимә булды икән?

Ричард. Геологтар килгән, тигәйнеләр, йә шулар ҡурҡытҡандыр.

Айгөл. Айыу өркөтөп йөрөмәһәләр... Бар, Ричард Галин, әйт шуларға: үсекләмәһендәр Тыйнаҡты.

Ричард. Мин хәҙер...

Урман араһынан өҫтө-башы тетелеп бөткән, башы-күҙе ҡанға батҡан Илдар Ғаянов саҡ-саҡ атлап килеп сыға. Бөтәһе лә ғәжәпкә ҡала.

Айгөл. Һеҙ ҡанға батып бөткәнһегеҙ... Һеҙ яралы... Һеҙгә ҡыйынмы?

Илдар өндәшмәй.

Һеҙҙе... Һеҙҙе кем шулай ҡанға батырҙы?

Илдар. Айыу. Инә айыу...
Айгөл. Айыу?
Ричард. Айыу?

Саҡ саҡ атлап, урман ситенә Тыйнаҡ сыға.

Айгөл. Ошо айыумы?
Илдар. Шул.
Айгөл *(килеп, Тыйнаҡты ике ҡуллап дөмбәҫләй)*. Ни эшләп шулай кешегә тейергә баҙнат иттең һин, Тыйнаҡ? Уның һиңә ни зыяны тейҙе? Ни зыяны? Йыртҡыс һин, Тыйнаҡ, йыртҡыс! Бына һиңә, бына һиңә! Бынан ары беҙҙең өй тирәһендә эҙең булмаһын. Мин һине йорттан ҡыуам, был урмандан, был тауҙан ҡыуам, ишетәһеңме, Тыйнаҡ?! *(Айыуҙы йоҙроҡлағанда, ҡулы ҡанға буяла)*. Ҡан? Кем ҡаны был?
Илдар. Йыртҡысты хөкөм итмә, һылыуым... Тәү башлап мин уға үҙем һөжүм иттем. Ике балаһы менән ғәмһеҙ уйнап ултырған сағында артынан килеп аттым мин уға. Үлтерә алманым...

Айыу гөрһөлдәп ергә ауа.

Ричард. Һин үлтерҙең инде уны. Сөнки һин мылтыҡлы. Һин боҫоп ата беләһең.
Айгөл. Тыйнаҡ, Тыйнаҡ! *(Уның алдына теҙләнә.)* Тыйнаҡ, тим, йәнкиҫәккәйем, бөтә көсөңдө йыйып тырыш, үлмәҫкә тырыш. Һинең матур, йоп-йомшаҡ ике балаң бар. Үлмәҫкә тырыш, Тыйнаҡ! Үлмә, Тыйнаҡ! Үлде...
Ричард. Ҡайһы бер кешеләрҙән аҡыллыраҡ һәм мәрхәмәтлерәк ине был айыу. Мәрхәмәтлеләр ғәмһеҙ ҙә, ышаныусан да булалар шул. Уларға тоҫҡап атыу еңелерәк. Ғәмһеҙлегең, ышаныусанлығың харап итте һине, Тыйнаҡ.
Айгөл *(Илдар ҡаршыһына килә)*. Ниңә аттың, ниңә үлтерҙең һин уны, егет? Былай булғас, кем һуң йыртҡыс? Ниңә үлтерҙең? Ни өсөн? Үлтерер өсөн генәме? Их, кеше...

Илдар *(сайҡала, ауа башлай)*. Үлеп барам, үлеп барам... Ҡотҡар мине, һылыу, ҡотҡар! *(Айгөл алдына теҙләнә. Айгөл уны тотоп ҡала.)*

Айгөл *(йөрәк ярғыс тауыш менән ҡысҡыра)*. А-а! «Ҡотҡар!» — тип аяғыма йығылдың. Һинме икән ни был? Бабайым! Бабайым! Бар, Ричард Галин, бабайымды табып кил.

Галин китә. Айгөл Илдарҙың битен һөртә.

Мин бит һине был рәүештә килерһең тип көтмәгәйнем. Һин тырыш, һин һушыңды йыйырға тырыш. Һин кеше бит. Күҙҙәреңде ас, ас инде күҙҙәреңде!

Илдар *(һаташа)*. Был шишмәнең һыуын кем эсеп бөтөрҙө, ниңә уның һыуы юҡ?..

Айгөл. Сыҙа, саҡ ҡына сыҙа.

Илдар. Һыу... Кем ҡоротто был шишмәне?

Ябағаев. Бөтәһен дә үҙебеҙ ҡоротабыҙ. Ҡош-ҡорт күрһәк, атабыҙ, ағас күрһәк, ҡырҡабыҙ, сәскә күрһәк, өҙәбеҙ. Кәрәкме, кәрәкмәйме — атабыҙ, ҡырҡабыҙ, өҙәбеҙ. Тауҙар кейекһеҙ, йылғалар балыҡһыҙ, урмандар һайрар ҡошһоҙ ҡалыр, тип бошонмайбыҙ. Ҡорота бирәбеҙ. Сөнки беҙ, йәнәһе, тәбиғәттән мәрхәмәт көтмәйбеҙ, ә уның менән көрәшәбеҙ. Талайбыҙ уны. Ә үҙебеҙ ерҙе, етмәһә, әсәйебеҙ тигән булабыҙ. Әсәне шулай аяуһыҙ йәберләргә яраймы ни?

Айгөл *(Илдарға ентекләп ҡарай)*. Ә мин һине төшөмдә күрҙем. Тик һин төшөмдә нисектер икенсерәк, мөһабәтерәк инең. Төштә бөтә нәмәләр ҙә саманан ашыуыраҡ була шул. Кем һин? Кем булһаң да — барыбер түгелме ни? Иң мөһиме шул — һин мине үҙең эҙләп килгәнһең. Мин һинең яраларыңды бәйләрмен, дауалармын. Үҙем генә дауалармын... Һин хатта ыңғырашмайһың да, тимәк, һин батырһың, көслөһөң...

Ябағаев. Берәүҙәргә енәйәт өсөн яза шунда уҡ килә. *(Илдарға күрһәтә.)* Ундайҙарға еңел, исмаһам.

Айгөл. Бына күҙҙәреңде лә астың. Күҙҙәреңде тултырып-тултырып ҡара: быныһы — беҙҙең күк, ә быныһы — мин, Айгөл. Һин мине күрәһеңме? Минең тауышымды ишетәһеңме һин?

Илдар. Һыуы булмағас, ни эшләп сылтырай ул шишмә?

Ябағаев. Һаташа... Уға хәҙер һыу бирерҙәр, һыуһыны ҡаныр. Бер аҙҙан яралары ла уңалыр — ямауы өҫтөндә. Унан һуң яралар ҙа, айыу ҙа онотолор. Сөнки айыу балалары бер ергә лә барып башырмаясаҡтар...

Йәғәфәр менән Ричард инә. Йәғәфәр ингәс, Ябағаев ҡапыл аяҡ үрә баҫа, уға табан ынтыла ла туҡтап ҡала. Йәғәфәр уға теклəп бер ҡарап ала ла башҡаса иғтибар итмәй.

Йәғәфәр. Ҡунаҡ йортҡа мылтыҡ атып түгел, сәләм биреп инһә, хәйерлерәк булыр ине лә бит.

Айгөл. Уның хәле бик ауыр, бабайым.

Йәғәфәр. Күрәм. Айыу бәхәсте ярты юлда туҡтатырға яратмай ул. Әйҙәгеҙ, өйгә күсерәйек. Булыш, Галин.

Илдарҙы Йәғәфәр алып килгән баласҡа һалалар.

Айгөл. Һаҡ тотоноғоҙ. Һаҡ тотон, бабайым! Ричард Галин! Һиңә әйтәм дә!

Йәғәфәр. Һуғышта мин бик күптәрҙе шулай, плащпалаткаға һалып, теге донъянан был донъяға һөйрәп алып ҡайттым. Минең ҡулым еңел, ҡыҙым.

Айгөл *(айыу яғына әйләнеп)*. Аҡылһыҙ әҙәм балаһын кисер, мәрхүм Тыйнаҡ. Бәхил бул, ҡәҙерлем! Миндә хәҙер кеше ҡайғыһы. *(Китәләр.)*

Ябағаев. Шулай ул донъя. Тегеһен дауаларға алып киттеләр, быныһының *(айыуға ымлап)* һуңыраҡ тиреһен һыҙырып алып китерҙәр — һәр кемдең үҙ тәҡдире. Ә мине Йәғәфәр шәйләмәне лә. Әллә шәйләп тә күрмәмешкә һалыштымы? Үҙе бирешмәгән әле, бирешмәгән. Ағас аяғына ла ныҡ баҫып йөрөй. Яҡшы аттың тире сыҡҡанда, өтөк аттың йәне сығыр, ти, шул — үҙемде әйтәм... Үле айыу менән хушлаштылар, ә тере кешене иҫәпкә лә алманылар. Шулай тейештер, күрәһең... Минең ишеләр туйҙа ғына түгел, йыназала ла артыҡ булалар шул... Ярай, бер килеп тапҡас, кире китмәм инде — яйын көтөрмөн. *(Китә.)*

Ут һүнә.

## Икенсе картина

Урман аҡланындағы өй алды. Был — Йәғәфәрҙәр өйө. Ҙур имән төбөндә — Илдарҙың түшәге. Илдар бейек итеп һалынған мендәргә һөйәлгән. Ул кескәй генә көҙгөгә ҡарай. Айгөл уның эргәһендә ергә теҙләнгән.

Илдар. Яралар уңала, ә йөйҙәр ҡала. *(Битен һыйпай)*. Йәмһеҙ, шөкәтһеҙ йөйҙәр барыбер ҡала...

Айгөл. Улай тимә, Илдар, улай тимә... Был йөйҙәрҙән дә матурыраҡ нәмә юҡ! Улар миңә шул тиклем, шул тиклем ҡәҙерлеләр! Улар урынындағы яраларҙы мин күҙ нурҙарым менән йыуҙым, тыным менән өрөп әрнеүҙәрен баҫтым. Яралары минеке ине, тимәк, йөйҙәре лә минеке. Бөтәһе лә, бөтәһе лә минеке — ғазаптарың да, шатлыҡтарың да — бөтәһе лә...

Илдар. Сылтыр-сылтыр-сылтыр... «Ҡайҙа, ҡасан шулай шишмә сылтырауын ишеттем һуң әле мин?» — тип анау көндәрҙә күпме баш ваттым. Бына нәмә икән ул: сылтыр... сылтыр... сылтыр... Һин һөйлә, ә мин күҙҙәремде йомоп тыңлап ятайым был илаһи моңдо.

Айгөл. Харап илаһиҙыр инде. Бер туҡтауһыҙ лығырлайым да лығырлайым... Сөнки мин бәхетле. Ғүмеремдә лә... ғүмеремдә лә был тиклем бәхетле булғаным юҡ ине әле. Минең бабайым әйтә: «Бәхет күп һүҙле, ҡайғы аҙ һүҙле була», — ти. Мин бәхетле. Шуға күрә күп һөйләйем.

Илдар. Бәхет! Ундай ҙур һүҙҙе былай уҡ еңел әйтергә ярамай, Айгөл.

Айгөл. Мин үҙем дә ҙур, һүҙем дә ҙур! *(Һикереп тора.)* Сөнки мин я-ра-там!

Илдар. Кемде?

Айгөл. Ерҙе, һыуҙарҙы, ҡояшты, елде... Йәнә кешене... Егет кешене *(бышылдап)* яра-а-там... *(Үҙе күҙҙәрен сытырлатып йома, иңбаштарын йыйырып, бәп-бәләкәс кенә булып ҡала.)*

Илдар. Таңда тыуған аҡ күбәләк кеүек кенәһең бит әле һин, Айгөл. Нурҙан яратылған ҡанаттарың үтә күренеп тора. Көтөлмәгән һалҡынға йә ялҡынға тап булһаң, ни эшләрһең?

Айгөл. Ә һин шундай һалҡын, шикле һүҙҙәр һөйләмә, ялҡынлы һүҙҙәр һөйлә. Осҡондары осоп торған һүҙҙәр һөйлә һин!

Илдар. Мин һинең өсөн борсолам, Айгөл.

Айгөл. Минең өсөн борсолма. Миңә хәҙер ун ете йәш! Ишетәһеңме — ун ете! Зоянан ни бары бер йәшкә кесемен. Джульеттанан ике *(бармағын күрһәтә)* йәшкә оломон. Уларҙың береһе иле өсөн, икенсеһе мөхәббәте өсөн һәләкәткә барған. Мин дә шулар затынан, шулар енесенәнмен. Һин борсолма!.. Бынан алыҫ түгел Гөлзада ҡаяһы бар. Борон заманда Гөлзада исемле ҡыҙҙы һөйгәненән айырырға теләгәндәр, ул айырылмаған, ана шул ҡаянан ташланған.

Илдар. Береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ хәбәрҙәр һөйләп ташланың.

Айгөл. Ҡурҡыныс шул. Ә һин ҡурҡма. Айгөл тауы булһа булыр, Айгөл ҡаяһы бер ваҡытта ла булмаясаҡ. Сөнки һин бар. Ә мин һине яратам.

Шул саҡта ҡулына котелок тотоп, Ричард инә. Айгөлдөң һуңғы һүҙҙәрен ишеткәс, күҙҙәрен сытырлатып йомоп сығып китә.

Илдар. Ни өсөн?

Айгөл *(көлә.)* Әллә! Ул турала уйлағаным юҡ. Башта, әле һин юҡ саҡта, һинең хаҡтағы өмөт-хыялдарымды яраттым. Унан әрнеүҙәреңде, яраларыңды, хәҙер үҙеңде, яралы батырым... Мин бит һине ун дүрт йәшемдән көтә башланым. Бына һин килдең... Үткән төндө һин йоҡлап киткәс, эргәңә теҙләнеп, оҙаҡ ҡарап торҙом. Аҡһыл йөҙөңә тоноҡ ай яҡтыһы төшкән. Был саҡ һин ер кешеһе түгел, ниндәйҙер күк батшаһының улы кеүек күрендең миңә. Бына йоҡоңдан уянырһың да кире үҙ батшалығыңа ҡайтып китерһең һымаҡ тойолдо. Йөрәгем жыу итеп китте. Әллә быларҙың бөтәһе лә — һин дә, кисәге ай ҙа, мин дә төш кенәме икән? Өнөндә кешегә был тиклем үк рәхәт булыу мөмкин түгел.

Илдар. Уян, Айгөл! Ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, мин — ер кешеһемен, етмәһә, тигеҙ ер кешеһемен. Ә һин — тау ҡыҙы, болоттар араһында үҫкән ҡыҙ. Түбәнгә төш!

Айгөл. Төшмәйем! Мин үҙем һине йондоҙҙар араһына алып осасаҡмын!

Илдар. Әгәр һин был тиклем үк матур, был тиклем үк йәш булмаһаң *(ҡапыл һикереп тора)*, әгәр мин был тиклем үк айыҡ булмаһам, әйтер инем: «Тауҙарҙа алтын эҙләнем, таба алманым, йонсоном. Әжәлдең ҡараңғы упҡынына ҡолап төштөм тигәндә, ҡояш ҡыҙының яҡты иленә килеп сыҡтым. Ҡояш ҡыҙы! Бөгөндән алып мин һинең ҡолоң, һинең хакимың!» — тиер инем.

Айгөл. Ҡабатла, ҡабатла шул һүҙҙәреңде! Һинең ҡолоң, һинең хакимың. Ҡабатла...

Илдар. Ҡабатлай алмайым.

Айгөл. Ни өсөн?

Илдар. Түбәндә, тигеҙ ерҙә, минең үҙ донъям бар.

Айгөл. Булһа ни! Мин бит һинең донъяңа инмәйем. Һин минең донъяма килеп индең. Мин һине шатланып, ҡанатланып ҡабул иттем. Минең донъямда йылымы, яҡтымы һуң һиңә?

Илдар. Эйе... Әммә минең хаҡым юҡ...

Айгөл. Бар, хаҡың бар һинең. Мөхәббәттең хаҡы ҙур, хоҡуғы сикләнмәгән уның.

Илдар. Мин һиңә әйтергә тейешмен, мин күптән әйтергә тейеш инем. Тегендә, түбәндә, бынан алыҫта, ҡалала... Мин яңғыҙ түгелмен, Айгөл.

Айгөл. Мин беләм: һинең йәрәшкән кәләшең бар унда. Бәлки, ҡатыныңдыр ҙа...

Илдар. Ҡайҙан беләһең?

Айгөл. Һин һауыға башлағас, мин күл буйындағы һеҙҙең лагерығыҙға барҙым. Шунда иптәштәреңдән адрес алып, мин уға һинең турала хат яҙҙым. Исеме уның Миләүшә!

Илдар *(борсолоп)*. Эйе, Миләүшә. Миләүшә! Нисек инде ул? Ни өсөн яҙҙың?

Айгөл. Һинең өсөн, һиңә яҡшы булһын өсөн! Үҙем өсөн... Уның өсөн...

Илдар. Ә ул килһә?

Айгөл. Килһен! Мин уға килергә ҡуштым.

Илдар. Ә һин һуң?..

Айгөл. Минме? Мин һине яратам! Башҡаларҙа эшем юҡ минең. Тағы бер көнмө, бер аҙнамы, бер йылмы, йә булмаһа, бөтөн бер ғүмерме — уныһы барыбер. Күпме ярата алһам, шул саҡлы яратасаҡмын. Ғүмер баҡый ҡол булғансы, бер көн батша булыу үҙе ни тора!

Илдар. Ә мин?

Айгөл. Һинме? Нимә һин?

Илдар *(һүҙҙе икенсегә бора)*. Мин китеп барһам...

Айгөл. Мин уныһын да беләм. Беҙ айырылышасаҡбыҙ. Бәлки, мәңгегә айырылышырбыҙ. Уныһы мине ҡурҡытмай. Кешеләрҙе үлем дә айыра...

Илдар. Ә нимә ҡурҡыта?

Айгөл. Һис нәмә ҡурҡытмай, һис нәмә һине күреү бәхетен юғалтһам, һине уйлау, һине һағыныу бәхетен табырмын. Ана ҡояш ниндәй алыҫ, ләкин ул минеке! Анау тау түбәләренә үрелеп кенә буй етерлек түгел, ләкин улар барыбер минеке! Һин дә шулай минеке буласаҡһың.

Илдар Айгөлгә һоҡланып, ғәжәпләнеп, онотолоп ҡарап тора. Ричард инеп, имән артына боҫа.

Илдар. Болоттарға баҫып һөйләйһең һин был һүҙҙәреңде, иҫ киткес гүзәл, иҫ киткес саф Айгөл! Төш бында. Ерҙәге мөхәббәт ундай булмай.

Айгөл. Ҡайһылай була ул?

Илдар *(умырзая сәскәһенә үрелгән һымаҡ, Айгөлгә һаҡ ҡына ҡулдарын һуҙа)*. Кил бында, Айгөл.

Айгөл *(яҡыная, үҙе ҡалтырана)*. Киләм.

Илдар. Йом күҙҙәреңде.

Айгөл. Йомам.

Илдар Айгөлдө һаҡ ҡына ҡосаҡлап үбә.

Илдар. Ас күҙҙәреңде.

Айгөл. Асам.

Илдар тағы, тағы үбә. Ричард күҙҙәрен йомоп ситкә борола.

Айгөл. Ой! Һин мине үптең! Ике тапҡыр, хатта өс тапҡыр үптең!.. Тимәк, һин дә... Һин дә мине яратаһың! Тимәк, был тағы ла яҡшыраҡ. *(Илдар хайран ҡалып, һоҡланып ҡарап тора.)* Хатта, хатта илағым килә. Тик иламайым ғына. Һуңынан бөтәһе, бөтәһе өсөн дә бер юлы иламын әле.

Имән артынан Ричард котелогын һуҙа.

Ричард. Мә, килтерҙем.

Айгөл *(һиҫкәнеп)*. Нимә килтерҙең? Ниңә килтерҙең?

Ричард. Яралыңа балыҡ һорағайның да...

Айгөл. Эйе, эйе. Рәхмәт, Ричард Галин. Һин ысын дуҫ. *(Котелокты Илдарға илтә.)* Ҡара әле, Илдар, балыҡтары нисек бәргеләнә.

Ричард. Яралың өсөн түгел, һинең өсөн килтерҙем мин уларҙы. Унының айырып әйтәм.

Илдар. Минең исемем бар, Ричард Галин.

Ричард. Исемеңде бик әйткем килеп тормай әле. Миңә лә исемем менән өндәшмә: йә «йомошсо», йә «балыҡсы» тиң. Шунан квит булырбыҙ.

Айгөл. Улай уҫал ҡыланыу килешмәй һиңә, Ричард Галин. Һин бит хужа кеше.

Ричард. Хужа, хужа... Кемдең хужа икәнен беләбеҙ: «ас күҙеңде», «йом күҙеңде»...

Айгөл. Ричард Галин! Оят түгелме һиңә?

Ричард. Оят. Ярай. Ваше приказание выполнено! *(Честь бирә, китә башлай.)*

Айгөл. Ә еләк?

Ричард. Йыйманым. Билем ҡатты, эйелеп булмай.

Айгөл. Һин тырышып ҡара.

Ричард. Бәлки, бүтән берәй эш, эрерәк эш — ирҙәр эше ҡушырһың...

Айгөл. Ваҡлашаһың, Ричард Галин! Етмәһә, үҙең королдәр исемен йөрөтәһең.

Ричард. Король исеме йөрөткән әҙәмгә ҡыуаҡ араһында имгәкләп еләк сүпләп йөрөү килешәме һуң? Килешмәй. Һис кенә лә килешмәй! Шул яралар, яралар, яралар тип, минең бөтә ғорурлығымды, тауыҡ йөнөн йолҡҡан кеүек, семтеп йолҡоп бөтөрҙөң инде. Әйтерһең дә, яраһыҙ кеше — кеше түгел.

Айгөл. Ярай улайһа, шулай ғорур көйө ҡал.

Ричард. Ҡалып булһа икән дә ул... Булмай шул. *(Китә.)*

Илдар. Егет көнләшә. Уның кеүек саҡта мин күрше ҡатынын иренән көнләп йөрөнөм. Нисәлә ул?

Айгөл. Минең йәштәшем ул.

Илдар. О-һо. Тимәк, танауына еҫ керә башлаған.

Айгөл *(тертләп китә)*. Минең дуҫым хаҡында ундай мыҫҡыллау һүҙҙәре әйтмә, Илдар. Йәме. Башҡа бер ваҡытта ла...

Илдар *(баш ҡаға)*. Ярар.

Йәғәфәр инә. Ул бер ҡулына — сыбыртҡы, икенсеһенә мылтыҡ тотҡан.

Айгөл. Әллә бабайым ауға йыйына инде?

Йәғәфәр. Йүгереп ҡуян ҡыуырға самалайым... Ҡыҙым, былай гел эргәһенән китмәй, ауырыуҙың маҙаһын алмайһыңмы һин?

Айгөл. Әллә инде.

Илдар. Мин һауығам бит инде, Йәғәфәр ағай.

Йәғәфәр. Ярай, ғүмерең бөтмәгән икән, егет. Йәҙрәң айыуҙың бауырына теймәгән булһа, был саҡта бүтән түшәктә ятыр инең.

Айгөл. Ниндәй түшәктә, бабайым?

Йәғәфәр. Мәңге йоҡлата торғанында. Тыйнаҡ эргәһендә.

Айгөл. Абау! *(Бабаһына һыйына.)* Ниндәй аяныс булыр ине...

Илдар. Бөтәһе лә уҙҙы инде, Йәғәфәр ағай. Йөҙөгөҙ асыҡ, ҡулығыҙ еңел булды. Рәхмәт!

Йәғәфәр. Йөҙҙөң ни уның төрлө сағы булғандыр, ана, хатта ҡояш та болот артында тороп ҡала.

Илдар. Был өйҙә, был төбәктә мин болот күрмәнем.

Йәғәфәр. Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белеүең өсөн рәхмәт, ҡустым. Ҡабул итер булһаң, бер кәңәшем бар.

Илдар. Рәхмәттәр уҡып ҡабул итәсәкмен.

Йәғәфәр. Бынан ары ҡара урманға ингәндә лә, мылтыҡ шартлатып инмә, сәләм биреп ин. Сәләмеңде урман алмай торһа, ҡабатла...

Илдар. Был һабаҡтар, Йәғәфәр ағай, ғүмергә етерлек булды инде.

Йәғәфәр. Мә, был һинең мылтыҡтыр. Айыу менән алышҡан ереңдә ята ине.

Илдар *(ала)*. Минеке. Рәхмәт.

Йәғәфәр. Йәнә, егет, шуны әйтер инем: осраған бер кейеккә *(һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә Айгөл яғына ишара яһай)* мылтыҡ тоҫҡама.

Илдар. Эйе, эйе, аңлайым...

Йәғәфәр. Мин бер-ике көнгә китәм, ҡыҙым. Өйҙә уҙғынсы барлығын онотма. Йылы һүҙең булмаһа ла, йылы ашың алдында торһон.

Айгөл. Ун көн беҙҙә йәшәй, кем икәнен һаман белгән юҡ. Кем һуң ул, бабайым?

Йәғәфәр. Хәҙер кемдер, белмәйем.

Айгөл. Ә элек кем ине?

Йәғәфәр. Элекме? Иң элекме?

Айгөл. Иң элек?

Йәғәфәр. Иң элек хатта дуҫтар инек.

Айгөл. Унан һуң?

Йәғәфәр. Унан һуң бик күп нәмәләр булды!.. Ярай, ҡыҙым, былар хаҡында аҙаҡтан, башҡа ваҡытта. *(Атына.)* Тпру! Күгәүен сыҙатмай атты. *(Китә башлай.)*

Йүгерә-атлай Ҡәҙерйән инә.

Ябағаев. Ғәфү итегеҙ мине, кисерегеҙ, әңгәмәгеҙҙе бүлдерҙем, буғай. Мин үҙем өсөн түгел, ана, Ричард өсөн... Мин Ҡара ҡая аҫтында еләк тиреп йөрөй инем. Бына ошо еләкте *(туҫтағын өҫтәлгә ҡуя)* Ричард ҡая башында баҫып тора ине. Башында тип, иң башында ла түгел. Урта бер ерендә. Баҡһам, теге: «Һаумыһығыҙ, буласаҡ яраларым!» — тине лә үҙен үҙе ырғытты. Ни ғәжәп был — һуңғы ваҡытта егет-елән быяла урынына ҡыйрала башланы.

Бөтәһе лә шаҡ ҡатып тора.

Айгөл. Ричард Галин! Ни эшләнең һин, иҫәр егет? *(Сығып йүгерә.)* Ричард Галин!

Йәғәфәр. Тереме һуң?

Ябағаев. Ғәфү итегеҙ, мин эргәһенә барманым.

Йәғәфәр. Яуаплылыҡтан ҡурҡтыңмы?

Ябағаев. Әллә инде. Бәлки, шулайҙыр ҙа...

Китәләр.

Илдар. Бына бер ахмаҡ малай! Ха-ха-ха. Туҡта! Ни эшләп ахмаҡ булһын, ти, әле ул? Бәлки, ул, ысынлап

та, арыҫлан йөрәкле батыр егеттәр. Ә мин уны кәмһетеп көлгән булам... Минең бит ҡыҙҙар өсөн, мөхәббәт өсөн ҡаянан ташланыу түгел, хатта кәртә аша ла һикереп сыҡҡаным булманы. Етмәһә, унан көлмәксе итәм... Был бөтөнләй башҡа донъя. Ваҡ ығы-зығыларҙан, шикшомдарҙан азат, иркен, саф донъя Айгөл иле, Айгөл донъяһы был. Мин ят, мин сит кеше был илдә. Бәләҡаза килтермәй генә китеп барырға ине. Мин бер ҡасан да бөтөнләй онотолоп хискә бирелә алмай инем. Ә бая онотолдом. Бер минутмы, биш минутмы — белмәйем, күпмегәлер онотолоп торҙом. Тимәк, миңә бынан китергә ваҡыт.

Ричардты ҡултыҡлап алып инәләр. Ул имгәнгән, яраланған.

Йәғәфәр. Сыбыҡлап туймаҫлыҡ йүләр малай. Был умарталыҡта һинән башҡа аҡһаҡ-туҡһаҡ, ғәрип-ғөрәбә бөткәйне, ти, ана.

Айгөл. Әрләмә уны, бабайым. Уға бит былай ҙа ауыр, былай ҙа бик ауыр. Ҡайһы ерең ауырта, Ричард? Тиле йөрәкле Ричард Галин!

Ричард. Ҡулым, һул ҡулым! Йәнә бынау аяғым!

Йәғәфәр. Доктор аяғыңды ҡырҡып ташлаһа, бик һикергеләй алмаҫһың әле. Бына минең ише...

Ричард. Мин докторға бармайым!

Ябағаев. Ғәфү итегеҙ, докторға бармай ярамаҫ. Яраларығыҙ ҡаты һеҙҙең.

Ричард. Мин докторға бармайым. Айгөл дауалаһын мине!

Айгөл. Нимә эшләтәбеҙ, бабайым?

Йәғәфәр. Уның ҡулы һынған. Хәҙер үк больницаға алып китергә кәрәк. Хәҙер үк!

Ричард. Мин больницаға бармайым! Ниңә ул берәүҙәргә больницаға бармай ҙа ярай, икенселәргә ярамай? Ниңә ярамай икенселәргә?

Айгөл *(алдына теҙләнеп)*. Ҡәҙерлем минең, Ричард Галин! Күрәһең, шулай кәрәктер, шулай кәрәктер, күрәһең...

Илдар *(Ричард ҡаршыһына килә)*. Бая һин сығып киткәндә, мыҫҡыллап, артыңдан көлөп ҡалғайным. Ки-

сер мине, Ричард Галин! Һин тәүәккәл егет, ысын егет! Ғәфү ит.

Ричард *(уҫал)*. Һеҙҙең затлы кешеләргә генә хас ҡылығығыҙ мине хайран ҡалдыра. Мин баш эйәм. Барығыҙ, мамыҡ түшәгегеҙгә ятығыҙ. Өҙләгеп китерһегеҙ, юғиһә.

Айгөл. Улай ярһыма, ярһымаҫҡа тырыш, Ричард Галин! Уның бер ғәйебе лә юҡ бит.

Ричард. Ярһып ни файҙа? Һалдыр сумканы.

Айгөл. Һалдырҙым.

Ричард. Мин ҡайтҡансы йыйып ҡуй. Унда минең яралы йөрәгем һалынған. Ситтәр ҡағылмаһын! *(Илдарға ымлай.)*

Йәғәфәр. Бар, Айгөл, атты ҡапҡа төбөнә килтер.

Айгөл. Хәҙер! *(Сығып йүгерә.)*

Йәғәфәр менән Ҡәҙерйән Ричардты ике яҡтан ҡултыҡлап ала.

Йәғәфәр. Әйҙә, һалдатҡа барғансы төҙәлер әле.

Ябағаев. Ғәфү итегеҙ, туйға саҡлы, тиҙәр түгелме һуң?

Йәғәфәр. Туй тағы бындай алабарманға... Төҙәлеп кенә ҡайт әле, мин һине аҡылға ултыртырмын!.. *(Китәләр.)*

Илдар мылтығын алып, әйләндергеләп ҡарап тора. Аласыҡ бағанаһындағы ҡаҙауға элеп ҡуя. Имәнгә һөйәлеп, уйға ҡала. Айгөл инә. Барған көйө сумканы аса, ҙур дәфтәр сығара. Илдарға иғтибар бирмәй.

Айгөл *(уҡый)*. «Айгөл дәфтәре. Шиғырҙар. Бөтәһе лә Айгөлгә арнала». *(Тағы аҡтара.)* «Айгөлдө төшөмдә күрҙем», «Айгөлдөң йылмайыуы», «Айгөлдөң тауышы», «Айгөл бойоҡҡанда». *(Аҡтара.)* «Айгөл... Айгөл... Айгөл...» «Айгөлдө һағынғанда», «Айгөлдө көнләшкәндә». Көнләшкәндә... Көнләшкәндә... Көнләшкәндә...

Тотош ҡара болот япты
ай-көнөмдө —
Ете яттар сихырланы
Айгөлөмдө.

Шунан бирле юғалттым мин
йәшәү йәмен,
Көн-төн әрней эсемдәге
бахыр йәнем.
Бер ҡараңғы шәүлә булып
ҡалыр тәнем.
Айгөл! Һинһеҙ һүнер инде
бахыр йәнем.

Бахыр йәнем... бахыр йәнем... *(Көлә башлай ҙа ҡапыл туҡтай.)* Ниңә көләм әле мин? Уның ни көлкөһө бар? Бәлки, иларға кәрәктер... Йәлләп иларға. Юҡ, һоҡланып иларға... Уның сыҙамлылығына, тоғролоғона һоҡланып... *(Дәфтәрҙе кире сумкаға һала, сумканы башта һөйөп-һыйпап ҡуя ла унан күкрәгенә ҡыҫа.)* Бойоҡ һынлы рыцарь Ричард Галин — алабарман Дон-Кихот, мөләйем, һөйкөмлө, сәйер Хужа Насретдин... *(Ҡапыл Илдарҙы саҡырып ҡысҡыра.)* Һөйөклөм! *(Яуап юҡ.)*

Ут һүнә.

## Өсөнсө картина

Аҙнаға яҡын ваҡыт үткән. Шул уҡ имән төбөндәге ҡалҡыулыҡта Айгөл менән Илдар ултыра. Айгөл Илдарға берәмләп еләк ашата.

Айгөл. Ауыҙыңды ас, күҙеңде йом.

Илдар. Астым, йомдом. *(Айгөл еләк ырғыта. Илдар, эткә оҡшатып, уны эләктереп ала.)*

Айгөл. Хәҙер инде күҙеңде йом, ауыҙыңды ас.

Илдар. Йомдом, астым. *(Айгөл еләк ырғыта.)*

Айгөл. Ҡалай ирмәк... *(Көлә.)* Ас күҙеңде, йом күҙеңде — хас та ҡурсаҡ уйыны... *(Еләк ырғыта.)* Туҡта, туҡта! Ниңә харамлашаһың? Күҙеңде йомманың даһа!

Илдар. Ауыҙым күрмәй бит.

Айгөл. Күрә, күрә! Һуҡыр Фәррәх әйткән: «Күҙ күрмәһә лә, ауыҙ күрә...» — тигән. Ул белеп әйткән инде.

Был күренештең аҙағында Ябағаев Йөҙөм менән Миләүшәне алып инә. Йөҙөмдөң ҡулында — сумаҙан, Миләүшәнең беләгендә — плащ.

Ябағаев. Рәхим итегеҙ, тиер инем, хужа түгелмен, ғәфү итегеҙ, тиер инем, килешмәҫ. Әйҙәгеҙ, уҙығыҙ. *(Йөҙөмгә.)*

Йөҙөм. Кем хужа бында?

Ябағаев. Мин түгел. Мин хатта ҡунаҡ та түгел. Мин уҙғынсы ғына.

Йөҙөм. Беҙ бөтәбеҙ ҙә уҙғынсылар. Ҡулыбыҙҙан сумаҙан төшмәй. *(Сумаҙанды Ябағаевҡа бирә, теге сумаҙанды алғас, сөйләгән китә.)*

Ябағаев. Ғәфү итегеҙ. Башта мин үҙемде танытырға тейешмен. Мин Ябағаев, Ҡәҙерйән Ябағаев.

Йөҙөм. Ни эшләптер һеҙҙең турала быҡаса ишетергә тура килмәне. Мин Йөҙөм, Гөлйөҙөм Хатмурзина. Был минең ҡыҙым Миләүшә.

Ябағаев. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин дә һеҙҙең турала тәү башлап ишетәм. Бынан ары таныш булырбыҙ.

Миләүшә *(тирә-яҡҡа, өҫкә — тауҙарға һоҡланып ҡарап тора)*. Ниндәй гүзәл урын! Тауҙар күктәргә тоташҡан! Әллә ожмахтың бер мөйөшө ошомо икән, әсәй? Бында бик бәхетле кешеләр йәшәйҙер инде.

Ябағаев. Дөрөҫ, ҡыҙым. Бында бәхетле кешеләр йәшәй. Ана улар! *(Илдар менән Айгөлгә күрһәтә.)*

Тегеләр һаман үҙ уйындары менән мауыҡҡандар. Миләүшә, Йөҙөм, Ҡәҙерйән уларға ҡарап тора. Миләүшәнең беләгендәге плащы шыуып төшә.

Айгөл. Ас ауыҙыңды.

Илдар. Астым. *(Айгөл еләк ырғытҡас, еләкте эләктереп ала.)* Йом күҙеңде.

Айгөл. Йомдом.

Илдар Айгөлдө үбергә үрелгәндә генә ҡапҡа төбөндәгеләрҙе күреп ҡала ла ауыҙын асҡан көйө, ике ҡулы менән ергә таянып, ҡатып ҡала.

*(Күҙен аса.)* Беҙҙең мәрхүм Аҡтырнаҡ һымаҡ һағайҙың. Хатта ҡолаҡтарың да тырпайып китте... *(Көлә, ҡапыл*

*артына әйләнә. Һикереп тороп, килеүселәргә ҡаршы барырға итә, туҡтап ҡала.)*

Илдар. Миләүшә? Йөҙөм ханым?

Миләүшә. Көтмәгәйнеңме? Ваҡытһыҙыраҡ йөрөйбеҙме? Идиллияғыҙҙы боҙһаҡ, ғәфү итегеҙ... Зинһар өсөн...

Илдар. Эйе, көттөк. Көттөк... Бик ваҡытлы...

Миләүшә. Кем саҡырып хат яҙҙы миңә? *(Айгөлгә.)* Һинме?

Айгөл. Эйе, мин. Рәхим итегеҙ.

Миләүшә. Ғишыҡ уйынығыҙҙы күрһәтергә саҡырҙыңмы? Килеп, күреп китһен, тинеңме? Бына килдем. Йә, ни әйтерһең?

Айгөл. Бер ни ҙә әйтмәйем. Хуш килдегеҙ. Өйгә уҙығыҙ. Хәҙер бабайым ҡайтыр.

Йөҙөм. Ҡара әле, ҡара. Теле ниндәйерәк татлы. Оялыу түгел, уңайһыҙлана ла белмәй. Аб-ба!

Ябағаев. Ярай, мин китәйем, булмаһа...

Йөҙөм. Китмә-ә-ә! Шаһит булырһың...

Ябағаев. Мин шаһитлыҡҡа ярамайым. Минең пропискам юҡ. *(Сумаҙанды дөп иттереп ергә ҡуя ла баҫҡан ерендә ҡала.)*

Миләүшә *(Айгөлгә)*. Ниңә саҡырҙың? Бына мин егетеңдең — буласаҡ кейәүеңдең башын әйләндерҙем, тип әйтергә саҡырҙыңмы?

Айгөл. «Ғишыҡ уйыны», «баш әйләндереү» — нимә һөйләйһегеҙ һеҙ? Нимә һөйләй ул, Илдар? *(Илдарға шундай өмөт менән ҡарай, Илдар вайымһыҙ.)*

Миләүшә. Башыңды этлеккә һалма. Хәйләгә бик йәшләй өйрәнгәнһең икән. Ай-һай, күҙҙәре — фәрештә күҙҙәре, ҡылығы — иблис ҡылығы. Юҡ, башымдан көлөргә мин берәүгә лә рөхсәт итмәм — фәрештәгә лә, иблискә лә!

Ябағаев *(киҫкен)*. Ханым, тиәйемме, туташ, тиәйемме.

Миләүшә. Тимә! Миңә адвокат кәрәкмәй. Мин үҙем атаҡлы адвокат Хатмурзиндың берҙән-бер ҡыҙымын!

Ябағаев. Улай икән.

Йөҙөм. Шулай шул. Танышмы инде хәҙер? *(Лып итеп сумаҙанға ултыра.)*

Ябағаев. Юҡ, таныш түгел.

Миләүшә *(Айгөлгә)*. Ниңә мине саҡырҙың? Кейәүеңде тартып алдым, тип әйтергә саҡырҙыңмы? Кейәү кәрәк булдымы? *(Айгөлгә табан атлай, Айгөл сигенә.)* Башта ҡоторған айыуыңдан талаттың да һуңынан ҡулға төшөрҙөңмө? Бахыр! Бисара! Бында ни, айыуҙар араһында, ир табыуы ҡыйындыр шул!..

Айгөл. Илдар! Ниңә яҡламайһың мине? Яҡлап ниңә бер һүҙ ҙә әйтмәйһең? *(Илдар өндәшмәй.)* Ниңә өндәшмәйһең, Илдар?

Йөҙөм *(Миләүшәгә)*. Әҙәм балаһына саманан тыш ҡаты әйтергә тырышма, ҡыҙым.

Миләүшә. Әсәй! Һин ҡыҫылма. Бәләкәй саҡта хатта ҡурсағымды уйнап торорға кешегә бирҙермәй инең бит. Ә хәҙер була яҙырға торған кейәүемде үҙ ҡулым менән тотоп бүтәнгә бирәйемме? Юҡ инде. Пардон!

Айгөл. Миләүшә апай! Миңә кейәү кәрәкмәй. Минең әле ун етем дә тулмаған. Һеҙ хаталанаһығыҙ. Һеҙ бөтөнләй, бөтөнләй хаталанаһығыҙ!

Миләүшә. Бик беләбеҙ — «ас күҙеңде», «йом күҙеңде». *(Ситкә.)* Шул күҙ йома-йома 27-гә еттем дә инде. *(Айгөлгә.)* Мин хаталаныр йәштән үткәнмен. Бына һин ул, исмаһам, хаталанаһың, ҡыҙыҡай!

Айгөл. Бәлки, хаталанамдыр. Минең йөрәгем, минең хыялдарым хаталаналыр. Ниңә уның өсөн шул тиклем йәберләйһегеҙ мине?.. Йөрәгем өҙөлөп төшөп селпәрәмә килә бит инде!.. Ниңә араламайһың? Ниңә өндәшмәйһең, Илдар?

Миләүшә *(Илдарға килә)*. Ниңә өндәшмәйһең? Ниңә яҡламайһың? Яҡла! Аҡла! Ә үҙең нимә тип аҡланырһың икән, ике кәләш кейәүе?

Илдар. Мин бит былай ғына, уйнап ҡына, эс бошҡандан ғына...

Айгөл *(үрһәләнеп)*. Уйнап ҡына? Эс бошҡандан ғына? Нимә уйнап ҡына? Нимә?

Йөҙөм *(Миләүшәгә)*. Йә, ҡуй, ҡыҙым, нервыларыңды боҙма. Үпкән-ҡосҡан елгә осҡан, ти... Бәлки, үпмәгәндер ҙә әле...

Айгөл. Аһ, һеҙ, инәле-ҡыҙлы икегеҙ ҙә ниндәй әҙәпһеҙһегеҙ! Ниндәй яман, ҡаты бәғерлеһегеҙ!

Миләүшә. Бына әҙәпкә һинән өйрәнергә килдек тә инде...

Айгөл. Етер! Туҡтағыҙ. Зинһар, туҡтағыҙ! Һеҙ өсәү. *(Илдарға ҡараш ташлап ала.)* Мин бер үҙем. Ҡалдырығыҙ мине, зинһар өсөн!

Ябағаев *(ҡапыл йәштәрсә еңел алға ынтылып, аласыҡҡа һөйәлгән таяҡты ала)*. Ханымдар! Ханымдар! Һеҙ был өйгә бысраҡ аяҡтарығыҙ менән килеп индегеҙ. Һеҙ бында, аяҡтарығыҙҙы йыуып, ялан тәпәй керергә тейеш инегеҙ. Һалығыҙ ҡаталарығыҙҙы! Ҡаталарығыҙҙы һалығыҙ!

Йөҙөм. Бына тағы бер псих!

Ябағаев *(һелтәнеп)*. Псих шул! Псих! Псих! Кемгә әйтәм? Сисегеҙ ҡаталарығыҙҙы!

Миләүшә. Ниндәй шайтан ояһы был? Киҙәнмә миңә, ташла таяғыңды, ҡарт үләт!

Йөҙөм. Ни хаҡың бар беҙгә күҫәк күтәрергә? Уҙғынсы, пропискаһыҙ берәҙәк, зимагор! Мин һинең башыңды төрмәлә серетермен, һөргөнгә һөрҙөрөрмөн!

Ябағаев *(таяғын йәнә һелтәй)*. Һөрҙөрөрһөң! Ә хәҙергә хөкөм минең ҡулда. Нимә әйттем мин һеҙгә? Әйткәнде эшләгеҙ. *(Тегеләрҙе бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлай.)*

Йөҙөм. Ташла таяғыңды, ҡоторған! Эй, кем бар унда? Үлтерәләр, талайҙар! Разбуй! Илдар! Нимә тораташ кеүек ҡаттың?

Ябағаев. Иманығыҙҙы уҡытмаҫ борон, һалығыҙ ҡаталарығыҙҙы! Һалығыҙ! *(Тегеләр туфлиҙарын һала.)* Бына шулай. Хәҙер ҡаталарығыҙҙы ҡулдарығыҙға тотоп, аяҡ остарығыҙға ғына баҫып, шылығыҙ бынан. Нимә ойоноғоҙ? Шылығыҙ, тим бит! Ҡаты баҫмағыҙ. Ана шулай... *(Илдарға.)* Ә һин?

Илдар. Нимә, мин?

Ябағаев. Марш бынан! Марш, тим бит! Һатлыҡ йән! Мөртәт. Предатель. Өндәшмәй генә әҙәм һатыусы! Эҙең булмаһын! *(Киҙәнә. Илдар, тайшанып, аҡһай-туҡһай ҡапҡаға бара. Ҡәҙерйән тегегә таяҡ тоттора.)* Мә, таян! Тиҙерәк күҙемдән юғалырһың. Әй-әй! Бына мөлкәттәрегеҙ тороп ҡалған! Әй! Әй! *(Сумаҙанды еңел генә күтәреп ала, ерҙәге плащты эләктереп йүгереп сыға.)*

Оҙаҡ пауза.

Айгөл. Был төҫлө айырылышырбыҙ тип һис кенә лә уйламағайным. Ул, ана, тегендәге бейек тауҙарға менеп китер, мин бында ҡул болғап ҡалыр кеүек инем, ә ул соҡорға төшөп китте. Нимә булып алды һуң әле? Ниңә, ни өсөн мине шулай тапап, иҙеп киттеләр? Ни өсөн? *(Ике ҡулын алға һуҙып, имәнгә, өҫтәлгә, бағанаға мөрәжәғәт итә.)* Әйтерһең, битемә услап-услап бысраҡ бәреп китте... *(Битен һыйпай.)* Әрнеү ҙә, яра ла ҡалдырманы, ҡара тап ҡына ҡалдырҙы бына бында. *(Күкрәген күрһәтә.)* Ниңә былай булып сыҡты икән? Берәй ваҡыт, бәлки, бөтәһен дә, бөтәһен дә аңлармын әле...

Ябағаев инә.

Ябағаев. Һуңғы егерме йылда әҙәм рәтле бер эш эшләнем. Еренә еткереп эшләнем... *(Ҡулдарын һелтәп.)* Кө-ө-өш! Анау төйләгән уралды бит бынау тирәлә. Көш, кө-ө-ш! *(Китә.)*

Айгөл. Ҡалай тып-тыныс, буп-буш булып ҡалды. Мөхәббәттең килеп китеүе шул булды, күрәһең инде. *(Аҡрын ғына сыға.)*

Сит кеше инә.

Сит кеше. И сабыйым! Хаталанаһың, ләкин хаталарың да изге һинең. Мөхәббәт китмәне. Ул ҡаныңда, йәнеңдә ҡалды, үҙенең ысын хужаһын көтә. Ә теге, килеп киткән әҙәм, мөхәббәтең түгел ине. Һин бары ирҙәр вайымһыҙлығы, ирҙәр ҡурҡаҡлығы менән генә осраштың. Һабаҡ булһын. Уларҙың күбеһе мөхәббәт ағасын ҡарарға, үҫтерергә, һаҡларға атлығып бармай, бары емешен генә өҙөргә ярата. Мөхәббәттең яуаплылығынан, хатта мәшәҡәтенән ҡурҡалар улар. Был тәңгәлдә ҡатын-ҡыҙҙарҙың өстән икеһе тәүәккәл булһа, ирҙәрҙең шул саҡлыһы уҡ — ҡурҡаҡ. Быны мин — ирҙәр сифатындағы сит кеше әйтәм. Белеп әйтәм. Ана, баяғы яралы ҡурҡаҡ та беҙҙең тоҡомдан — йәш булһа ла... Эс бошҡандан мылтыҡ шартлата. Беҙ күмәкбеҙ, туҡтауһыҙ үрсеп торабыҙ. Беҙ синыфтарҙан өҫтөн социаль көскә эйәбеҙ. Яҡшылыҡты хуплайбыҙ, яманлыҡты ғәйепкә алабыҙ. Беҙ бөтә донъяла был ҡатмарлы тор-

моштоң барлыҡ баҫҡыстарында баҫып торабыҙ. Хатта Генеральный Ассамблея залында ла теләгәнсә ултыра алабыҙ: йә хуплап ҡул сабабыҙ, йә боларып аяҡ тыпырлатабыҙ. Әммә донъя ағышына тығылмайбыҙ, ул үҙенең хәсрәттәрен, борсоуҙарын, ҡурҡыныстарын, мәшәҡәттәрен, өмөттәрен йөкмәп аға бирә... Күберәк һөйләп ташланым шикелле. Эйе, беҙ һөйләргә яратабыҙ шул. Айгөл менән булған бәләкәс кенә күңелһеҙлек айҡанлы был тиклем үк асылыу, бәлки, кәрәкмәгәндер ҙә. Хәйер, башҡа нимә эшләй алам һуң мин — сит кеше?.. *(Китә.)*

Йүгереп килгән еренән кәртә аша ғына һикереп Ричард Галин инә. Ул гипстағы һул ҡулын аҫып алған.

Ричард. Айгөл! Йәғәфәр ағай! Айгөл!

Тауышҡа Ябағаев инә.

Ябағаев. Нимә булды?

Ричард. Юҡ, һеҙ түгел, ағай. Айгөл! Айгөл кәрәк!

Айгөл йүгереп инә.

Айгөл. Ричард Галин?! Ип-иҫән! *(Күңелһеҙ йылмая.)* Иҫәрлегең бөттөмө инде?

Ричард. Бөтмәне.

Айгөл. Ә минең бөттө. Бөттө шикелле...

Ричард. Бөгөн иртән больницанан һыҙҙым, эйе, тиң.

Айгөл. Эйе.

Ричард. Анау Туҡран юлына сыҡҡас та бер машина ҡыуып етте, эйе, тиң.

Айгөл. Эйе, эйе...

Ричард. Рәхим итегеҙ, тип мине ултыртып алдылар. Юл һораштылар. Ташморонға килеп еткәс, ике ҡатын осраны. Бынау ҡоп-ҡоро көндө туфлиҙарын һалып, ҡулдарына тотҡандар. Ирмәкме? Бер аҙ үткәс, таяҡ таянған йәнә бер әҙәм осраны. Уныһын таныным. Ниңә һуң мин быларҙы һиңә һөйләйем әле?

Айгөл. Һөйләгең килгәнгәлер.

Ричард. Юҡ, унын өсөн түгел. Мин ваҡытты һуҙҙым. Мин бит һине әҙерләп торорға алдан йүгерҙем... Юғиһә йөрәгең ярылыуы ихтимал.

Айгөл *(ҡапыл һиҙенеп)*. Әсәйем ҡайттымы? Әсәйемме?

Ричард *(иңбаштарын йыйыра)*. Әйтмәҫ борон нисек беләһең уны?

Айгөл. Күңелем һиҙә ине. Әсәйем! Ҡайҙа ул минең әсәйем?

Ричард. Ана тегендә. *(Тегеләргә ҡул болғап һыҙғыра.)* Әй-һәй. Бөтәһе лә — во!

Айгөл. Быныһы ла йәнә төш кенәме? Хыял ғынамы?

Ричард. Өн! Өндөң дә өнө!

Айгөл. Әсәкәйем, ҡәҙерлем! Йөрәгем сыға бит инде. *(Башта ҡапҡа яғына йүгерә, шунан кире йүгереп, имән артына ҡаса.)* Әсәкәйем! Һин ниндәйһең икән? Нисек ҡаршыңа барып баҫайым? Ниңә был тиклем ҡалтыранам мин? Ул бит үҙ әсәйем, үҙемдең әсәйем. *(Тағы ҡапҡа яғына йүгерә, кире сигенеп, имән артына йәшеренә.)* Юҡ, көсөм етмәй. Ҡурҡам, Ҡурҡам!

Ябағаев менән Ричард Зөлхәбирә менән Пиккионы ҡаршылайҙар. Пиккио ҙур-ҙур сумаҙандар тотҡан. Ҡапҡанан ингәс, Зөлхәбирә баҫа ла ҡатып ҡала.

Ябағаев. Рәхим итегеҙ, ханым! *(Пиккиоға.)* Рәхим итегеҙ, иптәш...

Пиккио. Яҡшы, яҡшы, иптәш Пиккио, Карло Пиккио. Итальяно, Милано. Һеҙ синьор Йәғәфәр Мораттшин?

Ябағаев. Юҡ, түгел. Киреһенсә, Ҡәҙерйән Ябағаев.

Зөлхәбирә. Минең ҡыҙым ҡайҙа? Айгөлөм ҡайҙа?

Айгөл *(имән артынан)*. Мин бында! Бында мин. Имән артында. *(Атылып килеп, әсәһенең ҡосағына ташландым тигәндә, туҡтап ҡала. Күрешергә ҡулдарын һуҙа.)* Иҫәнме?

Зөлхәбирә. Ҡыҙым, балам, бәләкәсем... Был һинме? Һин! Һин! *(Ике ҡулын алға һуҙа.)* Үҙ һөйәгем, үҙ ҡаным, үҙ йәнем! *(Ҡосаҡланым тигәндә, сайҡалып китә. Пиккио тотоп ҡала. Һушын йыя.)* Был көндәрҙе

күрергә лә насип булған икән! Балам — бауыр ярам! *(Үкереп илап ебәрә, ҡосаҡлашалар.)*

Айгөл *(әсәһенең башын, яулыҡтарын һыйпай.)* Һин хас та карточкаңдағы кеүекһең...

Зөлхәбирә. Балам, күҙ нурым... Ниңә миңә, әсәйем, тип өндәшмәйһең?

Айгөл. Өндәшермен, көнөнә мең тапҡыр өндәшермен. Әлегә, нисектер, әйтеп булмай. Һин юҡ саҡта мин гел генә: «Әсәйем әле ни эшләй икән?» — тип уйлай торғайным. Әсәйем! Әсәкәйем! Һин табылдың! Табылдың! Әйттем бит, донъя ҡара урман түгел, тип... Әйттем бит! Ричард Галин! Кил, минең әсәйем менән күреш!

Ричард. Беҙ күрештек инде.

Айгөл. Тағы күреш. Ул минең дуҫым, әсәй. Теге хатты беҙ уның менән икәү яҙғайнык. Йыл тулғанда, хәбәр тәки барып еткән икән. Ҡалай оҙаҡ барған!

Зөлхәбирә. Хат, тиһеңме?

Айгөл. Һиңә атап яҙылмағайны ул. Кешелек донъяһына атап яҙылғайны.

Зөлхәбирә *(аңлап ала)*. Эйе, ҡыҙым, хаттар оҙаҡ йөрөй шул, хаттар бик оҙаҡ йөрөй. Йыш ҡына бөтөнләй барып етмәй... Бәләкәсем! Мин киткәндә, кескәй бармаҡтарыңды тырпайтып, тәҙрә аша мине саҡырып ҡалғайның. *(Ҡыҙының ҡулын усына ала.)* Ошо бармаҡтарыңды тырпайтып... Ун өс йыл буйы шул бармаҡтар мине саҡырып торҙо. Нисек аҡылдан яҙманым икән мин?

Пиккио. Синьора Зөлхәбирә, тынысланырға тырыш.

Зөлхәбирә. Эйе, эйе. Миңә тынысланырға кәрәк. Мин тынысланам... *(Күҙҙәрен һөртә.)* Юғиһә баламдың йөҙөн күрә алмайым, күҙҙәремде йәштәр ҡаплай.

Айгөл *(ҡапыл һиҫкәнеп)*. Бабайым! Бабаҡайым! *(Артҡа йүгерә.)* Һин ҡайҙа? Әсәйем ҡайтты! Урман! Тауҙар! Ишетәһегеҙме — әсәйем ҡайтты-ы! *(Кире йүгереп килә. Ричардҡа.)* Мөрәжәғәтте һин яҙғайның, ҡулың еңел булды. Рәхмәт һиңә, Ричард Галин! *(Ябагаевҡа.)* Һеҙгә лә рәхмәт! *(Пиккиоға килә.)* Һеҙгә лә... *(Әйтеп бөтөрмәй кире китә. Кәртәгә эленгән айыу тиреһен күрә.)*

Артта, тау яғында, Йәғәфәрҙең тауышы ишетелә: «Оһо-һо-һо! Мин киләм!» Бер аҙҙан йүгерә-йүгерә үҙе лә килеп сыға.

Йәғәфәр. Зөлхәбирә! Бәләкәсебеҙ! Оя төбө! Иҫән! Бөтөнләй иҫән! Сәп-сәләмәт, бөп-бөтөн! *(Зөлхәбирә эргәһенә етәрәк абынып йығыла.)* Ну, ошо ағасты! Имгәк! *(Ағас аяғын ергә бәрә. Ҡәҙерйән менән Пиккио уға торорға булыша.)*

Зөлхәбирә. Ағайым! Ҡәҙерлем! Берҙән-берем! Бына һине лә күрҙем. *(Яңағын Йәғәфәрҙең яңағына ҡуя.)* Һин һаман да шундай уҡ сәнскелеһең, үҙең йомшаҡһың, йылыһың, шул уҡ ағайымһың.

Йәғәфәр. Үҙем шул. *(Көлә.)* Бына аяҡ ҡына яңы.

Зөлхәбирә. Аяғың да шул.

Йәғәфәр. Хәйер, мин уны фронттан һин киткәнсе уҡ алып ҡайтҡайным шул. Туҙмай улай... Өҙөлөп ҡалған аяғымды әллә ниҙә бер иҫкә төшөрһәм, һине уйламай ҡалған көнөм, сәғәтем булманы — ун өс йыл буйы... Күңелебеҙҙә һине юғалтманыҡ та, үлтермәнек тә. *(Һеңлеһен һөйә. Тауышы ҡалтырай. Йәш быуа.)* Беҙ өмөт өҙмәнек, көттөк, өмөтөбөҙ еңде. Һин юғалмаҫҡа тейеш инең. Юғалманың. Юғалып табылдың...

Пиккио. Берәү юғалды, икәү табылды. *(Үҙенә күрһәтә.)* Мин самалайым, һеҙ синьор Йәғәфәр Моратшиндыр, тип самалайым.

Йәғәфәр *(көлөп)*. Синьор түгелен түгел дә, эйе, Йәғәфәр Моратшин.

Пиккио. Мин Пиккио. Иптәш-товарищ Карло Пиккио, Итальяно, Милано, коммерсант. Рәхим итегеҙ — визитная карточкам...

Зөлхәбирә. Карточкаңды ҡуйып тор, Карло. Ағайым! Ҡыҙым! Был — Карло Пиккио, минең ирем. Яҡшы кеше. Беҙҙе нисек ҡабул итеү һеҙҙең ихтыярығыҙҙа. Беҙ Италиянан, Миландан, килдек. Күпкә түгел, бик аҙға ғына килдек...

Айгөл. Нисек инде ул аҙға ғына? Нисек инде ул күпкә түгел? Әсәйем! Нисек инде?

Зөлхәбирә. Быныһы яҙмыш, ҡыҙым, уны үҙгәртеү беҙҙең көстән килмәй.

Йәғәфәр. Ҡуйып торoғоҙ. Бөгөнгә күрешеү шатлығына ҡара шәүлә төшөрмәйек. Йәшәп күрәйек. Хәсрәт-

теӊ әсе туҫтағынан эсергә ваҡыты еткәс тә өлгөрөрбөҙ. Уныһы ҡасмаҫ, ашыҡмайыҡ. Әйҙәгеҙ, өйгә рәхим итегеҙ. Айгөл, ас ишекте ҡунаҡтарға.

Айгөл йүгереп барып ишек аса. Инәләр. Ябағаев башҡа яҡҡа китә. Ричард яңғыҙ ҡала.

Ричард. Эштәр шулайыраҡ икән. *(Алмаш-тилмәш сумаҙандарға төртөп күрһәтә, әрнеүле тауыш менән ҡабатлай.)* Итальяно, Милано, коммерсант... Милано, Итальяно... Коммерсант...

Ут һүнә.

## Дүртенсе картина

Элекке картиналағы урын. Аяҙ, матур иртә. Ағастар араһынан әле аҡһыл шыйыҡ томан да китеп бөтмәгән, томан аша үтеп, ҡояш нурҙары япраҡ араһында уйнай. Өй болдоронда Карло Пиккио, ситтәрәк түмәр өҫтөндә Йәғәфәр ултыра. Пиккионың ҡулында — боронғо уҡ-йәйә, тоҫҡап маташа. Йәғәфәр еп ишә.

Пиккио. Беҙҙең Альпта ла, тауҙар араһында, йәйге иртәләр тап шундай була. Томан, ҡояш... Һуғыш осоронда мин унда тирмән тоттом, Миланоға күсеп килгәнсе.

Йәғәфәр. Кисә әле, партизан булдым, фашистарға ҡаршы һуғыштым, тигәйнегеҙ, бөгөн тирмәнсе булып сыҡтығыҙ.

Пиккио. Кисә ни ҡыҙмаса баштан, бәлки, шаштырыбыраҡ ебәргәнмендер. Әммә мин дошманға ҡаршы көрәштем. Ҡорал тотоп түгел, ана шул тирмәнем менән көрәштем. Партизандарға он, икмәк, ярма ташыным мин. Бик арзан хаҡҡа... бөтөнләй бушлай тиерлек. Интендант мин! Шулай тип атанылар ҙа мине: Карло Пиккио — интендант. *(Ултырған еренән ҡалҡынып ҡуя.)*

Йәғәфәр. Һуғышта интендант та кәрәк.

Пиккио. О синьор! Алғы сафтағыларҙың ике ҡулына бер ҡорал. *(Уғын тоҫҡай.)* Тотто атты, китте барҙы.

Йәғәфәр. Ҡайҙа китте? Теге донъяғамы?

Пиккио. Ниңә теге донъяға булһын, алға. Ә һин тоҡтарыңды тейәп өлгөр улар артынан.

Йәғәфәр *(ирония менән)*. Ҡыйын инде, синьор, ҡыйын....

Пиккио. Ҡыйын булды, синьор, әммә беҙ һуҡранманыҡ, бирешмәнек. *(Тағы ҡалҡынып ҡуя.)* Сыҙам булдыҡ. *(Ҡапыл кәртәгә эленгән айыу тиреһен күреп ҡала.)* Айыу тиреһе?! Ҡалай ҙур! Ни хаҡ тора ул?

Йәғәфәр. Оҡшаймы әллә?

Пиккио. О синьор, бик оҡшай. Айыу тиреһен мин үлеп яратам.

Йәғәфәр. Оҡшаһа, алығыҙ.

Пиккио. Былай ғына, бушлай ғынамы?

Йәғәфәр. Мин һеҙгә бүләк итәм уны.

Пиккио. Һеҙ бына быны ла *(уҡ-йәйәһен күрһәтә)* бүләк иттегеҙ. Миңә оҡшаған өсөн Айгөл үҙе ҡайыған һөлгөнө бүләк итте... Уңайһыҙыраҡ та...

Йәғәфәр. Кире уйламаҫ борон алып ҡалығыҙ, оҡшай, тинегеҙ бит.

Пиккио. Юҡ, юҡ, кире уйламағыҙ! Әйткән һүҙ — атҡан уҡ. *(Бушлай ғына йәйәһен тарта.)* Алам. Рәхмәт һеҙгә. Тирене минеке тип иҫәпләнек.

Йәғәфәр. Мин атты барып тышаулап ҡайтайым. Себенләп, алыҫ китеүе бар.

Пиккио. Минең ярҙам кәрәкмәйме? Кәрәкһә, мин шатланып...

Йәғәфәр. Кәрәкмәй, рәхмәт. *(Китә.)*

Пиккио айыу тиреһен алып, ябынып ҡарай. Бөтөнләй күмелеп ҡала.

Пиккио. Юҡ, килештереп булмаҫ, буйым бәләкәй. Минән айыу сыҡмаясаҡ, бәләкәсерәк бүре сыҡһа сығыр. Мин был тирене иҙәнгә йәйеп, өҫтөнә баҫып йөрөйәсәкмен. Айыу тиреһенә баҫып йөрөү өсөн үҙеңә айыу үлтереү шарт түгел бит әле... Бында бер ҡатлы, яҡшы күңелле, йомарт кешеләр йәшәй. Миңә мөмкин хәтле нәфсемде тыйырға тырышырға кәрәк. Юҡһа оҡшаған нәмә күп булыр Карло Пиккиоға. *(Тирене кире элеп ҡуя.)*

Ричард инә. Ҡулында — ҙур ғына биҙрә.

Пиккио. О йәш синьор! Кисәге юлдаш. Сәләм, сәләм!

Ричард. Үҙегеҙгә лә, синьор әфәнде.

Пиккио. Әфәнде түгел, иптәш синьор. Әйҙә, һеҙҙең менән яҡыныраҡ танышып алайыҡ.

Ричард. Мин һеҙҙе беләм: Итальяно, Милано, коммерсант синьор Карло Пиккио.

Пиккио. Дөрөҫ. Дөп-дөрөҫ. Бына һеҙгә визитная карточкам. Миланоға килһәгеҙ *(бирә)*, рәхим итегеҙ — туп-тура үҙемә. Ә һеҙ?

Ричард. Мин Ричард Галин.

Пиккио. Ричард? Тимәк, һеҙ инглиз — Шотландия, Ирландия, Лондон? Ричард король: беренсе, икенсе, өсөнсө...

Ричард. Башҡортостанский, Уральский, Күсәрбайский. Король түгел, балыҡсы.

Пиккио. Балыҡсы? Был да бик яҡшы. Бөтә Ричардтар ҙа король булырға тимәгән.

Ричард. Синьор әфәнде.

Пиккио *(төҙәтә)*. Синьор иптәш.

Ричард. Синьор иптәш, һеҙ миңә визитная карточкағыҙҙы бирҙегеҙ. Ә минең үҙ янымда ундай карточкам юҡ, әгәр бындай фотокарточкамды ғына бирһәм, ғәйеп итмәҫһегеҙме?

Пиккио. О синьор! Рәхим итеп бирһәгеҙ, рәхмәт әйтеп ҡабул итермен. Сувенир, иҫтәлек! Башҡортостанский, Күсәрбайский!

Ричард *(үҙ алдына)*. Беҙ кемдән кәм ул саҡлы... Бер генә минут сабыр итегеҙ. *(Түш кеҫәһенән ҡәләм алып яҙа.)* Бына адресымды ла яҙҙым.

Пиккио. Һеҙҙең менән шулай яҡын танышыуыма шатмын, синьор, дуҫтар булырбыҙ. *(Ричардтың ҡулындағы балыҡты күреп ҡала.)* Тере балыҡ! Исеме нисек?

Ричард. Табан.

Пиккио. Табан? Кем табаны? Нимә табаны?

Ричард. Күл табаны. Мүклекүлдеке.

Пиккио. Ни хаҡ тора?

Ричард. Нимә ни хаҡ?

Пиккио. Ошо балыҡ. Ошо биҙрәләге балыҡ.

Ричард. Һеҙгә оҡшаймы әллә?

Пиккио. Оҡшай... Юҡ, оҡшамай, оҡшамай... оҡшауын оҡшай ҙа. Ни хаҡ?

Ричард. Оҡшаһа, алығыҙ, мин һеҙҙе һыйлайым.

Пиккио. Юҡ. Юҡ, һыйламағыҙ! Мин үҙ нәфсемә баш була алам. Миңә оҡшаған нәмә күп булыр, улай нәфсеңә сик ҡуймаһаң.

Ричард. Мин һеҙҙе яҡын танышыу хөрмәтенә һыйларға теләйем.

Пиккио. Яҡын танышыу шәрәфенә генә тимәһәм шул... Тик быныһы һуңғыһы булыр. Бүләк, күстәнәс алыуҙан ары яғына нәфсемде тыясаҡмын. Быныһы өсөн рәхмәт, синьор Ричард Гал... Галин! Синьора Зөлхәбирә! Синьора, бына алтын балыҡ тоттом! *(Бер ҡулына биҙрә, икенсеһенә йәйәһен тотоп, һикергеләп, өйгә инеп китә.)*

Ричард. Һынар өсөн генә әйткәйнем, тап өҫтөнә баҫтым. *(Гипстағы ҡулын ҡосаҡлап, түмәргә барып ултыра, уйға бата.)* Яҡын дуҫ булырбыҙ, тиме... Ҡаршыһына баҫып, тиң итеп һөйләшеп, әллә был буржуй алдында ваҡланыбыраҡ ташланылды инде? Самаһыҙ сиселеп тә киттем, буғай. Өҫтәүенә, артына адрестар яҙып, фотокарточка бирҙем. Уяулыҡ, уяулыҡ ҡайҙа булды? Итальяно, Милано тигәс тә, иҫ китте... Яйын табып, карточканы кире алырға кәрәк. Уның эсендә нимә барын ҡайҙан беләһең? Ҡайтыр ҙа үҙенең Миланоһына, Советҡа ҡаршы яла яғып, газетала мәҡәлә сығарыр. Етмәһә, аҫтына сабаталай итеп минең һүрәтте баҫтырып ҡуйыр. Йәнә: «Газетала яҙылғандарҙың бөтәһе лә ошо кеше ауыҙынан сыҡҡан һүҙ», — тип өҫтәп тә ҡуйһа?.. Их һин, Башҡортостанский, Уральский, Күсәрбайский Ричард Галин — асыҡ ауыҙ, йомоҡ күҙ! Бөгөн үк, хәҙер үк карточканы кире алырға кәрәк. Карточкаһыҙ ул бер нәмә лә эшләй алмай, ҡулынан килмәй уның... *(Өйгә инеп китә.)*

Зәлифә, Банат, Гөлсирә, Миңлекәй инә. Байрамса милли кейемдәләр. Быны улар алдан кәңәшләшеп шулай эшләгән булырға тейеш.

Зәлифә. Буржуй күрәбеҙ тип, әллә түбәнһенәбеҙ инде, әхирәттәр.

Миңлекәй. Ғүмергә күрмәгән буржуй бынауында эргәңә килеп сыҡһын да, шуға ҡарап та ҡалма, имеш. Уның ни ғәйебе бар?

Банат. Күрәйек әле, беҙҙең ирҙәребеҙ кемгә ҡаршы һуғышып ғәзиз баштарын һалды икән.

Гөлсирә *(илай яҙып)*. Иҫкә төшөрмә инде, Банат...

Зәлифә. Ярай. Ултырышайыҡ, килгәс, күрмәй китмәбеҙ. *(Ултырышалар. Байтаҡ һүҙһеҙ торалар.)*

Миңлекәй. Буржуйҙар бисәләренә «йәнем-бәғерем» тип әйтәме икән?

Гөлсирә. Уйлар уй, һөйләр һүҙ тапты тағы бынау Миңлекәй.

Миңлекәй. Фазылйән мине ана анау Ҡара ҡая аҫтында «йәнем-бәғерем» тип ҡосаҡлап үпкәйне. Иҫкә генә төшһә лә, рәхәт булып китә. Уйламайым тиһәң дә, уйларһың шул...

Зәлифә *(карана)*. Тыңлап тормаһындар тағы. Оят, билләһи!

Миңлекәй. Уның ни ояты бар? Мин уйлағанымды ҡысҡырып һөйләйем, һеҙ шым ғына, йәшереп кенә уйлайһығыҙ. Айырма бары шунда ғына.

Банат. Ни етте һөйләшергә урыны был түгел.

Миңлекәй. Уныһы дөрөҫ... Һуғыш сығыр йылды Ҡәҙерғол туғайында бесән йыйғанда Фазылйән менән ҡунып ҡалдыҡ. Төн буйы ямғыр яуҙы...

Зәлифә. Быныһын ҡайтыр юлда һөйләрһең, Миңлекәй.

Миңлекәй *(шарҡылдап көлә)*. Оялмай тағы... Үлтерһәгеҙ ҙә, һөйләмәйәсәкмен.

Банат. Был господаларҙың сыҡҡанын шулай көтөп ултырырбыҙмы һаман?

Миңлекәй. Әйҙәгеҙ, шарҡылдап көләбеҙ. Ишетерҙәр ҙә сығырҙар.

Гөлсирә. Кисә Хәлимә ҡарсыҡ машинала уҙып барғандарын күреп ҡалған. Буржуйының мыйығы сысҡан ҡойроғо кеүек неп-нескә генә, ти.

Миңлекәй. Бынау Гөлсирә үҙе гонаһһыҙ йән булып ҡылана, үҙе туп-тура мыйыҡҡа барып йәбеште.

Банат. Миңлекәй, тим, етер һиңә!

Миңлекәй. Бөттө, бөттө, Банатҡайым.

Зәлифә. Үҙем ултырам, үҙемдең йөрәгем леп-леп тибә. Зөлхәбирә тураһында уйлайым.

Гөлсирә. Мин дә...

Банат. Сер бирмәҫкә! Һүҙ бер булһын!

Пиккио менән Ричард өйҙән сыға, Ричард үҙ фотоһын кире түш кеҫәһенә һала.

Пиккио. Тимәк, джентльмен һүҙе — һин миңә бүтән карточканды бирәһең...

Ричард *(ситкә, һуҙып)*. Ҡарт инәңә сәләм әйт!

Пиккио *(ҡатындарҙы күреп ала)*. О синьоралар! *(Ҡарап тора.)* Ниндәй ҡупшы кейемдәр! Ниндәй биҙәктәр! Һаумыһығыҙ?

Ричард. Улар синьоралар түгел, беҙҙең ауыл ҡатындары...

Пиккио. Таныш булайыҡ — Карло Пиккио. Бына рәхим итегеҙ — визитная карточкам. Быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә. Италияға — Миланоға килһәгеҙ, туп-тура үҙебеҙгә рәхим итегеҙ. Хуш килдегеҙ!..

Ҡатындар, аптырашып, бер-береһенә ҡараша.

Миңлекәй. Карточка, ти, һүрәте алдында ла, артында ла юҡ. Бына бер мәрәкә.

Гөлсирә. Яҙыуы латинса инде әллә?

Пиккио. Латино, эйе, латино.

Банат *(күңеле ҡайтып)*. Фу! Ошо ла булдымы буржуй. Сиңерткә шикелле һикергеләп тора. Ваҡыт уҙҙырып, итек туҙҙырып килеп йөрөүебеҙ.

Ричард. Шул үҙе инде.

Миңлекәй. Булмаҫ, газетала сыҡҡан һүрәттәргә яҡын да килмәгән.

Зәлифә. Һуғыштан һуң, бәлки, улар ҙа шулай арыҡланып ҡалғандарҙыр.

Ричард. Буржуйҙың төрлөһө була... Ҡарама үҙенә, ҡара күҙенә.

Гөлсирә. Бынау яҙыуҙы нимә эшләтергә икән.

Ричард. Был уның адресы. Италияға барһағыҙ, эҙләп табырға... Хат яҙырға ла була...

Миңлекәй. Ысынлап та, барып сыҡһаң, күҙе шар булыр ине, әйкәйем.

Банат *(Пиккио эргәһенә килә)*. Мин тиҙ арала ғына Италияға бармаҫҡа булдым. Мәгеҙ адресығыҙҙы. *(Бирә.)*

Зәлифә. Мин дә... *(Бирә.)*

Гөлсирә. Мин дә... *(Бирә.)*

Миңлекәй. Барһам, яҙыуһыҙ ҙа эҙләп табырмын. Телгә харап үткермен мин. *(Бирә.)*

Пиккио. Нимәлер аңлашылманы, ахыры, синьоралар. Ғәфү итегеҙ. Мин ихлас күңелдән.

Банат. Бөтәһе лә аңлашылып тора. Беҙ ҙә ихлас күңелдән.

Ричард һиҙҙермәй генә тау яғына китә, моғайын, ул Зөлхәбирә артынан баралыр.

Миңлекәй. Өҙөп кенә әйтегеҙ әле: һеҙ, ысынлап та, буржуймы?

Пиккио. Ҡайһылайыраҡ итеп әйтергә һуң? Нисегерәк әйтһәм дөрөҫ булыр икән?

Банат. Туп-тура итеп.

Пиккио. Бер яҡтан ҡарағанда, буржуй, бәләкәс буржуй, господин буржуй түгел, иптәш-товарищ буржуй, икенсе яҡтан — партизан...

Банат. Иптәш-тауариш бүре тәүҙә кемде ашарға икәнде үҙе белер әле, тип әйтте, ти...

Пиккио. Нимә ти ул?

Зәлифә. Бүре тураһында әкиәт һөйләй ул.

Пиккио. Эйе, эйе, мин дә беләм ул әкиәтте. Ҡыҙыл башлыҡлы ҡыҙҙы бүре ашаған...

Гөлсирә. Күп ашаны, ай, күп ашаны. Балаларҙы ла, ололарҙы ла...

Пиккио. Әкиәт ары, мин бире, ти, синьоралар. Моғайын, һеҙ синьора Зөлхәбирә килмәгәнгә асыуланғанһығыҙҙыр. Улар Айгөл менән тауға киткәндәр икән, хәҙер килерҙәр. Әлегә мин ҡабул итәм һеҙҙе.

Банат. Бөтөнләй баш булып алған был.

Пиккио. Баш, баш... Мин һеҙҙең мәҡәлде беләм, ир — баш, ҡатын — муйын. *(Башын борғолай.)*

Банат. Ай-һай, йор.

Зәлифә. Йор булмаһа, бөгөнгө көндә ошонда йөрөп тә ятмаҫ ине.

Пиккио. Һеҙ бөтәгеҙ ҙә синьора Зөлхәбирәнең дуҫтарылыр, моғайын. Йөҙөгөҙҙө танымаһам да, исемдәрегеҙҙе беләм мин. Һанап сығайыммы?

Миңлекәй. Һанап ҡарағыҙ әле.

Пиккио. Иң яҡын дуҫы-әхәриәте — Зәлифә, Зәлифә — бер.

Зәлифә башын ситкә бора. Исемдәре сыҡҡас, башҡалар ҙа шулай итә.

Миңлекәй. Әхәриәт түгел, әхирәт.

Пиккио. Эйе... Әхирәт. Ары һанайым. Банат — ике. *(Бармағын бөкләй.)* Банат — әллә ниндәй ҡанат та тигәйне әле...

Миңлекәй. Талмаҫ ҡанат. Уңған ул, күп эшләй. *(Ҡулы менән эшләп күрһәтә.)*

Пиккио. Ҡанат — ике, Сәлимә — өс, Фәниә — дүрт, Фәниә — дүрт...

Миңлекәй. Миңлекәй...

Пиккио. Миңлекәй — биш, Миңлекәй — биш... Гөлсирә — алты... Йыйыныһы һигеҙме, туғыҙмы инде.

Миңлекәй. Ҡара әле, тәтәкәйем, харап бит был бәндә.

Банат. Бисәһе һөйләгәндер.

Зәлифә. Һөйләһә лә инде...

Гөлсирә. Һағынып һөйләгәндер, күрәһең, бахыр. Әҙәм балаһы бит.

Банат. Ебемәҫкә!

Пиккио. Синьора Зөлхәбирә һеҙҙе шатландырасаҡ әле. Ул бөтәгеҙгә лә бүләктәр алып ҡайтты. Аҫыл, затлы бүләктәр... Матур кофталар, тек-тек баҫып йөрөй торған туфлиҙар. О, тағы әллә нәмәләр!

Банат. Бисәләр! Оҙаҡ ҡунаҡ булдыҡ, әҙәп белергә кәрәк.

Зәлифә. Эйе, күрәһе әҙәмде күрҙек, ҡуҙғалайыҡ.

Бик ашыҡмай ғына ҡуҙғалышалар.

Пиккио. Синьоралар! Сак кына көтөгөҙ, тағы сак кына...

Миңлекәй. Көтә-көтә көтөк булдык, унан өтөк булдык.

Пиккио. Тағы аҙ ғына өтөк булығыҙ. Бик аҙ ғына.

Гөлсирә. Зөлхәбирә кайтып етә алманы, үкенер инде...

Банат. Хушығыҙ, иптәш-тауариш!

Пиккио. Һеҙ китһәгеҙ, синьора Зөлхәбирә миңә асыуланасак, ой асыуланасак. Пиккионың баш бөттө!

Миңлекәй. Баш бөтһә, муйын калыр...

Тау яғынан Зөлхәбирә менән Айгөл йүгереп килә. Пиккио уларҙы күреп кала.

Пиккио. Муйын, муйын... *(Шатланып.)* Ана муйын кайтып килә. Ике муйын!

Катындар боролоп карайҙар. Ашыкмай ғына кире урындарына ултыралар.

Зөлхәбирә *(алыҫтан ук)*. Дуҫтарым, әхирәттәрем! Бына рәхмәт һеҙгә! Үҙем барайым, тип тора инем. Уф! Һағындым! Бөтәгеҙҙе лә үлеп һағындым. *(Косак йәйеп килә.)* Кайһығыҙҙан башлайым икән? Зәлифәкәйем, әхирәткәйем, кайҙа үҙеңдән башлайым. *(Зәлифәгә ынтыла. Зәлифә, башын эйеп, өнһөҙ ултыра.)* Нимә булды һиңә, Зәлифә? Ниңә башыңды күтәрмәйһең? Был мин бит — әхирәтең Зөлхәбирә.

Зәлифә. Мин һине танымайым...

Зөлхәбирә. Нисек иңде ул танымайһың? Нисек инде? Оноттоңмо ни? Мин һеҙҙең берегеҙҙе лә онотманым.

Зәлифә. Мин танымайым.

Зөлхәбирә. Ә һин, Миңлекәй? Һин таныйһыңмы һуң?

Миңлекәй. Мин Миңлекәйен Миңлекәй ҙә...

Зөлхәбирә. Мин Зөлхәбирә.

Миңлекәй. Таныш түгел.

Зөлхәбирә. Гөлсирә, Гөлсирәкәй! Һин таны, исмаһам!

Гөлсирә *(илап)*. Әллә инде... Таныйым да кеүек, танымайым да кеүек...

Банат. Күп илауҙан уның күҙҙәре зәғифләнде. Кеше айырмай ул хәҙер.

Зөлхәбирә. Банат! Арала иң уҫалыбыҙ Банат — һин һуң ни әйтерһең?

Банат. Әйтмәм. Танымайым мин һине.

Зөлхәбирә *(бөтөнләй ҡойолоп төшә)*. Һеҙ мине шаяртаһығыҙ, әлбиттә, шаяртаһығыҙ. Һаман да уйынсаҡ икәнһегеҙ әле, шайтан ҡыҙҙар! Йәгеҙ, етер, етер, әхирәткәйҙәрем. Түҙер хәлдәрем ҡалманы. Үҙегеҙҙең дә, минең дә сыҙамлыҡты башҡаса һынамағыҙ. Шартлап өҙөлөүе бар.

Банат. Беҙҙеке өҙөлөүҙән үткән инде.

Зөлхәбирә. Дуҫтарым, ҡәҙерлеләрем, нимә эшләүегеҙ был? Ниндәй фажиғә, ниндәй ҡот осҡос сихыр был?

Айгөл, йәшен һуҡҡан кеүек, шаҡ ҡатып тора.

Пиккио. Синьоралар, әхирәттәр! Бөтә көсөгөҙҙө йыйып, иҫегеҙгә төшөрөргә тырышып ҡарағыҙ, синьоралар! Зинһар өсөн!

Зөлхәбирә. Бар, Карло дуҫым, беҙҙе ҡалдырып тор. Үҙебеҙ генә, бәлки, тиҙерәк аңлашырбыҙ.

Пиккио. Ярай, ярай, мин китәм. *(Аяҡ осона баҫып сығып китә.)*

Зөлхәбирә. Зәлифә, Банат, Миңлекәй, Гөлсирә! Ни булды һеҙгә?

Миңлекәй. Беҙгә бер ни ҙә булманы.

Гөлсирә *(илап)*. Артыҡ бер ни ҙә...

Банат. Беҙҙең хәтеребеҙ юғалды. Дүртебеҙҙең дә бер юлы.

Зөлхәбирә. Улайһа, бөтәһен дә берәм-берәм хәтергә төшөрәйек. Зәлифә, беҙ бит һинең менән күрше өйҙәрҙә үҫтек. Иҫтәлеккә тәтәйҙәр бирешеп, һигеҙ йәштән әхирәт булыштыҡ. Мәңге ташлашмаҫҡа ант итеп, әпәкәй-кояш, тиештек... Һинең сәсең бөҙрә ине, тарай алмай интегеп бөтә торғайның... Хәтерләйһеңме инде?

Зәлифә. Юҡ, юҡ! *(Әрнеп.)* Хәтерләмәйем!

Зөлхәбирә. Иҫеңдәме, Банат. Һинең менән икәү Йәрмәй ауылына барғайнык. Ауыл осонда бер малай беҙҙе таяк менән ҡурҡытмаҡсы итте, һин уны ҡыуып тоттоң да аҡыртып туҡмап киттең. Яман көслө инең... Үҫеп еткәс, һин уның ҡатыны булдың.

Банат. Малай иҫемдә. *(Баш сайҡай.)* Һин — юҡ.

Зөлхәбирә. Миңлекәй, һин бик йәшләй үк егеттәрҙең баштарын әйләндерә торғайның. *(Көлә.)* Шулай бит, Миңлекәй! Һинең менән беҙ — ике ахмаҡ Фазыл-йән арҡаһында аҙна буйы спор булып йөрөнөк. Һин ерле юҡка көнләштең дә киттең... Аҙаҡтан рәхәтләнеп бер көлдек, исмаһам. Эйе бит, Миңлекәй? Һеҙҙең баҡсала, ҡарама төбөндә. Ул ҡарама әле лә иҫәндер, моғайын...

Миңлекәй. Үткән ҡыш утынға киҫеп яҡтым. Торған көйө ҡороно.

Зөлхәбирә. Хәтерләнеңме инде?

Миңлекәй. Юҡ.

Зөлхәбирә. Мүклекүлдә томбойоҡ өҙөп йөрөгәндә, кем кәмәнән йығылып төшкәйне? Һин түгелме, Гөлсирә?

Гөлсирә. Мин.

Зөлхәбирә. Баттың тигәндә, кем тартып сығарҙы һине? Хәтерләйһеңме шуны?

Банат *(һикереп тора)*. Етер! Һин дә туҡта! Беҙҙең сыҙамлыҡты һынама, уның да сиге бар. Беҙ ҙә таштан яралмаған! Беҙҙә лә йөрәк, беҙҙә лә йән бар!

Зөлхәбирә. Тимәк, таныйһығыҙ?

Банат. Юҡ, барыбер таный алмайбыҙ һине.

Айгөл *(уртаға атылып сыға)*. Банат апай! Был минең әсәйем бит! Һин таныйһың бит уны, таныйһың! Үҙең бит осраған һайын, мине туҡтатып: «Бигерәк әсәһенә оҡшаған, бигерәк сибәр», — тип арҡамдан һөйә инең. Мин әсәйемә оҡшағас, нисек уны танымаҫҡа мөмкин? Мөмкин түгел! Ниңә бушты һөйләйһең, Банат апай? Миңлекәй апай, Зәлифә әхирәт апай, Гөлсирә апай! Миңә һеҙ бөтәгеҙ ҙә бәләкәс сағымдан уҡ: «Әсәйең илдә бер ҡыҙ ине, әсәйең кеүек аҡыллы бул, әсәйең кеүек игелекле бул!» — тип тылҡынығыҙ. Эйе, гел шулай тинегеҙ. Зәлифә апай! Әсәйең кеүек күрәм, тип анау көндө кем мине ҡосаҡлап иланы. Һин иланың

бит, Зәлифә апай! Элек әйткән һүҙегеҙҙе хәҙер танаһығыҙмы ни? Әйтегеҙ, танабыҙ, тиегеҙ, тиегеҙ. Әйтегеҙ!

Ҡатындар, ҡаушап-аптырап, һүҙһеҙ ҡалалар. Оҙаҡ пауза.

Зәлифә *(аҡрын ғына Зөлхәбирә ҡаршыһына килеп баҫа)*. Теге Зөлхәбирәнең мин әхирәтемен. Шуның өсөн иң тура һүҙҙе мин әйтергә тейешмен.

Зөлхәбирә. Мин шул уҡ Зөлхәбирә. Шул уҡ! Тик ғазаптарым ғына күберәк.

Зәлифә. Теге Зөлхәбирә үҙебеҙҙеке ине. Ә быныһын күҙебеҙ таный, күңелебеҙ танымай. Беҙ донъя күргән халыҡ түгел, ябай халыҡ. Донъяны беҙ ҡап уртаға: аҡҡа — ҡараға, дуҫҡа — дошманға, яҡшыға — яманға, йәшәүгә — үлемгә бүләбеҙ. Беҙ дүртебеҙ ҙә етем, тол бисә. Ирҙәребеҙ, дошманға ҡаршы һуғышып, тупраҡҡа һеңделәр, һинең беренсе ирең, үҙ ирең кеүек үк... Дошман кем ине һуң? Ул синфи дошман ине, Зөлхәбирә. Беҙҙеңсә, ябай ғына әйткәндә, буржуйҙар, капиталистар ине. Һин шуларҙың береһенә кейәүгә сыҡҡанһың. Уныһы, әлбиттә, һинең эш. Ә бына уны эйәртеп ҡайтыуың инде беҙгә лә ҡағыла. Намыҫыбыҙға тейә, бынан алыҫ яҡтарҙың тупрағында ятҡан мәрхүмдәрҙең иҫтәлеген мыҫҡыл итә. Һинең был ҡылығыңды йөрәк шулай ҡабул ҡылды. Беҙ, ябай ауыл бисәләре, бәлки, бөтәһен дә аңлап еткермәйбеҙҙер. Донъяла беҙҙең өсөн дуҫ бар, дошман бар, Ватан бар, сит донъя бар, бөгөнгө көн бар, иҫтәлектәр бар. Уйлап ҡараһаң, ҡайһы бер йәһәттән беҙ ыҙандың төрлө яғында булып сығабыҙ. Уйлағанымды әйтәйем. «Ғәфү ит!» — тиер инем, урынһыҙ булыр. Һин үҙең беҙҙән ғәфү үтенергә тейешһең, итә алһаҡ... Шулай, Зөлхәбирә, күҙебеҙ таныны, күңелебеҙ танымады.

Банат. Йәгеҙ, бисәләр, һүҙ быҙау имеҙә, ти... Беҙ бит донъя буйлап сәйәхәт сыҡҡан кешеләр түгел *(тора)*, — эш көтә.

Миңлекәй. Беҙҙе хәҙер бары шул эш кенә көтә лә инде.

Бөтәһе лә ашыҡмай ғына урындарынан тора.

Зөлхәбирә *(ярһып)*. Китмәгеҙ! Хөкөм һүҙегеҙҙе әйтеп бөтөрөгөҙ! Һеҙ мине күргән яфаларым, кисергән ғазаптарым, һулҡылдап әрнеп торған яраларым өсөн, аҙаҡ килеп, йөҙ үлемдән ҡотолоп иҫән ҡалғаным өсөн хөкөм итәһегеҙ бит! Аңлайһығыҙмы шуны? Бына быныһы *(күлдәк еңен өҙөп ырғыта)* фашистың беренсе мөһөрө. Утлы тимер менән баҫылған.

Зәлифә *(әсе тауыш менән)*. А-бау!

Гөлсирә *(илап)*. Илаһым!

Зөлхәбирә. Ә уға тиклем, унан һуң булғандары! Теләһәгеҙ, теләмәһәгеҙ ҙә, тыңлаһағыҙ, тыңламаһағыҙ ҙа, һөйләйем. Хөкөм аҫтындағы кеше үҙенең һуңғы һүҙен әйтеп бөтөрөргә тейеш. Закон быны рөхсәт итә.

Гөлсирә. Закон, тип ни инде...

Зөлхәбирә. Мин Сабирҙың бары ҡәбере менән генә осраштым. Төн буйы уның баш осонда ултырҙым. Төн буйы тирә-яғымда туптар шартланы, пулялар һыҙғырҙы, танкылар үкерҙе. Ҡояш сығып килгәндә, берәү ҡаршыма баҫып, миңә автомат тоҫҡаны. Был фашист ине. Шунан алып ҡоллоҡ башланды. Мал ташый торған вагонға йөҙләгән ҡатынды тыңҡыслап тултырҙылар ҙа алып киттеләр. Эҫенән, аслыҡтан, һыуһауҙан яфаланып, бик оҙаҡ барҙыҡ. Сирләләр баҫҡан көйө үлделәр, ятып үлерлек тә урын юҡ ине.

Зәлифә. Бисаралар...

Зөлхәбирә. Беҙҙе тау араһындағы бер заводҡа алып барып тыҡтылар. Тәүлегенә ун алты сәғәт эш. Һигеҙ сәғәт — илау-һыҡтау. Ҡайҙа икәнебеҙҙе беребеҙ ҙә белмәйбеҙ. Шулай ҙа мин бер көн, яйын табып, ҡастым. Тиҙ тоттолар. Ҡанға батырғансы туҡманылар, мөһөр баҫтылар. Өс айҙан һуң бер иптәшем менән йәнә ҡастыҡ. Ике көндән һуң эт менән эҙләп тоттолар, һуштан яҙҙырғансы туҡманылар. *(Күкрәген аса.)* Ҡыҙған тимер менән сажлатып бынау икенсе мөһөрҙө һуҡтылар.

Гөлсирә. А-а! *(Ҡулы менән күҙен ҡаплай.)*

Банат. Йыртҡыстар!

Миңлекәй. Ҡан эскестәр!

Зәлифә. Ошондай фәрештә кеүек ҡатынға нисек ҡулдары күтәрелгән?

Гөлсирә. Дошман тигән бәндәләреңә күрһәтмәһен.

Зөлхәбирә. Йәй башы ине. Тағы ҡастыҡ. Өсәү инек. Артыбыҙҙан әллә ҡыуа сыҡманылар, әллә сығып та, эҙебеҙгә төшә алманылар. Был юлы беҙ үҙебеҙҙең ни тирәләрәк икәнебеҙҙе аҙыраҡ самалай инек. Ҡайҙалыр көньяҡта Италия булырға тейеш. Тау араларынан юлһыҙ-ниһеҙ егерме көн барҙыҡ. Йонсоп, ҡоро һөйәккә ҡалдыҡ. Тәүҙә Иванканы... ташҡын алып китте. Шунан Ростислава... Ул, яҙа баҫып, упҡынға осто.

Миңлекәй. Бисараҡайҙар...

Гөлсирә. Һиҙәр генә күрһәтмәне был һуғыш әҙәмдәргә...

Зөлхәбирә. Яңғыҙ ҡалғас, ашамай-эсмәй күпме йөрөгәнмендер, белмәйем. Бөтәһе лә һаташыу кеүек кенә булды. Тирмәнсе йортонда һушыма килдем. Тирмәнсе мине бер йылға ярында табып алып ҡайтҡан икән.

Миңлекәй. Ул да фашист булып сыҡтымы?

Зөлхәбирә. Юҡ, түгел. Һәйбәт кеше. Һеҙ уны күрҙегеҙ. Йылдар үткәс, ул ҡыҙым Зәлифә менән улым Джузеппаның атаһы булды. Минең тегендә тағы ике балам бар!

Көсөргәнеш кәмей. Байтаҡ һүҙһеҙ торалар.

Банат. Шулай икән...

Миңлекәй. Тимәк, теге әкиәттәге кеүегерәк булып сыҡты инде. Йомғағы артынан илап йүгергән үгәй ҡыҙ урап ҡайтҡанда, эт былай тип өрҙө, ти бит: «Үлергә киткән апайым байып ҡайтып килә-ләү!» Ҡыҙыл әрмис ҡатыны булып ҡына киткәйнең, буржуй ҡатыны булып ҡайтып төштөң...

Зөлхәбирә. Шулайыраҡ булды шул. Һуғыштан һуң Карло ҡапыл байып китте... Бына бөтәһен дә һөйләп бирҙем, хөкөмөгөҙҙө сығарып бөтөрөгөҙ.

Зәлифә *(Зөлхәбирә алдына килә, уның асыҡ күкрәген яба)*. Ғазаптарың, яфаларың, яраларың *(тауышы ҡалтырай)* ҡот осҡос, күргән, кисергән яҙмышың фажиғәле, Зөлхәбирә. Һин һөйләгәндә генә лә, тәндәр сымырлап торҙо. Ләкин улар тыуған ерҙе сит ергә, үҙ кешеләреңде яттарға алмаштырырға хоҡуҡ бирәме икән? Быныһын мин белмәйем.

Миңлекәй. Мин дә белмәйем.

Банат. Эйе, беҙ белмәйбеҙ.

Гөлсирә. Ә мин беләм: беҙ ҡаты бәғерле ҡатындарбыҙ, беҙ рәхимһеҙ ҡатындарбыҙ. *(Илай.)*

Банат. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Беҙ ҙә тыумыштан ундай түгел инек. Хәсрәт ҡатыш нәфрәт бауырҙарыбыҙҙа таш булып йомарланды. Дүртебеҙҙең дә ире, һалҡын тупраҡты ҡосаҡлап, ерҙең дүрт тарафында ята. Уларҙы көнбайыштан килгән заттар үлтерҙе. *(Йөҙрөгөн болғай.)* Көнбайыштан килгәндәр! Шул уҡ көнбайыштан ағайың ағас аяғын һөйрәп ҡайтты. Ә һин нисек ҡайттың? Ниңә ҡайттың һин?.. *(Үҙе саҡ иламай.)* Беҙгә лә ауыр, үҙеңә лә бик ауыр. Бер-беребеҙҙе барыбер йыуата алмайбыҙ. Тыныс ҡына хушлашайыҡ.

Зөлхәбирә. Бына ошолаймы, бөтөнләйгә сит кешеләр булыпмы?

Зәлифә. Башҡаса мөмкин түгел, күрәһең...

Зөлхәбирә. Һеҙгә атап алып ҡайтҡан бүләктәрем бар ине. Булмаһа шуларҙы алыр инегеҙ. Мин хәҙер сығарам.

Зәлифә. Бүләгеңде лә ҡабул итә алмайбыҙ. Быныһы өсөн ғәфү үтенәбеҙ... Әммә ҡабул итә алмайбыҙ. *(Илап ебәрмәҫ өсөн иренен ҡымтый.)*

Дүртеһе лә баштарын эйеп сығып китә. Гөлсирә өнһөҙ илай. Зәлифә яулыҡ осо менән йөҙөн ҡаплай.

Зөлхәбирә *(ҡарап ҡала)*. Мәйет менән хушлашып киткән кеүек киттеләр...

Айгөл. Улар былдай уҫал түгел ине, әсәйем. Улар бик һәйбәт инеләр.

Зөлхәбирә *(имәнде ҡосаҡлай)*. Тыуған тупрағым! Һиңә тағы ла әсе күҙ йәштәремде түгермен, тип уйлап ҡайтҡайныммы ни мин? Тыуған тупрағым! Минең зарымды ишетәһеңме һин? Аҙашып йөрөгән етем ҡошсоғоң үҙ ояһына ҡайтып ингәйне, ояластары уны ҡабул итмәне, талап сығарҙы. Көткән ҡурҡыныстар ситләп үтте, уйламағандар алға килде. Тегенән мине совет законы, ГПУ, төрмә, лагерь менән ҡурҡытып ебәрҙеләр. Бында мине улар түгел, дуҫтарымдың нәфрәте көтөп торған икән. Нимә ҡылайым? Ҡайҙа барып һыйына-

йым? *(Быуылып илап ебәрә.)* Балам! Зинһар, һин ташлама мине! Үтенеп, ялынып, ялбарып һорайым, балам!

Айгөл *(әсәһе ҡаршыһына теҙләнә)*. Илама, әсәйем, аҙаҡтан бөтәһе өсөн дә бер юлы ғына иларбыҙ. Бер юлы ғына...

Зөлхәбирә. Йәш саҡтағы кеүек иламай сыҙап булһа икән ул.

Айгөл *(әсәһенең сәстәрен һыйпай)*. Һинең кеүек батыр кешегә күп илау килешмәй.

Зөлхәбирә. Тән яраларына түҙеп була, йән яралары быуынға төшә, балам.

Айгөл оҙаҡ итеп әсәһен һөйә. Күккә ҡарай.

Айгөл. Әсәй! Италияла күк ни төҫлө?

Зөлхәбирә. Бөтә ерҙә лә бер үк күк, бер үк ҡояш, ҡыҙым. Яҙмыштар ғына төрлө.

Айгөл. Күк хас та ошондай бейек, зәңгәрме?

Зөлхәбирә. Барғас күрерһең...

Айгөл. Италияны картала бейек үксәле итеккә оҡшатып төшөрәләр. Һеҙ ул итектең ҡайһы ерендә тораһығыҙ — йөҙлөгөндәме, ҡуңысындамы, үксәһендәме?

Зөлхәбирә. Ҡуңысының осонда ғына. Барғас, теләгән ереңә йөрөрһөң, теләгәнеңде күрерһең. Бик боронғо ил ул.

Айгөл. Уныһын ғына беләм дә... Әсәй, Италия фильмдарында кешеләр йә йырлайҙар, йә талашалар. Ысынлап та, улар шундаймы?

Зөлхәбирә. Шундай. Әммә аҙыраҡ йырлайҙар, күберәк талашалар. Башҡа ерҙәрҙәге кеүек үк.

Айгөл. Етер, Италияны һөйләмәйек инде... Атайымдың ҡәбере тураһында һөйлә. Ҡайҙа ул?

Зөлхәбирә. Украинала. Ҡола яланда тау битендә ине.

Айгөл. Пионерҙар унда, моғайын, сәскәләр һалалыр әле... Ә беҙ онотток уны.

Зөлхәбирә. Кешеләр үлгәндәрҙе генә түгел, тереләрҙе лә оноталар.

Айгөл. Ә беҙ онотмайыҡ. Синьор Пиккиоға минең бер һүҙем юҡ. Шулай ҙа атайымды, минең атайымды онотмайыҡ, йәме, әсәй.

Зөлхәбирә. Бергә булғас, һин миңә гел уны хәтерләтеп торасаҡһың — тегендә, Италияла.

Айгөл *(һикереп тора)*. Атайымды онотмау өсөн Италияға барыу һис тә кәрәкмәй, әсәй!

Зөлхәбирә. Ҡыҙым! Ун өс йыл көтөп, ҡырҡ кәртә үтеп ҡайттым. Мин бит һине алырға ҡайттым.

Айгөл. Әгәр мин бармаһам...

Зөлхәбирә. Был мөмкин түгел, ҡыҙым.

Айгөл. Мин башта уҡ һиҙгәйнем, әсәй. Ләкин рәнйемә, ҡапыл ғына өҙөп әйтә алмайым. Етерлек аҡылым да, таянырлыҡ тәжрибәм дә юҡ. Иҫәр бер йөрәгем бар. Ә ул икеләнә, бик ныҡ икеләнә... Кемгә генә кәңәш итәйем.

Зөлхәбирә. Намыҫыңа.

Айгөл. Ул да икеләнә.

Зөлхәбирә. Миңә кәңәш ит.

Айгөл. Юҡ, әсәй, был йәһәттән һин кәңәшсе була алмайһың. Бабайым ни әйтер? Йәнә Ричард Галин... Бөтә ун ете йыл ғүмеремде мин улар менән бергә йәшәнем бит.

Тау яғынан Йәғәфәр менән Ричард килә. Йәғәфәр кескәй генә айыу балаһын ҡултығына ҡыҫтырып алған.

Ана, бабайым!

Йәғәфәр. Беҙ. *(Айыу балаһын күрһәтә.)* Бына беҙ йәнә өйгә ҡайттыҡ.

Айгөл. Тыйнаҡтың бер балаһы түгелме һуң был?

Йәғәфәр. Шул, инәһен юғалтҡас, тыуған йортон эҙләп килгән, бахыр... Ярай, үҫерһең әле. Илдә һин түгел, ҡанаты һынған сәпсек балаһы ла үлмәй...

Айгөл. Бабайым! Әсәйем мине алырға ҡайтҡан бит!

Йәғәфәр. Ҡалай алырға? Ҡайҙа алырға?

Зөлхәбирә. Италияға. Үҙ яныма, теге балаларым янына.

Йәғәфәр. Нисек инде ул шулай, ҡапыл ғына? *(Ҡулдарын йәйә.)* Көтмәгәндә генә?

Зөлхәбирә. Ун өс йыл көттөм, ун өс йыл ашҡындым. Аңла, ағайым! Мин бит әсә. Айгөл — минең тәүге балам, иң ныҡ яфаларға төшөргән иң ҡәҙерле балам.

Унан башҡа бүтәнсә йәшәй алмам. Әрнеүҙәрем елегемә төштө. Йәшәй алмам. Унһыҙ йәшәй алмам.

Йәғәфәр. Ә мин? Мин нисек йәшәрмен? Япа-яңғыҙым, бер үҙем нисек йәшәрмен? Әлегә саҡлы мин ни өсөн йәшәнем? Кем өсөн йәшәнем?!

Зөлхәбирә. Һөйөклө ағайым! Был бәхәс минең өсөн ни тиклем ауыр икәнен аңлаһаң ине. Аңлайһыңдыр, һин аҡыллы бит. Әммә мин — әсә. Ҡанымдың әмере аҡылымдан көслөрәк. Минең яҡта әсәлек хаҡы.

Йәғәфәр *(тыныс)*. Беҙҙең яҡта ил хаҡы, ер-һыу хаҡы *(күккә күрһәтә)*, анау ҡояш хаҡы.

Зөлхәбирә. Минең яҡта күкрәк һөтө хаҡы, күҙ йәштәрем хаҡы...

Йәғәфәр. Әгәр әсә менән Ватан бала өсөн судлашһа, ғәҙел суд кем яғында булыр ине?

Зөлхәбирә. Әлбиттә, әсә яғында булыр ине.

Ричард. Бәлки, Ватан яғында.

Пауза.

Йәғәфәр. Бала үҙе хәл итһен.

Айгөл. Эйе, мин хәл итермен. Бик-бик күп уйлағас, үҙем хәл итермен. Әлбиттә, хәл итермен. Моғайын, әсәйем, икенсе ҡат һинән айырыла алмам. Кисер, ҡәҙерле бабаҡайым! Әсәйемдән айырыла алмам. Мин... Мин... Аҙашҡан айыу балаһы мин...

Ут һүнә.

### Бишенсе картина

Таң алды. Әле генә уянған ҡоштар һайрай. Сит кеше — яҡтылыҡ түңәрәгендә. Өй тәҙрәһенән зәғиф кенә һарғылт ут төшә.

Сит кеше. Таң ата. Ҡоштар йоҡонан уяна. Тәүлектең иң саф сабый сағы. Был сәғәттә тик бәхет, шатлыҡ, мөхәббәт, тылсымлы киләсәк хаҡында ғына һөйләргә ине. Яңы көн тыуа. Был минуттарҙа, бер-береһенең иңбаштарына баштарын һалып, кемдәрҙер ҡайҙалыр ул турала һөйләшәләр, әлбиттә. Хыялдарында бер йылға, ун йылға, йөҙ йылға осоп үтәләрҙер. Ә мин ун туғыҙ

йылға артҡа ташланам. Мин ул саҡта ла бар инем, бөтәһен дә күреп, ситтән генә күҙәтеп торҙом. Ошондай уҡ йәйге таң ине. Тәмәке төтөнө баҫҡан ҙур шыҡһыҙ бүлмә. Йондоҙҙар йымылдауы, төнгө еләҫ ел, ҡоштар һайрауы эскә үтеп инмәһен өсөн, тәҙрәләргә ҡалын, ауыр пәрҙәләр ҡоролған. Сөнки тормош ауазы, донъя һулышы бүлмәгә бәреп инһә, ундағы кешеләрҙең күңелдәре йомшарыуы ихтимал. Күңел йомшаҡлығы ул заманда тыйыла ине. Елһенгән күҙле өс кеше һарғылт йөҙлө бер кешене хөкөм итте был иртәлә. Башта: «Ултырығыҙ, гражданин Моратшин», — тинеләр. Тыңламағас, тағы ҡабатланылар: «Ултырығыҙ, гражданин!..» Ултырҙы. Өсәүҙең икеһе ялған ғәйепләү ҡағыҙҙарына — ялған шаһиттарҙың ялаһына ихлас ышанып, шик-шөбһәһеҙ хөкөм сығарҙы. Улар үҙҙәренең бурыстарын шулай ғәҙел, теүәл башҡарыуҙарынан риза ине. Ә өсөнсөһө бөтә ҡағыҙҙарҙың ялған, ә ғәйепләнеүсенең ғәйепһеҙ икәнен белә ине. Сөнки улар дуҫтар ине. Өсәүҙең беренсеһе: «Ғәйепле!» — тине. «Ғәйепле!» — тип ҡабатланы икенсеһе. Өсөнсөһө өндәшмәне. Хатта баш та ҡаҡманы. Теге икәү уға иғтибар ҙа итмәне. «Алып китегеҙ!» — тине беренсеһе. Алып киттеләр. «Нәүбәттәген килтерегеҙ!» — тине икенсеһе. Килтерҙеләр. «Ултырығыҙ, гражданин...» — тинеләр. *(Сит кеше юҡ була.)*

Өй эсе. Тоноҡ ҡына ут яна. Йәғәфәр өҫтәл эргәһендә ултыра. Ҡәҙерйән ишек төбөндә баҫып тора. Айгөл, юрғанына төрөнөп, карауатында ултыра.

Йәғәфәр. Өсөнсө тапҡыр ҡабатлайым: ултырығыҙ, гражданин Ябағаев.

Ябағаев. Ултырһам да ярай, баҫып торһам да...

Йәғәфәр. Ярамай, ултырығыҙ.

Ябағаев. Ултырҙым. Был аяҡлы бәлә ҡайҙан килеп сыҡты, тиһеңдер, тиһегеҙҙер.

Йәғәфәр. Шулай тимен.

Айгөл. Бабайым! Ҡәҙерйән ағай тураһында бер һүҙ әйтәйемме?

Йәғәфәр. Хәҙергә әйтмәй тор. Һин уны «кем» тип һорағайның. Мин һине шуға уяттым. Тыңлап ҡына ултыр.

Ябағаев. Мин һеҙҙе бер меҢ туғыҙ йөҙ утыҙ туғыҙынсы йылдан бирле, һеҙ аҡланып сыҡҡандан бирле, эҙләйем. Күпме хаттар яҙҙым, кире ҡайтты.

Йәғәфәр. Хаттарың килде, алманым. Мин һине юҡ тип иҫәпләнем...

Ябағаев. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙергә бармын шул. Күпме тапҡырҙар үҙ-үҙемә ҡул һалырға ла йыйынып ҡараным. Һәр юлы кисектереп торҙом.

Йәғәфәр. Бушты һөйләйһең. Хайуандың мәхлүге лә, йыртҡысы ла үҙ-үҙенә ҡул һалмай. Донъяла юҡ эш ул.

Ябағаев. Дөрөҫ, шуға күрә лә ул эште мин кисектерә килдем.

Йәғәфәр. Нимә, һин минән йәлләтергә килдеңме? Зинһар, үҙ-үҙеңде харап итмә, тип инәлергә тейешме инде мин һиңә?

Ябағаев. Юҡ, Йәғәфәр, быныһы тик һүҙ уңайында ғына.

Йәғәфәр. Нимә кәрәк һуң һиңә?

Ябағаев. Һинең ғәфү итеүең кәрәк. Ун туғыҙ йыл үҙемә урын таба алмайым. Йәнем өҙгөләнә. Кешелек ҡиәфәтемде юғалттым. Кешелек сифаты, кешелек дәрәжәһе тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Уныһын үҙең күрәһең...

Йәғәфәр. Ҡаршыға баҫып ҡына ғәфү һорарға һин шаярып китеп тәҙрә быялаһы ватҡан малай түгелһең бит.

Ябағаев. Беләм. Мин һинең тормошоңдо, яҙмышыңды емереүҙә ҡатнаштым, өндәшмәүем менән ҡатнаштым. Шуның арҡаһында һин ҡатыныңды, берҙән-бер балаңды юғалттың.

Йәғәфәр. Күрәм, һин аңлай башлағанһың икән...

Ябағаев. Мин күптән аңланым. Ун ете йыл, бөтә нәмәнән ваз кисеп, һине, һеҙҙе... эҙләйем.

Йәғәфәр. Мин кәрәкмәйем бит һиңә, йән тыныслығы кәрәк.

Ябағаев. Эйе, дөрөҫ.

Йәғәфәр. Һиңә выждан ғазабынан ҡотолорға кәрәк.

Ябағаев. Эйе. Миңә башҡа һис ни кәрәкмәй. Хатта бәхет тә *(меҫкен йылмая)*, бәхет тағы... Иман килтерергә кәрәк миңә!

Йәғәфәр. Килтер. Ана, Ҡара ҡая алдына баҫ та килтер.

Ябағаев. Ҡара ҡая түгел, һин генә ҡотҡара алаһың мине.

Йәғәфәр. Һин бит мине ҡотҡарманың, ҡотҡарырға тырышып та ҡараманың...

Ябағаев. Әгәр ул саҡ һине ҡотҡарған булһам, хәҙер бынау ҡиәфәттә алдыңа килеп баҫыр инемме ни?

Йәғәфәр. Дөрөҫөн әйткәндә, ул ваҡытта мин һине был тиклем үк ҡаты хөкөм итмәнем. «Бер ул ғынамы ни?» — тип уйланым. Бара-бара, уйлай-уйлай нәфрәтем ҡайнап сыҡты... Әгәр ул йылды һәр өсөнсө һинең кеүек булмаһа, теге икәү ҙә, бәлки, тиҙерәк аңына килер ине. Һүҙ әйтер саҡта ауыҙҙарына һыу уртлап ултырған өсөнсөләр, тура ҡарар урында күҙ керпектәрен түбән сәнскән өсөнсөләр, шул өсөнсөләр булмаһа... Һәр өсөнсөбөҙҙөң эсендә шул өсөнсө кеше ултырмаһа... Заман сире, заман имгәктәре... «Эйе» менән «юҡ» араһындағы өсөнсөләр!

Ябағаев. Мәрхәмәтле бул, кисер мине!

Йәғәфәр. Әгәр был һинең шәхси ғәйебең генә булһа, бәлки, ярлыҡар ҙа инем.

Ябағаев. Заманда минең эшем юҡ. Үҙ заманымдан ваз кистем мин. Һин минең үҙ өҫтөмә төшкәнде генә ярлыҡа. Үҙемдекен генә! Әйҙә, башта минең ғәйебемдең күләмен, миҡдарын, ауырлығын билдәләйек. Бөтөнләй үк ғәфү итмәҫлек үк нәмә эшләнемме ни мин? Мин хатта «ғәйепле» тип тә әйтмәнем бит.

Йәғәфәр. Һин «ғәйепһеҙ» тип тә әйтмәнең.

Ябағаев. Әйтмәнем. Улай тиһәм, мин һинең яҡта булып сыға инем. Ҡатыным, балаларым хаҡына өндәшмәнем. Хәйер, улар һуңынан мине барыбер ҡыуып сығарҙы.

Айгөл *(ырғып тора)*. Ғәйепһеҙҙе «ғәйепһеҙ» тип әйтмәнегеҙме? Өндәшмәнегеҙме? Яҡламанығыҙмы?

Ябағаев. Әйтмәнем, өндәшмәнем, яҡламаным.

Айгөл. Их һеҙ!

Йәғәфәр *(Айгөлгә, ҡырҡа)*. Хәҙер үк ояңа сум, айыу балаһы!

Ябағаев. Мин аңланым. Өндәшмәгәнем өсөн үҙемде үҙем язаға тарттым, выждан ғазаптары кисерәм. Ә тегеләр? Тегеләр һуң?

Йәғәфәр. Кемдәр?

Ябағаев. Тегеләр!

Йәғәфәр. Кемдәр? Теге икәүме?

Ябағаев. Түгел. Иптәштәре, туғандары, хатта аталары өҫтөнән донос яҙған әҙәмдәр, теләһә кемгә яла яҡкан, теләһә күпме провокация эшләгән әҙәмдәр?

Йәғәфәр. Минән дә әшәкерәктәр бар, тимәксе булаһыңмы?

Ябағаев. Эш унда түгел. Улар, һис нәмә булмағандай, изгеләрҙән-изге ҡыланып йәшәй бирәләр. Етмәһә, трибунаға баҫып, намыҫ, выждан, әхлаҡ тураһында нотоҡ, вәғәз һөйләйҙәр... Улар ҡаршыһында мин нимә? Күҙе асылмаған бесәй балаһы...

Йәғәфәр. Ундайҙар, арттан боҫоп килеп, арҡаға хәнйәр ҡаҙанылар. Ҡаҙанылар ҙа ҡастылар. Ә һинең кеүектәр — ғәҙел хөкөм, закон вәкилдәре ул хәнйәрҙе күреп тороп тартып алманы. Быныҡ өсөн үтә ҙур батырлыҡ та кәрәкмәй ине.

Ябағаев. Батыр булһам, мин Ҡәҙерйән Ябағаев та булмаҫ инем. Ябағаев булмаһам, был тиклем ғазапланмаҫ та инем.

Йәғәфәр. Ә бүтәндәр?

Ябағаев. Бүтәндәрҙә минең эшем юҡ. Шунан һуң минең берәүгә лә зыяным теймәне.

Йәғәфәр. Ә файҙаң?

Ябағаев. Файҙам да теймәне. Үҙең... үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, минән ниндәй файҙа сыҡһын? Мин — буш, буп-буш. Бына тирем, һөйәктәрем бар, ә эстә буш. Башым да буш. Берәй фекер килеп инһә, башым урман кеүек яңғырап китә. *(Күкрәген күрһәтә.)* Бөтәһе лә ҡара көйҙө бында.

Йәғәфәр *(башын эйә)*. Һинең тауышың да ҡайҙандыр шомло замандан килгән төҫлө.

Ябағаев. Ҡыҙған мине, Йәғәфәр, зинһар, ҡыҙған! Кисер, ярлыҡа!

Йәғәфәр. Туҡта, саҡ ҡына уйларға бир.

Ябағаев. Уйлап торма. Аҡылың һалҡын һинең. Йөрәгеңдән һора, йөрәгеңдән! Ул мәрхәмәтле! Ғәфү ит

мине, Йәғәфәр Моратшин! *(Теҙләнә.)* Рухыма азатлыҡ бир! Күмергә ҡалған йөрәгем төтәмәй генә янып бөтһөн! Миһырбанлы бул! Гонаһымдан ҡоткар мине! Ваҡыты еткәс, тыныс ҡына донъя ҡуйырға рөхсәт ит миңә! Ап-аҡ һаҡалым буйлап аҡҡан күҙ йәштәрем менән инәлеп һорайым — кисер мине! *(Илай.)* Шул изгелекте эшләһәң, үҙеңә сауап булыр. Мин хәҙер гонаһҡа ла, сауапҡа ла ышанамын. Ярлыҡа гонаһымды. Йоло мине. Йолоһаң, иртәгә үк китәм бынан. *(Башын күтәрә, таң яҡтыһы күрә.)* Йәғни бөгөн үк...

Йәғәфәр. Тор! Ҡарарға сирҡаныс.

Ябағаев *(үҙен ҡарап ала)*. Эйе, шулайҙыр шул. Шулайҙыр.

Йәғәфәр. Тор, тим бит.

Ябағаев. Торам, торам. Быуындар ебәрмәй. *(Ауырлыҡ менән тора.)*

Йәғәфәр. Бына нәмә, Ҡәҙерйән Ябағаев, һинең гонаһтарыңды ярлыҡарға мин һиңә рус побы түгел. Бар, хоҙайыңа тапшырып, кит үҙ юлыңа.

Ябағаев. Ошо көйөмө? Нисек килдем, шулаймы?

Йәғәфәр. Минең турала бүтәнсә уйлама.

Ябағаев. Нисек уйламайһың инде? Бер нәмә лә үҙгәрмәне лә баһа.

Йәғәфәр. Үҙгәрҙе. Мин дә һинең хаҡта онотторға тырышырмын. Онотормон.

Ябағаев. Тимәк, ғәфү итәһең? Тимәк, йолойһоң?

Йәғәфәр. Үҙеңә нисек кәрәк, шулай аңла... *(Ҡул һелтәй.)*

Ябағаев *(ҡулдарын һуҙып ынтыла, туҡтай)*. Аңлайым, тап шулай аңлайым. Рәхмәт һиңә! Рәхмәттәр уҡыйым һиңә!

Йәғәфәр *(башын күтәрмәй генә)*. Хуш.

Ябағаев. Эйе, хуш, хуш. Хәҙер мин үҙемдең бисара ғүмеремә үҙем хужа. *(Арты менән ишеккә бара, туҡтай. Айгөлгә өндәшә.)* Бына донъя шулай ул, ҡыҙым...

Айгөл. Бөтә донъямы? Бөтә, бөтә донъямы?

Йәғәфәр. Үҙебеҙ эшләгән этлектәрҙе шул донъяға япһарыуҙан ҡасан туҡтарбыҙ?

Ҡәҙерйән ишек төбөндә туҡтай. Тыш яҡтан асыҡ тәҙрәгә Пиккио килеп башын тыға. Уны күрмәйҙәр.

Ябағаев. Беҙ башҡаса көрешмәбеҙ, Йәғәфәр. Мин һинең күҙеңә бүтәнсә салынмаҫҡа тырышырмын. Әгәр асыуланмаһаң, тағы бер нәмә һорар инем...

Йәғәфәр. Һора.

Ябағаев. Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылда һин, ауыл хужалығы белгесе булараҡ, юғары поста, яуаплы урында инең...

Йәғәфәр. Әйтәйек, шулай.

Ябағаев. Коммунист инең.

Йәғәфәр. Коммунист инем.

Ябағаев. Әгәр ундай эштә эшләмәһәң, әгәр коммунист булмаһаң, һиңә, бәлки, ел-ямғыр ҡағылмаҫ та ине.

Йәғәфәр. Бәлки, ҡағылмаҫ та ине. Шунан?

Ябағаев. Шунан, тип ни... Миңә мәғлүм булыуынса, аҡланып ҡайтҡас, һине кире элекке эшеңә саҡырғандар. Бармағанһың. Быныһын аңлауы ҡыйын да түгел.

Йәғәфәр. Барманым. Рәнйенем. Хәтерем ҡалды, шуға барманым. Ошонда умартасы булып килдем.

Ябағаев. Ә барлыҡ әрнеүҙәреңде, рәнйеүҙәреңде онотоп, партия сафына ҡайтҡанһың...

Йәғәфәр. Бутайһың, Ябағаев! *(Һикереп тора.)* Һин әйткән «юғары пост», «яуаплы урын» менән коммунист исемен бәрәбәр ҡуйырға ярамай. Ярамай! Минең аңлауымса, миңә ҡалһа, партия сафында булыу үҙе, ҡәҙерен белгән кеше өсөн, иң юғары пост! Ҡалғандары килә лә, китә лә... Был — бер. Икенсенән, әгәр шул заман партия сафынан минең кеүектәр китеп бөтһә, һинең кеүектәр, йәғни Ҡәҙерйәндәр, унда күпселеккә әйләнер ине. Үҙең уйлап ҡара, нимә булыр ине ул саҡта?

Ябағаев. Хәҙер мин фирҡәле түгелмен.

Йәғәфәр. Хәҙерге Ҡәҙерйән иҫәпкә инмәй. Мин тегеһен әйтәм... Аңлатып бирә алдыммы?

Ябағаев. Төшөндөм. Рәхмәт. Хушығыҙ. *(Китә.)*

Айгөл *(үҙ алдына)*. Нимәһелер әллә һәйбәт, әллә ҡыҙғаныс был бабайҙың.

Пиккио *(тәҙрә аша)*. Кисерегеҙ, синьорҙар, ирекһеҙҙән, һүҙегеҙҙең аҙағын ишетергә тура килде.

Йәғәфәр. Тыңлағас, ишетелер шул.

Пиккио. Эйе, синьорҙар, һеҙ күңелһеҙ ваҡытты, яман йылды хәтерләнегеҙ. Шәхес... культ... репрессия, донос!

Йәғәфәр. Ә һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

Пиккио. Беләбеҙ, синьор Йәғәфәр, бер планетала йәшәйбеҙ бит.

Йәғәфәр. Белгәнегеҙҙе бында инеп һөйләгеҙ.

Пиккио. Улай ҙа була. *(Ишектән үрап инә.)* Ул йылда беҙҙең газеталар яҙғанды уҡыһағыҙ, радио һөйләгәнде тыңлаһағыҙ, түбә сәстәрегеҙ үрә торор ине. Беҙ ул хәбәрҙәрҙең яртыһына ғына ышандыҡ. Шулай ҙа, бахыр Рәсәй тағы ла ҡанға батҡан икән, тип бик йәлләнек һеҙҙе. Шул утыҙ етенсе йылдағы хәлдәрҙе быйыл тағы ҡабат-ҡабат һөйләнеләр. Тағы йәлләнек.

Йәғәфәр. Ныҡ йәлләнегеҙме?

Пиккио. Һәләк ныҡ. Кешеләр урамда бер-береһен йығып һуйһындар ҙа, нисек йәлләмәйһең шуларҙы? Һуйылғандарҙы, тим... Ярай әле һеҙ иҫән ҡалғанһығыҙ.

Йәғәфәр. Улай ныҡ йәлләгәс, ҡыйын булғандыр инде һеҙгә.

Пиккио. Ҡыйын булды, бик ҡыйын булды. Үтә ҡыҙғандыҡ. Әле лә ҡыҙғанабыҙ. Беҙ, итальяндар, ифрат әҙәм йәнле халыҡ бит.

Йәғәфәр *(Пиккионың ҡаршыһына килә)*. Бына нәмә, синьор Пиккио: һеҙ минең ҡунағым, етмәһә, кейәү тейешле кеше.

Пиккио. Һеҙ миңә ҡайнаға.

Йәғәфәр. Эйе, мин ҡайнаға, һеҙ кейәү. Урынығыҙ түрҙә. Ҡәҙерегеҙҙе белеп кенә ултырығыҙ шунда.

Пиккио. Рәхмәт. Рәхмәт, ҡайнаға.

Йәғәфәр. Әммә бынан һуң, синьор, яңылышып та, алдан уйлап та, йыуатырға теләп тә, илатырға теләп тә беҙҙең яраларға, яңы уңалып килгән иҫке яраларға, ҡағылмағыҙ! Сөнки утыҙ етенсе йылы ла, шәхесе лә, синьор, культы ла үҙебеҙҙеке. Ғазаптары ла, ҡара ҡайғылары ла, ҡанлы йәштәре лә үҙебеҙҙеке!.. Һыҙлауҙары үҙебеҙҙеке булғас, тимәк, һыҡтауҙары ла үҙебеҙҙеке. Ҡағылмағыҙ беҙҙең иҫке яраларға! Ҡағылмағыҙ, синьор! Беҙҙе былтыр ҡыҫҡанға, быйыл ҡыҫҡырмағыҙ. Беҙгә ҡушылып ялған һалҡын күҙ йәштәре менән иламағыҙ. Барығыҙ, ана, айыу тиреһенә төрөнөп йоҡлағыҙ. Иртә әле!

Пиккио. Урынһыҙ ҡатнаштым. Кисерегеҙ, синьор. Мин былай һеҙҙең хәтерегеҙҙе ҡалдырырмын тимәгәйнем.

Йәғәфәр. Бер юлға ғәфү итәм.

Пиккио *(һүҙҙе икенсегә бороға теләп)*. Әле айыу тигәс, иҫемә төштө. Кисә анау ояла кескәй генә айыу балаһы бар ине. Шундай ирмәк. Йомғаҡ кеүек тәгәрәй. Ул ни...

Йәғәфәр. Уның хаҡы юҡ...

Пиккио. Мин былай ғына әйтәм, хаҡын һорамай ғына...

Йәғәфәр. Бүләк тә ителмәй!

Пиккио. Һеҙ мине аңламанығыҙ, синьор Йәғәфәр. Аңлата белмәнем...

Йәғәфәр. Аңланым. Ул айыу балаһы хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһы. Ғаилә ағзаларын беҙ һатмайбыҙ ҙа, бүләк тә итмәйбеҙ.

Ут һүнә.

## Алтынсы картина

Шул уҡ өй алды. Аласыҡ бағанаһында Илдарҙың мылтығы, патронташы эленеп тора. Көн үҙәге яҡынлашып килә. Ябағаев, Ричард.

Ябағаев. Ҡарт көнөмдә ни эшләптер мылтыҡ атырға өйрәнге килеп китте. Әллә, тим, үҙемдә һунарсы олатайҙарҙың ҡаны ҡуҙғалып тора инде.

Ричард. Оҙаҡламай өйрәк ата башлаясаҡбыҙ. Һунарсы ҡаны алдан һиҙә уны.

Ябағаев. Ахыры, шулайҙыр. Тик шул мылтығын ғына тотоп өйрәнелмәгән.

Ричард. Дәртең булғас, Ҡәҙерйән ағай, мин һине «һә» тигәнсе өйрәтәм. Ана, мылтыҡ та бар. *(Мылтыҡты, патрондарҙы ала.)* Бына быныһы ҡуш көбәкле мылтыҡ, быныһы патрондар...

Ябағаев *(мылтыҡты ала ла кире бирә)*. Тос ҡына икән.

Ричард. Мылтыҡтың ҡоролошон һөйләп торайыммы?

Ябағаев. Һөйләп торма, өйрәт кенә. Ҡорорға, тоҫҡарға, йәнә атырға өйрәт.

Ричард. Бына ошолай асып, бынау еренә патрон һалаһың. *(Аса.)* Бер патроны ла бар икән. Хәҙергә алып торайыҡ. Бынау ярыҡҡа анау мушка тигән бәләкәс кенә төймәне тура килтереп тоҫҡайһың. Шунан яй ғына бынау курок тигәнен тартаһың. Бына шулай. Төшөндөңмө?

Ябағаев. Атылып китһен өсөн, бынау нәмәһенә баҫырға кәрәкме?

Ричард. Эйе. Яйлап ҡына, ашыҡмай ғына... Әгәр алыҫҡа атырға кәрәк булһа...

Ябағаев. Әллә ни алыҫҡа ата алмам инде мин,..

Ричард. Мин күрһәткәнде эшләп ҡара әле. Анау бағана ботағына эленгән көршәккә тоҫҡа.

Ябағаев. Анауғамы?

Ричард *(артынан килеп ҡарай)*. Аҫҡа тоҫҡайһың. Баяғы мушка тигәне көршәктең ҡап уртаһына тура килһен.

Ябағаев. Хәҙер ырғағына баҫайыммы?

Ричард. Баҫ.

Ябағаев. Ни эшләп шартламай ул?

Ричард. Ҡоролмаған, көпшәһендә патроны юҡ. Тағы бер ҡабатлайыҡ.

Ябағаев. Шулаймы?

Ричард. Ниңә ҡалтыранаһың? Һунарсының нервылары ныҡ булырға тейеш. Һин нервыларыңды сыныҡтыр.

Ябағаев. Әлбиттә, сыныҡтырырмын. Әлбиттә... *(Патронды ала.)* Ошоноң берәүһе үлтерәме?

Ричард. Был хатта бүрене, айыуҙы үлтерә.

Ябағаев. Мә, урынына һалып ҡуй.

Ричард. Мылтыҡты ҡороп ҡуйыу ярауын ярамай ҙа... *(Ҡора.)* Әйҙә, элеккесә, үҙенекенсә ҡалһын. *(Мылтыҡты, патронташты урынына элә.)* Өйрәк осоро башланғас, мин һиңә әйтермен. Бергә йөрөрбөҙ.

Ябағаев. Ярай, ярай... Бик рәхмәт. *(Ричардтың арҡаһынан ҡаға.)* Һин яҡшы күңелле бала.

Ричард *(ситкә тайшана)*. Мин арҡанан һөйгәнде яратмайым, Ҡәҙерйән ағай... Һынған ҡабырға ауырта.

Өйҙән Айгөл сыға.

Айгөл. Ричард Галин?! Өс көн буйы ҡайҙа китеп олаҡтың? Мин һине һағынып бөттөм.

Ричард ҡапыл Айгөл яғына ынтыла. Ябағаев, аҡрын ғына барып, мылтыҡты ала ла шым ғына сыға.

Ричард. Һағынмағанһыңдыр ҙа...

Айгөл. Ысын! Ниңә килмәнең?

Ричард. Артымдан юллап килеп, больницаға илтеп яптылар. Бөгөн тағы ҡастым.

Айгөл. Ә ҡасҡынды ни эшләтәләр, беләһеңме?

Ричард. Әйттеләр инде: тағы ҡасһаң, милиция менән алдырып, каталажкаға яптырабыҙ, тинеләр.

Айгөл. Яралы булыу һиңә килешә, Ричард Галин! Үҙ яраларыңа торорлоҡ егет һин!

Ричард. Ә һин үҙеңдең ниндәй һәйбәт ҡыҙ икәнеңде белһәң, аҡылдан яҙыр инең.

Айгөл *(шарҡылдап көлә)*. Улай булғас, белмәй тороуым яҡшыраҡ.

Ричард *(гипстағы ҡулын ҡосаҡлап ултыра)*. Больницала мин иланым. Яңғыҙлыҡтан... йәнә алда торған яңғыҙлыҡты уйлап...

Айгөл *(Ричард эргәһенә бүрәнәгә ултыра)*. Мин «Айгөл дәфтәре»н уҡып сыҡтым. Баштан-аяҡ.

Ричард. Көлдөңмө?

Айгөл. Башта көлөргә иткәйнем дә, ҡапыл күңелем тулып китте. Һуңынан, нисектер, яманһыу ҙа, бер аҙ ҡурҡыныс та булып ҡуйҙы.

Ричард. Ысынмы?

Айгөл. Ысын булмай. *(Яттан уҡый.)*

Мин, ҡабаттан тыуыр булһам,
Шишмә булып тыуыр инем,
Сылтыр-сылтыр наҙлап ҡына
Аяғыңды йыуыр инем.
Йөҙҙәреңә генә түгел,
Эҙҙәреңә табынамын,
Көнгә ҡырҡ тапҡыр һүнеп,
Ҡырҡ тапҡыр ҡабынамын.

Ал мине, күк! Ай янында
Йондоҙ булып янайымсы.
Йә осҡанда, ҡапыл һүнеп,
Ап-аҡ күлгә ҡалайымсы.

Ричард. Һин хатта яттан беләһең?

Айгөл. Эйе, Ричард Галин, мин һине яттан беләм. Ул дәфтәрҙе — «Айгөл дәфтәре»н ни эшләтәһең?

Ричард. Ҡул төҙәлгәс тә, сумкаға һалып йөрөтәм.

Айгөл. Бир миңә уны, бүләк ит. Үҙем менән Италияға алып китәйем. Битен асҡан һайын, һине, бабайымды, ошо имәнде — бөтәһен дә, бөтәһен дә иҫкә төшөрөрмөн.

Ричард. Ҡасан китәһегеҙ?

Айгөл. Бөгөн көндөҙ үк китәбеҙ. Әсәйемдәр сумаҙандарын йыйып бөттө инде.

Ричард. Ә мин? Мин белмәй ҡалған булһам?

Айгөл. Мин үҙем һине эҙләп тапҡан булыр инем.

Ричард. Тимәк, «Айгөл дәфтәре»нең беренсе бүлеге ошонда бөттө. Ал һин уны. Ул һинеке, бөтөнләйгә һинеке. Тик шуны ғына үтенеп һорайым: беҙҙе онотҡас, утҡа яҡ һин уны. Күҙ көйөгө булып туҙанда аунап ятмаһын. Италия туҙанында аунап...

Айгөл. Үҙем туҙанда аунаһам да, уны аунатмам...

Ричард. Үҙең дә аунама, Айгөл...

Айгөл *(нәҡ тәүге картиналағыса, Ричардтың алдына теҙләнә)*. Тәпәй баҫҡандан бирле, был ерҙә беҙ гел бергә йөрөнөк. Башта етәкләшеп йөрөнөк, һуңынан былай ғына. Ун ете йыл буйына һин мине хатта бер тапҡыр этәреп тә ебәрмәнең. Мин һине йәберләнем, күп йәберләнем. Шулар өсөн бөгөн кисер мине, Ричард... Ричард Галин... Айырылышыу алдынан һиңә әллә ниндәй һәйбәт, мәңге онотолмаҫлыҡ һүҙҙәр әйткем килә.

Ричард. Ундай һүҙ бирәү генә инде. Әйт шуны...

Айгөл. Миңә ни тиклем, ни тиклем ауыр икәнен белһәң ине. Мин бер Айгөл түгел, ике Айгөл. Уң ҡулым төҙәткәнде һул ҡулым боҙа, уң күҙем һоҡланғанда, һул күҙем нәфрәтләнә, уң ҡолағым йыр ишеткәндә, һул ҡолағым һыҡтау ишетә. Ҡыйын миңә...

Ричард. Китмә, Айгөл. Һиңә нимә ҡалған ул сит донъяла?

Айгөл. Унда минең әсәйем буласаҡ. Әсәй кеше үҙе бөтөн бер донъя ул.

Ричард. Бынау тауҙарҙан, урмандарҙан, һуҡмаҡтарҙан, күктәрҙән башҡа, беҙҙән башҡа ни эшләрһең һин унда?

Айгөл. Мин ул хаҡта уйламаҫҡа, бөтөнләй уйламаҫҡа тырышам. Мин бары әсәйемде уйлайым. Бер-беребеҙҙән башҡа йәшәү беҙгә мөмкин түгел.

Ричард. БыҒаса мөмкин ине бит.

Айгөл. Бынан ары мөмкин түгел.

Ричард. Ни өсөн шулай?

Айгөл. Белмәйем. Тик мөмкин түгел. Мин шулай хәл иттем.

Ричард. Мин һине бер тигәндә артыңдан юллап барып табасаҡмын барыбер.

Айгөл. Ә хәҙергә хушлашырға тура килә, сыҙам, сабыр дуҫым минең... Йә күрешербеҙ, йә юҡ... Күрешербеҙме, юҡмы? Әйҙә таш менән юрайыҡ.

Ричард. Юҡ, юрамайыҡ! Юрауға, ырымға, сихырға ышанмайым мин! Ышанмайым мин! Бары үҙемә генә ышанам. Мин һине табасаҡмын. Башҡа планетаға китһәң дә, табасаҡмын! Адресың йөрәгемдә: Италияно, Милано... Милано, Италияно... *(Тау яғына сығып йүгерә.)*

Зәлифә менән Миңлекәй килә. Улар ябай, ләкин матур кейенгәндәр.

Миңлекәй *(һөйләнеп килә)*. Бынау Ҡара ҡаяға яҡынлаша башлаһам, йөрәгем леп-леп-леп тибергә тотона...

Зәлифә. Бер һүҙҙе күп һөйләйһең, Миңлекәй.

Миңлекәй. Һағынып һөйләргә генә ҡалғас...

Инәләр.

Зәлифә. Һаумы, ҡыҙым. *(Текләп ҡарай.)* Ниңә былай төҫөң ҡасҡан, әллә ауырыйһыңмы?

Айгөл. Ауырымайым. Беҙ бит китәбеҙ, Зәлифә әхирәт апай.

Зәлифә. Ҡайҙа?

Айгөл. Италияға. Бөтөнләйгә.

Миңлекәй. Италияға? Бөтөнләйгә? Һиңә ни етмәгән унда йыйын буржуй араһында? Бына бер кәмит! Нимә ҡарай теге ағас аяҡ мәжнүн?

Зәлифә. Беҙ бик сәпсәләнеп тә китмәйек әле, Миңлекәй. Илсенең суҡмары — сабырлыҡ, ти.

Миңлекәй. Сабыр булабыҙ, тип, бынау бөтә тирәяҡты йәмләп торған аҫыл бер затты ер аяғы — ер башы ергә үҙ ҡулыбыҙ менән биреп ебәрәйекме ни инде?

Айгөл. Мин бит әсәйем менән бергә буласаҡмын.

Миңлекәй. Ғүмер буйы әсәйеңдең итәгенә тотоноп тора алмаҫһың. Ишегеңде асып, урамға сыҡҡас та, ҡайҙа барырһың, кемгә һүҙ ҡушырһың? Уйлағаның бармы шуны?

Айгөл. Юҡ.

Миңлекәй. Бар, уйлай йөрө. Әсәйеңә әйт, бында сыҡһын.

Айгөл *(аптырап иңбаштарын йыйыра. Үҙ алдына)*. Ниңә шулай үсегәләр икән былар?..

Айгөл өйгә инеп китә.

Зәлифә. Һин үтә елкенеп китеп, эште боҙоп ҡуйма.

Миңлекәй. Беләбеҙ. Тел үҙебеҙҙеке. Кәрәк саҡта ут сәсәбеҙ, кәрәк саҡта боҙ ялайбыҙ.

Зәлифә. Тик ут менән боҙҙо бутап ҡуйма.

Миңлекәй. Шулай ҙа һүҙҙе һин башла. Йә ҡапыл тоҡанып китермен.

Зөлхәбирә өйҙән сыға.

Зөлхәбирә *(каушап)*. Килеп ҡалай яҡшы иткәнһегеҙ. Һаумыһығыҙ?

Баш эйеп иҫәнләшәләр.

Зәлифә. Һаумы, Зөлхәбирә?

Миңлекәй. Иҫәнме?

Зәлифә. Китергә йыйынаһығыҙ икән. Хәбәребеҙ һуңлағандыр инде, былай булғас.

Зөлхәбирә. Бәлки, һуңламағандыр.

Зәлифә. Элекке ете дуҫың араһынан икебеҙ илсе булып килдек. Һине ғәфү итергә тип ебәрҙеләр беҙҙе.

Зөлхәбирә. Рәхим итегеҙ! Моғайын, килерҙәр, тип көткәйнем. Бына рәхмәт һеҙгә! Күңелем тынысланып китәсәкмен.

Миңлекәй. Рәхмәтеңде әйтергә ашыҡма әле, Зөлхәбирә. Һиңә бер шартыбыҙ бар.

Зөлхәбирә. Һеҙ, әлбиттә, үтәй алмаҫлыҡ шарт ҡуймаҫһығыҙ. Үтәрлек шарт булыр. Әйтегеҙ.

Зәлифә. Беҙ етәүләп шулай хәл иттек: әгәр һин бында ҡалһаң, һине ғәфү итәбеҙ. Ҡалыр ниәтең булһа, уңайһыҙланма, әйт. Ҡурҡма, һиңә бармаҡ та янатмабыҙ.

Миңлекәй. Һис ваҡыт, һис кемдән битәр һүҙе ишетмәҫһең, Зәлифә. Ете дуҫың шул ҡарарға килде.

Зөлхәбирә. Һеҙ бит яҡшы беләһегеҙ: ҡаяһынан ҡубып, түбәнгә әллә ҡайҙа тәгәрәгән ташмын мин. Ҡайтыр юлым юҡ минең.

Миңлекәй. Ҡайтҡанһыңсы.

Зөлхәбирә. Йәнемдең яртыһы тегендә. Унда ике балам, ирем, йорт-йыһазым, донъям бар. Унда үткән ун өс йыл ғүмерем бар, ә бында? Һеҙҙең нәфрәттән башҡа нимә күрҙем мин бында? Нимә күрҙем?..

Миңлекәй. Бәй, балаларыңды, ireңде бында күсер. Бөтәбеҙгә лә урын етер. Нәфрәт тә бөтөр.

Зөлхәбирә. Минең алға ундай шарт ҡуйыу — шәфҡәтһеҙлек! Шартығыҙға күнә алмайым. Ярлыҡамаһағыҙ, шул көйө, ләғнәтләнгән көйө, китермен. Ер менән күк араһында аҫылынып ҡала алмайым мин. Ел өргән яҡҡа күсеп йөрөргә мин болот түгел. Кеше мин! Үҙем теләгән яғыма барам.

Зәлифә (*белмәмешкә һалышып*). Ә Айгөлөң?

Зөлхәбирә. Ҡыҙым минең менән китә. Алып китәм.

Миңлекәй. Уныһын ҡарап ҡарарбыҙ әле.

Зөлхәбирә. Бала минеке.

Зәлифә. Етем өйрәк бәпкәһенә йомортҡа һалған өйрәк инә түгел, ултырып бала сығарған тауыҡ — инә. Айгөлгә Йәғәфәр хужа, беҙ хужа, бына бынау йорт хужа.

Зөлхәбирә. Ә беҙҙе мәктәптә «кеше үҙенә үҙе хужа» тип өйрәттеләр тағы.

Зәлифә. Башҡа һабаҡтарҙы онотһаң да, быныһын онотмағанһың икән.

Арттараҡ Йәғәфәр уҙып бара.

Миңлекәй. Йәғәфәр ағай!

Йәғәфәр яҡын килә.

Йәғәфәр. Һаумыһығыҙ, ҡарындаштар! Оҙатырға килдегеҙме? Бик һәйбәт иткәнһегеҙ.

Миңлекәй. Оҙатырға ла, оҙатмаҫҡа ла.

Йәғәфәр. Үтә өҙөп, төшөндөрөп һөйләйһең, Миңлекәй.

Миңлекәй. Ә һин, мыйыҡлы мәжнүн, аяҡ үрә төш күреп йөрөйһөң. Айгөлдө шулай ултыртып ебәрәбеҙме ни инде?

Йәғәфәр. Бала үҙе шулай хәл итте.

Миңлекәй. Хәл итте, имеш, нимә хәл итһен ул? Баланың башында әле Ирәмәл түбәһендә уйнаған елдәр уйнап тора.

Айгөл сыға, һуңғы һүҙҙәрҙе ишетә.

Зөлхәбирә. Әсәне баланан, баланы әсәнән айырырға берәүҙең дә хаҡы юҡ. Юҡ хаҡы! Күрһәтегеҙ миңә шундай закон!

Зәлифә *(күкрәгенә ҡулын ҡуя)*. Беҙҙең закон бына бында.

Айгөл. Бәхәсләшмәгеҙ! Мин үҙем хәл итәм, әсәйемдән айырылмаҫҡа хәл итәм.

Зәлифә *(Айгөл эргәһенә килә)*. Унда барғас, кем булырһың һуң һин, балам?

Айгөл. Айгөл булырмын.

Зәлифә. Айгөл булырһың. Әммә ниндәй Айгөл? Ул тормош кем итер һине — ҡолмо, ҡурсаҡмы? Ҡайһыһы итһә лә, аяныс. Бына шуны уйлап йән өҙгөләнә.

Айгөл. Мин һәйбәт булырмын, Зәлифә әхирәт апай. Ант итеп әйтәм — һәйбәт булырмын! Һеҙ ҙә асыуланмағыҙ. Татыу ғына айырылышайыҡ. Элеккесә...

Миңлекәй. Беҙ һине ебәрмәйбеҙ, Айгөл! Һин беҙҙеке. Етебеҙ ҙә юлығыҙға сығып, Зөлхәбирә, машинағыҙ алдына һуҙылып ятырбыҙ, әммә баланы бирмәбеҙ. Ер менән күк араһында берәү аҫылынып торғас та еткән. Үҙ хазинабыҙҙы һаҡлап ҡалырға беҙҙең көсөбөҙ етер! Киттек, Зәлифә!

Ҡапыл боролоп сығып китәләр.

Зөлхәбирә. Кеше эшенә, кеше тормошона шулай һөмһөҙ килеп тығылыу — ниндәй тупаҫлыҡ, наҙанлыҡ! Ниндәй кешелекһеҙ ҡырағай әхлаҡ, әрһеҙ ғәҙәт! Минең өсөн былар бөтөнләй ят хәҙер. Мин уларҙың тормошона, ирһеҙ тапҡан балаларына ҡатнашмайым бит.

Йәғәфәр. Зөлхәбирә һылыуым, үҙ алдыңа теләһәң ни уйла, әммә минең алда беҙҙең әхлаҡҡа тел тейҙермә. Һиңә ярамай ул! *(Күҙен һөртә-һөртә боролоп китә, Айгөл уның beләгенә аҫылына.)*

Айгөл. Бабайым, ҡәҙерлем. Һин миңә асыуланма. Әсәйем миңә бик кәрәк бит!

Сығалар.

Зөлхәбирә *(оҙаҡ һүҙһеҙ тора)*. Китергә, хәҙер үк китергә кәрәк. Һәр кем үҙенсә хаҡлы. Ә мине рәнйетеп, йәберләп ебәрәбеҙ тип берәү ҙә уйламай. Хатта ағайым да... Күпме рәнйеп, йәберләнеп, яфаланып китәм бит мин тыуған еремдән.

Ике сумаҙан күтәреп, Пиккио сыға.

Пиккио. Тимәк, һау бул, Күсәрбай! Әссәләмәғәләйкүм, Милано! Синьор Йәғәфәр әйтте, оҙаҡламай машина киләсәк, тине. Нәмәләрҙе сығарып ҡуяйыҡ.

Зөлхәбирә. Эйе, китергә ваҡыт.

Пиккио. Һин тағы борсолғанһың. Юлда мин һине Неаполь йырҙарын йырлап йыуатырмын, минең гүзәл синьорам!

Зөлхәбирә. Урал илатҡан йәнде Неаполь йыры йыуата алмаҫ шул.

Пиккио. Иң ҡара болот та бер килеп тарала, хазинам минең! Бер хазина урынына ике хазина алып ҡайтып бара Карло Пиккио. Ой, Пиккио — ир-егет!

Айгөл үҙ төйөнсөгөн сумаҙандар эргәһенә сығарып ҡуя. Баҫып ҡала.

Зөлхәбирә. Шатлығыңды эсеңә һыйҙырыбыраҡ, иплерәк ҡыланырға тырыш, Карло. Күрәһең бит, бөтәбеҙ ҙә мәйет оҙатҡандағы кеүекбеҙ.

Пиккио. Аңлайым: юлдашың һуҡыр булһа, күҙеңде ҡыҫ.

Зөлхәбирә. Эйе.

Пиккио. Ярай, ярай... Әммә Айгөл үҙенең сибәрлеге менән бөтә Миланоны хайран ҡалдырасаҡ. Баһалап бөтә алмаҫлыҡ хазина ул. Уның хаҡы миллион, ун миллион, йөҙ миллион!

Зөлхәбирә. Ниңә һин шулай, Карло, бөтә нәмәгә лә хаҡ ҡуяһың? Хатта кешегә, хатта сабый балаға?

Пиккио. Беҙҙә генә түгел, бында, Советта ла, иң ҡиммәтле капитал — кеше, тиҙәр ине бит. Шуға ғына әйтәм. Үҙең беләһең, итальяндар матурлыҡты баһалай ала.

Айгөл *(атылып алға сыға)*. Нимә һеҙ, синьор Пиккио, мине Италияға илтеп һатырға уйлайһығыҙмы ни? Ни һөйләй ул, әсәйем? Ниңә шундай һүҙ әйтә ул?

Зөлхәбирә, Пиккио ҡапыл аптырап ҡалалар.

Пиккио. Һатыу? Алла һаҡлаһын? Әҙәм һатырға, хоҙайға шөкөр, Италия ҡырағай ил түгел. Һин шундай матурһың, синьорина Айгөл, тимәк, айҙағы гөл — һинең ҡулыңды һорап, миллионер улдары алдыңа килеп баш эйәсәктәр. Ҡатын-ҡыҙ өсөн иң юғары чин — матурлыҡ. Беҙ, ирҙәр, уның ҡаршыһында ҡалтырана-ҡалтырана теҙ сүгәбеҙ. Һин ундан берҙе, йөҙҙән берҙе үҙең һайлап аласаҡһың.

Зөлхәбирә *(тыныс)*. Етер. Карло, ошонда туҡта.

Пиккио. Әйтеп кенә бөтөрәм дә... Шунан һин бөтә Миланоға, хатта бөтә Италияға мәшһүр миллионерша буласаҡһың. Бына ниндәй күркәм тормош көтә һине.

Айгөл. Тимәк, йә ҡурсаҡ, йә ҡол? Йә ҡол, йә ҡурсаҡ?

Зөлхәбирә. Тыңлама һин уны. Шул миллиондар менән һаташҡан ул.

Айгөл. Юҡ, әсәйем, тыңламай булдыра алмайым. Зәлифә әхирәт апайым да шуны әйтте. Мин ҡурҡам! Ҡурҡам мин, әсәй!

Пиккио. Ниндәй сәйер халыҡ был? Бүләк бирә, бүләк алмай, үҙе ярлы, үҙе миллиондан ҡурҡа.

Зөлхәбирә. Карло!

Айгөл. Ялған! Беҙ ярлы түгел! Бына минең генә ни саҡлы мөлкәтем бар! *(Төйөнсөгөн сумаҙандар янынан алып ситкә ырғыта.)*

Зөлхәбирә. Ярһыма, ҡыҙма, уның һөйләгәне буш хыял. Ул шундайыраҡ кеше.

Айгөл. Ул уйлағанын һөйләй, күрергә теләгәнен һөйләй... Синьор Пиккио бер ваҡытта ла алдашмай.

Пиккио. Карло Пиккио алдашмай.

Айгөл. Ә һин һуң, әсәй, нимә, ниндәй тормош вәғәҙә итәһең?

Зөлхәбирә. Яҙғаны булыр.

Төрөлгән айыу тиреһе, ук-йәйә күтәреп, Йәғәфәр сыға.

Айгөл. Юҡ, әсәй, тоҡҡа һалып ҡына алып китергә мин күҙе асылмаған айыу балаһы түгел! Күҙе асылған айыу балаһы мин! Синьор Пиккио асты минең күҙемде. Баһам түбәнерәк булһа ла, тамыр йәйгән еремдә ҡалам.

Имәнде килеп ҡосаҡлай.

Зөлхәбирә. Ярабби! Тағы ни ишетәм мин? Бер һелтәүҙә бөтә өмөттәремде селпәрәмә килтерәһеңме ни инде, балам? Ҡыҙым! Тотош бер юлы!

Айгөл. Кисер, әсәйем, үҙемде лә, һине лә алдаған булып сыҡтым. Кисер! Синьор Пиккио уйнап ҡына, шаярып ҡына һелтәгән таяҡ мине һушыма килтерҙе. Шиктәремде таратты. Рәхмәт уға!

Зөлхәбирә. Күңелем һиҙенә ине, шик-шөбһәләрем йөрәгемде тырнай ине. *(Күкрәгеп ыуа.)* Бына бынауҙан

бер минутҡа ла ҡанлы төйөр китмәне. Ахыры, шул бер килеп быуыр инде. *(Тыныс ҡына.)* Башҡаса өгөтләргә хаҡым да, инәлергә көсөм дә юҡ. Күрәсәгем шулдыр. *(Сумаҙанға ултырып битен ҡаплай, иламай, Айгөл килеп уны иркәләй.)*

Ҡара ҡая яғында атыу шартлай. Бөтәһе лә тертләп китә.

Йәғәфәр. Кемдер йәнә мылтыҡ менән шаяра.

Пиккио *(ирония менән)*. Тантаналы салют! Каруан юлға сыға!

Ричард *(алыҫтан ҡысҡырып килә)*. Бәлә! Бәлә! *(Инә, ҡулында мылтыҡ.)* Ҡот осҡос бәлә! Бәлә! Ҡәҙерйән Ябағаев атылды. Ҡара ҡая башында үҙен үҙе атты.

Йәғәфәр. Ниңә тыйманың? Ниңә мылтығын тартып алманың?

Ричард. Мин атыу тауышы ишетелгәс кенә күрҙем. Мин барып еткәндә, йән биргәйне.

Айгөл. Бисара бабай... Бер яҡшы һүҙ ҙә әйтеп ҡала алманым.

Йәғәфәр. Кем мылтығы?

Ричард. Теге әҙәмдеке. Өс аҙна эсендә бынау ике көбәктән ике үлем сыҡты. Ләғнәт төшһөн мылтығына ла, хужаһына ла! *(Мылтыҡты атып бәрә.)*

Зөлхәбирә *(ултырған еренән)*. Ҡарт үҙен борсоған һорауҙарға яуап тапҡан... Нindәй мәхшәр был? Китергә, китергә... Яй ғына, шым ғына, йомғаҡ кеүек йомарланып ҡына китергә кәрәк... *(Ҡысҡырып.)* Йомғаҡ булһам да, осо барыбер бында ҡала! Ҡыҙым!.. *(Тора, тирәяғына ҡарай.)* Башҡаса күрә алмаһам, бәхил булығыҙ. Ғәйепле булһам, мин генә түгел, һуғыш та ғәйепле. Бәхил булығыҙ!

Ирҙәр нәмәләрҙе күтәреп ала. Айгөл әсәһен ҡосаҡлай. Аҡрын ғына сығалар. Сит кеше инә.

Сит кеше. Мәйеттәр ашыҡмай. Ябағаев көтөп торор. Ә юлсыларҙың юлда булыуы яҡшы. Тереләр гел юлда. Гел эҙләйҙәр, табалар, юғалталар. Хатта тапҡанда ла юғалталар, юғалтҡанда ла табалар. Үҙҙәрен табалар... Ричард Галин әйтмешләй, Айгөл дәфтәренең бе-

ренсе өлөшө тамамланды. Алда ни булыр, уныһы билдәһеҙ. Ә хәҙергә Айгөлдөң нимә юғалтып, нимә тапҡанын үҙегеҙ күрҙегеҙ. Әйткәнемсә, мин уйынға ҡатнашманым. Берәүҙе лә илатманым да, йыуатманым да... Сөнки мин — сит кеше... Ниңә тағы килеп индем һуң әле мин бында? Ә... үҙемдең шул көйө иҫән-һау икәнемде күрһәтер өсөн инде. Хушығыҙ. Ары китәм. *(Юҡ була.)*

Айгөл артына боролоп ҡарай-ҡарай йүгереп инә. Уға Ричард эйәргән.

Айгөл *(артына әйләнеп)*. Мин һине, әсәйем, тау башынан ҡарап ҡалам. Унан алыҫ күренә! Унан бик алыҫ күренә. Мин һине шунан ҡарап ҡалам.

Йүгереп үтәләр. Ут һүнә. Шунда уҡ тоҡана. Прологтағы тау башында Айгөл, Ричард.

Айгөл. Хуш, әсәйем! Мәңгегә китер өсөн генә ҡайтҡанһың икән. Хуш! Эсемдә ҡойондар уйнап ҡалды, әммә йөрәгемә зиһен биреп киттең. Мин ҙур үҫтем хәҙер. Бик ҙур үҫтем! Үҙемде түгел, инде һине ҡыҙғанам. Нисек түҙерһең һин?

Ричард. Ташморонға еттеләр.

Айгөл. Ташморондо үттеләр. Күҙҙән юғалдылар, күмелделәр. Хуш, әсәйем! Хуш! *(Илай.)*

Ричард. Һин илайһың?

Айгөл. Илайым.

Ричард. Тәртип юҡ был ер йөҙөндә.

Айгөл. Булырға тейеш. Булдырырға кәрәк уны!

Ричард. Ә һин илайһың.

Айгөл. Илайым. Бөтәһе өсөн дә бер юлы илайым. Ләкин күҙ йәштәрем аша салауат күпере күрәм мин, офоҡтан офоҡҡа һуҙылған алтын күпер күрәм. Һинең менән беҙ шул күперҙән үтеп, бейеккә, юғарыға күтәрелербеҙ. Алыҫҡа, бик алыҫҡа китербеҙ. Тик үткәндәрҙән ғәфү һорар өсөн кире әйләнеп ҡайтмаһаҡ ине. Ҡайтмаһаҡ ине, Ричард Галин!

Ут һүнә.

*1967*

## САЛАУАТ

*Трагедия*

ӨН АРАЛАШ ЕТЕ ТӨШ

ҠАТНАШАЛАР:

Салауат
Гөлнәзирә
Ану
Пугачев
Екатерина II
Язалаусы
Ҡәнзәфәр Усаев
Юлай Аҙналин
Уҡап
Байназар
Илеш
Петр
Мария
Иван Федулов
Есаул
Казак
Иҫәүән казак
Беренсе һаҡсы
Икенсе һаҡсы
Матс
Баиш
Шағир
Атамандар, казактар, башҡорт яугирҙары, ирҙәр, ҡатындар...

## ПРОЛОГ

Сәхнә алдына Шағир сыға. Ул йәш һәм ярһыу. Ут бары уға ғына төшә.

Шағир.

Мин — шағир. Минең йөрәгем
Ҡайнап торған ҡаҙан.
Урғыла мең йыллыҡ өмөт
Һәм мең йыллыҡ аҙап.

Сәселә унан йыһанға
Шатлыҡ осҡондары,
Һәм ултырып ҡала төпкә
Ҡайғы юшҡындары.

Мин — шағир. Ерем бар. Ерҙә —
Йөйҙәр, яралар...
Шул ерҙә дан усаҡтары
Дөрләп яналар.
Халҡым бар. Тарих ҡырынан
Үтмәҫ, ҡамғаҡ төҫлө.
Кескәй ул. Тик тығыҙ сырмалған
Ҡаты йомғаҡ төҫлө.
Мең йыл буйы үҙен үҙе
Сырмаған шулай,
Һәм тиҙ генә һүтелергә
Самаһы юҡ, буғай...

...Был фажиғә ике йөҙ йыл осҡан
Уҡ хаҡында булыр,
Рухыбыҙҙа оҙаҡ-оҙаҡ яныр
Ут хаҡында булыр.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Ике быуат монарҙары аша
Төш ҡатыш өн күрәм,
Хәтәр яуға өнөмдә мин керәм,
Толпарым, өр(ө)кмә!..
Толпарым! Һине үтә хәүефле
Юлдан үткәрәмен.
Шул шөһрәт, шул яҙаларҙы

Сөнки
Мин дә күтәрәмен...
Өр(ө)кмә, толпарым!
Өр(ө)кмә!

Шағир юғала. Ут тоҡана.

## ӨН

Асыҡ дала. Ҡалҡыулыҡ. Юл саты. Юл икегә айырылған ерҙә ҙур һоро таш ята. Таш өҫтөндә Язалаусы баҫып тора. Уның эргәһендә ерҙә Баиш тархан.

Баиш. Таш өҫтөндә, ахыры, бөркөт табышын талағандыр. Баш һөйәге ҡалған кейектең. Мәрәкә. Ҡош та үҙ ҡорбанын бейек ерҙә тороп өҙгөләй.

Язалаусы *(кейектең баш һөйәген итек осо менән тибеп төшөрә)*. Ҡурҡа. Шуның өсөн ҡалҡыу урын һайлай. Аулаҡ ерҙә шомло, хәүефле. Мин — язалаусы — быны яҡшы беләм...

Баиш. Мәрәкә.

Язалаусы. Хөкөм-яза өсөн урын бейек кәрәк. Иисусты ла тау башына мендереп, тәрегә киргәндәр... Батша тәхете ана ниндәй бейек. О хакимәм! *(Аяҡ осона күтәрелеп алыҫҡа ҡарай.)*

Баиш. Кемгә шулай өндәшәһең, хужам?

Язалаусы. Тупраҡ менән күкте тоташтырған затҡа. О хакимәм!

Баиш. О хакимәм!

Язалаусы. Әсәйебеҙ батша! Фетнә баҫтырылды. Хәҙер инде мин һинең әле биреп өлгөрмәгән, әммә мотлаҡ биреләсәк әмереңде башҡарам. Фатиханда бул!

Баиш. Фатиханда бул!

Язалаусы. Фатиханда бул. Башҡортто мәсхәрә итәм мин: уның тәкәбберлеген, уның сая рухын аяҡ аҫтына һалып тапайым. Бына шулай, бына шулай! *(Тапана.)*

Баиш. Бына шулай... *(Тапана ла шып туҡтай.)*

Язалаусы *(алыҫҡа мөрәжәғәт итә)*. Нисек тиһеңме? Мин башҡорттоң шағирына, батырына, юлбашсыһына, көл-күмергә ҡалған ере буйлап ауылдан ауылға,

ырыуҙан ырыуға, юлдан юлға йөрөтөп, халыҡтың үҙ ҡулы менән ҡамсы һуҡтырам. Күп һуҡтырам. Туҡмалған шағир бер мәсхәрә кисерһә, уны үҙ ҡулы менән туҡмаған халыҡ мең мәсхәрә кисерәсәк. Мең мәсхәрә! *(Суҡ бармағын күккә сәнсеп.)*

Баиш. Салауаттың мин хас дошманы, хужам. Ике ырыу мәңге ҡан талаша. Өҫтәүенә, улым Илеште сихыры менән юлдан яҙҙырҙы ул Салауат. Ә шулай ҙа...

Язалаусы. «Шулай ҙа»ңды әйтеп бөтөр, тархан.

Баиш. Шулай ҙа батырына үҙе ҡамсы һуҡмаҫ халыҡ. Мин беләмен уны. Мин дә башҡорт...

Язалаусы. Башҡорт түгел, сыбыртҡы һин, ҡамсы... *(Баштан-аяҡ уның затлы кейемен ҡарап сыға.)* Көмөш биҙәк менән биҙәкләнгән матур һаплы ҡайыш сыбыртҡы һин. Минең сыбыртҡым.

Баиш *(бөршәйеп ҡала)*. Үтә кәмһетәһең мине, хужам. Ни тиһәң дә, мин бит, ыһым, Баиш тархан.

Язалаусы. Ҡалай нескә күңеллеһең икән! Дөрөҫлөктән ниңә кәмһенергә? Уға ҡалһа — мин да сыбыртҡы. Батша сыбыртҡыһы. Оҙон һаплы оҙон сыбыртҡы мин. Йөҙ саҡрымға, хатта мең саҡрымға барып етә осом.

Баиш. Мин дә сонтоҡ түгел. Башҡорт ере ҙур бит. Уны ҡороҡлау өсөн арҡан да оҙон кәрәк... Ҡороҡлармын, ыһым, яҙған булһа. Иншалла!

Оҙаҡ тынлыҡ.

Язалаусы. Ниндәй тынлыҡ. Илау-һыҡтау тауышы ишетелмәй ниңә? Ниңә ишетелмәй?

Баиш. Әлегә иламайҙар.

Язалаусы. Иларҙар. Нисегерәк иларҙар әле!

Баиш. Иларҙар.

Саҡ-саҡ ҡына ишетелгән күмәк аяҡ тауыштары, сыбыртҡы, ҡамсы, сыбыҡ шыйлауы яҡынлаша.

Язалаусы. Ана киләләр. Туҡмай-туҡмай киләләр. Бая әйткән тамашаны күрсе, о хакимәм! Һин бит күңелең менән донъя байҡайһың. *(Килеүселәргә.)* Ҡамсыларҙы киңерәк, киңерәк һелтәгеҙ! Ана шулай. Шулай!

Шулай! Ниндәй күндәм ҡолдар. Ошомо инде беҙҙе дер һелкеткән тоҡом?! Ошомо? Ҡарарға ерәнес...

Баиш. Ысынлап та, ниндәй мөғжизә был? Туҡмайҙар! Салауатты туҡмайҙар! Тимәк, халыҡ инде арҡанланған. Арҡан осо хәҙер беҙҙең ҡулда. *(Ике ҡуллап арҡан тотҡандай итә.)* Минең ҡулға ҡапҡас, ысҡынмаç!

Ике һалдат һағы аçтында сәхнә уртаһына бер төркөм халыҡ яҡынлаша. Улар Салауатты уратып алғандар. Ул уртала килә. Һәр кем йән асыуы менән үҙенә йә ҡамсы, йә сыбыҡ һуға. Ҡайһы берәүҙәр бау, таяҡ һелтәй. Төркөм туҡтай, туҡмалыу дауам итә. Салауатҡа берәү ҙә ҡағылмай. Яҙалаусы шаҡ ҡата. Ул бер аҙҙан ғына телгә килә. Таштан һикереп төшә.

Яҙалаусы. Ҡырағайҙар! Был ни эш? Ниңә туҡмайһығыҙ үҙегеҙҙе? Ниңә туҡмайһығыҙ?!

Беренсе кеше. Беҙгә шул таман! Шул таман беҙгә! *(Әсенеп үҙенә һуға.)*

Яҙалаусы. Туҡма, туҡма...

Икенсе кеше. Туҡмайбыҙ. Һеҙҙе ҡырып бөтөрә алмауыбыҙ хурлығынан туҡмайбыҙ! *(Үҙенә һуға.)*

Өсөнсө кеше. Еңелеүебеҙ оятынан туҡмайбыҙ. *(Үҙенә һуға.)*

Дүртенсе кеше. Ҡуйыныбыҙҙа ҡара йыландар аçрағанбыҙ, шул хурлыҡтан... Шул хурлыҡтан туҡмайбыҙ. *(Башҡа һелтәй, әммә үҙенә һуға.)*

Икенсе кеше. Ҡанмаған үсебеҙ һыуынмаһын өсөн туҡмайбыҙ! *(Үҙенә һуға.)*

Өсөнсө кеше. Нәфрәтебеҙ һүнмәһен өсөн туҡмайбыҙ...

Беренсе кеше. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ туҡмайбыҙ! *(Һуға.)*

Яҙалаусы *(һаҡсыға)*. Ә һеҙ, күҙле бүкәндәр, нимә ҡарайһығыҙ?

Беренсе һаҡсы. Ниңә... Ҡайһыһы туҡмалһа ла, барыбер түгелме ни?

Икенсе һаҡсы. Беҙ түгел дә, улар туҡмала!

Яҙалаусы. Асылында дөрөç. Барыбер.

Халыҡты ҡулы менән икегә айырып, алға Салауат сыға. Ул урта буйлы. Матур. Йонсоу һәм хәсрәт уның батыр йөҙөнә ниндәйҙер илаһи бер төç, бер нур өçтәгән. Яҙалаусы уның ҡаршыһында, ирекһеҙҙән, артҡа сигенә.

Салауат.

Ҡан ҡәрҙәштәр, тоғро юлдаштарым,
Яуҙаштарым, етер. Етерегеҙ!
Һеҙҙән алда ҡылыс мин күтәрҙем,
Һеҙҙән өҫтән уны мин һелтәнем.
Язаһын да бары бер мин генә
Күтәрергә тейеш. Йырым менән,
Сәсән һүҙем менән хәтәр яуға,
Фажиғәле яуға, изге яуға,
Һеҙҙе мин күтәрҙем. Язаһын да
Бер мин генә күтәрергә тейеш...
Йәшел далам, урман, тауҙарымды
Мәжнүн булып һөйҙөм. Нимә күрәм
Хәҙер? Ут үртәгән барын. Яна!
Ҡара төтөн, һоро көлдәр оса...
Мин халҡымды һөйҙөм — ихлас, керһеҙ —
Дан да, мал да өмөт итмәйенсә.
Нимә күрәм? Ҡан эсендә халҡым —
Бисә һөйҙөм. Янып, ярһып һөйҙөм.
Алмашына ни килтерҙем уға? —
Ҡанмаған дәрт, баҫылмаҫлыҡ һыуһын,
Айырылышыу һәм ғүмерлек һағыш...
Ҡазаларҙы илгә мин килтерҙем,
Язаларын бары бер мин генә
Күтәрергә тейеш... Ә һеҙ хәҙер
Һүнгән усаҡтарҙы көйрәтергә
Таралығыҙ. Үкһеҙ етемдәрҙе
Йыуатығыҙ. Мине кисерегеҙ.
Кисерегеҙ мине!..

Беренсе кеше.

Улай тимә,
Батыр! Беҙҙең ҡандан, беҙҙең йәндән
Яралдың һин. Һәм бөтәбеҙ өсөн
Күтәрәһең ауыр ғазаптарҙы.
Үҙең беҙҙе кисер. Ярлыҡа...
*(Килеп баш эйә.)*

Икенсе кеше.

Кисер, батыр, кисер, сәсәнебеҙ.
Беҙ еңә алһаҡ, һин еңелмәҫ инең.

Без еңелдек. Насар һуғыштыҡ без.
*(Килеп баш эйә.)*

Өсөнсө кеше.

Безгә хурлыҡ — һинең айбарлыҡҡа,
Ғәйрәтеңә лайыҡ була алманыҡ...
*(Килеп теҙләнә.)*

Баиш *(ҡапыл Салауатҡа ташлана)*.

Минең улым ҡайҙа, мөртәт әҙәм?
Ҡайҙа минең улым? Илеш ҡайҙа?

Салауат.

Илеш иҫән. Хисап ала килер.
Яуабыңды әҙерләп тор, хаин.

Баиш.

Яуап әҙер уға. Тәңре шаһит.
Әммә уның ҡаны, боҙоҡ ҡаны
Һин яуыздың намыҫында булыр.

Салауат.

Намыҫыма алам һәр тамсыһын...
Ләкин бел: ул һинең улың түгел,
Ул пәйғәмбәр улы — изге заттан...

Язалаусы *(таш өҫтөнә менеп баҫа, ҡулын күтәрә)*.

Туҡтағыҙ, тим! Мин һөйләйем хәҙер.

Баиш.

Туҡтағыҙ, ти!

Язалаусы.

Был юл саты, Салауат, был һоро таш
Иҫеңдәме?

Салауат.

Иҫемдә.

Язалаусы.

Һуң?

Салауат.

Тап ике йыл әүәл йөҙ башында
Ошо юл сатында туҡталдым мин.

Әлеге һин баҫҡан ташҡа баҫып,
Уңға баҡтым, йәнә һулға баҡтым.
Малай инем. Аҡыл түгел,
Йөрәк,
Намыҫ йөрөтә ине етәкләп.
Эйе, уңға, йәнә һулға баҡтым:
Уңға китһәм, әбей батша көтә,
Һулға китһәм — Петр хәҙрәттәре, —
Бер үҙемә ике батша хәҙер.
Теләгәнен һайла. Быға тиклем
Әбей батша менән эш бешмәне,
Бабай менән, бәлки, эш уңыр, тип
Һул теҙгенде тартты ошо ҡулым.
Ә быныһы атҡа ҡамсы һуҡты. —
Йөҙ һыбайлы сапты ҡойон булып.

Язалаусы.

Әгәр ҙә уң ҡулың теҙген тартып,
Шул саҡ һулы ҡамсы һелтәһә,
Бөгөн нимә булған булыр ине?

Салауат.

Нимә булыр ине? Ике ҡулым
Берсә ҡорор ине — бары шул...
Ҡоромаһа, үҙем ҡырҡыр инем.

Язалаусы.

Мин ирлекте баһалайым, батыр.
Әммә тәкәбберлек — дан юлдашы.
Муйыныңдан хәҙер һин хурлыҡта —
Йән ҡайғыһын ҡайғырт, әмәл барҙа.
Ғүмер ғәзиз.

Салауат.

Эйе, ғүмер ғәзиз хатта тотҡонға ла...

Язалаусы.

Шулай булғас, ниңә йәшәмәҫкә?
Сынйыр-бығауҙарҙы алып ташлап,
Ниңә йәшәмәҫкә?

Салауат.

Ниндәй иблис һорауы был тағы?
Һин бит палач. Азат итеү түгел,
Яза биреү һинең бар һөнәрең.
Эшеңдә бул!

Язалаусы.

Минең ҡөҙрәтем киң.
Язалай ҙа, ярлыҡай ҙа алам.
Тиктомалға ошо юл сатына
Килтертмәнем һине. Һин азатһың.
БыҒауыңды хәҙер һалдырырҙар.
О быҒауһыҙ йәшәү шундай рәхәт!
*(Ике ҡулын күтәреп һелтәй.)*
Һин бит шағир — уны беләһеңдер.
Әммә бер шартым бар. Ишетәһеңме?

Салауат.

Ишетәм.

Язалаусы.

Падишаһҡа биргән антыңды һин
Ошо ергә һалып тапап үттең,
Ошо ерҙә тәүбә килтер хәҙер.
Тәүбә килтер! Өс ҡат үбеп бынау
Аяҡ аҫтымдағы һоро ташты
Ант ит ҡабат! Ярлыҡайым. —
Ғүмер ғәзиз...

Салауат.

Эйе, ғәзиз.

Салауат оҙаҡ ваҡыт тик тора. Шунан аҡрын ғына ташҡа табан килә. Тағы туҡтала. Халыҡ, Салауаттың тәүбә итеүенән ҡурҡып, ҡаушап ҡала.

Баиш *(Язалаусының аяғына йығыла)*.

Юҡ, юҡ, хужам, был йыртҡысты, зинһар,
Ысҡындыра күрмә тоҙағыңдан. —
Бөтәбеҙҙе аҫыр, киҫер, һуйыр,
Илгә йәнә мәхшәр килтерер ул,

Ҡанлы мәхшәр! Хужам, ысҡындырма!

Язалаусы *(аяғы менән Баишты иғтибарһыҙ ғына этәреп ебәрә)*.

Көнө нindәй сыуаҡ... Күген ҡара!
Фәрештәләр генә осор заман.
Ана, ахыры, ҡыр ҡаҙҙары китә.
Тауыштары килә — көр тауыштар.
Белә улар ирек ҡәҙерен.
*(Бөтәһе лә күккә ҡарай.)*
Хәйер, ҡоштар телен һин яҡшыраҡ
Аңлайһыңдыр, шағир.

Баиш *(тағы килә)*.

Ысҡындырма!
Ысҡындыра күрмә ҡоҙғондо! *(Язалаусы уны ишара менән ситкә ҡыуа.)*

Язалаусы.

Азатлығың, егет, үҙ иркеңдә.
Ишетәһеңме?

Салауат. Ишетәм. *(Аҡрын ғына таш эрегәһенә килә. Халыҡ тағы ла нығыраҡ хәүефләнә төшә.)* Ишетәм... Ишетәм...

Беренсе кеше *(ситкә ҡарап)*. Ярабби! Ниҙәр күрәбеҙ?!

Салауат *(өс тапҡыр төкөрә.)* Быныһы ташыңа — тфү. Быныһы үҙеңә — тфү. Быныһы батшаңа — тфү. *(Халыҡ иркен һулыш ала.)*

Намыҫ һатып алған йән кәрәкмәй миңә.
Ундай йән кәрәкмәй. Ошо ташҡа
Һал да хәҙер саптыр муйынымды.

Язалаусы *(таш өҫтөнән һикереп төшә)*.

О, юҡ! Былай булғас, был донъянан
Ҡапыл, анһат ҡына китә алмаҫһың.
Ике донъя араһында оҙаҡ
Тибелеп, кәмһетелеп, һөйрәлеп
Ғүмер һөрәсәкһең...

Баиш.

Юҡ, юҡ, хужам, ул үлергә тейеш.
Хатта күләгәһе шом һаласаҡ.

Язалаусы.

Өнөн тығыҙсы шул бәндәнең...
*(Һаҡсылар Баишты ситкә этәләр.)*
Эйе, батыр, һин ереңә ғашиҡ,
Илеңә ғашиҡ, ҡатыныңа ғашиҡ,
Ғашиҡ булған өсөн матурһың һин,
Яуыз!
Шуға күрә мин ереңдән һөрәм,
Ҡара һағыш көн-төн йәнең өйкәр,
Ҡара һағыш һине көйҙөрәсәк.
Тавридала һүнгән Назон һымаҡ,
Ситтә һүнәсәкһең. Зинданға илтегеҙ!
*(Халыҡҡа.)*
Ә һеҙ таралығыҙ!
Һеҙҙең вазифағыҙ бөттө шунда.

Халыҡ тарала башлай, Язалаусы боролоп китмәксе була. Алыҫтан һөрәнләп Гөлнәзирә инә. Ул ҡоро һөйәккә ҡалған. Өҫтө-башы теткеләнеп бөткән. Тик сәс толомо ғына матур үрелгән.

Гөлнәзирә *(алыҫтан уҡ)*. Салауатҡа тейеш ҡамсыны миңә лә һуғығыҙ! Мин уның һөйгән йәремен. Миңә лә һуғығыҙ!

Кешеләр. Гөлнәзирә?

Салауат *(ынтыла)*. Гөлнәзирә?!

Гөлнәзирә *(Салауатты тирәләп әйләнеп сыға)*. Салауат... Салауат... Тере. Иҫән! *(Һаҡсылар уның юлын бүлмәксе итә. Ләкин Гөлнәзирәнең мөхәббәт һәм һағыш тулы ҡарашына тап булып кире сигенәләр.)*

Язалаусы *(Баишҡа)*. Кем был?

Гөлнәзирә. Был — мин. Был — мин, түрә!

Баиш. Салауаттың һөйәркәһе ул, хужам, фәхиш... *(Салауаттың күҙ ҡарашынан ҡурҡып, туҡтап ҡала.)*

Гөлнәзирә. Эйе, эйе, теләһә кеме булһам да, уныҡы мин. Салауаттыҡы мин.

Язалаусы. Ҡатын түгел, һин шәүләһең, бахыр. Ҡайҙа эленеп тора һинең йәнең?

Гөлнәзирә.

Йәнем — эсем тулы, миндә
мең йән, түрә.
Салауаттың ярты йәнемен мин.

Салауат.

Ниндәй изге рухтар һуң сәғәттә
Килтерҙеләр минең хазинамды?
Был тәңренең мәрхәмәте сикһеҙ.
Яҙмышыма мең-мең рәхмәт әйтәм.
Хыҙыр Ильяс юл күрһәтте мәллә?

Гөлнәзирә *(ҡапыл балҡып, нурланып китә)*.

Юҡ, мөхәббәт!
Ул килтерҙе мине
Оҙон өс ай буйы һинең эҙҙән
Илдән илгә, юлдан юлға күстем.
Төнгө далаларҙа ас бүреләр
Миңә теймәнеләр, «Салауаттың
Йәремен мин» тигәс. Ҡара урманда
Юлбаҫарҙар миңә юл күрһәтте,
«Салауаттың йәремен мин» тигәс...
Һинең тәнгә төшкән ҡамсы ғына
Аяманы мине. Йөрәгемде
Телем-телем телде. Мин сыҙаным,
Һиңә еңелерәк булһын тинем.

Салауат.

Күктәгенең изге ҡөҙрәтенән
Таңда яралған зат Гөлнәзирә,
Ошо ерҙә һиңә ни ҡалдырам? —
Ҡайғы, ғазап, бушлыҡ, яңғыҙлыҡ...
Кисер мине.

Гөлнәзирә.

Был донъяла миңә илаһи өс,
Гонаһлы өс кисә бүләк иттең.
Әммә изге, саф ине ул гонаһ.
Донъяның бар хазиналарына
Шул өс төндө алмаштырмаҫ инем.

Мөхәббәтем исеменән һиңә
Рәхмәт әйтәм, батыр! Шуға килдем.
*(Алдына йығыла.)*

Язалаусы *(үҙ алдына)*. Ниндәй әҙәмдәр был, йә хоҙай. Ниндәй иман менән йәшәйҙәр?! *(Һаҡсыларға боролоп.)* Зинданға! Зинданға илтегеҙ! *(Ҡапыл боролоп юҡ була, Салауатты алып китәләр.)*

Гөлнәзирә. Мине лә алығыҙ зинданға! Мин бит Салауаттың ярты йәнемен. Мине лә алығыҙ!

Беренсе һаҡсы. Унда йән кәрәкмәй. Ыҙаланыр өсөн бары тән кәрәк.

Гөлнәзирә. Зинданға мине лә алығыҙ! Мине лә! *(Һаҡсы уның юлына арҡыры төшә.)*

Салауат *(Гөлнәзирә алдына килеп баш эйә)*. Хуш, батыр, гүзәл ҡатыным минең! Ерҙең ғәжәйеп бер ҡыҙы, бәхил бул!

Гөлнәзирә. Хуш бул, Салауат! Мин һине көтөрмөн. Ғүмер буйы көтөрмөн. Донъялыҡта ғүмерем етмәһә, әхирәттә көтөрмөн. Хуш бул, Салауат!

Ут һүнә.

## ӨН АРАЛАШ ТӨШ

Зиндан. Сиркәү аҫтындағы дымлы зиндан. Сиркәү ҡаҡҡан тауыш ишетелә. Уға аҙан әйткән ауаз килеп ҡушыла. Салауат диуарға һөйәлгән.

Салауат.

Сиркәү ҡағалар — ғибәҙәт уҡыйҙар,
Аҙан әйтәләр — ғибәҙәт уҡыйҙар.
Бөтә иман юғарынан килә,
Тик түбәнгә төшкәс, ергә һеңмәй,
Күберәк елгә оса, ахырыһы.
Сиркәү ҡағалар: «Сыҙам бул!» — тиҙәр,
Аҙан әйтәләр: «Күндәм бул!» — тиҙәр.

Бығауҙарын бер-береһенә килтереп аҡрын ғына, асыуһыҙ ғына һуға. Шул тактҡа ҡабатлай.

Сыҙам бул... Күндәм бул... Сыҙам бул...
Күндәм бул...
Шунан башҡа ҡоралың ҡалмағас,
Сыҙамайса нимә ҡылаһың һуң?
*(Ҡапыл алға ынтыла.)*
...Бығау түгел, уйҙар яфалайҙар,
Сынйыр түгел, уйҙар зыңлай башта,
Зиндан түгел, шиктәр тотҡон итте.
Ни ҡылдым мин? Ни нәмәләр ҡылдым?
Ун туғыҙҙа ҡамсат бүрек кейҙем —
Ил ағаһы булдым. Яуҙар саптым.
Егерме ике йәшем тулыр-тулмаҫ
Бар эшемде бына тамамланым.
Бынан ары күпме йәшәһәм дә,
Шул йәшемдә тороп ҡаласаҡмын.
Нимә ҡылдым һуң мин? Кем мин?
Был иңемә яҙмыш бигерәк иртә
Ауыр йөктәр һалды. Күтәрә алмай
Әллә минең билем һығылдымы?
Кем мин?
Утлы ҡояшҡа юл алып,
Ҡанаттары көйгән фәрештәме?
Әллә изге тәхетте хур иткән
Хәсис бер мөртәтме? Кем мин? Кем беҙ?
Беҙ түккән ҡан
Изге нурҙар булып
Ҡибла күктәрендә балҡырмы?
Йә
Ил тәненә шаҡшы ҡутыр булып
Таралырмы?
Юҡ, өркөтмәй мине
Әбей батша сығарасаҡ хөкөм.
Тарих хөкөмө мине ҡурҡыта —
Ярлыҡармы әллә ләғнәтләрме?
Ҡот осорлоҡ! Әгәр хата булһа,
Әгәр хилаф булһа ҡылған эштәр?
Улай тиһәң, илдең иң уҙаман
Ирҙәре бит минең яҡта булды:
Намыҫ ҡоло, затлы Кинйә түрә,
Мишәр атаманы ир Ҡәнзәфәр,
Ғәскәр күрке сая, йор Бәхтийәр,

Сыуаш айбарлыһы Уҡап батыр,
Ҡарт юлбарыҫ һынлы Юлай кантон,
Тағы йөҙәрләгән ил ағаһы —
Бөтәһе лә хаталаныр микән?!
Хаталаныр микән? Ә хаҡ булһа,
Беҙ еңелмәҫ инек... Их, атайым!
Арабыҙҙа бары диуар ғына,
Арабыҙҙа мәңгелек юл ята.
Бер кәлимә һүҙҙәреңә улың мохтаж...

Ултыра, уйға тала. Ҡаршылағы диуар аҡрынлап ишелеп төшә. Юлай күренә.

Юлай. Выждан ғазабыңды беләм, улым.

Салауат. Атай! Күп ғүмерҙәр күрешмәнек бит... Ғазабымды ҡайҙан беләһең һин?

Юлай. Мин атай бит. Бар уйҙарым һиндә.

Салауат. Шиктәремде тарат, атай!

Юлай. Ҡөҙрәтемдән килмәй, улым.

Салауат. Ни эшләп? Һин бит атай. Һин бит минең атай!

Юлай. Яуҙа, дауҙа, сыуаҡ аҡ көндәрҙә һин бөтәбеҙҙән дә өҫтөн, өлкән инең. Ҡара көндәрҙә лә шулай булып ҡал. Рух ныҡлығын беҙ әле лә һинән көтәбеҙ, һиңә таянабыҙ.

Салауат. Әйтсе, атай, һин ышанып килдеңме яуға?

Юлай. Эйе, ышанып килдем. Эшебеҙҙең хаҡлығына ышанып килдем.

Салауат. Ә еңеүгә?

Юлай. Еңеүгәме?

Салауат. Эйе, еңеүгә.

Юлай. Еңеүгә мин хатта башта уҡ икеләнеп килдем. Аҡ батшаның ғәскәре бихисап. Бергә яу йөрөгәндә, үҙ күҙҙәрем менән күп күрҙем мин.

Салауат. Шулай булғас, ниңә баш күтәрҙең?

Юлай. Юлдың хаҡ икәнен белеп баш күтәрҙем, йәнә һине яҡлап яу саптым.

Салауат. «Тайға эйәргән аҙғын ат булдым», — тип үкенмәйһеңме, атай?

Юлай. Үкенмәйем. Һинең атайың булыу — ҙур дәрәжә миңә, Салауат.

Салауат. Беҙ бит еңә алманыҡ.

Юлай. Тәнебеҙ еңелһә лә, йәнебеҙ еңде. Сөнки хәтәр ниәтебеҙ хаҡ ине.

Салауат. Ә түгелгән ҡандар, сыҡҡан йәндәр нимә менән аҡланыр? Нимә менән?

Юлай. Ә һин донъяны тетрәткән, дошманыңды дер һелкеткән бейек шанлы көндәрең тураһында күберәк уйла. Ажғырып килгән ташҡындың алдында, өйөрөлөп килгән өйөрмәнең өҫтөндә һин түгел инеңме? Ә маҡсатың? Маҡсатың, улым?..

Салауат. Маҡсатыбыҙ был тиклем үк ҡорбандарҙың хаҡына торорлоҡмо һуң атай?

Юлай. Быныһына беҙ яуап бирә алмайбыҙ.

Салауат. Ә кем яуап бирер?

Юлай. Был тупраҡҡа беҙҙән һуң килгәндәр.

Салауат. Ул яуапты беҙ һуң нисек белербеҙ?

Юлай. Уны беҙ бер ваҡытта ла белмәйәсәкбеҙ, улым...

Юлай юҡ була. Тынлыҡ.

Салауат. Көндәрҙең бөйөктәрен йышыраҡ уйла, ти, атайым. О ул көндәр! Йәшендәре әле лә йөрәгемде тетрәтә... *(Сиркәү ҡаҡҡан тауышҡа аҙан ҡушыла.)* Ә тегендә беҙҙең йәндәрҙе саҡырып сиркәү ҡағалар, аҙан әйтәләр. *(Ике ҡулын күтәрә.)* Ашыҡмағыҙ! Өлгөрөрһөгөҙ!.. Йыназаға тиклем бит әле туй булды!

Ут һүнә.

## ХӘТЕРЛӘҮ

Берда ҡалаһы. Пугачев станы. Сыуаҡ көҙгө көн. Күктә ҡыр ҡаҙҙары ҡыйҡылдашып осоп үтә. Алыҫта саң ҡағалар. Пугачев өйө алдындағы майҙан. Яңы ғына ҡояш сығып килә. Петр менән Мария ағас араһынан килеп сыға.

Петр.

Беҙ ир менән ҡатын булдыҡ был төн.
Ҡотла беҙҙе, ҡояш! Фатихаң бир.
Дала еле никах уҡыны беҙгә,

Ә йондоҙҙар күктә, шөңгөр булып,
Төнө буйы шылтырап уйнап торҙо.
Ана әле булһа...

Мария.

Иҫәр казак...
Саң ҡағалар, ахыры, шом-шөбһә
*(Уға һыйына.)* бар...

Петр.

Бөгөн шомға урын юҡ был ерҙә.
Бөгөн беҙ ҡушылдыҡ. Бөтә донъя
Ана ниндәй саф, ғиффәтле, күркәм.
Тәү иртәбеҙ шундай хозур беҙҙең,
Мария!

Мария.

Ә мин шомланамын, Петр.

Петр.

Нимәнән?

Мария.

Боҙоҡ кешеләрҙәй, ҡасып-боҫоп
Яҡынайҙыҡ, яҙыҡ булмаҫ микән?

Петр.

Бар йыһандың күҙ алдында бына
Үҙ йәнемде ҡушам йәндәреңә *(ҡосаҡлап үбә)*.

Мария *(ыҫҡынып)*.

Абау! Һуштарымды алдың инде,
Әүрәтеүсем минең! Хәләлкәйем!
Был ҡылыҡҡа рәнйемәҫме Хоҙай?

Петр.

Рәнйер булһа, беҙгә ошо төндө
Бирер инеме ни?

Мария.

Шулай ҙа һуң...
Әгәр алтарь ҡаршыһына баҫып,
Тәңренә ант биреп ҡушылһаҡ беҙ,
Ниндәй һәйбәт булыр ине, йәнем.

Петр.

Шулай итербезҙ ҙә.

Мария.

Ҡасан?

Петр.

Петр батша Ырымбурҙы алғас,
Мәскәү яҡҡа ҡарай юл тоторбоҙ.
Унан ары Петр ҡалаһына
Һә тигәнсе барып инәсәкбеҙ.
Ул саҡта мин инде йөҙ башында,
Хатта мең башында, ҡылыс болғап,
Әбей батша һарайына атылып
Инәмен дә әйтәм: «Катька, — тимен, —
Давай тәхеттән төш, хужа ҡайтты!
Инәлмә лә, илама ла, етте!»
Ә батшаға йомшаҡ ҡына әйтәм:
«Рәхим ит, тим, түрҙән, үҙ тәхетеңдән...»

Мария.

Ой, ой, Петр, ниндәй ғәйрәтле һин!

Петр.

Бына шулай донъяны рәтләп алғас,
Мәскәүҙең... Юҡ, яңы баш ҡаланың
Иң ҙур соборында һинең менән
Никах яңыртырбыҙ. Рәсәйҙең иң,
Иң баш побы беҙгә никах уҡыр...
Никахтан һуң һарайға туп-тура —
Үҙебеҙҙең таш һарайға!
Уны беҙгә батша үҙе биргән булыр,
Туй бүләге итеп...

Мария *(Петрға һыйынып)*.

Ой, тамаша!
Ә мин мейес тултырып ҡалас бешерермен
Көн һайын!

Петр.

Ул саҡ инде мин мең башы түгел,
Фельдмаршал йә кенәз буласаҡмын,

Йәки баяр, йәки затлы барон,
Ә һин шуның берәйһенең ҡатыны...

Мария *(ҡапыл ҡурҡып)*.

Юҡ-юҡ, баяр булма, кенәз булма,
Юҡ, кәрәкмәй, була күрмә, зинһар!

Петр.

Ниңә? Буйым-һыным тура килмәйме?

Мария.

Бик килә шул. Шуға ҡурҡамын да...

Петр.

Нимәнән ҡурҡаһың, йүләркәй?

Мария.

Кенәз булһаң, берәй заман тағы
Бүтән Пугач килеп сығыр ҙа
Һинең башты ҡырҡыр, мине аҫыр
Йә рисуай итер. Кенәз булма!

Петр *(тирә-яҡҡа ҡаранып)*.

Ниндәй Пугач? Нимә һөйләйһең һин?
Ауыҙыңды бүтән асыр булма!
Петр батша. Петр Өсөнсө ул.

Мария *(ҡапыл аңлап)*.

Юҡ, юҡ! Әйттем — ҡайттым.
Әйткәнемде
Ауыҙымдан елдәр алып китте...
Ә ул нимә тиер?

Петр.

Кем?

Мария.

Пугач... Петр батша, беҙҙең хәлде белһә.

Петр.

Батша мине ах итеп үк тора —
Йөҙ башына ҡуйыр, бәлки, тиҙҙән —
Ни тиһәң дә, беҙ бит аҙаштар...

Мария.

Фатихаһын бирерме һуң беҙгә?

Петр.

Ике ҡуллап бирер, күр ҙә тор,
Батша мине үлеп ярата ул.

Мария *(Петрҙың сәсен һыйпай, иркәләй)*.

И хоҙайым, бынау хәтәр башты,
Бынау алтын башты һаҡлай күрсе...

Петр.

Был башымдан айырылһам да,
Мин һинән айырылмам һис ҡасан да.

Мария.

Ундай һүҙҙәр әйтмә, былай ҙа ана
Шом уятып саң ҡағалар һаман.

Петр.

Әй, бөткәнме? Берәй иҫерек казак шаяралыр...

Өй эсенән тауыш килә. Петр, Мария сығып китә.

Пугачев *(эстән)*. Ниңә саң ҡағалар? Әй, кем бар унда, яуап бир!

Есаул йүгереп инеп, болдорға менә. Артабан һөйләшеү тәҙрә аша бара.

Есаул. Бәлә. Батша хәҙрәттәре, бәлә бар.

Пугачев. Ниндәй бәлә?

Есаул. Үткән төндө дошман килеп Ҡыҙыл Яр аҫтындағы беҙҙең дозорҙағы өс әҙәмде һуйып киткән. Бер казакты урлап сапҡандар, бары берәү ҡасып ҡотолған. Һаҡтағылар бары ла иҫерек булған.

Пугачев. Туҡтатһындар саң ҡағыуҙы!

Есаул *(уңға, һулға ҡысҡыра)*. Саң ҡағыуҙы туҡтатырға! Саң ҡағыуҙы туҡтатырға!! *(Саң ҡағыу туҡтала.)*

Пугачев. Башлыҡтары, атамандары кем? Бөтәһенә яза уртаҡ булыр. Хөкөмдө мин үҙем сығарырмын. Төшөндөңмө?

Есаул. Төшөндөм, батша хәҙрәттәре.

Пугачев. Бар, иғлан ит: атамандар, халыҡ бында йыйылһын. Ғәйеплеләрҙе бында килтерегеҙ!

Есаул. Тыңлайым! *(Юҡ була.)*

Пугачев болдорға сыға. Ул 32—33 йәштәрҙәге мыҡты ир. Йөҙөндә, ҡарашында ихтыяр һиҙелеп тора.

Пугачев.

Ялған батша булыуҙары ауыр.
Ысын батша булыу нисек икән?
Гәрсә кешеләрсә аңлаһаң да,
Батша булып хөкөм итеү кәрәк.
...Ғәскәремде ҡулда тота алмаһам,
Империя, империяны һуң
Нисек итеп ҡулға ала алырмын?
...Мин ғәҙеллек өсөн яуға сыҡтым.
Үҙем күпме аяуһыҙлыҡ, йәбер,
Хатта
Ғәҙелһеҙлек ҡылдым бары ошо
Ғәҙеллек һәм хаҡлыҡ хаҡына тип, —
Мин ҡуҙғатҡан донъя тәгәрмәсе
Мин тигәнсә генә әйләнмәй шул...
...Ялған батша булыу ауыр тим дә,
Ысыны булғас, еңеләймәç, беләм.
Әле мин боларам, мин ҡыйратам,
Ысын булғас, мине ҡыйратырҙар.

Ике казак, өйҙән сығарып, майҙансыҡҡа тәхет килтереп ҡуя. Улар китә.

Пугачев. Тәхет!.. Алыҫтан ҡарағанда — тәхет, яҡындан ҡарағанда — ләхет... Атамандар! Атамандар! *(Ҡулға ҡул һуга.)*

Халыҡ йыйыла. Арала Мария ла бар. Атамандар сыға, улар тәхеттең ике яғына баҫа. Шул саҡта ғына Пугачев тәхеткә ултыра. Баяғы ике казак Петрҙы һәм теге иҫән ҡалған, ҡурҡыуынан ни тере, ни үле казакты алып инә. Артта тауыш ҡуба.

Есаул тауышы: «Ярамай, тим, унда хөкөм бара! Батша үҙе хөкөм сығара!». Салауат тауышы: «Юл бир! Унда минең биш йөҙ ғәскәрем бар! Юл бир, йүнһеҙ әҙәм!»

Кем бар унда, ниндәй ығы-зығы? Есаул!

Есаул *(йүгереп инә)*. Башҡорт старшинаһы Салауат Юлай улы, ти. Биш йөҙ ғәскәр килтергән. Бәрә-һуға бында инеп килә. Батша кәрәк, ти.

Пугачев. Индерегеҙ.

Есаул. Әй, индерегеҙ ике башҡортто!

Салауат менән йәш кенә Байназар атылып килеп инә. Улар туп-тура Пугачевҡа табан ынтылалар. Пугачев аҡрын ғына уң ҡулын күтәрә, Салауат менән Байназар туҡтап ҡала.

Пугачев. Сабыр ит, түрә, әле хөкөм бара. *(Ситкә ымлап.)* Урын килтерегеҙ йәш түрәгә — ҡорал алған халыҡ илсеһенә.

Салауатҡа урын килтерәләр. Ул ултыра. Уның эргәһендә Байназар баҫып тора. Улар Пугачев менән ҡара-ҡаршы ултыралар. Икеһе лә хакимдар икәне күренергә тейеш. Пугачев башта халыҡҡа, унан атамандарға мөрәжәғәт итә.

Хөкөм тыңларға әҙерһегеҙме? *(Атамандар баш ҡаға.)* Тауыштар. Әҙербеҙ. Әҙербеҙ!

Пугачев.

Дошманыңды хөкөм итеү еңел,
Үҙеңдекен ауыр. Балаларым!
Бер төк сәсең йолҡонһа ла ауырта...
Әммә! *(Ҡот осҡос янау менән.)*

Әммә батша йөҙөнә оят килтергән,
Ғәскәр ҡеүәтенә хилаф ҡылған
Берәүгә лә шәфҡәт булмаясаҡ!
Ҡыҙыл Ярҙа кисә кем дозорҙа торҙо?

Иҫәүән казак. Мин... Мин торғайным, үлтереп киттеләр.

Пугачев. Кемде?

Иҫәүән казак. Мине. Мин бит үлек. Мин әле әхирәткә, йәғни теге донъяға, китеп барышлай ғына бын-

да һуғылдым. Батша хәҙрәттәре, бойор: берәй туҫтаҡ килтерһендәр миңә — юл аяғы ғына, бары юл аяғы ғына.

Пугачев. Нимә? Ни һөйләй ул?

Есаул. Ҡурҡыуынан ул нитеберәк киткән... Алмашынған.

Иҫәүән казак. Һуңғы туҫтаҡ ҡына... Юл аяғы... Тегендә бит уны бирмәҫтәр! Тот ҡапсығың!.. Ҡойорға ҡуш, батша! Сауап булыр... *(Шыңшый.)*

Пугачев. Шул хәмерҙән һаташа бит Рәсәй. Иман уҡыр ерҙә араҡы һорай. Бар, далаға ебәрегеҙ. Етер еренә үҙ аяғы менән барып етһен әйҙә. *(Иҫәүән казакты төрткөләп сығаралар.)*

Иҫәүән казак. Тик бер генә туҫтаҡ... Ярты ғына туҫтаҡ... Сирек кенә туҫтаҡ... Их, батша!

Пугачев. Хөкөм башлана. Сыбыҡ килтерт, Есаул!

Бер казак шул арала йүгереп сығып, бер ҡосаҡ сыбыҡ индерә. Бер сыбыҡты алып һелтәп ҡарай, шыйлап китә. Икенсе казак ятҡырып һуҡтырырға эскәмйә килтерә. Уны кешегә күренмәй торған ҡултыҡҡа ҡуя. Шомло тынлыҡ.

Иҫәүән казак *(тауышы алыҫтан килә)*. Тик бер генә тамсы, батша хәҙрәттәре...

Пугачев. Кем кисәге дозор башлығы ине?

Петр *(алға сыға)*. Мин, император.

Пугачев. Исемең кем?

Петр. Петр. Ун башы Петр.

Пугачев. Тимәк, аҙаш.

Петр. Аҙаш, батша хәҙрәттәре, аҙаш. Тик нумерым ғына юҡ.

Пугачев. Бына хәҙер нумер һуғырҙар. Иҫерек казактарҙы дозорға ҡуйған өсөн биш сыбыҡ! Төнөн тикшермәгән өсөн биш сыбыҡ. Петр исемен бысратҡаның өсөн биш сыбыҡ, йәмғеһе — ун биш!

Мария *(ҡапыл тәхет алдына йығыла)*. Атай! Атай, зинһар, әмер бир: биш сыбыҡты миңә һуҡһындар. Төнөн Петр минең янда булды.

Пугачев. Ниндәй уйнашсы был тағы?!

Петр. Минең ҡатыным ул, император-атай.

Пугачев *(Марияның матурлығына һокланып карап тора)*. Ниндәй сибәр, шайтан алғыры! Беҙҙең фатиханан башҡа кәләш алған өсөн башбаштаҡҡа тағы биште өҫтәргә. Бисәһенә сыбыҡ тейҙермәҫкә! Беҙ ҡырағайҙар түгел. *(Һокланып, үҙ алдына.)* Ниндәй зифа — күңел аҙҙырғыс...

Петр. Ул бишеһе татлы ғына булыр. Ғишыҡ өсөн яза татлы, тиҙәр. Фатихаң шул булһын, батша-атай.

Петр үҙе сәкмәнен, күлдәген һалып ырғыта ла эскәмйәгә барып ята.

Пугачев. Башлағыҙ!

Сыбыҡ шыйлай башлай. Сыбыҡты бер һуғалар ҙа, ташлап, икенсене алалар. Тик ташланған сыбыҡтар ғына берәм-берәм сәхнә уртаһына килеп төшә. Язалау үҙе күренмәй.

Мария *(өҙгөләнә)*. Петр йәнем, алтын башым минең!

Петр *(арттан)*. Өҙгөләнмә, Мария, миңә сыбыҡ үтмәй бөгөн.

Пугачев. Ун башының атаманы кем? *(Өндәшмәйҙәр.)* Атаманы кем? *(Өндәшмәйҙәр.)* Өсөнсө тапҡыр һорайым: атаманы кем?

Пугачевтың уң яғында торған Иван Федулов алға сыға.

Иван. Мин, батша.

Пугачев. Һин? Иван Федулов?

Иван. Эйе, мин.

Пугачев. Уҙған төнгө бәлә өсөн өҫтөңә ғәйеп алаһыңмы?

Иван. Алам, ләкин...

Пугачев. Ләкинһеҙ генә?

Иван. Алам, әммә...

Пугачев. Өҙөп әйт, Федулов Иван!

Иван *(киҫкен)*. Мин атаман. Казак атаманы! Оноттҡан булһаң хәтерләтербеҙ, батша!

Пугачев *(ярһып)*. Ә, шулаймы? Сис хәҙер үк затлы сәкмәнеңде, казак атаманы Федулов! Ун биш сыбыҡ тейә өлөшөңә, шуны алырға әҙерлән!

Иван. Миңә? Сыбыҡ?

Пугачев. Ә һин кем? Әллә хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһеме?

Иван *(янап)*. Ярай, император! Хисап көнөндә быны ла иҫеңә төшөрөрбөҙ. Аҙаҡ үкенергә ҡалмаһын, килмешәк! Үкенергә...

Пугачев *(ҡылысын һурып ала)*. Иван! *(Башҡа атамандар Пугачевты тотоп ҡала. Ул кире ултыра. Йомшара төшә.)* Һал сәкмәнеңде яҡшылыҡ менән, атаман. Юғиһә аяҡ-ҡулың бәйләтеп хур итермен.

Иван *(күккә ҡарай, сәкмәнен һала)*. Ҡара уны, батша, ҡояшың кирегә әйләнмәһен...

Иван эскәмйәгә барып ята. Уны һуҡтырған тауыш ишетелә. Бүтән атамандар үтә асыулы. Халыҡ риза ла, хайран да ҡалған. Пугачев башын эйеп оҙаҡ тын ултыра. Ҡапыл тәхетенән һикереп төшә.

Пугачев. Унда тағы нисә сыбыҡ ҡалды?

Казак. Етерлек әле.

Пугачев. Бөтәһен дә бында килтер.

Казак. Хәҙер. *(Ҙур усма сыбыҡ сығара ла аптырап баҫып тора.)*

Пугачев *(өҫкө кейемен һалып ырғыта)*.

Бөтәһенә мин юғары власть.
Барлыҡ изге, яуыз эштәр өсөн
Яҙығы ла, сауабы ла миңә.
Тимәк, яуабы ла минең выжданымда...
Тейер язаһынан ҡасмайым мин.
Ҡурҡаҡ түгел затым. Мин батшамын!
Үҙ өлөшөмдө миңә һуҡ, казак!!!

Бер бисә. Әстәғәфирулла!

Бер ир. Бына бер тамаша!

Пугачев. Һуҡ!

Бер ҡатын *(алға сыға)*. Һуҡма, казак, һуҡһаң, алла һуғыр!

Пугачев. Һуҡ!!

Казак *(сыбыҡтары берәм-берәм ҡосағынан төшөп бөтә)*. Ҡулым бармай, ҡулым тыңламай, батша.

Пугачев.

Ярай...
Минең өләшөмдә алып ҡуй,
Бәндә ҡулы түгел, тәңре ҡулы
Миңә һуғыр уны, кәрәк тапһа...

Казак сыбыҡтарҙы йыйып алып сыға. Халыҡ шаҡ ҡата.

Берәү. Йәшәһен ғәҙел батшабыҙ Петр Өсөнсө!

Тауыштар. Йәшәһен! Йәшәһен! *(Кәпәс сөйәләр, халыҡ Пугачевты уратып ала, Пугачев уларҙы ҡул ишараһы менән артҡа сигенергә ҡуша.)*

Салауат *(ашығып Пугачев алдына баҫа)*. Мин Салауат — Юлай улы булам.

Пугачев. Беләм.

Салауат.

Бер йөҙ һыбай, бер йөҙ сәмле егет
Һиңә ҡаршы яуға тип сыҡтыҡ беҙ.
Биш йөҙ һыбай алып килдем һиңә.

Пугачев.

Рәхмәт, егет!

Салауат.

Кисер, батша, юлда икеләнеүҙәр,
Шиктәр таланылар күңелемде —
«Кем ул? Ҡайҙан? Ниңә килгән? — тинем, —
Көсө низә уның? Кем батшаһы?»
Хәҙер күрҙем: Беҙҙең падишаһ һин,
Кешеләр падишаһы. Көс-ҡеүәтең
Ғәҙеллектә икән — дөрөҫлөктә.
Ҡанат аҫтыңа ал, әмереӊ бир.
Һәм ҡылыстар ҡындан тартылырҙар.
Мин инандым: һиңә ул булыуы,
Хатта ҡол булыуы мәртәбәлер!

Пугачев.

Ҡолдар түгел, миңә улдар кәрәк.
Ҡолом түгел, улым булырһың һин,
Сая егет! *(Салауатты ҡосаҡлап.)*
Әммә шул нәмәне иҫеңдә тот:

Минең өсөн генә түгел, ереӊ,
Һыуың, тауың, урмандарың,
Бынау күгеӊ өсөн ҡан ҡойорға
Яуға күтәрелдең һин, Салауат!

Салауат.

Таланылар ерҙәремде,
Әле талап бөтмәгәндәр.
Таланылар һыуҙарымды,
Әле һыуҙар кипмәгәндәр.
Емерҙеләр тауҙарымды,
Әммә тауҙар әле тора,
Ҡыйратылған урманымда
Ҡоштар әле оя ҡора.
Күктәремдең әле бер мәл
Балҡып-күкрәп ҡуяһы бар.
Уның әле кәкре айы,
Түп-түңәрәк ҡояшы бар.
Тимәк, әле йәшәп була.
...Тапанылар ғәҙеллекте,
Һөйәктәрен он иттеләр,
Ысын алтын дөрөҫлөктө,
Ялған яғып, ҡом иттеләр.
Ирек ҡошон ағыуланған
Уҡтар менән аттырҙылар,
Намыҫ тигән фәрештәне
Фәхишлеккә һаттырҙылар...
Йәшәр әмәл бөттө тамам.
...Бар өмөтөбөҙ һиндә, батша хәҙрәт,
Һин шуларҙы ҡайтарырһың, тибеҙ.

Пугачев. Ҡайтарырмын. Мотлаҡ ҡайтарырмын!

Салауат.

Оран ҡысҡыр! Бөтә Башҡортостан
Ябырылып яуға ташланасаҡ,
Ҡанға, данға һыуһап түгел,
Ғәҙеллеккә һыуһап ташланасаҡ...
Рәхим итеп, әмер бирсе, батша,
Минең ғәскәремде ҡала эсенә индерһендәр.

Пугачев. Есаул! Башҡорттарҙы ҡалаға индерергә!

Есаул *(ары ҡысҡыра)*. Башҡорттарҙы ҡалаға индерергә!

Алыҫта тауыш яңғырап-яңғырап китә: «Башҡорттарҙы ҡалаға индерергә! Башҡорттарҙы ҡалаға индерергә! Башҡорттарҙы ҡалаға индерергә!!!»

Салауат *(Пугачев алдына килеп баш эйә)*. Рәхмәт, атай! Антым ошо булһын. *(Ҡапыл боролоп, Байназар менән икеһе сығып китә.)*

Пугачев. Хоҙай ярҙам бирһен һиңә, егет!

Мария *(үҙ алдына)*. Тау ҡапланы кеүек, ниндәй йылдам. Үҙе һылыу — дала ҡырағайы! Ә тегеһе тағы ла һылыуыраҡ...

Ут һүнә.

## ХӘТЕРЛӘҮҘЕҢ ДАУАМЫ

Салауат ғәскәренең тылы. Яҡында ғына һуғыш бара. Шау-шыу, ғауға, «Алға, алға!» тигән тауыштар килеп етә. «Салауат нисә йәшендә»нең көйө, хатта һүҙҙәре саҡ-саҡ ҡына ишетелә.

Салауат нисә йәшендә? —
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Бригадир булды Салауат
Егерме лә ике йәшендә.

Ҡаса-боҫа, Илеш инә.

Илеш.

Салауат минең ҡан дошманым, эйе.
Юлай менән Баиш ырыуҙары,
Бер-береһенә барымтаға сабып,
Ҡарымтасы булып, ҡан ҡойошоп,
Ғүмер баҡый боғаҙ сәйнәшкәндәр.
Шуның өсөн бөгөн Салауатты
Мин үлтерергә тейеш. Баиш ырыуы
Ошо яуыз эште миңә ҡушты.
Мин үлтерергә тейеш Салауатты.

Бөгөн үлтермәһәм, иртәгеһен
Һуң буласаҡ. Ул бейеккә ашып,
Ил өҫтөндә йөҙөк ҡашы булһа,
Уғым менең уға етмәйәсәк.
Ә мине ул шаҡшы ҡол итәсәк —
Шуны төшөндөрҙө атайым ҡарт.
*(Йән әрнеүе менән.)*
Ә Салауаттың миңә ни зыяны,
Ни яфаһы тейгәне бар әле?
Малымдымы алды, йәремдеме?
Юртағымды менеп саптымы?
Мин эҙәрләп барған кейегемә
Уҡ аттымы? Ни зыяны тейҙе?
Ауыр бурыс миңә йөкмәттеләр.
Үтә ауыр. Әгәр хоҙай ҡушып,
Яу ҡырында ғына һәләк булһа,
Оло гонаһтарҙан ҡотолор инем.
Бер хоҙайым! Ҡотҡар мине, ҡотҡар —
Ошо ҡанлы эште башҡарыуҙан!
Ниңә ҡалтырайым? Ҡурҡаммы ни?
Мин ҡурҡаҡмы — Баиш улы Илеш?
Ант бирелгән. Артта упҡын. Тимәк,
Ул үлергә тейеш. Икеләнеү юҡ!

Илеш китеп өлгөрмәй, ҡылысына таянып, ныҡ аҡһап, Байназар сыға. Уның аяғы йәрәхәтләнгән. Ләкин унда әле һаман яу ярһыуы.

Байназар. Еңеү! Еңеү! Инде һәләк булдыҡ тигән саҡта, иң айбарлы егеттәре менән тамуҡ уртаһына Салауат үҙе ҡойон булып бәреп инде. Дошман ҡаса! *(Ул ҡыры менән торған Илешкә һөйләй.)* Ҡара, ҡара, ана, нисек ҡаса! Ниңә шатланмайһың?

Илеш. Шатланамсы...

Байназар. Шулай шатланалармы ни? Илереп, шашып шатлан! Дошман ҡаса. Еңеү беҙҙең яҡта. Ана ҡабырғанан һуҡты — ай, Ҡәнзәфәр, егет арыҫланы! Афарин, мишәрҙәр, афарин! *(Ҡалҡыулыҡҡа һикереп менә.)* Сыуаш бәһлеүәне ерән Уҡап суҡмар менән ҡалай дөмбәҫләй. Ана шулай, ой, рәхмәт егет — булдыраһың, шайтан! *(Илеш китә, Байназар уны күрмәй.)* Ниңә шат-

ланмайһың? *(Боролоп ҡарай.)* Бәй, ҡайҙа булды был әҙәм? Әй, кем әле һин? Салауат шөһрәтенән өлөш өмөт итеп йөрөгәндәрҙең берәйһелер әле шунда...

Саҡ-саҡ атлап, Мария сыға, уның ҡулында — Петрҙың аҡ папахаһы.

Мария. Ох, Петр! Ох, Петр! Алтын башы ярҙан тәгәрәп төштө...

Байназар. Мария?

Мария. Алтын ҡояш мәңгелеккә батты — Петрҙы үлтерҙеләр. Юҡ Петр. Петр юҡ хәҙер.

Байназар. Ни тип йыуатайым?

Мария. Йыуатма, Байназар. Йәшем бөткәнсе үкереп илайым да бынау ташҡынға ташланам, икебеҙҙе бер үк даръя йотһон.

Байназар. Улай һөйләү беҙҙең диндә гонаһ.

Мария. Беҙҙә лә ул шулай. Ни ҡылайым? Әрнеүҙәргә нисек сыҙайым? Петр! *(Папахаһын күкрәгенә ҡыҫып, ергә ултырып, быуылып илай. Ҡапыл һикереп тора, сыҡырға ынтыла.)* Петр! Көтөп тор мине! Сиркәүҙәргә кереү насип булманы, һыу төптәрендә никах яңыртырбыҙ. Көт мине!

Байназар *(тотоп ҡала)*. Туҡта, йүләр бисә.

Мария. Ебәр!

Байназар. Ебәрмәйем, үлгән артынан үләләр тиме ни, иҫәр!

Мария *(йомшаҡ)*. Ебәр мине, Байназар.

Байназар. Ошондай аҫыл затты үҙ ҡулдарым менән үлемгә бирә алмайым, Мария. Ултыр, һушыңа кил.

Мария, тыңлап, бер таш өҫтөнә барып ултыра. Һыҡтай.

Мария. Ох, Петр. Ҡәбереӊ дә хатта булмаясаҡ...

Байназар. Беҙҙең ғәскәрҙең йондоҙо һин, Мария. Йондоҙ һүнһә, беҙ һуң ни эшләрбеҙ? *(Хәле мөшкөләйеп сайҡалып китә, Мария әле генә уның ҡанға батҡанын күрә.)*

Мария. Һинең ҡаның аға, Байназар! Һин яралы?! Хәҙер, хәҙер бәйләрмен яраңды. Тик зиһенемде йыяйым саҡ ҡына.

Байназар *(сайҡала)*. Ағастар ауалар. Тотоғоҙ ағастарҙы.

Мария *(ҡапыл ырғып, Байназарҙы тота)*. Байназар! Таян миңә, Байназар! *(Байназарҙың ҡулын иңбашына һалып алып сыға.)* Хәҙер, хәҙер йәрәхәтеңде йыуырмын.

Китәләр. Артта һуғыш шау-шыуы тына. Тантана ауаздары яңғырай.

— Еңеү! Еңеү!
— Салауатҡа шөһрәт!
— Салауатҡа дан!

Салауат, Ҡәнзәфәр Усаев, биленә сукмар таҡҡан Уҡап инә. Салауаттың беләгендә яраһы бар. Улар ярһығандар. Уларҙы халыҡ солғап алған; ҡылыс-һөңгө күтәреп, кәпәс сөйөп, батырҙарҙы ҡотлайҙар.

— Батырҙарға дан!
— Йәшәһен Салауат!

Бер нисә әсирҙе төрткөләп, һуҡҡылап сығаралар.

Салауат *(ҡылыс тотҡан ҡулын күтәрә)*. Әсирҙәргә теймәҫкә! Һуғыштан һуң әҙәм йәберләү — хурлыҡ!

Уҡап. Бес эләксәк, хурлығын-мурлығын ҡарап тормастар ине әле, тутырҙар ҙа ҡулаҡты ҡырҡырҙар ине.

Салауат. Беҙ бит улар түгел — беҙ, Уҡап дуҫ.

Ҡәнзәфәр. Нимә, уларҙы икмәк серетер өсөн ҡалдырабыҙмы ни?

Салауат. Зауыт эшенә ҡушығыҙ, туп ҡойһондар, ҡылыс сүкеһендәр.

Уҡап. Бусы аҡыл! Бусы сыуашса — тимәк, эшләргә кәрәк.

Салауат *(ҡул күтәреп тыныслыҡҡа саҡыра)*. Юлдаштарым, Ҡәнзәфәр *(уға борола)*, Уҡап *(уға борола)*, барса ҡәрҙәштәрем, яуҙаштарым, еңеү өсөн рәхмәт! Ҡанға батып килде был еңеү. Шуға күрә икеләтә ҡәҙерен белегеҙ.

Ҡәнзәфәр. Дөрөҫ, батыр, ҡорбандар күп булды.

Уҡап. Яр таштары, ҡысыл бүрлегәндәй, ҡып-ҡысыл ҡан: башҡорт ҡаны, урыс ҡаны, татар ҡаны, сыуаш ҡаны, ҡалмыҡ ҡаны — ниндәй генә ҡан юҡ...

Салауат *(уйсан)*. Бәлки, замандар үткәс, беҙҙең тоҡомдаштар бында килеп, ошо ерҙе изге итеп, зыярат ҡылырҙар. Беҙҙең ҡандар саҡырыр уларҙы.

Ҡәнзәфәр. Бәлки, тәүге ямғыр яуғас та, бөтәһе лә бөтөр, онотолор...

Уҡап. Юҡ, был йыуыла торған ҡандар түгел, Ҡәнзәфәр!

Салауат *(ҡапыл хәтерләп)*. Байназарым ҡайҙа? Ҡайҙа Петр?

Берәү. Байназар иҫән. Петр, бахыр... Урыны йәннәттә булһын.

Салауат. Кәпәс һалығыҙ! Бахыр түгел, хәтәр казак ине. Ир ине!

Ҡәнзәфәр. Шундай энем, шундай улым булһа, ғорурланыр инем мин — ҡарт яугир.

Уҡап. Ай, ай... Мария, меҫкен, илар инде, худай ярҙам бирсен.

Кемдер *(артҡа боҫоп)*. Күңелен табырбыҙ...

Салауат. Марияны рәнйетмәгеҙ. Муйынығыҙҙы өҙөрмөн!

Кемдер. Мәрйә өсөн муйын, урыҫ өсөн баш — хи-хи-хи — ул баштарҙы ҡайҙан алып бөтөр башҡорт?

Салауат. Кем ул унда? Күҙгә ҡарап һөйлә. Ниңә шымдың?

Кемдер. Шымманым. Шул урыҫ тип суҡынабыҙ инде.

Салауат. Алға сығып һайра, ир булһаң...

Кемдер. Ярай, батыр, яуҙа ғына алға сығырмын.

Салауат. Быңдай һүҙҙәр өсөн яза тейеш. Ҡаты яза! Ярай, еңеү шәрәфенә ҡалып торһон.

Тояҡ тауыштары ишетелә. Бөтәһе лә иғтибар итә.

Берәү. Сапҡын килә. Өҙәңгеһе ҡыҫҡа, казак булыр.

Уҡап. Казак булса ла, мазак булса ла, яҡшы хәбәр килтерсен.

Есаул инә.

Есаул. Фарман. Батша фарманы!

Тауыштар. Фарман! Тағы фарман!

Есаул. Тыңлағыҙ! *(Итек ҡуңысынан ҡағыҙ төргәге сығара. Халыҡ шаулаша.)*

Ҡәнзәфәр. Яугирҙар! Фарман тыңлағыҙ! *(Тауыштар тына.)*

Есаул. Петр Өсөнсө ғали йәнәптәре үҙ рәхиме менән ошоларҙы иғлан итә: беренсе — башҡорт старшинаһы Юлай Аҙналинға ололап, полковник исеме бирәм.

Тауыштар. — Полковник!

— Ай афарин!

Есаул. Ҡайҙа Юлай полковник?

Салауат. Башҡа тарафта. Полковникка фарман тапшырылыр.

Есаул. Икенсе — мишәр сотнигы Ҡәнзәфәр Усаевҡа, ололап, полковник исеме бирәм. Усаев!

Ҡәнзәфәр. Мин бында, Есаул.

Есаул. Өсөнсө — сыуаш сотнигы Уҡап Кудряшовҡа, ололап, полковник исеме бирәм. Кудряшов!

Уҡап. Мин тә бында!

Есаул. Дүртенсе — башҡорт ғәскәренең башлығы полковник Салауат Юлаевҡа, ололап, бригада генералы исемен бирәм.

Тауыштар. Янарал! Янарал!

— Салауат янарал!

— Ҡотло булһын, бригадир!

— Беренсе янарал!

— Беренсе янарал!

Есаул. Тауыш! *(Халыҡ тына.)* Бына бригадирлыҡ таҫмаһын яурыныңа һалып, император исеменән ҡотлайым, генерал!

Салауат. Рәхмәт, Есаул! Императорға әйт: Юлай улы Салауат был ебәккә тап төшөрмәҫ *(таҫманы күрһәтә)*.

Есаул. Һорайым әле, бик йәш күренәһең, нисәлә һин, батыр?

Ап-асыҡ булып йыр ишетелә.

Салауат нисә йәшендә? —
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Бригадир булды Салауат
Егерме лә ике йәшендә.

Сәхнәләге халыҡ, ғәжәпләнеп, төрлө яҡҡа әйләнгеләп, йырҙың ҡайҙан килгәнен белергә тырыша. Йыр дауам итә, аҡрыная.

Салауат. Йыр ишетәм һымаҡ. Ҡайҙан килә?
Ҡәнзәфәр. Үҙе яҡын, үҙе алыҫ кеүек...
Берәү. Әллә күктән килә, әллә ерҙән сыға.
Икенсе берәү. Әллә уңдан, әллә һулдан килә...

Тыңлайҙар.

Уҡап. Киләсәктән килә был йыр, туғандар! Киләсәктән — йыраҡ йылдарҙан!..

Есаул. Бер ниндәй ҙә йыр юҡ. Фарман дауам итә. Бишенсе — яуҙа ҡатнашҡан һәр әҙәмгә берәр һум көмөштән аҡса өләшергә.

Тауыштар. Аҡса?

— Берәр һум!!

— Батша йомарт.

— Ундыҡ батшанан.

— Аҡса ҡайҙа?

— Ә үлгәндәр өлөшө?

— Ҡалғандарға бүлеп бирелһен!

Есаул. Үлгәндәрҙең өлөшө булмай.

Тауыштар. Аҡса ҡайҙа?

— Уны кем өләшә?

Есаул. Мин өләшәм. Ана, ике атҡа йөкмәп килтерҙеләр. Ун баштары килеп һанап алһын. *(Сыга. Халык та тиҙ үк сыгып бөтә. Ҡәнзәфәр, Уҡап, Салауат ҡала.)*

Тауыштар. Ун баштары!

— Аҡсаға! Аҡсаға!

Салауат. Көмөш теле ниндәй тылсымлы, һә тигәнсе һепереп-ялап алды халыҡты...

Уҡап. Аҡса ни ул, кәрәк нәмә бит, янарал.

Салауат *(икеһен бергә ҡосаҡлап)*. Бөгөн яҡшы көн булды, яуҙаштар, ҡотлайым һеҙҙе.

Ҡәнзәфәр. Ә һиңә, янарал, ауыр дәрәжәнде еңел күтәрергә яҙһын.

Салауат. Амин, шулай булһын, полковник. Атайыма хәбәр иттерәһе ине. Кеше ҡыуанысын әйтмәй һаҡлау — уны урлау менән бәрәбәр.

Ҡәнзәфәр. Рөхсәт итһәң, картҡа үҙем барыр инем. Яҡшы хәбәр илтеү ҙур мәртәбә миңә.

Салауат. Юлың уң булһын. Үҙең менән ике һыбайлы ал.

Ҡәнзәфәр китә.

Уҡап. Мин дә китәйем, Салауат. Аҡса алып, сыуаштарыма өләшәйем. «Сыуаш йыуаш» тип, онотоп ҡуймаһындар. *(Башын сайҡап китә.)*

Салауат. Хаҡ һүҙ әйтте бая Ҡәнзәфәр.
*(Лентаһын тотоп ҡарай.)*
Үҙе ебәк, үҙе баҫып бара.
Шатлыҡ менән бергә шом килтерҙе,
Ғәм килтерҙе миңә был дәрәжә.
Бынан ары намыҫ, атым менән
Мин беренсе башҡорт иҫәпләнәм.
Шул исемгә есемем торорлоҡмо?
Ошо вазифаға лайыҡмы мин?
Тәңрем, миңә ауыр тәҡдир бирҙең,
Ярҙамыңдан мәхрүм итә күрмә.
Ни ғәжәп был? Үрә һикерер ерҙә
Аяҡ осо менән баҫып уҙам,
Шыр ҡыуаныр ерҙә вайымланам?
Ниңә шулай икән?
...Бер нәмәне әммә яҡшы беләм:
Сигенеү юҡ! Алға, бары алға!

Ул сығып киттем тигәндә, Гөлнәзирә йүгереп инеп, уның аяғына ташлана, ул бик сибәр. Һыбайлы кейемендә. Кейемдәре зиннәтле. Күрәһең, хәлле ырыуҙандыр.

Гөлнәзирә. Салауат, кисер мине! Кисер, батыр!

Салауат. Кем һин? Тор, аунама ерҙә.

Гөлнәзирә. Гөлнәзирә мин. Ҡәһәрләнгән бер бисә мин.

Салауат. Кем ҡәһәрләне һине? *(Ҡулынан тотоп күтәрә, Гөлнәзирә уның алдында теҙләнеп тора.)*

Гөлнәзирә. Яҙмыш.
Салауат. Ни тип ҡәһәрләне?

Гөлнәзирә.

Минең ирем ҡурҡаҡ булып сыҡты.
Тимәк, мин бер ҡурҡаҡ ҡатынымын,
Һинең ғәскәреңдән ҡасып ҡайтып,
«Салауат үлде, ғәскәр таралды», тип,
Яман хәбәр сәсеп йөрөй хәҙер —
Ибрай мулла улы Һидиәтулла.
Оятыма сыҙай алмайынса,
Аяғыңа йығылырға килдем.
Кисер, батыр, бер Хоҙайым хаҡына.

Салауат.

Ғәйебең һуң ниҙә?

Гөлнәзирә.

Хаин ҡатыны мин. Шул иблискә
Мин үҙемде бирҙем. Аңлайһыңмы?
Ун етенсе саф яҙымды бирҙем.
Хәҙер бына бөтә йән-тәнемә
Ҡара ҡандар һауҙы был хурлыҡтан.
Аҡланырлыҡ сара өйрәт, батыр!

Салауат *(ҡулынан тотоп аяҡ үрә баҫтыра, һоҡланып йөҙөнә ҡарай)*.

Ә мин әйтһәм: һин ғәйепһеҙ, тиһәм,
Саф алтынға тап төшмәй ул, тиһәм,
Шул алтындай һин таҙаһың, тиһәм,
Нимә үҙгәрер һуң?

Гөлнәзирә.

Бик күп нәмә.
Ул сағында мин үтенер инем:
Ҡалдыр, батыр, мине ғәскәреңдә!

Салауат.

Бисә эше түгел яу сабыу.

Гөлнәзирә.

Яугирҙарҙы, хатта батырҙарҙы,
Беҙ, бисәләр, тыуҙырабыҙ. Инде
Яу йөрөргә генә хаҡыбыҙ барҙыр.

Салауат.

Юҡ. Һеҙҙең бурыс, эйе, тыуҙырыу.
Беҙҙең бурыс — ҡырыу, ҡырылыу.

Гөлнәзирә.

Һынай биреп ҡара миңә, батыр...
Буйым-һыным, ҡылығым, бар булмышым,
Күңелеңә ятып, елкендерһә,
Ҡатының ит. Ике донъяла ла,
Тоғроң булып, мәңге ололармын.
Әле имен саҡта бер бәйгелә
Һине күргәс, ҡойолдом да төштөм.
Тамырҙарым талды. Ә йөрәгем
Талпынды ла һауаларға осто.
Һин осорҙоң, батыр... Яраббийым!
Ни һөйләйем? Оят ҡайҙа булды?
Ә мин оялмайым. Ҡыума мине.
Ҡыума мине! Күңелем тартмай, тиһәң,
Хеҙмәтсең ит. Ошо сәсем менән
Ерҙәр һепереп, хеҙмәт күрһәтермен.
Ниңә өндәшмәйһең?..

Салауат.

Бәхәстәрҙе һүҙ йә ҡылыс менән
Хәл итергә күнеккәнмен. Бында
Икеһе лә көсһөҙ күренә.

Гөлнәзирә. Һүҙ ҙә әйтмә. Тик йөҙөмә бер баҡ.
*(Салауат хәрәкәтһеҙ тора.)*

...Улай булғас, уксың итеп ҡалдыр,
Ете йәштән бирле, йәйә тартып,
Ат өҫтөндә үҫкән ҡыҙ бала мин.
Ҡурҡаҡ ирем өсөн ҡорал алып,
Ҡанлы яуҙа һине ҡурсалармын.

Салауат.

Һин дәһшәтле эштәр өсөн түгел,
Хозур тормош өсөн яратылған.
Был мәхшәрҙән ҡас һин, сибәр ҡатын,
Килгән юлың менән кире йүнәл.
Эйәрләтеп юртаҡ килтерерҙәр...
Эй, Байназар!

Гөлнәзирә.

Сеү! Әгәр кире ҡағыуың хаҡ булһа,
Минең юлым анау ҡаҡ ҡаянан
Упҡын төбөнә барыр туп-тура.
Хәсис түшәгендә ятҡансы,
Ҡара гүрҙә ятыу мең артыҡ.
Бүтән юлым, батыр, юҡ минең.

Саҡырыу тауышын ишетеп, Мария сыға.

Мария. Кемделер саҡырҙың, буғай, Салауат. *(Бил бөгөп иҫәнләшә.)*

Салауат *(аптырап ҡала, Гөлнәзирә ҡойолоп төшә)*. Мария? Һин ни эшләп бында?

Мария. Байназарҙың яраларын бәйләнем.

Гөлнәзирә. Ярай, мин аңланым, күрҙем, Салауат. Мин төшөндөм... Мин китәйем... Мин аңланым.... *(Аҡрын ғына ҡая яғына сигенә.)*

Салауат. Һин ҡайҙа?

Гөлнәзирә *(һаман сигенә)*. Үҙ юлыма... Ана тегендә. Ярай, бәхиллектән булһын... Ғәйепләмә мине, хуш бул, иҫән бул... *(Ярым һаташып һаман сигенә.)*

Салауат *(ҡапыл ынтылып, ҡосағына күтәреп ала)*. Ах, һин, иҫәр болан балаһы. Бер йомарлаҡ ҡояш, нур шәлкеме! Ниңә шулай дер-дер ҡалтырайһың? *(Күтәргән көйө йөҙөнә ҡарай, аяғына баҫтыра.)* Мария, бына һиңә һеңле табылды, үҙ ҡыуышыңа саҡыр. Хәстәрле бул.

Мария *(Гөлнәзирәне етәкләп ала)*. Ярай, батыр. Әйҙә киттек, һылыуым. *(Артҡа әйләнеп, билгә тиклем эйелеп, Салауат менән хушлаша. Гөлнәзирә тыңсыл ғына эйәреп бара. Сығалар. Салауат аҡрын ғына икенсе яҡҡа сыға.)*

Аҡса алған өс-дүрт яугир шаулашып, һөйләшеп уҙа.

— Баҡырлата байтаҡ һондо оңҡот Яҡуп.
— Баҡыры ни, көмөшө ни — бары ла донъя сүбе.
— Сүбен сүп тә... Түкмәйбеҙ бит әле, йыябыҙ.
— Йыйыу ғына түгел, суҡынабыҙ.
— Ә мин суҡынмайым, тфү!..
— Кем уйлап сығарған шул аҡсаны, әҙәм аҙҙырып...

Үтәләр. Илеш инә. Салауат киткән яҡҡа бара.

Илеш. Салауат! Салауат!

Салауат *(ситтән)*. Кем саҡыра мине? *(Сыға.)*

Илеш. Мин, Салауат.

Салауат. Баиш улы Илеш? Һинме был?

Илеш. Мин.

Салауат. Бында һине яҡшы ниәт килтермәгәндер, тимен.

Илеш. Яман ниәт, Салауат, үтә яман ниәт...

Салауат. Атайҙарыбыҙ янашып йәшәгәндәй, янауыңмы был? Һиндә шул хәстәрме?

Илеш. Янамайым.

Салауат. Ә һуң ниңә килдең?

Илеш. Әйтергә тел бармай.

Салауат *(асыулана бирет)*. Әйтә алмағас, ана, ары йөрө.

Илеш *(ҡыйыу)*. Салауат! Мин һине үлтерергә килдем.

Салауат. Мине? Ни өсөн?

Илеш. Һин — Салауат, мин Илеш булған өсөн.

Салауат *(тыныс)*. Ниңә үлтермәнең? Арттан килеп ниңә хәнйәр ҡаҙаманың, Баиш улы Илеш? Атайыңдың кәсебе шул ине бит.

Илеш. Ә мин ҡаҙаманым.

Салауат. Ҡаҙамаһаң, бына хәҙер ҡаҙа.

Илеш. Мин һуңланым.

Салауат. Һуңламаның. Алдыңдамын. Ҡулда ҡоралым юҡ. Ҡаҙа!

Илеш.

Ҡоралһыҙ ҙа хәҙер һин ҡоралды.
Бында килгәс, күрҙем: һин, Салауат,
Юлай улы ғына түгел, илдең улы,
Ил ағаһы икән. Ярһыу арыҫландар
Ҡанға батып алышҡан бер ерҙә
Көсөк талаштырыу урынлымы?
Ил яҙмышы иләнгән бер мәлдә
Ырыу үсен алып йөрөр саҡмы?
Йөрәк әрнегәндә, бармаҡ һыҙлау
Онотола икән.
Бында килгәс, шуны аңланым мин.

Салауат.

Был һүҙҙәрҙе Баиш улы һөйләй,
Хыянатсы Баиш улы һөйләй,
Тиһәм әгәр, әҙәм ышанырмы?

Илеш.

Тик һин ышан.
Һиңә хәнйәр ҡаҙау,
Һиңә тоҫҡап хәҙер уҡ атыу —
Халыҡ йөрәгенә, ил йәненә
Бысраҡ хәнйәр ҡаҙау булыр ине,
Ағыулы уҡ атыу булыр ине.
Һиңә ҡайралғайны ошо хәнйәр
*(ҡуйынынан ҙур хәнйәр сығарып, тубығына ҡуйып һындыра ла ике яҡҡа ырғыта),*
Һиңә осланғайны ошо уҡ.
*(Шулай уҡ һындырып ырғыта.)*
Хәҙер инде теләһәң ни эшләт мине.

Салауат.

Тура һүҙең өсөн рәхмәт, Илеш.
Ир икәнһең, һине ҡул менән дә,
Тел менән дә кәмһетәһем килмәй.
Хөкөмөм юҡ. Һин азатһың. Бар кит.
Юлыңда бул!

Илеш. Башҡортостан ерендә хәҙер ике генә юл бар, Салауат. Береһе — һинең юлың, икенсеһе — һиңә ҡаршы юл. Ҡаршы юлдан китә алмайым хәҙер. Мин ир булып, башҡорт булып донъяға яралғанмын. Китә алмайым! Ҡыума мине, әгәр ышанһаң...

Салауат. Һүҙ көсөнә ышанамын — мин шағирмын.
Һүҙең менән еңдең мине, Илеш.
Эргәмдә ҡал.

Илеш. Әле генә ҡан дошманың инем,
Ҡан ҡәрҙәшең булайымсы, йәштәш,
Һинең ҡаның ҡаныма ҡушылһын.

*(Теше менән үҙенең ҡул һыртын умырып тешләп ала ла, ҡанлы ҡулын Салауаттың яралы beләгенә килтереп ҡуя.)*

Ут һүнә.

## ӨН

Салауат ябылған зиндан алды. Киске ғибәҙәткә саҡырып, сиркәү ҡағалар. Ҡайҙалыр аҙан әйткән тауыш ишетелә. Зинданды башта күренгән ике һаҡсы һаҡлай.

Беренсе һаҡсы. Аҙна торабыҙ, ай торабыҙ...

Икенсе һаҡсы. Торабыҙ ҙа... Кем кемде һаҡлай һуң әле?

Беренсе һаҡсы. Нисек кем кемде? Беҙ ил дошманы юлбаҫар Салауат Юлаевты һаҡлайбыҙ.

Икенсе һаҡсы. Ул зинданда тотҡон, беҙ бында тотҡон. Ул ышыҡта, беҙ һыуыҡта *(бөршәйә)* — айырмаһы бары шул ғына.

Беренсе һаҡсы. Уның башын ҡырҡасаҡтар.

Икенсе һаҡсы. Тимәк, әбей батша үҙе ҡырҡырлыҡ баш бар әҙәмдә. Ә һинең менән беҙҙә ундай баш юҡ. Беҙҙә, ғөмүмән, баш юҡ. Аяҡ менән ҡул ғына бар, ә баш юҡ.

Беренсе һаҡсы. Бәлки, ул беҙгә кәрәкмәйҙер ҙә. Башты әйтәм. Булмағас, ҡырҡмайҙар. Йән тыныс. *(Байтаҡ тын торалар.)*

Икенсе һаҡсы. Эс боша, үлтереп эс боша.

Беренсе һаҡсы *(кеҫәләрен ҡаҡҡылап ҡарай)*. Рәт юҡ, Егор, нәфсеңә баш булырға тырыш.

Икенсе һаҡсы *(кукрәгенән тота)*. Бына бында, таҡмаҡ әйтеп, шайтандар бейей.

Беренсе һаҡсы. Арығас, туҡтарҙар әле.

Икенсе һаҡсы. Былай ғына туҡтамайҙар шул. Иҫертеп йығырға кәрәк ул яуыздарҙы.

Беренсе һаҡсы *(эсен тота)*. Миндә лә нимәлер ҡыймылдай башланы.

Икенсе һаҡсы. Ҡыймылдау ғына пустяк ул...

Ике кеше эйәртеп, Баиш инә. Һаҡсылар уны беләләр. Аяҡ үрә баҫалар.

Баиш. Һаҡлайһығыҙмы?

Беренсе һаҡсы. Һаҡлайбыҙ, түрә.

Баиш. Кемде һаҡлайһығыҙ?

Беренсе һаҡсы. Беҙ, түрә, илбаҫар, юлбаҫар, башкиҫәр, ат ҡарағы, фетнәсе, ҡотҡосо Салауат Юлайҙы һаҡлайбыҙ.

Баиш. Йәнә нимә һаҡлайһығыҙ?

Беренсе һаҡсы. Йәнәме? Йәнәһе лә шул инде.

Баиш. Йәнә һеҙ үҙегеҙҙең баштарығыҙҙы һаҡлайһығыҙ. *(Һаҡсылар үҙҙәренең баштарын тотоп ҡарайҙар.)*

Беренсе һаҡсы. Беҙҙә улай тырышып уҡ һаҡларлыҡ хәтәр баштар юҡ та... Эйеме, Егор?

Икенсе һаҡсы. Знамо, юҡ.

Баиш. Әгәр был башкиҫәр *(зинданға күрһәтә)* ҡулдан ысҡынһа, бөтәгеҙҙе лә тотоп һуясаҡ. Аңланығыҙмы?

Икенсе һаҡсы. Аңланыҡ. Знамо, һуясаҡ.

Баиш. Шулай булғас?..

Икенсе һаҡсы. Шулай булғас, хөрт инде.

Баиш. Йәғни... Йәғни?..

Беренсе һаҡсы. Йәғни булғас, йәғниҙер инде.

Баиш. Йәғни, уяу һаҡлағыҙ!

Беренсе һаҡсы *(тура ҡата)*. Бөйөк императрицабыҙ Екатерина II йәнәптәренең тоғро һалдаттарына ышанырға мөмкин!

Икенсе һаҡсы. Мөмкин!!

Баиш *(тегеләргә ҡарап тора)*. Мөмкиндең хикмәте киң. *(Башын сайҡай, сыға.)*

Беренсе һаҡсы *(Баиш артынан)*. Үҙе басурман, ә батша тип суҡына.

Икенсе һаҡсы. Беҙҙең баштарҙы ҡайғырта башҡорт түрәһе. *(Зинданға ҡарай.)* Бындағы әҙәмде әйтәм, хәтәр зат икән. Бығаулы көйө лә ҡоттарын алып тора. Үҙе йырлай.

Беренсе һаҡсы. Донъя шулай инде: берәүҙәр илап йәшәй, икенселәр — йырлап үләләр.

Алыҫтан музыка ишетелеп ҡала. Кәрзинкә күтәреп Мария инә. Һаҡсылар тураһына еткәс, абынып йығыла.

Мария. Ой хоҙайым, харап ҡына булдым! Харап ҡына булдым. Мин етемдең йәнен алыр инде хужам *(илай)*. Харап ҡына булдым.

Беренсе һаҡсы *(Мария эргәһенә килә)*. Ниңә илайһың, йүнһеҙ?

Мария. Йүнһеҙ, йүнһеҙ, йүнһеҙ шул! Түктем. Харап ҡына иттем.

Икенсе һаҡсы *(килә)*. Нимә түктең?

Мария. Хужам ҡабаҡҡа ебәргәйне, «бер аяғың бында, икенсеһе унда булһын!» тигәйне.

**Беренсе һаҡсы оҙон муйынлы сүлмәктән кәрзинкәгә түгелгән нәмәне бармағы менән ялап ҡарай.**

Беренсе һаҡсы. Араҡы?

Икенсе һаҡсы. Араҡы?!

Мария. Араҡы шул.

Икенсе һаҡсы. Тулы инеме?

Мария. Бик тулы түгел ине.

Беренсе һаҡсы *(үрелеп ҡарай)*. Улайһа, сайпылған ғына бит.

Мария. Сайпылды шул.

Беренсе һаҡсы *(уйланып тора)*. Уның, ахмаҡ ҡыҙ, күберәк тә түгелеүе ихтимал ине бит.

Мария. Ихтимал ине. Юҡ, ихтимал түгел ине.

Икенсе һаҡсы. Ихтимал ине! Һин беләһеңме, беҙ беләбеҙме? Юғиһә, күрәһеңме быны *(йоҙроғон ҡыҙҙың танауына килтереп терәй)*?

Мария. Ихтимал ине... Ихтимал ине... *(Илай.)*

Беренсе һаҡсы. Егор, котелокты килтер әле, ана шул «ихтимал»ын ғына ҡойоп алайыҡ. *(Тегеһе котелок килтерә, котелокты тотоп самалап тора.)*

Икенсе һаҡсы. Уның бит тағы ла күберәк түгелеүе ихтимал ине.

Мария. Ихтимал түгел ине.

Беренсе һаҡсы. Ихтимал ине, йыбытҡы! Бумала баш! *(Һелтәнә.)*

Мария. Ихти-их-ти, ихтимал ине. *(Илай.)*

Икенсе һаҡсы. Шул «ихтимал»ын да өҫтә, Кондратий! *(Өҫтәй, самалап тора.)*

Беренсе һаҡсы. Ә сүлмәктең бөтөнләй түңкәрелеп китеүе ихтимал инеме, Егор?

Мария. Ояттһыҙҙар, әҙәм аҡтыҡтары! Талайҙар!

Икенсе һаҡсы *(Марияның ауыҙын усы менән ҡаплай)*. Ихтимал ине. Бөтөнләй түңкәрелеүе бик ихтимал ине.

Беренсе һаҡсы. Шул «ихтимал»ына ғына ҡалғас, ҡояйыҡ та бөтөрәйек. *(Ҡойоп бөтөрә, ике һауыттыла тотоп тора.)* Ғәҙел булдымы, Егор?

Икенсе һаҡсы. Ғәҙел булды, ғәҙел, Кондратий!

Беренсе һаҡсы *(буш сүлмәкте кәрзинкәгә һала)*. Ғәҙеллек бына шулай еңә лә... Сүлмәге лә ватылыу ихтимал ине бит әле. Бәхетең бар икән, арҡыры баш!

Икенсе һаҡсы *(Марияны ыҫҡындыра)*. Батша һалдаттарына тел тейҙергән өсөн һин тинтәкте бик шәпләп һуҡтырырға ине лә, кешеләренә килеп ҡапманың. Үтә йыуаш, үтә рәхимле әҙәмдәр шул беҙ.

Беренсе һаҡсы. Бар, хәҙер яйлап ҡына ҡайтып кит. Араҡыны түктем, тиң. Ошаҡлаһаң, бына күрәһеңме быны? Атып үлтерермен! *(Мылтығын күрһәтә.)*

Мария *(кәрзинкәһен ала, аҡрын ғына сыға башлай)*. Ҡараҡтар, эскеселәр, әтрәгәләмдәр, тфү. *(Итәген аса биреп үсекләп, сығып йүгерә.)*

Икенсе һаҡсы. Ниндәй тәрбиәһеҙ ҡыҙ! *(Ҡарап ҡалалар.)*

Беренсе һаҡсы. Бынан һуң һиңә: «Күктән араҡы яуҙы», — тиһәләр, ышаныр инеңме?

Икенсе һаҡсы. Валлаһи, ышаныр инем.

Беренсе һаҡсы. Хәҙер «ихтимал»дан ауыҙ иткәндә лә ярай саҡ ҡына...

Икенсе һаҡсы. Иң тәүҙә суҡынайыҡ. Бәрәкәтлерәк булыр. *(Котелокты алдарына ҡуйып суҡыналар.)*

Оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ сәхнә дауам итә. Һаҡсылар алмаш-тилмәш котелок ситенән һемерәләр. Ашыҡмайҙар, сәбәләнмәйҙәр. Беренсе һаҡсы буш котелокты күтәрә.

Беренсе һаҡсы. Ғәҙелме?

Икенсе һаҡсы. Ғәҙел, ғәҙел...

Беренсе һаҡсы *(иҫерә)*. Был донъяла бөтә хикмәт, беләһеңме, нимәлә? Ғәҙел бүлеүҙә. Ғәҙел бүлмәнеңме, бөттө — ыҙғыш, талаш, һуғыш китә.

Икенсе һаҡсы. Знамо, китә.

Беренсе һаҡсы. Ни өсөн Катька батша менән Пугач һуғышты? Бына һин әйт әле — ни өсөн?

Икенсе һаҡсы. Нимә өсөн булһын, тәхет өсөн.

Беренсе һаҡсы. Юҡ, брат. Ғәҙел булмағән өсөн. Әйтәйек, ерҙе... *(Аяғын тупылдата.)* Бына ошо ерҙе!

Икенсе һаҡсы. Ана шул ғәҙеллегең өсөн, эйеме, яратам да үҙеңде, Кондрашка! Ҡана, берәй тамсы ҡалманымы? Һинең өсөн генә эсеп ҡуяйым. *(Котелокты алып ҡарай.)*

Икеһе лә аяҡ үрә баҫа. Сайҡалып торалар. Икеһе ишектең ике яғына атлай.

Беренсе һаҡсы. Бына шулай... Бына шулай ғәҙел генә бүленеп, серем итеп алайыҡ...

Икеһе лә ауа, йоҡлап китә. Мария кире инә. Иҫеректәргә һынап текләп ҡарай. Китә. Бер аҙҙан Илеш инә.

Илеш (*күккә ҡарап*).

О...
Кәкре ай, ҡанлы хәнйәрҙәй,
Ҡаҙалған күк күкрәгенә:
Тирә-яҡҡа йондоҙ түгел,
Сәселгән ҡан тамсылары.
Беҙҙең тәнгә ҡаҙалған ул,
Ҡандарыбыҙ шулай аға.
Ҡанлы хәнйәрҙәй, кәкре ай —
Фажиғәле, хәтәр билдә:
Тимәк, бөгөн йә дошманды,
Йәки беҙҙе үлем көтә.
Ох, Салауат! Әгәр һине
Зинданыңдан ҡотҡара алһам,
Йыйған ризыҡ, эскән һыуҙар,
Уҙған юлдар, күргән көндәр —
Бары хәләл булыр ине.
Әле ярһыу арғымаҡтар
Эйәрҙәрен һалмағандар,
Талмағандар ҡанаттары
Дауыл үткән шоңҡарҙарҙың.
Кәкре айҙай, ҡанлы хәнйәр
Салауаттың күкрәгендә:
Һаҡмар һыуҙан Таныпҡаса
Салауаттың ҡаны аға.

Ул хәнйәрҙе алырмын мин
Туғанымдың күкрәгенән.
Байназар!

Байназар менән Мария инә.

Мария. Бында бары ике һаҡсы. Ана улар.

Байназар *(хәнйәрен ала)*. Икеһенә ике һелтәү етә.

Мария *(уның ҡулын тота)*. Улар иҫерек, үлеп йоҡлайҙар. Зарурһыҙ йән ҡыйма, Байназар.

Байназар. Уларға йән тағы *(ҡулын төшөрә)*.

Мария. Арала ошо имән ишек кенә. Теге яҡта Салауат.

Илеш. Бар, Мария, һин аттар янында тор. Күҙҡолаҡ бул!

Мария. Аттар бәйле.

Байназар. Мария! Кит бынан, кит, һөйөклөм, үтенәмен...

Мария. Йә, тәңреһе, рәхимеңдә бул! *(Суҡына, сыға.)*

Илеш. Хоҙайға тапшырҙыҡ! Ошо ишекте әгәр аса алмаһаҡ, икебеҙ ике яҡта мәңге ҡаласаҡбыҙ, Салауат. Беләһеңме, һин кем? Юҡ, белмәйһең. Һин пәйғәмбәр, ил иманы хәҙер, Салауат.

Байназар. Асырбыҙ! *(Тимер менән ишекте ҡайыра.)*

Илеш. Йөрәгем, йөрәгем өҙөлә, Байназар! *(Ишекте ҡайыра.)*

Байназар. Тағы бер ынтылыш! Бөтәһе лә килер зир-зәбәр!

Икеһе яурындары менән ишекте этәрә. Шул саҡ ике кеше эйәртеп Баиш килеп сыға. Арттан ташланып, Илешкә хәнйәр ҡаҙай.

Баиш. Бына һиңә! Ҡарауыл! Ҡарауыл! Талайҙар! Үлтерәләр!!! Тегенеһен, тегенеһен тотоғоҙ!

Байназар ике кеше менән хәнйәр һелтәп алыша. Береһен үлтерә, икенсеһе уға арттан сәнсә лә ҡаса. Байназар йығыла.

Байназар. Мария! Ҡас, Мария! Был йәһәннәмдән ҡас, ҡәҙерлем *(шыма)*.

Баиш. Ҡана, йөҙөнә төкөрөп, үсем ҡандырайым, дошман! *(Илеште әйләндерә, ҡото осоп, артҡа сигенә.)* Илеш?! Улым Илеш?

Илеш. Мин. Ниңә үлтерҙең мине, Баиш тархан? Ниңә үлтерҙең? Миңә әле бары егерме ике генә бит. Ниңә үлтерҙең?

Баиш *(сигенә)*. Юҡ-юҡ... Мин үлтермәнем... үлтермәнем... йә хоҙай! Мин үлтермәнем!..

Илеш. Ә кем үлтерҙе?

Баиш. Тәҡдир үлтерҙе. Күктәгенең ҡәһәре төштө! Юҡ, мин түгел, мин түгел! *(Кире килеп, Илештең алдына теҙләнә.)*

Илеш. Күктәгенең ҡәһәре һиңә төштө, Баиш тархан. Улың ҡаны һинең ҡулдарыңда. Ул ҡан ана һинең йөҙөңә, күҙҙәреңә сәсрәгән!.. Күктәргә сәсрәгән ул ҡан! Һурып ал шул хәнйәреңде күктең күкрәгенән...

Баиш. Һаташып йән бирә... Ярабби! Кисер мине, улым. Ғәфү ит...

Илеш. Мин үлгәнмен. Ә үлгәндәр ғәфү итмәйҙәр *(йән бирә)*.

Баиш. Йән бирҙе... Ә йөҙөндә һаман йәшәү нуры, әйтерһең дә, аҡшам яҡтыһы... *(Оҙон пауза. Аяҡ үрә баҫа.)*

...Башҡорт тупрағының буласаҡ ханы!
Дәрәжә өсөн хаҡты мул түләнең:
Малдар түктең, тәкәбберлегеңде
Үҙ аяғың менән үҙең тапап,
Олторағы булдың хакимәнең.
Ҡан ҡәрҙәштәреңде зар илатып,
Аҫтың, киҫтең, күҙ ҙә йоммай һаттың.
Балаң ҡаны менән ҡулың йыуҙың...
Башҡорт аймағының буласаҡ ханы!
Дәрәжә өсөн хаҡты мул түләнең.
Ни көтһә лә алда, сигенеү юҡ.
Шик-шөбһәһеҙ мин хан буласаҡмын.
...Дәрәжә өсөн иманыңды һуйҙың,
Башҡорт тоҡомоноң буласаҡ ханы!
Ә ниндәй хан бәрхәт келәм юлдан
Тәхетенә килгән? Ниндәй хан?
Өҫтән келәм булһа, аҫта барыбер
Әҙәм һөйәктәре түшәлгән.

Ошо илдең ханы буласаҡмын.
Барыһының, барыһының хаҡын
Сығарырмын,
Үҙ ваҡыты еткәс...

Баиш монологының һуңынараҡ Мария сыға. Уның ҡулында — ҡылыс.

Мария. Хан!

Баиш *(борола)*. Мин хан.

Мария *(ҡылыс менән саба)*. Тәхетең ҡотло булһын, хан!

Ут һүнә.

## ТӨШ

Салауат ябылған зиндан. Батыр шул уҡ ҡиәфәттә ултыра. Икенсе бер мөйөштә тәхет тора. Унда Екатерина II ултыра. Башта ут Салауатты ғына яҡтырта.

Екатерина II *(ҡараңғынан)*.

Шул кешене күрһәтегеҙ миңә,
Имгәнмәгән көйө күрһәтегеҙ,
Хәҙер үк. *(Ут төшә.)*

Салауат *(сынйырҙарын сылтыратып, аҡрын ғына тәхеткә табан атлай)*.

Һин дә бындамы ни, әбей батша?
Уйлағайным: һинең тәхет бейек,
Затлы һарайҙарҙың затлыһында,
Яҡты биналарҙың яҡтыһында.
Баҡһаң, зиндан икән торған йортоң.
Шул зинданда үҙең иң баш тотҡон.
Тәхет тигәнең дә тәхет түгел,
Дарға менә торған баҫҡыс икән.

Екатерина II.

Уятығыҙ шуны! Һаташа ул...

Салауат.

Тотҡон ғына түгел, хатта ҡол һин.
Ҡолдар батшаһының ҡол булмауы
Мөмкин түгел. Алтын тажың һалып,
Маңлайыңды күрһәт! Унда, шикһеҙ,
Ҡоллоҡ мөһөрө баҫылғандыр. Күрһәт!

Екатерина II.

Уятығыҙ! Мин ҡурҡамын унан.

Салауат *(сынйырын сыңлатып ала)*.

Мине аҫырға, тураҡларға, батша,
Көс-хәлеңдән килә. Уятырға
Ҡөҙрәтеңдән килмәй. Тырышма ла.
Минең төштәремә һин баш түгел.
Әйтер һүҙең булһа, төшөмдә әйт,
Әйтмәҫ булһаң, китәм.

Екатерина II.

Ҡал. Ҡурҡыуым үтте. Һин барыбер
Тере мәйет хәҙер, йәнһеҙ шәүлә.
Ҡазаң да юҡ һинең, язаң да.

Салауат.

Ялғанлайһың, батша, һин ҡурҡаһың,
Ҡурҡасаҡһың беҙҙән. Ҡулыбыҙҙан
Ҡорал төшкәс, беҙҙең рухтарыбыҙ,
Өрәктәребеҙ һине эҙәрләр.
Ете төн урталарында, яңғыҙ ҡалғас,
Һинең йомшаҡ йылы түшәгеңә
Һин саптырған беҙҙең ҡанлы баштар
Берәм-берәм һикереп менәсәк тә
Һинән яуап талап итәсәк.
Барынан алда Пугач батшаның
Хәтәр башы тәгәрәп киләсәк.

Екатерина II.

Пугач — батша түгел, илбаҫар ул!

Салауат.

Батша ине ул. О нindәйерәк батша!
Буйы-һыны, ҡиәфәте, аҡылы,

Ғәҙеллеге, күҙендәге тылсым,
Рухындағы илаһи бер көсө —
Бөтәһе лә батша затлы ине.
Романов тип яратылмаһа ла,
Хоҙай уны батша яратҡан...
Юҡһа һинең һарай-тәхетеңде
Дер һелкетеп, тамырын ҡаҡшатырлыҡ
Ҡөҙрәтте ул ҡайҙан алыр ине?
Ҡайҙан алыр инек ҡеүәтте беҙ?

Екатерина II.

Бахыр ҡырағай, бер ҡатлы йән, сабый,
Тәхет ҡаҡшаттыҡ, тип уйлайһыңмы?
Хәйер, быны күптәр фараз итер
Хәҙер ҙә һәм килер заманда ла...
Ә асылда минең тәхетемде
Бары саҡ-саҡ ҡына һелкеткеләп
Урынына ныҡлап ултырттығыҙ.
Кәм тигәндә,
Бер йөҙ йылға хәүеф уҙҙы хәҙер.

Салауат.

Үҙ-үҙеңде йыуатаһың, батша, —
Хас эш түгел һинең дәрәжәңә.

Екатерина II.

Нығыттығыҙ! Тәхет тирәһендә
Өйөр-өйөр йөрөгән аҡһөйәктәр,
Төрлө ҡыҫыр хыялдарға бирелеп,
Таж ҡәҙерен онота башлағайны.
Пугач ҡылысы бер һелтәнеү менән,
Бөтәһе ант биреп, иман уҡыны.
«Ҡотҡар, хакимә!» — тип ялбарып,
Тәхет тирәһенә йәбештеләр.
*(Аяғы менән тәхет тервүҙәренә ҡағыла.)*
Бына уларҙың арҡалары. Бына
Баштары... Елкәләре... *(Кемгәлер тибеп ала.)*
Әй, кемдәрегеҙ унда
Ҡымшанмаҡсы итә? Шымығыҙ!
*(Тәхеткә ныҡлабыраҡ ултыра.)*
Бына шулай... Эстән серемәһә,
Тыштан уны һис кем ҡолата алмаҫ.

Салауат.

Хәҡиҡәтең әгәр хаҡтан булһа —
Һиндәй ҡәһәр! Беҙҙең түккән ҡандар,
Тимәк, һиңә ғүмер өҫтәгән?!

Екатерина II.

Ғүмер генә түгел, үлемһеҙлек...

Салауат.

Беҙҙең үлем һиңә үлемһеҙлек
Биргән булып сыға. Шулаймы?

Екатерина II.

Эйе, шулай. Аңланыңмы хәҙер
Бар эшеңдең бушҡа ҡылынғанын,
Бар өмөтөң зая булғанын?

Салауат.

Ҡыуанырға ашыҡмай тор, батша.

Екатерина II.

Ә мин ашыҡмайса ҡыуанам.

Салауат.

Ҡыуанмай тор. Әле генә миңә
Батша дөрөҫлөгөн төшөндөрҙөң.
Унан башҡа тағы бер дөрөҫлөк —
Ялпы дөрөҫлөгө бар, хакимә.

Екатерина II.

Ялпы дөрөҫлөгө?! Ул ни тағы?

Салауат.

Ул, хакимә, бына нәмә: беҙҙең
Үсле дарманыбыҙ ташып сыҡҡас,
Һинең йәнең ус төбөнә етте —
Беҙ дәһшәтле, ҡот оҫҡос көс икән —
Ошо дөрөҫлөктө төшөндөк.
Һәм үҙебеҙҙе танып белдек шулай.
Иман камил. Хәҙер бер әжәлдең
Күҙенә тура ҡарап, был донъянан
Ыңғайларға була тегеһенә.
Выждан тыныс...

Екатерина II.

Выждан тыныс? Һинең выждаnыңмы?

Салауат.

Эйе, батша, минең выжданым.

Екатерина II.

Йылға-йылға аҡҡан башҡорт ҡаны
Кем намыҫында?

Салауат.

Кем намыҫында?

Екатерина II.

Һинең яуыз намыҫыңда, һинең...
Бауырыңа ҡара ҡан һауҙырып,
Ғүмереӊ буйы ошо ғазап һинең
Намыҫыңды талар.

Салауат.

Ҡылғанымдың сауап, яҙыҡтарын
Тәңре үлсәр, батша, һин түгел,
Беләм, йөгөм ауыр минең. Ауыр йөгөм.
Шуны күтәрергә әҙермен мин.
Ә һин?
Ә һин ни алаһың үҙең намыҫыңа?
Әгәр намыҫың булһа...

Екатерина II.

Мин, сабам тип, ҡылыс күтәрмәнем башлап,
Ут һалам тип, саҡма саҡманым мин.

Салауат.

Ә кем мәжбүр итте беҙҙе? Кем һуң?
Әллә тоҡтомалға ҡанға һыуһап,
Йәки үҙебеҙгә үлем теләп атҡа мендекме беҙ?
Һиңә генә түгел, беҙгә лә бит,
Хатта беҙгә лә бит йән ҡәҙерле.

Екатерина II.

Кем һуң мәжбүр итте?

Салауат.

Йөрәккә үс һалдырған да һин булдың!
Ҡулға ҡорал алдырған да һин булдың!
Хәҙер һинән үҙем яуап алам, батша! —
Бынан өс йыл әүәл башҡорт хәлен
Бәйнә-бәйнә һөйләп, ғәҙел хөкөм,
Шәфҡәт ҡулың һорап, ҡағыҙ яҙҙым.
Алғанһыңдыр.

Екатерина II.

Алдым.

Салауат.

Ниндәй яуап ҡайтарҙың һин миңә?

Екатерина II.

Ҡайтарманым.

Салауат.

Ҡайтарҙың һин. Яуап итеп ул саҡ
Беҙҙе өркөтөргә, бөлдөрөргә,
Яндырырға ғәскәр ебәрҙең һин,
Ана шулай һуҙҙың шәфҡәт ҡулыңды...
*(Екатеринаның ҡулына, йөҙөнә, муйынына оҙаҡ ҡарап тора, төртөп күрһәтә.)*
Ошо нескә, матур аҡ ҡулыңды
Һуҙҙыңмы һин беҙгә, әбей батша?
Ҡарар күҙгә һин һис яуыз түгел,
Хатта һөйкөмлө һин, мөләйем.

Екатерина II *(ҡатындарса ҡыланыбыраҡ)*.

Улай теклəп ҡарау əҙəпһеҙлек.
Был бит һарай — ҡырағай дала түгел.

Салауат.

Матурлыҡтың хаҡы ҡайҙа ла бер:
Йәки алтын, йәки ир башы.

Екатерина II.

Быны аңлау һине күтәрә...
Әгәр яман юлға тайпылмаһаң,
Вәзир булыр уҙаманһың икән.

Салауат *(һаман текләп ҡарауын дауам итә)*.

...Ә муйының... муйындарың, батша,
Аҡҡош муйыны һымаҡ ап-аҡ, зифа...
Әгәр Пугач батша әмер бирһә.

Екатерина II.

Пугач — батша түгел!

Салауат.

Батша!
Батша Пугач әгәр әмер бирһә,
Һине аҫырға әмер бирһә миңә,
Ҡулым бармаҫ ине, юҡ, хакимә,
Тотонорға баҙнат итмәҫ инем.
Мин ул эште Баиш тигән мәлғүн,
Һатлыҡ бер әҙәмгә ҡушыр инем —
Һинең шундай шаҡшы бер ҡолоң бар...
Был муйыныңа бысраҡ арҡан түгел,
Ебәк еп һалырға бойорор инем —
Матурлыҡтың хаҡын беләбеҙ беҙ...

Екатерина II *(әсе тауыш менән)*.

Уятығыҙ уны. Язалаусы ҡайҙа? Уятығыҙ!

Ут һүнә. Пауза. Салауат стенаға һөйәлеп, ойоп ултыра. Тышта тауыш.

Тауыш. Уятығыҙ уны. Уятығыҙ!

Беренсе һаҡсы *(зиндан ишеген асып инә)*. Әй, әй! Тор!

Салауат. Нимә бар?

Беренсе һаҡсы. Әллә ни юҡ улай. Уҙған төндө ана тегендә, тышҡы ишек төбөндә, башҡорттар бер-берен һуйғандар.

Салауат. Ниндәй башҡорттар?

Беренсе һаҡсы. Белмәйем. Беҙ иҫереп йоҡлап ҡалғанбыҙ. Айыҡ булһаҡ, беҙҙе лә һуйырҙар ине. Ярай Хоҙай һаҡлаған. Әйҙә, йыйын.

Салауат. Ҡайҙа?

Беренсе һаҡсы. Белмәйем. Башта доғаңды ҡыл, унан кәпәсеңде кей.

Салауат. Ҡайҙа алып баралар мине?

Беренсе һаҡсы. Ҡайҙа булһын? Йә дар ағасына, йә киҫмәккә, йәки йыраҡ-йыраҡ ерҙәргә...

Сыға башлайҙар. Ут һүнә.

## ҺУҢҒЫ ӨН

Балтик диңгеҙендә — ҡаҡ таш утрау. Диңгеҙ шауы һәм сынйырҙар сыңлауына хас музыка ишетелә. Ҙур-ҙур таштар күтәреп, бер-бер артлы тотҡондар уҙа. Таштарҙы диңгеҙгә ырғытып, аҡрын ғына кире боролалар. Төрлө тотҡон ҡулындағы ташты төрлөсә ырғыта: берәүҙә — асыу, берәүҙә — өмөтһеҙлөк, берәүҙә — әле ҡанмаған үс һәм бөтмәгән көс, берәүҙә — битарафлыҡ. Арттанығраҡ Юлай, Ҡәнзәфәр, Уҡап инә.

Уҡап. Нисәмә йыл диңгеҙ быуабыҙ. Мәңге туя белмәҫ ҡомһоҙ даръя, мә, йот! *(Ташын ырғыта.)*

Ҡәнзәфәр. Беҙ ҙә диңгеҙ инек бер заман. Киптерҙеләр беҙҙе, ҡороттолар... Йәһәннәмгә хәҙер юл һалабыҙ — үҙебеҙ өсөн. Таш юл! *(Ташын ырғыта.)* Ныҡлы юл!

Уҡап. Унда барыр өсөн юл кәрәкмәй. Беҙҙе алырға фәрештәләр килер күктән. Миңә улар, әлбиттә, сыуашса өндәшерҙәр...

Ҡәнзәфәр *(ирония менән)*. Беҙгә тигән фәрештәләр аҙашҡандар, Уҡап. Йәйәүләп кенә барырға тура килер.

Уҡап. Улай ҙа була. Аяҡтар үҙебеҙҙеке... *(Тапаныр ала.)*

Былар һөйләшкәндә, Юлай ташын күтәргән көйө оҙаҡ баҫып тора, ҡапыл ҡулынан ташы төшөп китә, үҙе аҡрын ғына сүгәләп төшә.

Ҡәнзәфәр *(Юлай эргәһенә килә)*. Нимә булды, Юлай ағай? *(Юлай өндәшмәй.)* Юлай ағай, тим!

Юлай. Сәскә. Яңы ғына тыуған күксәскә...

Уҡап. Ысынлап, сәскә... Күпме ғүмер үлән ҡыяғы ла күргән юҡ ине. Ҡайҙан килде икән был сабый? Ниңә килде икән?

Ҡәнзәфәр. Ниңә булһын? Беҙгә насип түгел тормош йәмен хәтерләтеп, йөрәктәргә әрнеү һалыр өсөн килтергәндәр уны яман рухтар.

Юлай. Юҡ, Ҡәнзәфәр, хоҙай рәхмәте был! Ташта сәскә үҫә икән, тимәк, өмөт бар әле.

Ҡәнзәфәр. Өмөт? Ниндәй өмөт? Нимәгә өмөт?

Юлай. Батшалар ҙа мәңге йәшәмәй...

Уҡап. Унан беҙгә ни файҙа?

Юлай. Әбей батша үлер ҙә, яңы хаким тәхеткә менгәс, беҙҙе ярлыҡап указ сығарыр.

Ҡәнзәфәр. Их, Юлай ағай! Беҙҙе ярлыҡарлыҡ уҡ ахмаҡты батша итеп ҡуйырҙармы икән? Ай-һай!

Юлай. Бәлки, ҡуйырҙар ҙа...

Ҡәнзәфәр. Юҡ, мин риза түгел! Әгәр беҙҙе батша ярлыҡаһа, бөтә эшебеҙ нахаҡ, ғәйебебеҙ еңел булып сыға. Йәғни ҙә беҙ уйын уйнағанбыҙ бары. *(Ярһып.)* Юҡ! Беҙгә, тимәк, Салауатҡа — батша рәхиме кәрәкмәй! *(Юлай төшөргән ташты һәм тағы ике ташты алып, берәм-берәм диңгеҙгә ырғыта.)* Кәрәкмәй!!! Кәрәкмәй!!!

Уҡап. Ә нимә кәрәк һуң беҙгә?

Ҡәнзәфәр. Ошо тиклем заман эсендә шул тиклем ҙур Рәсәйҙә бүтән Пугач, бүтән Салауат тыумау мөмкин түгел! Шулар кәрәк беҙгә. Бөтә өмөт — ана шуларҙа! *(Күксәскәне аша атлап сығып китә.)*

Уҡап менән Юлай диңгеҙ аша алыҫҡа ҡарап тора.

Уҡап *(сәскә алдына килеп баш эйә)*. Барыбер рәхмәт һиңә, бәләкәс сәскә!

Юлай сәскәгә баш ҡаға. Сығалар. Таш күтәреп, Салауат инә. Ташын диңгеҙгә ырғыта. Алыҫта, әллә таш араһынан, әллә диңгеҙҙән сығып, Ану һыны күтәрелә. Уның ҡулында — кәрзинкә, кәрзинкәлә — сәскәләр. Салауат ирекһеҙҙән артҡа сигенә. Хайран ҡалып ҡарап тора.

Салауат.

Ни ғәжәп был? Инде нисәнсе ҡат
Күҙ алдыма ошо бер һын баҫа.
Әллә Гөлнәзирә һыны хәтерләүҙән,
Һағышымдан шулай ярала ла
Килеп-килеп зиһенемдә ала?!

Башта бала ғына һымаҡ ине,
Тора-бара еткән ҡыҙға әйләнде.
Күпме йылдар, тирә-яҡта бары
Өнһөҙ таштар, һалҡын, ҡотһоҙ даръя,
Аҡсарлаҡтар зары, бығау сыңдары...
Шул бушлыҡта ҡапыл ҡалҡып сыға
Был зифа һын. Кем ул? Гөлнәзирә,
Алыҫтарҙа ҡалған йәрем, һинме?
Мөхәббәтем, һинме?

Ану. Мин!

Салауат. Һин? Ә һин кем һуң?

Ану. Ану. Матс ҡыҙы Ану мин.

Салауат. Ҡайһы Матс?

Ану. Матс берәү генә.

Салауат. Йәшел ярҙа торған Матсмы? Беләм уны. Бында килгәне бар.

Ану. Эйе. Шул. *(Ҡарана.)* Был яр ниндәй шыҡһыҙ... Беҙҙең ярҙа инде гөлдәр сәскә ата. *(Кәрзинкәһен күрһәтә.)* Ҡоштар һайрай. Унда диңгеҙ ҙә һөйкөмлө. Шуларҙың бөтәһенә беҙ — балыҡсылар хужа.

Салауат. О сабый йән! Үҙ тупрағыма үҙем баш, тип уйлай инем мин дә бер саҡ. Шул уйҙарым өсөн бына ниндәй бүләк алдым. *(Бығауын һелкетә.)*

Ану. Шуның өсөн бығау? Хәйер, булыр. Атайым әйтә, оло Ерҙә яманлыҡ күп, ти, унда. Беҙҙә имен. Бары һеҙҙе генә ҡыҙғанабыҙ.

Салауат. Беҙҙе ҡыҙғанырға ярамай. Беҙ — енәйәтселәр. Каторжандар беҙ.

Ану. Атайым әйтә, һеҙ енәйәтселәр түгел, һеҙ батырҙар, ти, һин, Салауат, шулар башлығы, ти. Минең атайым Матс бөтәһен дә белә...

Оҙон тынлыҡ.

Салауат. Ану! Шөкәтһеҙ был ярға ниңә киләһең һин, Ану?

Ану. Һине күрергә.

Салауат. Мине? Ни өсөн?

Ану. Күрмәй тора алмағаным өсөн. Тора алһам, бер ҙә генә килмәҫ инем.

Салауат.

Ә мин һине хыялым уйнауы тип,
Серле һын тип ҡабул иттем бары...

Ану.

Мин ысынмын! Һинең хаҡта ул саҡ
Атайым һөйләгәндәр йөрәгемә
Ниндәйҙер бер шауҡым, һағыш һалды...
Бала саҡтан шуға бында килеп,
Һинең ярһып таштар аҡтарғанды
Оҙаҡ-оҙаҡ яңғыҙ ҡарап торҙом.
Баштараҡ һин миңә асыулы ла,
Килбәтһеҙ ҙә булып төҫмөрләндең.
Шикләнәм дә йәнә киләм үҙем...
Хәҙер инде үҫеп буйға еттем.
Был утрауҙа иң һөйкөмлө кеше
Һин икәнен белдем күңелем менән.
Ә һин һаман таштар аҡтараһың,
Әллә матур һарай һалаһыңмы
Һыу төбөндә?

Салауат.

Таштар түгел, диңгеҙ упҡынына
Берәм-берәм шулай көндәремде,
Айҙарымды, йылдарымды, Ану,
Ырғытамын.
Миңә шундай яза бирелде бит.

Ану.

Ә мин беләм, һин ташлаған таштар
Мәрмәр һарай булып өйөләр ҙә
Бер ҡояшлы көндә, нурҙар сәсеп,
Һыу аҫтынан өҫкә ҡалҡып сығыр.
Шуға күрә һәр килгәнем һайын:
«Минең һарай инде бөткәндер», — тип
Йүгерә-йүгерә киләм.

Салауат.

Ниҙән яралды был хыялдарың?

Ану.

Һинең хаҡта йөрөткән уйҙарымдан.

Салауат.

Уйҙарыңа түгел, минең хатта
Төштәреңә керер хаҡым юҡ.

Ану.

Ни өсөн?

Салауат.

Күрәһең дә, ҡул-аяҡта бығау.

Ану.

Йөрәгеңдә бығауҙарың юҡ бит.

Салауат.

Бығау... Бығау! Йәндә, тәндә бығау!
Һин эргәмдә. Арабыҙҙа упҡын!
Ерҙә бәхет, сафлыҡ, мөхәббәт
Бар икәнен хәтерләтер өсөн
Мәрхәмәтһеҙ яҙмыш һине, Ану,
Миңә яза итеп ебәрҙеме?
Йәшлегемде, йәшел еркәйемде,
Илкәйемде алға килтерергә
Һине ғазап итеп ебәрҙеме?..
Һин — тыуыр көн, Ану, мин — үткән көн.
Арабыҙҙа ҡара төн ята.

Ану.

Ни һөйләйһең? Һис ни аңламайым.
Мөхәббәт ул бары бөгөн йәшәй.
Үткәндәре уның — хәтерләүҙәр.
Киләсәге — әле тик хыял.
Мөхәббәт ул бары хәҙер йәшәй.

Салауат.

Ә тотҡондоң хатта бөгөнө лә юҡ.
Бөгөнөм юҡ минең.

Ану *(аңламай йәки аңларға теләмәй)*.

Бар, Салауат!
Йылдың иң оҙон был көнөндә беҙ
Ҡояш сыҡҡан саҡта күрештек!
Оҙон бер көн алда — күпме ғүмер —
Эргәңдә мин. Күҙҙәремә ҡара... Күҙҙәремә...

Салауат *(Ануға әсирләнеп ҡарап тора)*.

Йөрәгемдә йәнә татлы ғазап,
Күңелемдә йәнә балҡыш һиҙәм...
Ҡатын-ҡыҙҙың бөйөк, гүзәл рухы!
Һүнеп барған йәнемә һин тағы ла
Өмөт өрҙөң. Талған ҡанатыма
Ғәйрәт бирҙең. Бөйөк, гүзәл рух!
Йөрәгемә яралар һал. Мин уларҙы
Яу яраһы кеүек ҡәҙерләрмен.

Ану.

Яра түгел, дауа булыр инем, Салауат.

Салауат.

Ни булһаң да, татлы. Һин йәшлегем минең —
Мөхәббәтем һыны: алыҫ, яҡын
Ике шәүлә бергә ҡушыла төҫлө,
Ике тәндә бер йән балҡый төҫлө.
Алыҫына, уйлап, уйым етмәй,
Яҡынына, үрелеп, буйым етмәй,
Әммә барыбер татлы...

Ану *(яҡын уҡ килә)*. Минең буйым етә. Бына күрәһеңме? *(Салауаттың битенә бармаҡ остары менән ҡағыла. Үҙе ҡалтырана.)* Һиңә буйым етә.

Салауат *(быҕаулы ҡулдарын алға һоноп ынтыла. Туҡтай)*.

Миңә ҡағылырға ярамай. Юҡ!

Ану.

Ярай, ярай.

Салауат.

Ярамай, ҡурҡам.

Ану.

Һин бит батыр, ниҙән ҡурҡаһың?

Салауат.

Мин ҡағылһам, һиңә бәлә килер.

Ану.

Ниндәй бәлә? Ниңә? Ни өсөн?

Салауат.

Минән күҙен алмай, Яҙалаусы
Гел күҙәтә. Мин яратҡан барлыҡ,
Барлыҡ затҡа ҡаза килтерә ул.

Ану. Ә мин Яҙалаусынан да, яҙанан да ҡурҡмайым! Мин һине яратам! *(Салауаттың күкрәгенә башын һала. Артта Яҙалаусының шәүләһе сағылып ҡала. Яҡында ғына һыбыҙғы тауышы, көлкө, шау-шыу ишетелә.)*

Салауат. Ниндәй шау-шыу, ниндәй моңдар был?

Ану. Бөгөн байрам. Ҡояш байрамы. Иң оҙон юл үтә бөгөн ҡояш, иң бейек юл. Төн уртаһы еткәс, абаға сәскә ата. Уны күргән кеше бик бәхетле була. Бәлки, беҙ ҙә уны табырбыҙ.

Салауат. Ошондамы?

Ану. Юҡ, тегендә! Беҙҙең ярҙа йәшел болон, ҡуйы урман бар.

Салауат. Эйе, болон йәшел була...

Ану. Йәнә, Салауат, беләһеңме, нимә...

Салауат. Нимә, Ану...

Ану. Бөгөн теләгән теләк ҡабул була. Ни теләйем һиңә?

Салауат *(уйланып тора)*. Башҡортостан керһен төшөмә — анау офоҡ артындағы йәшел Уралым төштәремә керһен...

Ану. Теләйем, теләйем, теләйем...

Байрамса кейенгән бер нисә ир һәм ҡатын уйнай-көлә инә. Берәү һыбыҙғы уйнай. Бер ир һыйыр маскаһы кейгән, мөгөҙөнә сәскәләр уралған. Ул бейей. Алда — Ануҙың атаһы Матс.

Матс. Һи-һи-һи! Байрам ҡотло булһын. Теләгән теләктәрҙе тәңре ҡабул ҡылһын! *(Салауатҡа.)* Байрам рухы килтерҙек һеҙгә, ҡабул ит, батыр.

Салауат *(ике ҡулын күкрәгенә ҡуя)*. Рәхмәт, мәрхәмәтле Матс. Рәхмәт барсағыҙға!

Матс. Һи-һи-һи-һи-и! Бөтәгеҙ ҙә бында йыйылығыҙ! Бында, бында! *(Ҡул һелтәй.)*

Берәм-берәм Юлай, Ҡәнзәфәр, Уҡап һәм башҡа тотҡондар сыға.

Юлай *(баш эйә)*. Байрамығыҙ мөбәрәк булһын, хужалар.

Матс. Бергә булһын!

Тауыштар. Шулай булһын! Шулай булһын!

Матс. Арағыҙҙа һеҙҙең кем өлкән?

Юлай. Мин.

Матс. Бына нәмә, ҡорҙаш: беҙ, эстондар, шулай уйлайбыҙ.

Тауыштар. Эйе, эйе, шулай уйлайбыҙ. Әйтеп бир, Матс.

Матс. Әйтеп бирәм: күпме заман инде был утрауҙа бары һеҙ ҙә беҙ... Беҙ, эстондар, шулай уйланыҡ...

Тауыштар. Эйе, шулай уйланыҡ. Әйтеп бир, Матс. Әйтеп бир!

Матс. Бынан ары, икмәк-тоҙ алышып, уҡмашып йәшәйек. Беҙ һеҙҙе үҙ ҡоробоҙға ҡабул итәбеҙ. *(Эстондар, хуплап, гөж килә.)*

Юлай. Беҙ бит закондан тыш кешеләр... каторжандар.

Матс. Беләбеҙ, беләбеҙ! Һеҙ батшаға ҡул күтәргәнһегеҙ.

Юлай. Ҡул күтәрҙек.

Матс. Беҙ батшаны күреп белмәйбеҙ. Яҡшы затмы, яманмы — белмәйбеҙ. Ә һеҙҙе беләбеҙ. Бер утрауҙа ғүмер һөрәбеҙ бит.

Уҡап. Һөрәбеҙ ҙә... Ирек менән ирекһеҙлек пар булырмы?

Матс. Ирекһеҙлектән ирек тыуа. Әй, ҡыҙ-ҡырҡын! Һыйҙарығыҙ ҡайҙа?

Ҡыҙҙар ҡулдарындағы кәрзинкәләренең япмаларын асып, һүҙһеҙ генә һый тәҡдим итәләр.

Юлай. Бисмилла! *(Бер һыныҡ ала ла теҙләнеп ултыра.)*

Матс. Йәгеҙ, етешегеҙ. Рәхим итегеҙ! Бынан һуң да ризыҡтар уртаҡ булһын.

Бөтәһе лә берәр һыныҡ алып, ауыҙҙарына килтерәләр. Инде ҡаптым тигәндә ҡапыл ҡатып ҡалалар. Артҡа Яҙалаусы килеп баҫа. Аҡрын ғына ут һүнә. Ике ерҙә ут тоҡана. Салауат һәм Яҙалаусы ғына күренә.

Салауат. Тағы һин?

Язалаусы. Тағы мин.

Салауат. Һаман һин!

Язалаусы. Һаман мин.

Салауат. Донъяла шулай бер генә лә үҙгәреш юҡмы ни?

Язалаусы. Юҡ. *(Текләп ҡарай.)* Хатта һин дә үҙгәрмәгәнһең. Хәйер, онота яҙғанмын, хакимә донъя ҡуйҙы икән. Тәхеткә яңы батша ултырҙы.

Салауат. Ниңә килдең тағы? Нимә кәрәк һиңә?

Язалаусы. Артыҡ нәмә кәрәкмәй. Хатта тәүбәң дә кәрәк түгел. Тәүбәңдең хаҡы төштө хәҙер. Хаҡы юҡ уның — бөтөнләй.

Салауат. Бөтөнләйме? Ни эшләп?..

Язалаусы. Башҡорт ерендә хәҙер зыярат тынлығы. Ә һин бында тере мәйетһең. Кемгә кәрәк мәйет тәүбәһе?! Һине оноттолар. Хатта исемеңде телгә алыусы юҡ.

Салауат. Ә ниңә һин онотманың мине? Ниңә килдең? Зыярат ҡылырғамы? Әгәр башҡорт ерендә ҡәбер тынлығы булһа, әгәр мин мәйеткә әйләнһәм, һин бында килмәҫ инең. Ялғанлайһың!.. Тимәк, Пугач рухы инде яңы батшағыҙға шомдар һала, уны ҡурҡыта... Тимәк, үҙгәреш юҡ!

Язалаусы. Эйе, үҙгәреш юҡ. Яза дауам итә... Мин һине ереңдән ҡыуҙым. Һин бында ер тапҡанһың. Халҡыңдан һөрҙөм, һин бында халыҡ тапҡанһың. Йәреңдән айырҙым, һин бында йәр тапҡанһың. Тимәк, яза дауам итә...

Салауат. Яза дауам итә. Үҙгәреш юҡ — йәғни, үкенеү ҙә, тәүбә лә юҡ — ахырғаса... *(Салауат ҡараңғыла ҡала.)*

Язалаусы *(юғарыға ҡарап)*. О, бойороусым! Һинең әле биреп өлгөрмәгән, ләкин мотлаҡ биреләсәк әмереңде үтәргә керешәм. Уны яңғыҙ ҡалдырыр өсөн утрауҙан халыҡты һөрәм. Уның ғорур ихтыярын һуңғы тапҡыр аяҡ аҫтына һалып тапаясаҡмын. Бына шулай, бына шулай... *(Аҡрын ғына тапана.)* Һаҡсылар! Һаҡсылар!

Беренсе һаҡсы. Беҙ бында.

Язалаусы. Минең әмеремде үтәргә әҙерһегеҙме?

Икенсе һаҡсы. Әҙербеҙ, хужа.

Язалаусы. Был утрауҙа күпме кеше йәшәй? Балыҡсыларҙы әйтәм.

Беренсе һаҡсы. Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, байтаҡ инде.

Язалаусы. Бөтәһен дә бынан һөрөргә.

Икенсе һаҡсы. Ни өсөн, хужа? Уларҙың бер зыяны теймәй, ифрат яҡшы күңелле халыҡ.

Язалаусы. Ана шул яҡшы күңелле булғандары өсөн — һөрөргә!

Беренсе һаҡсы. Ә нисек һөрөргә?

Язалаусы. Үҙ кәмәләренә тейәгеҙ ҙә алыҫ бер утрауға ҡыуығыҙ.

Икенсе һаҡсы. Төшөнмәйем, хужа, был фарманды.

Язалаусы. Төшөнөүең түгел, эшләүең кәрәк миңә.

Икенсе һаҡсы. Кәрәктер ҙә... Сәйер. Быға тиклем беҙ енәйәтселәрҙе генә һөрә торғайныҡ, әммә тотош халыҡты һөргәнебеҙ юҡ ине.

Язалаусы. Булмаһа, бынан ары булыр. Кәрәк икән, бер утрауҙы түгел, иле-иле менән, ҡитғалары менән һөрәсәкмен.

Икенсе һаҡсы. Һөрәсәкһең. Беләбеҙ.

Язалаусы. Минең менән бергә килгән бар ғәскәрҙе алығыҙ ҙа эшкә керешегеҙ. Йәһәт, йәһәт ҡуҙғалығыҙ!

Икенсе һаҡсы. Буйһонабыҙ.

Китәләр.

Язалаусы *(ҡояшҡа ҡарай)*. Бындай матур, сыуаҡ көндә күңеллерәк эштәр башҡараһы ине лә бит. Ни ҡылаһың... Вазифа. *(Китә.)*

Артта — тауыш, сыр-сыу, балалар илауы, бисәләр сәрелдәүе ишетелә. Һаҡсылар тауышы: «Әмер шулай!», «Фарман, яңы батша фарманы!» Яуап тауышы: «Батша түгел, иблис фарманы», «Китмәйбеҙ! Беҙ баш бында». Икенсе һаҡсы тауышы: «Бында фарман баш», «Әмер хужа». Сәхнә аша ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәр йүгереп үтә, уларҙы һалдаттар ҡыуып бара. Тёрткөләп кире алып сығалар. Илаш, тартыш, һыҡташ. Диңгеҙ шауы. Ел. Дәһшәтле музыка. Бер аҙҙан бөтәһе лә тына. Хәле бөтөп, Ану йүгереп инә.

Ану. Салауат! Салауат! Ҡайҙа һин, Салауат? Ҡайҙа һин, ҡәҙерлем?

Яр аҫтынан Салауат күтәрелә.

Салауат. Ану! Ниңә илайһың, Ану?

Ану. Беҙҙе һөрәләр. Беҙҙе бынан һөрәләр...

Салауат. Ниңә һөрәләр?

Ану. Белмәйем. Бөтә балыҡсыларҙы ла... мине лә...

Салауат *(Ану һуҙҙәренең асылына төшөнә)*. Ҡәһәр генә төшһөн! Ахыры ҡайҙа? Һуң был яфаларҙың, ғазаптарҙың, әсе күҙ йәшенең ахыры ҡайҙа? Аҡланырмы шулар берәй заман? Түләтелерме?

Ану *(бышылдап)*. Бәхил бул, Салауат. Бәхил бул... йәнем.

Салауат. Ҡайнар йәшең, күкрәгемде тишеп, йөрәгемә тама, һөйөклөм. Йәштәрең өсөн кисер мине. Бары өсөн мин ғәйепле, кисер...

Ану. Һин? Һин — ғәйепле? Юҡ, Салауат, тамуҡ язаларын ерҙә алған изге рух һин. Күктәгеләр һине иркәләрҙәр, бына шулай, минең шикелле. *(Ҡосаҡлай.)* Тәү һәм һуңғы тапҡыр бер үбәйем...

Артта йәнә тауыш, ығы-зығы ҡабатлана. Матс өндәшә: «Ану! Ҡыҙым! Ану!»

Атайым көтә. Хуш бул, бәхил бул!

Салауат. Ах, бығауҙар! Ошо бығауҙарым булмаһа, һауаларға алып осор инем һине, Ану!

Матс тауышы. Ану! Ану!

Ану *(тыныс)*. Хуш бул, Салауат. Мин һине көтөрмөн. Ғүмер буйы көтөрмөн. Әгәр донъялыҡта ғүмерем етмәһә, әхирәттә көтөрмөн. Хуш бул, Салауат! *(Китә.)*

Салауат *(оҙаҡ ҡатып ҡала)*. Барына сыҙаным. Быныһына ла сыҙар көсөм, бәлки, барҙыр. Әммә теләмәйем бүтән сыҙарға. Теләмәйем... Мәғәнәһе юҡ ары — сабырлыҡтың. Нимә алып китәм үҙем менән — Бөйөк Яҙыҡ әллә бөйөк Сауапмы? Нимә алып китәм? Нимә? *(Тыныс.)* Һуңғы ҡарашымды һиңә төбәйем, Башҡортостан. Һәр үләнең, һәр һуҡмағың, һәр януарың менән хушлашам. Рәнйемә миңә, бәхил бул... Таш утрау! Һин дә бәхил бул. Таш булһаң да, мәрхәмәтле булдың. Алыҫ вариҫым, бәлки, һиңә килеп, хөрмәт итеп бер саҡ баш эйер... Сабый бишегем Урал тауы ине, мәңгелек бише-

гем — һалҡын диңгеҙ булыр. *(Ҡапыл үҙәк өҙгөс тауыш менән.)* Ану! Мин унда һинән алдараҡ барып етермен. Диңгеҙ төбөндәге һин әйткән мәрмәр һарайҙа көтөрмөн мин һине, Ану! Мин көтөрмөн һеҙҙе, Ану, Гөлнәзирә!.. Гөлнәзирә... Ану!..

Быҕауҙарын сылтыратып, ике ҡулын күтәреп диңгеҙ төбөнә атлап төшөп китә. Уның ҡулдары аҡрынлап күмелә. Тынлыҡ. Шағир йүгереп сыға.

Шағир. Туҡта, Салауат! Туҡта! Эштәрең хаҡ, ғазаптарың изге, гонаһтарың юҡ һинең, Салауат! Быны мин — һинең вариҫың, ҡаныңдан, яфаларыңдан, өмөттәреңдән яралған вариҫың — мин әйтәм. Туҡта, Салауат! Туҡта!!! Туҡтаманы... Китте... Диңгеҙгә батҡан ҡояш төҫлө, батты Салауатыбыҙ. Батты Салауатыбыҙ. Батты... *(Башта быуылып, унан үкереп илай. Ҡапыл диңгеҙ шауы ишетелә. Шағир илауҙан туҡтай.)* Диңгеҙ шаулай... Ишетәһегеҙме, диңгеҙ шаулай!!! Әгәр диңгеҙ шаулай икән, тимәк, ул тере. Әгәр ҙә беҙ йәшәйбеҙ икән, тимәк, ул тере!.. Ишетәһегеҙме, диңгеҙ шаулай?!

Аҡрын ғына йыр башлана. Көсәйә.

Салауат нисә йәшендә? —
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Бригадир булған, ай, Салауат
Егерме лә ике йәшендә...

*Бөттө.*

*1971*

## ТАШЛАМА УТТЫ, ПРОМЕТЕЙ!

*Алты картиналы трагедия*

ҠАТНАШАЛАР:

Прометей — аҡ балсыҡты үҙ күҙ йәштәренә иҙеп, кешеләрҙе барлыҡҡа килтергән алла. Элек титан булған

Зевс — иң баш алла. Нимәһе менәндер бер ҡатлыраҡ, тиҙ ышаныусан. Шуға күрә ғәйбәткә, имеш-мимешкә тиҙ ҡолаҡ һала, шул уҡ ваҡытта ҡаты бәғерле, бүләкте лә, язаны ла самалап тормай бирә

Агазия — Ер ҡыҙы. Әммә уның эсендә ер уты йөрөй. Бүтән кешеләрҙән айырылып тора. Шуға күрә кешеләр уны ситкә тибәрә

Гера — Зевстың һуңғы — етенсе ҡатыны. Ғаилә именлеген һаҡлаусы илаһиә. Заманында күп гонаһ ҡылған бисәләрсә, хәҙер бик әҙәпле ҡылана

Афродита — мөхәббәт илаһиәһе. Матур, сабыр. Зевстың үҙ ҡыҙы, Гераның үгәй ҡыҙы

Гефест — тимерсе, аяҡсы һәм бүтән хужалыҡ эштәрен башҡарыусы алла. Аҡһаҡ, ҙур ҡуллы, йомшаҡ тәбиғәтле, ихтыярһыҙ, шуға күрә Зевс әмерен үтәүҙән баш тарта алмай

Гермес — ике йөҙлө. Бер бите аҡ, бер бите ҡара, бер ҡолағы өҫкә тырпайған, икенсеһе һәленеп төшкән. Ҡылый. Зевстың хәбәрсеһе, сапҡыны, шымсыһы

Фемида — Прометейҙың әсәһе. Ғәҙел хөкөм илаһиәһе. Батыр, ләкин улын ҡотҡарыу өсөн килешеүгә лә барырға уйлай. Әммә быны эшләмәй

Эрида — ыҙғыш илаһиәһе. Теле нимә һөйләгәнде ҡолағы ишетмәй.

Власть
Көс } Зевстың хеҙмәтселәре
Әҙәмшаһ

Аллалар табынында — Мусагет (йыр-моң аллаһы), Эрот (мөхәббәт, айырыуса енси мөхәббәт аллаһы), Дионис (күңел асыу аллаһы), Беренсе, Икенсе, Өсөнсө Йәш алла, хур ҡыҙҙары (хариталар) ҡатнаша.

Мәк яланында һәм Упҡын янында ирле-ҡатынлы өс пар, нишаналар, сибәр ҡыҙ һ. б. ҡатнаша.

## АЛЛАЛАР МӘЖЛЕСЕ

Олимп тауы. Зевстың Гефест һалып биргән алтын һарайы. Титандарҙы еңеп, Кронды Тартарға ҡолатҡас, Зевс үҙен аллаларҙың да, әҙәмдәрҙең дә батшаһы итеп иғлан ҡыла. Ошо ыңғай менән ул ҙур кәйеф-сафа мәжлесе уҙғарырға әҙерләнә. Йөҙ йыллыҡ табын үткәрергә уйлай. Титандар менән алышта батырлыҡ күрһәткән йәш аллалар йыйыла. Улар үҙҙәрен башта бик тәкәббер тоталар. Билдәле аллалар һәм илаһиәләрҙән мәжлестә Прометей, Гефест, Гермес, Дионис, Эрот, Эрида, Мусагет, кәйеф-сафа илаһиәләре, хариталар һ. б. ҡатнаша.

Тәхеттең ике яғына Гера менән Афродита сығып баҫа. Ундабында ултырған йәки ҡырын ятҡан аллалар быға иғтибар итмәй. Һуңыраҡ Зевс сыға, ул сыҡҡанда ҡуҙғалғылап ҡуялар. Артабан аҡһаҡ Гефест, бер туҡтауһыҙ ары-бире йөрөп, табын ҡарай. Ҙур-ҙур түңәрәк яҫы таштар өҫтөнә төрлө ергә һыйҙар өйөлгән, ҙур һауыттарҙа — шарап.

Зевс тәхеткә ултырғас, бөтәһе лә шымып ҡала. Зевстың аяҡ осонда, аҡ яңағын өҫкә, тырпайған ҡолағын хаким яғына ҡуйып, Гермес ултыра. Прометей бер ситтә түбәнгә — ергә ҡарап тора.

Эрот тирәһендә бығаса ҡытҡылдашҡан хариталар ҙа тына. Тап шул ваҡыт яҙмыш аллалары-мойраларҙың тауышы ишетелә.

Мойралар.

Залимды золом тыуҙыра,
Золомдо залим ҡыла. —

Осо юҡ был дүңгәләктең,
Сиге юҡ был түңәрәктең, —
Залимды золом тыуҙыра,
Золомдо залим ҡыла.
Ни күгендә, ни ерендә
Һис бер сара юҡ быға,
Ҡөҙрәтһеҙ уға нисбәтән
Бар сихырҙар, бар доға.
Залимды золом тыуҙыра,
Золомдо залим ҡыла.
Әммә килер шундай заман:
Ғәҙеллек табыр терәү —
Батырлыҡ һәм ғазап өсөн
Донъяға килгән берәү
Һындырыр шул дүңгәләкте,
Өҙгөләр шул түңәрәкте
Көслө ҡулдары менән.
Мәңгелек түгел залимдар,
Мәңгелек түгел золом.
...Мәңгелек тик күҙ йәше, ут,
Йәшел япраҡ, аҡ болот...

Был һүҙҙәрҙе аллалар тыңлайҙар, ләкин ишетмәйҙәр.

З е в с.

Пыран-заран ҡылдыҡ титандарҙы...

Г е р м е с.

«Ҡылдыҡ» түгел, «ҡылдым» тиеү кәрәк.
Һин ҡул булһаң, беҙ йоҙроҡ бары...

З е в с *(был төҙәтмәгә үтә риза)*.

Пыран-заран ҡылдым титандарҙы,
Атай ҡартты аттым йәһәннәмгә.
Бынан ары бөтә аллаларҙың,
Бәндәләрҙең, януар-кейектәрҙең,
Һыуҙа йөҙөр балыҡ, осар ҡоштоң
Олуғ һәм берҙән-бер падишаһы
Мин булырмын. Әй, тим, кемдәр унда
Йәйелеп ултыра, мин һөйләгән саҡта?!

Гермес *(һикереп тора)*.

Кисер, хаким. Ғәҙәт.

Дионис *(ул буш бокал тотоп ултыра)*.

Күнегелгән...

Бөтә йәш аллалар тура баҫып ҡатып ҡала.

Зевс.

Бынан ары ғәҙәт бүтән булыр!..
Әммә һеҙҙе хурлар өсөн түгел,
Хуплар өсөн йыйҙым был табынға.
...Пыран-заран ҡылдым титандарҙы,
Ҡарт Кронды аттым Тартарға мин.
Шуның шәрәфенә йөҙ йыл буйы,
Кәйеф-сафа ҡороп, типтерергә
Саҡырҙым мин бында барсағыҙҙы.
Минең ҡөҙрәтемә, шөһрәтемә
Лайыҡлы һеҙ. Сая һуғыштығыҙ.
Бер Прометей үҙе ни тора бит!
Әй, Прометей!

Прометей *(бойоҡ)*.

Тыңлайым мин һине.

Зевс.

Нимә менән бик мауыҡтың унда?

Прометей.

Йондоҙ йылғалары аҡҡанын
Күҙәтәмен.

Зевс.

Тыныс ағалармы?

Прометей.

Тыныс түгел. Шомло. Бола булыр.

Зевс *(асыуланып)*.

Шул йондоҙҙар бәлә саҡыра гел.
Мин уларҙы өйрәтермен әле!
Ҡул етешмәй... *(Жезлын һелтәп ҡуя.)*

Прометей.

Бәлки, без үҙебеҙ
Дау күтәреп күктә, яу ҡуптарып
Боҙабыҙҙыр улар хәрәкәтен?..
Шуға күрә улар юлдан яҙа.

Зевс.

Йондоҙҙарҙы ҡуйып торайыҡ...

Гера.

Мәжлес башлар әүәл бер шартыңды
Онотоп ҡуйма.

Зевс.

Уныһы нимә тағы?

Гера.

Һин бит бөгөн ҡыҙың Афродитаға,
Һайлап, кейәү йәрәшмәксе инең.
Үгәй булһа ла, ул миңә лә үҙ.
*(Афродитаға ярамһаҡланып баш эйә.)*
Табын тулы матур йәш аллалар...
*(Мут ҡараш ташлай.)*

Зевс.

Уныһы һуңыраҡ. Табын ҡыҙа төшкәс...
Айыҡ башта бисә ҡайғыһымы?
Ҡыҙып алғас, берәм-берәм килеп
Үҙҙәре үк теҙ сүгерҙәр ҡыҙға.
Шул саҡ инде Иҫәр менән Зирәк:
«Мин бында!» — тип һөрән һалып торор.

Гера *(бер аҙ ҡылана биреп)*.

Иллә мутһың.

Зевс *(бисәһенең артына һуғып ала)*.

Әгәр айыҡ булһам,
Теге саҡта һине шәйләмәй ҙә
Үтеп китер инем, моғайын, мин.

Гера *(бокал күтәргәндәй, ҡулын күтәрә)*.

Йәшәһен шарап — бисәләр бәхете!

Дионис

*(буш бокалын тотоп, Зевс ҡаршыһына килә, уны ҡаплап күрһәтә).*
Буш бокалды ҡулда шулай тотоу —
Ҡыҫыр ҡатын менән йәшәү кеүек.
Зарыҡтырма, башла мәжлесеңде.

Зевс.

Сабыр, Дионис! Тотош йөҙ йыл буйы
Тыңҡысларһың ҡомһоҙ ҡорһағыңды.

Дионис.

Ике хәлдә ирҙәр, һин беләһең,
Сыҙамлығын юя. Береһе шуның —
Көтөп тороу шарап ҡойолғанды.

Дионис буш көрөшкәһенең төбө менән шап итеп усына һуға ла боролоп китә. Был саҡ Эрот хариталарҙы шырҡ-шырҡ көлдөртә.

Зевс.

Әй, һеҙ, кәйеф-сафа туташтары,
Көн элгәре ҡыткылдашмаһағыҙ
Булмаймы һуң? Эрот! Ҡытыҡлашма!..

Гера.

Мәжлесте ас, Зевс, йәш аллалар
Тилмереп үк бөткән.

Зевс.

Хәҙер, Гера! Әле айыҡ саҡта
Әмерҙәрҙе биреп бөтөрәйем.
Башҡа киткәс, йәнә тикшерермен.
Гермес!
Атай ҡарттан мираҫ булып ҡалған
Тотҡондарҙы азат иттегеҙме?
Амнистия бөгөн һәммәһенә!

Гермес.

Иттек, хаким. Ике парҙан башҡа
Бөтәһе лә азат.

Зевс.

Ә улары?

Гермес.

Беренсе пар Гера әмере менән...

Гера *(алға сыға. Һауаланыбыраҡ һәм ҡыланыбыраҡ һөйләй)*.

Мин етенсе ҡатыны Зевстың...
Ул да минең берҙән-берем түгел...

Зевс.

Самалабыраҡ, бисә, самалабыраҡ!

Гера.

Мин етенсе! Ләкин һуңғыһымын,
Бынан алып никах ҡаҡшамаҫлыҡ
Изге мөһөр менән беркетелә.
Ғәйеплеләр шәфҡәт көтмәһендәр.
Тәүбә иткән гонаһ эйәһе мин —
Язам ҡаты булыр яҙыҡлыға!

Эрот.

О-һо!

Гера.

Гермес әйткән теге икәү
Никах боҙоп, ғишыҡ тотошҡандар.

Зевс.

Ни ҡылғандар?

Гера.

Һөйөшкәндәр. Ғашиҡ булышҡандар.

Зевс.

Ғишыҡтары ҡаты, ихлас микән?

Гефест.

Үтә ҡаты, үтә ихлас булыр.
*(Аҡһай-аҡһай Зевс янына килә.)*
Улар ятҡан ике ҡара зиндан,
Ап-аҡ нурҙар сәсеп, балҡып тора,
Бер-береһенә яҡты ағыла шулай.
Тимер бығауҙары, мин һалған та,
Ҡом шикелле, таралды ла төштө...

Зевс.

Ғишыҡтары, тимәк, хаҡҡа сыға?

Гера.

Хаҡ ҡынамы? Хаттин ашҡан хатта!

Зевс
*(урынынан тора, жезлын күтәрә).*

Шулай икән... *(Киҫкен.)* Ошо минутта уҡ
Зиндан йоҙаҡтарын ас һин, Гефест.
Һөйгән-һөйөлгәндәр азат булһын!
Мөхәббәт ул никахтарға һыймай.

Йәш аллалар гөж килеп хуплай был ҡарарҙы. Гефест менән Гермес китә башлай. Ситтә туҡталып ҡалалар.

Гера *(хәтере ҡала).*

Бына бер тамаша. Ғүмер баҡый
Ирҙәрҙе шул ирҙәр яҡлап килә.

Зевс *(ирония менән).*

Әй, кем, Гермес, теге тотҡондарҙың
Икеһе лә ир затынанмы ни?

Гермес *(хәйләкәр йылмайып).*

Береһе ҡатын. Ифрат гүзәл, һылыу...

Зевс *(хахылдап көлә, уға башҡалар ҙа ҡушыла).*

Мәрәкәгә ҡалдың, Гера, ха-ха!

Эрот.

Мөхәббәттең хаҡын белә Зевс.
Бер ҙә юҡҡамы ни — ха-ха, ха-ха —
Йыһан тулы уның балалары —
Аҡһағы ла, ана, туҡһағы ла...
*(Гефест менән Гермесҡа төртөп күрһәтә, аллалар көләләр.)*

Зевс.

Үҙ самаңды онотаһың, Эрот!

Эрот.

Бөттө, бөттө...

Зевс *(Гефест менән Гермесҡа)*.

Нимә көтәһегеҙ?
Тотҡондарҙың дүртеһен дә тиҙ үк
Ҡотҡарығыҙ.
*(Тегеләр ҡуҙғала ла тағы туҡтала.)*

Афродита.

Ашыҡмай тор, атай,
Ҡәтғи хөкөмөңдө сығарырға.
Икенсе пар минең әмерем менән
Тотҡонлоҡта ҡалды. Яҙыҡтары
Ярлыҡарлыҡ түгел, үтә олуғ.

Зевс.

Ни ҡылғандар улар, хатта алланың
Ҡөҙрәтенән килмәй ярлыҡарға?

Афродита.

Улар, атай, бер ҙә ғишыҡ тотмай,
Мөхәббәттә янып таҙарынмай
Никахлашҡан. Ана шул арҡала
Балалары ҡарт йә ҡарсыҡ булып,
Кәкре-бөкрө булып, йәмһеҙ булып
Тыуа килгән. Нишаналар заты
Шул икәүҙән башлана ла инде.

Зевс.

Йә, аллалар! Ишетәһегеҙме?

Аллалар.

О, Зевс!

Зевс *(яман асыу менән)*.

Мөхәббәтһеҙ никах? Ярлыҡау юҡ!
Утлы ҡоралыңды алып, Гефест,
Икеһен бер алтын сылбыр менән
Сылбырла ла алтын ситлеккә яп!
Моғайын, шул алтын ҡушҡандыр ҙа
Уларҙы, тим. Әйҙә мәңге шулай
Бер-береһенән биҙеп, ерәнешеп,
Нәфрәт тулы күҙгә-күҙ төбәшеп,
Бер ситлектә ғүмер уҙҙырһындар.

*(Жезлын күтәрә.)*
Амин!
*(Гефест менән Гермес сығып китә.)*

Д и о н и с *(буш бокалын күтәрә)*.

Аминдан һуң бисмиллаға күсәйек!

З е в с.

Йә, Мусагет, уйнат саздарыңды!

Аҡрын ғына моңло музыка башлана. Хариталар ҡайҙалыр артҡы планда матур хәрәкәттәр яһай башлайҙар.

Бөтә аллалар ҙа килгәндәрме?

Д и о н и с.

Бөтәһе лә...

Г е р а *(ризаһыҙ)*.

Бары берәү һуңлай,
Шул Эрида — Ыҙғыш аллаһы — гел
Килә бары мәжлес уртаһына.
Әйтерһең дә, донъя тотҡаһы бер.
Ташҡа үлсәйем — Ыҙғыш аллаһы!

Э р о т.

Үҙ ваҡыты менән килер әле,
Уның һуңлауы ла хәйерлегә...

З е в с
*(тәхетен ҡалдырып һый-хөрмәт ҡуйылған бер таш эргәһенә килә)*.

Әй, Мусагет, моңоң нескә, шыйыҡ.
Ҡыл һуҙаһың. Көмөш табаҡтарҙы
Зыңлатып һуҡ! Олимп тетрәп ҡуйһын!

Бер нисә тапҡыр литавра һуғалар ҙа яңынан саҡ ҡына ишетелерлек моңло музыка башлана. Г е ф е с т менән Г е р м е с урап инә.

З е в с *(литавралар тынғас та)*.

Быныһы тап беҙҙеңсә — аллаларса...
Пыран-заран ҡылдыҡ титандарҙы...

Гермес
*(Зевс алдына һикереп килеп баҫа)*.

«Ҡылдыҡ» түгел, «ҡылдым» тиеү дөрөҫ,
Һин йоҙроҡ, беҙ бармаҡтар бары...

Зевс
*(онотоуы өсөн үҙ-үҙенә асыуы килә)*.

Пыран-заран ҡылдым титандарҙы,
Ҡарт Кронды һөрҙөм йәһәннәмгә.
Шуның шәрәфенә мәжлес асам!
Бокалдарға шарапты ҡой, Гефест!
Таҡыр башлы скифтарса итеп
Ҡой шарапты, тамсы һыу ҡушмайса!

Аллалар *(шаулашып)*.

Ай, афарин, Зевс!
Был — ирҙәрсә!

Гера.

Боҙоҡлоҡҡа тағы әҙәмдәрҙән
Өйрәнмәһәң, Зевс?! Ни эшең был?

Зевс.

Башҡа кемдән өйрәнәйек уға?
Һе! Хәмер эскән саҡта һәр уртламын
Һанап, шулай мыжып ултырыуҙан
Ҡасан туҡтар ошо бисә-сәсә?
Сүмәкәй ҡой, Гефест! Йәһәт ҡылан!

Гефест.

Ярай, Зевс, ярай. Тик былай ҙа
Минән өлгөр аллаң юҡтыр һинең.
«Аҡһаҡ күп йөрөр», — тип минең хаҡта
Йор һүҙ сығыр әле берәй заман.

Аллалар.

— Аҡһаҡ Гефест күп йөрөр, ха-ха-ха!
— Ҡылый Гермес күп күрер, ха-ха-ха!

Гефест бокалдарға шарап ҡойоп сыға. Бөтәһе лә бокал тотоп ала.

Зевс
*(бокал ала. Шомло тынлыҡ урынлаша)*.

Власть алып, ирек юғалттым мин.
Минең ихтыярым түгел хәҙер,

Баш алланың ҡаты ихтыяры
Һеҙҙең өҫтән хөкөм йөрөтәсәк,
Шәфҡәтһеҙлек ҡылһам, кисерегеҙ,
Тик үҙемдән аяу көтмәгеҙ һис,
Әгәр бер-бер ҡырын эш ҡылһағыҙ.

Дионис.

Тәү туҫтаҡты, Зевс, янау һүҙе,
Өркөтөүҙәр менән күтәрмәһәң
Булмаймы ни ошо бөйөк көндө?

Зевс.

Бөйөк көн был, фажиғәле көн был
Минең өсөн. Әле белеп булмай —
Юғалттыммы әллә таптыммы мин,
Отолдоммо әллә оттоммо мин —
Белеп булмай... Ярай. Етте шунда!
Шайтан алһын икеләнеүҙәрҙе,
Шик-шомдарҙан иблис яфаланһын.
Алла кәңәшсеһе — асыҡ аҡыл!
Күтәрегеҙ, берҙәм түңкәрегеҙ
Яңы батша — Зевс хөрмәтенә!

Йәш аллалар *(гөжләшеп)*.

— Бөйөк батша Зевс хөрмәтенә!
— Зевс шәрәфенә!
— Зевс ҡөҙрәтенә!
— Йәшәһен беҙ!
— Шундай батшалы беҙ йәшәһен!
— Батша өсөн эскән шарап татлы!

Бөтәһе лә эсә, һаман ситтә торған Прометей эсмәй ҡала.

Зевс.

Ә Прометей ниңә ауыҙ итмәй?

Прометей.

Бокал тулы әсе шарап эсәм.
Юғалтамдыр, ахыры, йән дуҫымды...
Хуш, туғаным, алыҫлаша ара,
Айырылышыу бигерәк яманһыу шул.
Туҫтағыма күҙ йәштәрем тама.

Хуш бул, Зевс! Күңелем һиҙә: бөгөн
Мин йөрәгең менән хушлашамын.
*(Эсә.)*

Дионис *(инде ул ҡыҙмаса)*.

Дуҫһыҙ ҡалһаң, һин батшалы булдың,
Ул һуң һиңә ағас ботағымы?

Зевс *(йомшаҡ)*.

Дуҫлыҡтан һин бик тиҙ баш тартаһың,
Нимә ҡыланыуын, был, Прометей?

Прометей.

Һин беләһең, Зевс, батшаларҙың
Дуҫ-иштәре булмай бер ҡасан да...
Шымсы менән бары палач ҡына
Ике яҡтан уны терәп тора.

Ошо саҡ Зевс эргәһендәге Гермес ҡалҡынып ҡуя. Йәнәһе, бер терәү ул.

Береһенә лә мин яраҡлы түгел.

Зевс *(Прометейға)*.

Эсер-эсмәҫтән үк башыңа сыҡты —
Һауаланып киттең...
Гефест! Ниңә һауыттар буш?

Гефест.

Хәҙер ҡоямын.

*(Аҡһай-аҡһай ашығып шарап ҡойоп сыға. Йәш аллалар, уға төртөп күрһәтеп, көлөшәләр, шаулашалар.)*

Йәш алла *(Дионисҡа эйелеп)*.

Кисерегеҙ, бында мин тәү тапҡыр.
Ниңә Гермес шундай: бер бите аҡ,
Бере ҡара?

Дионис.

Аҡ яңағы Зевс өсөн уның,
Ә ҡараһы — бөтә ҡалғандарға.

Йәш алла.

Ә ни өсөн бер ҡолағы өҫкә,
Икенсеһе аҫҡа ҡарап тора?

Дионис.

Өҫкөһөнә өҫтән әмер көтә.
*(Зевсҡа күрһәтә.)*
Аҫҡыһына аҫтан шым-шом йыя.
*(Башҡаларға ымлай.)*

Йәш алла.

Ирмәк икән...

Дионис.

Ирмәк, хикмәтле шул...

Гера.

Мәжлес һүлпән бара нимә эшләптер,
Хур ҡыҙҙары ниңә шымып ҡалған?
Мусагет та ойоп киткән, ахыры.
*(Өс тапҡыр сәпәкәй итә.)*

Баяғы моңло тын музыка башлана.

Хариталар бейергә төшә, биленә мөхәббәт уҡ-һаҙаҡтары таҡҡан Эрот — улар уртаһында. Хариталар, бик матур хәрәкәттәр яһап, инсафлы бейеү бейейҙәр. Эрот үҙе лә матур хәрәкәттәр яһай. Был ваҡыт аллалар эсеүҙе, ишара менән һөйләшеүҙе дауам итә. Аҡһаҡ Гефест бейеүселәр араһында ары-бире йөрөй, бокалдарға шарап ҡоя. Бейеү, музыка көсәйә генә барғанда, I Йәш алла һикереп тора.

I Йәш алла.

Әй, туҡтағыҙ! Тауыш сығармағыҙ!
Бөйөк сәғәт һуҡты! Мин хәл иттем!
Фатихаң бир, Зевс. Афродита!
*(Афродита алдына килеп баш эйә.)*
Ҡулын, һорайым мин — кәләшем бул!
Минән йәтеш кейәү таба алмаҫһың.

Бөтәһе лә аптырап ҡала. Бер Зевс ҡына хәйләкәр йылмая.

Зевс.

Сосҡа оҡшайһың, егет, ни һөнәрең,
Ниндәй ғилемең бар шаҡ ҡатырлыҡ?

I Йәш алла.

Аллаларҙа булған бөтә һөнәр
Минең ҡулдан килә. Өҫтәүенә,
Бер йондоҙға икенсеһен һуғып,
Ут сығара беләм бына шулай.

Өҫтәлдәге бокалдарҙы алып бер-береһенә һуға. Бокалдар селпәрәмә килә. Табындағылар хахылдап көлә. Афродита кире ҡағып баш сайҡай. I Йәш алла ҡаушабыраҡ ҡала.

Зевс
*(Афродитаның кире ҡаҡҡанын күрә).*

Булыр туйыңды һин ана шулай
Селпәрәмә иттең. Бар, үҫә тор.
*(Ҡул һелтәй.)*

II Йәш алла *(һикереп тора).*

Батырлығым һиңә мәғлүм, Зевс!
Буйым-һыным — күҙегеҙ алдында.
Аҡыл тиһәң... Һандыҡ буштан түгел!
Афродита! Әгәр ҡатыным булһаң,
Иң бәхетле алла буласаҡһың.
*(Бер теҙенә теҙләнә.)*

Зевс.

Бүтәндә юҡ ниндәй һөнәрең бар?

II Йәш алла *(һикереп тора).*

Эс бошҡанда, диңгеҙҙәрҙе тотоп
Түңкәрәм дә шулай ҡаплап ҡуям.

Шараплы ҙур табаҡты ала ла бер йәш алланың башына түңкәреп ҡуя. Табындағылар шарҡылдап көлә. Афродита кире ҡағып баш сайҡай.

Зевс.

Туйыңды һин, кейәү, иҫ итмәҫтән
Түңкәреп үк ҡуйҙың. Бар, күңел ас!
*(Ҡул һелтәй.)*

III Йәш алла атылып сыға ла Афродита алдына килеп, лап итеп ике теҙенә лә теҙләнә.

III Йәш алла.

Силәгенә ҡапҡасы — мин, Зевс!
Афродита өсөн минән башҡа
Ҡулай ирҙе мин күрмәйем бында.
Мин уйынсаҡ, шат күңелле егет.
Етмеш төрлө мәҙәк кенә беләм.
Минең менән йәшәү ҡыҙыҡ булыр...

Зевс.

Береһен күрһәт шуның.

III Йәш алла.

Музыканттар!
Әйттерегеҙ минең көйһөҙ көйҙө.

Музыка ниндәйҙер бер ҡырағай көй уйнай. III Йәш алла хәҙерге замандың модалы бейеүҙәренә оҡшатып, берсә эйелеп-һығылып, берсә илереп бейергә керешә. Бөтәһенән былай мауығып, онотолоп Зевс үҙе көлә. III Йәш алла бейегәндә, бәлки, хур ҡыҙҙарының берәйһе, оҙон итәген күтәрә биреп, уға ҡаршы төшәләр. Афродита баш сайҡай.

Зевс.

Әй, мәҙәксе, етте! Аңлашылды.
Бейей торғас, туйҙан ҡолаҡ ҡаҡтың.
*(Ҡул һелтәй.)*

Гера.

Ниндәй йәштәр үҫә был заманда?
Кәләш яусылай ҙа белмәйҙәр бит.

Дионис.

Йәштәр боҙола. Хатта шарапты ла
Эс тулғансы эсә алмай улар.

Зевс

*(ситтәрәк торған Прометейға йәнә мөрәжәғәт итә. Тегеһе баяғыса уҡ бойоҡ).*

Дуҫлыҡтан да өҫтөн туғанлыҡ бар —
Ҡан-ҡәрҙәшлек. Прометей, мин быны
Һиңә әйтәм. Алтын Афродита,
Бәлки, бары һине лайыҡ табыр!
Ул саҡта беҙ туған булыр инек.

Прометей
*(Афродита эргәһенә килә. Афродитаның алтын кейеме нурланып, балҡып китә. Күрәһең, ул Прометейҙы ярата).*

Алтын ҡуллы алтын Афродита!
Был йыһанда һинән камилыраҡ
Һис бер зат юҡ. Мин йыһанды беләм.
Һинең алда мин — бисара, ғәрип.

Гера, ризаһыҙлыҡ белдереп, яурындарын уйнатып ала.

Зевс.

Һөйлә бушты!

Прометей.

Ғәрипмен мин, Зевс.
Был башымда бер төк сәсем тулмай.

Аллалар.

Сәсең тулмай?!

Зевс *(борсолоп)*.

Ҡайҙа ул сәс?

Прометей.

Бер ер ҡыҙы иркәләгән саҡта,
Сәскә урынына өҙөп алды.

Зевс.

Бөртөк сәсеңә һуң тоторлоҡмо
Шул сәсеңде йолҡоп алған ҡатын?

Прометей.

О аллалар!
Әгәр ҙә уның бөртөк сәсенә мин
Үҙем тора алһам, Ерҙә, Күктә
Иң бәхетле заттан булыр инем.

Зевс.

Ғишыҡ тотоп тамам шашҡан алла!
Ысынлап та, һаташҡанһың икән —
Көнләшерлек хатта! Зевс ярҙам бирһен!

Афродита
*(уның алтын кейемендәге нур һүнә)*.

Тимәк, мине кире ҡағыуың шул...

Прометей.

Һине түгел, гүзәл Афродита,
Үҙ-үҙемде һинән кире ҡағам.

Афродита *(көрһенеп)*.

Шулай...
Һине яратҡанды һин һөймәйһең,
*(Гефестҡа ҡарай.)*
Һин һөйгәне һине яратмай.
*(Прометейға ымлай.)*
Быға мин дә һис ни ҡыла алмайым.

Прометей.

Тимәк, һин дә көсһөҙ илаһиә,
Ә үҙеңсе Ғишыҡ аллаһы бит.

Афродита.

Ҡушмайым да, айырмайым да мин,
Ғашиҡтарҙы бары ҡурсалайым,
Хәүеф-хәтәрҙәрҙән һаҡлап торам.

Прометей.

Афродита, зинһар, асыу тотоп,
Минең кәләшемдән үсең алма.
Зинһар, Афродита!

Афродита.

Оял һин был хаҡта үтенергә!
Үс алырға нисек ҡулым барһын?
Мин түгелме ғишыҡ көрәшсеһе?..

Прометей *(баш эйә)*.

Рәхмәт һиңә, алтын Афродита!

Афродита.

Шулай ҙа мин уны күрер инем.

Прометей.

Мәктәр аҡланында ҡауышабыҙ беҙ.
*(Ситкә китә.)*

Был ҡыҙ кейәүләү сәхнәһен Гефест борсолоп, көнләшеп, үҙенә урын таба алмай күҙәтә. Афродита кейәүҙәрҙе кире ҡағып баш

сайҡағанда, ҡыуана. Ул Афродитаны ярата. Ыҙғыш аллаһы Эрида килеүен Гермес хәбәр итә. Табын шунда уҡ бутала башлай.

Гермес.

Ыҙғыш илаһиәһе, йәғни аллаһы, Эрида
килә ята!

Тауыштар:

— Эрида килә!
— Янъял килә!
— Әй, уйынсаҡ Эрида килә!
— Ваҡытын белеп йөрөй, табын ҡыҙҙы!

Мини юбка, ҡалын платформалы туфли кейеп, усында алма тотоп, борғолана-борғолана атлап, Эрида килеп инә. Ул туп-тура Зевс ҡаршыһына барып баҫа.

Эрида.

Бына мин килеп тә еттем.

Зевс.

Күрәм.
*(Баштан-аяҡ, аяҡтан-баш оҙаҡ ҡарап сыға.)*

Эрида.

Күрмәҫкә ни, һин бит күҙгә зирәкһең.

Зевс

*(Эриданың кейеменә аптырап та, мауығып та тағы ҡарай).*

Быныһы тағы ниндәй әҙәпһеҙлек?
Ҡайҙан килгән шундай оятһыҙ мода?

Эрида.

Үҙем киҫеп, үҙем тектем.

Зевс.

Киҫеүен киҫкәнһең дә, тегеп бөтөрмәгәнһең
икән.

*(Үҙ роленә инеп.)*

Тфү, ғибрәт! Тапҡандар кейем!
Ошондай итәк кейеп,
Намыҫыңды ҡайҙа һаҡламаҡсы
булаһың, аҙғын?

Эрида.

Һи-һи, Зевс, ул намыҫ тигәнең үксәгә
тейеп торған оҙон итәк аҫтынан тиҙерәк
сығып осоусан була, шуға ғына ышанып торһаң...
Миҫалдары байтаҡ уның.

*(Герага ымлап күрһәтә. Аллалар ҡысҡырып көләләр.)*

Зевс.

Үҙе аҙҙырғыс, һүҙе аҙҙырғыс,
аллам һаҡлаһын!

Эрида.

Туҡтың күҙе итәктә, астың күҙе
икмәктә. Һеҙ туҡ, мин ас.

Зевс.

Эридаға шарап ҡой, Гефест!

Эрида.

Мин дә һинең байрамыңа буш ҡул
менән килмәнем. Бүләк алып килдем.

Бына алма! *(Гефест ҡойған шарапты эсеп ҡуя.)* Ух! Скифтарса һыу ҡушмайынса эсәһегеҙ икән бөгөн. Мәслихәт!

Зевс. Һин, Эрида, ана, Эрот эргәһендә инсафлы ғына ултыр. Бөгөн ыҙғыш сығарма.

Эрида. Аллам һаҡлаһын! Шул ыҙғыш-ҡырылыштарҙан үҙем дә туйып бөттөм инде.

Дионис *(иҫерек)*. Бынан ары мин дә эсмәҫкә булдым. Рәтле шешәләш юҡ.

Эрот *(ирония менән)*. Эрида! Йән киҫәгем, мине тилмертмә.

Эрида. Бүләгемде генә тапшырам да, хәҙер... Титандар менән алышта, Кронды йәһәннәмгә ҡолатыуҙа батырлыҡтар күрһәткән иң сая, иң матур, иң данлы, иң шанлы, иң аҡыллы, иң... иң... иң ғәйрәтле йәш аллаға булыр был алма! Мә, тот! *(Алманы һауаға сөйә. Сөйә лә үҙе тота. «Мә, тот!» — тип тағы сөйә.)*

Шул саҡ табындағы бөтә йәш аллалар алмаға ташлана, ыҙғыш-тартыш китә, бер-береһен этәрәләр, төртәләр, ҡысҡырышалар: «Алма минеке!», «Иң батыры — мин!», «Минән матуры юҡ — алма миңә тейеш!», «Дан алмаһы — миңә!», «Алма миңә!». Төртөшәләр. Зевс аптырап ҡарап тора.

Гефест. Оятығыҙ ҡайҙа, йәш аллалар? Әҙәп ҡайҙа? Ниндәй хурлыҡ!

Аллалар быны ишетмәй, алма ситкә тәгәрәп китә, тәгәрәгән алма артынан бөтә табын төрткөләшеп, имгәкләп сығып китә. Улар артынан Эрида үҙе, Эрот һ. б. аллалар сығып китә.

Дионис. Был көндө лә күрҙек, ха-ха-ха! Титандарҙы ҡырып һалған ирҙәрҙе килделе-киттеле бер бисә ҡалай имгәккә ҡалдырҙы, ха-ха-ха. Зевстың йәш ғәскәре, ай-һай, хәтәр һуғыша — дан өсөн! *(Китә.)*

Зевс. Бар, Гермес, ул алманы тартып алып үҙемә килтер. Дан алмаһы миндә генә булырға тейеш.

Гермес. Һиндә генә булыр *(сыға)*.

Табын тарала. Гера, Афродита, Гефест юҡ була. Зевс менән Прометей ғына ҡала. Прометей Ерҙе күҙәтә.

Зевс.

Бына тағы йөҙ йыл үтеп китте,
Һин һаман да бойоҡ, ризаһыҙһың.
Күҙеңде гел ергә төбәгәнһең.
Күктә нимә етмәй? Ни оҡшамай? —
Кәйеф-сафа, хөрлөк-иркенлекме,
Ейгән ризыҡ, эскән шарабыңмы?
Бисә назы, дан-шөһрәтме етмәй?
Әллә Зевс үҙе биҙҙерҙеме?
Ҡырҡ алла күңел асҡан саҡта,
Бер яңғыҙың ҡырын алла булдың.
Нимә етмәй һиңә, ни оҡшамай?

Прометей.

Йәшәүебеҙ, донъя көтөүебеҙ,
Ҡылған эштәр, ҡылған ҡылыҡтар, Зевс.

Зевс.

Ниндәй эштәр?

Прометей.

Йөҙәр йыл буйынса
Тоташ һуғышабыҙ, һауаларҙан
Ямғыр урынына ҡандар яуа.
Унан йөҙ йыл көн-төн байрам.
Тимәк,

Үлтерәбеҙ йәки типтерәбеҙ...
Ни тергеҙеп, нимә терелтәбеҙ?
Ни төҙөйбөҙ, нимә тыуҙырабыҙ?
Бөтә күктә, бер Гефесттан башҡа
*(Гефест һалған ошо һарайға ишара яһай.)*
Ҡыл ҡыймылдатҡан да алла юҡ бит.

Зевс.

Төҙәтмәгә донъя мохтаж түгел, —
Тейешлеһен беҙ яратҡан инде.

Прометей.

Яраттыҡ та үҙебеҙ онотток.
Бәндәләргә баҡсы, ҡара көндә
Ҡара ерҙә ҡалай мәж киләләр.
Йылдарының хәҙер яҙҙары юҡ.
Һин уларҙы уттан мәхрүм иттең,
Уттан, тимәк, өмөт, ышаныстан...

Зевс.

Уларға шул таман! Һиңә мәғлүм,
Ҡорбан салған булып, кем һуң мине,
Һөйәк-һаяҡ һоноп, мыҫҡыл итте? —
Шул кешеләр! Артыҡ маһайҙылар...
Күтәрһендәр хәҙер хаҡ язаһын.

Прометей.

Күпме мөмкин?

Зевс.

Сикһеҙ, самаһыҙ...

Прометей.

Ниндәй бәғерһеҙлек! О кешеләр!

Зевс.

Һиңә тағы нимә ҡалған шулай
Юҡ көйөктәр менән көйөнөргә?
Әҙәмдәрҙә һинең ни эшең бар?

Прометей.

Оноттоңмо, Зевс, һинең менән
Беҙ тиң саҡта, мин ул кешеләрҙе,
Аҡ балсыҡты күҙ йәшемә иҙеп,

Бар яһаным. Эйе, улар минең
Күҙ йәш бөрсөктәрем — тамғаны ла,
Тамасаҡтары ла.

Зевс.

Шулай булғас,
Күҙ йәштәре кибергә бит тейеш...
Киптерермен, йәғни ҡоротормон.
Ҡараңғыла әҙәм ғорурлығы
Бара-бара шулай тонсоғасаҡ.
Инде ғорурлығын юйһа кеше —
Кеше түгел, бер хәшәрәт, имгәк.

Прометей.

О, Зевс! Мәрхәмәтең ҡайҙа?
Әҙәмдәр бит бары мең йыл йәшәй,
Улар әле иҫәр: сабый ғына —
Ғәйептәре — сабый ғәйебе тик.
Һин бит батша. Бөтә камилы ла,
Ғәрибе лә һинең балаларың.

Зевс *(асыуланып)*.

Ғәриптәре ҡырылырға тейеш!..

Прометей.

Выждан ҡайҙа? Иман, оят ҡайҙа?

Зевс.

Иман менән оят — мин үҙем ул.

Прометей.

Һин юғары алла. Әммә һинән
Юғарыраҡ —
Алла намыҫы бар!
Һин рәхимһеҙ булһаң, бар ғаләмде
Юхалыҡ һәм ялған баҫасаҡ бит.

Зевс *(ҡаты)*.

Тәкәбберлегеңде тый, Прометей!
Һәм бынан һуң өйрәтәһе булма
Кемгә яза, кемгә мәрхәмәттәр
Өләшергә. Етте! Юлыма ла,
Һүҙемә лә ҡырын килер булһаң,

Миңә түгел, үҙеңә үпкәлә.
Һүҙҙәреңде әле кисерһәм дә,
Яҙыҡ эштәреңде ғәфү итмәм.

Оҙаҡ пауза. Зевс Прометейҙың яуабын көтә, теге өндәшмәй. Зевс янап һөйләй башлай.

Донъя бөткәнгәсә иҫеңдә тот:
Үҙе азаттың ғына һүҙе азат,
Ә азат һүҙ иһә ҡурҡыныс.
Ирекһеҙҙең һүҙе утһыҙ төтөн,
Ҡолдоң теле барыбер бығаулы.
Шундай көнгә төшөп ҡуйма, тимен,
Сәс йолҡотоп, баш юғалтҡан алла!
*(Боролоп китә.)*

Прометей.

Һабаҡтарың өсөн рәхмәт. Мәңге
Онотторлоҡ түгел.
*(Ситкә китә, ләкин сыҡмай.)*

Зевс *(ситтән)*.

Хәтерле бул шулай.

Гермес ашығып инә. Ул борсолған. Зевс эргәһенә килә.

Гермес.

Хаким!

Зевс.

Һуңыраҡ килерһең.

Гермес.

Һуңыраҡ һуң булыр.

Зевс.

Нимә тағы?

Гермес.

Бына алма. Саҡ-саҡ тартып алдым.
*(Һуҙа. Зевс алмай тора.)*

Зевс *(асыуы килеп)*.

Һиндә гел шом, гел шик, имеш-мимеш,
Төймә күрһәң, дөйә күргәндәйһең.

Гермес.

Арттырмаһаң, һин бит ышанмайһың,
Был хәбәрем ысынлап та хәтәр:
Ер ҡарынында ут яралды бөгөн —
Утҡа йөклө хәҙер түңәрәк Ер!
«Кем ҡулында ут бар — шунда Власть!» —
Тип бер мәле үҙең ысҡындырҙың,
Хәүефләнеп килдем.

Зевс.

Моғайын, һин
Күргәнһеңдер төнгө баҙлауыҡты —
Төнөн бер ҡорт шулай баҙлап тора,
Сысҡан уты тип тә йөрөтәләр.

Гермес.

Мине тамам иҫәр күрмә, хаким.
Ер ҡарынында ысын осҡон бөртә!

Зевс.

Ҡайҙа күрҙең?

Гермес.

Ул күренмәй әле. Тик һиҙәмен.
Урынын, яғын әле әйтә алмайым.
Әммә бар ул.

Зевс.

Булһа тағы... Ер утының көсө
Анау баҙлауыҡтан ашып китмәҫ.
Хафаланыр сәбәп күрмәйем мин.

Гермес.

Мин әйттем дә ҡайттым. Өҫтән төштө...

Зевс *(ғорур)*.

Бар ғаләмдең йәнен яҡтыртырлыҡ
Илаһи ут — минең усағымда.
Ана шуны уяу һаҡлағыҙ һеҙ —
Бер сатҡыһы ситкә сәсрәмәһен!
Ә ер уты...
*(Ҡулын һелтәй, китә башлай.)*
Тик шулай ҙа, Гермес,

Йыһандағы бөтә баҙлауыҡты
Аяғың менән тапап, иҙеп сыҡ.

Гермес.

Башҡарырмын.

Зевс.

Кемдә илаһи ут — шунда ҡөҙрәт!..
Һе, Ер уты?.. *(Ул борсола.)*
Уға күктең уты
Ҡушылмаһа, ҡыҫыр буласаҡ ул.
Һе, Ер уты... Тфү! Тел осома
Килеп йәбеште бит ошо һүҙҙәр...

Прометейға әйләнеп ҡарай ҙа китә, уға Гермес эйәрә. Прометей оҙаҡ ваҡыт Ергә ҡарап тора.

Прометей.

О Зевс, һин үҙ ҡөҙрәтеңә үҙең
Аңғармаҫтан хөкөм иғлан иттең.
Белһәң ине, ниндәй яҙа аҙым
Яһаның һин, әйтеп ут хаҡында...
Ике утты — Күк һәм Ерҙең утын
Ҡауыштырыу, тимәк, хәтәр нәмә —
Ер отасаҡ, ә Күк отоласаҡ.
Кем ҡулында ут бар, тик шуларҙа
Бөтә һөнәрҙәрҙең сер асҡысы.
Шул ут ҡына, селпәрәмә килеп,
Валсыҡланып бөткән был йыһанды
Һоҡланырлыҡ камил, төҙөк итеп,
Өр-яңынан ҡойоп ҡуя аласаҡ.
Ике утты ҡауыштырыу, бәлки,
Минең төп вазифам — миссиямдыр?..
Миссиям — шул! Ни булһа ла булыр,
Бик хәүефле юлһыҙ юлға сығам!
Ҡот осорлоҡ! Ләкин хәҡиҡәт шул
Хәтәр була бөйөк эштәр генә!
Тәүәккәлләнем мин. Фатихаң бир,
Агазия — мөхәббәтем минең!

Ут һүнә.

## МӘК ЯЛАНЫ

Бөтә яланды ҡып-ҡыҙыл мәк ҡаплап алған. Бында ғашиҡтар осраша. Прометей менән Агазия, һуңыраҡ Афродита күренеп ҡала. Агазия — Прометейҙың ҡосағында.

Прометей.

Агазия! Мөхәббәтем минең!
Берҙе бергә ҡушып, хасил булған
Иң бөйөк һан ике икәнлеген
Әле яңы килеп төшөндөм мин.
Һинең менән бына ҡауышҡас та,
Бер-береһенә әле ҡушылмаған
Миллиондар — сүп ошо ике алдында.
Мең йыл көлгәнем юҡ ине. Бөгөн
Сабыйҙарса ғәмһеҙ көлгөм килә,
Барын онотоп, бер тилергем килә!
Мин үҙемде ике тапҡыр таптым —
Вазифамда, йәнә мөхәббәттә.
Күңелемдең сынйырҙарын өҙөп
Асылыма ҡайттым, асылыма!
Агазия! Һөйгән йәрем минең,
Ҡосағымдаһың һин, ә үҙеңде
Шул мәлдә лә өҙөлөп һағынамын.
Ҡараштарың — минең күҙҙәремдә,
Йөрәгеңә йөрәгем ҡағылып тибә,
Ә үҙеңде өҙөлөп һағынамын.
Ниңә өндәшмәйһең?

Агазия.

Бәхетемде
Өркөтөрмөн тимен, өн сығарһам.
Ҡояш янғанда ай тоноҡлана.
Һин һөйләйһең, мин тыңлайым ireп...

Прометей.

Донъя яралғандан бирле һиңә
Ғашиҡмын мин. Бөртөк тупраҡ инең
Әле башта. Шуға ғашиҡ булдым.
Бер мәңгелек үткәс, күҙәнәккә
Әйләндең һин. Тағы мәңгелектән

Һиңә йән өрөлдө. Ә мин иһә
Һине һаман һөйҙөм, һөйҙөм, һөйҙөм...
Һәм хәҙер ҙә шатлығымдан иҫереп,
Ҡосағымда көйө һағынам һине,
Һөйөп туя алмайса...
*(Ҡапыл хәсрәтләнеп.)*
Агазия!
Һинең бөтә ғүмерең бер көн һымаҡ
Үтеп киткәс, ни ҡылырмын тағы?

Агазия.

Көн башлана ғына.

Прометей.

Тимәк, бөтә.

Агазия.

Башланғаны, Прометей, хаҡ, бөтә.

Прометей.

Юҡ! Ваҡыттың һәммә миҙгелдәрен
Мин бит һинең менән барлап килдем.
Бынан һуң да шулай булыр.
Һине,
Һине, алла яһап, һауаларға
Алып менәсәкмен, Агазия.
*(Улар бер-береһе ҡаршыһына теҙләнә.)*

Афродита күренә. Ғашиҡтарҙың бәхетен күреп, һоҡлана ла, унын фажиғәле бөтәсәген һиҙеп, хәсрәтләнә лә.

Афродита.

Мөхәббәттән бөйөк һис нәмә юҡ,
Әгәр ҙә ул алла менән шулай
Кешене тиң итә ала икән.
Тиң генәме? Ер ҡыҙына, ана,
Алла үҙе нисек башын эйгән.
Эймәҫлек тә түгел. Йөҙҙәрендә
Ғәжәйеп бер илаһи нур балҡый.
Ғүмере көн булған заттарҙың мин
Быңдайын уҡ тәүге тапҡыр күрәм.
Улар лайыҡ: фатихамды бирәм!..

*(Ҡапыл әсенә.)*
О ҡәһәрле яҙмыш!
Бахыр алла.
Һин теләгән тәҡдир насип түгел уға,
Ризығы ла, әжәле лә уның
Ошо ерҙә,
Беҙҙең батшалыҡҡа
Оса алмай ул. Юҡ шул ҡанаттары...
О ҡанатһыҙ кеше, бисараҡай!
Күҙемдәге хәсрәт уттарынан
Керпектәрем көйә, һине йәлләп...
*(Юҡ була.)*

Агазия *(Прометейга яҡынлаша)*.

Бөтә әжәлләләр араһында
Иң бәхетле, бәлки, бер үҙемдер.
Һулышыңдан иҫерәм — ниндәй рәхәт!
Әжәллегә тағы нимә кәрәк?

Прометей *(һикереп тора)*.

Мин әжәлһеҙ итәм һине хәҙер!
Йөрәгемде һурып аламын да
Күкрәгеңә һалам ҡап яртыһын.
*(Күкрәген йыртмаҡсы итә.)*

Агазия *(ынтыла)*.

Туҡта! Туҡта!

Прометей.

Туҡтаһам, һуң булыр.

Агазия.

Юҡ, юҡ! Юҡ, кәрәкмәй! Ҡурҡам!

Прометей.

Ниҙән ҡурҡаһың?

Агазия.

Мәңгелектән. Һәләк итмә мине!
*(Ялбарып.)*
Зинһар, һәләк итмә, әгәр һөйһәң...

Прометей.

Һис ни аңламайым.

Агазия.

Һин алла шул —
Бөтәһен дә аңлап бөтә алмайһың.
Ерҙә минең барлыҡ ҡан-ҡәрҙәшем, ә
Шуларҙы һуң ташлап мәңгелеккә
Нисек китәйем мин бер яңғыҙым?

Прометей.

Улар һине минең шикелле үк
Ярата мы?

Агазия.

Яратмайҙар мине.
Шикләнәләр, ситкә тибәрәләр,
Хатта йәберләйҙәр. Ә үҙҙәре
Минһеҙ йәшәй алмай.

Прометей.

Аңламайым.

Агазия.

Аңламаҫһың, һин шул алла ғына...

Прометей *(борсолоп)*.

Әҙәм ахмаҡлыҡтарына аҡылың етмәҫ...
Кешеләрҙе бер саҡ яһаным да
Оноттом шул. Бар ҡәһәре — миңә!
*(Өҙгөләнеп.)*
Уларға ни булды? Ниңә шулай
Ҡәрҙәштәрен улар күрә алмайҙар?

Агазия.

Мин тыуғас та, минең бишегемә
Ҡайҙандыр бер осҡон килеп төшкән.
Яҡтыртҡан да мине, кире осҡан.
Ут зәхмәте ҡағылған тип, ана
Шунан бирле мине ят итәләр.

Прометей.

О кәләшем! Һинең сәңгелдәккә
Тамған осҡон — минең йәшем ине —

Һағыш ҡатыш һоҡланыуым йәше.
Ул осмаған, йөрәгеңә боҫҡан.
Күпме борсолоуҙар, яфа, әрнеү
Килтергән шул бөрсөк йәшем һиңә.
Кисер мине, кисер, Агазия,
Бөтә йыһан менән инәләмен!

Агазия *(ҡосаҡлап)*.

Ҡуйынымда мәлдә шомдарыңды,
Шиктәреңде, ғазабыңды онот.
Онотолоп ҡосаҡлаған саҡта,
Бар ғаләмде тотош көйө түгел,
Бер үҙемде генә ҡосаҡҡа ал!
Кисәгене, иртәгәне онот.
Бар донъяңды онот был минутта!

Прометей.

Бар донъяны онотоу, Агазия,
Һине онотоуға бәрәбәр ул.
Ихтыярым етмәй быға минең.
Һин әжәлле саҡта — мин ғазаплы.
Тынғылыҡ юҡ.

Агазия.

Инде мөхәббәткә
Шундай ҡара мөһөр һуғабыҙмы?

Прометей.

Юҡ! Мин һине әжәлеңдән айырам!

Агазия.

Ҡуй, Прометей! Мин бит әйттем һиңә:
Мәңгелеккә минең юлым өҙөк.
Ялбарамын, башҡа һис ҡасан да
Әйтмә быны, әгәр мине һөйһәң.

Прометей
*(үҙенең төп миссияһын күҙ алдына баҫтыра)*.

Һөйәм!
Шуның өсөн ҡарар ҡылдым,
Баш китерлек хәтәр ҡарар ҡылдым:
Кешеләргә,
Бөтә кешелеккә

Үлемһеҙлек бирәм, бүләк итеп,
Шулар араһында һин булырһың.

Агазия.

Әҙәм әйтһә быны, аҡылынан
Шашҡан тиер инем. Алла әйткәс,
Нимә уйларға ла зиһенем етмәй.

Прометей.

Мин титанмын. Эйе, мин алламын,
Ҡеүәтем сикһеҙ. Ерҙә ут ярала.
Ошо ут тәненә күктәрҙәге
Илаһи ут йәнен ҡушамын да
Кешеләргә бирәм. Ул яҡтылыҡ
Кемгә төшһә, шул үлемһеҙ булыр.
Ер йөҙөн мин шундай яҡтыртырмын,
Хатта күктәр үтә күренеп торор.
Моратыма әгәр ирешмәһәм,
Үҙем янып, көл-күмергә ҡалып,
Әжәлемде табып, һинең менән
Бергә һеңәсәкмен ҡара ергә.

Агазия.

Аңыңа кил, аллам!

Прометей.

Юҡ, килмәйем!
Тик ярһыуҙар, тик шашҡандар ғына
Тәүәккәллек ҡыла, ҡыла ҡалһа...
Эйе, мин хәл иттем, Зевс утын
Ерҙәге ут менән ҡауыштырып,
Замананың асылын үҙгәртергә.

Агазия.

Мин ҡурҡамын бынан.

Прометей.

Мин дә ҡурҡам...
Ләкин вазифамды башҡарырға
Мин әҙермен!.. Фатихаң бир, Агазия!

Яуап урынына Агазия уны ҡосаҡлай. Ошо ваҡыт аҡрын ғына шомло музыка ишетелә. Сәхнә ҡараңғылана бара. Яҙмыш аллаларының-мойраларҙың тауышы ишетелә.

Мойралар тауышы.

Яҙмыш аллалары — беҙ һорайбыҙ:
Ошо һинең һуңғы ҡарарыңмы,
Прометей?
Бәлки, тағы уйлап ҡарарһың бер?..
Һинең өсөн хафаланып, быны
Яҙмыш аллалары — беҙ әйтәбеҙ.

Прометей.

Юҡ!
*(Шаңдау ҡабатлай: «Юҡ!» «Юҡ!» «Юҡ!»)*

Мойралар тауышы
*(улар һуҙып, һүҙләп-һүҙләп кенә әйтәләр)*.

Ҡаф тауына ҡара, о, Прометей!
Ана, шәйләйһеңме таш ҡаяны?
Шул ҡаяла — сынйырланған алла.
Үҙ яҙаңды үҙең ҡара, ана!
Утыҙ мең йыл дауам итер ғазап.
Утыҙ мең йыл... утыҙ мең йыл...
Әгәр ниәтеңдән ҡайтмаҫ булһаң,
Зевс һиңә шундай яза бирер —
Утыҙ мең йыл... Утыҙ мең йыл...

Моңһоу музыка өҙөлә. Нимәлер гөрһөлдәп ҡуя. Кавказ тауындағы ҡая. Зевстың хеҙмәтселәре Власть, Көс, Гефест Прометейҙы упҡын өҫтөндәге ҡаяға алып килгәндәр.

Власть.

Мин власмын. Власым бөттө шунда.

Көс.

Мин — Көс. Минең көсөм тамам. Инде
Бығау көсө мине алмаштырыр.
Әйҙә, Гефест, маһирлығың күрһәт!

Власть.

Шундай сынйырҙар ҡой, өс йөҙ быуат
Шылт та иткән урыны булмаһын.
Прометейҙың бауырын суҡыр ҡошҡа
Ҡорос суҡыш, тимер тырнаҡтар ҡуй.
Зевс әмере шулай.

Гефест.

Башҡарырмын.
Бар китегеҙ, зинһар. Һеҙ булғанда,
Тынға ауыр. Ҡулдар эшкә бармай.

Көс.

Самалабыраҡ һөйлә, алла заты,
Беҙ — Зевстың ике ҡаҙыҡ теше...
*(Китәләр.)*

Гефест Прометейҙы ҡаяға шаҡарып бығаулай. Зың-зың тимер тауышы, сынйырҙар сылтырауы ишетелә. Баш өҫтөндә бөркөт саң-саң итә. Гефест, эшен бөтөргәс, бығаулы Прометей алдына килеп теҙләнә.

Гефест.

Иң әшәке, яуыз, иң ҡәһәрле
Эш башҡарҙым ихтыярымдан тыш.
Был ҡулдарым нисек ҡороманы,
Был күҙҙәрем шартлап сыҡманылар?
Ҡәһәр төшһөн минең һөнәремә!
Һалған һарайҙарым көлгә ҡалһын,
Мин ҡойған бар затлы алтын таждар
Иреп аҡһын. О шәфҡәтһеҙ Зевс!
Рәссам булыр, бөйөк шағир булыр
Улыңды һин палач яһаның бит.
Һин беләһең хөр күңелде нисек
Енәйәткә тартып, хур итергә!
Күңелем тартмағанды ҡулым ҡылды.
Ниндәй хурлыҡ! Зевс ҡуша, имеш!
Имеш, ул да яуызлыҡтан түгел,
Кәрәк өсөн ҡыла яуызлыҡты.
Ниңә кәрәк икән ул яуызлыҡ?
*(Илай.)*
Күңелем ҡушмағанды ҡулым ҡылды,
Кисерә алһаң, зинһар, кисер мине,
О Прометей!

Прометей.

Туҡта шунда, Гефест!
Йәшең менән һаҙ яһама. Бында

Өс йөҙ быуат минең йәшәйһем бар.
Дымлы һауа миңә килешеп етмәй.

Гефест.

Һин көләһең минең күҙ йәшемдән.

Прометей.

Күҙ йәшеңдең бар хаҡы шул булғас...

Гефест.

Мин үкенәм...

Прометей.

Ә мин шуны беләм:
Ихтыярһыҙ йәки ихтыярҙан
Әшәкелек ҡылып бысранғандар,
Бына шулай тәүбә итә-итә,
Изге күренергә маташалар.
Йәнәһе, улар йомшаҡ күңеллеләр,
Йәнәһе, улар үкһеп илай белә —
Аҙаҡ...
Исмаһам, ир бул. Ҡылғаныңа
Ҡырҡ төрлө ғәфү һорап торма,
Ҡырҡ аҡлау табып бер үҙеңә...

Гефест *(тора)*.

Ҡәһәр генә һуҡһын һөнәремде!

Прометей.

Һөнәрең дан һинең. Оҫталығың
Хаттин ашҡан. Нисегерәк мине
*(сынйырҙарын сылтырата)*
Кейендереп ҡуйҙың. Тамаша бит!

Гефест.

Ни әйтһәң дә, һиңә бәхилмен мин.
Тәҡдиремде күтәрергә әҙермен.
*(Китә.)*

Прометей.

Минең бауырымды талар ҡошто
Дағаларға, Гефест, онотма!

Бөркөт саң-саң иткән, ҡанат елпегән тауыш ишетелә.

Әжәлләләр затын һөйгән өсөн
Бына ниндәй дәрәжәләр алдым —
Бөйөктән дә бөйөк Ҡаф тауының
Түбәһенә аштым. Ғазаптарҙың
Иң юғары тәхетенә мендем.
Хаҡын белер микән әжәлләләр
Берәй заман ошо ҡорбандарҙың?
Ә бит аллаға ла бәхет кәрәк,
Бик-бик кәрәк бәхет аллаға ла!
...Нимә һөйләйһең һин, о, Прометей?!
Изгелегең, яфаларың өсөн
Түләү кәрәк, тимәк, үҙеңә лә?
Ваҡлашаһың, титан!
...Улай тиһәң —
Ниңә минән түләү түләтәләр?..

Бөркөт саң-саң итеп Прометей өҫтөнә ҡуна.

Ах, тәүге ҡат бауырымды телде
Ҡорос суҡыш, тимер тырнаҡлы ҡош!
Иң һуңғыһы ҡасан булыр икән?

Прометейҙың әсәһе Фемида инә. Ул баштан-аяҡ ҡара кейемдә. Ялан баш, сәстәре сал. Прометей алдына баҫа.

Фемида.

Улым!

Прометей.

Әсәй!
*(Ынтыла. Сынйырҙар сыңлап китә.)*

Фемида.

Ни хәлдәргә төштөң?!

Прометей.

Күрәһеңдер.

Фемида.

Ниңә бар бәләләр

Минең өҫкә генә яуа икән?
Балаларым! Ниңә бөтәгеҙ ҙә
Зевсҡа баш бирмәҫ булдығыҙ һеҙ?
Ана, ағаң Атлант, яза үтәп,
Көн менән төн тоташҡан бер ерҙә
Иңе менән күкте терәп тора.
Инде һиңә ниндәй ҡаты яза
Бирҙе Зевс. Бахыр уландарым!

Прометей.

Теләһәң генә ни әйт, тик, әсәйем,
Беҙҙе «меҫкен», беҙҙе «бахыр» тимә.

Фемида.

Юҡ-юҡ, балам! Ҡара ҡайғыһынан
Аҡылдарын юйған әсәйеңде
Кисерә күр. Юҡ, һеҙ меҫкен түгел,
Меҫкендәргә мин ҡул һелтәр инем...

Прометей.

Ниңә килдең, әсәй? Хәлдәремде
Еңеләйтер сараларың юҡ бит,
Тик үҙеңде генә өҙгөләйһең.

Фемида.

Үтенәм, улым! Ҡылған ҡылығың өсөн
Ғәфү һора. Зевс кисерер һине.
Ғорурлығың һиңә юл ҡуймаһа,
Аяғына үҙем йығылырмын.

Прометей.

Айны, әсәй, уян! Һушыңа кил! —
Әгәр йәберләнгән йәберсенән,
Әгәр ҡорбан шулай палачынан
Ғәфү һорай торһа, был йыһанда
Ғәҙеллек һуң ҡасан килер беҙгә?
Ҡасан килер?

Фемида.

Мин һаңғырау, һуҡыр:
Балам тотҡонлоҡта яфа сигә.
Бар ғәҙеллек — шуны ҡотҡарыуҙа.

Тәүбә килтер, улым, ғәфү үтен,
Шунан башҡа беҙҙең сарабыҙ юҡ.
Тәкәбберлегеңә ирек биреп,
Йүгәнһеҙлегеңә юл ҡуймасы.
Буйһон, улым, Зевс ҡөҙрәтенә.

Прометей.

О ғаләмдең барлыҡ әсәләре!
Ниңә шундай сая рухлы улдар
Табаһығыҙ һуң һеҙ? Улдарығыҙ,
Ир еткәндә, хәтәр эштәр ҡылғас,
Һеҙ уларҙы тәүбә килтерергә,
Үкенергә, ҡолдай баш эйергә,
Хатта теҙ сүгергә өндәйһегеҙ.
Ниңә өндәйһегеҙ? Өндәр булғас,
Беҙҙең күкрәктәргә ниңә шундай
Ярһыу, батыр йөрәк һалаһығыҙ?

Фемида.

Ҡарыныбыҙҙа кем ятҡанын башта
Беҙ белмәйбеҙ.

Прометей.

Алдан белһәгеҙ һеҙ,
Бары йыуаш, телһеҙ-тешһеҙ улдар,
«Ә» тигәндә «мә» тиеүсе ҡолдар
Тыуҙырыр инегеҙме был донъяға?
Тыныс йәшәр ине ул саҡ бар әсәләр...
*(Сынйырҙарын сыңлатып ҡуя.)*
Ниңә беҙгә шундай утлы йөрәк
Бирәһегеҙ? Биргәс, үкенәһегеҙ, —
Әсәй!?

Фемида.

Әсәйеңде рәнйетәһең...
Мин үкенер инем, бисаралар,
Нишаналар тапһам; йыуаштарға,
Йүнһеҙҙәргә күкрәк һөтөм бирһәм,
Мин үкенер инем... О, Прометей,
Үкенмәйем һине тапҡаныма,
Үкенәм шуға: һинең яҙаларҙы
Үҙем күтәрергә ихтыяр юҡ.

Улдар өсөн яза күтәрә алһаҡ,
Тыныс булыр инек беҙ — әсәләр...

Прометей.

Ғазапта ла яҡты йөҙөңә мин
Ҡара яҡмам, әсәй, һин тыныс бул.
Зар һүҙемде ишетә алмаҫ Зевс,
Тик тәүбәләр минән талап итмә!

Фемида *(асылына ҡайтып)*.

Моғайын, һин хаҡлыһыңдыр, улым,
Һин бит минең балам — Фемида улы,
Ғәҙел хөкөм аллаһының улы.
...Ниндәй оят! Үҙ баламды үҙем
Золом, ғәҙелһеҙлек ҡаршыһында
Баш эйергә өндәп өгөтләнем.
Аҡылымды ҡайғы томаланы.
Ах, шул ҡайғы — бала ҡайғылары...

Прометей.

Бар, кит, әсәй. Һинең ғазаптарың
Үҙ язамдан әрнеүлерәк миңә.
Бүтән килмә, әсәй. Өс йөҙ быуат
Үтеп китер әле. Күрешербеҙ.

Фемида.

Яфаларҙа ваҡыт аҡрын аға.
Хуш. Сабыр бул, улым. Сабыр бул!

Фемида китә. Яңынан бөркөт саңҡыуы ишетелә. Ул Прометейҙы талай. Прометей өн сығармай. Мәк яланы, яҡтылыҡ Прометей менән Агазияға төшә. Агазия, ярҙам һорағандай, Прометейға һыйына.

Агазия *(һиҫкәнеп)*.

Икәү бергә ҡот осҡос төш күрҙек.
Өнөмә кил, йәнем, өнөмә кил!

Прометей.

Был — төш түгел, минең күрәсәгем.
Яҙмыш аллалары иҫкәрттеләр.

Агазия.

Кире ҡайт уйыңдан, о, Прометей!

Прометей.

Кире ҡайтыу — һинән ваз кисеү ул,
Үҙ-үҙемдән, тимәк, ваз кисеү.
Юҡ, юҡ! Мин — Прометей.
Ҡарарым ныҡ минең.
...Өс йөҙ быуат тиҙ үк үтеп китер,
Һин әжәлһеҙ булып, мине көтһәң.
Тәүәккәлләнем мин, Агазия!
*(Ҡараңғылана башлай.)*

Агазия.

Ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡласы мине!..
Тағы бер ҡат, тағы бер ҡат, аллам...

Ут һүнә.

## ЗЕВС ҺАРАЙЫ

Гефест төҙөгән затлы һарайҙарҙың береһе. Төпкө усаҡта йымылдап күмер көйрәй. Зевстың илаһи уты шулай яна. Власть менән Көс һаҡта тора.

Власть.

Бөтә затлы нәмә — тотҡонлоҡта,
Бөтә ҡиммәтле зат — бик-йоҙаҡта,
Бик-йоҙаҡта, йәғни бығауҙарҙа.
Аңламаҫһың ошо аллаларҙы —
Тыйыр булғас, ниңә бар ҡылалар,
Бикләп ҡуйыр булғас, ниңә асалар?
Ошо утты күпме заманалар
Һаҡлап торабыҙ беҙ. Аңламайым,
Кемдән, ниңә һаҡлайбыҙҙыр уны?
Һин әйт әле...

Көс.

Мин ҡара көс бары.
Тәңре ҡылғандарҙы тикшерергә
Башым етмәй. Етһә, хоҡуғым юҡ.

Власть.

Тимәк, барлы-юҡлы аҡылың да бикле?

Көс.

Һиңә мәғлүмерәк. Һин — Власть.

Власть.

Мин дә һуҡыр, һаңғырау власть ҡына,
Йәшен түгел, күкрәү генәмен мин —
Зевс йәшененең күкрәүемен.

Көс.

Хикмәтле һүҙ һөйләп ҡуйҙың әле.
Власть ауыҙынан ишетеү сәйер.

Власть.

Ялҡтым мин. Биҙҙем.

Көс.

Нимәкәйҙән?

Власть.

Һатмаҫ булһаң, әйтәм.

Көс *(ҡысҡырып көлә)*.

Бәлки, һатыр ҙа инем,
Ҡиәфәтең хөртөй, күп бирмәҫтәр.

Власть.

Көлмәйерәк тор! Һатҡан-алған саҡта
Власть йөҙөнә ҡарап тормайҙар ул —
Быныһын мин беләм. Һатмаҫһыңмы?

Көс.

Һатыу-алыу минең кәсеп түгел,
Уның менән Хәйлә шөғөлләнә.
Ә мин — Көсмөн.
*(Үсләшә биреп.)*
Рәхим итеп кенә...

Власть.

Бер ҙә юҡҡа кәпәренмә улай.
Әйтәм. Тыңла.

Көс.

Туҡта! Ашыҡмай тор. Әгәр серең
Эсеңә һыйһа, әйтмә, сыҙа, түҙ.
Һыймаҫ булһа, әйҙә түңкәреп ҡуй.

Власть.

Һыймай. Шартлап барам... Йөҙәнем мин,
Юҡ нәмәнең ҡолағаһе һымаҡ,
Ялған власть булып йәшәүемдән.
Нимә эшләп һуң Власть була тороп,
Мин Зевсҡа тейеш буйһонорға?
Мине Власть итеп яратҡас, ул
Үҙе миңә баш эйергә тейеш,
Бойороҡтарҙы, бөтә әмерҙәрҙе
Уға үҙем — мин бирергә тейеш,
Мин Зевстың тупһаһында түгел,
Түр башында ултырырға хаҡлы.
Минән өҫтөн һис бер төрлө зат юҡ!
Мин — Власмын!!
Баҡһаң... — Хурлығы ни! —
Ҡарауылда торам эт шикелле.
Бөтә затлы нәмә тотҡонлоҡта...
Хатта үҙем дә...

Көс *(аптырап тыңлай)*.

Аба-ба-ба! Һалдың хәбәрҙе, әй,
Телеңә, ахыры, шайтан төкөргәндер!
Былай булғас, Баш Алланы хәҙер
Тәхетенән төртөп төшөрәһең дә
Урынына менеп ултыраһың.

Власть.

Юҡ, тәхеттә үҙе ултырһын ул.
Ә мин иһә уның елкәһенә
Менеп атланырмын. Ул сағында...

Көс.

Әйҙә йәһәтерәк! Туйғансы бер
Көлөп ҡалыр инем, эсте тырнап. Ха-ха!

Ҡайҙалыр гөрһөлдәү ишетелә лә ҡапыл тына.

Власть *(шикләнә)*.

Сеү! Шаулама. Мин әйттем дә ҡайттым.
Әйтмәнем дә, хатта өндәшмәнем...

Көс *(аптырап)*.

Әйтмәгәс, һуң нисек ишеттем мин?

Власть.

Һин дә ишетмәнең.

Көс.

Аумаҡай һин, Власть.
Күҙ алдында ҡырҡ төҫкә инеп,
Ҡырҡ төрлө хикмәт сығараһың.

Власть.

Мин Власмын. Ни ҡылһам да килешә,
Ни әйтһәм дә — дөрөҫ, урынлы.
Ләкин әле һис ни әйтмәнем мин...

Көс.

Эһем, эштәр шулай икән...

Власть.

Шулай.
*(Тынып тора. Тағы ярһып китә.)*
Сәнселгере! Күҙле бүкән булып,
Күҙ ҙә йоммай, ҡымшанмай ҙа шулай,
Мәңге һүнмәҫ утты һаҡла, имеш.
Шайтан ҡағылһынмы инде уға?

Көс.

Зевс йоҡлағанда тулап ҡал бер,
Ситлектәге уҫал юлбарыҫтай...
Кәйеф-сафа аллаларҙы йыҡҡан.

Власть.

Ҡалай тыныс. Олимп үлеп йоҡлай.
Беҙ торабыҙ...

Көс.

Һеләгәйҙе йотоп...
Зевс табынында тау-тау ризыҡ,
Мискә-мискә шарап тороп ҡалған...

Хур ҡыҙҙарының моңло йырҙары ишетелә. Үҙҙәре лә, саҡырыу хәрәкәттәре яһап, күренеп ҡалалар. Власть менән Көс һағайып ҡарай. Тыңлайҙар. Көс мауығып тыңлай.

Власть.

Хур ҡыҙҙары ҡалай моңаялар,
эскә ҡотко һалып...

Көс.

Йә уларға
Ҡарт аллалар менән күңелһеҙҙер...
Ҡалай саҡыралар.

Власть.

Аҙҙырғыстар...

Көс.

Юлдан яҙҙырғыстар!
Саҡырмағыҙ!..

Власть.

Власым етмәй был сихырға ҡаршы.

Көс.

Кире ҡағыр инем — көс-хәлем юҡ.
...Күңелде бер йыуатып килһәк, бәлки,
Яҙыҡ булмаç ине.

Власть.

Сауап булыр...
Ҡалай өҙөлөп-өҙөлөп саҡыралар...

Көс.

Нисек түҙмәк кәрәк?..

Власть.

Арбанылар, тамам арбанылар!
Бөттө власым!

Көс.

Бөттө көсөм. Киттек!
Усағына
Бысағым да булмаç шул арала.

Ҡулын һелтәй, китәләр. Бер аҙҙан Прометей инә. Ҡулында — ҡамыш. Усаҡҡа яҡынлаша.

Прометей.

Рәхмәт һеҙгә, изге хур ҡыҙҙары!..
*(Тыңлап тора. Бер аҙҙан йыр тына.)*
Ниһайәт, мин маҡсатыма килдем.
Ҡул һонорға ғына ҡалды бары.
Тик бер нисә бөртөк осҡон алып,
Ошо ҡурай эсенә һалырға ла —
Ергә!

Бер ситтән Афродита сыға. Ул тоноҡ. Башта Прометей уны күрмәй.

Афродита.

Сеү, Прометей! Көс һәм Власть бында.

Прометей.

Алтын Афродита?! Һин яңғыҙың
Был сәғәттә Зевс һарайында?

Афродита.

Һине иҫкәртергә, ҡурсаларға
Килдем. Ниәттәрең фажиғәле.
Ниәтләргә ашыҡмай тор. Тыңла!
Һине сикһеҙ бәлә көтә, титан!

Прометей.

Уныһын беләм.

Афродита.

Күрер ғазаптарың
Аҡланырмы?

Прометей.

Әйтә алмайым алдан.

Афродита.

Үлсәп ҡара: әҙәп, ҡәҙер белмәҫ
Тома наҙан шул әҙәмдәр өсөн
Бәхетеңде ҡорбан итәсәкһең.
Азатлыҡ һәм дәрәжәңде биреп,
Алмашына нимә алырһың һуң?

Прометей.

Зевс ҡәһәрләһә, кешеләрҙең
Рәхмәтенә, бәлки, ирешермен.

Афродита.

Һаман сабыйһың һин, и, Прометей.

Прометей.

Кескәй ҡулы менән сабый ғына
Тере күмер услай, йылан быуа.
Шундай сабыйлыҡтан арынмаһам,
Мин Прометей булып ҡаласаҡмын...

Афродита.

Ә маҡсатың?

Прометей.

Минең маҡсат — Кеше.

Афродита.

Күҙеңде ас. Ҡайҙа һуң ул Кеше?
Унда һуҡыр, ғәрип, ҡырағайҙар,
Бер-береһен талап, ғүмер һөрә.

Прометей.

Әгәр ниәтемдән кире ҡайтһам,
Шул һин әйткән ғәрип-ғөрәбәләр,
Дөм-һуҡырҙар, аңһыҙ томаналар,
Әҙәп белмәй торған иманһыҙҙар,
Себен урынына үрсей-үрсей,
Бар донъяны баҫып алырҙар ҙа,
Анау йәшел, аяҙ, йәш планета
Нишаналар иле булып китер.
Ә һуңынан Зевс, эсе бошһа,
Иҙеп, ҡырып ташлар бөтәһен дә.
...Күҙем асыҡ минең, Афродита.
Инде Кеше күҙен асасаҡмын.
Һәм күрһен ул үҙенең ниндәй матур,
Ниндәй көслө зат икәнен.
Бәлки,
Миңә рәхмәт уҡыр килеп бер саҡ.

Афродита.

Рәхмәт көтмә, аҙаҡ ҡыйын булыр...
...Күрәм, бәхәс бушҡа. Сыҙамлы бул,
Бөйөк, бахыр, фажиғәле алла!

Прометей.

Рәхмәт һиңә, гүзәл Афродита!
*(Ҡамышын һуҙып утҡа ынтыла.*
*Ут осҡон сәсә башлай ҙа, туктай.)*

Афродита.

Сабыр! Власть менән Көс тегендә
Кәйеф аса. Барып мәжлестәрен
Уртаҡлашайым мин.
*(Баш эйә.)*
Хуш, Прометей!

Прометей *(усаҡҡа килә. Осҡон сәселә башлай. Прометейҙың йөҙөнә ут төшә. Йөҙөндә тантана).*

Донъя яралыуы бер бөйөк мәл
Ине. Икенсеһе, бәлки, ошо —
Мәңгелеккә тиңдәш бер секундтыр,
Зевс усағынан ут алып мин
Кешелекте әжәленән айырам.
*(Ҡамыш эсенән осҡондар ала.)*
О бөйөк мәл! Ҡулымда ут. Осам!
Һаумы, планета — Ер! Һаумы, Кеше!

Ғаләмгә оса, артынан нур юлы һуҙылып ҡала. Бер аҙҙан, нимәлер һиҙенеп, Гермес инә. Ләкин ул башта усаҡҡа иғтибар итмәй.

Гермес.

Эсем тулы шом, шик. Бөтәһе лә
Хәйлә ҡора төҫлө, төрлө-төрлө
Мәкер ҡыла төҫлө. Бар аллалар
Йоҡлағанда күҙгә йоҡо ҡунмай
Көн-төн шикләнеүҙән. Бөгөн бигерәк...

*(Усаҡ яғына ҡарай. Власть менән Көстөң юҡлығын күреп, шашып ҡала. Ергә төшөп ҡалған ике-өс атҡыны*

*шәйләй. Ике йоҙрого менән маңлайын төйөп, үрле-ҡырлы һикерә.)*

Харап булдым! Харап булдым! Харап!
Власть! Көс! Һеҙ ҡайҙа? Дезертирҙар!
Һатлыҡ йәндәр! Тамуҡ кисәүҙәре!
Утты урлағандар! Утты! Утты!

Власть менән Көс ҡосаҡлашып килеп инәләр. Улар ҡыҙмаса.

Власть.

Беҙ ни бында! Ниңә һөрәнләйһең,
Ҡылый Гермес? Сәбәләнмә улай
Төн йөҙөндә.

Көс.

Зевсты уятырһың.
Тс-с-с! Шаулама. Ана, бар, баш төҙәт.
Унда әле ҡалды.

Гермес.

Алйоттар! Ах! Асыҡ ауыҙҙар! Ах!
Көс инде ул тыумыштан уҡ ахмаҡ,
Һуң һин, Власть, ни ҡараның? Власть!
Һиңә әйтәм.

Власть *(башын сайҡай)*.

Шулай илерерлек
Ни булды әле?

Гермес.

Утты урлағандар!
Быны... Быны... Осҡон түгелеп ҡалған...

Власть *(аңына килеп)*.

Бөттөк! Бөттөк!

Көс *(таралып төшә)*.

Бөттөк, былай булғас,
Юҡҡа хәмерен эсеп бөтөрмәнем...
*(Саң һуғырға тотона.)*
Бөттөк! Бөттөк! Бөттөк! Бөттөк!..

Баяғы мәжлестә булған бөтә аллалар абына-һөрөнә килеп залға тула. Тауыштар: «Нимә булған?», «Ниңә саң ҡағалар?», «Зевс әллә тағы табын йыямы?», «Урлағандар, ти», «Зевсты урлағандар!» «Кем урлаған Зевсты?» Зевс инә. Аллалар шаҡ ҡата. Гермес уның аяғына барып йығыла.

Гермес.

Язаңды бир! Ҡаты язаңды бир!

Зевс.

Кемгә?

Гермес.

Миңә.

Зевс.

Асыҡлап әйт — ниңә?

Гермес.

Миңә! Утты урлағандар!

Зевс.

Яза аҙаҡ. Кем урлаған? Власть?
Әй, Көс?

Власть.

Беҙ күрмәнек, хаким, язаңды бир.

Зевс.

Яза аҙаҡ! Кем урлаған утты?

Гермес.

Эҙенә төшөп әле өлгөрмәнем.

Зевс.

Һәммә аллалар ҙа ошондамы?
Гефест, барла!

Гефест *(аҡһай-туҡһай барлап)*.

Бында, буғай, кеүек.

Тауыштар.

— Бөтәһе лә бында!
— Кемдер юҡ бит!
— Кем юҡ?

Гефест.

Кисер, Зевс. Прометей юҡ!

Тауыштар.

— Ҡайҙа Прометей?
— Әй, Прометей!
— Прометей-ей!
— Прометей юҡ!

Зевс.

Тимәк, ул урлаған.
Ах, Прометей!
Һин күктәргә хыянаттар ҡылып,
Барлыҡ аллаларға, ҡанундарға
Ҡаршы сыҡтың. Зевс ҡөҙрәтенә
Ҡул күтәрҙең. Үсем ҡанмаç һиңә,
Ниндәй генә яза бирһәм дә мин...

Тауыштар.

— О ғәйрәтле титан, харап булдың!
— Һәләк булдың, мең һөнәрле алла!

Гермес.

Власть менән Көскә әмерең бир —
Ҡыуып етеп, тартып алһындар ҙа
Кире ҡайтарһындар изге утты.
Улар менән үҙем бергә осам.

Зевс.

Унан тартып алһаң, бүтән урлар.
Юҡ! Юҡ! Бында хәйлә, хәйлә кәрәк...
Ул килтергән уттан ҡото осоп,
Әҙәми зат үҙ аяғы менән
Тапап-тапап һүндерергә тейеш.
Инде шул саҡ
Юлдан яҙған уғры
Ғәрлегенән, асыу, хурлығынан
Үҙ тештәрен сәйнәп йотмаһамы?
Ошо алтын таяҡ тимер булыр!
*(Таяғын ырғыта.)*
Эй, Эрида! Гермес! Бына етте
Һеҙҙең сират һөнәр күрһәтергә!

Ергә осоғоҙ, Прометейҙы уҙып!
*(Гермес менән Эрида юҡ була.)*
...Яза аҙаҡ! Бөтә ғәйеплеләр,
Ғәйепһеҙҙәр хөкөм ителәсәк —
Яза аҙаҡ. Әммә ул язаның
Аҙағы юҡ. Булмаҫ бер ҡасан да...

Ҡот осҡос тынлыҡ.

Ут һүнә.

## УПҠЫН ЯНЫ

Ҡаҡ ҡаялы яр буйы. Аҫта — упҡын, тирә-яҡта — зәғиф ағастар, һоро төҫтәге һирәк үләндәр. Гермес менән Эрида инә. Улар кешеләрсә кейенгән. Гермес арҡаһына тоҡсай аҫҡан, Эрида таяҡ таянған. Эрида аҡһай, Герместың ике ҡолағы ла һәленеп төшкән. Таш өҫтөнә ултыралар.

Эрида. Әҙәм сифатында йөрөү ҡалай ауыр! Уф! Был ер тигәндәре лә ҙур икән, йәйәү атлағас, аяҡтар ҡалманы.

Гермес. Шыңшыма, илаһиә. Ниндәй генә булһаң да, һин алла заты бит.

Эрида. Ни эшләп һин мине «ниндәй генә»ләр рәтенә керетеп маташаһың әле, ә? Ҡылый! Афродита үҙе шартларҙай булып минән көнләшә. Ҡарпыш! Минән көслө илаһиә юҡ — мин Ыҙғыш аллаһы. Мин боҙғанды Зевс үҙе лә төҙәтә алмай. Иләк йондоҙҙай ауыҙыңды самалабыраҡ ас, һөрһөп бөткән ҡарт буйҙаҡ! Тфү! *(Тамам ҡыҙа.)* Кире әйләнеп киттем барҙым булыр.

Гермес. Йә, аҫыл һүҙҙәреңде сәсеп бөтөрҙөңмө?

Эрида *(тынысланып)*. Бөтөрҙөм шикелле. Ә ниңә?

Гермес. Хәҙер инде тын ал.

Эрида *(тоҡанып)*. Ниндәй хәстәрле! Иреп китерһең! Әгәр эшең шундай әшәке булмаһа, бәлки, һиңә күҙ ҙә һалыр инем.

Гермес. Хеҙмәт яғы һинеке лә инде... *(Ҡулын һелтәй.)*

Эрида. Минең эшем — таҙа, намыҫлы эш. Бөтәһен дә күҙ алдында башҡарам, аллаларҙы йөҙгә-йөҙ килте-

реп, үҙ ҡаршымда талаштырам исмаһам. Ә һин гел аҫтан киҫәһең, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләйһең.

Гермес. Их, Эрида! Һинең менән икебеҙ ике ҡата — бер кейем беҙ! Шулай булмаһаҡ, Зевс был йомошто беҙгә ҡушыр инеме ни?

Эрида *(көлә)*. Ҡата тураһында ҡыҙыҡ әйттең. Һин ҡатаның уңымы, һулымы?

Гермес *(уйлап тора)*. Һинән ҡалғаны, икенсеһе...

Эрида *(уға был оҡшай)*. Бына исмаһам кавалер.

Гермес. Әтү!

Эрида. Ҡайҙа һуң ул әҙәм тигән шәрәмәттәр?

Гермес *(тороп, төрлө сүп-сарҙы тибеп сығара)*. Ҡалдырып киткән сүп-сарҙарына ҡарағанда, ошо тирәлә булырға тейештәр. Күпме һөйәк, мал тиреһе, көршәк ватыҡтары...

Эрида *(иҫе китеп)*. Тәбиғәтте ҡалай бысратҡандар!..

Гермес. Быныһы — башы ғына әле...

Эрида. Әй, кешеләр, әй, әҙәмдәр! Ҡайҙа һеҙ?

Гермес. Килерҙәр. Көтәйек.

Эрида. Мин көтөргә яратмайым. *(Борғоланып ала.)* Бер нәмәне лә...

Гермес. Эһем... Барыбер көтөргә тура килә.

Эрида. Эй, Гермес! *(Маңлайына һуға.)* Идея! Аллалар бит ғауға ҡупҡан ергә ябырыла. Моғайын, кешеләр ҙә шулайҙыр. Әйҙә ҡысҡырып талашабыҙ.

Гермес. Иллә хәйләкәрһең, уң ҡата.

Эрида. Кем уң ҡата?

Гермес. Һин!

Эрида. Ә ниңә уң, ә һулы түгел?

Гермес. Улайһа, һулы — һул ҡата.

Эрида. Ә ниңә һулы? Ниңә уңы түгел? Ниңә һүҙеңдә тормайһың?

Гермес. Һинеңсә булһын — уңы, уңы, уңы...

Эрида. Ниңә әле минеңсә булырға тейеш, ә һинеңсә түгел?!

Гермес. Ярай, ярай, минеңсә булһын!

Эрида. Ниңә һинеңсә? Һинең ни ерең артыҡ? Ни ерең?

Гермес. Юҡ, артыҡ ерем юҡ!

Эрида. Ниңә юҡ? Һин ир бит! Ниңә артыҡ ерең юҡ? Һин йүнһеҙ, иҫәүән, булдыҡһыҙ, Хоҙай аҡтығы!

Тамам ыҙғышып китәләр.

Гермес. Һин буш баш илаһиә, янъялсы, ғәйбәтсе бисә!

Эрида. Мин буш башмы? Хәҙер бына башыңдағы бөртөк сәсеңде ҡалдырмайым. *(Герместың сәсен йолҡорға тотона, әсе тауыш сыға.)* Бына һиңә! Бына һиңә! Башың урынында ихтиозавр йомортҡаһы ғына тороп ҡаласаҡ! Һалбыр ҡолаҡлы йомортҡа!

Гермес. Етер! Етер, тим!

Был саҡ таштар араһынан боҫа-боҫа әҙәмдәр сыға. Улар Гермес менән Эриданы уратып ала. Тегеләр, кешеләрҙе күрмәмешкә һалышып, һаман тартҡылаша.

Әҙәмшаһ *(килеп баш эйә)*. Мин әҙәмдәр башлығы — Әҙәмшаһ булам. Һеҙ кем? Әй, тим, һеҙ кемдәр булаһығыҙ?

Эрида. Күрмәйһеңме ни? Ир менән ҡатын!

Әҙәмшаһ. Уныһын күрәбеҙ ҙә... Ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ һеҙ минең биләмәгә? Етмәһә, үҙ өйөгөҙҙә шикелле рәхәтләнеп талашаһығыҙ. Ниңә талашаһығыҙ?

Гермес. Әүәл беҙҙән татыу, беҙҙән бәхетле кеше юҡ ине.

Эрида. Иркәләшеп, һөйөшөп туя алмай, сөкөрләшеп кенә йәшәй инек.

Гермес. Бер-беребеҙҙең бер ғәйебен, бер хатаһын, бер яманлығын күрмәй инек, белмәй инек, ишетмәй инек.

Эрида. Хәҙер бынау нишанаға әйләнде! Фу, хәшәрәт!

Гермес. Туҡта, тим, албаҫты!

Әҙәмшаһ. Ниндәй зәхмәт ҡағылды һуң һеҙгә?

Эрида. Ҡағылды ул, ҡағылды! Бөтәһе лә зил-зәбәр килде, бөттө, дөмөктө! *(Илай.)*

Кешеләр.

— О бисаралар!

— О бәхетһеҙҙәр!

Әҙәмшаһ. Бәйнә-бәйнә һөйләп бирегеҙ. Бәлки, берәй төрлө ярҙам итә алырбыҙ.

Эрида. Эш уҙған инде. Хәҙер беҙгә ярҙам итеү берәүҙең дә ҡулынан килмәй, хатта Зевстың да...

Кешеләр араһында борсолоу башлана.

Гермес. Һеҙгә ғибрәт өсөн һөйләп үтәйем шулай ҙа... Әүәл заман беҙҙең биләмәләге бөтә кешеләр, бына һеҙҙең шикелле, татыу, имен, тыныс йәшәй ине. Быныһын әйткәйнем, буғай, инде.

Кешеләр.

— Уныһын әйттең.

— Әйттең.

— Ары ни булды?

Гермес. Прометей тигән бер аҙғын, мөртәт алла, күктән ут килтереп, беҙҙең һәммәбеҙҙе яҡтыртты. Баҡһаҡ, барыбыҙ ҙа йәмһеҙ, ғәрип-ғөрәбә булып сыҡтыҡ. Күҙ асып йомғансы бер-беребеҙҙән һыуынып, биҙеп киттек. *(Эридаға.)* Һи-и, шөкәтһеҙ, пәрей алмаштырған бисә!

Эрида. Кит! Уйнаштан тыуған нәмәкәй!

Әҙәмшаһ. Беҙ ҙә, бәлки, ғәриптәрбеҙҙер, әммә улай биҙешкәнебеҙ юҡ, Зевсҡа шөкөр.

Гермес. Прометей уты ҡағылмағас, ғәриплек күренмәй ул. Элек минең бер битем ҡояш, бер битем ай ине, хәҙер бына бер яңағым аҡ таш, икенсеһе ҡара ташҡа әйләнде.

Эрида. И-и, ике йөҙлө мәлғүн! Ҡылый иблис!.. *(Әҙәмшаһҡа.)* Тыштан яҡтыртыуы уның бер хәл әле, Прометей уты бәндәләрҙе үтәнән-үтә яҡтырта. Эс-бауырың, эсәктәрең, эсәктәрең эсендәге бөтә мөлкәттәрең күренеп тора.

Кешеләр.

— Зевс, үҙең һаҡла!

— Шул бәләнән һаҡла беҙҙе!

Эрида. Был ғына ла түгел. Бер-берендең нимә уйлағанын, нимә ниәтләгәнен, ниндәй мәкер, ниндәй хәйлә ҡорғанын күреп тораһың. *(Гермесҡа.)* О оятһыҙ, эсе тулы этлек, мутлыҡ бынау ҡәбәхәттең. Уйнашсы! Уйыңда тағы бүтән бисәме? Боҙоҡ! Үтәнән-үтә күренеп тора. Шаҡшы! *(Кешеләргә.)* Бөтә ҡылғандарың, ҡыла-

саҡтарың донъяға ана шулай фаш булып тора. Бына ниндәй яфаларға тарыныҡ беҙ!

Кешеләр.

— Ошо бәләләрҙән һаҡла, хоҙа!

— Язалама! Зевс, мәңге табынырбыҙ һиңә!

Әҙәмшаһ. Бәлки, ундай ҡаза беҙҙе ситләп үтер.

Гермес. Юҡ! Прометей хәҙер бында килә.

Кешеләр.

— Бында килә?

— Мәхшәр ҡуба, былай булғас! Ниҙәр генә ҡылмаҡ кәрәк хәҙер?!

Әҙәмшаһ. Бәлки, берәй сара табып булыр!?

Кешеләр.

— Сара тап, Әҙәмшаһ!

— Зинһар, таба күр!

— Ҡурсала беҙҙе!

Гермес. Эйе, бер сара бар. Тик беҙ аңһыҙ булдыҡ, ахмаҡ булдыҡ, уны ҡулланманыҡ.

Әҙәмшаһ. Өйрәт беҙҙе. Мәңге хеҙмәт итербеҙ.

Гермес. Прометейҙың Агазия исемле кәләше бар.

Әҙәмшаһ. Беләбеҙ. Беҙҙең ҡан-ҡәрҙәшебеҙ ул. Тик төҫө, күңеле менән беҙгә тартманы. Ят булды.

Кешеләр.

— Беҙҙе сихырлап, йәнебеҙҙе әсир итте ул.

— Беҙ унан ҡурҡабыҙ. Уның аллаһы бүтән.

Әҙәмшаһ. Шаулашмағыҙ! Кәңәш тыңлайыҡ.

Гермес. Агазияны Прометей бар йыһандан артыҡ ярата. Әгәр Прометей ут килтергәнсе уның кәләшен урлап өлгөрһәгеҙ, уға әйтер инегеҙ: «Әгәр утты кире алып китмәһәң, Прометей, беҙ Агазияңды үлтерәбеҙ!» — тиер инегеҙ. Агазияға табына ул. Еңел генә ҡорбан итмәҫ уны. Әгәр тиҫкәреләнеп, был шартығыҙға күнмәһә, утын тартып алығыҙ ҙа ергә тапап һүндерегеҙ. Агазияны анау упҡынға атығыҙ! Уты ла, кәләше лә юҡ булһын.

Әҙәмшаһ *(икеләнеп)*. Ул алла бит. Үҙе бер һелтәүҙә беҙҙең бөтәбеҙҙе ҡырып ташлаһа һуң?

Гермес. Ул — даһи алла. Ҡара көс ҡуллана, яза бирә белмәй. Бөтә кәрһеҙлеге, көсһөҙлөгө уның шунда...

Эрида. Уты ҡамыш эсендә булыр. Беҙ уныһын аҙаҡ ҡына белдек, башта аңра инек, кәңәш биреүсе булманы.

Әҙәмшаһ. Оло рәхмәт һеҙгә, о бисара ир менән ҡатын! Һеҙҙең бәхетһеҙлегегеҙ беҙгә именлек килтерер, күрәһең. Төйәгебеҙгә, түребеҙгә рәхим итегеҙ, булған хөрмәтебеҙҙе күрһәтербеҙ.

Гермес. Саҡырыуығыҙҙы ҡабул итә алмайбыҙ. Беҙ бар ерҙә ыҙғыш-талаш, дошманлыҡ, бәлә, ҡәһәр, бәхетһеҙлек яуып торасаҡ. Беҙгә Прометей уты йоҡҡан. Һеҙгә ҡаза булғыбыҙ килмәй. Бар, китегеҙ. Имен ғүмер һөрөгөҙ!

Кешеләр.

— Ниндәй изге заттар!

— Ҡалай иманлылар...

Кешеләр аҡрын ғына сығып бөтә.

Эрида. Нисегерәк тилерттек әҙәмдәрҙе! Улар ҙа, аллалар кеүек үк, хаҡ һүҙгә ҡарағанда бинахағына тиҙерәк ышаналар икән. Көлөрһөң дә *(кеткелдәп көлә)*, иларһың да *(илай)*. Прометейҙы ҡыҙғанам. Ни тиһәң дә, мин бисә затынан шул. Күңелем йомшаҡ.

Гермес. Эйе, йомшаҡтар шул һинең таш күңелең менән минең тимер йөрәгем...

Ут һүнә.

## МӘК ЯЛАНЫ

Яландың яртыһы яп-яҡты, яртыһына күләгә төшкән. Аяҙ яҡта күренгән мәктәр был юлы ике төҫтә: ҡып-ҡыҙылдар һәм ҡап-ҡаралар. Яҡты яҡтан күләгәгә табан боҫа-боҫа кешеләр уҙа. Улар кемделер эҙәрләйҙәр, күҙәтәләр. Бер аҙҙан яҡты яҡта Агазия күренә.

Агазия.

Ярылды был йыһан ҡап уртаға.
Бер яҡ — яҡты. Бер яҡ — дөм-ҡараңғы.
Бер яғында — һөйөү.
Бер яғында —
Ҡара һағыш — һөйөү күләгәһе.
Ҡайһы яғында һуң һин, Прометей?

Ҡанатыңды нурҙар иркәләйме
Әллә ҡараңғылыҡ талдырамы?
Зарығып, зарығып, зарығып бөттөм инде
Күпме минут һине көтә-көтә,
Һулышымдан ана ҡыҙыл мәктәр
Көйөп ҡараялар. О, Прометей,
Ниндәй ғаләмдәрҙә осаһың һин?
Ҡайт инде, ҡайт, аллам, Ер йөҙөнә.
Һинең менән ошо планетала
Тик бер һулыш алһам, шул да еткән
Миңә — әжәллегә. Шул да еткән.
Ҡайт инде, ҡайт, ирем — минең аллам,
Һөйөүең менән мине бар итеүсем.
Ҡайт инде, ҡайт! Юҡһа ҡараңғылыҡ
Яҡтылыҡты, ана, ҡыҫырыҡлай,
Ҡыҙыл мәктәр ҡара көлгә ҡала,
Миңә ауыр, миңә сикһеҙ ауыр.
Ғаләмдәрҙән шулай ирен көткән
Ерҙә иң беренсе ҡатынмын мин.
Бынан ары миллион йылдар буйы
Минең һеңлеләрем, күккә ҡарап,
Йыһандарҙан ут алырға киткән
Һөйгәндәрен шулай көтәсәктәр,
Уларҙың да һулышынан шунан
Ҡыҙыл мәктәр көйөп бөтәсәктәр.
Эйе, еңел булмаҫ уларға ла.
...Тик ҡайтһындар ғына, беҙ көтөрбөҙ.
Беҙ түҙербеҙ. Тик ҡайтһындар ғына...
Хәбәрҙәре түгел, ә үҙҙәре ҡайтһын.
Беҙ көтөрбөҙ...
*(Ике ҡулын күккә һона.)*

Ошо саҡ әҙәмдәр Агазияны аҡрын ғына уратып ала.

Әҙәмшаһ. Кемде шулай көтәһең, Агазия?

Агазия *(һиҫкәнеп китә)*.

Прометейҙы!
*(Шатланып.)*
Ул бит ут килтерә!

Кешеләр *(геү килеп, олоуға оҡшап)*.

— У-ут? У-ут?
— У-у-ут?! У-у-ут?!

Агазия

*(кешеләр ут көтә, тип уйлай. Күккә ынтыла)*.

Тиҙерәк кил, һине кешеләр көтә.
Ана, кешеләр көтә! Ашыҡ! Ашыҡ!!

Кешеләр *(ҡоттары осоп)*.

— Ут-ут-ут-у-у-ут!!
— Ут-ут-ут-у-у-у-ут!!

Агазия.

Анау төштән зәңгәр күк ҡапҡаһы
Асылыр ҙа, нур йылғаһы булып
Прометейҙың юлы һуҙылып ҡалыр —
Гел бер ерҙән шулай юл яра ул...
*(Кешеләр уны тағы ла тығыҙыраҡ урата.)*
Һеҙ, кешеләр, ҡыуаныстан иҫереп,
Бәхетегеҙгә сумып, онотмағыҙ,
Прометейға рәхмәт уҡый-уҡый
Баш эйергә. Юҡһа аҙаҡ оят булыр...

Әҙәмшаһ *(аяҡ тибә)*.

Етте, хыянатсы! Берәҙәк алла менән
Никах-ниһеҙ зина ҡылыуың аҙ!
Хәҙер инде бөтә әҙәмдәрҙе
Һәләк итәһеңме ут килтертеп?
Һиңә һуң беҙ ниндәй зыян ҡылдыҡ?
*(Йомшарып.)*
Дөрөҫ, һине яратмайбыҙ. Әммә
Беҙ ғәйепле түгел. Сәбәпсеһе
Үҙең булдың — беҙгә төҫ бирмәнең.

Агазия *(аптырап)*.

Ни һөйләйһең, Әҙәм? Изге уттың
Ҡатнашы юҡ беҙҙең ваҡ талашҡа.
Мине түгел, утты яратығыҙ, —
Беләһегеҙме, ул илаһи ут...

Әҙәмшаһ *(бүлдерә)*.

Беләбеҙ шул! Күктән ут килтертеп,
Эсебеҙҙе тышҡа әйләндереп,

Беҙҙең бөтә фекер-фиғелдәрҙең
Күҙәтсеһе булып, күргәнеңде
Үҙ аллаңа ташып торасаҡһың...

Агазия.

И, Әҙәмшаһ, нахаҡ һөйләйһең бит.
Аллаларҙан ҡурҡ!

Әҙәмшаһ.

Ҡурҡамын шул!!

Кешеләр.

— Беҙ ҡурҡабыҙ!
— Ут — һәләкәт!
— Ут ыҙғыш сығара!
— Ут — ҡотҡосо!
— Ут — ошаҡсы!
— Ут — оятһыҙ!

Агазия.

Күктән ергә килер изге утҡа,
Ялған һөйләп, яла яғаһығыҙ!
Йә Илаһи, ниндәй вәсүәсә был?

Әҙәмшаһ *(онотолоп)*.

Илаһиҙар күктә. Ерҙә — беҙ баш!

Кешеләр.

— Тәүбә, тиң, Әҙәмшаһ.
— Тәүбә, тәүбә!

Әҙәмшаһ.

Тәүбә, тәүбә!
Ә шулай ҙа бында, ерҙә — мин баш...
Ишетәһегеҙме, мин баш! Һеҙ — аяҡтар!
*(Аяҡ тибә.)*

Агазия *(бөтөнләй хафаға төшөп)*.

Һеҙҙе еңер һис бер ҡоралым юҡ.
Һөйөүем бар. Һөйөү ҡоралмы ни?
Ҡорал түгел. Һөйөү — ҡоралһыҙлыҡ...
...Күҙегеҙ күргәс, үҙегеҙ таң ҡалып,
Хайран булып, рәхәт сигерһегеҙ.
Көтөгөҙсө, сабыр итегеҙсе!

Бына-бына зәңгәр ҡапҡа асылыр,
Ярылған был йыһан йәнә бөтөн булыр,
Көйгән мәктәр тағы ҡыҙарырҙар.
Әллә нисә ғаләмдәрҙе үтеп,
Минең аллам килә, сыраҡ тотоп,
Үҙем осам, осам ҡаршыһына,
Ҡанаттарым сыға! Пар ҡанатым...
*(Талпынып ҡуя, ынтыла.)*

Әҙәмшаһ.

Осмайыраҡ тор әле. *(Тота.)*

Агазия.

Ниңә осмаҫҡа?

Әҙәмшаһ.

Ҡолап төшөүең бар.

Агазия.

Ҡоламам.
Ҡосағына алыр аллам мине.

Әҙәмшаһ.

Әле һине бүтән ҡуйын көтә.
Зиндан ҡуйыны. Еүеш, һалҡын ҡуйын.

Агазия.

Ни ғәйебем өсөн ундай яза?

Әҙәмшаһ *(күккә күрһәтә)*.

Ғәйепле — ул. Яза һиңә яуа.
Әгәр уттың ергә бер саткыһын
Төшөрә ҡалһа һинең Прометейың,
Тәнең менән йәнең хушлашасаҡ.
Йә ут һиңә, йәки тормош, һайла!

Агазия.

Ут һәм тормош — бергә.

Әҙәмшаһ.

Бер юлы — юҡ!

Агазия.

Ут һәм тормош!
Миңә бергә кәрәк.

Әҙәмшаһ.

Хәйер, уныһын аллаң үҙе һайлар.
Һине нисек яратҡанын шул саҡ
Күрербеҙ...
*(Ҡул һелтәй.)*
Үтә оҙаҡ бушты лығырлайбыҙ.
Агазия! Мәк яланың менән
Бәхилләш. Йә башҡа килә алмаҫһың.
Яратаһың бит һин был яланды. *(Кешеләргә.)*
Нимә көтәһегеҙ? Йәгеҙ! Йәһәт!!

Кешеләр, ҡулға-ҡул тотоношоп, тере ситлек яһайҙар. Агазия шул ситлек эсендә ҡала. Уны аҡрын ғына алып китәләр. Агазия ҡарышмай, атлай, туҡтала.

Агазия.

И, кешеләр, һаман йоҡлайһығыҙ.
Был бит һеҙҙең яман төштәрегеҙ,
Һаташыуҙарығыҙ. И, кешеләр!
Ҡасан ғына уянырҙар икән?

Китәләр. Әҙәмшаһ арттараҡ ҡала.

Әҙәмшаһ.

Ниңә уятырға? Йоҡлаһындар.
Йәшәһендәр, йоҡолағы һымаҡ...

Ут һүнә.

Китә. Оҙаҡ пауза.

## УПҠЫН ЯНЫ

Тынлыҡ. Алыҫтан тантаналы моң килә. Ул ҡапыл фажиғәлегә әйләнеп китә. Прометей инә. Ҡулында — ҡамыш. Ул башта шат.

Прометей.

Минән бәхетлерәк алла юҡтыр.
Ергә
Ут килтерҙем. Һөйгәнемә
Мәңгелек йән һәм мәңгелек һулыш

Алып килдем. Күпме ғаләм үтеп,
Мин янына ҡайттым. Агазия,
Ҡосағыңа ҡайттым.
Мин ашыҡтым,
Берҙе бергә ҡушып, ҡуш булырға...
Шулай остом. Остом. Һис ҡасан да
Был тиклем үк осҡаным юҡ ине,
Тын йыһанда ҡанат елпеүемдән,
Йылғалағы һары томбойоҡтай,
Тирбәлешеп ҡалды планеталар.
Хатта бер саҡ ҡапыл ҡаушау алды.
Ярһыуымдан, шашҡын шатлығымдан
Үҙем дөрләп янып китәм бит тип.
Агазия! Ҡайттым. Был донъяла
Минән бәхетлерәк алла юҡтыр:
Ут килтерҙем ергә, ҡот килтерҙем.
Утты утҡа ҡушҡас, инде әҙәм
Балсыҡҡа йән өрөр, тимергә — көс,
Ағасҡа моң, таштарға тел бирер.
Кешеләр! Мин килдем. Һеҙ әҙерме?

Шомло геүләү ишетелә: «У-у-у-т», «У-у-у-ут». Прометей, ғәжәпләнеп, яҡ-яғына ҡарай. Агазияны эҙләй. Сығып китә, кире инә.

Көтәм, тине, Мәктәр яланында...
Ҡыҙырып сыҡтым. Эҙе генә ҡалған.
Бында ла юҡ. *(Эҙләй.)*
Ерҙең иң һөйкөмлө,
Иң-иң гүзәл заты, ҡайҙаһың һин?

Ҡараңғынан сығып, Прометей алдына бөкрө бер нишана килеп баҫа.

Нишана.

Ерҙең аҫыл заты бына мин ул.
Мине саҡырҙыңмы?

Прометей.

Һин аҫыл зат?

Нишана.

Эйе, зифа, сибәр...
Хатта бер һылыу ҡыҙ миңә ғашиҡ.

Прометей.

Һуҡырҙыр ул.

Нишана.

Күҙле. Ләкин күрмәй.
Кешеләр күрмәй беҙҙең ғәриплекте.
Һин күрәһең. Ниңә күрәһең һин?
Ҡулыңда ут, шуға күрәһең һин...
*(Ҡапыл Прометейҙың аяғына йығыла.)*
Ут кәрәкмәй беҙгә! Юҡ, кәрәкмәй!
Ҡуй, фаш итмә беҙҙе!
Мәсхәрәләр ҡылма!
Илт утыңды кире! Кире! Кире!

Аяҡ үрә баҫа. Прометейға яҡын уҡ килә. Прометей сигенә.

Әгәр тыңламаһаң, үкенерһең.
Нишаналар аяу белмәй улар...

Прометей ҡаршыһына тағы ике ғәрип килеп баҫа.

Нишаналар *(бергә)*.

Кире алып кит утты! Юғиһә
Үкенерһең! Үкенерһең! Үкенерһең!..

Ҡараңғынан атылып сығып, бер ир менән ҡатын Прометей алдына теҙләнә.

Ҡатын.

Харап итмә беҙҙе, о, Прометей!
Беҙ йәмһеҙбеҙ, ғәҙәтебеҙ насар,
Эсебеҙҙә иләҫ уй, мәкерлек,
Томаналыҡ ята. Әммә, аңла,
Беҙ шиктәрҙән азат. Беҙ һуҡырҙар,
Күҙебеҙ күрә, күңелебеҙ күрмәй.
Һуҡыр көйө ҡалдыр күңелебеҙҙе!

Ир.

Бер-беребеҙҙе үлеп яратабыҙ.
Һуҡыр һөйөү, һуҡыр иман менән,
Һуҡыр ышаныуҙар менән яратабыҙ.
Күңел күҙебеҙҙе асма, тәңре!

Ҡатын.

Эҙҙәреңде үбеп, инәләмен:
Һәләк итмә беҙҙең мөхәббәтте!

Ир *(илау ҡатыш инәлеп)*.

Утыңды һин бынан алып кит тә
Бүтән ерҙә бүтәндәргә өләш.
Кемгәлер ул, бәлки, кәрәктер ҙә...

Ҡатын.

Мәрхәмәтле алла, изге алла!
Айыра күрмә мине хәләлемдән!

Бер нисә пар, ҡараңғынан сығып, шулай уҡ Прометей алдына теҙләнә. Прометей, ҡамышын күкрәгенә ҡыҫып, бөтөнләй ҡатып ҡала.

Ҡатындар *(бергә)*.

Айыра күрмә мине хәләлемдән!!!

Ирҙәр *(бергә баш эйәләр)*.

Зинһар, тәңре, зинһар! Зинһар!
Зинһар!
Айыра күрмә беҙҙе! Һиңә генә
Мәңге тоғро ҡолдар булырбыҙ...

Ҡараңғынан аҡрын ғына зифа йәш ҡыҙ сыға.

Ҡыҙ.

Мин матурмын, күрәһеңдер, алла.

Прометей уға ҡарай, ҡыҙҙың йөҙөнә яҡтылыҡ төшә.

Прометей.

Күрәм.

Ҡыҙ.

Сихри утыңды ал минән.
Һин күргәнде әгәр кешеләр күрһә,
Сибәрлегем өсөн ғүмер баҡый
Үс алырҙар минән. Утыңды ал!
Минең сибәр апам — ояһыҙ ҡош —
Ниндәй бәләләргә тарыны ана.
Бына төпһөҙ упҡын. Сырағыңды
Ырғыт шунда, ырғыт, и, илаһым!
Алла булһаң, ҡыҙған! Шәфҡәтле бул,
Агазия көнөнә ҡалдырмасы!

*(Прометей тертләп китә.)*

Прометей *(саҡыра)*.

Агазия! Ҡайҙа Агазия?
*(Яуап юҡ. Тынлыҡ.)*
Хатта шаңдау ҙа юҡ. Агазия-м!
*(Бәргеләнә.)*
Һин иҫәнме? Һин тереме? Агазия!

Ҡараңғынан Әҙәмшаһ сыға. Кешеләргә ҡул һелтәй, улар ситкәрәк һибеләә.

Әҙәмшаһ.

Әлегә иҫән. Һин теләһәң, хатта тере ҡалыр.

Прометей.

Агазия!

Әҙәмшаһ.

Уның тураһында аҙаҡ.
Тәүҙә әле мин — Әҙәмшаһ үҙем
Һинән допрос алам, бөйөк алла.
Ҡыҙыл таңдан ҡара төнгә саҡлы
Һуҙылып киткән ерҙең хужаһы — мин.
Ниңә килдең беҙгә?

Прометей.

Ут килтерҙем.

Әҙәмшаһ.

Кем һораны уны һинән? Минме?

Аяғында аунап ятҡан бынау
Ғәриптәрме?

Тауыштар *(ҡараңғынан)*.

— Һораманыҡ!
— Беҙгә ут кәрәкмәй!
— Ҡуй, ҡуй, ҡуй...
— У-у-ут, у-у-ут...

*(Гөүләү ишетелә.)*

Әҙәмшаһ.

Кем һораны?

Прометей.

Мин алламын, Әҙәм, мин даһимын —
Ҡөҙрәтем киң, ләкин ҡәһәрем юҡ —
Кешеләргә нимә кәрәклекте
Алдан күреп, алдан төҫмөрләйем.
Ер ҡарынында бөрөләнгән оҫҡон
Илаһи ут менән ҡауышыу көтә.
Ике уттан тыуған ошо балҡыш
Кешеләргә кәрәк, Ергә кәрәк.

Әҙәмшаһ.

Һорағанды ғына бирһен алла —
Артығын да түгел, кәм дә түгел.

Прометей.

Мин — Прометей, Әҙәм, мин даһимын:
Һорағанды ғына көтөп ятһам,
Алланығым ҡорор, даһилығым
Эриданың киҫкән тырнағына
Тормаҫ.

Әҙәмшаһ.

Тормаһа һуң. Анау бахырҙарға
*(ерҙә аунаған кешеләргә күрһәтә)*
Һинең даһилығың бик хәжәт, ти...
Даһи түгел, ғәскәр кәрәк миңә,
Ут кәрәкмәй миңә, эңер кәрәк.
Килтергәнһең икән, алып та кит
*(ҡамышҡа күрһәтә)*.

Прометей.

Быныһы мөмкин түгел. Кешеләргә
Тәғәйенләнгән ул.

Әҙәмшаһ
*(киҫкен)*.

Мөмкин!

Прометей.

Мөмкин түгел! *(Әрнеп.)*
Ниндәй фажиғә был?
Мин ашҡынып, ярһып осоп килдем.
Шашып килдем, балҡып, янып килдем.
Мин бит һеҙгә бәхет алып килдем...

Әҙәмшаһ *(тыныс)*.

Ә беҙ һинән бәхет һораманыҡ...

Прометей *(һөрәнләп)*.

Ерҙең сабыйҙары, уянығыҙ!.. *(Ҡапыл тынып.)*
...Инде моратыма еттем тигәс,
Ниндәй яман хәлгә тап булдым мин?!
Тик барыбер яҙмыштан юҡ уҙмыш —
Мин беләм бит һеҙгә ни кәрәген...

Әҙәмшаһ.

Мин дә беләм беҙгә ни кәрәкте —
Һин утыңды алып китәсәкһең.

Прометей *(ҡәтғи)*.

Юҡ! Ҡамышты һындырам да хәҙер
Азат итәм утты. Бына шулай.
*(Ҡамышты һындырмаҡсы итә.)*

Әҙәмшаһ
*(һуҡ бармағын күккә сөйә)*.

Агазия?!

*(Оҙаҡ тынлыҡ.)*

Прометей *(уҡтала)*.

Ҡайҙа Агазия? Агазия!

Әҙәмшаһ.

Агазия бында.

*(Ситкә күрһәтә.)*

Ул һатыла.

Прометей *(гәжәпләнеп)*.

Нисек... һатыла?

Әҙәмшаһ.

Ут хаҡына...

Прометей *(аңламай)*.

Нисек... Ут хаҡына?

Әҙәмшаһ.

Һиңә лә бит бәхет кәрәк, алла,
Бәлки, һиңә ныҒыраҡ кәрәктер ул
Беҙгә ҡарағанда... Хәҙер һайла:
Бынау упҡынға һин йә утыңды
Ырғытаһың, йәки күҙ алдында
Агазияңды беҙ ырғытабыҙ.
Икеләнмә, алла, ташла утты!

Прометей алдына килгән нишаналар, ирҙәр, ҡатындар уны упҡынға табан ҡыҫырыҡлай башлай.

Тауыштар.

— Ташла утты!
— Һәләк итмә Агазияны!
— Ташла!
— Харап итмә беҙҙе!

Прометей артҡа сигенә. Ҡамыш тотҡан ҡулын юғары күтәрә. Кешеләр, һикереп, ҡамышты тартып алмаҡсы итә.

Тауыштар.

— Ташла утты, алла!
— Ташла!

Әҙәмшаһ.

Әй, Агазияны бында килтерегеҙ!

Кешеләрҙән яһалған тере ситлек эсендә Агазия килә. Ул әле алыҫ.

Тауыштар.

— Агазия килә!
— Ҡәберенә үҙе атлап килә!
— Ниндәй ғорур баҫа.

Әҙәмшаһ.

Һуңғы тапҡыр әйтәм: һайла, Прометей!

Кешеләр яңынан Прометейҙы һырып ала, үҙәк өҙгөс тауыштар.

— У-ут-ут!
— Ут-у-ут-ут!..
— Ташла утты!

Әҙәмшаһ.

Үҙ бәхетеңде үҙең үлтерәһең, Прометей!

Тауыштар.

— Ташла утты!
— Ташла!
— Ташла!

Агазия яҡынлаша.

Прометей.

Агазия!

Агазия *(ситтән)*.

Прометей! Утты ташлама!
Ташлама утты, Прометей! Ташлама!
Ер осҡоно миндә! Мин тоҡанам.
Мин тоҡандым!
*(Агазия гөлт итеп тоҡанып китә.)*
Бәхил бул, һөйөклөм! Бәхил бул!!

Прометей.

Илаһи ут миндә! Мин тоҡанам.
*(Ҡамышты һындыра, үҙе дөрләп янып китә.)*
Мин тоҡандым! Агазия! Мин янында барам,
Ҡауышырға — ишетәһеңме?

Агазия.

Ишетәм, йәнем!

Прометей дөрләп яна-яна Агазияға яҡынлаша. Ҡушылалар. Ике усаҡ бер була.

Прометей.

Бына ҡасан килеп бер булдыҡ беҙ.

Агазия.

Һуңғы тапҡыр ҡыҫып ҡосаҡла мине.
Мәңгегә етерлек итеп ҡосаҡла.
Ана шулай! Ана шулай ҡосаҡла!
Ирем минең — аллам минең!..

Улар дөрләп яна. Тынлыҡ. Бөтә донъя ялт итеп яҡтырып китә. Кешеләр башта аптырап ҡалалар, улар усаҡ тирәһенә йыйылалар. Йөҙҙәре шундай матур, нурлы, эстәренән шатлыҡ эркелә. Әҙәмшаһ һәм Агазияны килтергән тере ситлек юҡ була.

Беренсе кеше (*иҫенә килеп*).

Нишаналар ҡайҙа?

Икенсе кеше.

Ғәриптәр ҡайҙа?

Өсөнсө кеше.

Һуҡырҙар ҡайҙа?

Дүртенсе кеше.

Йәмһеҙҙәр ҡайҙа?

Икенсе кеше.

Иҫәрҙәр ҡайҙа?

Бишенсе кеше.

Бында бөтәһе лә зифа, сибәр,
Һөйкөмлөләр!

Беренсе кеше.

Йөҙҙәренән, күҙҙәренән нурҙар һибелеп тора!
Һоҡланып туя алмаҫлыҡ заттар кемдәр һуң был?

Баяғы нишана (*ул һылыу, матур*).

Был — беҙ бит!
Был — беҙ үҙебеҙ бит!!

Баяғы ҡатын.

Ниндәй мөғжизәләр килде!
Беҙ үҙебеҙ, илаһиҙар кеүек,
Матурҙарбыҙ, мөһабәтбеҙ икән!

Тауыштар.

— Был — беҙ! Беҙ был!
— Беҙ — кешеләр!
— Беҙ — үҙебеҙ!
— Донъя ниндәй яҡты, күҙ сағыла!
— О, ер ниндәй гүзәл — илағы килә!

Талғын музыка уйнай. Кешеләр башта аҡрын ғына талпына, унан усаҡ тирәләй бейергә керешәләр. Ҡыҙа баралар. Сәпәкәй итәләр. Тантана байтаҡ дауам итә, усаҡ яна. Кешеләр усаҡҡа иғтибар ҙа итмәйҙәр. Усаҡ һүнә. Кешеләр шып туҡтай. Усаҡ һүнә, балҡыш ҡала. Агазия юҡ. Прометей Агазияны ҡосаҡлаған ҡиәфәттә баҫып тора. Унан аҡрын ғына сүгәләй. Ике усына көл ала.

Прометей.

Көлөң генә ҡалды, һөйгән йәрем.
Эҫе көлөң. Бына ул да һыуына.
Һин бер туҙан инең — ғашиҡ булдым.
Шытып бөрөләндең — ғашиҡ булдым.
Йөрәгең типте бер саҡ — ғашиҡ булдым.
Янып көлгә ҡалдың. Хәҙер инде
Ап-аҡ көлөңә мин йәнә ғашиҡ.
Киттең был донъянан бик аҙ йәшәп,
Ә мәңгелек һөйөү биреп киттең...
*(Ҡуш усына алған көлдө ирендәренә килтерә.)*
...Юлым тамам. Ҡыласаҡты ҡылдым.
Ваз кисәмен хәҙер мин күктәрҙән.
Яурындағы ике ҡанатымды
Йолҡоп алам, үлән ҡыяғындай.
Агазия һулыш алған иддә,
Уның көлө аралашҡан ерҙә
Ҡаласаҡмын...
*(Кешеләргә әйләнә.)*
Әгәр һеҙ, кешеләр, ҡабул итһәгеҙ...
*(Кешеләр баш эйә.)*

Беренсе кеше.

Беҙ, Прометей, үтә ғәйеплебеҙ
Һинең алда. Ниҙәр ҡылып ҡына

Аҡланайыҡ икән? Әйт, ни ҡылып?

Прометей.

Үҙегеҙҙе кеше ҡыла алһағыҙ —
Бар аҡланыу шунда. Мин ризамын.

Өс тарафтан Власть, Көс, Гефест сыға. Гефест ҡулында — сүкеш һәм бығауҙар. Улар һүҙһеҙ байтаҡ баҫып тора.

Власть.

Зевс әмере һиңә билдәлелер.
Беҙ килдек.

Прометей
*(аяҡ үрә баҫа)*.

Билдәле. Мин әҙер.
Эйе, ҡаты ҡуллы Власть,
Һинән ҡотолоп булмаҫ.
Тупаҫ Көс, әлегә һине лә еңер әмәл юҡ...
*(Гефестҡа килә.)*
Бахыр Гефест, алтын ҡуллы бөйөк оҫта
Гефест, ниндәй һөнәрҙәргә тарының һин!..
*(Уның ҡулын тота.)*
Хазиналар ҡойор ҡулдарың бар...
Мин әҙермен.

Беренсе кеше.

Ҡайҙа илтәһегеҙ Прометейҙы?

Көс.

Бик бейеккә — Ҡаф тауының ташлы
түбәһенә!
Күпкә түгел,
Ни бары утыҙ мең йылға...

Прометей
*(сыға башлай. Уның артынан Власть, Көс, Гефест эйәрә)*.

Мин ҡайтырмын һеҙгә, кешеләр.
Утыҙ мең йыл үтеп китер, йыһан имен,
Йыһан бөтөн булһа...
Мин ҡайтырмын һеҙгә, кешеләр.

*1975*

# Аңлатмалар

## МОСТАЙ КӘРИМ: ДРАМАТУРГИЯ. ӨС ДӘҮЕР

### 1

...Мостай Кәрим һуғыштан тыуған ауылы Келәшкә әйләнеп ҡайта. Уның ҡулындағы сумаҙанында сит ил ҡағыҙынан эшләнгән ике өр-яңы дәфтәр ятҡан була. Яҙыласаҡ шиғырҙарым өсөн булыр, тип уйлай шағир. Уны туберкулез (күкрәгенә ҡаҙалған мина ярсығы һөҙөмтәһе) сире яфалай башлай. Ваҡыт көтмәй, ашыҡтыра... Иҫтәлек булып ҡалырлыҡ бер ҙур ғына әйбер яҙырға кәрәк. Мәҫәлән, әллә ҡасан уйланылған пьеса. Әйткәндәй, уның драматургияла ап-аруҡ тәжрибәһе бар. Һуғышҡа тиклем үк ул, 20 йәшлек йәш шағир, кескәйҙәр өсөн «Әтәстең башынан үткәндәре» тигән пьеса яҙа. Ул ҡурсаҡ театрында ҡуйылырға ла өлгөрә.

Яҙыусының сираттағы сәхнә әҫәре «Туй дауам итә» тип исемләнгән. Ул Башҡортостан Яҙыусылар союзының драматургия секцияһында ҡарала һәм юғары баһалана. Күп йылдар үткәс, автор был турала түбәндәгесә иҫкә ала: «Союздан ҡайтышлай, мин бик бошоноп: «Моғайын, ошонан да уҙҙырып, һәйбәт нәмә яҙыуы мөмкин булмаҫ... — тип уйланым».

Йәш драматург ҡулъяҙмаһын Башҡорт драма театрына алып барып тапшырырға баҙнатсылыҡ итмәй. Ул тыуған ауылына юл тота.

«1947 йыл ине, — тип яҙа Мостай Кәрим үҙенең «Көндәлектәр»ендә. — Ул саҡтарҙа театрҙа репертуар ҡытлығы булғандыр, күрәһең. Бер нисә көн үтеүгә Келәшкә ул саҡтағы баш режиссер Хажи Бохарский

менән директор Әбдрәхим Абдрахманов килеп төштө. Ҡулъяҙманы ҡысҡырып уҡыттылар ҙа үҙҙәре менән алып киттеләр. Көҙгә уны Рифғәт Фәйзи сәхнәгә ҡуйҙы».

Пьеса ҙур уңыштарға өлгәшә. Автор унда хәҙерге заман тураһында, ғына түгел, үҙе хаҡында, уй-хыялдары тураһында яҙа. Был турала тәнҡитсе Ғайса Хөсәйенов шулай тип билдәләне: «Һуғыштан алда ғына Мостай исемле егет менән Рауза исемле ҡыҙҙың никахтары булғайны. Унда ҡәләмдәш дуҫы шағир Мәлих Харис та ҡатнашҡандыр, бәлки. Шул уңай аҙаҡ, һуғыш башланып, фронтҡа китеү менән өҙөлөп ҡалған шатлыҡтары, яу юлдары «Туй дауам итә» пьесаһының нигеҙенә ятҡан кеүек. Ул Мәлих Харистың (1915—1944) яҡты иҫтәлеген үҙенсә мәңгеләштереү билдәһе булып та ҡабул ителә... Йәнә шуныһы характерлы: пьесаға авторҙың үҙе күргән-кисергән материалдарҙы алғанлығы һәр бер персонаждың тиерлек прототибы булыуында ла күренә. Әйткәндәй, Заһир Кинйәкәев — йәш шағир Сабир Кинйәкәй, Сәлих — Сәләх Кулибай. Бүтән персонаждарҙың да автор үҙе күргән-белгән реаль шәхестәргә бәйләнеше бар».

Иң мөһиме, тәүге һәм һуңғы булыуы мөмкин булған был пьеса яҙыусының башҡа пьесаларына киң юл аса. Уларҙың теҙмәһе ярты быуатҡа тиерлек һуҙыла.

## 2

1950 йылда Мостай Кәрим драматург һәм журналист Мөхәммәт Хәйҙәров саҡырыуы буйынса Башҡортостандың Учалы районы Өргөн ауылына юл тота.

Хәйҙәровтың төп маҡсаты — ошоға саҡлы ауыр операция кисергән шағирҙың сәләмәтлеген хәстәрләү. Ләкин яҙыусы башҡа уй-пландар менән эш итә. «1950 йылда, — тип хәтерләй ул, — бик дәррәү рәүештә колхоздарҙы берләштереү башланды. Ошо темаға пьеса яҙыу ниәте менән мин Учалы яҡтарында «тормош өйрәнергә» керештем. Һәр ерҙә буласаҡ персонаждарымды төҫмөрләргә тырышып йөрөнөм. Икәүһен, йәғни Гөлбәдуан ҡарсыҡ менән Мырҙахан Шәүкәтовты тиҙ таптым. Беренсеһе — үҙебеҙ торған йорттоң хужаби-

кәһе Көбрә инәй, икенсеһе — Кирәбе яғында урманлы тау араһына һыйынған Үкәҙе колхозының рәйесе Тажетдин ағай (Мырҙахан Шәүкәтовтың прообразы)...» Башҡа персонаждарҙы Хәйҙәров менән Кәрим ауылдарҙа, журналист булараҡ, «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенә «Урал аръяғынан хаттар» ебәреп торған ваҡыттарҙа табып алыуға өлгәшәләр.

Өфөгә әйләнеп ҡайтҡас, Мостай Кәримең һыҙғанып эшкә сума. Һәм уның көҙ аҙағына яңы пьесаһы әҙер була. Әммә әҫәргә исем һайлау ауырға тура килә. Иң тәүҙә ул «Ыҙанда осрашыу», «Мырҙахан Шәүкәтов», һуңынан «Яңғыҙ ҡайын» тип исемләнә.

(Әйткәндәй, ошондай эҙләнеүҙәр драматург өсөн һирәк күренеш булып иҫәпләнмәй. Мәҫәлән, «Ай тотолған төндә» ҡулъяҙмала «Ҡанун ҡолдары», «Айгөл иле» — «Сит кешеләр», «Күгебеҙ алтын булыр», «Айгөл дәфтәре» һәм ахырҙа «Айгөл иле» тип алына.)

Авторға матбуғат баҫмаларында сәхнә әҫәрҙәренең аталышы өсөн ҡайһы ваҡыттарҙа көрәшергә, хатта ул алыштарҙа еңелергә тура килә. «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһын Мәскәүҙә рус телендә нәшер ителгән «Год тридцать четвертый» альманахында баҫырға әҙерләгәндә, уның атамаһы ҡыҫырыҡлауҙарға дусар була. Баш мөхәррир тарафынан шағирға яҙылған хат шуны раҫлай. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе: «Хочу напомнить Вам, что Вы согласились с моими доводами и обещали подумать над другим названием, а в том случае, если Вам это не удастся, — предоставить нам — редакции — право назвать Вашу пьесу по своему усмотрению...

Напоминаю: я против названия «Одинокая береза» не только потому, что ассоциация вызывает в памяти название популярного романа, что для Вас весьма невыгодно. Не следует придерживаться «завлекательного» названия, если оно идет вразрез с идейным содержанием пьесы... Центральная фигура в ней — Шавкатов — образ отнюдь не положительный. Назвав свою пьесу по имени возглавляемого им плохого (?) колхоза, Вы тем самым лишний раз акцентируете на недостатках своего произведения (?). Потому я прошу Вас либо срочно дать новое название, либо согласиться на то,

чтобы пьеса была названа «В долине Кыйдаша». 21 сентября 1951 года».

Мостай Кәрим ошо йылдарҙа «Литературная газета»ла эшләгән фронтташ дуҫы Николай Атаровҡа хат аша мөрәжәғәт итә: «До меня дошли слухи, что переменили название. Менять не стоит. Почему боятся «Одинокой березы» (есть же «Алитет уходит в горы», «Одиночество», «Вечерний звон»). Подсказал бы ты им».

Ғөмүмән, альманахта пьеса «Шәүкәтовтың дуҫтары» исеме менән баҫылып сыға. Совет кешеһенең яңғыҙ булыуы мөмкинме һуң? Ул мотлаҡ төҙәлергә тейеш — иптәштәре ярҙам итер, пьесаның ошо рәүешле уңышлы тамамланыуы исеменән үк күренеп торорға тейеш.

1955 йылда Мәскәүҙә уҙғарылған Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы сәхнәгә ҡуйыла.

Баш ҡала тәнҡитселәре әҫәрҙең ыңғай яҡтарын билдәләү менән берлектә унын кәмселектәрен асып һала. Мәҫәлән, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Борис Бабочкин: «Автор «Одинокой березы», безусловно, талантлив. Образы пьесы намечены интересно, поэтично. Но Мустаю Кариму не удалось связать в драматический узел взаимоотношения героев», — тип яҙа. Шулай уҡ РСФСР-ҙың халыҡ артисы Сергей Межинский үҙенең уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша: «Тема пьесы не новая, она встречается во многих других драматических произведениях. Но автор насытил образы настоящей внутренней психологической правдой, а потому, несмотря на некую композиционную рыхлость пьеса смотрится с интересом».

Нисек кенә булмаһын, был Мостай Кәрим драматургияһының Башҡортостан сиктәрен үтеп сығыуын аңлата ине.

## 3

Шулай итеп, тәүге ике пьеса, үҙ хеҙмәтен тултырып, ваҡытында сәхнәнән төшһә, өсөнсө пьеса — «Ҡыҙ урлау»ҙың яҙмышы һоҡландырырлыҡ һәм көнләштерерлек. Ул бына ярты быуаттан ашыу сәхнә түрҙәрендә

йәшәүен дауам итә. Илебеҙҙең бик күп сәхнәләрен урап сығып, яңынан үҙебеҙгә әйләнеп ҡайта, һәм һаман да дәрте һәм күңелсәклеге менән тамашасылар күңелен яулай.

Заманында «Ҡыҙ урлау»ҙы, «пьеса геройҙарының эске донъяһы ни бары көнкүреш кимәлендә генә һүрәтләнә. Автор персонаждарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен һәм хис-тойғоларын сағылдырыуҙан бигерәк интрига барышын ентекләберәк һүрәтләй», тип ғәйепләйҙәр.

Ләкин... «Ҡыҙ урлау»ҙан һуң Мостай Кәримдең бер генә пьесаһы ла — алдараҡ та, унан һуң да — башҡорт публикаһында (...башҡорт публикаһында ғына түгел, тип өҫтәйек. — *Төҙ.*) шул тиклем ҙур уңышҡа өлгәшә алманы.

1973 йылда, тәүге тамашанан һуң 15 йыл үткәс, сәнғәт белгесе Һөйөндөк Сәйетов түбәндәгесә белдерә: «С лукавой улыбкой иронизирующего мудреца, с размашистой удалью и озорством Карим написал жанровую — в духе создателя «Кола Брюньона» — картину из народной жизни... Это — быт. Наивно разомкнутый, раскрытый солнцу и всем ветрам быт современного башкирского крестьянина. Это — типы из мудрых сказок и соленых анекдотов, подсмотренных в ликующий миг народного празднества... Как никогда Мустай Карим щедр на игру со словом, на затейливые узоры речи, причем фраза остается выпуклой, лаконичной, простой...»

Ошонан һуң, йәғни 40 йыл уҙғас, Стәрлетамаҡ дәүләт академия драма театрында һәм Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ҡуйылған спектаклдәр быны тағы бер тапҡыр раҫланы.

Мостай Кәримдең тәүге дүрт пьесаһына: «Ваҡиға беҙҙең көндәрҙә бара», — тип ҡуйырға мөмкин. Шуныһы ҡыҙыҡ, йыш ҡына улар шул ваҡыттағы конфликттарға нигеҙләнгән. Әйткәндәй, 1961 йылда сәхнәлә уйналған «Йырланмаған йыр» шундайҙарҙан берәү булып сыға. Ул пьеса иң аңлашылмағаны һәм бар көсөнә уйналмағаны булып ҡала, сөнки унда драматург ҡуйған конфликт бигүк хәүефһеҙ түгел. Партия, партия органдарындағы бығаса йәмғиәт организмы эсендә йәшеренеп ятҡан эрозия был йылдарҙа (1954—1955) өҫкә ҡалҡып сыға башлай. Драматург Дүсмәт Ярлыҡаповты,

йәғни партия авантюрисын, партия ҡала комитетының 2-се секретарын сәхнәгә күтәрә. Иғтибар итәйек: 1-сене түгел, 2-се секретарҙы. Һәр хәлдә, партия тәнҡитләүгә юл ҡуйһа ла, ҡуйылған сиктәрҙән уҙынырға рөхсәт ителмәй ине. Пьесаның еңел яҙылмағаны, әлбиттә, күренеп тора — уны тамамлағас, автор ҡульяҙманың аҙағына: «Ура! 12 сәғәт 58 минут. 29.I.57», — тип теркәп ҡуйған. Тимәк, «Йырланмаған йыр» аҙағынаса хәл ителгән тигән һүҙ. Әлбиттә, яҙыусы был «ура» менән драматургияһының беренсе осороноң аҙағына яҡынлашыуын һиҙмәй тиерлек.

## 4

1963 йылдың октябрь баштарында Мостай Кәрим яҙыусыларҙың Мәскәү янындағы Ижад йортона ашҡына. (Эшкә сумып эшләргә булышлыҡ итеүсе был йәмле, аулаҡ урынға шағир һуңынан утыҙ йыл буйына, һәр ҡыш һайын тиерлек килә. Бында уның бик күп шиғырҙары, драмалары, «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Ярлыҡау», «Ауыл адвокаттары» повестары, мәҡәләләре, иҫтәлектәре ижад ителә.) Ул көҙҙә уға 44 йәш тулған була.

Яҙыусы «Ай тотолған төндә» трагедияһын нәҡ Ижад йортонда тамамлай. Спектаклдең премьераһы 1964 йылдың февралендә Башҡорт академия драма театрында ҡуйыла. Һәм, күп тә үтмәй, ил буйлап сәйәхәт итә (Ҡазан, Мәскәү, Кавказ республикалары һ. б.).

Өфөнән һуң трагедия Хәмзә исемендәге үзбәк академия драма театры сәхнәһендә уйнала. Спектаклде ҡуйған режиссер Шәүрә Мортазина Ташкенттағы премьераның ер тетрәгәндең икенсе көнөнә тура килеүе тураһында хәбәр итә. Тетрәүҙәр тынып бөтмәгән була әле, һәм тамашасы пьесаны ултырғыстарҙан ҡалҡына биреп ҡарай, ләкин берәү ҙә залдан сығып китмәй.

1966 йылда БАДТ тарафынан сәхнәгә ҡуйылған «Ай тотолған төндә» трагедияһы К. С. Станиславский исемендәге РСФСР Дәүләт премияһына лайыҡ була. Мостай Кәрим (автор), Шәүрә Мортазина (режиссер) һәм Зәйтүнә Бикбулатова (Тәнкәбикә ролендә) лауреат исемен яулай.

Пьеса яңынан-яңы театрҙар сәхнәләрендә ҡуйыла: Көнбайышта Литва һәм Латвиянан алып көнсығышта Сахалинға тиклем; Советтар Союзындағы иң көньяҡтағы Мары ҡалаһы театры репетициялар башланыуы тураһында хәбәр итә. Илдең иң төньяғындағы театр — Магадан өлкәһе Иутиль районы, Эгвекинот ҡасабаһы Мәҙәниәт йортоноң драма коллективы артистары авторға хат аша мөрәжәғәт итә: «Мы работаем над Вашей пьесой медленно — очень сложная, но тем интереснее. Уже получили пластинки с записями башкирской музыки — замечательно настраивает. Жаль, что очень мало записей народной музыки, больше современная.

Уже оторвались от стола, вышли на выгородки, и тут новые трудности: какие жесты нужны при молитве, при благословении, как кланяться, как сидеть. Жаль, нет фильмов на башкирские темы или, может, мы просто не видели... К нам пришла уже зима, выпал снег, морозец. Дни становятся все короче и короче, а скоро настанет длинная полярная ночь, самая плодотворная пора нашего драмколлектива...»

«Ай тотолған төндә» трагедияһы Советтар Союзының бик күп телдәренә тәржемә ителә: «а»-нан башлап (мәҫәлән, авар теле) «я»-ға (яҡут теле) тиклем тиергә мөмкин.

Пьеса Яҡутстандың Мәңгелек боҙлоҡтарҙы тикшеренеү институты, Ҡазан тиресеҙәре, Ливен, Россошана, Лысьва һәм илебеҙҙең башҡа бик күп эреле-ваҡлы ҡалалары халыҡ коллективтары тарафынан сәхнәгә ҡуйыла. Шулай уҡ союз һәм автономиялы республикаларҙың бөтә төп академия драма театрҙары, боронғо Ярославль һәм Воронеж һәм яңы барлыҡҡа килгән театрҙар уны сәхнәләштерә.

Яҙыусыға режиссерҙар текст һорап кәңәш итәләр; артистар ҡыҙыҡлы роддәр өсөн рәхмәттәрен белдерә, тамашасылар рәхмәт хаттары яуҙыра (ҡайһы саҡта бик ябай ғына итеп: «Өфө, Мостай Кәримгә» тип теркәп ҡуялар), ҡайһы бер хаттарҙа яңы темалар һәм сюжеттар тәҡдим итәләр.

## 5

Мостай Кәрим «Ай тотолған төндә» трагедияһы менән ҙур темаға тәүге аҙымдар яһай.

«Ай тотолған төндә»не яҙғас, мин «Салауат», «Ташлама утты, Прометей!»ҙы яҙмай булдыра алманым. Уны бөтә жанрҙарҙың әсәһе — трагедия үҙенә тартып ала», — тип яҙа шағир һуңынан үҙенең «Көндәлектәр»ендә.

Шулай ҙа яҙыусының иң тәүҙә «Айгөл иле» әҫәре яҙыла. Үҙенең «хәҙерге» пьесаларында үткер проблемалар күтәргән, көнүҙәк конфликттар ҡуйған драматург ни өсөн был юлы кеше һәм Тыуған ил темаһына мөрәжәғәт итә һуң? Әллә кеше һәм Тыуған ил араһында упҡын барлыҡҡа килә башлағанмы? Ә бит пьеса яҙылған ваҡытта (1967) был турала һүҙ ҙә булыуы мөмкин булмай. Тимәк, Мостай Кәрим алдан күрә белгән? Яҡынлашып килгән конфликтты тойған.

70-се йылдарҙа, еңелсә багаж һәм тыныс йөрәк менән тыуған төйәктән сығып китеүселәр булһа, Айгөл ауыр һайлау юлы алдында ҡала. Китергәме әллә ҡалырғамы, тип уйланмай ул. Тыуған ил, йәки әсәме? Бына ниндәй һорау тора уның алдында. Шуға күрә Аҡйегет, Салауат һәм Прометей кеүек мөһабәт фигуралар араһында Урал тауҙары араһындағы төпкөл ауыл ҡыҙы Айгөлдө лә йәнәшә күрергә мөмкин.

(Шуныһы ҡыҙыҡ: «Ай тотолған төндә» һәм «Айгөл иле»нең ҡараламалары бер блокнотҡа теркәлгән. Күрәһең, «Ай тотолған төндә» пьесаһының уңышлы килеп сығыуынан, был блокнот драматургка даланлы булып күренгәндер. Ул блокноттың икенсе яғын әйләндереп, яңы пьеса яҙа башлаған. Төҙәтмәләр күп булыуға ҡарамаҫтан, эштең еңел һәм тиҙ барғаны һиҙелә).

«Салауат» трагедияһы яҙылып бөткәс, ғәҙәттәгесә, уға ниндәй исем һайлау мәсьәләһе килеп баҫа.

Ошо турала Мостай Кәрим Твардовский тураһында хәтирәләрендә: «Салауат Юлаев тураһында трагедия яҙғас, мин үҙемдең әҫәремде «Шағир иңрәүе» тип атамаҡсы булғайным. Был исемде мин, Салауат үҙе түгел, ә Салауат өсөн беҙҙең заман шағиры илай, тип аңлатмаҡсы инем. Үҙемдең драмамдың айырым өлөштәрен

мин Ҡыҙыл Пахраға Твардовскийҙы күрергә барышлай, юлда Ҡайсын Кулиевҡа уҡығайным. Кулиев «иңрәүле» исемде оҡшатманы. Мин бер һүҙ ҙә әйтмәнем, әммә үҙ фекеремдә ҡалдым. Әҫәрҙең исеме матур ине. Твардовский янында Ҡайсын минең драматик поэмам, уның нисек аталғанлығы тураһында һүҙ башланы. Героик сюжетҡа быңдай исем бармай, ул әҫәрҙең темаһын тарайта һәм идеяһын кесерәйтә, тине Ҡайсын. Александр Трифонович та был фекерҙе яҡланы һәм ошолай тип өҫтәп ҡуйҙы:

– Хикмәт сюжетта ғына ла түгел. Хикмәт аныҡлыҡта, теүәллектә. Салауат тураһындағы поэма өсөн «Салауат» тигәндән дә теүәлерәк, камилыраҡ атама булырға мөмкин түгел. Салауат хаҡында уның үҙ исеменән башҡа бер генә лә шул тиклем дөрөҫ һәм тулы мәғлүмәт бирә алмай», – тип яҙа.

«Салауат» «Ай тотолған төндә» кеүек үк уңышҡа өлгәшә алмай, ләкин илебеҙҙең милли, бигерәк тә төрки республикаларында һәйбәт ҡабул ителә. Мостай Кәрим үҙе был турала шулай тип белдерә: «Эйе, минең иң популяр пьесам — «Ай тотолған төндә», ләкин «Салауат»ты мин бөтәһенә ҡарағанда ла нығыраҡ яратам».

Мостай Кәрим Прометей тураһында яҙырға уйлап йөрөгәндерме, юҡмы, уға бер ваҡыт ҡыҙыҡ йөкмәткеле хат килеп төшә. Унда Армавир драма театрының режиссеры Нина Константиновна Карелина «Ай тотолған төндә»гә ғашиҡ булыуы тураһында яҙа һәм әҙипкә Прометей образына мөрәжәғәт итергә кәңәш бирә. Башҡа бер кемдең дә быға көсө етмәҫ тип иҫәпләй ул. Ихтимал, был тик әтәргес кенә булғандыр, ләкин ике йылдан һуң Мостай Кәрим Карелинаға яңы пьесаһының («Ташлама утты, Прометей!» трагедияһының) һүҙмә-һүҙ тәржемәһен тәҡдим итә.

Трагедия ҙур уңыш ҡаҙана. Әммә Мостай, нимәнелер әйтеп бөтмәгәндәй тойоп, 1980 йылда һағыш һәм мөхәббәт тулы трагик шиғырҙар циклы «Прометей монологтары»н ижад итә (ҡара: 2-се том, 81-се бит).

1984 йылда «Ташлама утты, Прометей!» трагедияһы өсөн («Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы менән берлектә) Мостай Кәрим Ленин премияһы менән бүләкләнә.

Прометейҙың: «Мин ҡайтырмын һеҙгә, кешеләр!» — тигән һүҙҙәре менән Мостай Кәрим драматургияның икенсе, иң емешле дәүере ослана. Һығымта шундай: Рәсүл Ғамзатов үҙенең ижады менән милли шиғриәткә нисек ҡыҙыҡһыныу уятһа, Мостай Кәрим милли драматургияны ошондай бейеклеккә күтәрә.

### 6

Мостай Кәримдең 1991 йылдың 26 ғинуарындағы яҙмаһынан: «Сәйер төш күрҙем. Әле мин һыҙғылап ятҡан «Киске табын»ды ниндәйҙер бәләкәй театр сәхнәгә ҡуйған, имеш. Рауза ла уйнай. Беренсе акт аҙағында залда берәү ҙә ҡалманы, таралып бөттө. Ә сәхнәлә шаулайҙар, көлөшәләр. Сәхнәгә менеп, залға ҡараным. Баҡһам, шаршауҙы асырға онотоп уйнайҙар икән. Тамашасылар тамашаны күрмәгәндәр икән. Яҙылып бөтмәгән пьесаға алдан үк алама хөкөм сығыуымы был?»

Моғайын, был киләһе замандың асылы булғандыр. Ҡайнашалар, шаулашалар, бер-береһен ишетмәйҙәр. Театр ҡайғыһымы ни ундай саҡта?..

Мостай Кәрим үҙенең «Киске табын» пьесаһын өс йылдан ашыу ижад итә.

«Яҙа башлағанда — бер ҡоролош, тамамлағанда — икенсе ҡоролош ине», — тип моңһоу ғына хәтерләй шағир үҙенең «Көндәлектәр»ендә.

Яҙыусы пьесаның сәхнәлә урын алыуын ике йыл көтә. Әйтерһең дә, театр һәм тамашасы араһына шаршау ҡорола. Ил үҙгәрә, театр үҙгәрә, тамашасы үҙгәрә.

Мостай Кәрим «Ташлама утты, Прометей!»ҙан һуң (1975) «иҫке ҡоролош»та «Диктаторға ат бирегеҙ!» һәм «Йәйәүле Мәхмүт» әҫәрҙәрен яҙа. (Әлбиттә, был яҙыусының ижади көсө һүлпәнәйеүен аңлатмай әле. Ул 1975 йылдан һуң «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Ярлыҡау», «Ауыл адвокаттары» повестарын, бик күп шиғырҙарын ижад итә, публицистикала сығыш яһай.)

Авторҙың «Диктаторға ат бирегеҙ!» фарсын халыҡ бер аҙ һағайыбыраҡ ҡабул итә. «Йәйәүле Мәхмүт» моңһоу комедияһына ҡарата ҡараштар йылыраҡ була.

Үҙ вазифаһының тормошҡа ашмаған хыял икәнлегенә төшөнөп, буш ваҡытында тегенселек менән шөғөлләнгән ҙур чиновник тураһындағы ҡиссаны публика ыңғай ҡабул итә.

Ә «Киске табын» әҫәре яңынан-яңы ҡараштар, өр-яңы фекерҙәр көтә. Әйткәндәй, был пьеса 1989 йылда илебеҙҙә килеп тыуған хәүефле хәл-ваҡиғалар, ығы-зығылар менән тулы. Хәҙер, бөтөнләй башҡа йәмғиәттә йәшәгән осорҙа, яҙыусының алдан фараз итеүенә төшөнөү ауыр түгел. Был бик ҙур булмаған әҫәрҙең (бер ниндәй аңлатмаһыҙ «пьеса» тип аталған) киләсәккә, уҡыусы, тамашасыларға әйтер һүҙҙәре алда...

*Төҙөүселәр*

* * *

«Диктаторға ат бирегеҙ!», «Йәйәүле Мәхмүт», «Киске табын» һәм «Әтәстең башынан үткәндәре» пьесаларының тексты киләһе 4-се томда бирелә.

Пьесаларға ҡарата яҙылған рецензиялар һәм театр постановкалары ҡыҫҡартып алынды.

## ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

**Һайланма әҫәрҙәр.** — 51 — «Мостай Кәрим. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, Башгосиздат — 1951». Мөхәррире С. Кулибай.

**Ҡыҙ урлау. Комедия.** — 59 — «Мостай Кәрим. Ҡыҙ урлау. Комедия. Өфө, Башгосиздат — 1959». Мөхәррире М. Игебаева.

**Пьесалар.** — 63 — «Мостай Кәрим. Пьесалар. Башҡортостан китап нәшриәте — 1963». Мөхәррире Х. Бикҡолов.

**Ай тотолған төндә.** — 65 — «Мостай Кәрим. Ай тотолған төндә. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1965». Мөхәррире Х. Бикҡолов.

**Һайланма әҫәрҙәр. Т. 2.** — 66 — «Мостай Кәрим. Һайланма әҫәрҙәр. Т. 2. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1966». Мөхәррире М. Игебаева.

**Айгөл иле.** — 69 — «Мостай Кәрим. Айгөл иле. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1969». Мөхәррире Ф. Йомағужин.

**Әҫәрҙәр.** — 71 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. Биш томда. 2-се том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1971». Мөхәррире М. Игебаева.

**Айгөл иле.** — 79 — «Мостай Кәрим. Айгөл иле. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1979». Мөхәррире М. Игебаева.

**Көндәлектәр.** — «Ғүмер миҙгелдәре». — Мостай Кәрим. Ғүмер миҙгелдәре. Өфө, «Китап» — 2002. Мөхәррире Ф. Ноғоманова.

**БАДТ** — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры.

## ВАҠЫТЛЫ МАТБУҒАТТА:

**«Ағиҙел»** — (1949 йылға тиклем — «Октябрь», 1960 йылға тиклем «Әҙәби Башҡортостан») — Башҡортостан Яҙыусылар союзының айлыҡ журналы.

**«Башҡортостан»** — (1924 йылдың августынан — «Башҡортостан», 1937 йылдан алып — «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1951 йылдан алып «Совет Башҡортостаны», 1990 йылдан алып хәҙерге исемдә) — республика ижтимағи-сәйәси газетаһы.

**«Кызыл таң»** — республика ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни баҫмаһы, татар телендә.

**«Ленинсы»** — (1923 йылдан алып — «Йәш юҡһыл», 1930 йылдан алып — «Йәш коммунар», 1990 йылдан алып — «Йәшлек») — республика йәштәр газетаһы.

**«Йәш төҙөүсе»** — (1959 йылдан алып «Башҡортостан пионеры», 1991 йылдан алып — «Йәншишмә») — республика балалар һәм үҫмерҙәр газетаһы.

## Пьесалар, либретто

### Туй дауам итә

«Һайланма әҫәрҙәр» — 51.

Шағир архивында сифатлы ҡағыҙҙан яһалған ике блокнот, әҫәрҙең һуңғы варианты һаҡланған. Уны яҙыусының ҡатыны Рауза ҡағыҙға күсереп яҙған.

Ҡулъяҙмала пьесаның төп геройҙары Заһир һәм Гөлшат Таһир, Гөлнур исеме менән алынған.

Премьера — БАДТ (1947 йыл, 5 октябрь).

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Ямалетдин), БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Гөлшат), БАССР-ҙың халыҡ артисы Вәлиәхмәт Ғәлимов (Заһир), БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғәзим Туҡаев (Ярлыҡап); Р. Фәйзи

постановкаһы, М. Вәлиев музыкаһы, рәссамы Ғ. Имашева.

**Рецензия:**

Ә. Чаныш. Туй дәвам итә. — «Кызыл таң», 1947, 19 октябрь.

## Яңғыҙ ҡайын

«Һайланма әҫәрҙәр» — 51.

Премьера — БАДТ (1951, 13 февраль).

Төп ролдәрҙә: БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Рим Сыртланов (Мырҙахан Шәүкәтов), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Тимербулат Арсланов), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Зөләйха Иштуғанова), БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Таңһылыу Рәшитова (Гөлбәдуан); режиссеры А. Мөбәрәков, рәссамы С. Кәлимуллин, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Т. Кәримов.

**Рецензиялар:**

К. Мәргән. — Уңышлы спектакль. — «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1951, 21 февраль; Г. Амири. Ялгыз каен. — «Кызыл таң», 1951, 23 февраль; Р. Ишморат. Ялгыз каен. — «Совет Татарстаны», 1951, 16 октябрь; В. Пименов. От «Одинокой березы» к «Новой жизни». — «Театр», 1952, № 11; Ғ. Әхмәтшин. Ялгыз каен. — «Кызыл таң», 1953, 15 февраль; Р. Нигмати. Одинокая береза. — «Советская Башкирия», 1953, 22 февраля; Г. Ахметшин. Шавкатов и его друзья. — «Советское искусство», 1953, 25 февраля; М. Ғәйнуллин. Яңғыҙ ҡайын. — «Совет Башҡортостаны», 1955, 30 апрель; Г. Рамазанов. Одинокая береза. — «Советская Башкирия», 1955, 13 мая; Б. Бабочкин. Обещающая молодость. — «Литературная газета», 1955, 7 июня; С. Межинский. Талантливое искусство. — «Правда», 1955, 8 июня.

## Ҡыҙ урлау

«1956 — 1958». «Әҙәби Башҡортостан», 1958, № 9. «Ҡыҙ урлау» — 59.

Премьера — БАДТ (1958, 6 май).

Төп ролдәрҙә: Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ғата Сөләймәнов (Әжмәғол), республиканың халыҡ артистҡаһы Таңһылыу Рәшитова (Уңғанбикә), РСФСР-ҙың халыҡ артистҡаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Туҡтабикә); режиссеры В. Ғәлимов, рәссамы С. Кәлимуллин, Т. Кәримов музыкаһы.

**Постановкалар:**

Алабуға татар халыҡ театры (1963); Өфөләге рус драма театры (1971); М. Кәрим исемендәге милли йәштәр театры (2011).

**Рецензиялар:**

Ә. Чанышев. Ҡыҙ урлау. — «Совет Башҡортостаны», 1958, 23 май; Б. Бикбай. Похищение девушки. — «Советская Башкирия», 1958, 28 мая; Р. Хакимов. Талантливая комедия. — «Ленинец», 1958, 3 июня; Г. Кашшаф. Уңышлы комедия. — «Совет Татарстаны», 1958, 4 июнь; А. Аралбаева. Правдиво, весело, остроумно. — «Театральная жизнь», 1959, № 1; Р. Мустафин. Перед лицом больших задач. — «Советская Татария», 1959, 12 марта; А. Бикчентаев. Похищение девушки. — «Советская Татария», 1959, 5 июля; Н. Львов. О сегодняшней Башкирии. — «Советская культура», 1960, 14 января; А. Игебаев. Ҡыҙ урлау. — «Ленинсы», 1960, 23 ғинуар; А. Зиновьев. Второе рождение комедии Мустая Карима. — «Советская Башкирия», 1971, 21 декабря; С. Кусимова. Похищение девушки. — «Вечерняя Уфа», 1972, 8 января.

## Йырланмаған йыр

29. I. 57. «Ағиҙел», 1961, № 8. «Пьесалар» — 63.

Премьера — БАДТ (1961, 6 апрель).

Төп ролдәрҙә: СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Ярлыҡапов), РСФСР-ҙың халыҡ артист-

каһы Зәйтүнә Бикбулатова (Мәстүрә), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғәзим Туҡаев (Арыҡбаев); режиссеры В. Ғәлимов, рәссамы Ғ. Имашева, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Т. Кәримов.

**Постановка:**

Ғ. Камал исемендәге татар академия драма театры (1962, режиссеры П. Исәнбәт).

**Рецензиялар:**

Р. Хәкимов. Йырланмаған йыр. — «Ленинсы», 1961, 13 май; А. Аралбаева. Неспетая песня. — «Советская Башкирия», 1961, 3 июня; З. Әхмәтов. Спектакль хаҡында уйланыу. — «Совет Башҡортостаны», 1961, 21 декабрь; Р. Байбулатов. Неспетая песня. — «Стерлитамакский рабочий», 1961, 23 декабря; Т. Солтангәрәев. Заман талабы буйынса. — «Ағиҙел», 1962, № 8; М. Ғәйнуллин. Драматургияла яңы күренештәр. — «Совет Башҡортостаны», 1962, 22 декабрь.

### Ай тотолған төндә

«2. XI. 63. Башланыуы унынсы октябрь булырға тейеш. Сөнки октябрь баштарында Малеевкаға килдем, бер аҙ тик йөрөнөм». «Ағиҙел», 1964, № 8. «Ай тотолған төндә. — 65».

Пьесаның тәүге атамаһы — «Ҡанун ҡолдары», икенсеһе — «Ай тотолған төндә».

Ҡулъяҙмала әҫәрҙәге геройҙарға ҡарата автор тарафынан бирелгән характеристика:

*Зөбәржәт (17 йәштә) — аҫыл таштан ҡайғы менән һөрөмләнгән ҡара таш киҫәге.*

*Аҡйегет (17 йәштә) — ҡара ҡайғыға бата.*

*Тәңкәбикә (50 йәштә) — унын муйынындағы тәңкәләре, йолалар ауырлығы үҙен баҫа. Финалда ул бөгөлөп төшә. Диуана uгa: «Муйынындағы тәңкәләрең баҫты...» — ти.*

*Шәфәҡ (20—25 йәштәрҙә) — киске эңерҙән һуң аҙ ғына нур сәсеп ҡала.*

*Ырыҫҡол (60 йәштә) — бәхет ҡоло түгел, байлыҡ ҡолона әүерелә.*

*Юлмырҙа (26 йәштә) — яуҙан ҡайтмай ҡала.*

*Ялсыгол (40—45 йәштәрҙә) — ялсы, әммә рухы менән хаким.*

*Диуана (25—30 йәштәрҙә) — бөтә хәҡиҡәтте әйтеп йөрөй.*

*Дәрүиш (55 йәштә) — Уны пәйгәмбәр илсеһе тип йөрөтәләр. Ғәрәбстандан килгән. Үҙ иманынан кире ҡайтҡан. Дин юлында йөрөп, донъя рәхәтен күрмәгән, хәҙер шуга үкенә. Мәҙинәлә, Ҡаһирәлә, Бохарала ниндәйҙер бай бисәләренең мөхәббәтен кире ҡаҡҡан була. Был турала ул Ялсыголга һөйләй. Шәфәҡкә бәйләнә. Аҡса тәҡдим итә. Шымсы. Тәңкәбикәгә бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй еткереп тора.*

Премьера — БАДТ (1964, 21 март).

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Тәңкәбикә), артист Илшат Йомаголов (Аҡйегет), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистары Рәғиҙә Янбулатова (Шәфәҡ), Ғәзим Туҡаев (Дәрүиш), артист Шамил Рәхмәтуллин (Диуана); режиссеры Ш. Мортазина, рәссамы Ғ. Имашева, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Х. Әхмәтов.

**Постановкалар:**

Ғ. Камал исемендәге татар академия драма театры (1965); Моссовет исемендәге Мәскәү театры (1966); Хәмзә исемендәге үзбәк академия драма театры (1966, режиссеры Ш. Мортазина); Ҡарасәй-Черкес автономиялы өлкә драма театрҙары (1966—1967); Ҡабарды-Балҡар, Тува, Ҡарасәй-Черкес, Наманган (Үзбәкстан, 1967), Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Хәрби Ҡара диңгеҙ флоты (1968), Саратов өлкә Вольск драма театрҙары (1968—1969); Ҡаҙаҡ драма театры (1968); Алыҫ Көнсығыш хәрби округы (ДВВО) драма театры (1968); И. Франко исемендәге Украина дәүләт академия драма театры (1970); Я. Купала исемендәге Белоруссия дәүләт академия драма театры (1972); Яҡут дәүләт драма театры (1972); К. С. Станиславский исемендәге Ҡарағалпаҡ дәүләт музыкаль драма һәм комедия театры (1976); С. Стальский исемендәге Лезгин (Дағстан) драма театры (1976); Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһы буйынса Свердловск киностудияһы эшләгән

нәфис фильм экрандарға сыға (1979); Вильнюс (Литва) академия драма театры (1980); А. Кольцов исемендәге Воронеж дәүләт академия драма театры (1980); Сыуаш академия драма театры (1981); Башҡорт опера һәм балет театры (1982); Республика йәш тамашасылар театр-студияһы (1989); Башҡорт дәүләт академия драма театры (1992, режиссеры Р. Исрафилов); Башҡорт дәүләт академия драма театры (2011, режиссеры А. Абушахманов).

**Рецензиялар:**

Ф. Вахитов. Кешегә дан жыры. — «Кызыл таң», 1964, 14 апрель; Р. Хайруллин. Народная легенда. — «Театральная жизнь», 1964, № 13; А. Аралбаева. Легенда о любви. — «Театральная жизнь», 1965, № 3; Д. Макаров. Против «рабства духа». — «Златоустовский рабочий», 1965, 19 декабря; П. Василина. Обычная неделя. — «Театр», 1966, № 5;. Т. Крылова. Трагедия в становье Танкабике. — «Уральский рабочий», 1966, 13 июня; В. Фролов. Великая сила любви. — «Известия», 1966, 6, 7 октября; Н. Путинцев. В ночь лунного затмения. — Советская культура», 1966, 22 октября; А. Пистунова. Твоя азиатская флейта. — «Литературная Россия», 1966, 4 ноября; И. Косач. После ночи — рассвет. — «Ленинское знамя», 1966, 25 декабря; Т. Рыбина. Сильнее смерти. — «Правда Бурятии», 1967, 23 июня; Ф. Бесогонова. Поэма о любви. — «Октябрьский нефтяник», 1969, 22 мая; Ф. Утяев. Трагедия матери. — «Театральная жизнь», 1969, № 12; И. Моисеева. Песнь торжествующей любви. — «Челябинский рабочий», 1970, 1 октября; О. Степаненко. Дорога до света. — «Вечерний Киев», 1971, 22 май; Ю. Зубков. Экзамен перед совестью. — «Литературная Россия», 1972, 11 февраля; А. Солодовников. Мастерство образного обобщения. — «Советская культура», 1972, 18 июля; Я. Фельдман. В ночь лунного затмения. — «Правда Востока», 1972, 18 октября; С. Турсунбоев, И. Пулатов. «Ай тотолған төндә». — «Үзбәкстан мәҙәниәте», 1972, 20 октябрь; А. Губайдуллина. Узы братства. — «Вечерняя Уфа», 1973, 27 января; В. Тулупов. Вечная тема любви. — «Ленинец», 1979, 13 января; М. Тажиморатов. Таслама отты,

Прометей! — «Социалистик Казахстан», 1987, 1 апрель; А. Докучаева. «Затмение» в рамках новаций: в БАДТ имени Мажита Гафури состоялась премьера по пьесе Мустая Карима: театр показал свою постановочную версию трагедии М. Карима «В ночь лунного затмения»). — «Республика Башкортостан», 2011, 6 декабря; С. Кусимова. «Затмение» в свете дня. — «Вечерняя Уфа», 2012, 7 февраля; Иргә хыянат илгә хыянатмы? Йәки «Ай тотолған төндә»гә яңы ҡараш (2011 йылдың БДАДТ-ында М. Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһын ҡуйған режиссер А. Абушахманов менән әңгәмә). — «Киске Өфө», 2012, 17—23 март.

### «Гөлзифа» (либретто)

«1964—1965». «Ағиҙел», 1968, № 12. «Әҫәрҙәр — 71».

1967, 29 октябрь — Башҡорт опера һәм балет театрында премьераһы ҡуйыла.

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың халыҡ артистары Мәғәфүр Хисмәтуллин, Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Мәдхиә Әхмәтйәнова, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Хөсәйен Мәжитов. Режиссеры Р. Вәлиуллин, З. Исмәғилев музыкаһы, дирижеры Ғ. Моталов; хормейстеры Л. Исхаҡова, рәссамы М. Арыҫланов.

1972 йылдың 3 мартында «Ағиҙел тулҡындары» исеме менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында премьераһы булып үтә.

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың халыҡ артисы Мәғәфүр Хисмәтуллин (Ғәйнулла), БАССР-ҙың атҡаҙанған артистары Камил Вәлиев (Зәйнулла), Тәлғәт Сәғитов (Вадим), артистка Йыһания Рәхмәтуллина (Гөлзифа); режиссеры Р. Вәлиуллин, З. Исмәғилев музыкаһы, рәссамы М. Арыҫланов; хормейстеры Л. Исхаҡова, оркестры Ғ. Моталов.

**Рецензиялар:**

Л. Атанова. Ике талантның уртак уңышы. — «Кызыл таң», 1967, 29 ноябрь; Ф. Камаев. «Ағиҙел тулҡындары» — һоҡланғыс әҫәр. — «Совет Башҡортостаны», 1972, 26 март.

**Айгөл иле**

«Февраль, 1967 йыл. Йоматау». — «1. X. 67. Дауахана». «Ағиҙел», 1968, № 4. «Айгөл иле — 69».

Премьера — БАДТ (1968, 12 март).

Төп ролдәрҙә: артистка Хәнә Минһажева (Айгөл), СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Йәғәфәр), РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Зөлхәбирә), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғәзим Туҡаев (Ҡәҙерйән), БАССР-ҙың атҡаҙанған артистары Ғата Арыҫланов (Пиккио), Хөсәйен Ҡудашев (Сит кеше), артист Рифғәт Исрафилов (Ричард); режиссеры В. Ғәлимов, рәссамы Ғ. Имашева, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Т. Кәримов.

**Постановкалар:**

А. С. Пушкин исемендәге Мәскәү театры (1969); И. Франко исемендәге Ивано-Франковск өлкә музыкаль-драма театры (1970); Ҡалмыҡ дәүләт академия театры (1970); Хәмзә исемендәге Үзбәк дәүләт академия театры (1972); Өфөләге Рус драма театры (1984); Прешов ҡалаһындағы (Чехословакия) Украина милли театры («Если покинешь меня...» исемендә сәхнәгә ҡуйыла, датаһы билдәһеҙ).

**Рецензиялар:**

И. Кинйәбулатов. Айгөл иленең яҡты ҡояшы. — «Совет Башҡортостаны», 1968, 27 март; М. Гафуров. Солнце сквозь слезы. — «Ленинец», 1968, 28 марта; С. Поварисов. «Айгөл иле». — «Кызыл таң», 1968, 10 апрель; Н. Зарипов. Нет счастья без родины. — «Советская Башкирия», 1968, 25 апрель; Б. Гыйззәт. «Айгөл иле». — «Социалистик Татарстан», 1968, 8 июнь; И. Патрикеева. Навеки родная страна. — «Театральная жизнь», 1968, № 17; Г. Владимирова. Что времени дал своему? — «Урал», 1969, № 3; З. Нурғәлин. Яҡты хистәр донъяһы. — «Совет Башҡортостаны», 1969, 9 апрель; С. Саитов. В «Стране Айгуль». — «Вечерняя Уфа», 1969, 4 декабря; М. Мирингоф. С любовью к родине. — «Советская Башкирия», 1970, 26 апреля; Косенкова Н. «Страна Айгуль» на литовской сцене. — «Советская Башкирия», 1970, 23 октября; Г. Бирюков. Диапазон поисков. —

«Литературная Россия», 1972, 8 сентября; С. Саитов. В стране Айгуль. — «Театр», 1973, № 3; А. Докучаева. Мир Айгуль. — «Вечерняя Уфа», 1984, 6 апреля; И. Капкаева. Возврата нет. — «Вечерняя Уфа», 1999, 4 декабря.

### Салауат

«9. XII.1970—15. VII.1971». «Ағиҙел», 1972, № 2. «Айгөл иле» — 79».

«Салауат»ты рус теленә шағир Яков Козловский тәржемә иткән.

Премьера — БАДТ (1972, 11 февраль).

Төп ролдәрҙә: артист Әхтәм Абушахманов (Салауат), РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Екатерина II), СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Юлай Аҙналин), БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Гөлли Мөбәрәкова (Гөлнәзирә); режиссеры Л. Вәлиев, рәссамы Ғ. Имашева, композиторы З. Исмәғилев, балетмейстер Х. Мостаев.

**Постановкалар:**

Саха (Якутия) музыкаль-драма театры (1972); М. Кәрим исемендәге милли йәштәр театры (1995).

**Рецензиялар:**

Т. Резвова. Две части белого света. — «Литературная Россия», 1970, 1 мая; Л. Петрова. Подвиг Салавата. — «Вечерняя Уфа», 1971, 21 декабря; Т. Килмөхәмәтов. Сәхнәлә — Салауат образы. — «Совет Башҡортостаны», 1972, 15 февраль; С. Поварисов. Салават батыр — сәхнәдә. — «Кызыл таң», 1972, 28 февраль; А. Халим. Свидание через 200 лет. — «Литературная Россия», 1972, № 15; С. Кусимова. Салават. — «Вечерняя Уфа», 1972, 11 марта; Н. Зарипов. «Салават» на сцене театра драмы. — «Советская Башкирия», 1972, 27 апреля; Д. Байтерякова. «Салават». — «Театральная жизнь», 1972, № 7; Н. Зайцев. Салават — воин и поэт. — «Вечерний Ленинград», 1975, 11 августа.

**Ташлама утты, Прометей!**

«3. II. — 20. III. 1975». «Совет Башҡортостаны», 1975, 24—27 август. «Ағиҙел», 1976, № 1. «Айгөл иле» — 79. «Новый мир», 1979, № 1 (рус телендә, А. Межиров тәржемәһе).

1984 йылда «Ташлама утты, Прометей!» трагедияһы («Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы менән берлектә) Ленин премияһы менән бүләкләнә.

«Көндәлектәр»ҙәге яҙыу: «Ташлама утты, Прометей!» трагедияһында Әҙәмшаһ ролен Арыҫлан Мөбәрәков башҡарҙы. Һағыш һәм ғорурлыҡ менән шуны уйлайым: был донъянан китер алдынан ул мин уйлаған фекерҙәрҙе, мин яҙған һүҙҙәрҙе сәхнәнән әйтте, мине борсоған хәстәрҙәр менән борсолдо. Баһадир кәүҙәле, күкрәп торған тауышлы, ҡараңғылыҡ менән томаналыҡ хакимы Әҙәмшаһты ижад иткән кеше башҡорт сәхнәһенең яҡты хакимы, рухи шаһы ине. 12 июнь, 1983».

Премьера — БАДТ (1977, 17 март).

Төп ролдәрҙә: БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Илшат Йомағолов (Прометей), СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков (Әҙәмшаһ), РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Хөсәйен Ҡудашев (Зевс), БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Дариға Фәйзуллина (Гера), СССР-ҙың халыҡ артисткаһы Зәйтүнә Бикбулатова (Фемида); режиссеры Р. Исрафилов, рәссамы Т. Еникеев, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Р. Хәсәнов, балетмейстеры Х. Мостаев.

**Постановкалар:**

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры (1979, рус телендә). Төп ролдәрҙә: артист Игорь Капатов (Прометей), БАССР-ҙың атҡаҙанған артистары Рәмил Искәндәров (Зевс), Руфина Нассонова (Гера), Айрат Әхмәтшин (Гермес), Венера Рәхимова (Агазия); режиссерҙары В. Штейн, П. Мельниченко, рәссамы М. Грибанова, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе В. Рожановский; Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт академия драма театры (1977); Х. Намсараев исемендәге Бүрәт дәүләт академия драма театры (1977); Мәскәү Яңы драма театры (1982); Ф. Г. Волков исемендәге Ярославль академия драма театры (1982); Удмурт республика ҡурсаҡ театры (1986).

**Рецензиялар:**

С. Саитов. Подвиг на все времена. — «Советская Башкирия», 1977, 10 апреля; Ғ. Әхмәтшин. Ташлама утты, Прометей! — «Совет Башҡортостаны», 1977, 29 март; Ә. Гаффар. Йөрәкнең сүнмәс уты. — «Социалистик Татарстан», 1977, 1 апрель; Ә. Нигъмәтуллин. Ташлама утны, Прометей! — «Кызыл таң», 1977, 13 апрель; Р. Валеев. Песнь несущему огонь. — «Ленинец», 1977, 28 апреля; Х. Назаров. Ҡаҙаныштар юлынан. — «Совет Башҡортостаны», 1979, 9 октябрь; В. Нельский. В семье единой. — «Северный рабочий», 1982, 27 марта; М. Ваняшова. Дар Прометея. — «Северный рабочий», 1982, 8 апрель; Т. Сергеева. Прометеев огонь. — «Литературная Россия», 1983, 18 февраля; А. Кузнецова. Не бросай огонь, Прометей! — «Известия», 1986, 24 марта; Г. Бекхожина. Огонь Прометея. — «Вечерняя Алма-Ата», 1987, 28 февраля.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Туй дауам итә . . . 9
Яңғыҙ ҡайын . . . 63
Ҡыҙ урлау . . . 134
Йырланмаған йыр . . . 197
Ай тотолған төндә . . . 264
Гөлзифа . . . 327
Айгөл иле . . . 376
Салауат . . . 445
Ташлама утты, Прометей! . . . 511
**Аңлатмалар** . . . 583



*Литературно-художественное издание*

**КАРИМОВ Мостафа Сафич**
**(Мустай Карим)**

**Сочинения**

**III том**

*(драматические произведения)*

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *З. Ш. Ҡарабаева*
Рәссамы *Ф. Ф. Ислахов*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Г. Р. Попова, Л. Ф. Саниева,*
*А. Х. Хәкимова, З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 25.09.12. Форматы 84×108 1/32.
Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 31,91. Шартлы буяу отт. 31,91.
Иҫәп-баҫма таб. 22,81. Тиражы 3 000 дана. Заказ 1.0101.12.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.